З.Ғ. Ураксин

# Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге

УДК 811.512.141'373 (038)
ББК 81.4 Баш-3
У 62

**Урасин З. Ғ.**

У 62 Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге. — Яңыртылған, 2-се баҫма. — Өфө: Китап, 2006. — 344 бит.

ISBN 5-295-03794-0

Һүҙлектә хәҙерге башҡорт теленең 4 меңдән артыҡ образлы һүҙбәйләнешенә аңлатмалар бирелде, уларҙың мәғәнәләре асылды, стилистик билдәләр ҡуйылды, семантик бәйләнештәре күрһәтелде. Берәмектәрҙең бөтәһенә лә тиерлек әҙәбиәттән, халык ижады әҫәрҙәренән, матбуғат биттәренән алынған миҫалдар бирелде. Бик күптәренең килеп сығышы күрһәтелде. Һүҙлек башҡорт теле уҡытыусыларына, туған телебеҙ менән ҡыҙыҡһынған бөтә кешеләргә тәғәйенләнә.

УДК 811.512.141'373 (038)
ББК 81.4 Баш-3

ТП – 060/06
ISBN 5-295-03794-0

© З. Г. Ураксин, 1996
© Яңыртылған. З. Ғ. Ураҡсин, 2006

## ИНЕШ ҺҮҘ

### 1. Башҡорт фразеологияһы: уның торошо, проблемалары.

Дөйөм тел ғилемендә фразеологияны *(фразис* — грекса һүҙбәйләнеш, *логос* фән, ғилем) өйрәнеүҙең 200 йылдан артыҡ тарихы бар. Хәҙерге көндә фразеология тел ғилеменең үҙ аллы тармағы булып китте. Фразеологияның өйрәнеү объекты, уның теоретик мәсьәләләре билдәләнде. Фразеологик берәмектәрҙең тел күренеше буларак тәбиғәте, уларҙың төп билдәләре асыкланды, күп кенә телдәрҙең фразеологик байлығын сағылдырған төрлө типтағы, төрлө күләмдәге һүҙлектәр донъя күрҙе. Был йәһәттән рус тел ғилемендә төплө хеҙмәттәр яҙылды, фразеология теорияһы ентекле эшләнде, ҙур күләмле махсус һүҙлектәр баҫылып сыҡты.

Һуңғы 40—50 йыл эсендә төрки телдәрҙең, шул иҫәптән башҡорт теленең, фразеологияһын өйрәнеүҙә лә байтаҡ аҙымдар яһалды. Был үҙенсәлекле мәғәнәле, тотороҡло бәйләнешле тел берәмектәре һүҙлектәргә айырым билдә менән алына килә ине. Башҡорт теленең фразеологияһы буйынса тәүге тикшеренеүзәр айырым мәҡәләләр рәүешендә журналдарҙа, йыйынтыҡтарҙа баҫылды. Тәүге монографик тикшеренеү 60-сы йылдарҙа донъя күрҙе. Төрки телдәр белгесе, беҙҙең яҡташыбыҙ С. Н. Моратов үҙенең «Төрки телдәрҙә тотороҡло һүҙбәйләнештәр»[1] исемле китабында, башҡорт теле материалын киң файҙаланып, ошо һүҙбәйләнештәргә классификация үткәрҙе, уларзың тәбиғәтен билдәләүҙә беренсе аҙым яһаны.

Х. Ғ. Йосопов оҙаҡ йылдар фразеология өлкәһендә тикшеренеүҙәр алып бара, уның тәүге ҡулланмаһы Һ. Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романы материалына нигеҙләнгән ине[2]. Был ҙур булмаған хеҙмәтендә автор фразеологик берәмектәрҙе грамматик яҡтан төрҙәргә бүлде, уларҙың лингвистик тәбиғәте буйынса ҡыҙыҡлы күҙәтеүҙәр үткәрҙе, стилистик яғына ла иғтибар итте.

Артабан башҡорт теленең фразеологияһының дөйөм мәсьәләләрен Ж. Ғ. Кейекбаев тикшерҙе. Үҙенең юғары уҡыу йорттары өсөн

---

[1] *Муратов С. Н.* Устойчивые словосочетания в тюркских языках. М., 1961.

[2] *Йосопов Х. Ғ.* Башҡорт теленең фразеологияһы. Өфө, 1963.

сыгарылган ҡулланмаһында[3] ул фразеологияны лексикологияның айырым бүлеге итеп ҡараны, ошо берәмектәргә лексик-грамматик классификация яһаны, уларҙың морфологик төҙөлөшөн асыҡланы. Ғалим фразеологияны бөтә образлы һүҙбәйләнештәр, мәҡәл, әйтемдәр рәтенә ҡуйып өйрәнде.

Үҙенең уҡыусылары менән осрашыуҙар, фекер алышыуҙар ваҡытында Ж. Ғ. Кейекбаев һәр ваҡыт фразеологияны махсус тикшереү кәрәклеген әйтә торғайны һәм уның перспективалары тураһында һөйләй ине. Шул замандарҙан бирле туған телебеҙҙең ошо ҡыҙыҡлы өлкәһе минең дә ғилми тикшеренеүҙәрем объектына әйләнде. Фразеологик һүҙбәйләнештәрҙе телдең уларға оҡшаш күренештәренән айырыу, был берәмектәрҙең асылын билдәләү, ҡәрҙәш телдәр менән сағыштырыу эштәре башҡарылды, уларҙың эске тәбиғәте асыҡланды, мәғәнәләре, грамматик ҡоролоштары, телмәрҙә ҡулланылыш үҙенсәлектәре, стилистик биҙәктәре йәһәтенән тикшеренеүҙәр үткәрелде[4].

Бер юлы телебеҙҙәге фразеологик берәмектәрҙе барлау, яҡынса булһа ла уларҙың дөйөм һанын, күләмен билдәләү бурысы ҡуйылды. Башҡорт теленең беренсе аңлатмалы һүҙлегенә әлегәсә йыйылған был берәмектәр күпләп индерелде, мәғәнәләре аңлатылды. Телдең ошондай образлы, үҙенсәлекле күренештәренең береһен тәшкил иткән берәмектәрҙе башҡа телгә тәржемә итеү бик ауыр. Шуны иҫәпкә алып, башҡортса-русса һәм русса-башҡортса тәүге фразеологик һүҙлектәр нәшер ителде[5]. Уларҙың һәр береһенә мәғәнәләш тотороҡло һүҙбәйләнештәр һайлап алынды, тәңгәл мәғәнәле берәмектәр, аңлатмалар бирелде.

Хәҙерге көндә фразеология (телдең ныҡынған һүҙбәйләнештәре тураһындағы бүлеге) юғары һәм махсус урта уҡыу йорттарының дәреслектәренә[6] генә түгел, урта мәктәптәрҙең программаларына, уҡыу китаптарына ла индерелде, был күренеш хаҡында уҡыусыларға 4-се синыфтан уҡ тәүге төшөнсә бирелә, артабан мәғлүмәт 7—8-се синыфтарҙа киңәйтелә, юғары уҡыу йорттарында инде махсус курстар уҡыла.

Башкорт тел ғилемендә фразеологияның өйрәнелмәгән проблемалары, асыҡланмаған мәсьәләләре лә күп әле. Уның иң аҙ тикшерелгәндәренең береһе — фразеологик берәмектәрҙең текста ҡулланылышы, бигерәк тә матур әҙәбиәттә һүрәтләү сараһы булараҡ

---

[3] *Кейекбаев Ж. Ғ.* Хәҙерге башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһы. Өфө, 1966.

[4] *Ураксин З. Г.* Фразеология башкирского языка. М.: Наука, 1975.

[5] *Ураҡсин З. Ғ., Надршина Ф. А., Йосопов Х. Ғ.* Башҡортса-русса фразеологик һүҙлек. Өфө, 1973.

*Ураксин З. Г.* Русско-башкирский фразеологический словарь. М.: Русский язык, 1989.

[6] Хәҙерге башҡорт теле. Педагогия институттарының башланғыс кластар факультеты өсөн уҡыу ҡулланмаһы: Өфө, 1986.

тотҡан урыны. Фразеологик берәмектәрҙең конкрет әҫәр эсендә йәки әҙәби телдең айырым жанрҙарында ҡулланылышын өйрәнеү мәсьәләләре лә мөһим.

Халыҡ теле менән әҙәби тел араһында даими бәйләнеш бар, һәм улар үҙ-ара йоғонто яһаша. Был мөнәсәбәттәр фразеология өлкәһендә лә бара, ләкин бындай мәсьәләләр башҡорт тел гилемендә аҙ өйрәнелгән.

Фразеологик берәмектәрҙең этимологияһы, тел тарихында үҫеш процестары, яҙма ҡомартҡыларҙа сағылышы, мәғәнәләренең үҙгәреүе кеүек проблемалар ҙа үҙ тикшеренеүселәрен көтә.

Уҡыусылар иғтибарына тәҡдим ителгән был һүҙлек авторҙың башҡорт фразеологияһы буйынса туплаған материалдарына таянып төҙөлдө. Әлбиттә, ул телебеҙҙәге бөтә байлыҡты сағылдыра алмай. Тел — даръя, уның иге-сиге юҡ, тел шулай уҡ көн дә үҫештә, үҙгәрештә, һүҙлекте әҙерләп сығарған арала ла яңы берәмектәр тыуып тора. Шулай ҙа был әлегә башҡорт фразеологияһы буйынса әҙерләнгән иң тулы һүҙлек. Уны төҙөгәндә беҙ рус теле, төрки телдәр буйынса һүҙлекселәр туплаған бай тәжрибәгә лә таяндыҡ (файҙаланылған әҙәбиәт исемлеген ҡарағыҙ).

Һүҙлектә беренсе мәртәбә башҡорт телендәге фразеологик берәмектәрҙең мәғәнәләре билдәләнде, уларҙың үҙ-ара бәйләнеше (синонимик, антонимик мөнәсәбәттәре) күрһәтелде, байтағының килеп сығышы ла аңлатылды.

Һүҙлекте файҙаланыусылар уның төҙөлөшө, сифаты буйынса тыуған уй-фекерҙәрен, тәҡдимдәрен төҙөүсегә еткерер, тип ышанабыҙ.

## 2. Фразеологик берәмектәрҙең төп билдәләре.

Телмәр һүҙҙәрҙән төҙөлә. Һөйләм эсендә һүҙҙәр үҙ-ара төрлө бәйләнешкә инә һәм төрлө грамматик формала килә. Һәр бер телмәрҙә, һөйләмдә яңынан бәйләнешкә инеп, яһалып торған һүҙбәйләнештәр шартлы рәүештә «ирекле һүҙбәйләнештәр» тип атала. Мәҫәлән: *ал сәскә, ҡыҙыл сәскә, сәскәләр бәйләме, сәскә үҫтереү, сәскә бүләк итеү* һ. б. Күренеүенсә, «сәскә» һүҙе быларҙан башҡа ла йөҙәрләгән һүҙҙәр менән бәйләнешкә инә һәм һәр ваҡыт үҙенең төп мәғәнәһен һаҡлай.

Ләкин икенсе бер төр һүҙбәйләнештәр ҙә бар. Улар составына ингән һүҙҙәр мәғәнә яғынан да, грамматик йәһәттән дә үҙ-ара нығ берегеп китәләр һәм тарҡалмай торған бер бөтөнгә әйләнәләр. Телмәрҙә улар шулай ныгынган һүҙбәйләнеш хәлендә ҡулланыла, һөйләмгә әҙер көйөнсә инеп китә. Мәҫәлән, *баш ватыу* — берәй эш-хәлде, мәсьәләне хәл итә алмай аҙапланыу; *мин был хаҡта оҙаҡ баш ваттым. Баш ваттым* берәмеге урынына *баш ҡыйраттым, баш туҙҙырҙым* йәки икенсе төрлө итеп һис кенә лә әйтеп булмай. Был һүҙбәйләнештәр *баш ватты* берәмегенең мәғәнәһен бирә лә, уны

алмаштыра ла алмайҙар, сөнки алда күрһәтелгән күсмә мәғәнәне ошо ике һүҙ бергә килгәндә генә белдерә.

**Һүҙ һәм фразеологик берәмек.** Фразеологик берәмектәр мәғәнәһе менән һүҙгә оҡшап тора, уларҙың күбеһенең мәғәнәһен бер һүҙ менән дә биреп була, йәғни улар һүҙҙең айырым мәғәнәһенә синоним булып та килә ала. Мәҫәлән: *башы йомро* — аҡыллы, *күҙ асып йомғансы, керпек ҡаҡҡансы* — тиҙ, *ҡолағына ла элмәй* — тыңламай һ. б. Ләкин һүҙ менән фразеологик берәмек синонимик мөнәсәбәттә булғанда ла, уларҙың мәғәнәһе бер-береһен ҡаплап (йәғни абсолют синоним булып) тора алмай. Мәҫәлән: әҙ — *бармаҡ менән һанарлыҡ*, күп — *һанап бөткөһөҙ*. *Бармаҡ менән һанарлыҡ* берәмеге әҙ генә түгел, ә «бик әҙ» тигәнде белдерә һәм һөйләүсенең тойго биҙәген дә төҫмөрләндерә; *һанап бөткөһөҙ* «бик күп» төшөнсәһен бирә. Айырма мәғәнәлә генә түгел, образлылыҡта ла күренә, ошо берәмектәрҙең нимәгә ҡарата ҡулланылышында ла сағыла. *Ҡыуаныс әҙ булды әле был арала* тиәһе урынға, *ҡыуаныс бармаҡ менән һанарлыҡ булды*, тип әйтә алмайбыҙ, йәки *быйыл игенде күп алдыҡ* урынына *игенде һанап бөткөһөҙ алдыҡ*, тип булмай.

Тимәк, һүҙ менән фразеологик берәмек араһындағы төп айырма түбәндәгеләргә ҡайтып ҡала:

1) һүҙ — бер лексеманан, ә фразеологик берәмек — ике йәки бер нисә лексеманан тора (ҡул — *ҡул һуҙыу, ҡул араһына инеү* һ. б.);

2) һүҙ интонацион яҡтан киҫәктәргә бүленмәй һәм бер баҫымлы була, ә нығынған һүҙбәйләнеш интонация буйынса өлөштәргә бүленә һәм ҡүп баҫымлы була (әйтәйек, ҡолаҡ — *ҡолаҡ ҡағыу*, ҡайын — *кәкре ҡайынға терәтеү*, бер — *бер ҡатлы* һ. б.);

3) фразеологик берәмектә төп мәғәнә булып күсмә мәғәнә һанала һәм ул, нигеҙҙә, образлылыҡҡа ҡоролған була, ә һүҙҙең тура мәғәнәһе уның төп мәғәнәһе булып йөрөй.

Грамматик яҡтан фразеологик берәмек һүҙгә лә, ябай һүҙбәйләнешкә лә оҡшай. Фразеологик берәмектең составындагы һүҙҙәр һөйләм эсендә грамматик яҡтан үҙгәрергә мөмкин (килеш, һан, зат, заман ялғауҙарын ҡабул итә). Мәҫәлән: *беҙ гәп һуғабыҙ, улар гәп һуҡтылар, малай үксәһен күтәрҙе, үксәңде күтәр* һ. б.

**Фразеолоғик берәмек һәм һүҙбәйләнештәр.** Фразеологик һүҙбәйләнеш эсенә ингән һүҙҙәр үҙ-ара ғәҙәттәге һүҙбәйләнештәр ҡалыбы менән яһала, улар бер-береһенә ярашыу, башҡарылыу йәки һөйкәлеү, йәнәшәлек юлы менән бәйләнеп киләләр. Күп кенә фразеологик берәмектәрҙең прототиптары, йәғни ябай һүҙбәйләнеш хәлендә ҡулланылган варианттары ла бар. Мәҫәлән: *телде тешләү* (өндәшмәй ҡалыу) — фразеологик берәмек, тура мәғәнәлә ул ғәҙәттәге һүҙбәйләнеш була. *Тоҙаҡ ҡороу* (мәкерле уй менән берәйһенә ҡаршы хәйлә ҡороу) һәм *ҡуянға тоҙаҡ ҡороу* һ. б.

Тимәк, фразеологик берәмек мәғәнәһе ягынан һүҙгә, формаһы ягынан һүҙбәйләнешкә оҡшаган. Ләкин уның үҙенә генә хас булган билдәләре лә бар.

Ябай һүҙбәйләнеш менән нығынған һүҙбәйләнеш араһындағы айырма, нигеҙҙә, мәғәнәгә һәм компоненттарҙың үҙ-ара бәйләнешенә ҡайтып ҡала. Ябай һүҙбәйләнеш телмәр ағышында ҡорола, ә нығынған һүҙбәйләнеш телмәргә әҙер көйө (электән төҙөлгән берәмек көйө) алына. Ябай һүҙбәйләнештә һүҙҙәр үҙҙәренең төп мәғәнәләрендә ҡулланылалар. Фразеологик берәмектең мәғәнәһе уның компоненттарының мәғәнәләре ҡушылыуҙан барлыҡҡа килмәй, ә шул һүҙбәйләнеш менән бирелгән күренеште тоҫмаллау, образлы күҙаллауға (һынын күҙ алдына баҫтырыуға) мәғәнә биреү нәтижәһендә тыуа. Бына берике генә миҫал: *кәмә* һәм *кәмә ҡомға терәлде* («эш бармай» мәғәнәһендә); *дуға* һәм *дуға менән бесән сабаһың* («яңылыш һөйләйһең»); *күк — түбә күккә тейеү* («ҙур шатлыҡ кисереү») һ. б.

Килтерелгән миҫалдарҙа фразеологик берәмектәрҙең мәғәнәһе компоненттарының мәғәнәһе менән бөтөнләй бәйләнмәгән, ә шул һүҙҙәр аңлатҡан күренеш, хәрәкәт нигеҙендә килеп сыҡҡан һәм образлы һынландырыуға бәйләнеп кенә йәшәй. Образлылыҡты иҫәпкә алмағанда, тура мәғәнәле ғәҙәти һүҙбәйләнеш йә һөйләм генә була.

Ябай һүҙбәйләнештә һүҙҙәрҙең грамматик формалары, нигеҙҙә, һаҡлана (һүҙ яһау һәм үҙгәртеү мөмкинлектәре киң була), ә фразеологик берәмектәрҙә ул бер ни тиклем сикләнгән. Бер генә миҫал алып ҡарайыҡ: *буяу* һәм *күҙ буяу. Буяу* һүҙе ҡылымдың бөтә формаларын да ҡабул итә, ә *күҙ буяу* берәмегә составында инде был ҡылымдың грамматик формаһы бер аҙ сикләнгән. Заман формаларының ҡайһы берҙәрен ул ҡабул итә алмай; әйтәйек, үткән замандың ихтирам итеү төҫмәрө менән әйтелгән *күҙ буяр ине, күҙ буяй торған булған* формаларын ҡулланып булмай, сөнки был форма берәмектең дөйөм мәғәнәһенә ҡаршы килә. Шулай уҡ йүнәлеш категорияһының ҡайһы бер төрҙәре лә мөмкин түгел (ҡайтым, төшөм йүнәлештәре), күләм формалары ла был берәмектәге ҡылым өсөн хас түгел.

**Фразеологик берәмек, мәҡәл һәм әйтемдәр.** Фразеологик берәмектәр менән мәҡәл һәм әйтемдәрҙең үҙ-ара оҡшаш яҡтары, уртаҡ үҙенсәлектәре бар. Улар барыһы ла составы яғынан тотороҡло була, телмәргә әҙер көйө, ойош берәмек рәүешендә алына. Фразеологик берәмектәр ҙә, мәҡәлдәр ҙә башлыса күсмә мәғәнәлә ҡулланыла һәм күпмелер дәрәжәлә образлы була.

Ләкин мәҡәлдәр менән фразеологик берәмектәр бер-береһенән ныҡ айырыла, шул арҡала уларҙы бер рәткә ҡуйып булмай. Айырымлыҡ уларҙың мәғәнәһендә лә, төҙөлөшөндә лә, телмәрҙәге функцияһында ла күренә.

1. Фразеологик берәмектәр төшөнсә аңлаталар, ә мәҡәлдәр ҡатмарлы уй-фекер белдерәләр. Сағыштырығыҙ: *ағай-эне талашыр, атҡа менһә, ярашыр; айырылғанды айыу ашар, бүленгәнде бүре ашар* һ. б. — *ел ҡыуыу, баш ватыу, эт тубығынан* һ. б.

Мәҡәл үҙенең тура мәғәнәһендә лә мәҡәл булып ҡала, йәғни тура мәғәнәһе менән күсмә мәғәнәһе араһында сик йәки ҙур айырма юҡ. Ә фразеологик берәмек тик күсмә мәғәнәлә генә берәмек була ала.

Унының эске формаһының тура мәғәнәләге һүҙбәйләнеш менән мөнәсәбәте күренеп торһа ла, фразеологик берәмектең тура мәғәнәһе һәм күсмә мәғәнәһе, тип күрһәтеп булмай. Килеп сығышы шул ябай һүҙбәйләнештән булһа ла, берәмек эсендәге һүҙҙәр үҙҙәренең төп мәғәнәләрен юйып, ойош күсмә мәғәнә алып китәләр. Әйтәйек, *эт бәйләһәң торғоһоҙ* һүҙбәйләнеше «бик һыуыҡ» мәғәнәһендә генә фразеологик берәмек була ала. Ошо мәғәнәнән ситләшеп, уны тура мәғәнәһенә кире ҡайтарһаң, берәмек тарҡала. *Ашаған белмәй, тураған белә* мәҡәле төп мәғәнәһендә икенсе бер күренештәргә ҡарата әйтелгәндә лә мәҡәл булып ҡала («тотонған белмәй, тапҡан белә» һ.б.).

2. Фразеолоғик берәмектәр ысынбарлыҡ күренештәрен атау һәм кәүҙәләндереү функцияһын үтәй. Тимәк, уларҙа төшөнсә образ аша сағылдырыла, йәғни образлылыҡ менән үрелеп үҫкән була. Әлбиттә, фразеологик берәмектәге төшөнсә менән образлылыҡтың бәйләнеше махсус өйрәнеүҙе талап итә. Шулай ҙа уларҙағы мәғәнәнең образ аша бирелеүе күренеп тора. Шуның өсөн дә йыш ҡына телмәрҙә бындай берәмектәр лексик берәмек (һүҙ) менән рәттән дә ҡуйыла, был ваҡытта улар һүҙҙе йәнләндереп, баҙыҡландырып ебәрәләр. Мәҫәлән:

а) Ауылда батыр, *ҡуш йөрәкле* кешеләр йәшәгән. (Ә. Вахитов.)

Балаға ҡарап, әсәһе:
...Батыр булып йәшәһен,
Сәйет, Күсемгә оҡшаһын,
*Йөрәктәре ҡуш булһын.* (М. Буранғолов.)

б) Ауылдағы Ғәйниямал өләсәһе, 60 йәш өҫтөндә булыуына ҡарамаҫтан, *типһә тимер өҙөрҙәй,* тап-таҙа. (Ф. Рәхимғолова.)

Мәҡәлдәрҙә атама биреү функцияһы түгел, ә тормош-көнкүреш, ысынбарлыҡ хаҡында фекер йөрөтөү сағылдырыла. Улар тормош күренештәренә ҡарата дөйөмләштерелгән баһа биреү, өгөт-нәсихәт, мөнәсәбәт белдереү функцияһын үтәйҙәр. Был урында фразеологик берәмектәр менән оҡшашлыҡ образлылыҡта күренә.

3. Мәҡәл, әйтемдәр һәр ваҡыт һөйләм формаһында, ә фразеологик берәмектәр башлыса һүҙбәйләнеш формаһында булалар, уларҙы ниндәй ҙә булһа бер һүҙ төркөмөнә ҡаратырға мөмкин. Мәҫәлән: *ил төкөрһә, күл була* (ҡушма һөйләм); *хәйлә тоҡсайы* — хәйләкәр кеше (исем); *таш бәғер* — ҡаты күңелле (сифат); *йән әсеү* — бик әсенеү, *баштан ашыу* — артып китеү (ҡылым) һ. б.

Формаль яҡтан һөйләм төҙөлөшлө булған фразеологик берәмектәр ҙә төшөнсә белдерәләр, уларҙы синтаксик яҡтан киҫәктәргә бүлеү дөрөҫ булмай. Фразеолоғик берәмектәрҙе компоненттарының составы яғынан ғына, йәғни морфологик структураһы буйынса ғына, тарҡатып тикшерергә мөмкин. Мәҫәлән: *йөрәк әрнеү, йән сығыу* һ. б. шуның кеүек һүҙбәйләнештәр ябай һөйләм тибында төҙөлгән, ләкин бында *йән* — эйә, *сығыу* — хәбәр тип ҡарарға ярамай, сөнки был ике һүҙ бер төшөнсә белдерә (сағыштырығыҙ: *ат юрта* менән). Йәки

*ауыҙын асһа, үпкәһе күренә* берәмеге структураһы ягынан ҡушма һөйләм була, ләкин уны һис тә ябай һөйләмдәргә тарҡатып ҡарарға ярамай. Ул бер генә төшөнсә белдергән, структураһы ягынан тарҡалмай торган берәмек итеп ҡаралырға тейеш.

4. Фразеологик берәмектәр һөйләм киҫәге булып ҡулланыла, шул арҡала телмәрҙәге башҡа һүҙҙәр менән тыгыҙ бәйләнешкә инә һәм төрлө формала килә. Ә мәҡәлдәр телмәргә бөтөн көйө генә алына (мәҫәлән, диалогтарҙа), йәки «тип, тигәндәй, әйтмешләй» һ. б. шуның кеүек һүҙҙәр аша бәйләнеп килә. Мәҫәлән:

а) Фатиманың ҡәйнәһе һәм бикәләре йорт эсендә *арҡыры ағасты буй ҙа бороп һалманылар.* Улар тик бойорорга гына белделәр. (Ж. Кейекбаев.)

б) [Шакир:] Башта уҡ колхоз булһам, *аҡ һаҡаллы ҡарт булыр инем.* Ә мин дурак булдым. (Һ. Дәүләтшина.)

в) [Ҡыраубикә:] *Ҡара көнөңдә ҡарга алдына үләкһә һорап бараһың* тиҙәр, беҙ ҙә шулай булдыҡ, ахырыһы! (Д. Юлтый.)

г) *Аптыраған өйрәк күлгә арты менән сума* тигәндәй, Сәлимә лә йәп-йәш көйөнә был ҡартҡа иреkһеҙ көнөнән кейәүгә сыҡҡандыр инде. (Я. Хамматов.)

Мәҡәлдәр менән әйтемдәрҙең фразеологик берәмектәргә мөнәсәбәте бер түгел. Әйтем төҙөлөшө һәм мәғәнәһе менән фразеологик берәмеккә яҡыныраҡ тора. Әйтемдәр, мәҡәлдәр кеүек өгөт-нәсихәт йөкмәткеле булмайынса, күберәк ысынбарлыҡ күренештәренең дөйөмләштерелгән атамаһы рәүешендә күсмә мәғәнәлә ҡулланылалар. Әйтемдәрҙең компоненттары грамматик яҡтан ҡатып ҡалган була, хатта телмәрҙә лә үҙгәрешһеҙ ҡала. Мәҫәлән: *ағай оло, мин ҙур* (ағаһынан алга сыгып эш башҡарған кеше); *һин белгәнде мин күптән киптереп элгән* (кешенең хәбәрен иҫәпкә алмағанда әйтелә); *аҡ эт бәләһе ҡара эткә* (гәйепленең гәйебен ғәйепһеҙгә ауҙарганда әйтелә); *һуҡты ла күпте* һ. б. Бындай әйтемдәр фразеологияға ҡарай һәм фразеологик һүҙлектәргә алынырга мөмкин.

Үҙенең лингвистик атамаһы булмаған йәнә бер төр тотороҡло һүҙбәйләнештәр бар. Улар төҙөлөшө менән дә, мәғәнәһе менән дә әйтемгә тартымдар. Ләкин тулыһынса гына әйтемдәр рәтенә индереп тә булмай. Тел берәмеге булараҡ телмәргә тотош көйө алынһалар ҙа һәм составы ягынан тотороҡло булһалар ҙа, башлыса диалогик телмәрҙә, билдәле бер ситуацияла гына ҡулланылалар. Мәҫәлән:

*Ауыҙыңа бал да май!* (Берәйһе яҡшы хәбәр әйткәндән һуң, яуап рәүешендә, йәғни «әйткәнең килһен!» тигән теләкте белдергәндә ҡулланыла.)

*Ауыҙыңдан ел алһын!* (Насар хәбәр әйткән кешенең һүҙенә ҡарата, «шул хәл килеп сыҡмаһын!» тигән теләкте белдергәндә.)

*Иҫке ауыҙҙан яңы хәбәр!* (Берәй кеше оҡшамаган йәки аптырарлыҡ һүҙ әйткәндә.)

[Гөльямал:] — Бына һиңә *иҫке ауыҙҙан яңы хәбәр!* Бында Хисмәтулланың ни ҡыҫылышы бар? (Я. Хамматов.)

*Күңелеңде киң тот!* (Бында бөтәбеҙгә лә етерлек тигән мәғәнәлә.)

Бындай һүҙбәйләнештәр төшөнсә белдереүгә ҡарағанда хистойғоно, ысынбарлыҡҡа ҡарата булған (йәғни ошо ситуацияға ҡарата) әйтеүсенең ыңғай йәки кире мөнәсәбәтен аңлаталар. Составы һәм функцияһы яғынан фразеологик берәмектәргә ҡаратылырға тейештәр. Компоненттары ла бер генә формала ҡулланыла һәм телмәр эсендә үҙгәрешһеҙ ҡала.

Мәҡәлдәрҙең компоненттары грамматик яҡтан ирекләрәк була, үҙгәрә ала. Хәбәрен үҙгәрткәндә, улар ҙа һөйләм киҫәгенә әйләнеп китә һәм, дидактик йөкмәткеһен юғалтып, төшөнсә аңлата башлай. Был күренеш башлыса ябай һөйләм формаһындағы мәҡәлдәрҙә күҙәтелә. Мәҫәлән: *аяғыңды юрғаныңа ҡарап һуҙ — ул аяғын юрғанына ҡарап һуҙыр инде хәҙер; ике кәмә ҡойроғон тотма (*йәки *тотоп булмай) — ике кәмә ҡойроғон тоторға итәһең инде, ә, ҡустым; иләк менән һыу ташымаиҙар — иләк менән һыу ташыу; тимерҙе ҡыҙыуында һуҡ — тимерҙе ҡыҙыуында һуға торған кеше ул* һ. б.

Ҡатмарлы төҙөлөшлө мәҡәлдәр бындай үҙгәртеүҙәргә бирелмәй, әлбиттә. Улар төрлө үҙ аллы киҫәктәргә генә тарҡалырға мөмкин. Был осраҡта мәҡәлдең бер өлөшө бөтөнләй онотолоп, ул фразеологик берәмеккә әйләнеп китә. Түбәндәге берәмектәрҙең мәҡәлдәргә туранан-тура бәйләнеше бар икәне күренеп тора: *кешегә соҡор ҡаҙма — үҙең төшөрһөң* (йәки *осорһоң) — кешегә соҡор ҡаҙыу* (кешегә аҫтыртын этлек уйлау); *сүбәк сәйнәп, май сыҡмаҫ — сүбәк сәйнәү* (бер үк хәбәрҙе күп һөйләү); *һөнәрлененң ҡулы алтын — алтын ҡуллы* (оҫта) һ. б.

Мәҡәлдәрҙән бер нисә үҙ аллы берәмек тә хасил булыуы мөмкин. Мәҫәлән: *кемдең арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың (кеше арбаһына ултырыу, кеше йырын йырлау).*

Тимәк, мәҡәл, әйтемдәр билдәле бер дәрәжәлә фразеология өсөн сығанаҡ булып тора. Халыҡтың афористик ижадына ҡараған һәм тел күренеше лә булған ошондай уртаҡ берәмектәр фразеологик һүҙлектәргә лә индерелергә тейеш. Шул уҡ ваҡытта бөтә мәҡәлдәрҙе, әйтемдәрзе фразеологик берәмектәр рәтендә ҡарау дөрөҫ булып етмәҫ ине. Был фразеология фәненең үҙ объектын билдәләүҙе юҡҡа сығара, фразеологик берәмектең үҙенә генә хас булған сифаттарын асыҡлауҙы ҡыйынлаштыра.

**Ҡушма һүҙҙәр һәм фразеологик берәмектәр.** Был ике төрҙө айырыуы шаҡтай ауыр. Бигерәк тә исем һәм сифат тибындағы ҡушма һүҙҙәр фразеологик берәмектәргә яҡын. Бында уларзың эске һәм тышҡы билдәләренән сығырға тура килә.

Фразеологик берәмек эсенә ингән һүҙҙәрҙең һәр береһенең үҙ баҫымы була, ә ҡушма һүҙ бер генә баҫым менән әйтелә. Мәҫәлән: *ташбаш* (балыҡ), *ҡантүш* (турғай), *таш йөрәк* (ҡаты күңелле кеше), *ҡан эскес* (яуыз) һ. б. Мәғәнә яғынан ҡарағанда ла айырма бар. Ҡушма һүҙҙәр, ғәҙәттә, предмет, күренештәрҙең тура атамаһы булып килә, йәғни номинатив мәғәнәле була, ә фразеологик берәмек образлы-номинатив характерҙа, ул күренеште ситләтеп, образлы һынлан-

дырыу аша бирә. Сағыштырып ҡарағыҙ: *боҙватҡыс, гөлйемеш, ҡулъяулыҡ — ҡан түгеү, тел дә яңаҡ* һ. б. Әлбиттә, ҡушма һүҙҙәр араһында ла күсмә, образлы мәғәнәле һүҙҙәр бар, ләкин улар һан яғынан бик аҙ һәм уларҙың күбеһе фразеолоғик берәмектән яһалған. Уларҙы хәҙер фразеологик берәмектәрҙән тик формаль билдәләре (тамыр һүҙҙәренең ҡушылып, бер берәмеккә әйләнеүе) генә айыра. Әйтәйек, *елғыуар, көнкүреш* һ. б.

Парлы һүҙҙәр ҙә шул уҡ хәлдә. Улар ҙа интонацион яҡтан бер берәмеккә әйләнгән. Компоненттары бер үк грамматик формала була. Шуға ҡарап, был тор һүҙҙәрҙе лә фразеолоғия эсенә индермәүҙе дөрөҫөрәк тип һанарға кәрәк. Мәҫәлән: *инәле-сығалы, килде-китте, ышаныр-ышанмаҫ, ул-был, иртәле-кисле* һ. б.

**Аналитик ҡылымдар һәм фразеологик берәмектәр**. Башҡорт теле ярҙамлыҡ ҡылымдар менән яһалған һүҙбәйләнештәргә бик бай. Уларҙы ла фразеологик берәмектәрҙән айырырға кәрәк. Был ике тор һүҙбәйләнештәр бер-береһенән мәғәнәләре һәм компоненттары араһындағы мөнәсәбәттәре менән айырылалар.

Аналитик юл менән яһалған ҡылымдарҙа һүҙҙәрҙең төп мәғәнәһе һаҡлана, дөйөм мәғәнә ошо һүҙҙәрҙең мәғәнәләре ҡушылыуҙан барлыҡҡа килә, йәғни тәүге һүҙҙәге мәғәнәгә ярҙамлыҡ ҡылым төрлө төҫмөрҙәр генә өҫтәй. Мәҫәлән: 1) лексик һәм ғрамматик төҫмөр: *йоҡлап алыу, алып барыу, башлап ебәреү,* 2) модаллек төҫмөрҙәре: *торған булыу, тәгәрәй яҙыу* һ. б. Бындай төр һүҙбәйләнештәр фразеологияға ҡарамай.

Ярҙамлыҡ ҡылымдар менән яһалған берәмектәрҙең лексик яҡтан ныҡ ҡушылғандары һәм күсмә мәғәнәгә эйә булып киткәндәре фразеологик берәмеккә әйләнә. Мәҫәлән: *мас булыу, бер булыу, таң ҡалыу, эт итеү, яҡшы итеү* һ. б.

Был һүҙбәйләнештәр яңы, күсмә мәғәнә алып, нығынған берәмеккә әйләнеп киткәндәр.

## ҺҮҘЛЕКТЕҢ ТӨҘӨЛӨШӨ

### 1. Һүҙлеккә алынған берәмектәр.

Телдә ҡулланылған бөтә һүҙбәйләнештәрҙе лә фразеологик һүҙлеккә алып булмай. Материал һайлағанда, нығынған һүҙбәйләнештәрҙең асылынан сығып эш итергә кәрәк. Мәғәнәләре яғынан ойош, күсмә мәғәнәле, һынлы, лексик составы тотороҡло, хәҙерге башҡорт әҙәби һәм һөйләү телендә ҡулланылған берәмектәр һайланды. Мәҫәлән: *бармаҡ менән һанарлыҡ, күпте күргән, ҡырҡһаң ҡаны сыҡмаҫ, ут бөрсәһе* һ. б.

Фразеологик берәмектәр менән уртаҡ яҡтары булған, уларға оҡшаш күренештәр ҙә телдә күп. Уларҙы ысын фразеолоғик бәйлыҡтан айыра белеү мөһим. Ниндәй һүҙбәйләнештәр һүҙлеккә алынмай һуң?

а) Күсмә мәғәнәһе булмаған һүҙбәйләнештәр һәм ҡушма ҡылымдар: *гөп итеү, дошман булыу, дуҫ күреү, иғлан итеү, сығып китеү, хәл итеү* һ. б.

б) Тура мәғәнәле ҡушма терминдар: *бүре емеше, ҡаҙ үләне, район комитеты, терегөмөш* һ. б.

в) Бер һүҙе күсмә мәғәнәле булып, икенсеһе тура мәғәнәле һүҙбәйләнештәр: *дөм ҡараңғы, көрәк һаҡал, ҡәләм ҡаш, уймаҡ ауыҙ* һ. б.

ғ) Мәҡәлдәр һәм әйтемдәр. Һуңғыларының айырым төрҙәре, йәғни фразеология менән бик яҡындары, һүҙлектә урын ала. Мәҫәлән: *айыуҙан ҡасҡан бүрегә. Аҡ эттең бәләһе ҡара этҡә.*

## 2. Фразеологик берәмектәрҙе урынлаштырыу тәртибе.

Һүҙлеккә алынған фразеологик берәмектәр беренсе һүҙе буйынса алфавит тәртибендә урынлаштырыла.

Мәҫәлән: ***ағай** оло, мин ҙур*
***ағас** атҡа атландырыу*
***баҙар** ҡороу* һ. б.

Ҡайһы бер һүзлектәрҙә төп мәғәнәне тотоусы һүҙгә ҡарап, оларға туплап биреү ысулы ҡабул ителә. Мәҫәлән: **ат, ауыҙ** һүҙҙәре менән яһалған берәмектәр бер урынға туплана. Һуңғы йылдарҙа төҙөлгән һүҙлектәрҙә был принңиптан баш тарталар, сөнки төп һүҙҙе билдәләү үҙе үк бәхәсле, һүҙлекте ҡулланған кешенең быны белмәүе лә мөмкин һәм кәрәкле һүҙбәйләнеште тиҙ ғенә таба алмауы бик ихтимал.

Һүҙлек статьяһы берәмектең үҙенән, уның стилистик һәм грамматик билдәләренән, аңлатмаһынан, әҙәби әҫәрҙәрҙән, халыҡ ижадынан алған миҫалдарҙан тора. Унда шулай уҡ берәмектең синонимдары, антонимдары килтерелә. Мөмкин булғанда килеп сығыуы тураһында мәғлүмәттәр бирелә.

## 3. Берәмектәрҙең мәғәнәһен аңлатыу.

Һүҙлектә фразеолоғик берәмектәрҙең мәғәнәләрен мөмкин тиклем тулыраҡ асыу бурысы ҡуйыла. Уларҙың һәр бер мәғәнәһе айырым аңлатыла. Омонимик һүҙбәйләнештәр булғанда, рим цифрзары менән айырып бирелә. Мәҫәлән: ***ауыҙ асыу***.

I. 1. Һүҙ башлау, хәбәр һөйләү. 2. Һемәйеү, буш тороп ҡалыу. 3. Нык аптырау, ғәжәпкә ҡалыу.

II. Ураҙа тотҡанда, ашар алдынан тоҙ йәки башҡа ашамлыҡ ҡабыу.

Башҡорт телендә күп мәғәнәле берәмектәр ҙә байтаҡ, улар ғәрәп цифрҙары аша һәр береһе айырым аңлатыла:

***аяҡтан йығыу.*** 1. Ауырытып хәлде алыу.

2. Бик ауыр хәлгә ҡуйыу.

***бармағы<үҙенә ҡарай>кәкре.*** 1. Урлашыуға әүәҫ, ҡулсыр.

2. Үҙ мәнфәғәтен генә ҡайғыртырға яратҡан, үҙ яғын ҡарай торған.

***ете ҡат тиреһен тунау.*** 1. Бик ҡаты яҙалау. 2. Ныҡ талау, бөлгөнлөккә төшөрөү.

Фразеологик берәмектең мәғәнәһен асыу еңел генә түгел, шуға был йәһәттән төрлө ысулдар ҡулланыла. Аңлатма тулыраҡ булһын өсөн, йәйәләр эсендә курсив менән төрлө өҫтәлмәләр ҙә бирелә, бында берәмектең ҡулланылыу урыны, хис-тойғо биҙәге һ.б. билдәләр күрһәтелеүе мөмкин. Мәҫәлән: ***аҡ һаҡаллы ҡарт булыу.*** Аҡыл менән, уйлап эш итеү *(гәҙиттә, яңылыш ҡылыҡҡа үкенес белдергәндә әйтелә).*

***арҡанан һөймәҫтәр.*** Яҡшы булмаҫ, хәүефһеҙ үтмәҫ *(ғәйепте һиҙеп, хафа белдергәндә әйтелә).*

***башынан себен тайып йығылырлыҡ.*** Тап-таҡыр, бөртөк тә сәсе юҡ *(башҡа ҡарата).*

Ҡайһы бер фразеологик берәмектәрҙең асылын билдәләгән ҡулланылыш шарты ғына бирелә. Мәҫәлән: ***бына һиңә кәрәк булһа.*** Көтөлмәгән хәлдән аптырауға ҡалғанда әйтелә.

Берәмектең мәғәнәһен тулыраҡ асыу өсөн, аңлатма һуңынан нөктәле өтөр аша уның мөмкин булған лексик синонимы ла бирелә: *аҡылды юйыу.* Аҡыл йорөтөү һәләтен юғалтыу; аҡылһыҙланыу.

***алмаш булыу.*** Аҡыл, иҫ буталыу; алмашыныу.

***баш һалыу.*** Үҙ ихтыярың менән бирелеү; буйһоноу.

Фразеологик берәмектәрҙең синоним һәм антоним иштәрен күрһәтеү ҙә уларҙың мәғәнәләрен тулыраҡ асыуға, мәғәнә бәйләнештәрен күрһәтергә мөмкинлек бирә. Бындай мәғәнәләш йәки ҡапма-ҡаршы мәғәнәле берәмектәр аңлатмаларҙан, миҫалдарҙан аҙаҡ *син.*, *ант.* шартлы ҡыҫҡартыуҙары аша урынлаштырыла. Миҫалдар:

***арт һабағын уҡытыу** кемдең.* 1. Бик ҡаты әрләү; ҡыҙҙырыу...

2. Тән яҙаһы биреү; туҡмау, ҡайыҙлау...

*син.*: иҙмәһен иҙеү, һырт ҡайышын алыу.

3. Ауыр хәлгә ҡуйып тормош һабағы биреү...

*син.:* күрмәгәнде күрһәтеү, кәрәген биреү, тетмәһен тетеү.

***бер бите ай, бер бите көн...***

*син.*: ҡарап (һоҡланып, күреп) туйғыһыҙ...

*ант.*: май яғып ташлаһаң, эт яламаҫ.

Синонимик мәғәнәле берәмектәр икенән артмаһа, уларҙың һәр береһендә синонимы күрһәтелә. Синонимдар күп булһа, улар һүҙлек статьяһының береһендә генә тупланып, башҡалары *ҡар.* (ҡарағыҙ) билдәһе менән шуға тоҫҡала. Мәҫәлән: ***иләк менән һыу ташыу...*** *син. ҡар.*: бушты бушҡа ауҙарыу.

Ҡайһы бер берәмектәрҙең мәғәнә төҫмөрҙәре лә була, улар үҙ аллы мәғәнә дәрәжәһенә етмәй, ләкин айырып күрһәтеүҙе талап итә. Бындай төҫмөрҙәр һүҙлек статьяһы эсендә ҡыя һыҙыҡ аша аңлатыла. Мәҫәлән:

***башын ашау кемдең.*** 1. Ауыр яҙмышҡа дусар итеү, насар хәлгә ҡуйыу... / Теләмәгән кешегә кейәүгә биреү...

2. Үлтереү, һәләк итеү...

### 4. Фразеологик берәмектәрҙең формалары, варианттары.

Һүҙлектә берәмектәрҙең компоненттары, ғәҙәттә, нейтраль формала бирелә: ҡылымдар исем ҡылым формаһында, исемдәр төп килештә килтерелә. Мәҫәлән: ***баштан ашыу...; гүргә инеү...; ҡойолоп төшөү...; кейеҙ ҡолаҡ...; сират күпере...*** һ. б.

Күп кенә берәмектәр телмәрҙә ниндәйҙер бер генә формала ҡулланыла һәм шул килеш ныҒынып ҡала, шуның өсөн уларҙы ошо формаһында алыу дөрөҫ була. Фразеологик берәмектәрҙең исем компоненттары эйәлек, килеш йәки һан, ҡылымдары төрлө һөйкәлеш, заман, зат формаларында ныҒына. Мәҫәлән: ***алдың байыңды...; арҡанан һөймәҫ(тәр)...; башына таҙ кәрәкме икән...; башында ел уйнай...; ҡапсығыңды киң тот...; киткән баш киткән...*** һ. б.

Фразеологик берәмектең варианттары төп һүҙ, форма янында түңәрәк йәйәләр эсендә бирелә:

а) морфологик варианттар — ***бына(мын) тигән; ҡарғышы(ң) ҡара башыңа; сырай(ҙы) һытыу*** һ. б.

б) лексик варианттар — ***бәкәлгә (билгә, бөгәргә, быуынга) һугыу; донъянан китеү (кисеү, үтеү, ҡайтыу)*** һ. б.

в) синтаксик варианттар — ***башы йомро (йомро баш); еңел аҡыллы (аҡылга еңел, аҡылы еңел); иләктән иләккә (иләктән иләккә) бушатыу*** һ. б.

Лексик-синтаксик варианттар иһә ***вар.*** (вариант) билдәһе аша аңлатмаһыҙ ғына бирелә, ике нөктә аша уға миҫал килтерелә. Мәҫәлән: ***башы ике түгел... вар.; башы икеме ни (икелер шул, ике тиһеңме әллә)...***

Фразеологик берәмектәрҙең составында һәр ваҡытта ла мотлаҡ ҡулланылырға тейеш булмаған һүҙҙәр ҙә була, улар һүҙлектә ике яҡтан мөйөшсә эсендә күрһәтелә:

***аллаға тапшырып <ике ҡулды ҡаушырып>...***
***башы йомро ла <муйыны оҙон>...***
***бер <үк> балыҡ башы...***
***борсаҡты <эре> ярыу...*** һ. б.

Ҡайһы бер фразеологик берәмектәр текст эсендә бер нисә һүҙ менән генә мәғәнәүи һәм синтаксик бәйләнешкә инә. Бындай осраҡтарҙа был һүҙҙәр квадрат йәйәләр эсендә күрһәтелә. Ләкин улар берәмектең составына инмәй, ә уның иң яҡын бәйләнешен күрһә-

теүсе һөйләм киҫәктәре итеп һанала. Мәҫәлән: ***күҙ ҙә ҡаш*** [күтәү]... ***ҡош телендәй*** [хат, хәбәр]...

***теше-тырнағы менән*** [ҡаршы булыу]...

Бындай һүҙҙәр айырым мәғәнәгә ҡарай икән, ул саҡта һәр мәғәнәне асырҙан алда күрһәтелә:

***күҙгә төртөп*** 1. [әйтеү]... 2. [биреү, күрһәтеү]...

Төп һүҙе ҡылым булған берәмектәрҙең башҡарылыш формаһы, йәғни килеш һорауы курсив менән күрһәтелә:

***көлөн күккә осороу*** *кемдең, нимәнең...*

***ҡанат аҫтына алыу*** *кемде...*

### 5. Стилистик билдәләр.

Һүҙлек нормативлыҡҡа дәғүә итә, шуға унда берәмектәргә стилистик баһа бирелә, уларҙың ниндәй телмәр төрөндә ҡулланылыуына ҡарата билдә ҡуйыла. Миҫалдар:

***керпегенән гөлдәр тама*** *шиғр. ...*
***койһөҙ кейәү*** *һөйл. ...*
***ҡылдан нәҙек, ҡылыстан үткер*** *фольк. ...*
***ҡапсығыңды киң тот*** *мыҫҡ. ...*

Ҡайһы бер берәмектәр хис-тойғо биҙәктәрен дә белдерә. Был үҙенсәлектәр ҡыҫҡартылған билдәләр йәки аңлатма рәүешендә күрһәтелә. Мәҫәлән: ***коҙгө әтәс*** *һөйл., кәмһ. (кәмһетеү һүҙе).* ***Өнө тығылһын*** *тупаҫ.* ***Серек сабата*** *һөйл. яманл.*

Бөтә стилистик, хис-тойғо биҙәктәрен белдергән билдәләр исемлеге баш һүҙҙең аҙағында күрһәтелә.

### 6. Миҫалдар.

Һүҙлеккә алынған фразеологик берәмектәрҙең һәр береһендә тиерлек әҙәби әҫәрҙәрҙән, халыҡ ижадынан, гәзиттәрҙән, журналдарҙан алынған һөйләмдәр килтерелә. Һөйләм эсендә берәмектең бөтә мәғәнәләре лә асыла, ҡулланылыш үҙенсәлектәре күренә.

Миҫалдарҙың күпселеге һүҙлекте төҙөүсе тарафынан тупланған материалдарҙан алынды, уларҙың байтағы башҡорт теленең аңлатмалы һүҙлеге өсөн йыйылған картотеканан да һайланды. Һәр бер берәмеккә бер-ике, хатта өс-дүрт миҫал бирелә. Һөйләмдең аҙағынан авторҙың исеме, халыҡ ижадынан, ғәзиттән һ.б. булһа, уларҙың исеме күрһәтелә.

Бөтә берәмектәргә лә (бигерәк тә халыҡтың һөйләү телендә ҡулланылғандарына) әҙәби миҫалдар табылманы. Бындай осраҡтар айырым һүҙбәйләнештәр, йәки һөйләү теленән алынған һөйләмдәр махсус билдә аша бирелде. Һүҙбәйләнештән һуң әҙәби миҫал килтерелгән осраҡтарҙа, улар араһына шаҡмаҡ шартлы билдәһе ҡуйылды [▬].

## 7. Этимологик белешмәләр.

Һүҙлек статьяһының иң һуңында мөмкин булған этимологик белешмәләр бирелә. Бындай мәғлүмәттәр квадрат йәйә эсендә йондоҙсоҡ [*] билдәһенән һуң килтерелә. Этимологик белешмәлә фразеологик берәмектең билдәһеҙ һүҙе аңлатыла, йәки тотош берәмектең килеп сығышы тураһында тулыраҡ мәғлүмәт бирелә. Миҫалдар:

***көнйәлә* баш** һөйл. ...*

[****Көнйәлә*** — иләргә тетелгән йөн, сүбәк, мамыҡ һ. б. йомарлағы.]

**ҡабырғаһы менән ҡуйыу*** *нимәне...*

[*Рус телендәге «ставить ребром» берәмегенән.]

***теңкәгә* тейеү...***

[****Теңкә*** боронғо төрки телендәге *тең* <көс> һүҙенә барып тоташа.]

## Ҡыҫҡартыуҙар, шартлы билдәләр

*ант.* — антонимдары
*вар.* — вариант
*ғәр.* — ғәрәп һүҙе
*диал.* — диалект һүҙе
*иҫк.* — иҫкергән
*күб. юҡл.* — күберәк юҡлыҡ формаһында
*кәмһ.* — кәмһетеү һүҙе
*ҡар.* — ҡарағыҙ
*мыҫҡ.* — мыҫҡыллауҙы белдерә
*сағ.* — сағыштырығыҙ
*син.* — синонимдары
*фарс.* — фарсы һүҙе
*фольк.* — фольклорҙан
*һөйл.* — һөйләү теленән
*шаяр.* — шаяртыу һүҙе
*шиғр.* — шиғри һүҙ
*эйл. ф.* — эйәлек формаһында ҡулланыла
*юҡл.* — юҡлыҡ формаһында ҡулланыла
*яманл.* — яманлау һүҙе

Миҫалдарҙа һүҙбәйләнеш менән һөйләм араһына ҡуйылған айырыу билдәһе [■■].

[*] Килеп сығышы һүҙлек статьяһының аҙағында аңлатылған берәмектәргә ҡуйылған билдә.

## Файҙаланылған һүҙлектәр

Башҡортса-русса һүҙлек. /Яуаплы ред. *З. Ғ. Ураҡсин.* М.: Русский язык. Дигора, 1997.

Башҡорт теленең һүзлеге. М.: Русский язык. 1993; Т. 2. М.: Русский язык. 1993. /Төҙөүселәре: *Агишев И. М., Бейешев Ә. Ғ., Зәйнуллина Г. Д., Ишмөхәмәтов З. Ҡ., Күсемова Т. Х., Ураҡсин З. Ғ., Яруллина У. М.*

Исәнбәт Н. Татар теленең фразеологик сүзлеге. 2 томда. Казан. Татарстан китап нәшрияты, 1989.

Кеңесбаев И. Ҡазаҡ тилиниң фразеологизлыҡ сөздиги. Алматы. Ғылым, 1977.

Рахматуллаев Ш. Узбек тилининг изохли фразеологик лугати. Тошкент. Уҡитувчи, 1978.

Туркмен дилиниң фразеологик сөзлүгү. /Под. ред. *С. Алтаева, Г. Ачиловой и С. Туджикова.* Ашгабат. Ылым, 1976.

*Ураҡсин З. Ғ., Надршина Ф. А., Йосопов Х. Ғ.* Башгкортса-русса фразеологик һүҙлек. Өфө. Башҡортостан китап нәшриәте, 1973.

*Ураксин З. Г.* Русско-башкирский фразеологический словарь. /Под. ред. *Э. Р. Тенишева.* М.: Русский язык, 1989.

Фразеологический словарь русского языка. /Под. ред. *А. И. Молоткова.* М.: Советская энциклопедия, 1967.

*Әхәтов Г. Х.* Татар теленең фразеологик әйтелмәләр сүзлеге. Казан. Татарстан китап нәшрияты, 1982.

# А

**абаға сәскәһе табыу** *һөйл.* Юҡ нәмәне бар итеп ҡарау.

**ағай алғансы, еңгә килгәнсе.** Агайҙың, кәләш алгас, тугандарына һыуыныуы, еңгә ягына ауып китеүе тураһында әйтелә.

**ағай оло, мин ҙур.** Ололоҡ-кеселекте ҡарап тормай эш ҡылған кешегә ҡарата шаяртып әйтелә *(гәҙәттә, алдан өйләнергә теләгән кеше тураһында).* [*Сафура Нисанга*] *Агайың булһа ни? **Агай оло, мин ҙур** тип, өйлән дә ҡуй.* (Б. Бикбай.)

**ағас атҡа атландырыу** *кемде.* Оҫта алдау, бик ныҡ һемәйтеү. *Мин ысынбарлыҡтан ситкә китеп, уҡыусыларымды ялган тәтәйҙәр менән алдап, **агас атҡа атландырырга** теләмәйем.* (С. Ҡудаш.) **Ағас атҡа атланыу:** *Эшкә сыҡмай ятыусылар **агас атҡа атланды.*** (Таҡмаҡтан.)

*син.*: кәкре ҡайынға терәтеү, ҡаҡ боҙға ултыртыу, төп башына ултыртыу, төпһөҙ санаға ултыртыу, тишек кәмәгә ултыртыу.

**ағас ауыҙ.** Аңышыраҡ, йәки тупаҫ телле кешегә ҡарата әйтелә *(әрләү, кәмһетеү һүҙе).*

**ағас (үгмәҫ, тешһеҙ) иғәү.** Гел генә мыжып, игәп торган кеше. *Нәсимә уга [Шакирга] ҡарамай бупылданы: йоҡланым шул. — **Ай, үтмәҫ игәү!** Шакир асыу менән өҫтәп ҡуйҙы.* (Һ. Дәүләтшина.)

**ағас тел(ле), теле ағас.** Тупаҫ һөйләшә торған, тупаҫ телле. *Улыҡайым шуны бел: кеше күңелен киткән, кеше йөрәген өткән тупаҫ тел ул — **агас тел.*** (Х. Сафаров.) ... *Осман хатта кәрәгенән тыш аҡыл эйәһе кеше. Ғилмибейгә түгел, хатта шарлатан кибетсегә лә, **агас телле** төнгө ҡарауылсыға ла тегендәй-быңдай һүҙҙе ысҡындырмай.* («Төрөк хикәйәләре».)

**Ағиҙелдең аръяғында бер энәгә бер һыйыр** *шаяр.* Алыҫта, сит ерҙә арзансылыҡ, рәхәтлек, имеш, тигән кешегә ҡаршы әйтелә. *[Федор:] — Башҡа урында әллә яҡшыраҡ булыр, тиһеңме? Көтөп тор, **Агиҙелдең аръягында бер энәгә бер һыйыр.*** (С. Мифтахов.) *[Хәбирйән:] — ... Күрше-күлән ауыҙ һыуы ҡороп: «Себерҙә ат осһоҙ икән», — тип һөйләй. Эйе, **Агиҙелдең аръягында бер***

*энәгә **бер һыйыр**, тик сығып ҡына алыуы ҡыйын...* (Б. Бикбай.) *[Тугушев:] — Чепуха, **Ағиҙелдең аръяғында бер энәгә бер һыйыр**, тиҙәр ауылда. Бер ҙә әллә ни түгелдер әле.* (А. Карнай.)

**ағылайға тағылай**. Арттан ҡалмай эйәреп йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә. ***Ағылайға тағылай** булдыңмы әллә, артымдан бер аҙым ҡалмайһың.* (Һөйл.)

**ағыу сәсеү**. Уҫал ниәт менән зәһәрле һүҙ һөйләү. *Ҡалғандарға уҫал урыҫ **ағыуын сәсте**, Былай булһа, ни ҡылырбыҙ, мосолмандар.* (Бәйеттән.)

**аҙаҡ килеп**. Һуңғы сиктә, һөҙөмтәлә. *...Заятүләктең туғандары бер-береһенә ҡул күтәргән, **аҙаҡ килеп**, ханлыҡ бөтөнләй емерелгән...* (Әкиәттән.)

**аҙым һайын**. Бик йыш, эленән-эле. ***Аҙым һайын** ғәйебең асылыуҙы көтөп, ҡурҡып йәшәгәнсе, арығансы эшләп, барыһын онотоп, тыныс йоҡлауыңа ни етә...* (Б. Бикбай.) *«Ҡурай тартыу, эскерипкә уйнау, гармун ларылдатыу — ялҡау кешенең эше ул!» — тип йөҙ сирылтыусыларҙы **аҙым һайын** осратаһың.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Тормошта **аҙым һайын** осрап торған тупаҫлыҡ, яһиллыҡ Бабичтың күңелендәге юшҡын-һыҙлауыҡты тағы ла нығыраҡ һыҙлата.* (Р. Бикбаев.)

*син.*: аяҡ<**атлаған**> һайын.

*ант.*: әллә ни ҙә бер, онотҡанда бер.

**айбар һалыу (ороу)**. Ҡурҡыныс һалып ажарланыу. *[Юлдыҡай:] Ташла ҡылысыңды йәнең барҙа. Ниңә уны ҡындан һурғанһың? Ҡурғалауһыҙ ятҡан тыныс өиҙә Кемгә килеп **айбар орғанһың**?* (Х. Ғәбитов.)

**ай битен йыуа**. Яңы ай тыуғандан һуң яуған ямғырға ҡарата әйтелә.

**ай-вайына ҡуймау (ҡарамау)** *кемдең*. Ҡарышыу-ҡаршылашыуын иҫәпкә алмау, ризаһыҙлығы менән иҫәпләшмәү. *[Барый] Саматты **ай-вайына ҡуймай**, кухняға алып сығып китә.* (Ш. Насыров.) *Халыҡ, батшаның **ай-вайына ҡарамай**, атҡа мендереп ултырта.* (Әкиәттән.)

**ай ҙа ҡояш**. Ихлас күңелле, асыҡ йөҙлө. *Мин үҙем **ай ҙа ҡояш**, һеҙ нисектер.* (Һөйл.) *Әхирәттәрең, яҡындарың һәм туған-тыумасаларың ҡаршында һин — **ай ҙа ҡояш**.* («Сов. Башҡ.»)

**айҙы күккә сығарыу**. Ботә көскә тырышып, үҙеңдекен итеү. *Иығылһам, йығылдым, **айҙы күккә сығарҙым**, тигәндәй, Ныязғолдоң ауыртҡан еренән тотоп ҡыҫҡырттым әле!* (Һ. Дәүләтшина.)

**ай күрҙе, ҡояш алды**. Күҙгә күренеп ҡалып, йәнә тиҙ генә юғалған кешегә ҡарата әйтелә. *Бер минуттан һуң... Бүре һуҡҡан битләүе, **ай күрҙе, ҡояш алды** тигән кеүек, буш ҡалды.* (С. Ағиш.) *[Зөбәйҙә Йәмилгә:] **Ай күрҙе, ҡояш алды**, тағы командировкаға китәһеңме? Минең ир менән йәшәгем килә.* (И. Аб-

дуллин.) *Тәүге йыиған өйөрөмдәр, күбәләр алыҫ ҡалды. Бала саҡ, үҫмер йылдарҙы* ***ай күрҙе, ҡояш алды.*** (С. Ғәбиҙуллин.)

**ай ҡолаҡланыу.** Айҙың ике яғынан яҡты һыҙат барлыҡҡа килеү *(ҡыш көнө).* ***Ай ҡолаҡланһа,*** *аяғыңды ныгыт.* (Мәҡәл.) — ***Ай ҡолаҡланған*** *икән, иртәгә бик һыуыҡ, йә бик шәп буран булыр, ахыры, — тип уйланы Биктимер.* (Б. Ишемғол.)

**ай-ҡояш булыу** *кемгә.* Йылы мөнәсәбәт күрһәтеү, яҡшы ҡарау. *Юҡ, директор һәр кемгә лә* ***ай-ҡояш булмағандыр.*** *Ҡайһы берәүгә ҡырыҫ ҡараған сағын да күрҙем мин уның.* («Сов. Башҡ.»)

**айт тигәнгә тайт итеү (тиеү).** Бер-берәүҙең һүҙен тыңларға, теләгән үтәргә әҙер тороу. *Айт тигәнгә тайт итеп тора. Айт тигәнгә тайт итә лә сыға.* ▬ [Б. Бикбай] *Үҙе лә ҡурҡып-өркөп йәшәмәне.* ***Айт тигәнгә тайт,*** *тип тә торманы.* (М. Кәрим.)

**ай үҫәһен көн үҫеү** *фольк.* Бик тиҙ буй етеп, күҙгә күренә башлау. *Был малай* ***ай үҫәһен көн үҫеп,*** *бик зирәк егет булып еткән, ти.* (Әкиәттән.) *Ишмырҙа исемле малай* ***ай үҫәһен көн үҫте.*** *Үҫкән һайын Ҡәҙерғол күңелен ялай барҙы, иң яратҡан улына әйләнде.* (М. Кәрим.) *Һай, үҫкән ул Башҡортостан!* ***Ай үҫәһен көн үҫкән*** *ул. Төрлө дауыл, ғәрәсәттәр аша үтеп ир еткән ул.* (А. Баһуманов.)

**ай-һай (ай-тай, дәл-дәл, ләл) баҫыу.** Яңы атлай башлау (йәш балаға ҡарата). *...Былбыл йырына һоҡланып, малайҙарының* ***ай-һай баҫыуына*** *шатланып йәшә генә, ҡыҫҡаһы.* («Башҡортостан».)

**айыуҙан ҡасҡан бүрегә.** Бер бәләнән ҡотолам тип, икенсеһенә эләккәи ваҡытта әйтелә. *[Сәлимә:] Минең Айбулатым, бахыр,* ***айыуҙан ҡасҡан бүрегә,*** *тигәндәй, Ныязғол ҡулында бушлай ялсы булып тик йөрөй.* (Һ. Дәүләтшина.)

**айыу майы һөртөү** *нимәгә.* Йәшереп алыу, урлау, сәлдереү. *Аҡселән буйҙарында еңел юл менән ҡулға мал төшөрөүселәр булһа, улар:* ***«айыу майы һөрттөм»,*** *«сәлдерҙем» йәки «шылдырҙым», тип тормайҙар...* (Б. Бикбай.) — *Һинең аҙашың Әхмәҙи Ваһаптың тәпеһенә* ***айыу майы һөрткән,*** *ти бит әле, ишеттеңме?* (Ж. Кейекбаев.) *Юл буйынса ферма мөдире баш вата: нисек был һыйырҙарҙың береһенә* ***айыу майы һөртөргә?*** («Сов. Башҡ.»)

**айышына төшөү** *нимәнең.* Асылын аңлау. *Иәмилә торараҡ был тартыштың* ***айышына төштө.*** (Ф. Иҫәнғолов.)

*син.*: әрәсәһеиә төшөнөү.

**аҡ билет*** *иҫк.* Хәрби хеҙмәткә яраҡһыҙлыҡты күрһәткән таныҡлыҡ. *Аҡ билетҡа ҡалыу. Аҡ билетҡа сығыу.* ▬ *Килеп кергәс тә Уфаға, күҙем төштө бер садҡа:* ***аҡ билеттар*** *ҡарала, тип яҙған икән босмаҡҡа.* (Бәйеттән.) *Хизбулланың уң күҙе күрәгарау арҡаһында* ***аҡ билет*** *булып, һуғышҡа китмәй ҡалды.* (З. Биишева.) *[Шәүәлиҙе]...* ***аҡ билетҡа*** *сығарып, һалдаттан ҡалдырғандар.* (Б. Бикбай.) *Мөхәррәм Тирәкле ауылы фартауай*

*ғына кешенең берҙән-бер улы ине. Ул **«аҡ билетҡа»** эләгеп, хеҙмәткә бармай тороп ҡалды.* (Ж. Кейекбаев.)

[*Революцияға тиклем һалдатҡа яраҡһыҙ кешеләргә аҡ тышлы билет, хеҙмәттән ваҡытлыса ҡалдырылғандарға йәшел билет бирелгән.]

**<аҡ> күбеккә батыу (төшөү).** Бик ныҡ тирләү *(күберәк ат хаҡында). Аҡ күбеккә батҡансы сабыу.* ▬ *Ҡыҫтап ҡыуылған аттар манма һыуға батып, **аҡ күбеккә төшкәндәр.*** (Т. Хәйбуллин.) *Колхоз председателе Иштуған йән-фарман сабып килеүҙән **аҡ күбеккә батып,** бурыл төҫкә әйләнгән туры айғырҙы ҡапыл туҡтатты.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Фәйзулла атты ... һөрөлгән ергә борҙо. Буян баҫыу буйлап **күбеккә батҡансы сапты.*** («Сов. Башҡ.»)

**аҡ күңел(ле).** Тәбиғәте менән таҙа, саф йөрәкле. *Һин генә ул гел хоҙайлығыңды уйлайһың, **аҡ күңел.*** (Һ. Дәүләтшина.) *Ишбулды ул йөрөгән бер **аҡ күңел,** Беҙ гонаһлы тип белмәйбеҙ.* (Х. Ғәбитов.) *Йоҡлай керһеҙ йәндәр, **аҡ күңелдәр,** Йоҡлай батыр, көслө беләктәр.* (С. Ҡудаш.)

**аҡ бәхет.** Ғүмер буйына кеше менән бергә йөрөгән, яҙмышына бәйләнгән ҙур уңыш. *Аҡ бәхет теләү.* ▬ *Уңған бисә — **аҡ бәхет,** уңмаған бисә — **ҡаҡ бәхет.*** (Мәҡәл.)

**аҡҡа ҡара менән яҙылған.** Аңлашылып торған, бутарлыҡ түгел.

**аҡҡа төшөү.** Ҡағыҙға теркәлеү. *Дағаларҙан сәсрәп ҡалған таштан, юлдарымда сәсрәп ҡалдығыҙ. **Аҡҡа төшмәй,** телгә күңел етмәй, куптәрегеҙ эстә яндығыҙ.* (С. Ғәбиҙуллин.)

**аҡ ҡорбан салыу.** Берәүҙең һаулығына бағышлап, йәки берәй теләк теләп ҡорбан салыу *(гәҙәттә, аҡ төҫтәге мал салынған, ите тотош кешеләргә ашатылыр булған). Уландарым һуғыштан иҫән-аман ҡайтһа, **аҡ ҡорбан салырмын** тигән әйтеүем бар ине... **Аҡ ҡорбан салырмын да** үҙҙәрен генә һыйлармын тип нәҙер әйткәйнем...* (З. Биишева.) *Ғәйшә әбей, балаһының һаулығына тип, хәйерҙәр бирә, **аҡ ҡорбандар сала.*** (Һ. Дәүләтшина.)

**аҡҡош йыры*.** Яҙыусының, рәссамдың һ. б. ижадсының илһам юғарылығында тыуҙырылған һуңғы әҫәре. ... *«Осҡондан ялҡын» поэмаһы Р. Ниғмәтиҙең ысын мәғәнәһендәге **аҡҡош йыры** дәрәжәһенә күтәрелде.* (К. Әхмәтйәнов.)

[* Рус телендәге «лебединая песнь» берәмегенең һүҙмә-һүҙ тәрж.]

**аҡмаһа ла тама.** Күп булмаһа ла ҡулға төшөп тора *(еңел юл менән табылған мал-мөлкәт хаҡында әйтелә). [Рыҫҡол Әлмәткә:] Һеҙ туҡ шул. Түрәләр алдында яҡшатлана беләһегеҙ, **аҡмаһа ла тамып тора** һеҙгә.* (Б. Бикбай.) *Уны келәттәргә баш итеп ҡуйғайнылар ҙа бит ... келәттәргә генә шул. Дөрөҫ, унда ла Минулла өсөн насар түгел. Эше еңел. **Аҡмаһа ла тама.** Бөтәһе лә үҙ ҡулында.* (Ғ. Ибраһимов.) *Күтәрерҙәр ине — **аҡмаһа ла тамып тора** бит уларға...* (Б. Аҫылғужа.)

**аҡ мәзәл* ҡороу**. Арып-талып эштән сығыу. *Тауға үрләй үрләй **аҡ мәзәлем ҡороно**.* (Һөйл.)

[***мәзәл** — *ғәр*. тәм, тат, ләззәт].

**аҡса ҡоло**. Аҡсаға, малға мөкиббән киткән кешегә ҡарата кәмһетеп әйтелә. *Ошо беҙҙең бухгалтерия халҡын **аҡса ҡоло** булыуҙан ҡасан ҡотолдороп була инде.* (Н. Мусин.)

**<аҡсаны> күрәп алыу**. Бер юлы күпләп аҡса табыу; күп түләүле эштә эшләү. *[Мөхлис:] ...Сәмиғә ҡәрендәш, бына беҙ ҙә бит **аҡсаны күрәп алмайбыҙ**.* (Х. Ибраһимов.)

**аҡса түгеү (туҙҙырыу)**. Аҡсаны бушҡа әрәм-шәрәм итеү. *Бушҡа **аҡса түгеп**, ваҡыт әрәм итеп, ул балаларҙы уҡытып йөрөүҙән ни мәғәнә сығыр икән? — тип төртөштөрөп алды [Рәшиҙә].* (М. Тажи.) *[Вася:] — Беләһеңме, Айбулат, улар миллионлап аҡса тоталар. Бер кис ресторанда ултырғанда ғына ла биш-алты йөҙ һум **аҡса туҙҙыралар**.* (Һ. Дәүләтшина.) *Хәкимов ... малайҙарҙан уңманы: эскегә һабыштылар, бисә-сәсә менән сыуалдылар, **аҡсаны** һыу кеүек **түктеләр**.* (Б. Бикбай.)

**аҡса һуғыу (һуйыу)**. Күпләп аҡса эшләү, мал табыу. *[Йыһан:]... Тапты һүҙ, әллә мине **аҡса һуға** тип беләһеңме?* (Х. Ибраһимов.) *Ҡомһоҙ Ҡаһымбай үҙенең **аҡса һуғыу** тураһындағы планын тәүге көндән үк бойомға атҡарырға кереште.* (И. Ғиззәтуллин.) *Төрлө яҡлап **аҡса һуға** ул [Мөҙәрис]. Әле лә иҫке йортона яңы квартирант индергән.* («Сов. Башҡ.»)

**аҡса эшләү**. Аҡсаны күберәк алыу маҡсатында ғына йөрөү. *Әле бына аҙ-маҙ **аҡса эшләп** ҡайтҡан. Әллә берәй ерҙән ҡыҙ әйттереп ҡарап, башлы-күҙле итһәк, үҙегеҙгә бер ҡулғамытлыҡ булырмы тип, ағаһы менән дә уйлашҡайныҡ әле.* (Һ. Дәүләтшина.)

**аҡса яуыу**. Еңел кәсеп менән аҡса, мал-мөлкәт килеү. *Сәрби әбей ғашиҡтарға ырымлап ноҡот һала. Бына ҡайҙа ул шәп кәсеп! Ноҡот башына һәр кемдән өсәр һум **аҡса яуа**.*

**аҡты-ҡараны айырыу (таныу)**, ***аҡты ҡаранан айырыу***. 1. Хәреф таныу, бер аҙ яҙа-һыҙа белеү. *Шәрәфи ҙә, ир урталарына етеп килгән сағында, башҡалар һымаҡ уҡ, **аҡты-ҡараны айыра** белмәгән, хатта был турала хыялланмаған да.* (Б. Бикбай.) **Ҡаранан аҡты айырыу**: *Ауылда мәктәп асып, олоһон-кесеһен дә, бала-сағаһын да уҡытырға тотондолар. **Ҡаранан аҡты айырырлыҡ**, советтың эшен алып барырлыҡ грамота алынды инде.* (М. Тажи.)

2. Тормош, эш-хәлдең яйын, рәтен белеү; яманды яҡшынан айыра белеү. *Райсовет председателеме, әллә бер **аҡты ҡаранан айыра** белмәгән малаймы?* (Н. Мусин.) *Миңә улай уҡ шикләнеп ҡарамағыҙ, зинһар, мин дә марксизм тәғлимәтен өйрәнгән кеше, мин дә **аҡ менән ҡараны айыра** беләм.* (Й. Солтанов.) *Дауыттың үҙ башы бар, **аҡты ҡаранан айыра** ала.* (Ш. Янбаев.)

3. *юҡл.* Аң-тоңдо ҡарап тормай, айышына төшөнмәй тороп *(берәй эш ҡылыу). Киткән һуғыш. Бер кем **аҡ-ҡараны айырмай**, тап килгәнде дөмбәҫләй бирәләр.* (Б. Бикбай.) *Дошмандың*

*көсө билдәһеҙ.* ***Аҡты-ҡараны айырмай*** *ҡаршы сығыу — тәрәнлеген тоҫмал итмәйенсә ят даръяға ташланыу менән бер.* (Ә. Хәкимов.)

*ант.*: әлепте таяҡ тип белмәү.

**аҡты ҡара (ҡараны аҡ) тип әйтеү; итеп күрһәтеү...** Үҙ мәнфәғәтендә дөрөҫтө ялғанға, йәки ялғанды дөрөҫкә сығарырға тырышыу. — ... *Империалистик һуғыш кем мәнфәғәтенә алып барылыуын һалдаттар асыҡ аңлай. Ә бында, офицер әфәнделәр, эсерҙар, меньшевиктар* ***аҡты ҡара, ҡараны аҡ тип*** *һуғышты дауам итергә саҡыралар. (*Я. Хамматов.) *[Сәғиҙә:]* ***Аҡты ҡара итеп күрһәтеү*** *менән ни фаиҙа сығармаҡ булаһығыҙҙыр, мин белмәйем.* (М. Тажи.)

**аҡ һаҡаллы ҡарт булыу.** Аҡыл менән, уйлап эш итеү *(гәҙиттә, яңылыш ҡылыҡҡа үкенес белдергәндә әйтелә). Быҙаулыҡтан Вагапичтар, Кузьмин баиҙар һәм башҡа бик күптәр, сит илгә сығып китеп,* ***аҡ һаҡаллы ҡарт булдылар.*** *Ә беҙ — ахмаҡ!* (Һ. Дәүләтшина.) *[Дүсмәт:] Шул ғаризаны яҙмаған булһам,* ***аҡ һаҡаллы ҡарт*** *булам икән.* (М. Кәрим.)

**аҡ һөйәк** 1. *иҫк.* Юғары ҡатлам кешеһе.

2. Эш яратмаған кешегә ҡарата әйтелә. ... *Мин* ***аҡ һөйәк*** *түгел — бөтә эште лә үҙем ең һыҙғанып эшләйем, ҡыҙҙарымды ла өйрәтәм.* (М. Садиҡова.)

**аҡыҡ кеүек.** Бик таҙа, саф. *Эт күрмәгән нужа күрә-күрә* ***аҡыҡ кеүек*** *зиһенем таралды.* (Б. Ишемғол.)

**аҡыл алыу** 1. *кемдән.* Кәңәш һорау, өйрәнеү. *Иҙшем иллегә етеп, улымдан* ***аҡыл алып*** *ултырайыммы?* (Һ. Дәүләтшина.)

2. Кәрәккә алыу (туҡмалыу, ҡыйратылыу). — *Юҡ инде! Туғыҙ йөҙ бишенсе йыл, шулай хәйер һорап барып,* ***аҡыл алды*** *беҙҙең брат Петербургта. Хәҙер ул ҡабатланмаҫ.* (Ж. Кейекбаев.) **Аҡылға алыу**: — *Ә,* ***аҡылыңа алдыңмы?*** *Ҡабат кешегә бәйләнеп йөрөмәҫһең, юғиһә елкәңә нығыраҡ төшөр.* (Һөйл.)

**аҡыл биреү**. 1. Кәңәш биреү, өйрәтеү. *Яҙ көнө, колхоз ойоштороу мәсьәләһе ҡуҙғалғас, Ғариф ағай, ошо дуҫының* ***аҡыл биреүе*** *буйынса, беренселәрҙән булып ғариза яҙҙы.* (Б. Бикбай.)

2. Сыбыҡлау йәки ҡаты орошоу. [Әхтәри ҡарт] ...*күрәһең, өй башында малаиҙар турғай ояһы ҡарап йөрөиҙәр, тип уйлағандыр: — Сүбәкә малаиҙар!* ***Бирәйем аҡылды!*** *Төшөгөҙ унан! Иөҙө ҡаралар.* (Ж. Кейекбаев.)

*син.*: кәрәген биреү, атаһын (атаһын-әсәһен) танытыу.

**аҡыл булыу.** Башҡаса насар ҡылыҡ ҡылмаҫҡа һабаҡ булыу. *Тимер уға [Булатҡа] ҡатыраҡ бәрелде, буғай. Ярар,* ***аҡыл булыр.*** (Б. Бикбай.)

**аҡылға бер төрлө** (бер көйө, теүәл түгел). Фекер йөрөтөү һәләте башҡаларҙан ҡайтышыраҡ; етешмәгән. *Мулла бының алдағанын белә. Шулай ҙа асыуын һиҙҙермәй.* ***Аҡылға бер төрлөрәктер*** *тип уйлай.* (Әкиәттән.) *Кейәү буласаҡ кешене халыҡ бик яманлай бит әле.* ***Аҡылға бер төрлөрәк*** *тиҙәр.* (Һ. Дәүләтшина.)

*Егеттәр Талханы ... ҡотортоп көрәшергә димләне.* ***Аҡылға бер көйөрәк*** *Талхаға ҡотортоу етә ҡалды.* (Ж. Кейекбаев.) **Бер төрлө:** ... *Ул миңә тәүҙәрәк ғәжәберәк, хатта* ***«бер төрлөрәк»*** *күренә ине.* (Ә. Вахитов.)

*син.*: аҡыл өләшкәндә өйҙә (урынында) булмаған, аҡыл өләшкәндә мейес башында ятҡан, бер шөрөбө етешмәй, ботона бер ҡаҙаҡ тулмаған, йөҙгә берәү тулмаған, ҡырҡҡа берәү тулмаған, тилебәрән орлоғо ашаған, туҡһан туғыҙлы, утыҙ туғыҙлы, һумы һикһән һиғеҙ тин генә.

**аҡылға килеү.** 1. Уйлап ҡарау, башҡа килеү. *Дөрөҫ, Әмирхановта «совет кешеһе»нең «с» хәрефе лә күренмәй, ләкин был тиклемгә барып етер тип* ***аҡылыма ла килмәгәйне.*** (С. Ағиш.)

2. Аҡылдан яҙғандан һуң, кире үҙ аңына ҡайтыу. *Балалары әрәм булып етем ҡалдылар.* ***Аҡылына килһә лә*** *барыбер ире алмаҫ, нисек донъяла йәшәһен, тип төрлөсә уйлаштылар [кешеләр].* (Һ. Дәүләтшина.)

3. Ахмаҡ уйҙан, ҡылыҡтан ҡотолоу, уйлап эш итә башлау. ***Аҡылға килергә,*** *тыуған ауылына ҡайтҡас, ҡатыны менән икәүләп ең һыҙғанып эшләргә кәрәк ине лә бит.* («Сов. Башҡ.») — *Ни һөйләйһең? — тип яуаплаған әсәһе, — ул бит беҙҙең кеүек ярлы ҡанын эсеүсе аҡ офицер...* ***Аҡылыңа кил,*** *ҡыҙым...* (Ә. Вахитов.)

**аҡылға ултыртыу** *кемде.* Һабаҡ биреп, дөрөҫ юлға баҫтырыу. *Бай асыуланып сығып китә. Инде хәҙер ни эшләргә? Мулланы* ***аҡылға ултыртырға*** *кәрәк.* (Әкиәттән.) *Һуғыш сыға ҡалһа, уларҙың күбеһен, һуғышҡа оҙаттырып, бер аҙ* ***аҡылға ултыртыр*** *инек...* (Һ. Дәүләтшина.) — *Төрмә лә, фронт та* ***аҡылға ултыртмаған*** *икән үҙен! — Һин* ***аҡылға ултырыу*** *тиһең әле, элеккегә ҡарағанда ла боҙолған ул бәндә [Хисмәтулла].* (Я. Хамматов.) *Беҙ артдивизион командиры капитан Сәйфи Сәитов менән дошманды* ***аҡылға ултыртырға*** *булдыҡ. Ҡараңғы төшөр-төшмәҫтән дәһшәтле ут астыҡ.* («Сов. Башҡ.»)

**аҡылға ултырыу.** 1. Үҫеп етеп, аң инеү; аҡылланыу. *Амантаев* ***аҡылға ултырған*** *әҙәм, уны юлдан яҙҙырып булмай.* (Ә. Бикчәнтәев). **Аҡыл ултырыу** *кемгә: Ҡотлояр ҡыҙып китте: — Ҡартайғансы һиңә лә* ***аҡыл ултырманы.*** (Һ. Дәүләтшина.)

2. Һабаҡ алып аҡылланыу. *«Был малай әҙерәк* ***аҡылына ултырғандыр»,*** *— тип уйлаған бай, Хисмәтулланы үҙенең яғына әкренләп ылыҡтырыу ниәте менән, Сәйҙеямал арҡыры бесән сабырға өмәгә саҡырҙы.* (Я. Хамматов.)

**аҡылға һалып** [ҡарау, уйлау...]. Бик яҡшылап, төптән уйлап ҡарау. *[Гөләйшә:] — Ошо тупраҡтың файҙаһын күрергә тырышмайбыҙ. Ҡуй инде,* ***аҡылға һалып уйлаһаң,*** *ғәжәп итерлек.* (К. Кинйәбулатова.)

**аҡылға (башҡа) һыймау (һыйҙырмау).** Килешерлек, зиһен менән ҡабул итерлек хәлдә булмау. *Хәрәкәтһеҙ тормошто* ***аҡылға һыйҙырып*** *булмай.* («Сов. Башҡ.») *Ошо көндә кешеләр-*

*ҙең эстәре бошмай, иөк артынан барыуҙарын пис* ***аҡылым һыйҙырманы.*** (Д. Юлтый.) *Вәлиулла яратҡан шағирының үлемен* ***башына һыйҙыра*** *алмай, бер нисә көн буйы аңҡы-тиңке йөрөгәйне.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Ғәзизулланың үлемен* ***башына һыйҙыра*** *алмай ул. Имәндәй ныҡ, һөлөктәй һылыу егет үлә тиме!* (Я. Вәлиев.)

**аҡылдан яҙыу (шашыу).** 1. Фекерләү һәләтен юғалтыу, аҡылһыҙланыу. *Бәһлеүән, Кейеҙбайҙы күргәс тә, был малай* ***аҡылдан яҙғандыр,*** *тип шарҡылдап көлә башлай.* (Әкиәттән.) *Йәш һалдаттар* ***аҡылдан яҙған*** *кеше һымаҡ, кәртәһеҙ күҙҙәре менән кешегә туп-тура ҡарайҙар...* (Д. Юлтый.) *...Был өмөт мине* ***аҡылдан яҙҙырыр.*** (З. Биишева.)

2. Насар кылыҡ ҡылған кешегә ҡарата аптырау тойғоһо менән әйтелә. *Аҡылдан яҙҙыңмы, әллә?! Аҡылдан яҙмағанһыңдыр бит.* ▬ *«Атаҡ, атаҡ, Айбулатҡа ни булған,* ***аҡылдан яҙғанмы,*** *алмаш булғанмы, әллә мал араһында йөрөп, шулай әрһеҙ булып киткәнме?»* (Һ. Дәүләтшина.)

**аҡылды йотоу.** Аҡыл менән эш итеү һәләтен юғалтыу, шашыныу. *Гитлер армиялары* ***аҡылдарын йотоп,*** *үҙ һалдаттарының һәм офицерҙарының кәүҙәләрен юлға түшәп, Мәскәүгә табан киләләр.* (Ә. Вәли.)

**аҡылды йыйыу.** Фекерҙе туплау, фекер тарҡаулығынан ҡотолоу. *Нинаның... «Их, мин һеҙҙе нисек яратам!» — тигән һүҙе һаман ҡолаҡта ине. Ләкин ул турала мин һаман* ***аҡылды йыйып*** *ала алғаным юҡ ине әле.* (Д. Юлтый.)

**аҡылды эсеү.** Хәмерҙән аҡылһыҙланыу *(күп эсеп ҡоторонған кешегә ҡарата әйтелә). Аҡылыңды эсеп йөрөмә.* ▬ *[Хисмәтулла:] Мин эсһәм дә,* ***аҡылымды эсмәйем,*** *еңгә.* (Я. Хамматов.)

**аҡылды юйыу (юғалтыу).** Аҡыл йөрөтөү һәләтенән мәхрүм булыу, аҡылһыҙланыу. *Эштең көтмәгәндә былаиға әйләнеп китеүе дошмандың бөтөнләй* ***аҡылын юйҙы.*** *Уның сафтары кире сигенә башланы.* (Д. Фурманов.)

**аҡыл етеү** *нимәгә, ни эшләргә.* Дөрөҫ кенә, уй менән эш итә белеү. *Аҡыл етмәү. Аҡыл етмәҫлек.* ▬ *Белмәйем, атай, һин аҡылдан яҙаһыңмы, әллә минең* ***аҡылым етмәйме?*** *... Әллә кемдәргә ышанып байлыҡ тапшыр...* (Һ. Дәүләтшина.) *Ҡайһы бер нәмәләрҙе алдан күрергә* ***аҡыл етмәне.*** *Тәбиғәттең үҙенсәлектәрен, колхоздың мөмкинлектәрен иҫәпкә алмау арҡаһында, бер нисә тапҡыр төп башына ултырылды.* («Сов. Башҡ.»)

**аҡыл инеү (кереү)** *кемгә.* Аҡылланыу, аҡыл менән эш итә башлау. *Донъя күрмәй* ***аҡыл инмәй*** *ата балаларына.* (Халыҡ йырынан.) — *Бикмырҙа ҡарт, һиңә ғүмерең буйына* ***аҡыл инмәне.*** (Т. Хәйбуллин.) *Артына штык менән ҡаҙай башлаһаң, тиҙ* ***аҡыл инә*** *ул [һалдатҡа].* (Д. Юлтый.) *Һаҡалына сал кергәнсе, башына* ***аҡыл кермәгән.*** (Мәҡәл.) *Акса бөткәс,* ***аҡыл керә.*** (Мәҡәл.)

**аҡыл итеү**. Уйлап ҡарау. *Инде ни **аҡыл итергә**? Хәҙер бабай, Ҡарасайҙы тоҡҡа һалып, әлеге урманға алып киткән.* (Әкиәттән.)

**аҡыл (иҫ-аҡыл) китеү**. Бик ныҡ аптырау, гәжәпкә ҡалыу. *Был әбей ... бер йәш ҡыҙға әүерелгән. Быны күреп, егеттең **аҡылы киткән**.* (Әкиәттән.)

*син.*: иҫ (һуш) китеү 2.

**аҡыллы баш** *мыҫҡ.* Башҡаларҙы оторға, алдарға тырышҡан кешегә ҡарата хәйләһен асҡанда әйтелә. *Хәҙрәттең һүҙен ишеткәс, һалдаттар геү килеп көлөшә башлай: — Ай-һай, хәҙрәт, **аҡыллы баш** икәнһең!* (В. Исхаҡов.) *Әллә колхозды һин гел гонаһһыҙ кешеләр йыйып торған хоҙай ожмахы тип беләһеңме? Бына **аҡыллы баш**!* (Б. Бикбай.) *Быны совет осорондағы бәғзе бер «**аҡыллы баштарҙың**» хатаһы тип атаныҡ.* («Йәшлек».)

*син.*: аҡылы(ң) алтын икән.

**аҡыл өйрәтеү** *кемгә.* Нисек йәшәргә, ни эшләргә кәңәш биреү. — *Әсәйең һорап-һорап та әйтмәһә, мин һиңә бер **аҡыл өйрәтәйем**, — тип был әбей Ҡуҙыйкүрпәскә бер хәйлә өйрәтте, ти.* (Әкиәттән.) *[Ғилман:] — Минең биш бала. Бишеһе лә кескәй. **Аҡыл өйрәтер** кешем юҡ.* (З. Биишева.)

*син.*: аҡыл биреү 1.

**аҡыл өләшкәндә өйҙә (урынында) булмаған (мейес башында ҡалған, һике аҫтында ҡалған).** Фекер йөрөтөү, аҡыл һәләте башҡаларҙан ҡайтышыраҡ; етешмәгән. ... *Атаһы **аҡыл өләшкәндә өйҙә булмаған**...* (Й. Гәрәй.)

*син. ҡар.*: аҡылы бер төрлө.

**аҡыл төшөү**. Башҡа берәй уй, фекер килеү. *Ә урманды сыҡҡас, нишләп үҙебеҙҙең ауылға көл тарттырып йөрөйөм һуң әле мин, күрше ауылға барып, картуфҡа алышайым, тигән **аҡыл** килеп **төшмәһенме**!* (Әкиәттән.)

**аҡыл һатыу**. Аҡыллы хәбәр һөйләп маташыу, белем булып башҡаларға өйрәтеү. *Ғәйебеңде сит кешегә һылтау — ул аҡланыу түгел, ә шулай ҙа йәшереп булмай: Беҙҙә әле серек **аҡыл һатып** йөрөгән әршиттәрҙең булғанын.* (Ғ. Сәләм.) *Студент Сөләй байтаҡ ҡына **аҡыл һатҡан** иҫерек баш менән.* (Б. Вәлид.) *Һәр кем һөйләй, һәр кем **аҡыл һата**, һәр кем үҙ көйөнсә көн күрә.* (Д. Юлтый.)

**аҡылы алтын (алтау) <икән>** *кемдең, мыҫҡ.* Үҙ файҙаһын ныҡ шаҡарған кешегә ҡарата, уның хәйләле һүҙенә ҡаршы әйтелә. *Әммә ғалим икәнһең, — мин әйттем, — **аҡылың алтын икән**. Һин иҫән ҡалһын тип, мин үҙ башымды юғалтмам.* (С. Агиш.) *[Собакевич:] «**Аҡылығыҙ алтын икән** — һикһәнешәр тин, имеш!»* (Н. Гоголь. Ф. Иҫәнголов тәрж.) — *Әлә-лә-лә... **аҡылың алтын икән**; Фәһим ҡырҡа кире ҡаҡты. — Уныһы минән булмай. Ат бирһәң — эшләйем, юҡ икән — юҡ.* (Ә. Гәрәев.)

*[Күсәрбай:] Эйе шул, бынауҙарҙың* ***аҡылы алтау икән,*** *ҡымыҙ ҙа алып кил, өҫтәүенә һалып та бир...* (М. Буранғолов.)

**аҡылы ҡыҫҡа (һай, таҡыр, аяҙлы-болотло)** *кемдең.* Төптән уйлай белмәгән, еңел аҡыллы. *Ир кеше бисәләре менән аҡыллаша торғайнымы? Уларҙың сәсе оҙон,* ***аҡылы ҡыҫҡа*** *бит ул.* (Һ. Дәүләтшина.) ***Аҡылға һай*** *— көскә бай, аҡылға бай — көскә һай.* (Мәҡәл.)

**аҡылыңды ел алһын.** Хәтерһеҙлеккә зарланғанда әйтелә. *Эй әттәгенәһе,* ***аҡылыңды ел алһын.*** *Кеше һымаҡ хәтерең бармы ни.* (Т. Хәйбуллин.)

**аҡыл эйәһе (тоҡсайы).** Бик аҡыллы. *Шәп кеше ул беҙҙең Дауытов,* ***аҡыл эйәһе!*** (Б. Бикбай.) *Етмәһә, үҙе Таибә инәй кеүек* ***аҡыл эйәһе*** *ҡатындың улы.* (З. Биишева.) *Ошо батша һарайына килеп, һинең кеүек* ***аҡыл эйәһенә*** *тап булмаһам, быны белмәҫ инем дәбаһа.* (Н. Мусин.) *[Кәбир:] Эйе, саф күңелле кешеләр. Ә ҡарт —* ***аҡыл тоҡсайы.*** *Иркенләп һөйләшергә әле ваҡыты булманы.* (Я. Вәлиев.)

**аҡ эт(тең) бәләһе ҡара эткә.** Ғәйепте ғәйепленән ғәйепһеҙгә ауҙарғанда әйтелә. *[Сәғитов:] — Ярай, һин улай, уҙаман, Совет власын бер һыпырыуҙан дегеткә буямай тор әле...* ***Аҡ эттең бәләһен ҡара эткә*** *ҡаплама.* (Й. Солтанов.)

**аҡ юл.** Юлға сыҡҡан кешегә әйтелгән яҡшы теләк. *Аҡ юлға! Аҡ юл теләү.* ▬ *Киттек, дуҫтар, тыуған яҡтан, ил беҙгә* ***аҡ юл*** *һуҙһын.* (Й. Ғәрәй.)

**ала бүләк* булыу.** Айырымлығы беленеп, күҙгә ташланып тороу. *Этҡолдоң өйө әллә ҡайҙан үҙенең матурлығы, байлығы менән ауылдағы башҡа өйҙәрҙән* ***ала бүләк булып*** *айырылып тора.* (Ғ. Дәүләтшин.)

[*Бүләк — уйпат ерҙәге, тау битендәге бер төркөм ағаслыҡ].

**ала ҡар.** Яҙ ҡар ирең, урыны-урыны менән ер асыла башлаған ваҡыт. *Ала ҡар етеү.* ▬ ***Ала ҡарҙа*** *аласағың булһын.* (Мәҡәл.) *[Хәсби:] Юҡ, юҡ, хәҙер үк ҡайт! Уйлап ҡара, быйыл яҙғы* ***ала ҡарҙан*** *бирле йортта ҡыл да ҡыбырлатҡаның юҡ бит.* (Ҡ. Даян.)

**ала ҡарға*.** Үҙенә оҡшаштар араһында бер яғы менән ныҡ айырылып торған кеше йәки берәй нәмә. *Шулай итеп үҙ курсташтарынан ситләшеп, бөтәһе өсөн дә «****ала ҡарға****»ға әйләнгән. [Алһыу.].* («Башҡ. ҡыҙы.»)

[Рус телендәге «белая ворона» берәмегенән].

**алап кеүек.** Килбәтһеҙ, оло кәүҙәле. *Ысынлап та, Рахманғол староста, ҡабыҡ* ***алап кеүек,*** *ҙур кәүҙәле, һонтор бер кеше.* (Ж. Кейекбаев.)

**ал белмәй, ял белмәй [эшләү].** Һис арымай, туҡтауһыҙ (эш менән булыу). *[Эшселәр]...* ***ал белмәй, ял белмәй*** *эшләнеләр. Көндө төнгә, төндө көнгә ялғанылар.* (И. Ғиззәтуллин.) **Ал(ды)-ялды белмәй:** ***Ал-ял белмәй,*** *көн-төн тимәй, оҙон юлдан арып-талып килеп етеүгә һыҙылып таң да атҡан.* (Ҡ. Аралбаев.)

*Ә һөнәрсе, гәҙәтенсә,* ***алды-ялды белмәй,*** *эшләүен дауам итә.* (З. Биишева.) *Салауатсылар ике көн буйы,* ***алды-ялды белмәй*** *күпер һалалар.* (Ә. Вахитов.)

**ал бирмәү**. 1. Бәйгелә, ярышта башҡаларҙы алға сығармау, беренселекте бирмәү. *Ҡола ҡашҡа* ***ал бирмәҫ*** *йүгерек булып сыҡты.* (С. Кулибай.) *Минең Ерәнде үҙең беләһең бит инде, Яҡуп дуҫ, бер бәйгелә лә* ***ал биргәне*** *булманы.* (Б. Бикбай.)

2. Эштә алдынғылыҡты бирмәү. *[Сәкинә:] ... Бына йәйләүгә барам,* ***ал бирмәй*** *эшләйем дә шундайҙарҙың танауына сиртәм.* (Н. Мусин.)

**алға алыу**. Маҡсат итеп ҡуйыу, ниәтләнеү. *Мин яҡташыма һоҡланып ҡарайым. Эйе, уйланымы,* ***алдына алдымы,*** *эшләй инде ул, һис һүҙһеҙ эшләй.* («Сов. Башҡ.») *Моратов* ***алдына алғанын*** *ҡуя торғандарҙан түгел ине.* (Н. Мусин.) *Бер нәмәне* ***алдына алһа,*** *Надирҙы кире күндереүе еңел түгел.* (М. Әпсәләмов.)

**алға сығармау**. Эштә, һүҙҙә башҡаларҙан өҫтөн булыу. *Зөлфирә менән һөйләшәбеҙ.* ***Алдына кеше сығармаҫ*** *ҡатын, тел тигәндә тетеп һала.* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: ал бирмәү.

**ал да гөл**. Бик яҡшы, бик шәп *(гәҙәттә, эш-хәлгә ҡарата). Бер заман инмәҫ борон Иблисләғин, торҙо инсан* ***ал да гөл,*** *һин дә мин.* (Ш. Бабич.) *Белмәҫһең, төн сыҡҡансы ат һарайҙарын* ***ал да гөл*** *итеп ҡуйҙырыр хәйләкәр председатель.* (Б. Бикбай.) *Сынбулатов, ҡыҙыл ылау менән фәләнсә йөк иген оҙаттыҡ, тип маҡтанды, колхозда эштәр* ***ал да гөл*** *бара, тип кенә әйтмәне.* (М. Тажи.) — *Эштәр* ***ал да гөл,*** — *тип яуап бирҙе бер аҙ һушын йыйып өлгөргән Хәлим Әгләмович.* (Я. Вәлиев.)

**алдағыны алла белә** *иҫк.* Киләсәктең билдәһеҙ икәнен белдереп, хәҙерге менән йәшәргә өндәп әйтелә.

**алдан алыу**. Эш-хәл, хәбәрҙе алдан уҡ үҙ файҙаңа бороп ҡуйыу. *Сөнәгәт шулай ҙа, был һорауҙы Фатима бирергә мөмкин бит, тип уйлап, уның* ***алдынан алды.*** (Ж. Кейекбаев.)

**алдан ҡалғансы** (ашау, ашатыу). Ныҡ туйғансы, ашай алғансы *(ашау). Зилский самауырҙы яңырттырып, кисә генә алып килгән аҡ күмәс, май, бер өйрәк бөкһәһен алып, туйғансы,* ***алдынан ҡалғансы*** *тәмләп-тәмләп ашаны.* (Ғ. Дәүләтшин.) *Бесән аҙ булһа ла малдар* ***алдарынан ҡалғансы*** *ашатыла.* («Сов. Башҡ.») *Байҙар, кәйеф-сафа ҡороп,* ***алдарынан ҡалғансы*** *тәмле-татлы ғына ашап, йәшәй бирә.* (Ж. Кейекбаев.)

*син.*: ғарҡ булғансы.

**алдан уҙыу**. Кешенең эшенә, теләгенә арҡыры төшөү. *Ҡулыңдағы ҡылысың, ай, һынмаһын,* ***алдарыңдан*** *дошман* ***уҙмаһын.*** (Халыҡ йырынан.)

**алды-артты ҡарамай(ынса)**. 1. Бик шәп итеп, бар көскә *(йүгереү, ҡасыу...). Ҡарағөлөмбәт ҡасып һинән тороп китте.* ***Алдын-артын ҡарамай*** *йүгереп китте.* (Эпостан.)

2. уйлап тормай (эш итеү).

*син.*: аңды-тоңдо ҡарамай (белмәй).

**алды-артты ҡаран (уйлап).** Ниҙән ни сығарын алдан тикшереп, уйлап ҡарап *(эш итеү). Байрамбикә әле йәш,* ***алдын-артын,*** *уңын-һулын* ***ҡарап,*** *уйлап йәшәргә өйрәнмәгән.* (Ш. Шәһәр.) *Хәҙер теге-был ергә исем ҡушҡанда ла ҡырҡ ҡат уйлап,* ***алды-артты ҡарап*** *эш итәләр.* (Н. Мусин.)

**алдынан арты <яҡшы, хәйерле...>** *һөйл.* Эргәнән киткәне, бергә булмағаны һәйбәтерәк. *[Нурый байҙар хаҡында:] — Тиҙерәк киткәнегеҙ,* ***алдығыҙҙан артығыҙ яҡшы,*** *һеҙҙән башҡа ла тора беләбеҙ әле.* (А. Таһиров.) *Ундай эш сыҡмаҫ, ... быуын кешеләргә беҙҙең Ҡуштирәктең һауаһы ла харам.* ***Алдынан арты!*** (Д. Исламов.)

*син.*: артына көл.

**алдына сығыу** *кемдең.* 1. Ярышта, алышта еңеү. *Алты йәшендә инде бер батыр ҙа Буҙансының* ***алдына сыға*** *алмаған.* (Әкиәттән.) **Алдына сығарыу** *кемде: Майҙандағы халыҡ бығаса берәүҙе лә* ***алдына сығармаған*** *ҡарсыҡты еңгән Һыңараяҡты ҡотлап, шау-гөр килгән.* (Әкиәттән.)

2. Өҫтөнлөк алыу. *Заманында Зәкиә инәйеңдең* ***алдына сығып*** *булманы. Һине боҙҙо. Ҡулын күңелеңә тыҡты.* (Ә. Вахитов.) *[Йәмилә — Баязитҡа:] — Һинең* ***алдыңа сығыу*** *ҡайҙа ул? Ырыу аҡһаҡалдары ла сыға алманы.* (М. Иҙелбаев.)

**алдың байыңды (өлөштө).** Берәй яңылыш эш-ҡылыҡтың ҡоһоро, зыяны үҙеңә төшкәндә әйтелә. *Кеше үлтереүҙә ғәйепләп, башыңды Себер ебәрһәләр,* ***алдың байыңды!*** (Б. Бикбай.) *Әгәр быяландың өрөүе еткәс, уны яҙатайым бер ергә алып барып төртһәң йә яңылыш ҡуйһаң,* ***алдың өлөштө:*** *ул сатнап ҡына ҡуймай, зылфараһы ҡалмай онтала.* (Ж. Кейекбаев.) ... *Бер ерҙән тупраҡ ишелеп төштөмө,* ***алдың өлөштө.*** (Я. Хамматов.)

*син.*: кәрәкте алыу.

**алйы-болйо булыу.** Иҫте йыя алмай аптыраныу. *Әхмәди йоҡоһона баш була алмай ахылдап,* ***алйы-болйо булып*** *ултырғанда, Һөллөй әбей килеп инде.* (Ж. Кейекбаев.)

**алҡымдан алыу** *кемдең, һөйл.* 1. Муйынға йәбешеп һөжүм итеү, һуғыша башлау. *Фатима ҡапыл уның* ***алҡымынан*** *һоноп* ***алып*** *ергә йыҡты...* (Б. Бикбай.)

2. Эштә, тормошта ҡаты ҡыҫымға алыу, ныҡ ҡыҫыу.

**алла белһен (белә)** *иҫк.* Бер кемгә лә мәглүм түгел, билдәһеҙ. *Был китап, бәлки, минең ғүмерем юлына тап булыр,* ***Алла белһен,*** *бәлки, тап тигән шәй аҡ булыр.* (Ш. Бабич.) *Шул үрем эсенән,* ***алла белһен,*** *ниндәй әмәл менән бер йәш саған төҙ булып күтәрелеп сыҡҡан да тәпәй-тәпәй япраҡтарын йәйеп ебәргән...*(Н. Гоголь. Ф. Иҫәнғолов тәрж.) *Алдағыны* ***алла белә.*** (Мәҡәл.)

**алла бирһә (ҡушһа, бойорһа, насип итһә.)** Эш-хәлдең, ниәттең уңышлы булыуын теләп, өмөтләнгәндә әйтелә. *Иртән,* ***алла***

*бирһә, бисәләрҙе лә саҡырып сығарһаҡ, өҫтән ҙур бер йөк төшкәндәй булып ҡалыр ине.* (Һ. Дәүләтшина.) ***Алла ҡушһа,*** *иҫән булырбыҙ, ҡушмаһа, үлербеҙ. Ҡайҙа ла үлем бер түгелме ни?* (Д. Юлтый.)

**аллаға тапшырып <ике ҡулды ҡаушырып>** *һөйл.* Ни булһа ла булыр инде тип, берәй эшкә тәүәккәлләгәндә, йәки яҙмышҡа бирелгәндә әйтелә. Тулы варианты шаярыу тойғоһон да бирә.

**аллаға һыйыныу**. Алланан ярҙам һорау. *Сергеев тағы ла суҡынып алды. Мин эсемдән генә* ***аллаға һыйындым.*** (Д. Юлтый.)

**аллаға (хоҙайға) тапшырыу**. Берәй эшкә тәүәккәлләгәндә әйтелә. *Үсе яман Ҡөлөмбәттең, батыр, тине, Тәүәккәлләп* ***хоҙаға тапшыр,*** *тине.* («Бабсаҡ менән Күсәк».) ... ***Аллаға тапшырып,*** *никах уҡыт(айыҡ)* ... (Һ. Дәүләтшина.)

**аллаға шөкөр**. Ҡәнәғәтлек, һөйөнөс, ризалыҡ белдергәндә әйтелә. ***Аллаға шөкөр,*** *яҡшы торабыҙ.* (Д. Юлтый.) *Быйыл* ***аллаға шөкөр*** *әле. Балалар ҙа, аҡ эсеп, әҙәм булып алдылар.* (Ғ. Дәүләтшин.) ***Аллаға шөкөр,*** *ҡәҙерем бар.* (Т. Хәйбуллин.)

**алланан йәйәү ҡасҡан**. Әрләү, яманлау һүҙе. *[Бисәһе Ямалиға:] — Һай,* ***алланан йәйәү ҡасҡан*** *нәмә. Үҙең һуң, үҙең... Көнөтөнө Баныу ҙа Маһиралар... янынан ҡайтмайһың бит.* (И. Насыри.)

**алланың <ҡаты> ҡәһәре һуҡҡыры** *һөйл.* Ҡарғау, ҡәһәрләү һүҙе. *Ана бер* ***алланың ҡәһәре һуҡҡыры*** *комсомолдары бар, ер аҫтында йылан көйшәгәнде беләләр.* (Ғ. Дәүләтшин.) *Утыҙ һум. Әҙ аҡсамы ни, бер ат хаҡы бит. Ҡайҙан алаһың ти уны.* ***Алланың ҡәһәре һуҡҡыр,*** *күҙ буяусылар.* (Һ. Дәүләтшина.)

**алланың ҡашҡа тәкәһе* <түгел>** *кем.* Бик ҡәҙерле; оронорға, ҡағылырға, һүҙ тейҙерергә ярамаған *(кеше). Үгеҙ эйәртеп гелән райкомға йөрөргә мин дә* ***алланың ҡашҡа тәкәһе түгел,*** *— тине Зөфәр...* (Х. Ғиләжев.) *Нурдәүләт мулла малайы тигәс тә, кем ул —* ***алланың ҡашҡа тәкәһе түгелдер*** *бит?!* (В. Исхаҡов.) **Алланың ҡашҡа тәкәһеме әллә:** *Нимә, улар* ***алланың ҡашҡа тәкәләреме*** *ни?!* (Ә. Атнабаев.)

[**дини:* алла хөрмәтенә ҡорбан итергә тәғәйенләнгән мал ҡашҡа булған, ул башҡаларынан өҫтөн һаналған, алла ундай ҡорбанды яратып ҡабул итә, тип уйланған].

**алланың рәхмәте киң** *иҫк.* Тынысландырыу, бошонмаҫҡа саҡырыу ниәтендә әйтелә. — *Ярар, бик борсолмайыҡ.* ***Алланың рәхмәте киң...*** (Һ. Дәүләтшина.) ***Алланың киң рәхмәтенә*** *тиң минең шәфҡәтем...* (Ш. Бабич.)

**алла рәхмәтенә китеү**. Вафат булыу, үлеү.

*син. ҡар.*: теңе донъяға китеү.

**алла хаҡы өсөн**. Бер үк *(бик үтенеп һорағанда әйтелә).* ***Алла хаҡы өсөн*** *ебәр инде.* ***Алла хаҡы өсөн*** *аҡса биреп тороғоҙ инде.*

**алла һаҡлаһын** *һөйл.* Ҡурҡыныстан һаҡланырға, бәлә-ҡаза шауҡымынан ҡотолорға тырышҡанда әйтелә. — *Мин башламаным, мин башламаным!* ***Алла һаҡлаһын,*** *әллә ниндәй бәләгә*

*тарыҡтыра күрмәгеҙ... — Мәгүҙә ялыныулы тауыш менән сәрелдәп ебәрҙе.* (Б. Бикбай.)

*син.*: хоҙай күрһәтмәһен.

**аллаһы әкбәр*** *һөйл.* 1. Үтеп киткән эш-хәл, бушҡа киткән нәмә, юғалған кеше хаҡында әйтелә. *Ай элек ун һум алғайны, **аллаһы әкбәр**, һаман юҡ.* (Һөйл.) *Был иҫәр, ялҡау ҡәләмде өҫтөрәкләп ҡулдарым, яҙғылай торғас китапты — **аллаһы әкбәр йыл ярым!*** (Ш. Бабич.) **Аллаһы әкбәр итеү** — юғалғаны, бушҡа киткәне менән килешеү.

2. Ҡәнәғәтлек белдергәндә әйтелә. ... *Ауылдың ярлыларында юҡ нәмәне булдырыу юҡ, бары менән «**аллаһы әкбәр**».* (Ғ. Хәйри.)

[**дини:* алланы ололау һүҙе, «алла бөйөк» мәғәнәһендә].

**аллаһы** әкбәргә [эшләү, йөрөү...]. Буштан-бушҡа, эш хаҡы алмай *(эшләп йөрөү). Сафый ағай әйтә, беҙ бында һеҙгә **аллаһы әкбәргә эшләргә** килмәгән, ти.* (Х. Ибраһимов.)

**алла ярҙам (ҡеүәт) бирһен.** Эш башлаған йәки баныҡарып торған кешегә әйтелгән теләк һүҙе. *Бик оҙаҡ һуғыштығыҙ инде. **Алла ярҙам бирһен.*** (Һ. Дәүләтшина.)

*син.*: beләгеңә көс, йөрәгеңә ҡеүәт; хәйерле сәғәттә.

**алма беш, ауыҙыма төш** *мыҫҡ.* Әҙерҙе генә көтөп торған кешегә ҡарата әйтелә. *Ҡайһы бер шиғырҙарҙа, боронғо хаҡында һүҙ барғанда, уҙғандар йыш ҡына нигеҙһеҙ ҡәһәрләнә йәки самаһыҙ маҡтала. Киләсәк иһә **алма бешеп, ауыҙға төшөп** торған бер ожмах төҫләрәк күҙ алдына баҫа.* (Р. Бикбаев.) ***Алма төшөр, бешеп ауыҙҙарға**, кем байыған, тибеҙ, эшләһә лә, ҡырын тейәп, төтөн бөркә-бөркә, фырт баҫабыҙ, башта — эшләпәләр.* (Р. Йәнбәк.) *«**Алма беш, ауыҙыма төш**», тип ятһаң, ас ҡалыуың да бик ихтимал.* (Ғ. Аллаяров.)

*син.*: әҙергә бәҙер булыу.

**алма кеүек.** Бик матур йөҙлө. *Сәңгелдәктә миңә көлөп ҡарай **алма кеүек** матур бала.* (Ғ. Әмири.)

**алмаған (үлтермәгән, атмаған) айыуҙың тиреһен тунау.** Ҡулға төшмәгән нәмәне алдан бүлешеү.

**алмаш булыу.** Аҡыл, иҫ бутала башлау; алмашыныу. *Атаҡ, атаҡ, Айбулатҡа ни булған, аҡылдан яҙғанмы, **алмаш булғанмы?*** (Һ. Дәүләтшина.)

*син.*: инәле-сығалы булыу.

**алтмыш (алты) ауыҙ** *һөйл., яманл.* 1. Ҙур ауыҙлы кеше.

*син.*: ауыҙы арандай.

2. Ауыҙында һүҙ тормаған, юҡ-бар хәбәрҙе йөрөткән кеше; ғәйбәтсе.

*син.*: иләк ауыҙ, урам ауыҙ.

**алтын бағана (ҡаҙыҡ).** Тормошта таяныс, терәк булырҙай, ышанысла кеше. *[Ғәҙелниса әбей] Ейәненә ҡарап, һоҡланып бөтә алмай: — Быuna ниндәй ул минең уңғаным, минең тынсылым! Эшләгәндә йөрәккәйҙәре елкенеп тора бит уның! Таяныр*

***алтын бағанам** минең...* (М. Кәрим.) — *Маладис, улым, егет икәнһең. Атай нигеҙендә **алтын ҡаҙыҡ** булырҙайһың.* (Й. Солтанов.)

**алтын ҡуллы.** Үҙ эшенең оҫтаһы, бик оҫта кеше. *Ниндәй оҫта, **алтын ҡуллы** кеше [Килмәт]. Томаналығы арҡаһында ситтән ҡараусы гилемле кеше көлкөлө хәлгә төшә.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Эшләгән еренда үҙен «**алтын ҡуллы** мастер» тип, күтәреп кенә йөрөтмәйҙәр ине.* (Ф. Әсәнов.) **Ҡулы алтын** *кемдең.* Ҡулынан бар эш тә килә. *Ул саҡ, әсәй, белмәй инем әле **Алтын** икәнлеген **ҡулыңдың**!* (Р. Ғарипов.) *Оҫтамдың ҡулы буш булмаһа, шул етте. Ә ҡулы!* **Ҡулы алтын**, ҡәһәрҙең. (Ә. Хәкимов.) *[Барый:] Молодец, ҡустым, молодец. Бик һәйбәт булған. Ысынлап та, **ҡулың алтын** икән, Кәрим.* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: бармағынан бал тама.

**алыҫ ерҙе (араны, юлды) яҡын итеп [килеү].** Ара алыҫлығына ҡарап тормай, бик теләп, яҡын күреп *(килеп етеү). Бына ошоно уҡып сығыуҙы беҙ **алыҫ ерҙәрҙе яҡын итеп** килгән хөрмәтле Ғәйнулла муллаға тапшырабыҙ.* (Һ. Дәүләтшина.) ***Алыҫ ерҙе яҡын итеп**, ауыр юл ғазабын күреп килгән ҡунаҡтарҙан ауыл халҡы бик ҡәнәғәт булды.* («Сов. Башҡ.»)

**алыҫ* йөрөйһө түгел.** Табыуы, күрһәтеп биреүе еңел булған эш-хәл хаҡында әйтелә. *Етешһеҙлектәрҙе эҙләп **алыҫ йөрөйһө түгел**.*

**[* Рус телендәге «далеко ходить не надо» берәмегенән.]**

**алыҫ (әллә ҡайҙа) китмәгән** *кәмһ.* Береһе икенсеһенән нык айырылмаған, оҡшаған *(аҡыл кимәле, холҡо һ. б. менән). ... Дәүләттең яуаплы эштәрен башҡарыусы кешеләр ҙә ошо Коробочканан бер ҙә **алыҫ китмәгән** була бит.* (Н. Гоголь. Ф. Иҫәнғолов тәрж.)

**алыҫ китмәҫ.** «Килер, башына төшөр» мәғәнәһендә *(көлгәнгә яуап итеп.) — Көлмә, ҡустым, ул рәнйеү һинән дә **алыҫ китмәҫ**, — тине Мөстәҡим ҡарт.* (С. Кулибай.)

**алыҫтан алдырыу.** Уратып-суратып һөйләү. *Үҙенә хәс тә ололар шикелле ҡул биреп күрешәләр, **алыҫтан алдырып**, уратып ҡына һүҙ башлайҙар.* (Й. Солтанов.)

**алыҫ киттең** *кемдән нимә.* Ҡасмаҫ, ҡағылмай үтмәҫ, үҙеңә лә килер *(төрлө хәлгә ҡарата).*

**ана бара (тора) юлы** *һөйл.* Теләһә ҡайҙа китһен *(«көсләп тотмайым» тигәнде белдереп, асыу менән әйтелә). Улының томанаҡһыҙлығына асыуы ҡабарған өлкән Трофимов түҙмәне, үҙен үҙе онотоп, ишеккә күрһәтте. — Улай булғас, **ана бара юлың**!..* (Я. Хамматов) *[Бай ялсыға:] Китәм тиһәң, **юлың ана тора**!.. Йөрөһәң, эште еренә еткер! — ти.* (М. Ғафури.) *[Мулла:] — Әгәр ҙә балаң улай итеп башбаштаҡланып йөрөй икән, **ана тора юлы**.* (Һ. Дәүләтшина.)

*син.*: артына көл.

**ант башҡа етеү (төшөү).** Антты тотмаған өсөн ҡаза килеү, үтәлмәгән анттың язаһын алыу. *Был һүҙҙәрем өсөн мөәзин әрләп ҡуйҙы: — Ҡарғанма, ҡәһәр һуҡҡыры, **антың башыңа* етер**, эсең ярылып үлерһең.* (С. Агиш.) *Үс алмаһам дошмандан, **антым етһен башыма.*** (Халыҡ йырынан.) — *Ант итмә. Бирһәң, былай ғына бир. Юғиһә, **антың башыңа төшөр.*** (М. Кәрим.)

**аң булыу.** Һаҡ тороу, абай булыу. *[Мулла Сафа хәлфә хаҡында ҡарттарға:] — **Аң булығыҙ**, былай булһа, ул балаларығыҙҙы диндән яҙҙырып бөтөрөр.* (С. Ҡудаш.) *[Хаммат:] — Уныһы ла дөрөҫ. Шулай ҙа бында ла бик **аң булырға** кәрәк.* (З. Биишева.)

**аңға килеү.** 1. Аңһыҙ хәлдән үҙ аңына ҡайтыу. *Карауат аҫтында ятҡан Гәрәй үҙ **аңына килде** һәм, үҙен һаҡларға теләп ҡулына бысаҡ алды.* (Б. Бикбай.) *'Ҡаты йоҡонан уянған кеүек ҡапыл уяндым, **аңға килдем.*** (Д. Юлтый.)

2. Аҡыл менән эш итә башлау. *[Тәңкәбикә:] — Һин аҡылыңдан яҙғанһың, Дәрүиш. **Аңыңа кил.*** (М. Кәрим.)

*син.*: аҡылға килеү, иҫкә килеү.

**аңды йыйыу.** Уй-фекерҙе туплап алыу. — *Ә балаларҙы ҡайҙа ҡуяһың? — тине ҡарсыҡ, **аңын йыйып.*** (Р. Низамов.)

**аңҡы-тиңке булыу (килеү).** Ҡаңғырып аптырап бөтөү, алйыу. *Күҙле-башлы булһа, бәлки, улым да баҫылыр ине. **Аңҡы-тиңке булып** йөрөмәҫ ине...* (Я. Хамматов.)

*син.*: ҡайҙа барып бәрелергә белмәү, ары бәрелеү, бире һуғылыу.

**аң-тоңдо ҡарамай (белмәй).** Эш-хәлдең айышын белмәй, уйлап-нитеп тормай *(эш итеү). **Аң-тоңдо ҡарамай** барып индем. **Аң-тоңдо белмәй** ҡыҫылаһың.*

*син.*: алды-артты ҡарамай(ынса).

**аптырағанға (шаҡ ҡатҡанға) юл ҡайҙа!** Ҡайҙа китергә белмәй аптырап тик торған кешегә ҡарата көлөп, шаяртып әйтелә.

**араға боҙло (һалҡын) һыу һибеү.** Икәү-ара булған яҡын мөнәсәбәтте, дуҫлыҡты боҙоу.

*син.*: араға тараҡан булып инеү.

**араға инеү (кереү).** 1. Берәй кешене яҡлау, ситләтеүҙән ҡурсалау. *[Тәңкәбикә:] Ярай. Ниткән эш ул — бөтәгеҙ ҙә шул Ялсығолдоң **араһына керәһегеҙ**. [Шәфәҡ:] Ҡыҙғаныс бит. Бер башына ҡәҙер юҡ, бахырҙың.* (М. Кәрим.)

2. Кешеләрҙең үҙ-ара мөнәсәбәтенә ҡыҫылыу, бәйләнештәрен боҙоу. *Дошман араға инде.*

**араға ҡыл да һыймай.** Үҙ-ара бик дуҫ кешеләр хаҡында әйтелә. *Уларҙың араларына **ҡыл да һыймай.***

*син.*: аранан ел дә үтмәй.

*ант.*: аранан ҡара бесәй үтеү.

**араға тараҡан булып инеү.** Кемдәрҙеңдер дуҫлыҡ мөнәсәбәтен боҙоу, араларын бутау. ... ***Арабыҙға** берәү ҡара **тараҡан***

***булып инде.*** *Ул үргә остағы алмасы Каршин Степан ҡарттың улы Михай.* (В. Исхаҡов.)

**арам ҡатҡыры** *һөйл.* Әрләү һүҙе. — *Ҡайҙа боролдоң, бәррә! Уй, **арам ҡатҡыры!*** (Һ. Дәүләтшина.)

*син.*: ҡаҙалып киткере, муйының әйләнгере.

**араларынан һыу үткеһеҙ.** Бик татыу. *Ҡолош мулланы әйтәм, үҙе оло булһа ла, **арағыҙҙан һыу үткеһеҙ** татыуһығыҙ.* (Т. Хәйбуллин.)

**аранан ел дә үтмәй (үтмәç, үтерлек түгел).** Яҡын дуҫ булған кешеләр хаҡында әйтелә. *Беҙ Мәғҙән менән, ай-һай, ниндәй дуҫтар инек. **Арабыҙҙан ел дә үтерлек** түгел ине.* (М. Кәримов.)

*син.*: араға ҡыл да һыймай.

*ант.*: аранан ҡара бесәй үтеү.

**аранан ҡара бесәй үтеү.** Икәү-ара ыҙғышыу, дуҫлыҡ мөнәсәбәте боҙолоу. *Ошо көндән алып, ике күрше **араһынан ҡара бесәй үтә,** татыулыҡ китә.* («Сов. Башҡ.») *Институтта Мөршиҙә менән Әнүәр икеһе бер группала уҡыны, бергә диплом спектакләндә уйнанылар, яратышып өйләнештеләр. Бына ике йыл йәшәгәс, **араларынан ҡара бесәй үтте.** Айырылыштылар.* (Д. Бүләков.)

*ант.*: араға ҡыл да һыймай, аранан ел дә үтмәй.

**арба менән ҡуян ҡыуыу.** Берәй дыуамал ҡылыҡ ҡылыу, килешмәгәнде эшләү. *Быны кеүек дыуамал кешене элек: «**Арба менән ҡуян ҡыуған**», — тиҙәр ине.* (М. Кәрим.) *Йүнһеҙ һунарсы **арба менән ҡуян ҡыуған.*** (Мәҡәл.)

**арбаһына ултырыу** *кемдең.* Берәй кешенең һүҙенән сыға алмау, уныңса ғына эшләү. — *Дөрөç, Зариф ағай, ә һин уларҙың береһененең дә **арбаһына ултырмағанһың.** Һәр ваҡыт үҙ арбаңда йөрөгәнһең. Кеше **арбаһына ултырһаң,** кеше йырын йырлаған булыр инең.* (С. Агиш.) ... *Ауыл халҡы Аллаяр **арбаһына ултырырға,** ултырғас инде, мәғлүм, уның йырын йырларға мәжбүр.* (Ф. Иçәнғолов.)

*син.*: йырын йырлау, көйөн көйләү, ҡурайына бейеү*.

[*Түбәндәге мәҡәлдең бер өлөшө: кемдең арбаһына ултырһаң, шуның йырын йырларһың.]

**арҡа (арт) биреү.** 1. Боролоп артты ҡуйыу. *Гөлйөҙөм башта уның былай **арҡа биреүенән** уңайһыҙланып баçып торҙо.* (Һ. Дәүләтшина.) *Елгә ҡаршы тора алмай, — йәш ҡолонсаҡ **бирә артын.*** («Ҡаҙаҡ шағирҙары».)

2. Боролоу, ситләшеү. *Һис быларҙың етмәне ул ҡәҙеренә, Етмәһә, **арт бирҙе** тәңре әмеренә.* (Ш. Бабич.)

3. Артҡа сигеү, ҡасыу. *Барырмын һәр ваҡыт алға, һуғышта **бирмәмен арҡа.*** (М. Ғафури.)

**арҡаға бысаҡ ҡаҙау.** Көтмәгәндә мәкерле һөжүм итеп, ауыр хәлгә ҡуйыу. *[Юлыш:] Сәсрәгере! **Арҡаға бысаҡ ҡаҙаны,** Хыянатының әжере ун тиçтә йылҡы булһын!* (Ә. Хәкимов.) *Бәғзе әҙәм йылмая ла **Бысаҡ ҡаҙай арҡаға.*** (Ҡ. Әлибаев.)

**арҡа йылытыу (ҡыҙҙырыу).** Эшләмәй тик йөрөү. *Арҡа йылытып ятыу.*

*син.*: ҡырын ятыу, түбәгә төкөрөп ятыу, ҡул ҡаушырып йөрөү.

*ант.*: *тир түгеү.*

**арҡанан һөймәҫ(тәр).** Яҡшы булмаҫ, хәүефһеҙ үтмәҫ *(гәйепте һиҙеп, хафа белдергәндә әйтелә). [Мырҙағол:] Белгән өҫтөнә әйтмәй йөрөгән өсөн минең дә **арҡамдан һөймәҫтәр...*** (Б. Бикбай.)

*син.*: баштан һыйпамаҫтар.

**арҡан буйы** *фольк.* Сығып бер аҙ күтәрелгән, йәки байыу яғына ауышҡан ҡояшҡа ҡарата әйтелә. ***Арҡан буйы күтәрелеү.*** — *Ҡояш Ямаш тауы артына йәшеренергә **арҡан буйы** ғына ер ҡалғас, бер автомашина, оло юлдан боролоп, Ғибадулла йорто яғына йүнәлде.* (Н. Мусин.)

**арҡанлап тотоу** *кемде.* Кешене эргәнән ебәрмәү, үҙ янында ғына тотоу. ***Арҡанлаған кеүек тотоу. Арҡанлап ҡуйған кеүек.*** — *Башың ҡайнә йортона бер барып инһә, йөрөй бирәһең. Унан баласаға була. **Арҡанлап ҡуйған** һымаҡ булаһың да ҡуяһың.* (Ж. Кейекбаев.)

**арҡаны терәү.** Таяныс табыу, ышаныслы яҡлаусы булдырып алыу. Арҡаны ныҡҡа терәп алыу. — ***Арҡа терәр** кешең булһа ғына, рәхәт икән ул донъя көтөүҙәре.* (З. Ҡаҙаҡбаева.)

**арҡа терәп [һөйләшеү]...** . Артыңда таяныс һиҙеп, ышаныс менән *[һөйләү, яуап биреү...]. Строганов ыҡ-мыҡ итте, нимәлер мығырлап маташты, ләкин яуап таба алманы. **Арҡа терәп** яуап бирерлек урын юҡ ине уға.* («Сов. Башҡ.») *Беренсе осрашыуҙан уҡ ҡыҙып китеп бара. **Арҡа терәп** һөйләшергә өйрәнеп алған, имеш.* (Ә. Бикчәнтәев.)

*син.*: аяҡ терәп [һөйләшеү].

**арҡа таянысы (терәге).** Ныҡлап ышанырҙай, таяныс булырҙай кеше. *[Мозой:] Дәртле егеттәр бар ул... Бына уларға **арҡа таянысы** юҡ. Халыҡ бер ауыҙҙан торһа, хәҙер улар эште дөрөп алып китергә торалар.* (Д. Юлтый.) *Бына бит ул, күмәкләшкәс, ҡалай күңелле булып китте. **Арҡа таянысыбыҙ** бар икән!* (Й. Солтанов.) *Башҡорт иленең терәге, **арҡа таянысы** Салауат Юлай улы Аҙналин.* (С. Мираҫ.)

**арҡа һөйәкһеҙ.** Ышанысһыҙ, үҙ һүҙендә тора белмәгән. *Хат тарҙа биргән вәғәҙәләрендә тормаусы **арҡа һөйәкһеҙ** кешеләр тураһында... аҙылғайны.* («Сов. Башҡ.») *Малай сағынан уҡ әллә песек шулай **арҡа һөйәкһеҙ** булды Закирҙың ҡылығы.* (З. Биишева.)

**арҡыры аяҡ** *һөйл.* Лап-лоп баҫып, килбәтһеҙ атлаған кешене хурлау һүҙе. *[Сәхибә] мулланы әрләне: — Ҡарт мулла, оятһыҙ мулла. Һаҡалы ағарған, төпөш, көмрө, **арҡыры аяҡ...*** (Г. Хәйри.)

**арҡырыны буй (буйға) һалмау.** Бер ни ҙә эшләмәү, тик ятыу. *Ғүмер буйҙарына* ***арҡырыны буйға*** *алып* ***һалмаған*** *кешеләрҙең кәүҙәләре шулай булмай нисек булһын? (М. Ғафури.) Колхоздыҡы булдымы —* ***арҡырыны буйға*** *әйләндереп* ***һалмаҫ*** *улар.* (Ш. Насыров.)

*син. ҡар.*: арҡыры ятҡанды буй <ҙа> һалмау.

**арҡыры (ҡаршы) төшөү.** Кешенең теләгенә, ниәтенә, эшенә ҡаршы килеү. *Әле был йырға ҡаршы йәштәр: — Әйҙә, беҙ ҙә ҡаршы йырлайыҡ, моғайын, беҙҙең кешелер, — тиһәләр ҙә, Әмиров* ***ҡаршы төштө.*** (Һ. Дәүләтшина.) *Шәрәфиҙең осло күҙе, тура һүҙе шөрләткән уны [старшинаны], юлына* ***арҡыры төшөүсене*** *аҫтыртын юҡ итергә самалаған.* (Б. Бикбай.) *Ниғмәтулланың тиҫкәрелеген, юлына* ***арҡыры төшәсәген*** *алдан уҡ белде управляющий...* (Я. Хамматов.)

*ант.*: юл ҡуйыу.

**арҡыры ятҡанды (ағасты, сүпте) буй <ҙа> һалмау.** Бер ни ҙә эшләмәү, тик ятыу. *Беҙҙең Гүзәл өйҙә* ***арҡыры ятҡанды буй ҙа һалмай.*** *Балалыҡҡа уның эсе бошмай.* (З. Биишева.) *Фатиманың ҡәйнәһе һәм бикәләре йорт эсендә* ***арҡыры ағасты буй ҙа бороп һалманылар.*** *Улар тик бойорорға ғына беләләр.* (Ж. Кейекбаев.) *Әбелғәлләмов ветеринарҙан зарланып алды: — Әллә ниндәй кеше ул. Артыҡ һалҡын, бер ҙә көйөнә, бошона, яна белмәй.* ***Арҡыры ятҡан ағасты буй ҙа*** *алып* ***һалмаҫ.*** (С. Агиш.) **Буй ятҡанды (ағасты, сүпте) арҡыры һалмау:** *Көнһылыу улай итеп бөксәнләп йөрөү түгел,* ***буй ятҡан сүпте арҡыры*** *алып* ***һалмаҫ.*** (Һ. Дәүләтшина.)

*син.*: арҡырыны буй һалмау, ҡыл да ҡыбырлатмау, бот күтәреп ятыу, ҡул ҡаушырып [йөрөү], йөн тибеү.

*ант.*: ең һыҙғанып [эшләү], ал-ял белмәү.

**арлы-бирле булыу.** 1. Бер төрлө күңелле хәлгә килеп алыу. *Ҡунаҡтар ҡымыҙ эсеп,* ***арлы-бирле була*** *башланы.* (Һөйл.)

2. Ауыр хәлгә төшөү, ҡыйынға ҡалыу. *[Яланбикә:] Исхаҡ ағайың* ***арлы-бирле булғанса,*** *бал эсереп шымсы Ширәйҙе иҫертербеҙ, ти.* (Һ. Дәүләтшина.)

**арлы-бирле итеү.** Бер ни тиклем эште бөтөрөү *(гәҙиттә, ваҡ-төйәк эш хаҡында). Фермаға килеп* ***арлы-бирле итеүгә,*** *һәнәгән тотоп, Бәкер Миңнеғолов та килеп етте.* («Сов. Башҡ.») *Ҡайтып* ***арлы-бирле иткәнсе,*** *[Сәлмән ағай] минең Зөләйхә менән нисек танышҡанды хозяйкаға һөйләне лә бирҙе.* (Т. Йәнәби.)

**арманһыҙ булыу.** Бик ныҡ арыу, хәл бөтөү. *Зөлҡәрнәй киске һыуһындың һуңғы сәғәттәрендә арып,* ***арманһыҙ булып*** *йығылды.* (Ғ. Дәүләтшин.)

*син.*: хәлдән тайыу, ҡара тиргә төшөү, телде арҡыры тешләрҙәй булыу, үлемесле булыу, һыу эскеһеҙ булыу.

**арпа эсендә бер бойҙай.** Башҡалар араһында ни менәндер ныҡ айырылып торған кеше.

**арт биреү**. Ҡасыу. *Юденич тамам еңелеп,* ***арт бирә*** *башлай. Ҡаҡшаған хәлдә кире артҡа сигенә.* (Ғ. Ибраһимов.) *Тауға ҡарап тау булмаһаң да, яуға ҡарап* ***арт бирмә.*** (Мәҡәл.)

**арттан төшөү**. Етешһеҙлеген, гәйебен асып, ҡыҫымға алыу. *Ҡышҡы бурандар, яҙғы бысраҡ беҙҙең ашламаларҙың кәрәген бирҙе. Тик райком* ***арттарынан төшкәс*** *кенә, ташый башланылар.* (Д. Исламов.)

**артты йыйыу**. Ғәйепте йәшереү. *Склад мөдире* ***артын йыйыр-ға*** *тырышып ҡараһа ла, булманы, барыбер өҫтөнә сыҡты.* (Һөйл.)

*син.*: эҙҙе йәшереү.

**арт һабағын уҡытыу** *кемдең.* 1. Бик ҡаты әрләү, ҡыҙҙырыу. *Яйы тура килгәндә... Байгилдиндың* ***арт һабағын уҡытырға*** *теләк бик көслө булһа ла, бында ла Әмир хаҡлы һымаҡ ине.* (Х. Ғиләжев.) *Аҡназаров ... тегеләрҙе ҡыҙҙырырға самаланы, клубтан сыҡмайһығыҙ, эшегеҙ артта ҡала, тип* ***арт һабаҡтарын уҡытмаҡсы*** *булды.* (Ә. Вәли.)

2. Тән язаһы биреү; туҡмау, ҡайыҙлау. *...Ҡайтырһың әле ...* ***арт һабағыңды уҡытмаһаммы,*** *— ти, был ҡыҙып-ҡыҙып.* (Ә. Зәйнуллин.) *Шул саҡ ейәненең төҫ-башын текләп алды. Нисектер артығыраҡ* ***уҡытҡан*** *һымаҡ тойолдо* ***арт һабағын,*** *сөнки күҙ төйәге эскә өңөлөп, йөҙө ҡарайып киткәйне.* (Р. Байбулатов.)

*син.*: иҙмәһен иҙеү, һырт ҡайышын алыу.

3. Ауыр хәлгә ҡуйып, тормош һабағы биреү. — *Ну, хәҙер ҡаҙан ҡорһаҡ байҙар түҙеп кенә торһон.* ***Арт һабаҡтарын уҡытасаҡбыҙ...*** (З. Биишева.) *[Садовский:] Теге ҡарт боласы Ҡормоймо ни әле был? Ҡуй, һөйләшеп шул йолҡош менән. Тағы* ***арт һабағын уҡытырбыҙ*** *әле!* (Б. Бикбай.)

*син.*: күрмәгәнде күрһәтеү, кәрәген биреү, тетмәһен тетеү.

[*Иҫке мәктәп тормошонан ҡалған: үткән һабаҡты, ҡабатлағанда белмәһәң, ҡаты әр, хатта сыбыҡ та эләккән.]

**артыҡ бүрәнә башы**. Эшкә, тормошҡа һ. б. ҡамасаулыҡ итеп торған, кәрәкмәгән кешегә ҡарата әйтелә. *[Ҡормой Шатморатҡа:] Ярай, мин китәйем инде. ...* ***Артыҡ бүрәнә башы*** *булмайым, хуш хәҙергә.* (Б. Бикбай.) *Арбала* ***артыҡ*** *бер* ***бүрәнә башы*** *булыу сәбәпле, Хәбибулла ла, Сөнәғәт тә кисә һөйләгән һүҙҙәргә ҡайтманылар.* (Ж. Кейекбаев.)

**артына(-ңа) көл** *кемдең, һөйл.* Эргәнән китеүе хәйерле; кире әйләнеп килмәһен.

*син.*: алдынан арты [яҡшы, хәйерле].

**артынан төшөү**. Ҡыҫымға алыу. *Ҡышҡы бурандар, яҙғы бысраҡ беҙҙең ашлыҡтарҙың кәрәген бирҙе, тик райком* ***арттарынан төшкәс*** *кенә, ташыта башланылар.* (Д. Исламов.)

**арт яғы еүеш** *кемдең, һөйл.* Ғәйебе бар. *Судья матур һүҙ һөйләргә бик оҫта, ә үҙенең* ***арт яғы еүеш.*** *Уның үҙ улын да кисә ҡулға алғандар.* (Х. Зарипов.)

**ары бәрелеү, бире һуғылыу.** Ауыр хәлдән сыға алмай ыҙаланыу, ҡаңғырыу. *Бахыр Аҡнаҙар **ары бәреләә, бире һуғыла**, бер нәмә лә сыҡмай...* (Әкиәттән.) ... *Зәйтүнә лә, ни эштәргә белмәгәндәй, китергә әҙерләнде, ләкин ул **ары бәрелде, бире һуғылды**, кейенә алмай аптырап бөттө.* (Ғ. Ибраһимов.) **Ары һуғылып, бире бәрелеү (һуғылыу):** *Миҙхәт, ни эштәргә белмәй, **ары һуғылып, бире бәрелеп**, йөрөнө* («Сов. Башҡ.») ***Ары һуғылып, бире һуғылып** та аҡса табыр әмәл тапмағас, ул Зәйнәптең сулпыларын ҡырҡып, илтте һарай һалыр аҡсаға.* (Р. Бикбаев.)

*син.*: аңҡы-тиңке булыу, ҡайҙа барып бәрелгәнде белмәү.

**арыҫлан йөрәк(ле).** Ҡурҡыуҙың ни икәнен белмәгән, бик ҡыйыу. *Аһ, Бураншa, Бураншa! Бөркөт күҙле, **арыҫлан йөрәкле** Бураншa!..* (З. Биишева.) *[Ғафури Туҡай тураһында] **Арыҫлан йөрәкле** кеше был тип уйланы.* (С. Ҡудаш.) — *Хөрмәтле әфәнде, һине үҙ өйөмә саҡырам. Һинең кеүек **арыҫлан йөрәкле** иргә урын түрҙән...* (Я. Хамматов.)

*син.*: ҡуш йөрәк(ле).

*ант.*: ҡуян йөрәк(ле).

**ары торһон.** Бер нәмәнең икенсеһенән өҫтөнлөгөн һыҙыҡ өҫтөнә алғанда әйтелә. *Татыу булһа ҡатының, **ары торһон** алтының.* (Мәҡәл.) *Ҡаршы ярҙағы һандуғастар әйтешенә урман кәкүгенең моңо ҡушылһа — теләһә ниндәй симфонияң **ары торһон** был мәлдә.* («Сов. Башҡ.»)

**арыу булыу.** 1. Бер аҙ һауығыу, шәбәйеү. *Яңыраҡ ҡына **арыу булды** әле ул, оҙаҡ ятҡайны.* (Һөйл.)

2. Кешегә ауырлыҡ килгәндә үсәп әйтеү. *«Бик **арыу булған**, хоҙай һуҡҡан! — тине, — ошо хәл һиңә кәрәк күптән, — тине...»* (Ш.Бабич.)

*син.*: яҡшы булыу.

**арыш боламығы** *һөйл.* Үтә йомшаҡ, бешмәгән кешегә ҡарата әрләү һүҙе. *[Йыһан Ғилмигә:] Йөрө инде кеше көлдөрөп **арыш боламығы** менән.* (Х. Ибраһимов.) *Ай боламыҡ, **арыш боламығы**, нимә күрһәтә алаһың, ти һин? Быуыныңда ҡатып өлгөрмәгән бала әтәс бит әле һин.* (И. Ғиззәтуллин.)

**арыһы ни ҙә биреһе ни.** Нимәнең ни айырмаһы бар *(кешене нимәгәлер өгөтләп күндерергә тырышҡанда әйтелә.). — Ҡуйсы инде, шулай тигән һүҙ буламы! Бер сәғәттең **арыһы ни ҙә биреһе ни**. Самауырым хәҙер ҡайнай.* (Һ. Дәүләтшина.)

**асауай һалыу.** Ярҙам һорап бик ҡаты ҡысҡырыу.

*син.*: яр һалыу, һөрән һалыу.

**ас бет** *һөйл., яманл.* Аслы-туҡлы ғына йәшәгән ярлы кеше.

**ас күҙ(ле)** *һөйл., яманл.* 1. Ашауҙан туя белмәгән кеше; асҡаҡ, аскернә. *[Камилә:] — Бына **ас күҙ**, ғүмерҙә туймаҫтай ҡылан-ғайның, туйҙырған бит үҙеңде сүпрәң.* (Ғ. Ғүмәр.) *Баш өҫтөндә ни түбәң юҡ, **Ас күҙҙәр** һиңә ҡарайҙар.* (М. Кәрим.)

2. Үтә ҡомһоҙ. *Ҡыҫҡаһы, ер һатыла, наҙан, ләкин ҡырағай, хәйләкәр,* ***ас күҙ*** *түрәләрҙе помещик алдай...* (Б. Бикбай.) ... *Байҙар, муллалар аяҡ аҫтында уралып, байырға, улар рәтенә инергә көсәнеп йөрөгән арыҡ, ҡомһоҙ,* ***ас күҙле*** *йәш бер егет булған.* (З. Биишева.)

*син.*: ас мәйел.

**ас ҡарынлай (ҡарынға).** Тамаҡ ас көйө. *Ас ҡарынға дарыу эсеү.*

**ас тамағым, тының ҡолағым.** Эшләп, ризыҡ йүнләп мәшәҡәтләнге килмәгәндә үҙен үҙе тынысландырыу өсөн әйтелә. *Нимәгә былайтып әрләнә-әрләнә йөрөйөм мин бында,* ***ас тамағым, тының ҡолағым.*** *Ҡайттым киттем. Бутта миңә булаһы малы бар Әхмәдиҙең? — тип уйланы [Ишмөхәмәт].* (Ж. Кейекбаев.)

**асыҡ ауыҙ.** 1. Бик мәшәү, ебегән. *Егет өсөн егерме лә еткән, алтмыш та аҙ* ***асыҡ ауыҙға.*** (Б. Бикбай.) — *Үҙемә үпкәләйем,* ***асыҡ ауыҙ*** *булған өсөн шулай килеп сыҡты ла инде.* (М. Тажи.) *Мартин Кулай ил гиҙеп тағы ҡайҙарҙа* ***асыҡ ауыҙҙарҙы*** *алдап йөрөйҙөр, быныһы билдәһеҙ.* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: ауыҙына ҡаптырған һары майҙы ла йота алмай, йомшаҡ ауыҙ, мәмәй ауыҙ, төшөп ҡалган.

2. Ауыҙында һүҙ ятмаган кеше. *Ҡапыл бер көн ғәйбәт һөрән һалды: —* ***Асыҡ ауыҙ*** *булыу ярамай! Фаш итергә кәрәк, арабыҙҙа боҫоп йөрөй икән ялағай!* (М. Кәрим.)

*син.*: иләк ауыҙ, урам ауыҙ.

**асыҡ-ярыҡ.** 1. Сер һаҡлай белмәгән, белгәнен һөйләп барган.

*син.*: бер ҡатлы, күлдәге менән ике ҡат, шар ҙа мар, эсендәге тышында.

2. Шаталаҡ ҡыланышлы.

**асылына ҡайтыу.** 1. Киренән тәбиги хәлгә килеү. *[Насир хәҙрәт] Тарҡаҙыға ҡайтып китте. Үҙенең һөйгән мәсетенә мулла булды. Үҙ һүҙе менән әйткәндә,* ***«асылына ҡайтты».*** (И. Насыри.)

2. Вафат булыу, үлеү. *Шаһибәрәкте һораһағыҙ,* ***асылына ҡайтҡан,*** *өйҙә юҡ.* (Халыҡ йырынан.)

*син. ҡар.*: теге донъяга китеү.

**асыуға тейеү** *кемдең.* Асыуландырыу, ҡыҙҙырыу. *Бер көндө каланан Имай бик асыулы ҡайтты. Уның* ***асыуына тейерлек*** *байтаҡ сәбәптәр ҙә йыйылып киткәйне.* (Һ. Дәүләтшина.) *Айыу — аҡыллы йыртҡыс. Әммә юҡҡа-барға* ***асыуына тейһәң,*** *хәл ко боҙолоп китә, дыуамаллана башлай.* (С. Кулибай.) *Паромсының һаман ыжламай ултырыуы* ***асыуға тейҙе.*** (Ш. Янбаев.)

**асыуҙы йотоу.** Килгән асыуҙы тышҡа сыгармау, кешегә һиҙҙермәү. ***Асыу йотоу*** *— тау йотоу.* (Мәҡәл.)

**асыу итеү** *кемгә, нимәгә.* Асыу килеп, үс алырға теләп *(бер эш ҡылыу). Эшселәр* ***асыу итеп*** *эш ташлайҙар ҙа хужалары алдына үҙҙәренең талаптарын ҡуялар.* (Һ. Дәүләтшина.) ***Асыу***

*итмәнем ашҡа.* ***Асыу иттем*** *үҙемдең әлеге наҙан башҡа.* (К. Кинйәбулатова.)

**асыу килеү** *кемгә, нимәгә, ни өсөн.* Асыуланыу. *Сәмиғулла Әхмәҙиҙе әрләргә тотонdo: — Иә, миңә тик торған ерҙән ат бурыˊ тип исем таҡҡан бит инде.* ***Асыуың килерме,*** *килмәҫме?* (Ж. Кейекбаев.)

**асыу ҡабарыу (ҡайнау, ташыу).** Бик ныҡ асыуланыу. *Ғәләүҙең шул ғүмерендә күрмәгәнен күреп, байҙың кейемдәрен кейеп, марш атлап йөрөүенә талағы ташып,* ***асыуы ҡабарып*** *нишләргә белмәй, ҡара көйөп йөрөнө [Ҡәмәр]...* (Т. Йәнәби.) *Эсенән* ***асыуы ҡайнап,*** *ҡара көйөп, Айбулат конторанан сыҡты.* (Һ. Дәүләтшина.) *Арыҫланды күреү менән батыр шашты, күҙҙәре уттай янып,* ***асыуы ташты.*** («Бабсаҡ менән Күсәк».) **Асыуҙы ҡабартыу:** *[Уңғанбикә:] Үҙең бутағас, ҡайнай инде ул.* ***Асыуымды бик ҡабартһаң,*** *бел уны, ҡартлас, ил алдында фашлап хур итәм.* (М. Кәрим.) *Банкеттан һуң заводта һүҙ күбәйҙе. Управляющий йортонда булған мәжлес эшселәрҙең* ***асыуын ҡабартты.*** (Ж. Кейекбаев.)

*син.*: ҡан ҡайнау, ҡан ҡыҙыу, сикә ҡыҫылыу, талаҡ ташыу, түбә сәсе эркелеү, һарыу ҡайнау, асыу эскә һыймау.

**асыуым да килмәһә.** Кешегә йәки берәй нәмәгә йән көйгәндә кәмһетеберәк әйтелә. *Латиптың мине төйөргә иҫәбе юҡ түгел ине. Ике ҡулын да шаҡарып тоттом да торҙом. ... Уның сибек беләктәренең —* ***асыуым да килмәһә*** *— ҡарға суҡып алырлыҡ та көс-ите юҡ.* (Ф. Иҫәнголов.)

**асыуын алыу** *кемдән, кемдең, нимәнең.* Бер кешегә булған асыуҙың, үстең ҡоһорон сығарыу. *Адвокат ҡасҡан... Крәҫтиәндәр уның* ***асыуын*** *приставтан* ***алырға*** *уйлағандар.* (Д. Юлтый.) *Бик эстәре көйә малайҙарҙың, шунлыҡтан улар* ***асыуҙарын*** *Тимерҙән* ***ала*** *башланылар.* (Б. Бикбай.)

**асыу эскә һыймау.** Ныҡ асыуланыу, асыуҙан тыйыла алмай башлау. *Физик бөгөн күп һөйләмәй, әллә ул шөрләй инде? Тик Тамараның ғына* ***асыуы эсенә һыймай.*** (Ә. Бикчәнтәев.)

*син. ҡар.*: асыу ҡабарыу (ҡайнау, ташыу), эс ҡайышыу.

**аҫҡа һыу инеү (кереү).** Эш-хәл хөртәйеп китеү, насарайыу. *Колхоз етәксеһе булараҡ, алдан күрә белмәй,* ***аҫтына һыу кермәйенсә*** *ҡуҙғалмай [Сабир].* (Ф. Бүләков.)

**аҫтан киҫеү (ҡырҡыу).** Йәшереп кенә зыян эшләү. *Ибрай ошолай* ***аҫтан киҫкән*** *эштәре менән бер кемгә лә беленмәй оҫта хәрәкәт итеүсе дошман көйөнсә йәшәүен дауам итә.* (Ғ. Хөсәйенов.) *Аҫтыртын кеше* ***аҫтан ҡырҡа.*** (Мәҡәл.) *Туҙға яҙмағанды һөйләйем. Ундайҙар үҙ ваҡытында тел дә күтәрмәй, ә* ***аҫтан киҫкәндәре*** *өсөн тәүбә лә килтермәй.* (М. Кәрим.)

**аҫыл ҡош аяғынан эләгә.** Үҙен эре тотҡан кешегә ауыр хәлгә ҡалғанда үсәп әйтелә. *Мираҫ менән күрешеп йөрөгән квартираһына алып килгәйне [Ғәйфулланы ҡатын].* ***«Аҫыл ҡош аяғынан эләкте*** *түгелме», — тип уйлап алды Ғәйфулла.* (Р. Сабит).

**аҫтан киҫеи (уйып) өҫтән ямау.** Файҙа эшләгән кеше булып, зыян итеү; аҫтыртын этлек эшләү. *[Хәйбулла:] — Ниңә сәйнәнмәҫкә ти? Үҙең* ***аҫтан киҫеп өҫтән ямай*** *торған политика алып барғас...* (К. Мәргән.) *Туҙға яҙмағанды һөйләйем. Ундайҙар үҙ ваҡытында* ***аҫтан киҫкәндәре*** *өсөн тәүбә лә килтермәй.* (М. Кәрим.)

**аҫтан тешләү.** Һиҙҙермәй генә этлек эшләү.

**аҫтан ут йөрөтөү.** Йәшерен дошманлыҡ ҡылыу *(һүҙ менән). Аллаяр ... уңайы килгәндә* ***аҫтан ут йөрөтә.*** *«Хәҙерге заманда беҙҙең өсөн мылтыҡтан, туптан көслөрәк ҡорал был!» — ти.* (Ф. Исәнголов.)

*син.*: үлән аҫтынан ут ебәреү (йүгертеү).

**аҫтын-өҫкә килтереү.** 1. *нимәнең.* Ныҡ болартыу, бутап бөтөү. *Өйҙөң* ***аҫтын-өҫкә килтереү.***

2. Пыр туҙҙырыу, ҡыйратып ташлау. *[Садрислам:] — Тикшерербеҙ. Шул кулактарҙың* ***аҫтын-өҫкә килтермәй,*** *һис тынмам.* (Ф. Исәнголов.) *Бай балаһы... атай тапҡан малдар менән* ***аҫтын-өҫкә килтерә*** *ҙур ҡалаһын.* (Д. Юлтый.) **Аҫты-өҫкә килеү**: *Эй, заманалар, заманалар... Болара ла болара.* ***Аҫты-өҫкә килеп*** *бөттө бит инде.* (З. Биишева.)

**аҫыл һөйәк.** Билдәле заттан сыҡҡан, төҫкә-башҡа төҙөк, һылыу кеше. *«Был кем кәләше икән? Һай, һай,* ***аҫыл һөйәк,*** *һылыу ҡатын», — тип һоҡланды [Ҡотлобай Гөлйөҙөмгә].* (Һ. Дәүләтшина.) *Кескәй тиеп кәмһетмәгеҙ,* ***аҫыл һөйәк*** *ҙур булмаҫ.* (Халыҡ йырынан.)

**ата балаһы.** Кешенең затын-нәҫелен, үҙен маҡтау һүҙе. *[Әсҡәп:] — Нисауа, ул да* ***ата балаһы,*** *кеше алдында кәм-хур иткәне юҡ, яҡшы тораһығыҙ.* (Б. Бикбай.) — *Һай,* ***ата балаһы,*** *уңған ирҙең батыр улы...* (И. Ғиззәтуллин.)

**аталарының малы уртаҡ әллә (уртаҡмы ни).** Талашҡан-һуғышҡан, ыҙғышҡан кешеләргә ҡарата гәйепләп әйтелә. *Аталарының малы уртаҡтыр.* ▬ *...Бер-береһе менән эт һымаҡ талашалар ҙа тартышалар был батшалар, әллә* ***аталарының малы уртаҡ,*** *асыуым да килмәһә...* (Ж. Кейекбаев.)

**атам заманы.** Бик күп элек, борон. ***Атам заманындағы*** *иҫке китаптарҙа ҡайҙан коммунистар тураһында яҙылһын инде.* (Һ. Дәүләтшина.)

*син.*: Нух заманы, Мамай заманы, хан заманы, әллә ҡасан.

**атам иркәһеме ни (иркәһендәй).** Бик ҡәҙерле кеше түгел әле *(наҙланып маташҡан кешегә орошоу йөҙөнән әйтелә). — Тор, мәлғүн.* ***Атам иркәһеме ни*** *һин миңә...* (Т. Хәйбуллин.) *[Ҡолтуба:]* ***Атам иркәләреме ни,*** *ниңә шул тиклем ҡәҙерләйһегеҙ уларҙы [әсирҙәрҙе]?* (Б. Бикбай.)

**атаң башы.** Әрләү, орошоу һүҙе. — *Бирегеҙ, яңынан өләшәм,* ***атағыҙҙың баштары.*** (Һ. Дәүләтшина.) — *Беҙ килмәһәк, мәңге иоҡлар инең әле,* ***атаң башы!*** *— тиҙәр ағалары Биктимергә.* (Әкиәттән.)

**ата улды, инә ҡыҙҙы белмәй.** Дөйөм тәртипһеҙлек, әҙәпһеҙлек булғанда әйтелә. *Бына шулай* ***ата улды, инә ҡыҙҙы белмәгән*** *мәл. Бер үк ҡалала, губернала өс-дүрт власть хөкөм һөрә.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**атаһы-инәһе юҡ** [һүҙенең, эшенең...]. Рәт-сираты, мәғәнәһе юҡ. *Ул бәндәнең хәбәренең* ***атаһы-инәһе юҡ,*** *ауыҙына ни килгәнен белмәй.* (Һөйл.)

**атаһын (атаһын-әсәһен) танытыу** *кемгә, кемдең, һөйл.* 1. Бик ныҡ орошоу йәки туҡмау. *Ярай әле ағай-эненең йоманан сыҡҡан ваҡытына тура килмәгәндәр, мин уларҙың* ***аталарын танытыр*** *инем...* (Х. Ибраһимов.) — *Ошаҡсыны тапһам,* ***атаһын танытыр инем,*** *— тип эстән генә тыпырсынып бер аҙ батырайҙы Камалетдин.* (Я. Хамматов.)

2. Ҡаты яза биреү, ҡыйратыу. — *Фашисҡа атаһын* ***таныттыҡ бит,*** *ә, сержант!* («Ағиҙел».) *Ҡойроҡтарын һыртҡа һалды ераттарҙың башлыҡтары.* ***Атайыңды тиҙ танытыр,*** *хәтәр икән башҡорттары.* (Т. Йосопов.)

*син.*: кәрәген биреү.

**ат башынан алыу.** Ҡунаҡты хөрмәтләп, ололоҡлап ҡаршы алыу.

**ат башындай** [алтын, йоҙаҡ...]. Нәмәнең ҙурлығын арттырып күрһәткәндә әйтелә. *Әхмәҙи тол ултырған ҡыҙына әллә ни* ***ат башындай*** *алтын хәтле мәһәр ҡуймаҫ ине әле.* (Ж. Кейекбаев.) *Ышанмай ғына ҡараһындар, унда колхоз председателенең* ***ат башындай*** *ҡултамғаһы ла буласаҡ бит.* («Һәнәк».) *Клуб ишегендә* ***ат башындай*** *йоҙаҡ эленеп тора.* («Сов. Башҡ.») **Ат башы тиклем (хәтле, ҙурлығы):** *Минең алға* ***ат башы ҙурлығы*** *тип әйтерлек хәрефтәр менән баҫылған китап килеп ятты.* (М. Кәрим.)

**ат дағалағанда баҡа (тәлмәрйен) ботон ҡыҫтырған** *һөйл.* Мөһим эш башҡарғанда ҡыҫылып маташҡан кешегә ҡарата мыҫҡыллап әйтелә. — ***Ат дағалағанда тәлмәрйен ботон ҡыҫтырған,*** *— тине Шәмсетдин. — Ана самауырыңды ҡара.* (Р. Низамов.)

**ат күҙендәй (ат күҙе тиклем).** 1. Ҙур нәмәне бәләкәй итеп күрһәткәндә әйтелә. *Ат күҙендәй сынаяҡ.*

2. Бәләкәй нәмәне ҙур итеп күрһәткәндә әйтелә. *Ат күҙендәй күбек.*

**ат(ҡа) менгәндәй (атланғандай) булыу.** Ҙур шатлыҡ кисереү, ныҡ ҡыуаныу. *Мин,* ***атҡа атланғандай*** *шатланып, башта ул ҡағыҙ, ҡәләмгә һоҡланып бөтә алманым.* (Ғ. Ғүмәр.) *Ҡолаҡ ишетмәгән, күҙ күрмәгән емештәрҙән ауыҙ иттерҙе был ағай. Беҙ — еүеш танауҙар,* ***атҡа менгәндәй булдыҡ.*** (М. Ғәли, Р. Сафин.) *[Кәлимулла] Ашҡаҙар буйындағы Әтәс ауылында, батрак Сафиулла ғаиләһендә донъяға килгән.* ***Атҡа менгәндәй булған атаһы.*** («Сов. Башҡ.») **Атҡа атланған кеүек:** *Емештең яҙмаларын уҡырға күптән ҡыҙыҡһынып йөрөгән Хөрмәт,*

***атҡа атланған кеүек шатланып... Сабир янына китте.*** (З. Биишева.)

*син.*: түбә (баш) күккә тейеү, ауыҙ ҡолаҡҡа етеү.

*ант.*: балта һыуға төшкән кеүек булыу, кикерек төшөү, шөмтөр ҡойолоу.

**атҡан уҡ һымаҡ.** Бик ҙур тиҙлек менән, бик шәп. *Ул арала ҡола тай, **атҡан уҡ һымаҡ**, майҙанға килеп етте...* (Ж. Кейекбаев.)

**ат ҡолонлатып** [йөрөү, һөйләү...]. Оҙон-оҙаҡҡа һуҙып, оҙаҡлатып *(эш башҡарыу, һөйләү һ. б.). Бигерәк тә күп лығырлаусы Шакир булды: ул ҡыҙҙарға беҙҙең төнгө сәйәхәтте **ат ҡолонлатып һөйләй** ине.* (Н. Иҙелбай.)

**атлы барып, йәйәү ҡайтыу** *һөйл.* Өмөт, ышаныс бушҡа сыҡҡанда әйтелә.

**атлы кеше төшөп ҡарарлыҡ, йәйәү кеше ятып ҡарарлыҡ.** Бик матур кеше *(гәҙәттә, ҡатын-ҡыҙға ҡарата әйтелә).*

*син.*: ҡарап (күреп) туйғыһыҙ, һоҡланып туймаçлыҡ, бер ҡалаҡ һыуға һалып йоторлоҡ.

*ант.*: май яғып ташлаһаң, эт яламаç; әйләнеп ҡарағыһыҙ.

**атлы ҡаҙаҡ кеүек** *һөйл., яманл.* Һөмһөҙләнеп, өҫкә менеп килгән кешегә ҡарата әйтелә. *Һин нимә, **атлы ҡаҙаҡтай** атланып алғанһың.* (Д. Бүләков.)

**ауға эләгеү.** Берәй кешенең ҡорған хәйләһенә, мәкеренә бирелеү.

*син.*: тоҙаҡҡа төшөү, ҡармаҡҡа ҡабыу.

**ауыҙ асыу.** I.1. Һүҙ башлау, хәбәр һөйләү. *Фәкиһә был хаҡта ҡабат **ауыҙ асманы**, атаһының тағы ҡыҙып китеүенән ҡурҡты.* (Ж. Кейекбаев.) *Бер **ауыҙ асҡанда**, башҡорт театрын тыуҙырыу юлында эшләгән эшмәкәрҙәр тураһында ла бер нисә һүҙ әйтеп үтке килә.* (И. Насыри.) *Азамат атаһын рәнйетергә бер кемгә лә рөхсәт итмәй. **Ауыҙ асып** ҡына ҡараһындар!* (Ә. Бикчәнтәев.) **Ауыҙ астырмау**: *Ахыры аптырап Ныязғолға барҙым. **Ауыҙымды ла астырманы**: — «Аҡса кәрәкме, ни кәрәк?» — тип тора.* (Һ. Дәүләтшина.)

*ант.*: ауыҙ йомоу.

2. Һемәйеү, буш тороп ҡалыу. *Биктимер ... ҡатынын үҙе менән атҡа атландырып ала ла алтын йортҡа ҡарай сабып та китә. Батша үҙенең улы менән **ауыҙ асып** тороп ҡала.* (Әкиәттән.) / Иғтибарһыҙ булып, ҡулындағын ысҡындырыу. Ауыҙ асып йөрөү. Ауыҙ асып ултырыу: ▬ *Ауылда шундай һылыуҙар булғанда, **ауыҙ асып йөрөү** һис тә килешле эш түгел.* (Ғ. Ибраһимов.)

3. Нык аптырау, ғәжәпкә ҡалыу. *Ҡыҙҙар ҙа, Емеш тә **ауыҙҙарын асып**, аптырашып торҙо ла ҡалды.* (З. Биишева.)

**ауыҙ асып** [тыңлау]: *Ҡашаяҡ яҡта уларҙың был буталыштарына ғәжәпһенеп, **ауыҙ асып** ҡарап ултырған Ғәйшәгә ынтылды.* (Һ. Дәүләтшина.)

II. *дини.* Ураҙа тотҡанда, ашар алдынан тоҙ (йәки башҡа ашамлыҡ) ҡабыу. *Бөгөн ураҙа. Әле* ***ауыҙ асырға*** *ла ваҡыт етә бит.* (Т. Хәйбуллин.) *Ярар, ҡояш байығас,* ***ауыҙ асырмын*** *инде.* (Б. Бикбай.)

**ауыҙ барыу.** Хәбәр һөйләргә, һүҙ әйтергә батырсылыҡ итеү (хаяһыҙ һүҙ һөйләгән кешегә ҡарата әйтелә). *Иң йыуаш һарыҡты ла ашап йөрөгәс, башҡа һүҙгә нисек* ***барһын*** *инде* ***ауыҙ.*** (М. Ғафури.) *[Гөлйөҙөм:] — И, оятһыҙ. Әллә мине еңгә тимәксе булаһыңмы? Ни* ***ауыҙың барып*** *шулай әйтерһең икән тиңдәшеңә.* (Һ. Дәүләтшина.)

*син.*: тел барыу, тел әйләнеү.

**ауыҙ бешеү*.** Яңылышлыҡ эшләп, шуның ҡыйынлығын кисереү. ***Ауыҙы бешһә,*** *[Луис] ағаһының әйткәнен иҫенә төшөрөр, әммә һуң булыр.* (Ә. Бикчәнтәев.) *...Йылдар үтте. Иәшлегебеҙ һүрелә төшкән инде. Тормош утында күп ҡабат* ***ауыҙыбыҙ бешкән*** *инде.* (Р. Бикбаев.) *Ҡатыны ла бер* ***ауыҙы бешкәс,*** *өрөп ҡаба, бәләне үҙе саҡыртып килтермәй хәҙер, килһә инде, уға ҡаршы тора белә.* (Әкиәттән.) *Бер колхоз председателен үлтереп маҡтаған мәҡәлә баҫып, редакторыбыҙҙың күптән түгел генә* ***ауыҙы бешкәйне.*** (Н. Мусин.)

*син.*: һабаҡ алыу.

[*Түбәндәге мәҡәлдән: ауыҙы бешкән өрөп ҡаба.]

**ауыҙға алғыһыҙ.** Бик тәмһеҙ йәки әсе. *[Бисәнең] .... ашы эт* ***ауыҙына алғыһыҙ*** *насар булғанлыҡҡа энәһенән ебенә саҡлы матурлап, баплап, тәмләп һөйләнеләр.* (Ғ. Дәүләтшин.)

*ант.*: ашап туйғыһыҙ (туймаҫлыҡ), телеңде йоторлоҡ.

**ауыҙға алыу.** 1. Хәбәр итеп һөйләү *(күберәк хуп күреп етмәгән һүҙ хаҡында). Ундай туҙға яҙмаған һүҙҙәрҙе* ***ауыҙыңа ла алма.*** *Аш хаҡын һаҡларға кәрәк.* (Һ. Дәүләтшина.) *Оло кешеләр ғәжәп халыҡ инде: бер һүҙҙе* ***ауыҙына алдылармы*** *— шуны һөйләйҙәр ҙә торалар.* (З. Ғәлимов.) *Өләсәһе, бер* ***ауыҙына алғас,*** *өҙмәне лә ҡуйманы. Хәйҙәргә мәктәпкә барыуҙан башҡа сара ҡалманы.* (Ф. Иҫәнголов.)

2. Ҡабыу, ашау. *Әсәйем ...әллә нишләп кенә шәкәрҙән ҡалды ла ҡуйҙы бит! Шунан бирле шәкәрҙе* ***ауыҙына ла алмай.*** (Ғ. Дәүләтшин.)

**ауыҙға инеп барыу (инерҙәй булыу).** Ярарга тырышып, ышанып, бик яҡынлап хәбәр һөйләү. *Яңы дуҫ тапҡан бит ул [Нәркәс].* ***Шуның ауыҙына инеп бара.*** (Ш. Бикҡол.) *Ирҙәр, әбейҙәр Юлдыбайға яҡын ғына ултырып,* ***ауыҙына инерҙәй булып*** *һорашалар.* (Һ. Дәүләтшина.) *Үҙегеҙ Айҙарҙы яманлап бөтөрә алмайһығыҙ, ә берәр нәмә булһа,* ***ауыҙына инергә*** *тораһығыҙ.* (Н. Нәжми.)

**ауыҙға йоҙаҡ йәшереү (ҡабыу).** Бер һүҙ ҙә әйтмәү, һөйләшмәү. *Айбулаты тағы,* ***ауыҙына йоҙаҡ йәшереп,*** *өндәшмәй-тындашмай сәй эсте лә, ҡайтып китте.* (Һ. Дәүләтшина.) *[Сәғит йәштәргә:] Йырлағыҙ! Әллә* ***ауыҙығыҙға йоҙаҡ ҡаптығыҙмы?***

(Х. Ибраһимов.) *[Ҡәйнәһе Фатимаға:] — ...Оҙатҡан саҡта ҡайһылай оҫта тәтелдәй ине.* ***Ауыҙына йөҙөк йәшергәнме*** *әллә хәҙер.* (Ж. Кейекбаев.) **Ауыҙға йөҙөк йәшергән (ҡапҡан) кеүек:** *Ҡунаҡтар* ***ауыҙҙарына йөҙөк ҡапҡан кеүек*** *тынып ҡалдылар.* (Ш. Шәһәр.) *Ҡатыным менән ҡәйнәм,* ***ауыҙҙарына һыу уртлағандай,*** *бик оҙаҡ өндәшмәй, бер-береһенә текләшеп ултырҙылар.* (Й. Солтанов.) *Ниңә* ***ауыҙыңа һыу уртлап*** *тораһың? Һинең өсөн кем сауҙалашырға тейеш?* (Й. Солтанов.) *Артҡа тәгәрәүегеҙҙе күреп,* ***ауыҙҙарына һыу уртлағандай*** *тымып ҡалған түрә йәнә маҡтай башлар әле үҙегеҙҙе.* («Сов. Банҡ.»)

*син.*: ауыҙҙы энә менән тегеү, ауыҙҙы йомоу, ауыҙҙы ябыу, ләм-мим тип әйтмәү, телде йотоу, телде тешләү, телде тыйыу, тешҡе ҡыҫыу.

*ант.*: ауыҙы ябылмау, теле телгә теймәү (йоҡмау).

**ауыҙға <ҡара> ҡан тулыу.** Ҙур йәбер, мохтажлыҡтан йә башҡа нәмәнән ауыр хәлгә төшөү. ***Ауыҙыңа ҡара ҡан тулғанда ла,*** *дошман алдында төкөрмә.* (Мәҡәл.)

*син.*: ауыҙ тулы ҡан булыу.

**ауыҙға ҡаратыу** *кемде.* 1. Һүҙ менән мауыҡтырып, кешенең иғтибарын йәлеп итеү. *Новиковҡа бында майҙан асылды. Ул бөтә һалдаттарҙы үҙенең* ***ауыҙына ҡаратып*** *алды.* (Д. Юлтый.) *Нәфисә компанияла шундай күңелле кеше ул: бөтәһен үҙенең* ***ауыҙына ҡаратып*** *ултыра.* (М. Хәйҙәров.) *Урталарында әлеге Фәхри. Ул, бөтәһен дә үҙ* ***ауыҙына ҡаратып,*** *ҡыҙып-ҡыҙып нимәлер һөйләй ине...* (Б. Бикбай.)

2. Үҙеңә бойһоноулы итеү. *Бына һиңә яңы түрә. Бөтә халыҡты* ***ауыҙына ҡаратып*** *тора.* (Һ. Дәүләтшина.) *Ә хәҙер күр, Варис үҙе бөтә үҫмерҙәрҙе* ***ауыҙына ҡаратҡан.*** (Ф. Лоҡманов.)

**ауыҙға төшкән һары майҙы (төшкәнде) йота алмау** *һөйл.* Еңел килеп ингән малды ҡулдан ысҡындырыу.

**ауыҙға төшөү.** Юҡтан, еңелдән генә ҡулға килеп инеү *(байлыҡ, мал-мөлкәт). Ауыҙға төшкәнде ысҡындырыу. Ауыҙға төшә яҙыу.* ▬ *[Управляющий:] — ...* ***Ауыҙыма төшкән*** *байлыҡтан ҡолаҡ ҡаҡҡанға үкенәм. Хәҙер ни эшләргә? Иҫ-аҡыл етмәй. Һемәйҙем бит.* (Я. Хамматов.)

*син.*: ҡулға төшөү

**ауыҙға һуҡмас(тар).** Берәй хәбәрҙе башларға, үтенесте әйтергә баҙнат итеүҙе белдереп әйтелә. *Яусыға үлем юҡ тиҙәр,* ***ауыҙыма һуҡмаҫ*** *әле, үҙеңә ҡәйнә булып та ҡуйырмын.* (М. Тажи.) *Әйтһә ни,* ***ауыҙыңа һуҡмаҫ*** *ине әле. Бәлки Сәмерхандың аңҡылдауынан ҡасҡандыр.* (З. Ҡаҙаҡбаева.)

**ауыҙға һыу уртлау (ҡабыу).** Өндәшмәҫ булыу, һөйләр ерзән һөйләмәҫ булыу. — *Йә, таҙ баш, маҡтанма. Әрәмтамаҡ, ярып-ярып сығарып ебәрербеҙ үҙеңде, күп һөйләшәһең, — тип, тегене* ***ауыҙына һыу уртларға*** *мәжбүр иткәндәр.* (Әкиәттән.) *Барса бағырҙы телгә алыусы булманы — кем күргән, уныһы* ***ауыҙына һыу ҡапҡан,*** *күпселеге күрмәгән.* (Р. Байбулатов.) *Бородинова ...*

*Мырҙабайҙа барыбер клуб һалабыҙ, тип ең һыҙғанып йөрөгән. Ләкин һуңынан ул да* ***ауыҙына һыу уртлаған.*** («Сов. Башҡ.»)

*син.*: ауыҙга йөҙөк ҡабыу, ауыҙ йомоу.

*ант.*: теш тешкә теймәү, ауыҙы ябылмау.

**ауыҙ ҙа астырмау.** Һүҙ әйтергә лә ирек бирмәү. *Һуғышҡа саҡлы уҡ әле Тимерҡаҙыҡ үҙе лә колхозға трактор алыу хаҡында уйлап-уйлап ҡуйғайны. МТС яҡын булғас, ана шул хеҙмәтләндерер тип,* ***ауыҙ ҙа астырманылар.*** (Ғ. Ибраһимов.)

**ауыҙҙан өҙөү.** 1. Үҙеңә етмәгән нәмәне кеше менән уртаҡлашыу *(ризыҡҡа ҡарата;* ҡылымы күберәк —п формаһында ҡулланыла). — *... Мин бер кемде лә ирекһеҙләмәнем. Кем үҙе үтенеп килә — ҡыҙғанып,* ***ауыҙымдан өҙөп*** *биреп ебәрҙем.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Имән сәтләүегенән бешерелгән әпәкте ауыҙыма ла килтерә алмайым. Һин шул ваҡыт, ҡәйнә-ҡайныңдан йәшереп, үҙ* ***ауыҙыңдан өҙөп,*** *һөткә генә бешерелгән алабута буҡҡаһы индереп торҙоң.* (Я. Вәлиев.) *[Рәшиҙә әбей] йомош менән килгән кешене һис буш итмәй, һораған нәмәне* ***ауыҙынан өҙөп*** *булһа ла биреп ебәрә торғайны.* (К. Мәргән.)

2. Кемде лә булһа берәй нәмәнән мәхрүм итеү. *Әләккән суртанды ысҡындырҙы,* ***ауыҙҙан өҙҙө,*** *шайтан малай!* (Һөйл.)

**ауыҙҙан төшмәү** *кемдең.* Бер үк хәбәрҙе өҙмәй һөйләү *(күберәк юҡлыҡ формаһында). — Власть башында большевиктар!.. Был һүҙҙәр һалдаттарҙың* ***ауыҙынан төшмәне.*** (В. Исхаҡов.)

**ауыҙҙан ут сәсеү (сәсрәтеү).** Бик үткер, сая булыу, сатнап тороу. *Бәшәрҙең* ***ауыҙынан ут сәсрәп*** *тормай, йомшаҡ. ... Ә Ғәлкәй балалары үлән аҫтынан ут һалалар.* (Б. Ишемғол.)

**ауыҙҙы йыйып [һөйләү].** Һүҙ-хәбәрҙә тотанаҡлыҡ күрһәтеү, ни һөйләгәнеңде белеп һөйләү.

**ауыҙҙы сөйгә элеү** *һөйл.* 1. Ашамау, бер нәмә ҡапмау, асҡа ҡаҡланыу. *Байҙар ҡаҙан аҫҡанда, ярлы* ***ауыҙын сөйгә элһен.*** (Халыҡ йырынан.) *Маяҡ һыйырҙары йәшәй башҡа һыйырҙарҙан көлөп. Ҡалған малдар ғүмер итә* ***ауыҙҙарын сөйгә элеп.*** (Т. Арслан.)

2. Бер хәбәр ҙә һөйләмәү, өндәшмәү. *Донъяла әҙәм булдырмаған эш буламы ни? Юҡһа, улай* ***ауыҙыңды сөйгә элгән*** *кеүек, урам тапап йөрөһәң, ғүмерҙә эш таба алмаҫһың.* (С. Агиш.)

*син. ҡар.*: ауыҙга йөҙөк йәшереү.

**ауыҙҙы <энә менән> тегеү.** Өндәшмәҫ, һөйләшмәҫ булыу. ***Ауыҙығыҙҙы энә менән тегеп*** *килдегеҙ мәллә?* (Таҡмаҡтан.)

*син. ҡар.*: ауыҙга йөҙөк йәшереү.

**ауыҙ итеү.** Ашап, тәмләп ҡарау. — *Мәле, килен, һоғон әле. Үҙең былтыр һауған бейәнең итенән* ***ауыҙ ит.*** (Һ. Дәүләтшина.) *Мин дә ҡуян итен* ***ауыҙ итеп*** *ҡарайым* (Ж. Кейекбаев.) — *Эс әле, эс, йүкә балын* ***ауыҙ ит,*** *ауылдың һөтлө сәйен һағынғанһыңдыр әле...* («Сов. Башҡ.») *Ауыл тирәһенән ат етерлек алыҫлыҡтағы бер генә түрә-ҡара ла, байғура ла, туй ниғмәтенән* ***ауыҙ итмәй*** *ҡалманы.* (Ф. Иҫәнголов.)

**ауыҙ йомоу**. Өндәшмәҫ, һөйләшмәҫ булыу. — ...*Ауыҙ йомоп, тешләнеп йөрөүебеҙ арҡаһында ялаңғас тороп ҡалдыҡ*. (Т. Хәйбуллин.) *Китап һүҙен ишеткәс, ҡарттар* ***ауыҙҙарын йомдолар***. (Б. Бикбай.) Сер сисмәҫ өсөн, өндәшмәҫ булыу. *Әрәм-шәрәм ителгән иген хаҡында* ***ауыҙ йомдо*** *[Сынбулатов]*. (М. Тажи.)

*син*.: ауыҙға йөҙөк йәшереү.

**ауыҙ йырыу** *һөйл., яманл*. Бушалағайымға көлөү. *Ауыҙ йырып көлөү*. ▬ *Һин дә тағы, наборщигым,* ***ауыҙың йырма***, *ҡолағың ас йәнем әсеп йырлауыма*. (Ш. Бабич.) *Итәктәрен киң йәйелдереп кейгән [Төхфәт байҙар] ...* ***ауыҙҙарын йырып*** *көләләр*. (Т. Хәйбуллин.) *Ләлә менән Наза был юлы* ***ауыҙ йырманы***. («Башҡ. пионеры»)

**ауыҙ йәйеү** *һөйл., яманл*. Бик иркенләп хәбәр һөйләү. *Ауыҙ йәйеп һөйләү*. ▬ *Уның шулай* ***ауыҙ йәйеп*** *маҡтанып ултырыуын тыңларға сабырлығы етмәне Ғафарҙың*. (Н. Мусин.)

**ауыҙ күтәреп [**хәбәр һөйләү, йырлау**]** *яманл*. Оялып-тартынып тормай, әҙәп һаҡламай *(һүҙ һөйләү, йырлау)*. *Урамдан егет-улаҡ уҙыр хәл юҡ, күҙең-ҡашың ялмаңлап,* ***ауыҙ күтәреп*** *һүҙ ҡуша башлайһың*. (Т. Хәйбуллин.) — *Быларының* ***ауыҙ күтәреп*** *йырлашып ултырырға дәрәжәләре ҡушмайҙыр — тип, үҙенсә иҫәпләне Зөһрә апай... (*Ш. Янбаев.) *Йәштәрҙең төнөн... урамда* ***ауыҙ күтәреп*** *йырлап йөрөүҙәре бөттө*. («Сов. Башҡ.») *[Боҫтан:] Атаҡ... Бына нишаналар! ...* ***Ауыҙ күтәреп*** *буҙлап ултыралар*. (Б. Бикбай.)

**ауыҙ ҡолаҡҡа етеү** *шаяр*. Ҙур шатлыҡ кисереү, ҡыуанып йылмайыу. ...*Ҡапҡанан Мазһар үҙе күренде.* ***Ауыҙы ҡолағына еткән***. (Ф. Иҫәнғолов.) *Кис менән өҫтәлде йыйыштырып алғас, ҡунаҡ сумаҙанынан бер колода кәрт алды. Шуны күреү менән, 'Ҡыҙылтештең* ***ауыҙы ҡолағына етте***. (Ә. Бикчәнтәев.) *Маҡтау һүҙе ишетеүе рәхәт инде — малайҙарҙың* ***ауыҙы етте ҡолағына***... (М. Кәримов.) *Мин дә йыймағанмын иренемде.* ***Ауыҙым еткән ҡолаҡҡа***. (Т. Йосопов.)

*син*.: ат(ҡа) менгәндәй булыу.

**ауыҙ менән себен тотоу**. Ян-яҡҡа иғтибарһыҙ ҡараныу, асыҡ ауыҙланыу.

**ауыҙ тултырып [**һөйләү**]**. 1. *яманл*. Иркенләп, ҙур ҡәнәғәтлек менән *(хәбәр һөйләү)*. *Мин, ҡарт алйот,* ***ауыҙ тултырып*** *һине урам буйына маҡтап йөрөгән булам тағы*. (Б. Бикбай.) *Былай ҡарағанда, беҙҙә оркестр төҙөлөүҙе әллә ниндәй оло ваҡиға итеп,* ***ауыҙ тултырып*** *һөйләп тороуҙың да кәрәге юҡ-юғын*. (Ғ. Ғүмәр.) *Исламғолов, трибунаға сығып, үҙенең ҡылмыштары тураһында* ***ауыҙ тултырып***, *ай-һай, һөйләмәҫ*. («Сов. Башҡ.»)

2. Һүҙҙе, уйҙы оло итеп *(әйтеп биреү)*. *Әйе, беҙҙең әҙәбиәтебеҙ СССР халыҡтары әҙәбиәте араһында тамам өлгөргән, ҙур әҙәбиәт, тип* ***ауыҙ тултырып*** *әйтә алабыҙ*. (Н. Нәжми.) *Яҡшығол*

*бит башҡорт хаҡында тәү башлап* ***ауыҙ тултырып*** *һүҙ әйткән кеше...* (Ә. Вахитов.)

**ауыҙ тулы ҡан булыу.** Бик ауыр хәлгә төшөү. ***Ауыҙың тулы ҡан булһа*** *ла, дошман алдында төкөрмә.* (Мәҡәл.)

*син.*: ауыҙға <ҡара> ҡан тулыу.

**ауыҙ һыуы ҡороу** *кемдең.* Берәй нәмәгә һоҡланып, ымһыныу менән һөйләү *(гәйепләберәк әйтелә). [Ғарифтың]...* ***ауыҙ һыуы ҡороп*** *һөйләй торған ҡалаһы ошо икән!* (М. Ғафури.) *[Ҡайным] Моратша байҙың фәләнсә баш йылҡыһы, төгәнсә баш һыйыры, тип,* ***ауыҙ һыуы ҡорой.*** (Һ. Дәүләтшина.) *Күрше-күлән* ***ауыҙ һыуы ҡороп:*** *«Себерҙә ат арзан икән...», — тип һөйләй.* (Б. Бикбай.) — *Һеҙгә шул инде, малай тип* ***ауыҙ һыуығыҙ ҡорой.*** (Т. Килмөхәмәтов.) **Ауыҙ һыуын ҡоротоу**: *Шағәли һинең кеүек күҙлеләрҙең дә* ***ауыҙ һыуын ҡороторлоҡ*** *әле.* (С. Ҡудаш.) *Дуҫиш бик күбәйеп китте, ти, быбың, барыһы ла* ***ауыҙ һыуҙарын ҡоротоп*** *маҡтайҙар.* (Әкиәттән.)

**ауыҙ һыуын ҡойоу.** Ашарға ымһыныу.

**ауыҙы бер бешерем.** 1. Ауыҙы бик ҙур [кеше]. 2. Үсегеп, иренен турһайтып торған кешегә ҡарата мыҫҡыл менән әйтелә.

**ауыҙы көрәк менән тишкән <кеүек>** *кемдең, һөйл., яманл.* Һүҙ йөрөткән, ғәйбәтсел. — *Кем һөйләп сығарған һуң ул хәбәрҙе?* — *Кем булһын, Әхмәҙиҙең бисәһе инде. Уның әбейенең* ***ауыҙы көрәк менән тишкән күк*** *бит.* (Ж. Кейекбаев.) ... *Ауылда бар бит әле* ***ауыҙын көрәк менән төртөп тишкән*** *кешеләр...* (Б. Бикбай.) — *Ауыҙ тигәнең* ***көрәк менән тишкән кеүек*** *инде... ... Ҡайҙан белеп яҙғандар...* (Ш. Насыров.)

*син.*: урам ауыҙ.

**ауыҙы ла ҡыйшаймай** *кемдең, әрл.* Оялып, тартынып тормай *[тура ярып һөйләү]. Муллаларға ҡаршы ойошма, ти бит.* ***Ауыҙы ла ҡыйшаймай,*** *күҙен дә йоммай, иблис.* (*«Сов. Башҡ.»*)

**ауыҙы менән ҡош тота.** Бик өлгөр, етеҙ, бар яҡтан да килгән [кеше]. ***Ауыҙың менән ҡош тотҡан*** *ир инең, ниндәй көнгә ҡалдың һин, Юлай?* (Б. Бикбай.) *Апаһының йәшлеге хаҡында Хәнифә ишетеп кенә белә. Ҡулында ут уйнатҡан,* ***ауыҙы менән ҡош тотҡан,*** *тиҙәр халыҡта ундайҙар тураһында.* (М. Садиҡова.) *[Исҡужа:] — Эй, байғош!* ***Ауыҙың менән ҡош тоторҙай*** *ир инең бит. Ана, ана, ҡайҙарҙа ятып ҡала һөйәктәрең.* (Ә. Хәким.)

*син.*: ҡулында һандуғас һайрата, ҡулында ут уйната.

*ант.*: бешмәгән бәрәңге, тыумаҫ борон ҡартайған.

**ауыҙына ҡаптырған һары майҙы ла йота алмай** *һөйл., әрл.* Бик мәшәү, ҡулына төшкәнде лә ысҡындыра торған. *Йомағол күпме генә уйламаһын, Сәмиғулланың был ҡыланышын аңлай алманы. «****Ауыҙына төшкән һары майҙы ла йота белмәй*** *бит, ахмаҡ!» — тип һүкте уны эсенән генә.* (Ғ. Байбурин.)

*син. ҡар.*: асыҡ ауыҙ 1.

**ауыҙына ҡаран тороу** *кемдең.* Берәй кешенең һүҙенән сығып эш итә алмау. — ... *Беҙҙә үҫтең. Ҡунаҡлар итәгең булмағандай, шул Фәрхиә* ***ауыҙына ҡарап*** *тораһың. Бынағайыш, — тип үпкәләп алды Илбай ҡарсығы.* (Х. Ғиләжев.) *Иәш, тип тормай аҡһаҡалдар, уның [Аҙнағолдоң]* ***ауыҙына ҡарай.*** *'Ҡарамаҫтар ине, — батырҙың тирә-яҡты усында йомарлап тотҡан атаһы бар.* (Ә. Хәким.)

**ауыҙынан ҡара ҡан(ын) ағыҙыу** *кемдең.* Бик ҡаты туҡмау. *Ауыҙынан ҡара ҡанын ағыҙғанса туҡмау.* ▬ *[Халыҡ:]* ***Ауыҙынан ҡара ҡан ағыҙырға*** *кәрәк Баймөхәмәт малайының. Эйе, әйтмәһә, туҡмап әйттерергә кәрәк.* (И. Насыри.)

**ауыҙынан сыҡканды эт ашамаҫ** *кемдең, һөйл.* Әҙәпһеҙ хәбәр һөйләгән, әшәке һүҙле. *Ул [бригадир] һуғыш суҡмары, уның* ***ауыҙынан сыҡҡанды эт ашамаҫ.*** (Ә. Бикчәнтәев.) ***Ауыҙынан сыҡҡанды эт тә ашамаҫ*** *бит. Ғүмергә ишеткәнем юҡ ине шундай әҙәпһеҙлекте.* (Я. Вәлиев.)

**ауыҙынан һүҙен тартып алып булмай** *кемдең.* Өндәшеп, һөйләшеп бармай торған, тешеккән *(кеше).*

**ауыҙынан һүҙе сыҡмай.** Һөйләшеп бармай торған, өндәшмәҫ *(кеше). — Айныҡ саҡта* ***ауыҙынан һүҙе сыҡмай,*** *бында килеп, ҡыҫтыбый булып ултырған була.* (Р. Ғарипов.)

**ауыҙынан (ауыҙында) әсә һөтө кипмәгән** *кемдең, әрл.* Үҫеп етмәгән, балиғ булып өлгөрмәгән *(әҙәпһеҙ ҡыланған йәшерәк кешегә ҡарата әйтелә). [Барый:] Кешенең шул тиклем оятһыҙ булыуына иҫең китер,* ***ауыҙынан әсә һөтө кипмәгән,*** *ә кешегә аҡыл өйрәтеп маташа.* («Сов. Башҡ.») — *Һай! Әле һинең* ***ауыҙыңда әсә һөтө кибеп етмәгән,*** *шуға ҡарамаҫтан, һүҙгә ҡушылып һөйләнгән булаһың...* (Ә. Бикчәнтәев.)

*син.*: ауыҙының һарыһы кипмәгән.

**ауыҙын асһа үпкәһе күренә** *кемдең.* Үтә ярлы. *Бик ярлыландылар,* ***ауыҙҙарын асһа, үпкәләре күренеп тора.*** (Д. Юлтый.) *[Әүхәт:] Нимәһен һөйләп торорға уның?! Бына, башта алама кәпәс тә, ботта йыртыҡ ыштан,* ***ауыҙымды асһам — үпкәм күренеп тора.*** (Н. Мусин.) *Ә бит уларҙың барыһы ла, беҙҙең кеүек үк, иҫ киткес ярлы,* ***ауыҙҙарын асһалар, үпкәләре күренеп торған*** *ярлы кешеләр.* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: һыйыр мөгөҙөнә элерлек нәмәһе юҡ.

**ауыҙына сәйнәп ҡаптырыу** *кемдең.* Бик ентекләп, ваҡтөйәгенә тиклем аңлатыу.

**ауыҙына һуғып булмай** *кемдең.* Һүҙ, хәбәрҙән тыйып булмай. *Алдашаһың, шыттыраһың, тип көлөрҙәр. Көлһәләр, көлөрҙәр,* ***ауыҙҙарына һуғып булмай*** *бит инде.* (И. Абдуллин.)

**ауыҙына һуғыу** *кемдең, тупаҫ.* Һүҙҙән, хәбәрҙән тыйып туҡтатыу, өндәшмәҫкә мәжбүр итеү.

*син.*: ауыҙын ябыу (ҡаплау, тығыу).

*ант.*: ауыҙын астырыу, телен сисеү.

**ауыҙына шайтан төкөргән** *кемдең.* Һәр һүҙгә яуап таба алған, телләшеүгә бик оҫта кешегә ҡарата әйтелә. — *Бына, исмаһам, үҙебеҙҙең Айбулат, күрһәттеме үҙен, егетең! Хатта Ныяҙғолдо ҡалтыратты. — Дөрөҫ, ауыҙына* ***шайтан төкөргәнме*** *ни.* (Һ. Дәүләтшина.) *Ахыр сиктә уны: —* ***Ауыҙыңа шайтан төкөргән*** *нәмә икәнһең, — тип эштән ҡыуҙылар.* (В. Исхаҡов.)

**ауыҙы ни әйткәнде ҡолағы ишетмәй** *кемдең.* Уйламай һөйләй.

**ауыҙының һарыһы кипмәгән** *кемдең, әрл.* Үҫеп етмәгән, балиғ булмаған *(әҙәпһеҙ ҡылыҡлы йәш кешене орошҡанда әйтелә). Сәлмән мулла әлеп алды: — Тик тор, бәдбәхет,* ***ауыҙыңдың һарыһы ла кипмәгән*** *малай!* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: ауыҙынан (ауыҙында) әсә һөтө кипмәгән.

**ауыҙын ябыу (каплау, тығыу, томалау, тегеү)** *кемдең, тупаҫ.* Һүҙҙән туҡтарға мәжбүр итеү, өндәштермәү. *Кемдер нәфрәтләнеп ниҙер һөйләмәксе ине лә Иәмғи уның* ***ауыҙын япты...*** (Х. Ғиләжев.) — *Мәсьәлә бик матур һәм ғәҙел хәл ителде, — тип тегеләрҙең* ***ауыҙын япты*** *[вәкил].* («Сов. Башҡ.») *Афзал ошоларҙы әйтте һалды, Ғимадыйҙың* ***ауыҙын ҡапланы.*** (С. Ҡудаш.) — *Һөйләһен! Миҙалдар тағып ҡайтҡан кешенең дә* ***ауыҙың тыҡмаҡсы*** *булаһығыҙмы хәҙер?* (Я. Хамматов.) *Мәңге шулай ғүмер кисерҙеләр, ... Аҡыллыға ағыу эсерҙеләр, йыр-сыларҙың* ***ауыҙын тектеләр.*** (Р. Ғамзатов.)

*син.*: ауыҙына һуғыу.

*ант.*: ауыҙын астырыу, телен сисеү.

**ауыҙын ҡыу сыбыҡ менән һөрткән.** Ғел «Юҡ» тип кенә торған үтә һаран, һыҡмыр кеше.

**ауыҙыңа <бер> тамсы һыу һалмаҫ(тар).** Изгелекһеҙ, ҡаты бәғерле кеше хаҡында әйтелә. *Фәҡирлеккә дусар булһа ғәзиз башың, Дуҫтарыңа булмаһа биргән ашың, Ауырыһаң да янына һис бармаҫтар,* ***Ауыҙыңа бер тамсы һыу һалмаҫтар.*** (Д. Юлтый.)

**ауыҙыңа <бал да> май.** Яҡшы хәбәр һөйләгәндә, «шул ысынға сыҡһын!» тигәнде белдереп әйтелә. — *Ниңә? Әллә яусы булырға теләйһеңме, еҙнә? — Уға тигәндә ике ҡанат бер ҡойроҡ инде мин! —* ***Ауыҙыңа май,*** *еҙнә.* (Ж. Кейекбаев.)

*син.*: әйткәнең килһен.

*ант.*: ауыҙыңдан ел алһын.

**ауыҙыңдан ел алһын.** Насар хәбәр һөйләгәндә, «шул юҡҡа сыҡһын, булып ҡуймаһын!» тигән теләкте белдереп әйтелә. *Үткәнеңде өҙөлөп маҡтауыңды* ***ауыҙыңдан елдәр алһындар.*** (Ғ. Хәйри.) *Кит, юҡты һөйләмә, хәсрәт,* ***ауыҙыңдан ел алһын!*** (Н. Иҙелбай.) — *Иҫ китерлек нәмә һөйләйһең, — тине Борис-Кипарис, аптырап. —* ***Ауыҙыңдан ел алһын,*** *уйлап әйтәһеңме, әллә уйламаймы?* (Ә. Бикчәнтәев.)

*син.*: телеңә тилсә сыҡһын.

*ант.*: ауыҙыңа бал да май, әйткәнең килһен.

**ауыҙынҙан тартып алыр** *һөйл.* Өҙөп-йолҡоп ала торған, өҙгөс, әрһеҙ *(кеше)*.

**ауыҙ эсендә (ауыҙҙа) бутҡа бешереү.** Һүҙҙе асыҡ ҡына һөйләмәү, бығырлау. *[Хәйруш Ғәлимйәнгә:] Нимә һин унда* ***ауыҙ эсендә бутҡа бешереп*** *ултыраһың? Тәмәке бир, тиҙәр һиңә.* (Х. Ибраһимов.) *[Шахнияз Ҡәләмдиргә:] —* ***Ауыҙ эсендә бутҡа бешермә!*** *Нимә тигәндәр?* (Ә. Мирзаһитов.) *— Һин нимә унда, [Федор]* ***ауыҙыңда бутҡа бешерәһең?*** (В. Исхаҡов.)

**ауыр аяҡлы I.** Буйында булған, йөклө, ауырлы. *[Айбулат Гөлйөҙөмдөң] ...* ***ауыр аяҡлы*** *булыуҙан аҙ ғына эскә һурылып уйҡылланған сикәләренә ҡарап һоҡланды.* (Һ. Дәүләтшина.)

II. Юллыҡһыҙ кеше. *Аяғы ауыр уның, осрап ҡуймаһын.* ***Ауыр аяҡлы*** *ҡарсыҡ.*

**ауыр(ға) алыу.** Бер-берәүҙең һүҙенә, ҡылығына үпкәләү. *[Килене ятыр алдынан:] — Ҡәйнәм, — тине, —* ***ауырға алма,*** *йәшең алтмышҡа етеп бара. Йәшәгән тиклем йәшәй алмаҫһың.* (С. Агиш.) *[Ниғмәт:] —* ***Ауырға алма.*** *Көсләп асҡан күҙҙең нуры юҡ, — тине.* (Ҡ. Аралбаев.)

**ауырға ҡалыу.** Йөклө булыу, йөккә ҡалыу. *Өйләнешә һалғас та, кәләше* ***ауырға ҡалмағанға*** *ул [Ғәфүр] ғәйепле түгел дә.* (Д. Бүләков.)

*син.*: балаға уҙыу.

***ауырға <тура> килеү.*** Ҡыйын булыу. *Ауыл больницаһында бындай ҡатмарлы операция яһау үтә* ***ауырға тура килде.*** (З. Әхмәтов.) *Көҙ көндәре шәкәр сөгөлдөрө ташығанда бигерәк тә* ***ауырға тура килә.*** («Сов. Башҡ.») *Ғибатҡа уҡыуы* ***ауырға тура килде:*** *атаһы ярлы ине, ярҙам итә алманы.* (Ж. Кейекбаев.)

**ауыртҡан ер.** Күңелһеҙ тойғолар, ауыр иҫтәлектәр менән бәйләнгән хәл-ваҡиға һ. б. *Парторг һүҙ башланы: — Мин бер хәбәр, Гөлгөл, ишеттем. ... Ә Гөлгөлдөң иң* ***ауыртҡан ере,*** *иң әрнеткән ере шул ине.* (Р. Ниғмәти.) *Фәйрүзә егеттең иң* ***ауыртҡан еренә*** *төрттөрҙө. Фәһим былай ҙа, мин ултыраһы трактор бит был, тип сәмләнә ине.* (Ә. Гәрәев.)

**ауыртҡан ергә тейеү.** Күңелгә ауыр булған, әсендергес нәмәләрҙе ҡуҙғатыу. *Сәмиғулланың һүҙҙәре... Әхмәҙиҙең* ***ауыртҡан еренә тейҙе.*** (Ж. Кейекбаев.) *Ҡаһымбай Буранбайҙың* ***ауыртҡан еренә тейҙе.*** *Иөрәгенә сәнсеп-сәнсеп алды.* (И. Ғиззәтуллин.)

*син.*: ауыртҡан ерҙән тотоу.

**ауыртҡан ерҙән тотоу.** Күңелгә ауыр булырлыҡ, әсендерерлек итеү. *Ныязғолдо* ***ауыртҡан еренән тотоп*** *ҡысҡырттым әле!* (Һ. Дәүләтшина.)

*син.*: ауыртҡан ергә тейеү.

**ауыртмаған яҡҡа ятыу.** Берәй эш-хәлде ҡылғанда хәүефһеҙерәк яҡты ҡарау, уңайлыраҡ юлды һайлау. *Өйрәтеүҙән уҙғанһың инде, аҡыл белмәгән бала түгелһең хәҙер.* ***Ауыртмаған яғыңа ят.*** *Һуңынан үпкәләргә тура килмәһен.* (А. Игебаев.)

**ауыртмаç (ауыртмаған) башҡа тимер таяҡ**. Көтмәгәндә килеп сыҡҡан бәләгә, мәшәҡәткә ризаһыҙлыҡ белдергәндә әйтелә. *Тимер булманы, **ауыртмаған башҡа тимер таяҡ** булды был Хәсби малайы! Атаһы шундай кеше ине уның.* (Б. Бикбай.)

**<ауыр> тупрағы еңел булһын** *кемдең*. Вафат булған кешегә ҡарата әйтелгән теләк. — ***Ауыр тупрағы еңел булһын.** Бик интекте, — тине донъя ҡуйыусыны ҡыҙғаныусылар, күкрәктәрен тотоп.* (Р. Ғабдрахманов.) ***Ауыр тупрағың еңел булһын** инде, атай! Ваҡытһыҙ киттең һин, йәшләй киттең.* (В. Исхаҡов.) *Нажияның моңо өҙөлмәһен өсөн ғүмерен биргән Һибәтулла ағайҙың **тупрағы еңел булһын.*** («Сов. Башҡ.»)

*син.*: йәне йәннәттә булһын.

**ахмалға төшөү**. Арып, хәлдән тайыу. *Төш ауғанда **ахмалға төшөп** ҡайттылар Байыҡ менән бисәһе.* (Б. Аҫылғужа.)

**ашаған табаҡҡа төкөрөү**. Яҡшылыҡ эшләгән кешегә яманлыҡ ҡылыу. *Хатта үҙенең аҡылы, динде, халыҡ ижадын нормаль тойоуы булған кеше лә **ашаған табағына төкөргән.*** (Р. Ғарипов.)

**ашап туйғыһыҙ (ғуймаçлыҡ)**. Бик тәмле *(аш-һыу)*. *Төрлө нәмә һалынған урынашы бутҡаһы **ашап туйғыһыҙ** тәмле була.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Кинйә улының кәләше бешергән икмәк **ашап туйғыһыҙ** булып уңған.* (Әкиәттән.)

*син.*: телеңде йоторлоҡ.

*ант.*: ауыҙға алғыһыҙ, эт ашағыһыҙ.

**ашарға һорамай**. Берәй нәмәнең кәрәк булырын, ташларға ярамағанлығын белдергәндә әйтелә. ...*Өй ултыра бит, ултырһын, **ашарға һорамай** бит.* (Ж. Кейекбаев.) — *Олатай, был иҫке биҙрә ҡолағы ниңә кәрәк ул? — ти [Зөфәр]. Ҡарттың яуабы бер: — Ята бирһен, **ашарға һорамай бит!*** (Ә. Харис.)

**ашарҙай булып (ҡарау)**. Ҡаты асыу менән, нәфрәтләнеп. *Мин баҫып торам. Шунан улар мине **ашарҙай булып,** ҡыҫымға алдылар.* (Һ. Дәүләтшина.) *Был ике студенттың бер-береһен **ашарҙай булып** асыулы ҡарашып алыуҙарын ... беҙ аңлай алмайбыҙ.* (К. Мәргән.)

**аша һуҡтырыу**. Алдап, арттырып һөйләү. *[Ҡотлояр дауам итә:] — Ысын, ысын, нишләп **аша һуҡтырайым.** Әйтәм бит, халыҡ тәгәрәп ятып көлә.* (Һ. Дәүләтшина.)

**аш ҡайтарыу**. 1. Ҡунаҡта булғандан һуң, ҡайтарып үҙең саҡырыу.

2. *иҫк.* Аштан һуң доға ҡылыу.

**ашҡа тараҡан төшөү** *һөйл.* Ашарға ултырғас ҡына, теләмәгән кеше килеп ингәндә әйтелә. *Ай эттәгенәһе, **ашҡа тараҡан төштө** инде, теге Хәббиямал килә.* (Һөйл.)

**аш менәү (көҫәү)** *һөйл.* Төрлө ашамлыҡ ашағы килеү, аш теләү.

**аш өҫтө.** Һүҙҙең дөрөҫлөгөн раҫлағанда ант рәүешендә әйтелә. *[Зәйниҙе] шунда уҡ башҡалар элеп алды. — Кит әле, әй! — Әйе, **аш өҫтө!** — Ысынмы? — Ысын.* (Д. Бүләков.)

**ашығың алсылыр*.** Эшендә, тормошонда гел уңып торған кешегә ҡарата һоҡланып әйтелә.

[* **Алсы** — балалар уйынында ашыҡтың отошло ятышы].

**ашын ашаған, йәшен йәшәгән.** Оло йәштәге кешегә ҡарата ихтирамһыҙлыҡ күрһәткәндә әйтелә. *Замананың шәплегенә иҫең китер. Берәүҙең **ашын ашаған, йәшен йәшәгән,** ҡартайып бөткән атаһы үлә тип, тот та ҡайтар ҙа ебәр.* (Н. Ҡәрип.) *Нимә әйтерен Сания ла, хәтерен ҡалдырған бүтәндәр ҙә белә алманы. Ошо серен ул **ашын ашап, йәшен йәшәп** бөткәс, үҙе менән әхирәткә алып китте.* (М. Кәрим.)

**ашын биреп, ҡашын биреп тороу.** Ихласлап хөрмәт күрһәтеү. *Беҙҙең килен, барһаң, **ашын биреп, ҡашын биреп** кенә тора.* (Һөйл.)

**аяғына быҙау баҫҡан** *кемдең*. Ниҙең ни икәнен яҡшы белә, эш итергә өйрәнгән. *Хәҙер Шәйхетдин ағағыҙҙың **аяғына быҙау баҫҡан** инде, нисегерәк эш итергә белә.* («Сов. Башҡ.»)

**аяғын йыуыу** *нимәнең, һөйл.* Берәй ваҡиғаны йәки яңы алған нәмәне эске менән билдәләү. — *Яңы йылдың **аяғын йыуыу** беҙгә лә мотлаҡтыр, — тип өҫтәнем мин.* (Й. Солтанов.)

**аяғын ҡыҫҡартыу** *кемдең*. Килмәҫлек итеү, килеп йөрөүҙән тыйыу. — *Ишетһен ҡолағың! — тине Бойков [Игоргә]. — Әгәр был тирәлә тағы сыуалып йөрөйһө булһаң, **аяҡтарыңды ҡыҫҡартырбыҙ.*** (Ғ. Ибраһимов.)

**аяҙ көндө сыра (ут) яндырып эҙләһәң дә таба алмаҫһың.** Кешенең йәки берәй нәмәнең таба алмаҫлыҡ булып юғалыуы тураһында. *Ул тауҙар араһынан мине ҡырҡмаһа ҡырҡ урядник килеп, **аяҙ көндө сыра яндырып эҙләһәләр ҙә, таба алмаясаҡтар.*** (Ж. Кейекбаев.)

**аяҙ көндө йәшен һуҡҡандай булыу.** Көтмәгәндә килеп сыҡҡан хәл-ваҡиғаның көслө тәьҫире хаҡында әйтелә. *Самат та бер йылға хөкөм ителгәс, малайҙы **аяҙ көндө йәшен һуҡҡандай** булды: «Тоҡтомалға!» — тип бышылданы Азамат.* (Ә. Бикчәнтәев.) **Аяҙ көндә йәшен һуҡҡан кеүек:** *Аяҙ көндө йәшен һуҡҡан кеүек, бер көн мужиктар, ҡулдарына һәнәк, салғы, балталар тотоп, баярҙың йортон баҫҡандар.* (Т. Тажи.)

**аяҡ аҫтына һалыу** *нимәне.* Ниҙе лә булһа һанға алмау, иҫәиләшмәү. *Бөтә ауылды тотоп торған егеттең һүҙен ни эшләп **аяҡ аҫтына һалаһың?*** (Ғ. Дәүләтшин.)

**аяҡ аҫтына һалып тапау.** Һанга һуҡмай, юҡҡа сығарыу, юҡ итеү. *Ул [Иәнтимер] шул уңай менән төрлө яҡлап иҙергә, минең миндлегемде **аяҡ аҫтына һалып тапарға** тырышасаҡ.* (С. Агиш.) *Ә Ирҙегет?.. Тфү!.. Бөтә ышанысты, бөтә хөрмәт, ихтирамды **аяҡ аҫтына һалып тапаны.*** (З. Биишева.)

**аяҡ аҫтында.** 1. Яҡында ғына, эргәлә. *Яза — баш осонда, ҡаза —* ***аяҡ аҫтында.*** (Мәҡәл.) **Аяҡ аҫтындағы кеүек:** *Тау башынан бөтә тирә-яҡ* ***аяҡ аҫтындағы кеүек*** *кенә күренә.* (Ж. Кейекбаев.)

*син.*: ҡул осонда.

*ант.*: ете диңгеҙ аръяғында, йәһәннәм тишегендә, Ҡафтау артында.

2. Буйһонған, иҙелгән хәлдә.

*Башҡортостан интервенттарҙың һәм аҡгвардеецтарҙың* ***аяҡ аҫтында*** *сағы ине.* (Ә. Харисов.) *Ғәскәр башы гәҙел булһа, дошман* ***аяҡ аҫтында.*** (Мәҡәл.)

*син.*: ҡул аҫтында.

**аяҡ аҫтында ятмай.** Күп, ҡәҙерһеҙ түгел. *Бындай оҫталар* ***аяҡ аҫтында ятмай.*** *Ватыҡ тырмаларҙы йүнәтергә берәүҙең дә ҡулы ҡысып тормай.* («Сов. Башҡ.»)

**<аяҡ> атлаған һайын.** Бик йыш, әлдән-әле. *Бында* ***атлаған һайын*** *магазин.* (Ж. Кейекбаев.)

*син.*: аҙым һайын.

**аяҡ атларға (баҫырға) бирмәү** *кемгә.* Кешенең иркенә һис юл ҡуймау, үҙ теләгең менән эшләргә тынғы бирмәү. *Бер ҙә шуға барғым килмәгәйне,* ***аяҡ атларға бирмәй*** *яусылатты бит.* (Һ. Дәүләтшина.)

**аяҡ баҫмау.** Бөтөнләй бармау, йөрөмәү. *Бынан ҡабат һеҙгә* ***аяҡ та баҫмам.*** (Һөйл.) *Сәғәт һигеҙ ярымдарҙа ғүмерендә мәктәпкә* ***аяҡ баҫмаған*** *... ауыл муллаһы менән Этҡол килеп инделәр.* (Ғ. Дәүләтшин.) *Донъя имен булһын, Баҫыуҙарға Афәт кенә* ***аяҡ баҫмаһын,*** *тим.* (Т. Йосопов.)

*син.*: ишегенең ҡайһы яҡҡа асылғанын да белмәү.

**аяҡ баҫыр урын юҡ (баҫҡыһыҙ).** Кеше йәки берәй нәмә бик күп булған тығыҙ урын, ер һ. б. тураһында. *Йомшаҡ автобуста* ***аяҡ баҫыр*** *урын ҡалмаған.* (Ғ. Рамазанов.) *Яурынға саңғылар һалып, үҙәнгә төшөп киләм.* ***Аяҡ баҫырлыҡ*** *урын юҡ, сәскәләр тотоп киләм.* (Б. Рафиҡов.)

*син.*: энә төртөр урын юҡ.

**аяҡ баҫыу** *ҡайҙа, нимәгә.* 1. Берәй урынға барыу, инеү. *Фәриҙә еңгә ... клубҡа аяҡ баҫҡаны юҡ, эшкә лә сыҡҡаны юҡ...* (Ҡ. Ибәтуллин.) *Үгәй әсә өйгә* ***аяҡ баҫыуы*** *булған, теге ҡыҙҙы йәберләргә керешеүе булған.* (Әкиәттән.) *Яҡшынан ҡасма, яманға* ***аяҡ баҫма.*** (Мәҡәл.)

2. Эш, тормош башлау. *Айҙар, ... йылдар буйы эшсәндәр бәхете өсөн көрәшкә* ***аяҡ баҫтым.*** (Б. Ишемғол.) *Бөйөк Тукайҙың ижадҡа яңы* ***аяҡ баҫҡан*** *Бабичҡа яһаған йоғонтоһон тышҡы, формаль һыҙаттарға ғына ҡайтарып ҡалдырырға ярамай.* (Б. Бикбаев.)

3. Билдәле бер йәшкә етеү. *... Дүртенсе тиҫтәгә* ***аяҡ баҫҡан*** *Флүрә Еникеевнаны тап бына шулай алтын ҡуллы ветеран*

*тип ололайҙар.* («Сов. Башҡ.») *Үҙегеҙ беләһегеҙ, мин йәш түгел, етмешкә **аяҡ баҫҡан** инде. (*Һ. Дәүләтшина.)

**аяҡ (табан) ергә теймәү.** Ҡыуаныстан ҡайҙалыр бик шәп атлап барыу, шатланып елеү. *Мөмкин тиклем кейенгән булдым да. **Аяҡ ергә теймәй,** малай.* (Т. Йәнәби.) *Мин урамға сыҡһам, **табандарым ергә теймәй.** Осорҙай булып барам.* (М. Кәрим.) *Ромашканың **аяғы ергә теймәне,** тәүҙә килбәтһеҙ күренгән кәүҙәһе үҙенең йылғырлығы, еңеллеге менән хайран ҡалдырҙы.* (Ш. Янбаев.) *«Волга» туҡтау менән, ихатаға йәше-ҡарты дәррәү йыйыла. Әсә **аяҡтары ергә теймәй** — ҡанатланған һымаҡ тойола.* (Ғ. Рамазанов.)

**аяҡҡа баҫтырыу.** 1. *кемде.* Үҙ аяғы менән йөрөрлөк хәлгә килтереү, хәл-көс биреү. *Аллаға шөкөр, ер-һыуыбыҙҙың шифалы һауаһы, киленден ихлас тәрбиәһе **аяҡҡа баҫтырҙы** үҙеңде.* (З. Биишева.)

*ант.*: аяҡтан йығыу 1.

2. *кемде.* Үҫтереп, үҙ аллы тормошҡа сығарыу. ... *Дүрт-биш баланы **аяҡҡа баҫтырып,** бөгөнгөһө көндө алтынсыһы тыуа, тип көтә [әсә]... (С. Кулибай.)*

3. *кемде.* Ығы-зығы тыуҙырып, урындан ҡуҙғатыу. *Был хәл бөтә колхоз етәкселәрен **аяҡҡа баҫтыра.*** («Сов. Башҡ.») *Беҙҙең Карпат яғына үтеүебеҙ немецтарҙы шунда уҡ **аяҡҡа баҫтырҙы.*** («Сов. Башҡ.»)

4. *нимәне.* Хужалыҡтағы емереклекте тоҙәтеү, күтәреү. *Халыҡ хужалығын аяҡҡа баҫтырыу.* ▬ *Ул [Борис] икенсе көндә үк заводты **аяҡҡа баҫтырыу** эшенә сыҡты.* (Ә. Вәли.)

**аяҡҡа баҫыу (ҡалҡыу).** 1. *кем.* Һауығып, хәл йыйыу. *Фатима, инде **аяҡҡа баҫҡан** булһа ла, судҡа килә алманы.* (Б. Бикбай.) *Һөйәк менән тирегә ҡалған Емеш **аяҡҡа баҫты.** Уның һауығып, тиңдәштәре араһына сығыуына иң ҡыуанған кеше Шәүрә булды.* (З. Биишева.)

*ант.*: аяҡтан йығылыу.

2. *кем.* Хәрәкәткә килеү, ҡуҙғалыу. *Застава бик тиҙ **аяҡҡа баҫты.*** (Ғ. Ибраһимов.) — *Кәбән яна?! Әйҙәгеҙ, иптәштәр! Шул арала бөтә ауыл **аяҡҡа баҫты.*** (М. Тажи.)

3. *кем, нимә.* Тормошта, хужалыҡта хәлләнеп алыу. *Беҙ икебеҙ ҙә ярлы кешеләр. Һин дә, мин дә. Дөрөҫ, мин һуңғы ваҡытта **аяҡҡа баҫтым** да баҫыуын...* (Я. Хамматов.) ... *Бына ошо һайлау ваҡытында ярлы, батрак, **аяҡҡа ҡалҡып,** ауыл власын үҙ ҡулына алырға тейеш.* (Ш. Хоҙайбирҙин.)

**аяҡ ҡалмау.** Йөрөй-йөрөй хәлдән тайыу. *Ҡалала йөрөй-йөрөй **аяҡ ҡалманы.*** (Һ. Дәүләтшина.) *Беҙҙең ауыл менән колхоз идараһының араһы һигеҙ километр. Шул араны йөрөп, утын, бесән юллай торғас, **аяғым ҡалманы.*** («Сов. Башҡ.»)

**аяҡ-ҡулды (ике ҡулды, ҡулды) бәйләү.** Иректе, ихтыярҙы сикләү, эш-хәрәкәтте тотҡарлау. — *Уны ете йәштән өйләнеп,*

***аяҡ-ҡулын бәйләмәһә**, ваҡыты етер ине әле, — тине Хәлимә.* («Сов. Башҡ.») *Юҡлыҡ йомарт ирҙең дә **ҡулын бәйләй**.* (Мәҡәл.)

**аяҡ-ҡул менән** [ҡаршы]. Тотош, бөтөнләйгә *(ҡаршы килеү, ризалашмау). Зөлхизә ирен ярып ҡарауға **аяҡ-ҡулы менән ҡаршы** төштө, уның ауырыу булыуын, һуңғы ваҡытта бик хәлһеҙләнеүен һөйләп бирҙе.* (Н. Мусин.)

*син.*: яҡын да килмәү.

**аяҡлы бәхет**. Көтөлмәгән ҡыуаныс алып килгән кешегә ҡарата әйтелә. *Ғәлим ағай өйгә ҡайтып ингән **аяҡлы бәхет** булып күренде.* (Д. Юлтый.)

**аяҡлы ҡаза (бәлә)**. Ҡыйынлыҡ, ыҙа тыуҙырып йәшәгән кешегә ҡарата әйтелә. *[Ҡатын] Бик йәмһеҙ, бик аңра булып, **аяҡлы ҡаза** булырлыҡ булһа, мин нишләрмен?* (Ғ. Камал.) *Гәрәйҙең ҡапыл үлеп китеүенә ышанмай [Шәүәли], ләкин үҙ эсенән шуны бик теләй ине ул. Исмаһам, **аяҡлы бәләнән** ҡотолор.* (Б. Бикбай.)

**аяҡ салыу** *кемгә, нимәгә.* Эш-хәрәкәткә ҡамасаулыҡ итеү. *Үҙең беләһең, Өфөлә лә эштәр мөшкөл. Етмәһә, меньшевиктар, эсерҙар **аяҡ сала**.* (Я. Хамматов.) *[Бикбаев] Былай һәйбәт кенә алып китте эште. Тик шул Йыһанша ағай ғына **аяҡ салғылай**.* (Р. Солтангәрәев.) *Синфи дошмандар социалистик төҙөлөшкә төрлөсә **аяҡ салырға** тырыштылар.* («Сов. Башҡ.») *Ул миндә әллә ниндәй дошманын күрҙе. Хәҙер бына, уңайы тура килгәндә, нисек кенә булһа ла миңә **аяҡ салырға** тырыша.* (Р. Ғарипов.)

**аяҡтан баҫҡаны <ултырып шыуғаны>**. Бөтә булған *(әҙәм заты). Зөлхизәне оҙатыр өсөн яр буйына бөтә ауыл йыйылды. **Аяҡтан баҫҡан, ултырып шыуғандың** бөтәһе лә был ғәжәп ваҡиғанан ситтә тороп ҡалырға теләмәне.* (З. Биишева.) *[Нәҙерша:] Ярай, ҡыҙым, мин атҡа, ҡул ҡаушырып тормағыҙ. **Аяҡтан баҫҡан** ир-ҡатын, барың атҡа менегеҙ.* (М. Буранғолов.)

**аяҡтан йығылыу**. Ауырып, хәлһеҙләнеп ятыу. *Шул рәүешле тырышып-тырмашып көн итә торғас, берҙән-бер көн сатлама ғинуар ыҙғырында, бабай сирләп **аяҡтан йығылған**.* (Әкиәттән.) *Уның ҡайғыһынан Яуынбайҙың әсәһе Гөлбәзәр **аяғынан йығылды**.* (Ш. Шәһәр.)

**аяҡтан йығыу** *кемде.* 1. Ауырытып йәки ҡайғыртып хәлде алыу. *[Аҡъегет] Ағайымдың ҡайғыһы мине **аяҡтан йыға**, әсәй.* (М. Кәрим.)

2. Бик ауыр хәлгә ҡуйыу. — *Ҡәрәк-яраҡтың юҡлығы **аяҡтан йыға**, — ти фотограф.* («Сов. Башҡ.») *...Изгебайҙы союзды **аяҡтан йыҡҡан** өсөн урынынан төшөрҙөләр.* (Р. Ғабдрахманов.) *Ҡарап торған берҙән-бер кәзәбеҙҙе балсыҡ баҫып үлтерҙе. Ике тауығыбыҙ ғәйеп булды. Тауығы инде уның әллә ни мал түгел, кәзәһе **аяҡтан йыҡты**. Етемдәремдең ризығы өҙөлдө.* (М. Кәрим.)

**аяҡтан яҙыу.** Күп йөрөүҙән ныҡ арыу, йәки ауырып хәлдән тайыу, йөрөмәҫ булыу. *Көн буйы саба-саба* ***аяҡтан яҙам.*** *Кискә табан еп өҙөрлөк тә хәл ҡалмай.* (Я. Вәлиев.)

**аяҡ тартмау.** Барғы килмәү, ҡайҙалыр барырға, сығырға теләк булмау. ***Аяғым тартмаһа ла,*** *мылтыҡты ҡулыма тотоп, әле генә бүре олоп тынған яҡҡа табан атланым.* (Ә. Бикчәнтәев.) *[Мәрйәм:] Тик Миңзаданы ташлап китергә* ***аяғым тартмай.*** *Егерме йыл бергә ғүмер иткәнбеҙ, әсәле ҡыҙлы кешеләр ҙә беҙҙең кеүек татыу йәшәмәҫ.* (Ә. Мирзаһитов.)

**аяҡ терәп** [һөйләшеү]. Артыңда таяныс һиҙеп, ышаныс менән *(эш йөрөтөү, һөйләшеү). Теге ваҡытта минең кеүек ярлыябағай Зариф бай кеүектәр менән* ***аяҡ терәп*** *һөйләшә башлаған ине.* (И. Ғиззәтуллин.)

*син.*: арҡа терәп [һөйләшеү].

**аяҡ тибеп (йәшәү, эш итеү).** Үҙ көсөңә ышаныс тойоп иркенлек менән *(көн итеү, эш алып барыу). Бөгөн бында кейәүең менән ҡыҙың йәшәй* ***аяҡ тибеп*** *донъяға.* (Р. Бикбаев.) *Айғыр, асылда, Сөнәгәттеке ине. Сөнәгәт быны яҡшы белә. Шуға күрә ул Ғилаждың улдары менән* ***аяҡ тибеп*** *ҡаты, иркен һөйләшә ала.* (Ж. Кейекбаев.) *[Ниса:] Беҙҙең ферма бына ниндәй ул: эшләй ҙә белә,* ***аяҡ тибеп*** *байрам да итә белә.* (М. Хәйҙәров.)

**аяҡты юрғанға ҡарап һуҙыу.** Үҙ самаңа, мөмкинлегеңә ҡарап эш итеү. ...*Сама кәрәк. Тауға ҡарап тау булып булмай бит.* ***Юрғаныңа самалап аяҡты һуҙаһың.*** (Ә. Вәли.)

**аяҡ һуҙыу (һоноу)** *һөйл.* Үлеү, вафат булыу. *Ҡыхылдап ятҡан өсөн бер кем дә аҡса түләмәй. Бер-ике йыл ятҡас,* ***аяғыңды һуҙаһың,*** *шунан ҡыхылдап йүткереүең үҙенән-үҙе бөтә.* (Ж. Кейекбаев.) *Тағы ла бах! — Һәм ғәйепһеҙ шешҡолаҡ* ***аяҡ һуҙа.*** («Сов. Башҡ.») *Шәрифулла интегеп үрсетә башлаған малына ҡарап туя алмай. Киләсәктә аслыҡтан* ***аяғын һоноп*** *ятһа ятасаҡ, ләкин мал һанын арттырыуҙан туймаясаҡ.* (Я. Хамматов.)

*син.*: донъя ҡуйыу, донъянан китеү, йән биреү, мәңгелеккә китеү, гүмер һүнеү, теге донъяга китеү, гүрғә кереү, ҡәбер эйәһе булыу, ғүмер өҙөлөү, ата-бабалар янына китеү, мәрхүм булыу.

**аяҡ эҙен өҙмәү (һыуытмау).** Һәр ваҡыт килеп-китеп тороу, онотмай килә йөрөү. *Малеевканан* ***аяҡ эҙен өҙмәгән*** *Сергей Бородин менән ... таныштырҙылар.* (С. Кулибай.)

**аяҡ ялы.** Йомошҡа барып килгән өсөн бирелгән бүләк йәки һый. *Барыуымдың* ***аяҡ ялы*** *ла сыҡманы, исмаһам, сәй ҙә эсермәнеләр.* (Һөйл.)

# Б

**баҙар ҡороу** *һөйл.* Күмәкләшеп шау-шыу килеү, ҡысҡырышып һөйләшеү.

**баҙары артыу (үҫеү).** 1. *кемдең.* Абруйы үҫеү *[Зиннур] ... Партизандарға икмәк килтерҙе, ҡатыҡ-һөт ташыны, аттарын ҡараны. Үҙе ише малаиҙар алдында уның* ***баҙары*** *икеләтә* ***артты.*** (К. Мәргән.) *Колхоз председателе 'Ҡунаҡҡолдоң* ***баҙары үҫә*** *башланы. Ул хәҙер күрше «Инеш» председателенән, элекке кеүек, кәпәс һалып бурыс һорамай.* (Х. Ғиләжев.)

2. *нимәнең.* Ҡиммәте, баһаһы күтәрелеү. *Ситсаның* ***баҙары арта.***

*ант.*: баҙары төшөү.

**баҙарын күтәреү.** Кешенең абруйын, нәмәнең ҡиммәтен арттырып күрһәтергә тырышыу. *Һуңғы һүҙҙәрҙең дөрөҫ түгеллегенә,* ***баҙарын күтәреү*** *өсөн Шакирәнең үҙе тарафынан сығарылған булыуына бөтәһе лә ышана ине.* (К. Мәргән.) *[Кәбир] Әллә үҙен белдеклегә һанап,* ***баҙарын күтәрергә*** *тырышамы? — тип уйлай Камалов йәш агроном тураһында.* (Я. Вәлиев.) ... *Арыҫлан ғына, кинйә улының* ***баҙарын*** *бик* ***күтәреп*** *ебәрергә теләмәгәнлектәнме, әллә башҡа берәй уйҙанмы, башта һүҙгә ҡатнашманы.* (Ғ. Ибрахимов.)

*ант.*: баҙарын төшөрөү.

**баҙарын төшөрөү.** Кешенең абруйын түбәнәйтеү, нәмәнең ҡиммәтен кәметеү. *[Хөсәйен ҡарт] ...үҙенең* ***баҙарын төшөрә*** *торғандарҙан түгел ине.* (В. Исхаҡов.)

*ант.*: баҙарын күтәреү.

**баҙ (соҡор) ҡаҙыу** *кемгә.* Аҫтыртын этлек уйлау. *[Мазһар:] Янама, Мәғзүм,* ***ҡаҙыған баҙыңа*** *килеп ҡапланырға тура килмәһен.* (Х. Ибраһимов.) *[Кәримә:] Оят та юҡ, бит тә юҡ! Үҙ иптәшеңә, дуҫыңа* ***баҙ ҡаҙып*** *йөрө әле.* (Я. Вәлиев.) *Кешегә* ***соҡор ҡаҙма,*** *үҙең төшөрһөң.* (Мәҡәл.)

**байын ҡайтарыу** *нимәнең.* Эшләгән эштең һ. б. хаҡын сығарыу. *Ҡунаҡ булыуҙың* ***байын ҡайтарырға*** *тырыштым инде, — тип йылмайҙы Шаймурат.* (Д. Исламов.)

**балаға уҙыу.** Йөклө булыу. *[Латиптың ҡатынының] ...* ***Балаға уҙып*** *йөрөгән ваҡыты икән, танһыҡ аш — вобланы күргәс, бөтөнләй тәҡәтһеҙ ҡалған теге.* (Ф. Хөсни.)

*син.*: ауырға ҡалыу, ауыр аяҡлы (булыу).

**бала йәнле.** Бала-саға өсөн өҙөлөп торған, бала яратҡан. ***Бала йәнле*** *ата.* ***Бала йәнле*** *кеше.*

**балаҡ буйы** *һөйл.* Бик бәләкәй (бала). ***Балаҡ буйы*** *балаға кеше ат тотторамы.* (Һөйл.)

*син.*: бот буйы, бармаҡ буйы.

*ант.*: тирәк кеүек.

**балауыҙ һуҙыу.** Бер урында төпләнеп китеү, ныҡлап урынлашып алыу. *Кинйәбикә етенсене бөткән Фәниәһен Дәүләкән педучилищеһына алып барҙы. Тик Фәниә бында **«балауыҙ һуҙа»** алманы: бөтә фәндәрҙән яҡшы уҡый, ә рус телен тарта алмай...* (Н. Мусин.) *Ситтә лә **балауыҙ һуҙып** китә алманы, ахырыһы, был малай. Ней үҙе ҡайтмай, ней киленде ҡайтып алып китмәй.* (Ш. Янбаев.)

**балауыҙ һығыу.** Илау *(шаяртып әйтелә). ... Шулай ҙа төндәрен ҡыҙҙарға белдермәй генә **балауыҙ һығып** алған саҡтар булғылай әле.* (З. Биишева.) *Шатлығы ла хәҙер, ҡайғыһы ла йыш ҡына **балауыҙ һыҡтыра...*** (С. Ҡудаш.) *Әйҙә, идараға керәйек. Беҙ һалдаттар бит, уйлашайыҡ. Ниңә **балауыҙ һығырға?*** (Х. Ғиләжев.)

*син.*: йәш ағыҙыу (түгеү), күҙ һытыу.

**бал да май эсендә** [йөҙөү, йәшәү...]. Һый-зиннәткә күмелеп, рәхәттә *(йәшәү). Ҡәйүм ниңә **бал да май эсендә** йөҙә лә, Хәйрүш ниңә ғүмере буйы кеше типкеһендә?* (Ғ. Лоҡманов.) *[Рубцов:] — Быйыл һәр гектарҙан 25-әр центнер уңыш алдыҡ. **Бал да май эсендә** йәшәйбеҙ.* (Ә. Ихсан.)

*син.*: бер ҡулы майҙа, бер ҡулы балда; йәннәт түрендә.

**балта сабыу** *нимәгә.* Үҙеңә, йә башҡаларға зыянлы эш эшләү. *Үҙ бәхетеңә үҙең **балта сабаһың** һин. Бар, ялын, кире алһындар.* (Ғ. Ғүмәр.) *Ауылдаштарының терәгенә **балта сабыуҙа,** йыртҡыслыҡта ҡыуаныс табыуы — Нияҙғолдоң рухи-әхлаҡ яҡтан тарҡалыуының бер бағҡысы.* (М. Минһажетдинов.) *Үҙҙәренең бәхетле йәшлегенә, мөхәббәтенә, өмөтөнә **балта сапҡан** дошманға ҡаршы көрәшкә сыҡты улар.* (Ф. Рәхимғолова.)

**балта һабы ҡыҫҡа** *кемдең.* Бик ҡыҙыу, яндырай. *Һай, һай, кейәүҙең **балта һабы ҡыҫҡа** күренә.* (Һөйл.)

*син.*: сикәһе ҡыҫыҡ.

**балта (һәнәк) һорағанға көрәк биреү, көрәк һорағанға балта биреү.** Һүҙ айышын аңламай хәбәр һөйләү, яңылыш хәбәр һалыу. *[Нәсих Гөлнисаға:] — Етер, етер һиңә! Тәүҙә бел, унан һөйлә, **көрәк һорағанға балта** килтереп тотторараһың, — тип һөйләнде...* (Ә. Зәйнуллин.)

**балтаһы үтмәү** *кемдең нимәгә.* Көсө, барымы етмәү (берәй эшкә). *[Рахмай:] Мәктәпкә бара алмай ул. Ундай ергә **балтаһы үтмәй** Алағанаттың.* (К. Кинйәбулатова.)

*син.*: теше үтмәү (батмау).

**балтаһы һыуға төшөү** *кемдең.* Ныҡ күңелһеҙләнеү, бошонҡо булыу. *[Ғариф:] — Һин ни эшләп, **балтаһы һыуға төшкән** кеше кеүек йөрөйһөң?..* (М. Ғафури.) *Ә ҡарты һаман маңлайын яҙып ебәрмәне, **балтаһы һыуға төшкәнме** ни, уй ҙа уй.* (Б. Бикбай.) — *Ниңә улай **балтаң һыуға төшөп** тора, ә? Әллә Ҡорбанбикә үпкәләттеме?* (С. Агиш.) *Тыйнаҡмын да, ҡолтан тинеләр,*

*Ауыҙ йырып торған мәлдәремдә **һыуға төшкән балтаң**, тинеләр.* (Т. Йосопов.)

*син.*: танау төшөү, шөмтөр ҡойолоу.

**балтырған тарау** *һөйл.* Ҡунаҡтан ҡалған аш-һыу менән икенсе кешеләрҙе һыйлау.

**балыҡ кеүек.** Йылҡылдап торған көр малға, тулы кәүҙәле ҡатын-ҡыҙға ҡарата әйтелә.

**бармағынан бал тама.** Һәр эшкә ҡулы бара, бик оҫта.

*син. ҡар.*: алтын ҡуллы.

**бармағы үҙенә (үҙ яғына) ҡарай (табан) <кәкре>** *кемдең.* 1. Урлашыуға, сәлдереүгә әүәҫ, ҡулсыр. *Билдәле, **бармағы үҙ яғына кәкре** Кәлимуллинды ферма эштәре бөтөнләй ҡыҙыҡтырмай, ҡырыныраҡ ятҡан әйберҙе эләктереү яғын ҡарай ул.* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: кәкре ҡуллы, шуҡ ҡуллы.

2. Үҙ мәнфәғәттәрен генә ҡайғыртҡан, үҙ яғын ғына ҡарай торған. *Беҙҙең хәҙрәт бик мәкерле, хәйләкәр, **бармағы үҙенә ҡарай кәкре** кеше, уның менән эшең төшмәһен...* (М. Ғафури.)

**бармаҡ араһынан (аша) ҡарау** *нимәгә.* Тейешле етдилек, иғтибар бирмәү, һалҡын ҡарау. *Ҡайһы бер иптәштәр ... әсә телен ғәмәлгә ҡуйыуға һаман да ышаныслы күҙ менән ҡарамай, **бармаҡ араһынан ғына ҡарап** йөрөгәнлектәрен күрәбеҙ.* (Ш. Хоҙайбирҙин.) *Был күңелһеҙ тарих ҡайһы бер партия, совет органдарының халыҡты коммунистик рухта тәрбиәләүгә **бармаҡ аша ҡарауы**, яңы кеше өсөн көрәштең тейешле кимәлгә ҡуйылмағанлығы тураһында һөйләй.* («Сов. Башҡ.»)

**бармаҡ араһынан (осонан) һығып сығара.** Үтә һаран. ...*Әүештәүеш итеп тапҡан аҡсаһына **бармаҡ осонан һығып** сығарып ҡына булһа ла, Әхмәди сепаратор һатып алырға булды.* (Ж. Кейекбаев.)

*син.*: ҡырҡһаң ҡаны сыҡмаҫ.

**бармаҡ баҫымындай (битендәй).** 1. Ҙур нәмәне бәләкәсәйтеп күрһәтергә теләгәндә әйтелә. *[Әкбәр:] ... Ошо эш уңышлы барып сыҡһа, **бармаҡ баҫымындай** ҙа ер бирәсәк түгелмен.* (Т. Хәйбуллин.)

2. Бәләкәй нәмәне ҙурайтып күрһәтергә теләгәндә әйтелә. *Сәлмәндең башында **бармаҡ битендәй** ике ялтыр урын булған.* (Әкиәттән.)

**бармаҡ башындай (осондай).** 1. Ҙур нәмәне бәләкәсәйтеп күрһәтергә теләгәндә әйтелә. *Бармаҡ башындай буй.* ▬ *[Федор] Ҙур кәүҙәгә эйә булһа ла, **бармаҡ башындай** балаларҙан туҡмалып, яланғас тәнен йырттырып сыҡты шул.* (Т. Хәйбуллин.) *Ошондай **бармаҡ башындай** ғына әҙәм затында ҡайҙан ул шундай аҫыл тауыш...* (М. Әбсәләмов.)

2. Бәләкәй нәмәне ҙурайтып күрһәтергә теләгәндә әйтелә. ***Бармаҡ башындай** еләк.*

3. Бик әҙ, саҡ ҡына. *Күпме кеше зар илай, алланан мәрхәмәт һорай, ... ә алланың бер генә лә, **бармаҡ осондай** ҙа мәрхәмәте юҡ.* (Д. Юлтый.)

*син.*: тырнаҡ ҡараһындай (осондай).

**бармаҡ буйы.** Кешенең буйын бәләкәсәйтеп күрһәтергә теләгәндә әйтелә. — *Мин ошо кейәүем менән ҡыҙыма килгәндә, бынау Мәрйәмем ни **бармаҡ буйы** ғына ине бит әле. Хәҙер бына ул үҫлаптай ҡыҙ булып китте.* (Һ. Дәүләтшина.)

*син.*: бот буйы, балаҡ буйы.

*ант.*: тирәк кеүек.

**бармаҡ менән һанарлыҡ.** Бик әҙ. *Ул саҡта ауылдан унынсыны бөтөрөп сығыусылар **бармаҡ менән** генә **һанарлыҡ** ине.* (Н. Мусин.) *Хәҙер өйҙәрҙең күбеһе шифер, таҡта, ҡалай түбәле. Ҡабыҡ түбәлеләр аҙ, **бармаҡ менән** генә **һанарлыҡ** ҡалған.* («Сов. Башҡ.»)

*ант.*: һанап бөткөһөҙ.

**бар сағында бүреләй, юҡ сағында шүреләй.** Нәмәһен һаҡлап тотона белмәгән, әрәм-шәрәм иткән кешегә ҡарата әйтелә. ... ***Бар саҡта — бүреләй, юҡ саҡта — шүреләй** торорға ярамаҫ, аҙыраҡ ҡыҫынҡыраҡ ашарға кәрәк.* (М. Ғафури.) *[Байгилдин] Үҙ ағына хәстәрһеҙ булһа ла, колхоз хужалығын **«бар сағында бүреләй, юҡ сағында шүреләй»** итеп алып барманы.* (Х. Ғиләжев.)

**бар тип <тә> белмәү** *кемде, ниҙе.* Иҫәпкә алмау; иғтибар итмәй үҙенсә эшләү. *Иштәрҙе әйтсәле, әйтерһең, көн һайын сходҡа йөрөйҙәр, байын-түрәһен **бар тип тә белмәйҙәр** ҙә баһа!* (Һ. Дәүләтшина.) *Барып етеп, Әхматшаға бәйләнә башлаған инем, бар тип тә белмәй, баҙарҙа һатыу өсөн кәрзин үреп ултыра.* (Д. Исламов.) *Аҡ һаҡаллы ҡарттың ерәнсәһе генә арыуҙы **бар тип тә белмәй**, ти.* (Әкиәттән.)

**бары менән байрам.** Булған күпмелер нәмә менән ҡәнәғәт булғанда әйтелә. *Ғәйфулла ҡаҙан кеүек өлкән башын ҡағып ҡуйҙы: — Ну, **бары менән байрам** инде, туған.* (Р. Сабит.)

**барынан юғы.** Бар булғанынан юҡ булғаны артыҡ, рәте-йүне юҡ *(асыу белдергәндә әйтелә). Ғәбделхәй [Нурғәлене] оло тракторға ултыртырға тип ҡарағайны ла, тыңламаны. Нишләйһең, **барыңдан юғың**, тип, эштән ҡыуып сығарырға тура килде.* (Р. Солтангәрәев.)

**барыр ер, батыр күл юҡ.** Ярҙам һорар, ышанып морон төртөр кеше булмаған осраҡҡа ҡарата әйтелә.

**баҫҡан ерҙә ут (оҫкон) сығарыу.** Бик ғәйрәтле; үткер, сая. ***Баҫҡан еренән ут сығарып**, маңлайынан тир сығарып эшләмәгән ир — ир түгел ул.* (М. Тажи.) ***Баҫҡан ерҙә улар ут сығарған**, таш һындырған тотҡан ерендә.* (И. Кинйәбулатов.) *[Таиба әбей:] Йә, ниндәй ҡатын ине бит? **Баҫҡан еренән оҫкон сәсрәп** торор ине.* (З. Биишева.)

**баҫып биреү** *кемде.* Ҡыҙҙы кейәүгә теләгенә ҡаршы килеп, көсләп биреү. *Әүәле кеше ҡыҙҙы һүҙенә ҡарамай, **баҫып бирҙе** лә ҡуиҙы.* (Һөйл.)

**бауыр баҫыу** *кемгә, нимәгә.* Ныҡ эйәләшеп йыуаныу, үҙ итеү. *Үҙе иҫ белгәндән алып, Юлия ағаһы Григорийға **бауыр баҫҡан**, гел уның менән бергә йәшәгән.* (Һ. Дәүләтшина.) *Хәмдиә апай тәүге көндәрҙән үк етемдәргә **бауырын баҫты**, бөтәһен дә тиң күреп, эскерһеҙ хәстәрлеге, алсаҡлығы менән йөрәктәренә юл тапты...* («Сов. Башҡ.»)

**бауырға баҫыу** *кемде.* Яҡын күреп ҡәҙерләү, әпәүләп тороу. *[Камилә:] Имсәк сағында ғына атаһы ташлап сығып китте... **Бауырыма баҫып**, яңғыҙым үҫтерҙем.* (Ш. Янбаев.)

**бауырға инеү (кереү).** Кешенең күңеленә үтеп инергә тырышыу. *[Был егет] Сибәрерәк ҡыҙҙар янында, ата ҡаҙҙай ҡомағайланып йөрөгән булды, эстәренә, **бауырҙарына кереп** бара.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Малаиҙы әйтәм, бигерәк әрһеҙ, **бауырыма кереп** бара. Әле тегеһен, әле быныһын һораша.* (Р. Низамов.)

**бауыр ите.** Күңелгә бик яҡын, ҡәҙерле. *Бала — **бауыр ите**.* (Мәҡәл.)

**бауыр ҡайнау.** Әсенеп өҙгөләнеү. *Өҙөлә үҙәгем, **ҡайнай бауырым**, Һеҙ дуҫтарҙы, дуҫ-иштәрҙе, дуҫ, туғаным күргәнсе.* (Халыҡ йырынан.)

**бауыр ҡалҡыу (күтәреү, ҡатыу).** 1. Үҫеп етеп, нығыныу, көскә тулышыу. *Кешеләр, йәш малаиҙарының **бауырҙары** аҙыраҡ **ҡалҡа төшкәс**, Тимерйән тимерсегә биреп, тимерселек һөнәренә өйрәтер булдылар.* (Әкиәттән.) *Тәпәй баҫҡан ваҡыттан алып **бауыры ҡалҡҡан** ир-егет йәшенә еткәнсе улар бергә.* (Ш. Насыров.) *[Аҫылбикә:] Исмаһам, бынау Айытбаиҙың **бауыры ҡалҡманы**. Ун өс йәштән йәтим булды.* (Т. Хәйбуллин.) *Олатаһы Кусәккә: — 'Куй, балам, юҡ менән булма... Ҙурайып, бәләкәс **бауырың ҡатыңҡырағас**, барырһың.* («Бабсаҡ менән Ҡарағөлөмбәт».)

*син.*: быуын ҡатыу.

2. Тормошта нығып алыу, аяҡҡа баҫыу. *Һаранбаиҙың бик асыуы килһә лә, үҙен тыйған, ти. Өмөтбайҙың ҡапыл **бауыры ҡалҡып** китеүен ул бер-бер мөғжизәнән тип уйлаған.* (Әкиәттән.) **Бауыр ҡалҡытыу**: *Әле яңы ғына башҡорт йәштәре күтәрелеп, **бауыр ҡалҡытып** килгән саҡ була.* («Сов. Башҡ.») *Һуғыш бөтөп, **бауыр ҡалҡытып** өлгөрмәне халыҡ, ҡытлыҡ килде.* («Ағиҙел».)

**бауыр өҙөлөү.** Һағыш эсендә яныу, өҙгөләнеү. *Ятҡа киткәс, Бәҙекәй, сәләм әйтәм, илай-илай **бауырым өҙөлөп**.* (Халыҡ йырынан.) **Бауырҙы өҙөү**: *Бай-баярҙар ер талаған, **бауыр өҙгән** ҡылған эш.* (М. Илбаев.)

*син.*: эс яныу (көйөү, һыҙлау).

**бауыр һөйрәү**. Тормошта хәлләнә, ныҒына алмай йонсоу. *[СураҒол:] Тәненә ит үрмәй, йөрәгенә май ҡунмай,* ***бауыр һөйрәп,*** *ыҙа сиккән Күсәрбай ҡусты ла беҙҙән китте.* (Т. Хәйбуллин.)

**баш аша атлау**. Кешенең фекере, уйы менән иҫәпләшмәй, уны һанҒа һуҡмай эш итеү. *...Улай үҙ бригадирыҒыҙҙың* ***башынан аша атлап*** *йөрөмәгеҙ, тәүҙә уның менән һөйләшегеҙ.* (Б. Бикбай.)

**баш баҫып**. 1. Бик күндәм, бирелеп *(эшләү). Хәҙер* ***баш баҫып*** *уҡырҒа ла уҡырҒа кәрәк — Зөбәйҙең бөтә хыялы ошо...* (Ж. Кейекбаев.) *Абдулла аҒай эштән йәм табып йәшәй торҒан кешеләрҙең береһе ине. УҒа ыңҒай ҙа, кире лә яуап бирмәне,* ***башын баҫып*** *эшләп йөрөүен белде.* (Н. Мусин.)

2. Яуап бирмәй, һүҙ әйтмәй *(тороп ҡалыу). Шулай ҙа [СәҒиҙә] Рәшиҙә алдында* ***баш баҫып*** *өндәшмәй ҡала алманы.* (Б. Бикбай.)

**баш бирмәү**. 1. Йөрөтеүгә килмәү, көс бирмәү *(малҒа ҡарата).* ***Баш бирмәгән*** *дала аттарын йүгәнләп мендек...* («Башҡорт атлылары».)

2. Кеше ихтыярына бирелмәү, буйһонмау. *Бер ҡыҙып, йәне көйөп китһә, атаҒа ла, баташаҒа ла* ***баш бирмәҫ*** *ярһыу ҡылыҒы бар ине мәрхүмдең.* (З. Биишева.) *Райкомда тикшергәндә лә,* ***баш бирергә*** *теләмәгән беҙҙең был матур егет.* (Ғ. Әхмәтшин.) *Шуныһы бик ҡыҙыҡ: башҡа бер уҡытыусыҒа ла* ***баш бирмәгән*** *шуҡ һәм ялҡау малайҙар уҒа ышанып серҙәрен сисәләр.* (М. Садиҡова.)

**баш бөгөү**. Үтенес белдереп ялыныу, инәлеү. *Шул рәүеш ниҒмәткә шөкран итмәгәс, Тәңрегә, мәҒрурланып,* ***баш бөкмәгәс,*** *Тине алла: — Ник миңә буйһонмайһың?* (Ш. Бабич.)

*син.*: баш эйеү 4.

**баш бөтөү**. 1. Һәләк булыу, һәләкәткә дусар булыу.

2. Ауыр уйҙан, фекер эшенән ныҡ йонсоу. *Уйлай-уйлай* ***баш бөттө.***

*син.*: мейе сереү.

**баш бөттө**. Ҡурҡып хафаланҒанда, хәүеф белдергәндә әйтелә. ...*И-их,* ***бөттө*** *минең* ***баш*** *бөттө, туҒанҡай, — ярһыуынан Битиков тештәрен шыҒырлата, бармаҡтарын һындырҒылай.* (Д. Юлтый.) *Азаттың күңеле тулып китте, хатта күҙендә йәш ялтырап ҡалды. Ул күҙен еңе менән һөртөп алды. Командир күреп ҡалһа,* ***бөттө баш,*** *отрядтан остоң тигән һүҙ.* (Ә. Бикчәнтәев.) **Бөттө баш <ҡалды муйын һерәйеп>** *шаяр.: [Ҡоләхмәт:]* ***Бөттө баш, ҡалды муйын һерәйеп.*** *Бына хәҙер әсәйең беҙҙең кәрәкте бирә лә бирә инде. Түҙеп кенә тор.* (Е. Кравченко.)

**баш булыу**. 1. *нимәгә.* Үҙ ихтыярыңа буйһоноу, эйә булыу. *Телеңә* ***баш бул.*** ▬ *Барлыҡ эштәрҙән элек* ***баш бул,*** *туҒан, үҙ иркеңә.* (М. Ғафури.)

2. *кемгә.* Өҫтөнлөк итеү, хужа булыу. — *Бар, хәҙер шайтанҒа* ***баш бул,*** *пис (шаҡшы)! — тине, — Ал бөтә нәмәңде, кит, Иб-*

*лес! — тине [тәңре].* (Ш. Бабич.) *Ҡойроғоң* ***баш булһа,*** *башың таш була.* (Мәҡәл.)

**баш ватыу.** Берәй эште, мәсьәләне хәл итергә тырышып, ныҡ уйлау. *Уйлап-уйлап* ***баш ватып*** *та тапмағас, илай инем ҡысҡырып, баш сатнағас.* (Ш. Бабич.) *Байғужа төнө менән шул ашлыҡ сабыу тураһында* ***баш ватты.*** (Д. Юлтый.) *Бабай менән әбей был балаға исем ҡуйлап бик оҙаҡ* ***баш ватҡан...*** (Әкиәттән.) *Үҙенең ни теләүе, нимә эшләүе хаҡында, гәҙәттә, артыҡ* ***баш ватып*** *торорға яратмаған Закир был юлы ла оҙаҡ уйламаны.* (З. Биишева.)

**баш етеү** *кемдең нимәгә, ни эшләргә.* Уйлап осона сығыу, уйлап еткереү. *Азат ҡапҡаға барып терәлгәс тә йүгереп кереп китмәне. Артына әйләнеп ҡарарға* ***башы етте.*** (Ә. Бикчәнтәев.) **Баш етмәү:** *Үҙ* ***башы ғына етмәй*** *быларға Шәфиғулла Нигмәтбаевтың.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Беҙҙең дә әллә ни эшләп аңшайып теге ҡорал склады урынын һорашырға* ***баш етмәгән.*** (Ә. Вахитов.) *Заманалар булған элгәре, булған илдең батыр улдары.* ***Баш етмәҫлек*** *эштәр эшләгәндәр, бөтә ғәләм белгән уларҙы.* (С. Юлаев.)

**баш йүнәтеү (төҙәтеү).** Ныҡ эсеп иҫергәндән һуң, яңынан бер аҙ төшөрөп алыу. *Кисә кис тап булған кешеләр уны* ***баш йүнәтергә*** *яңынан саҡырҙылар. Старателдәр тапҡандарын араҡыға тыҡтылар.* (Я. Хамматов.)

**баш китеү.** Ҙур бәләгә тарыу. Хәҙер киткәс, **баш китте** инде. *Үкенеү менән бер файҙа ла сыҡмай.* (Д. Юлтый.) *Бына тотолғандар. Инде быларҙы төрмә көтә. Борсола атай, көрһөнә: — Улымдың* ***башы китә.*** (Р. Нигмәти.) *Нәҙершаға ҡарап ул [Нуретдин] дауам итте: — Беләһеңме, бының өсөн иң элек һинең* ***башың китәсәк.*** («Сов. Башҡ.»)

**баш-күҙ алыу.** 1. Йыйнаҡланып, берәй хәлгә килеү. *...Капитан Пистоленко батальоны иртәнге һөжүм башланғансы* ***баш-күҙ алып,*** *нығынып өлгөрә алмағайны.* (Ғ. Әмири.) *...Ығы зығынан, шау-шыуҙан* ***баш-күҙ алғас,*** *Ҡотлоғужин кейәүҙе ситкә алып китте.* (Д. Исламов.)

2. Нығынып, хәлләнеп алыу, донъяны яйға һалыу. *Көҙ,* ***баш-күҙ алғас,*** *берегеп, ике ауыл кооператив асып ебәрҙек...* (Ғ. Амантай.) *Тик шахтаға килгәс,* ***баш-күҙ алдыҡ,*** *әҙ күрҙекме тормош ҡыйынын?* (С. Кулибай.)

**баш (түбә) күккә тейеү.** Бик ныҡ шатланыу. *Һыуһылыу әбей, улын бисәләр маҡтағанға,* ***башы күккә тейерҙәй*** *булып һауаланды...* (Ғ. Дәүләтшин.) *Ҡыҙрас әйткән һүҙҙән йәш егеттең* ***башы күккә тейгән*** *шикелле. (Ир бала өсөн «Атас!» тиеүҙән дә оло маҡтау табыу икеле...).* (Р. Бикбаев.) *Былтыр көҙ, колхоз өр-яңы «Москвич» автомашинаһы һатып алғас, автомеханиктың* ***башы күккә тейә.*** («Сов. Башҡ.») — *Баянда уйнарға йәһәт өйрәндең, әй, — тип маҡтап ебәргәс, уның* ***түбәһе күккә тейҙе.*** (Н. Мусин.)

*син.*: атҡа менгәндәй булыу.

*ант.*: танау төшөү, кикрек шиңеү.

**баш күтәреү**. 1. Көс туплау, хәлләнеп алыу. *[Давыдов:] Дошман **башын күтәрә** башланы, ә Кондрат?* (М. Шолохов.) *Пролетариат был ҙур һуғышта Дутовты, контрреволюцион армияны мәңге **баш күтәрә алмаҫлыҡ** итеп иҙә.* (З. Шәрҡи.)

2. Көс менән ҡаршы ҡуҙғалыу. *Көнбайыш фронтта бөтә дивизиялар **баш күтәргән**, офицерҙарҙы ҡырып сыҡҡандар.* (Д. Юлтый.) *Тик ул баиға **баш күтәргәс**, байы уны дарға аҫтырған.* (Ғ. Амантай.)

*син.*: баш ҡалҡытыу.

**баш күтәрмәй (ҡалҡытмай)**. Бик бирелеп, тырышып *(эшләү, уҡыу). Баш күтәрмәй эшләү.* ▬ *[Хәлимә] Берәй техникумға эләкһә, **башын күтәрмәй** уҡырға әҙер ул.* (Ғ. Ғүмәр.)

**башҡа етеү**. 1. Үлтереү, һәләк итеү. *Күмәгенә кос етмәҫ, берәмләп барыһы ла тотолорҙар. Шулайтып, барыһының да **баштарына етербеҙ**.* (Ғ. Дәүләтшин.) *Ҡыҙылармеец Мотаһар Ғәлин бер атакала ун ике, Фаяз Баев туғыҙ фашистың **башына еттеләр**.* (Ә. Ихсан.)

*син.*: башын ашау.

2. Юҡҡа сығарыу, бөтөрөү. *Иҫәпләп бөткәс, акт яҙҙылар, уны директорға индерҙеләр. Ҡарағыҙ, йәнәһе, теге аҙғын күпме майлы ҡалъяның **башына еткән**.* («Сов. Башҡ.») *Ҡар **башына** ҡар етә, бай **башына** мал етә.* (Мәҡәл.)

3. Ҡыҙ кешене әрәм итеү. *Йәп-йәш көйөнә, ауылда бер-ике ҡыҙҙың **башына еткәйне** инде ул [Һатыбал]. Бөтә ҡыҙҙарға ҡул һалырға ымһынып ҡына йөрөй ине.* (З. Биишева.)

**баш ҡаҙығы**. Өләшкә, яҙмышҡа төшкән бәлә-ҡаза. *Яҡшы һүҙ — йән аҙығы, яман һүҙ — **баш ҡаҙығы**.* (Мәҡәл.)

**башҡа инеп <тә> сыҡмау**. Уйға бөтөнләй килмәү, уйлап та ҡарамау. *Күл буйы йәнлектәрен һаҡлау тигән уй ял йорто хужаларының **баштарына инеп тә сыҡмай**, күрәһең.* («Сов. Башҡ.») *Сит илдәрҙә быуың менән шөғөлләнеү [Ғаяз Исхаҡиҙың] **башына инеп сыҡмай** ине.* (З. Вәлиди. Ә. Юлдашбаев тәржемәһе.)

*ант.*: башҡа килеү (төшөү).

**башҡа килеү (төшөү)**. Ниндәйҙер уй, фекер аңға килеү. *Итегемдең башы ҡырылған. Ниңә инде шунда, юл буйында таҙарттырып алырға **башыма килмәне** икән?* (Д. Юлтый.) *Колхоз байлығын үҙләштергәндә, нимә уйлаған һуң ул Фәрғәт? Өс балаһының яҙмышы **башына килмәнеме** икән ни?* («Сов. Башҡ.») *Әле генә ен сәсеп асыуланып торған еренән Ҡотлояр шарҡылдап көлөп ебәрә, **башына** ниндәй уй **төшһә**, шуны ҡыуыусан.* (М. Минһажетдинов.)

*ант.*: башҡа инеп <тә> сыҡмау.

**башҡа килтереү**. Нимә тураһындалыр уйлап ҡарау, фараз итеү. *Һәр хәлдә егет эргәһенә ҡыҙҙың үҙе килеүе мөмкин булмаған эш тип, уның килеүен **башыма ла килтермәнем**.* (Т. Йәнә-

**би.)** *Сәғиҙә был ауылда ғүмер буйы йәшәрмен тип* ***башына ла килтермәй*** *ине...* (М. Тажи.)

**башҡа ҡабыу.** Тәьҫире менән башты ауырттырыу *(әҫелек, еҫ, шау-шыу һ. б. тураһында). Күп һүҙ* ***башҡа ҡаба.***

**баш ҡалҡытыу.** 1. Ауыр хәлдән, ауырыуҙан ҡотолоу, арыуланыу. *[Гөлйөҙөм:] Ошо арала ҡартатайың менән ҡартәсәйеңде ҡарай-ҡарай йөҙәнем, ашарҙарына юҡ, ни ауырыуҙан* ***баш ҡалҡыта*** *алмайҙар.* (Һ. Дәүләтшина.)

*син.*: аяҡҡа баҫыу.

2. Көсәйеп күтәрелә, хәрәкәт итә башлау; үҙенең көсөн белдереү. *Насар ҡоралланған Ҡыҙыл Армия үҙенең синфи аңы менән яуыз дошманды мәңге* ***баш ҡалҡыта*** *алмаҫлыҡ итеп тар-мар итте.* (Б. Хәсән.) *Илдәге реформаны бынан йөҙ йыл элек яңы* ***баш ҡалҡыта*** *башлаған япон буржуазияһы индерә.* (К. Мәргән.)

3. Ризаһыҙлыҡ белдереп, күтәрелеп сығыу. *[Бәхтиәр:] Юрматы иле, 3-сө Петрҙың манифесын ишетеп, тирә-яҡтарындағы баярҙар золомона түҙмәй* ***баш ҡалҡытҡайнылар.*** (С. Мираҫ.)

*син.*: баш күтәреү.

**башҡа менеү.** Үҙ ихтыярына тулыһынса буйһондороу, өҫтөнлөк итеү. *Башҡа менеп ултырыу. Башҡа менеп алыу.* ▬ *[Старшина:] Түрәлекте килештерәм инде мин! Шулай ҡороҡ тотмаһаң, уларҙың* ***башыңа менә*** *башлауҙары бар.* (Б. Бикбай.) *Бөгөн ирек ҡуйһаң, был йәштәр иртәгә* ***башыңа менәсәктәр.*** («Сов. Башҡ.») *Һин, Ямал килен, үҙең дә бик остандаҡһың, гәйеп Иомағолда ғына түгел, уның* ***башына менеп*** *ултырырға теләйһең.* (М. Тажи.)

**башҡа сүп өйөү.** Ғәйеп ташлау, ғәйепләү. *[Мөдирҙәр] Эш менән танышып өлгөрмәйҙәр,* ***баштарына сүп өйә*** *башлайһығыҙ.* («Сов. Башҡ.»)

**башҡа сығыу.** Аң томаланыу. *Тауыш башҡа сыға.* ▬ *Ашапэсеп, һыйлана торғас,* ***башҡа сыҡты.*** (В. Жуковский. Х. Бикҡолов тәржемәһе.)

**башҡа тай типмәгән (типкәнме ни).** Аҡылһыҙ түгел, аҡылдан яҙмаған; ахмаҡлыҡ эшләмәҫ. *Алма кеүек ҡыҙын миңә бирергә Ғаббас мулланың* ***башына тай типкәнме ни?*** (З. Биишева.) *[Тракторҙы] ярлы-ябағаның рәхмәтенә бирергә хөкүмәттең* ***башына тай типмәгән.*** (Й. Гәрәй.) *[Туғанов:]... Ҡыҙҙар өйөрөлөп йөрөгәндә, берәүгә генә бәйләнеп ғүмер итергә,* ***башҡа тай типмәгән*** *бит әле.* (Ә. Вәли.)

**башҡа таш төшкәндәй (төшкән кеүек, һымаҡ, шикелле) булыу.** Көтмәгән хәл-ваҡиғанан аптырап ҡалыу, иҫәңгерәү. *Малайҙар ҡойолоп төштөләр, шунда уҡ төҫтәре үҙгәрҙе. Атаһының һүҙе уларҙың* ***башына таш төшкән һымаҡ булды.*** (Ж. Кейекбаев.)

*син.*: башҡа < таяҡ менән> һуҡҡандай булыу.

**башҡа < таяҡ (күҫәк) менән> һуҡҡандай (һуҡҡан кеүек, шикелле, һымаҡ) булыу.** Көтмәгәндә аптырап, иҫәңгерәп ҡалыу. *Килене... әйтеп бөтөр-бөтмәҫтән, һылыу ҡортҡаның сырайы боҙолдо, ул үҙенең* ***башына таяҡ менән һуҡҡан һымаҡ*** *тойҙо, буғай.* (Т. Йәнәби.) *Шунан һуң Алпамыша,* ***башына һуҡҡан кеүек*** *китеп барҙы, ти.* (Әкиәттән.) *Шәйехзада Бабичтың фажиғәле үлеменә ысын-ысындан ҡайғырышып ултырҙылар. Эйе, был иҫ киткес талантлы шағирҙың һәләк булыуын ишетеү Вәлиулланың* ***башына һуҡҡандай булды.*** (Ф. Иҫәнголов.)

*син.*: башҡа таш төшкәндәй булыу.

**башҡа төшөү.** 1. *ҡар.* башҡа килеү.

2. Яҙмышҡа тура килеү *(бәлә-ҡаза, ҡайғы-хәсрәт). Ошо арала Зинүнә Азаматов хаҡында ла уйланы. Кеше хәлен кеше, үҙ* ***башына төшһә,*** *яҡшыраҡ белә тиҙәр бит.* (Ә. Вәли.) *Улы аҡыллы йөҙөнә ирҙәрсә ҡатылыҡ бирергә, йәш кенә башына төшкән ауыр ҡайғыға бирешмәҫкә тырышып, атаһына йотлоғоп ҡараған.* (Ә. Вахитов.) *Ҡарсығаҡай кеүек моңһоҙ инем, ҡайғы-хәсрәт* ***төштө башыма.*** (Халыҡ йырынан.) *Ә ҡыҙ ултыра кәмәлә: «Һөйрә, әйҙә!» — тип.* ***Башына төшкәс,*** *тарта егет, ҡыҙ бик матур бит!* (Н. Нәжми.)

**баш ҡатыу (ҡаңғырыу).** Ни эшләргә белмәй аптырау, юғалып ҡалыу. *Белмәйем,* ***баш ҡатҡан...,*** *ауылға ҡайтып былай булырмын тип уйламағайным.* (Ғ. Ибраһимов.) *Ә һин һаман тик яҡшыға борҙоң* ***ҡаңғырған башыңды.*** (Р. Бикбаев.) *Уйламаҫҡа кәрәк әле. Бөгөн көнө буйы уйлап та* ***баш ҡатты.*** (С. Агиш.)

**башҡа (түбәгә) һуғыу** *кемдең.* Бик ауыр хәлгә ҡуйыу. *Сәлимдең* ***башына һуҡтылар,*** *урынынан осто хәҙер.* (Һөйл.)

**башҡа һыймау.** Уй-фекер менән аңламаҫлыҡ булыу *(буталсыҡ эш-хәл). Уның ошо идаралыҡҡа етәксе итеп тәғәйенләнеүе* ***башҡа һыймай.*** («Башҡортостан»).

**башлы-күҙле булыу.** Өйләнеү, йәки кейәүгә барыу — *Хеҙмәтте лә тултырып ҡайттың инде, улым,* ***башлы-күҙле булыу*** *кәрәк ине, — тинеләр [ата-әсәләре Аҡназарға].* (Ә. Вәли.) *Фәйзрахман, һиңә лә инде гел шаярып ҡына йөрөргә тимәгән. Бына шунда, бер осорҙа,* ***башлы-күҙле булып*** *ҡуйыуға ни етер ине.* (М. Кәрим.) *Ҡатыны ҡыҙҙарының* ***башлы-күҙле булыуына*** *шатланып бөтә алманы.* (Б. Бикбай.)

**башлы-күҙле итеү** *кемде.* Өйләндереү йәки кейәүгә биреү, тормошло итеү. *Башҡаларҙың барын да өйләндерҙем, инде һине лә* ***башлы-күҙле итһәк,*** *туйыңды күрһәк, беҙ ҡарт менән ҡарсыҡ, бик шатланыр инек.* (Әкиәттән.)

**баш менән сумыу (күмелеү)** *нимәгә.* Тотош бирелеп китеү, ныҡ мауығыу. *Эшкә баш менән сумыу.*

**баш менән таш ярыу (ватыу).** Ҡулдан килмәгәнде эшләргә ныҡ тырышыу. *[Ҡунаҡбаев:] — Һеҙ* ***баш менән таш ватырға*** *уйлайһығыҙ. ... Шул тиклем ҙур планды тултырабыҙ тип, партияны алдайһығыҙ.* (Б. Ишемгол.) *[Раззаҡов:] Моталовмы?*

*Һин уны белмәйһең икән әле. Хәҙер ул* ***башы менән таш ярырға*** *әҙер.* (И. Абдуллин.) **Баш менән таш ярып булмау:** *[Мырҙағол:] Әлеге әйткәндәй,* ***баш менән таш ярып буламы*** *ни?* (Б. Бикбай.)

**баш менән яуап биреү** *ни өсөн, кем өсөн.* Бөтә яуаплылыҡты үҙ өҫтөңә алыу. *Быны өсөн мин* ***баш менән яуап бирергә*** *әҙер.*

**баш ороу** *кемгә.* 1. Түбәнселек менән үтенес белдереү. *[Ырыҫҡол:] Кемгә бараһың да, кемгә* ***баш ора*** *беләһең? Ҡайҙа беҙҙе тыңлайҙар, ҡайҙа беҙҙе ҡайғыртталар?* (Б. Бикбай.)

2. Баш эйеп, ихтирам белдереү. *Ағайҙы күҙ менән ашарҙай ҡарайҙар. Һәм уға өҙлөкһөҙ* ***баш ороп,*** *тап сәйлек аҡсалай алалар американецтың паспортын. (В. Маяковский. Р. Ниғмәти тәржемәһе.) Таярбыҙ беҙ Ватан фарманына, ысын ихлас биреп,* ***баш ороп;*** *Тыуған илебеҙҙең ҡорбанына йәнде-тәнде һөйөнөп тапшырып.* (Ш. Бабич.)

**баш өҫтө** *иҫк.* Бойорғанды үтәргә әҙерлекте белдереп, түбәнселек менән әйтелә. — *Ярты сирек ҡымыҙ килтер... Һалҡынса булһын. —* ***Баш өҫтө,*** *әфәндем!* (Ғ. Ғүмәр.) *[Бай:] — Алып сыҡ бынау дуңғыҙҙы! Бер ергә ябып ҡуй! [Нәбей:] —* ***Баш өҫтө!*** *(*Ф. Ғәйнетдин, М. Морат.) *[Иҙеүкәй:] — ... Уларҙы мәжлескә минең исемемдән үҙең барып саҡыр. Юлдарына киләм йәйергә бойор... —* ***Баш өҫтө.*** *— Хеҙмәтсе тәғзим ҡылды.* (Ә. Хәкимов.)

**баш өҫтөндә <ҡара> болот ҡуйырыу** *кемдең.* Ҡурҡыныс, бәлә-ҡаза, хәүеф яҡынлау. *Мария Андреевнаның* ***башы өҫтөндә ҡара болоттар ҡуйырған*** *саҡтар ҙа була. Ошо йылдың июлендә хеҙмәтсәндәрҙән килгән сигналдар буйынса район милиция бүлеге ашханаға ревизия үткәрә.* («Сов. Башҡ.»)

**баш сыҡмау** *нимәнән.* Ҡотола алмау. *Бурыстан баш сыҡмай. Ярлылыҡтан баш сыҡмай.* ▬ *Бер ваҡыт* ***башы*** *ғүмер буйы малайлыҡтан* ***сыҡмаған*** *Шәрифулла Әхмәҙиев һикереп килеп торҙо ла, төкөрөгөн сәсә-сәсә һөйләй башланы.* (Ф. Биишев.) *Түләбай ағай — йыуаш ҡына, ғүмере буйынса байға ялланыуҙан* ***башы сыҡмаған*** *кеше.* (Ғ. Ибраһим-Ҡыпсаҡ.)

**баштағы сәс <тә> етмәҫ** *нимәгә.* Бик күп күләмдәге түләү, сығым хаҡында әйтелә. *Һәр бер үлгән малды минән түләтә башлаһағыҙ,* ***башымдағы сәсем дә етмәҫ!*** (Н. Ғәлимов.)

**баштан <аша> атлау.** Бер-берәүҙе иҫәпкә алмай ҡыланыу. — *Ятһам, һинән һорамам. Өҫтөмә килеп тороп,* ***башымдан атламаҡ булаһыңмы?*** *Минең абышҡама килмәһәң, башҡа абышҡа тапмағанһыңдыр инде.* (Т. Хәйбуллин.)

**баштан ашыу.** Тейештән артып китеү, бик күп булыу. *Тауҙар зарланмай. Ғорурлыҡ* ***баштарынан ашҡан...*** (М. Кәрим.) *Шатлыҡтары* ***башынан ашҡан*** *халыҡ геүләне.* (Я. Хамматов.) *Мин тапҡан аҡса ла икебеҙгә* ***баштан ашҡан.*** (Н. Мусин.) *Һай, айбарлы баһадирҙар, ни генә кисермәгән, ҡайғыһы* ***баштан ашһа ла,*** *ҡанатын төшөрмәгән.* (А. Игебаев.)

**баштан кисереү (үткәреү)** *нимәне.* Үҙ яҙмышың, тормошоң аша уҙғарыу, татыу. *Милиционер Фәтхинур Мусин ошо һөйләп*

*үтелгәндәргә оҡшаш бик күп ваҡиғаларҙы* **башынан кисергән** *кеше.* («Сов. Башҡ.») *Быуын-быуын иҙелгән башҡорт халҡы барыһын да күрҙе. Бынан да ҡыйын миҙгелдәрҙе* **башынан үткәрҙе.** (Т. Хәйбуллин.)

**баштан кәпәс төшөр.** Бик бейек һәм текә нәмәгә ҡарата әйтелә. *Баҡһаң,* **баштан кәпәс төшөр** *күккә ҡалҡҡан таш йортҡа. Барабыҙ ҙа һуғылабыҙ үҙебеҙҙең башҡортҡа.* (Т. Йосопов.)

**баштан себен осороу.** Бәләне, яуаплылыҡты үҙеңдән ситкә ебәреү, яуаплылыҡтан тайпылыу. *Ғәббәс мулла тураһында Шымбай: — Етмәһә, мәсетте һибә итте. Йәнәһе, үҙ* **башынан себен осорҙо.** *Сәүит яҡлы кеше булды!* (З. Биишева.) *Был — үҙ* **башыңдан себен осорорға,** *үҙеңдең илке-һалҡы эшләүеңде кешегә япһарырға маташыуҙың асыҡ миҫалы.* («Сов. Башҡ.»)

**баштан сығыу (китеү).** Уйҙа, күңелдә булмау; онотолоу. *Ауыл өҫтөнә күк төтөн йәйелгән. Күрәһең, улар киске аш бешерәләр. Һуғыш та бөтөнләй* **баштан сыҡҡан,** *тыуған ауыл күҙ алдына килә.* (Д. Юлтый.) ***Китмәһә баштан*** *был болғансыҡ томан, аһ, дуҫ-иштәр, мин була алмам әҙәм.* (Ш. Бабич.)

**баштан үтеү (уҙыу)** *кемдең нимә.* Яҙмышҡа төшкәнде кисереү. *Төрөк һуғышында ҡатнашыусы Әхтәри ҡарт үҙенең* **башынан үткәндәрҙе** *һөйләп алып китте...* (Ж. Кейекбаев.) *Бындай яҙмыш бер минең* **баштан** *ғына* **үтмәгән** *дә баһа! Борон-борондан шулай килгән.* (Я. Хамматов.) *Аҙнагол менән Зөлхизәнең* **башынан** *ғына* **уҙғанмы** *ни инде бындай хәлдәр.* (З. Биишева.)

**баштан һыйпамаҫ(тар)** *кем(дәр).* Яуапҡа тарттырмай, язаһыҙ ҡалдырмаҫ(тар). *Әсәһе лә шундай эш өсөн* **баштан һыйпамаҫ.** (Ғ. Ибраһимов.) ... *Беҙҙең ерҙәрҙе немец батшаһы баҫып алһа, уныһы* **башыбыҙҙан һыйпар** *тип беләһегеҙме ни?* (Д. Юлтый.) *Түше һабын күбегенә буялған Баттал: — Уйлап кил, был эшең өсөн һинең* **башыңдан һыйпамаҫтар...** *— ти, бармаҡ янап.* (А. Таһиров.) *[Рамазан тракторисҡа:] ... Башаҡтарҙы тереләй кәҫ аҫтына тыҡҡан кешенең* **башынан** *кем* **һыйпаһын.** (Р. Низамов.)

**баштан һыйпау (һыпырыу).** Насар ҡылыҡтары өсөн хөкөмгә тарттырмау, йомшаҡ ҡарау. *Ә Тимашевтың иһә* **башынан һыйпап** *торалар.* («Сов. Башҡ.»)

**баш тартыу** *нимәнән.* Ниҙер эшләргә теләмәү, уй-теләктән, ниәттән ҡайтыу. *Бәлки хәтәр юлға сығыуҙан* **баш тартырлыҡ** *көс тә таба алған булыр ине ул [Зөлхизә] үҙендә...* (З. Биишева.) *Тик өс кеше генә дружинаға яҙылыуҙан асыҡтан-асыҡ* **баш тартты.** (Я. Хамматов.) ... *Абдулла өйгә ҡайтыуҙан ҡырҡа* **баш тартты,** *әсәһе лә артыҡ ныҡышманы...* (Н. Мусин.) *Ике офицер Вьетнамға барыуҙан* **баш тартҡаны** *өсөн хәрби трибунал судына бирелгән.* («Сов. Башҡ.»)

**баш терәү (төртөү).** Әҙ генә йоҡлап, ял итеп алыу. *[Кәбир] Ырҙынға килеп, бер аҙ* **«баш терәп»** *алды ла тағы аяҡҡа баҫты.*

(Я. Вәлиев.) *Ҡалала ҡунаҡ булып барып кererлек йорт юҡ, таныштар ҙа артыҡ күп түгел, ... **баш төртөр** урын күренмәй.* (Ә. Бикчәнтәев.)

*син.*: серем итеү.

**баш тубал кеүек (тубалдай) булыу.** Арыуҙан аң-фекер томаланыу, бер ни уйларлыҡ хәлдә булмау. ***Баш тубал кеүек булып** китте. Ни йоҡо, ни йүнле ял юҡ был арала.* (С. Әлибаев.) *Шулай ҙа Сабирҙың **башы тубал кеүек,** бер нәмә лә тоймай.* (Д. Исламов.) ***Баш тубал булған.** Аңлай алмайым, әллә баш әйләнә, әллә ер.* (З. Хисмәтуллин.)

**башты алйотҡа (ахмаҡҡа, тилеғә, йүләргә, этлеккә) һалыу.** Алйот булып ҡыланыу. *[Йүнир:] Инде, туғанҡай, етте, **башыңды алйотҡа һалып** маташма. Яҡшы саҡта әйт тә бир: һин төштоңмө баҡсаға?* (Ш. Бикҡол) — *Помидор шәп бит, әй! Бына был ҡыҙылы бигерәк тә тәмле! — **башыңды йүләргә һалма,** ни эшләргә теләйһең?* (С. Агиш.) *[Заһир:] **Һин башыңды этлеккә һалма,** Ямалетдин, командир һорағанда, «ниңә, ағай?» тип торма бынан һуң.* (М. Кәрим.)

**башты бутау.** Фекерҙе яңылыштырыу. *Юҡ инде, туған, **башты бутама.*** (М. Кәрим.) *[Атаһы:] — Юҡ-бар, уйҙар менән **башыңды бутама.** Барыһы ла иҫән-һау әйләнеп ҡайтыр.* (М. Иҙелбаев.)

**башты бәйләү** *кемгә, нимәгә.* Яҙмыш, эш менән кемгәлер бойондороҡло булыу. *Кейәүенең һойләшеүенең дә рәте юҡ, ти, бер **башын бәйләгәс,** торған инде.* (Һөйл.)

**башты киҫергә (ҡырҡмаға) биреү.** Берәй нәмәне ныҡлы ышаныс менән раҫлау, ышандырырға тырышыу. ***Башымды ҡырҡмаға бирәм** бына, иртәгә ул килә.* (Һөйл.)

**баш(ты) ҡатырыу (ҡаңғыртыу).** Аптыратып бөтөү, ҡаңғыртыу. *Зөләйхә һаман да эште тәрәнәйтергә тырышты, хат яҙа торғас, **башымды ҡатырып** бөтөрҙө.* (Т. Йәнәби.) *[Ҡолсобай:] ... Ә ҡайныһыныҡы дөрөҫ? Белмәҫһең. Аптыралған инде. **Башты ҡатырҙылар.*** (Я. Хамматов.) *Һин бында баланың **башын ҡатырып** икеле-микеле һөйләп ултырма.* (Ә. Мирзаһитов.)

**башты ташҡа бәреп (ороп, һуғып) булмай.** Сараһыҙлыҡты белдереү өсөн әйтелә. *[Уҡытыусы:] Ҡыҙғаныс та бит, ни эшләйһең инде, **башты ташҡа бәреп булмай.*** (З. Ғәлимов.) *Капитан ағайға ышанғаныма хәҙер мин бик үкенәм. Ләкин **башты ташҡа бәреп булмай** инде.* (Ә. Бикчәнтәев.) *[Туҡтабикә:] Мин ун ике йыл ирһеҙ ҙә, **башты ташҡа һуғып булмай.*** (М. Кәрим.)

*вар.*: башты ташка бәрерҙәй (орорҙай, һуғырҙай) булыу.

**башты ташҡа бәреп (ороп) илаһаң да...** Ҡулдан ысҡындырған эш-хәлгә үкенес белдергәндә әйтелә. *Шулай итеп, был әҙәм аҡтығы тарихты яндырған! Хәҙер инде уларҙы **башыңды ташҡа ороп илаһаң да** таба алмаҫһың.* (Р. Ғарипов.)

**баш тыҡҡыһыҙ**. Бик тығыҙ, халыҡ менән туп-тулы. *Клубҡа **баш тыҡҡыһыҙ.***

*син.*: аяҡ баҫыр урын юҡ, энә төрткөһөҙ.

**баш(ты) тығыу**. 1. Берәй урынға барып эләгеү, төйәкләнеп китеү. *Ҡайҙа барып **баш тығырға**? Тамаҡ туйҙырырлыҡ ҡына булһа ла ниндәй эш табырға?* (Ж. Кейекбаев.)

*син.*: морон төртөү.

2. Араға барып инеү, ҡыҫылыу. *Солтанғәле... үҙ хәбәрен һөйләй бирҙе: — ... Хәүефле эшкә буштан-бушҡа **баш тыҡҡым** килмәй.* (Я. Хамматов.)

**башты әйләндереү**. 1. Фекерҙе бутау, ҡаңғыртыу. *Ни өсөн инде һис бер мәсьәләгә бәйләнмәгән Хажи анекдоттары менән **башты әйләндерергә**.* (С. Агиш.)

2. *кемдең*. Ғашиҡ итеү, үҙеңә ҡаратыу. *Бына өсөнсө көн инде ярты төндә генә ҡайта. ...Әллә ысынлап та береһе **башын әйләндерҙеме** икән? — тип уйланы Бибикамал еңгә [Гәрәй хаҡында].* (А. Карнай.) *Анауы Ямал шаталаҡты үҙеңә бик эйәләштермә, юҡ-бар нәмә һөйләнеп, ҡәрендәштең **башын әйләндереп** йөрөмәһен.* (М. Тажи.)

**башты юғалтыу**. 1. Бөтөнләй аптырашҡа төшөү, юғалып ҡалыу. *...Эйләр хандың ғәскәре бер тау битләсенә килеп ҡыҫылып, тамам **башын юғалтып**, ...тарҡалып бөттө, ти.* (Әкиәттән.) *...Тормошта **башын юғалтып** ғашиҡ булған йәштәр йышыраҡ бәхетһеҙлеккә дусар була.* (Ш. Янбаев.) *Үлем ҡурҡынысынан тамам **башын юғалтҡан** Аҙнағол һүҙһеҙ баш эйә.* (З. Биишева.)

2. Үлеп ҡалыу, һәләк булыу. *Ҡайһылары үкенәләр. — Беҙ алдан уҡ әйттек бит. Хәҙер бына һуғыш бөтөр алдында **башты юғалталар**.* (Д. Юлтый.) *Ил ҡәҙерен белмәгән **башын юғалтҡан**, ер ҡәҙерен белмәгән ашын юғалтҡан.* (Мәҡәл.)

**баш һалыу**. 1. Үҙ ихтыярың менән бирелеү; буйһоноу. *Ихтыярҙан батшаға **баш һалдығыҙ** һеҙ. Рәхәтлектә, тыныслыҡта ҡалдығыҙ һеҙ.* (С. Яҡшығолов.) *Был осорҙа бик күп башҡорт ырыуҙары рус батшаһына **баш һалған** булған.* (Әкиәттән.) *Һөҙөмтәлә, дезертирҙар, берәм-һәрәм килеп, ҡорал ташлап, **баш һала** башлайҙар.* (М. Сатлыков.)

*син.*: баш эйеү.

2. Үлеү, ҡорбан булыу. *Ирҙәр үлә, **башын һала**, бөтмәҫ дандары ҡала.* (Халыҡ йырынан.) *...Халҡыбыҙ азатлығы өсөн, киләсәгебеҙ өсөн көрәштәрҙә олатайҙар үҙҙәренең **башын һалған**...* (С. Әлибаев.) *Минең атайым ҡыҙыл гвардияла **башын һалған**.* (К. Мәргән.) *Күптәр һуғыштан ҡайтманы, тыуған ил бәхете өсөн **баштарын һалды**.* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: һәләк булыу.

**баш һуҡҡан яҡҡа** [китеү]. Юл, йүнәлеш һайлап тормай, ҡайҙа тура килһә, шунда йүнәлеү. *Егет, шул тайға үңдек һалып, ата-инәһе менән хушлашып, **башы һуҡҡан яғына** сығып **китә**.* (Әкиәттән.) *Утлар булһа, [Аҡбуҙат] үҙе **башы һуҡҡан яғына**,*

*һорап тормаҫ китер ул.* (М. Буранғолов.) *[Көтөүсе] Көтөүҙе тау буйына апарып һала ла, үҙе* ***баш һуҡҡан** яҡҡа сыға ла китә.* (М. Тажи.)

**башы ике түгел** *кемдең.* 1. Алдын-артын уйлап эш итә, һаҡлыҡ күрһәтә белә. *[Арыҫлан:] — Мин генәме ни... Бөтәһе лә ҡурҡа. Кешенең* ***башы икәү түгел** бит.* (З. Биишева.) *Ғилаж өйҙө лә күсереп алып ҡайтырға иткәйне, ләкин Сөнәғәттең бабалары Ваһап менән Әҙһәм бирмәнеләр: «Өй малайҙыҡы.* ***Башы ике булһа,** күсерһен», — тинеләр.* (Ж. Кейекбаев.) *Шундай мәжлес уртаһына барып, һорашып торорға* ***башым ике түгел** дә инде. Юлымда булдым.* («Сов. Башҡ.»)

*вар.*: **башы икеме ни (икелер шул, ике тиһеңме әллә)**: *...Ундай хәбәр һөйләргә* ***башым икелер** шул.* (М. Тажи.) *Ҡыҙ ҡасам тип торорға уның* ***башы ике тиһеңме** әллә?* (Һ. Дәүләтшина.)

2. Хәтәр эш-ҡылыҡтың ҡурҡыныслығын иҫкәрткәндә әйтелә.

**башы-аяғы менән <ҡаршы>** *кемгә, нимәгә.* Бөтөнләйе менән, тотош [риза түгел]. *Ҡала комитетының беренсе секретары ла, управляющий ҙа Ғайсина директор булыуға* ***башы-аяғы менән ҡаршы...*** (Н. Мусин.)

**башы булыу (бар)** *кемдең.* Аҡылы етерлек дәрәжәлә булыу. *[Мөхәмәтулла бабай:] Йә инде, кем ҡулына ҡалдыҡ бит... Төкөрҙөм мин уның көс-ҡеүәтенә,* ***башы булмаған...*** (Ә. Вахитов.)

*син.*: башы эшләй.

**башы бәйле** *нимәнең.* Булыры шикһеҙ, тормошҡа ашыуы мотлаҡ. *Германия еңеләсәк. Бының* ***башы бәйле.*** (Ж. Кейекбаев.)

**башы йомро (йомро баш)** *кемдең, һөйл.* Етеҙ аҡыллы, башлы *(«Үҙ файҙаһын ҡайыра белә» төҫмөрө менән.) Ул тиклеменә баш етмәй минең. Әйтһә, бына Яҡуп күрше әйтер инде, уның* ***баш йомро.*** (Б. Бикбай.) *Теге кешенең* ***башы йомро.** Тигенгә һорамайҙыр.* (Я. Хамматов.) *— Ай-һай, ҡустым, иллә* ***башың йомро** ла һуң.* (Ә. Гәрәев.) *[Рысин] Тананы алып ҡуйҙы. Шулай итеп, ит өсөн 400 һум сығараһы урынға 158 һум аҡса тотто.* ***Йомро баш** икән үҙе.* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: башы эшләй, башы бар.

**башы йомро ла <муйыны оҙон>** *кемдең, шаяр.* Һүҙе аҡыллы ла, уныңса барып сыҡмай, уның хәтле үҙебеҙ ҙә беләбеҙ тигән мәғәнәлә *(кешенең һүҙен, тәҡдимен көлкөгә алғанда әйтелә).*

**башы йәш** *кемдең.* Кешене йәш, тәжрибә яғынан кәмғә ҡуйып, шелтәләберәк әйтелә. *Башың йәш әле, күрерһең.* **Йәш башы менән:** *Кешеләр ҙә миңә ҡарай. Йәнәһе,* ***йәш башы менән** ултыра, ә оло кеше баҫып тора.* (Р. Солтангәрәев.)

*син.*: кәбеҫтә һурпаһын аҙ эскән, нужа ҡаласын аҙ ашаған.

**башына кәпәс кейгән** [ир, егет]. Хурлыҡтан, кәмһетелеүҙән сығырға тырышҡанда намыҫланып әйтелә. *Их, егеттәр! Хурлыҡ былай йөрөү* ***башыма кәпәс кейгән егеткә.*** (Б. Ишемғол.)

**башынан себен тайып йығылырлыҡ** *кемдең, һөйл.* Таптаҡыр, бөртөк тә сәсе юҡ *(башҡа ҡарата).*

**башына таҙ кәрәкме икән** *кемдең, һөйл.* Бары менән мәрхәтһенә белмәгән кешегә ҡарата асыу белдереп әйтелә. *Алырын алды бит инде,* ***башына таҙ кәрәкме икән*** *тағы, һаман ныҡышып йөрөй.* (Һөйл.)

**башын ашау** *кемдең.* 1. Ауыр яҙмышҡа дусар итеү, насар хәлгә ҡуйыу. *Насир ағай ундай ялған документ менән күп эш иткән кеше. Шундай документ менән байтаҡ ҡыҙҙарҙың* ***башын ашағандыр*** *әле.* (И. Насыри.) *Шулай итеп теге [Сәләхи] үс кешеләренең* ***башын да ашаны,*** *элеккенән дә һәйбәт итеп тирмәнен дә яңыртты.* (Ә. Вахитов.) *Өйгә инеп ашыңды ашай, тышҡа сығып* ***башыңды ашай.*** (Мәҡәл.) / Теләмәгән кешегә кейәүгә биреү. *Емеш еңгәм* ***башымды ашаны.*** *Бигерәк өгөтләп димләне шул.* (Һ. Дәүләтшина.)

2. Үлтереү, һәләк итеү. *Шәрип тә егет вафат булды: Дуҫиштәре* ***башын ашаған.***(Халыҡ йырынан.) *Үс алмай ҡуямы һуң ул [Әхмәтша]! Берәй яйын табып, кейәүҙең* ***башын ашамаһын,*** *тип ҡурҡам.* (З. Биишева.)

*син.*: башҡа етеү, башын юйыу.

**башында ел уйнай** *кемдең.* Еңел аҡыллы, етдилеге юҡ.

**башында (түбәһендә) сүп (сыбыҡ, таяҡ) һындырыу** *кемдең.* Берәй кеше көтөлмәгән яҡшы эш эшләгәндә, һәйбәт ҡылыҡ ҡылғанда хуплап әйтелә.

**башын ҡайнатыу** *кемдең.* Аптыратыу, ҡаңғыртыу. *Сәкинәнең ҡапыл ғына тиҫкәреләнеп китеүе Мозафарҙың* ***башын ҡайнатты.*** (Н. Мусин.) *Шул эш буйынса Рәхимов хәҙер бюро ағзалары ҡаршыһына баҫырмы? Инһә ни, һөйләр, аңлатыр. Тик бына шуның менән кемдеңдер* ***башын ҡайнатыуы*** *ғына...* (Ғ. Ибраһимов.)

**башын юйыу** *кемдең.* Үлтереү, һәләк итеү. *Дошман* ***башын юймайсы*** *инде килмәм ҡашыңа.* (Халыҡ йырынан.) *Байға барған* ***баш юйған.*** (Мәҡәл.) *[Насир:] Минең* ***башымды юяр*** *өсөн старшиналар төрлө хәйлә эҙләп ҡаранылар, ләкин таба алманылар.* (М. Буранғолов.)

**башы (түбәһе) тишек** *кемдең.* Берәй кеше «ят телде аңлай» тигәнде белдерергә тырышып, һаҡлыҡ менән һөйләү кәрәклегенә ишара яһағаида әйтелә.

*син.*: башы һалам менән ябылған.

**башы (түбәһе) һалам менән ябылған** *кемдең.* Үҙенә ят булған телде аңлаған кешегә ҡарата һаҡлыҡ менән һөйләү кәрәклеген белдергәндә әйтелә. — *Әстәғәфирулла тәүбә,* ***башын һалам менән япҡан*** *имеш, татарҙыр ул...* (И. Насыри.)

*син.*: башы тишек.

**башы эшләй** *кемдең.* Аҡылы етеҙ, башлы. *Алдаҡсы булһа ла,* ***башы эшләй*** *был собаканың [Борһандың]! — тип уйланы көнсөл Ҡорбан һәм эштән һуң туп-тура аптекаға юл тотто.* (С. Кулибай.)

*син.*: башы йомро, башы бар.

**баш эйеү**. 1. Буйһоноу, бирелеү. *Салауаттай ирҙәр* ***баш эймәҫтәр****, аяҡ-ҡулына бығау һалһаң да.* (Халыҡ йырынан.) ... *Дошман шуны белһен: беҙ бер ваҡытта ла уға* ***баш эймәбеҙ****, һуңғы тамсы ҡаныбыҙ ҡалғансы һөйөклө Ватанды яҡларбыҙ...* (М. Тажи.) *Малай кеше кем көслө, шуға* ***баш эйә****.* (Р. Солтангәрәев.)

*син.*: баш һалыу, теҙ сүгеү.

2. Ихтирам белдереү. *...Һинең камил аҡылың, алтын ҡулдарың алдында мин* ***баш эйәм****.* (З. Биишева.) *Һүнгән, бөлгән илемде ир иткәнһең, Революция, һиңә* ***баш эйәм****.* (Р. Бикбаев.)

3. Инанып табыныу.

4. Үтенес белдереп ялыныу, инәлеү. *[Түрәбай:] — Гөләкәй! Йәнем, зинһар* ***баш эймә*** *шул эттәргә...* (Т. Хәйбуллин.) *Күп алтын приискыларына хужа булған каторжник алдында* ***баш эйеүенә*** *асыуы ҡабарған жандарм офицеры тешен ҡыҫып бышылданы.* (Я. Хамматов.)

*син.*: баш бөгөү.

5. Рухи төшөнкөлөккә бирелеү. *Ҡайғыға баш эйеү.* ▬ *[Ишкилде ҡарт] Кәрәк икән, көлдө, уйнаны. «Мин ҡартайҙым инде», — тимәне. Бер ваҡыт та* ***башын эймәне****.* (С. Кулибай.)

**баш әйләнеү**. 1. Аныҡ ҡына фекер йөрөтөү һәләтен юғалтыу, buталыу.

2. Үҙ эшеңде артыҡ баһалап, маһайып китеү, яңылышыу. *Еңеүҙән баш әйләнеү.* ▬ *Ләкин уңыштарҙан* ***баштар әйләнә*** *торған түгел.* (М. Кәрим.)

**баян* итеү (ҡылыу)** *иҫк.* Ниҙер хаҡында белдереү, һөйләп биреү; аңлатыу. *Өсөнсө ырыу исеме булыр ҡыпсаҡ, белерһегеҙ,* ***баян итеп*** *яҙып ҡуйһаҡ.* («Күсәкбей».) *Өфөлә булған ваҡиғаларҙы бик ныҡ борослап, оҙон иттереп* ***баян ҡыл*** *әле.* (С. Ҡудаш.) *[Ғатаулла ҡарт] Кешеләрҙең ғүмер буйына ергә туймай зар-интизар йәшәүҙәре, аҙаҡ нисек итеп бәхетле тормош ҡороп ебәреүҙәре тураһында* ***баян итә****.* (Р. Солтангәрәев.)

[*Баян — *ғәр.* аңлатма.]

**бейәләй ҡәҙәр (тиклем)**. Кемделер, ниҙелер бик бәләкәй итеп күрһәткәндә әйтелә. *Ҡапҡа шығырлауға* ***бейәләй ҡәҙәр*** *генә эт кисәге үрһәләнеп сыңлап ебәрҙе.* (Ғ. Ғатауллин.)

**бейә тәртәгә тибеү**. Эштә, тормошта уңышһыҙлыҡҡа осрау. *Нимә көтә беҙҙе иртәгә? Кемдер өҫтәр үҙенә мәртәбә. Тик йышыраҡ* ***тибә*** *башламаҫмы тормош тигән* ***бейә тәртәгә****?* (Б. Рафиҡов.)

**белдем баш** *һөйл.* Үҙен бик белдеклегә һанаған кеше. *Ҡарт сәпсек әтәстең былай артыҡ* ***белдем баш*** *булып һөйләүенә бик хурланды.* (Ғ. Богданов.)

**бел дә тор**. Мотлаҡ була торған эш-хәлгә ҡарата әйтелә. ***Бел дә тор****, килә ул беҙгә.* (Һөйл.)

*син.*: күр ҙә тор.

**белем тоҡсайы**. Һәр яҡлап белемле, мәғлүмәтле кеше.

**белә күрә (ниҙер ҡылыу).** Белгән көйгә, белә-аңлай тороп. *Төп гәйеп ата-әсәлә, өлкәндәрҙә. Ғәзиз балаларын* ***белә күрә*** *енәйәт юлына баҫтырған.* («Сов. Башҡ.»)

**бер аҙым да <ҡалмау>** *кемдән.* Саҡ ҡына араға ла ҡалмай *(эйәреп барыу). Эт унын һайын абалап өрә-өрә, уларҙың артынан* ***бер аҙым да ҡалмай*** *эйәреп килде.* (М. Тажи.)

**Бер аҙым да <сикмәү, алға бармау>.** Урындан әҙ генә лә <ҡуҙғалмау>. — *Улым, ныҡ бул! Батыр булып көрәш!* ***Бер аҙым да сикмә*** *артыңа...* (Я. Ҡолмой.)

*син.*: бер ҡарыш та.

**бер алдына, бер (биш) артына төшөү (сығыу)** *кемдең.* Кемгәлер ярарға тырышып төрлөсә ҡыланыу. *[Әхсән:] ...Прилавка өҫтөн тауар менән тултырып ташла, береһен оҡшатмаһалар, икенсеһен маҡта, һыла-һыйпа, алыусының* ***бер алдына, бер артына төш.*** (Х. Ибраһимов.) *Миңә Ғәрифә еңгәнең* ***бер алдына, биш артына төшөп*** *ялыныуҙан башҡа сара ҡалмай.* (М. Садиҡова.) *Шуға Малбай үҙе өсөн бик ҡурҡыныс та, сиртер ҡылын тапһаң, файҙалы ла күршеһен үҙ янынан ысҡындырмаҫҡа,* ***бер алдына, биш артына сығып,*** *көйләп-сөйләп торорға мәжбүр булған.* (Ф. Иҫәнголов.)

**бер артын, бер алдын күрһәтә <донъя>.** Төрлө хәл була.

**бер атыуҙа ике ҡуянды үлтереү.** Бер эш, ҡылыҡ менән бер нисә маҡсатҡа ирешеү. *Беренсе һөйләмгә бер ниндәй ҙә логик бәйләнеш юҡ.* ***Бер атыуҙа ике ҡуянды үлтерә*** *Кирәй Мәргән.* (Р. Ғарипов.)

**бер ауыҙ <һүҙ>.** Әҙ генә хәбәр. *Бер ауыҙ һүҙ әйтмәү. Бер ауыҙ һүҙҙе йәлләү. — Наилә минән* ***бер ауыҙ*** *булһа ла* ***һүҙ*** *көтә. Мин өндәшмәйем.* (С. Агиш.) *Басиров һөйләгәндә, мин* ***бер ауыҙ һүҙ*** *ҙә ҡыҫтырманым.* (Д. Юлтый.) — *Һеҙгә* ***бер ауыҙ һүҙем*** *дә юҡ, ә хужаларығыҙҙы аҙ ғына тәртипкә күнектереп алаһы бар.* (Н. Мусин.)

**бер ауыҙҙан <тороу>.** Бер яҡлы булып, бер үк һүҙҙе һөйләү. *[Мозой:] Дәртле егеттәр бар ул. Бына уларға арҡа таяныс юҡ. Халыҡ* ***бер ауыҙҙан торһа,*** *хәҙер улар эште дөрөп алып китергә торалар.* (Д. Юлтый.) ***Бер ауыҙҙан*** *барыһы ла һайлап ҡуйырға уйлайҙар, эстәренән изге йәнде йортҡа баш һәм һаҡсы итеп.* (Ш. Бабич.)

**бер аяғы ерҙә, икенсеһе гүрҙә** *кемдең, һөйл.* Саҡ-саҡ йәшәй, үлер сиккә еткән *(олоғайып хәлһеҙләнгән кешегә ҡарата әйтелә). [Өләсәй] ҡарт инде ул.* ***Бер аяғы ерҙә, икенсеһе гүрҙә.*** (И. Абдуллин.) — *Эй, киленкәйем, әйттем дә бөттөм, минең* ***бер аяғым ерҙә, икенсеһе гүрҙә,*** *— тине Васби әбей.* («Сов. Башҡ.») **Бер аяғы гүрҙә:** *Оло булып ояла ла белмәйһең, ҡарт башыңа һаман күлдәк һөйләйһең,* ***бер аяғың гүрҙә*** *күптән, бигәйбә...* (Ш. Мәхмүдов.)

*син.*: сыҡмаған йәне генә ҡалған.

**бер аяғын атлағансы (алғансы) икенсеһен эт ашай** *кемдең.* Бик әкрен ҡуҙғала торған, бызмыр. *[Ғәндәлип:] Әй, йомаҡ! Әҙәмдекеләр айт тигәнгә таит тип тора. ...Уның* ***бер аяғын атлағансы икенсе аяғын эт ашай...*** (Ә. Мирзаһитов.) *Тик, әлеге лә баяғы, эштә бик һалҡын,* ***бер аяғын алғансы икенсе аяғын эт ашай*** *тигәндәй...* (С. Агиш.) *...Ни тиһәң дә, үгеҙ — үгеҙ шул инде ул.* ***Бер аяғын алғансы икенсе аяғын эт ашай.*** («Сов. Башҡ.»)

**бер аяғың тегендә, бер аяғың бында булһын.** Бик тиҙ йөрөргә, йомошто өлгөр башҡарырға ҡушҡанда әйтелә. *[Редактор:] — Бер полоса, полоса булмағанда, бер нисә шәп материал алып ҡайт.* ***Бер аяғың тегендә, бер аяғың бында булһын!*** *— тип, ике көндә әйләнеп ҡайтырға ҡушты.* (Р. Солтангәрәев.)

**бер <үк> балыҡ башы.** Ҡабат-ҡабат һөйләнгән хәбәр. *Әлеге* ***бер балыҡ башы,*** *Булат, һин ошо Хәтмуллалай ҙа булдыра алманың, тип әйтмәксе булаһыңмы ни?* (М. Хәйҙәров.) *Күпме генә сәйнәһәң дә,* ***бер үк балыҡ башы,*** *тигәндәй, унан ғына бер ни ҙә артмаясаҡ та, кәмемәйәсәк тә.* (Н. Асанбаев.) **Бер <үк> балыҡ башын сәйнәү:** — *Нисәмә тапҡыр* ***бер үк балыҡ башын сәйнәргә*** *була? — Көн дә Нигмәтулланың зарланыуынан ялыҡҡан управляющий асыу менән өҫтәлгә һуҡты.* (Я. Хамматов.) *Ә Харис кеүек ҡурҡаҡ ғалимдарға был етә ҡалған — һаман да шул* ***бер балыҡ башын сәйнәй.*** (Р. Ғарипов.)

**бер баҫаһы урынға биш баҫа.** Бик дәртле, осоп-төшөп тора. *Һай, был Зәлифә! Бигерәк дәртле инде,* ***бер баҫаһы урынға биш баҫа.*** (Һойл.)

*ант.*: тыумаҫ борон ҡартайған.

**бер бите ай, бер бите көн** *кемдең.* Бик матур *(ҡатын-ҡыҙға ҡарата).* ***Бер бите ай, бер бите көн*** *кеүек һылыу был ҡатындан ул тыуған, уға Заятүләк тип исем ҡушҡандар.* (Әкиәттән.)

*син.*: ҡарап (һоҡланып, күреп) туйғыһыҙ, атлы кеше төшөп ҡарарлыҡ, йәйәү кеше ятып ҡарарлыҡ, бер ҡалаҡ һыуға һалып йоторлоҡ.

*ант.*: май яғып ташлаһаң, эт яламаҫ.

**бер бөгөн түгел.** Гел генә ҡабатланып торған, даими булған эш-хәл тураһында әйтелә. *'Ҡыйыҡһыҙ өйҙә торһаң, бына шулай була ул, әсәй. Беҙҙең былай этләнеүебеҙ* ***бер бөгөн түгел.*** (Т. Йәнәби.)

**бер булыу.** I. Ойошоп, берләшеп эш итеү, берлекләшеү. *Дошмандарым миңә нишләр тиһең, дуҫ-иштәрем менән* ***бер булһаҡ.*** (Халыҡ йырынан.)

II. -й, -п-га бөткән хәл ҡылымдары менән килеп, берәй эштең осона сыға алмай яфаланыуҙы белдерә. *Аҙаҡтан айғырҙы таба алмай* ***бер булалар.*** (Ж. Кейекбаев.) *Игенде йөкләп алыусы колхозсыларҙы «Һаҡмар»ҙа һанап бөтөрлөк түгел. Күптәр хатта ҡуйыр урын таба алмай* ***бер була.*** (Р. Солтангәрәев.)

**бер ғүмер.** Берәй эш-хәлдән, ҡылыҡтан ҙур ләззәт алғанда хуплап әйтелә. *Ошолай ҙа беҙҙең ултырыуҙар үҙе генә була* ***бер***

***гүмер.*** (Халыҡ йырынан.) *Үҙ донъяңа үҙең хужа булып йәшәүе бит үҙе **бер гүмер**.* (Б. Ишемғол.) *Күҙҙәрең сөм ҡара, хас күмер, бер ҡарауы үҙе **бер гүмер**.* (Н. Нәжми.) *Булһам да мин үҙем көлкүмер, Башығыҙҙан һыйпау — **бер гүмер**!..* (Р. Ғарипов.)

**берҙе биш итеү**. Һүҙ, хәбәрҙе арттырып һөйләү. *Кеше бит ул **берҙе биш итеп** һөйләй.* (Һ. Дәүләтшина.) *...Көрәшселәр менән һунарсылар **берҙе биш итергә** яраталар инде ул.* (Б. Бикбай.) *Ташбатҡан ауылының **берҙе биш итергә** торған бисәләренә Әхсәндең хәбәре етә ҡалды.* (Ж. Кейекбаев.)

*син.*: төймәләйҙе дөйәләй итеү.

**бер ҙә юҡҡа (юҡтан)**. Буштан-бушҡа, ғәйепһеҙгә, һис сәбәпһеҙ. *[Ғәлимәне] **Бер ҙә юҡтан** харап иттеләр.* (М. Ғафури.)

**беренсе ҡарлуғас***. Тәү башлап булған эш-хәл, күренеш һ. б. *«Ҡыш» һәм «Яҙ» йырҙар йыйынтығы — **беренсе ҡарлуғастар** улар.* («Сов. Башҡ.») *Али Карнайҙың «Беҙ ҡайтырбыҙ» тигән повесы «Мәктәп китапханаһы»ның **беренсе ҡарлуғасы** булды.* («Башҡ. пионеры».)

[*Рус телендәге «первая ласточка» берәмегененең тура тәржемәһе.]

**бер епкә теҙеү**. Барыһын бер төрлө һанау. *[Зөбәйҙә:] Һеҙ бисәләрҙең бөтәһен дә **бер епкә теҙергә** ашыҡмағыҙ әле.* (Ғ. Әхмәтшин.)

*син.*: бер ҡалыпҡа һуғыу.

**береһе йәкшәмбегә, береһе дүшәмбегә**. Үҙ-ара килешмәй, тырым-тырағай эш иткән кешеләргә ҡарата әйтелә.

*син.*: ире өмә иткән, ҡатыны баҙарға (баланға) киткән.

**береһен маҡта ла береһен ҡуй**. Икеһе лә бер сама, һис маҡтарлыҡ түгелдәр.

**бер иле** <лә>. 1. Берәй нәмәнең күләмен, дәрәжәһен һ.б. арттырып йә кәметеп әйтеү өсөн ҡулланыла. *Ҡәмәр әбейҙең дәрәжәһе оҫтабикәнән **бер иле** лә кәм түгел.* (Ғ. Дәүләтшин.)

2. Эргәлә, яҡында ғына мәғәнәһендә. *Йылан малайға, күҙен йомоп, үҙенең артынан **бер иле** лә ҡалмайынса барырға ҡуша.* (Әкиәттән.)

**бер итеп**. Тотош айҡап, иңен-буйын тултырып (йөрөү, килеү һ. б.). *Был ваҡыт Ғамир яланды **бер итеп** ҡыҙырып йөрөй инде.* (Б. Бикбай.) *Беҙ һай соҡорҙо ла, тәрән соҡорҙо ла **бер итеп**, бөтә тау артын әйләнеп сыҡтыҡ.* (М. Кәрим.)

**бер йән, бер тән**. Бер булып, берҙәм. *Ауылдың тирә-яҡаһы менән **бер йән, бер тән** булып йәшәү бөтә кешегә лә әләгәме һуң? Юҡ, һәр кемгә лә тәтемәй ул!* (Ғ. Лоҡманов.)

**бер йәшлектә, бер ҡартлыҡта**. Йәш саҡта ҡылғанды олоғайғас ҡабатлағанда, шаяртыбыраҡ әйтелә.

**бер киҫелгән (ҡырҡылған) икмәк берекмәй (йәбешмәй)**. Айырылышҡан ир менән ҡатын кире ҡушыла алмай. *[Көнһылыу Ҡыҙрасҡа:] «**Бер киҫелгән икмәк берекмәй**. Йәшһең, үҙ ишеңде табырһың, хуш, йәнем, бәхил бул...»* (Ә. Хәким.)

**бер көйө**. Бер төрлө, үҙгәрешһеҙ **генә**. *Ямғыр бер көйө... илһамланған кеүек яуҙы ла яуҙы.* (Р. Назаров.)

**бер ҡалаҡтан (табаҡтан) ашаған.** Йән дуҫ булып, бер һүҙле булып йәшәгән *(кешеләр). [Шәмсикамал:] — Кәңәшең үҙеңә булһын, Сабит ағай, рәхмәт! Кейәүең менән* ***бер ҡалаҡтан ашаған*** *кешеһең бит әле, етмәһә...* (Я. Вәлиев.)

**бер ҡалаҡ (ҡашыҡ) һыуға һалып йоторлоҡ.** Бик матур, һөйкөмлө *(күберәк ҡатын-ҡыҙға ҡарата). Исемен-атын, ырыуын-затын һорап та торма. Килмәгән ере юҡ, үҙен* ***бер ҡашыҡ һыуға һал да йот.*** (М. Кәрим.) *Ул бына ошо Шишмә районының Ҡалмыҡ ауылы муллаһының* ***бер ҡалаҡ һыуға һалып йоторлоҡ*** *һылыҡ кеүек ҡыҙына өйләнде.* (С. Агиш.)

*син.*: бер бите ай, бер бите көн.

**бер ҡалып(тан).** Эш-ҡылығы, булмышы менән бик оҡшаш. *[Ғайса] ...Комиссарға асыҡтан-асыҡ нәфрәтле ҡараш ташланы: — Барыһы ла* ***бер ҡалып:*** *ил янғанда күмер һуплап көн күреүселәр. Аҡыл һатып, тел сарлауҙан башҡа уларҙан ни алаһың?* (Й. Солтанов.) — *Ысынын әйткәндә, егеттәр, — тине Мәхмүт, — башҡорт байы ла, рус байы ла* ***бер ҡалыптан.*** *Береһен дә маҡтап булмай.* (Ж. Кейекбаев.)

**бер ҡалыпҡа һуғыу**. Барыһын да бер төрлө итеп ҡарау. *Байҙар һәм милиционерҙар араһында төрлө кеше бар. Беҙ, большевиктар, уларҙың барыһын да* ***бер ҡалыпҡа һуҡмайбыҙ.*** (Я. Хамматов.)

**бер ҡалыптан яһалыу (һуғылыу).** Булмышы, сифаты менән бер төрлө булыу. ... *Байҙар донъяһы* ***бер ҡалыптан яһала*** *бит, ҡайҙа бармаҡ кәрәк?* (Ҡ. Ибәтуллин.)

*син.*: бер сыбыҡтан ҡыуылған.

**бер ҡарында тибешеп ятмаған** *кем кем менән, һөйл.* Кем менәндер туғанлыҡ булмағанды раҫлағанда әйтелә.

*син.*: ете ят.

**бер ҡатлы.** Артыҡ ябай, әҙ генә лә хәйләһе булмаған *(кеше). [Хәлимәгә] Барынан да бигерәк Варяның асыҡ сырайлы, һүҙсән, нисектер балаларса* ***бер ҡатлы*** *булыуы оҡшаны.* (Ғ. Ғүмәр.) *Тыумыштан алсаҡ,* ***бер ҡатлы*** *һәм хәйләнең ни икәнен белмәгән Зиннәтулла үҙе белеп, үҙе күргәндәрҙең барыһын да ентекләп, түкмәй-сәсмәй һөйләне.* (Я. Хамматов.) *Мин —* ***бер ҡатлы,*** *кеше көлдөрәм тип, күҙҙе бәйләп, көршәк ҡыйраттым.* (М. Кәрим.)

**бер ҡолаҡтан инеп, икенсеһенән сығыу.** Әйткән һүҙҙе, кәңәште, йомошто иғтибарһыҙ тыңлау йәки тиҙ онотоу. *[Рәхимәнең] ... Аҙаҡҡы бойороҡтары ла Айбулаттың* ***бер ҡолағынан инеп, икенсеһенән сыҡты.*** (Һ. Дәүләтшина.)

**бер ҡулы майҙа, икенсеһе балда.** Байлыҡҡа сумып, муллыҡ эсендә *(йәшәү).*

*син.*: май эсендәге бөйөр кеүек.

**бер нигә (нәмәгә) ҡарамай.** Һис бер сәбәпте иҫәпкә алмай, иғтибар итеп тормай *(ниҙер эшләү).*

**бер ни (тин) тормау.** Бик еңел (башҡарыу). *Әҙәм кәмһетеү уға **бер ни тормай,** холҡон беләбеҙ.* (М. Кәрим.)

**бер рәттән.** 1. Бергә, бергәләп. *Дүрт йыл буйы минең менән **бер рәттән** [Аҡбулат] окопта серене.* (З. Биишева.)

2. Бер ыңғай, бер юлы.

**бер ҡуңысҡа тығыу** *кемде.* Бик ауыр хәлгә ҡуйыу. — *Үсемде алдым ҡороғорҙарҙан, үсемде алдым! Колхоз ғына килеп сыҡҡайны, бөтәһен **бер ҡуңысҡа тығып** оҙаттыҡ.* (Һ. Дәүләтшина.)

**бер сама.** 1. Күпмелер күләмдә. *Бер сама булыу. Бер сама ҡалыу.*

2. Әллә ни шәп түгел, уртасараҡ. — *Кем һуң ул Хисаметдин, арыу кешеме? — Арыу тип ни, **бер сама инде.*** (К. Мәргән.)

**бер самауыр сәй эскәс, һаумы ҡоҙағый!** *һөйл.* Бер нәмәне бик һуңлап, кәрәге бөткәс кенә, иҫкә төшөргән кешегә ҡарата көләп әйтелә.

**бер ҡайҙа ла китмәҫ.** Берәй эште ашыҡтырыу кәрәкмәгәнлеген белдергәндә әйтелә.

**бер сыбыҡтан ҡыуылған.** Асылы менән бер төрлө *(ғәҙәттә, кире сифат менән оҡшашлыҡ тураһында). ...Ҡыҙыл гвардеецтар үҙ-ара шаулаша башланылар. — Корниловтың олоһо ла, бәләкәйе лә **бер сыбыҡтан ҡыуылған** инде.* (В. Исхаҡов.)

*син.*: бер ҡалыптан яһалған (һуғылған).

**бер тамсы <ла>.** Бер ҙә, һис тә. *Муйыл ...**бер тамсы ла** тирләмәне.* (Һ. Дәүләтшина.) ***Бер тамсы** йән тыныслығы булмағас, нисек тамағына аш барһын инде.* (Б. Бикбай.) ***Бер тамсы ла** ҡыҙыҡ түгел ине — Йылмайырмы беҙгә киләсәк.* (Р. Хисаметдинова.)

**бер (һуңғы) тамсы (ҡалаҡ) ҡан ҡалғансы (ҡанға тиклем).** Үҙеңде аямай, бар мөмкинлегеңә *(һуғышыу, алышыу). **Бер ҡалаҡ ҡаныбыҙ ҡалғансы** дошман алдында сигенмәбеҙ.* («Сов. Башҡ.»)

**бер тауыштан (ауыҙҙан).** 1. Барыһы бер юлы, бергә. *Яҡында ғына ҡурай тауышы ишетелә. — Был бит мөғжизә, әйҙә янына барайыҡ, — тиҙәр кешеләр **бер тауыштан.*** («Сов. Башҡ.»)

2. Бер булып, берҙәм *(эш итеү, һайлау). Бер тауыштан һайлау. Бер тауыштан риза булыу.* ▬ ***Бер ауыҙҙан** барыһы ла һайлап ҡуйырға уйлайҙар, эстәренән изге йәнде йортҡа баш һәм һаҡсы итеп.* (Ш. Бабич.)

**бер тигән.** Бик шәп, гәжәп һәйбәт. *Адвокаттың бөтә губернала **бер тигәнен** яллағанмын.* (Һ. Дәүләтшина.) *Илләмәгәр мин үҙем илдә **бер тигән** ҡыҙҙар менән йөрөгән кешемен.* (М. Кәрим.) *Йәр тапмаҫ тип уйланыңмы? Таптым **бер тигәндәрен.*** (Халыҡ йырынан.) *...Тирә-яҡта **бер тигән** сибәр ҙә, аҡыллы ла, сәсән дә булып үҫеп еткән [Көнһылыу].* (Ф. Иҫәнғолов.)

*син.*: бына(мын) тигән.

**...бер тин** [көмөш, баҡыр]. Берәй эш-хәлдең еңеллеген, уны үтәүе бер ни тормауын белдергәндә әйтелә. *Эһ-ей, күрше ауылға барып килеү ул миңә* ***бер тин көмөш.*** (Һөйл.)

**бер тингә лә һанамау** *нимәне.* Баһалап еткермәү, бөтөнләй һанға һуҡмау.

*син.*: бер тин урынына ла күрмәү.

**бер тин өсөн иманды һатыу.** Бик ҡомһоҙ, һаран булыу.

**бер тотам <да> ҡалмау.** Һис айырылмай, эйәреп йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә. *Әсә ат етәкләп ошо ергә килә. Әлбиттә, Биктимер ҙә әсәһенең артынан* ***бер тотам да ҡалмай.*** (Ә. Вахитов.) *Артыбыҙҙан* ***бер тотам да ҡалмай*** *аҡ казактар килә.* («Сов. Башҡ.») *Латип ир еткәнсе атаһынан* ***бер тотам да ҡалмай*** *тағылып йөрөргә күнекте...* (Ф. Иҫәнғолов.)

*син.*: бер иле<лә>, бер ҡарыш<та>.

**бер төптән (табандан).** 1. Бер юлы, бер ыңғайҙан. *Барыһы шунда уҡ* ***бер төптән*** *ҡайтырға ҡуҙғалдылар.* (Б. Бикбай.) *Янһары ун дүрт йәшенә етеп, ҡул-аяҡ араһына керә башлаған саҡта ғына, икеһе* ***бер төптән*** *үлгән дә киткәндәр.* (Әкиәттән.)

2. Бер һүҙле булып, берҙәм *(эш итеү). [Стачка] ...бик күмәк эшселәрҙең,* ***бер төптән*** *һүҙ ҡуйышып алып, бөтәһе бер юлы эш ташлауҙары була.* (Һ. Дәүләтшина.) *Өс туғандың, Шаһиәхмәт, Әхмәҙи һәм Баһауҙың,* ***бер төптәнерәк*** *тороуын Әхмәтша бай яратманы.* (Ж. Кейекбаев.) *Бер гилләһе барҙыр бының, моғайын. Ә халыҡ ни өсөн Аллаяр менән* ***бер төптән*** *икән?* (Ф. Иҫәнғолов.) *Ҡатил серен бирмәгән,* ***бер табандан*** *уҡталып, дүрт батырға ымлаған. (Эпостан.)*

**бер төрлө(рәк).** Аҡылға теүәл үк түгел, сәйер ҡылыҡлы. *Мин матур нәмәне ҡарағанда, былай рәхәтлек алған кешене күргәнем юҡ ине. Шуның өсөн ул миңә тәүҙәрәк гәжәберәк, хатта* ***бер төрлөрәк*** *күренә ине...* (Ә. Вахитов.) *Сәйерерәк ул Иван. Шуға күрә был* ***бер төрлөрәк*** *түгелме икән, тип тә уйлап ҡуя ҡайһы берәүҙәр.* («Сов. Башҡ.»)

**бер төрлө итеү** *нимәне.* Ниндәйҙер бер рәүешкә килтереү. *Үҙәште тугайында эш өҫтөндәге кешеләр көн биҙләп китмәҫ борон ялан эштәрен* ***бер төрлө итеп,*** *ослап ҡайтырға ҡабаландылар...* (Ж. Кейекбаев.)

**<бер> урында тапаныу.** Эштә, тормошта һ. б. алға бармай, бер кимәлдә ҡалыу. ***Бер урында тапанған,*** *хатта былтырғы кимәлдән төшкән райондар ҙа бар.* («Сов. Башҡ.»)

**бер һапта бер ҡап.** Үҙ-ара оҡшаш, бер төрлө кешеләр тураһында. *[Хәбирә] — Икегеҙ ҙә* ***бер һапта бер ҡап.*** *Икегеҙҙең дә эсегеҙ тулы этлек.* (Т. Бүләков.)

**бер һүҙ <ҙә> юҡ (булмау).** Ҡаршылыҡ булмау, һәр нәмә менән ризалашыу.

**бер һүҙ менән әйткәндә.** Ҡыҫҡаса һөйләгәндә. ***Бер һүҙ менән әйткәндә,*** *йәмғиәтте өйрәнеү фәне кешенең аҡылына ғына түгел, характерына ла йоғонто яһай.* («Башҡ. уҡ.»)

**бер шөрөбө етешмәй** *кемдең, һөйл.* Аҡылы камил түгел, ахмағыраҡ.

*син.*: аҡылға бер төрлө.

**берәүгә ала, икенсегә ҡола (булыу).** Төрлө кешегә төрлө мөнәсәбәттә булыу *(шелтәләп, яманлап әйтелә). Кеше һинең* ***берәүгә ала, икенсегә ҡола*** *икәненде белеп ҡалһа, баш бирмәҫ.* («Сов. Башҡ.»)

**бер яҡта торһон** *кем, нимә.* Бер нәмәне йәки кешене икенсеһенән өҫтөн күргәндә әйтелә. *Ә һуң Көйөлдөнөң көньяҡ битләүендәге шишмә һыуы? Зәмзәм һыуҡайҙарың* ***бер яҡта торһон!*** *Шундай һалҡын, шундай тәмле ул...* (В. Нафиҡов.)

**бесәй төкөрөгө(ндәй).** Бик әҙ. *Ә ҡулға килеп ингән аҡса —* ***бесәй төкөрөгө.*** (Ғ. Лоҡманов.)

**бет аяғын бәке менән ҡырҡа** *һөйл.* Бик ваҡсыл кеше тураһында.

**беткә үс (асыу) итеп (үсегеп) тунды утҡа яғыу** *һөйл.* Кешегә үпкәләп, үҙеңә ҡаршы эшләү, үҙ мәнфәғәтеңә зыян килтереү. *Һунарсы Килмәт Хөсәйендең юлына арҡыры төшә. — Нимә һин, күрше,* ***беткә үсегеп, туныңды утҡа яҡмаҡсы*** *булаһыңмы? Иҫәр!* (Ф. Иҫәнғолов.) *[Ғәлләм:] Был бит* ***беткә асыу итеп туныңды утҡа яғыу*** *була.* (Һ. Дәүләтшина.) *Нишләнек һуң әле, ватандаштар! Бер-беребеҙгә ниңә ҡарышабыҙ?* ***Беткә асыу итеп тун яғабыҙ,*** *рәхәтлектә яман ярышабыҙ.* (С. Ғәбиҙуллин.)

**бешмәгән бәрәңге (бәлеш)** *һөйл., әрл.* Булдыҡһыҙ, ҡулынан эш килмәгән кешегә ҡарата әйтелә. *[Гөлкәй:] — Эй, ҡурҡаҡ,* ***бешмәгән бәлеш!*** (З. Биишева.)

**беште ни ҙә төштө ни** *кемгә.* Эш-хәлдең торошона ҡайғырмай, уның өсөн барыбер. *Зәйнәғәбдин өй әшенә күптән ҡул һелтәгән,* ***уға беште ни ҙә төштө ни.*** («Сов. Башҡ.»)

*син.*: булды ни ҙә булманы ни.

**бизмәнгә ултыртыу** *кемде.* Алдап кәм үлсәү.

**бизмәнгә һалыу** [һүҙҙе]. Үлсәп, самалап һөйләү. *«Әйткәнемде гәйепкә алмаҫһыңмы?» — тип һәр һүҙемде* ***бизмәнгә һалып торманы.*** *Сөнки ул ихтыярымды бағламаны.* (М. Кәрим.)

**билбау (ҡайыш) аҫты бушау** *кемдең.* Ашағы килеү, асығыу *(шаярыу төҫмөрө менән әйтелә). Иртәнән бирле һинең дә* ***билбау аҫтың бушағандыр,*** *тигән айыу төлкөгә.* (Ж. Кейекбаев.) — ***Билбау аҫтың буш булһа,*** *ҡул эшкә бик бармай шул, — тип әйтеп һалды береһе.* (М. Тажи.) ***Билбау аҫты*** *бөтөнләй* ***бушаны,*** *ни булһа ла ҡапҡылап алырға ине.* (Я. Хамматов.)

*син.*: ҡарын асыу, ҡорһаҡ асыу, бүре башы(н) ашарҙай булыу.

**билгау аҫты нык булыу.** Туҡ булыу. ***Билгау аҫтың нык булғанда,*** *быуын талмай икән юлдарыңда.* (С. Ғәбиҙуллин.)

**бил бөгөү.** 1. Нығ тырышып эшләү. ***Билең бөкмәй**, күкрәк көсөн түкмәй, бер кемгә лә килмәй бер тин дә.* (Д. Юлтый.) ***Бил бөкмәйенсә** бураң тулмаç.* (Мәҡәл.) *Балалар, тип, **бил бөккән**, Ут йотоп донъя көткән. Атай таба йылы урын, квартираның ҙурын.* (С. Ғәбиҙуллин.) ***Билде бөгөп** байға эшләнек, донъя рәхәткәйҙәрен күрмәнек.* (Халыҡ йырынан.) *Атайҙар ҙа бит ғүмер буйҙарына мәңге **бил бөгөп** тә, тир түгеп тә икмәк төçө күрмәй йотоҡҡан.* (Ш. Бикҡол.)

2. **(бөксәйтеү, бөкөрәйтеү).** Ауыр эш эшләү. *Олатайҙар шунда **бил бөксәйткән**, тирен түккән, күкрәк емереп...* (Б. Бикбай.) *Улар беҙҙең өсөн **бил бөкрәйтте**, көсөн һатып шахта, тауҙарҙа.* (Ғ. Сәләм.)

*син.*: тир түгеү.

**бил быуыу.** 1. *(бәйләү) нимәгә.* Ҙур теләк менән нимәгәлер әҙерләнеү. *Бөтә халыҡ оло көрәшкә **бил быуҙы**.* («Сов. Башҡ.») *Шунан мин һис тә икеләнмәнем, колхоз эшенә **билде бәйләнем**.* (Ғ. Ғүмәр.) *[Алсынбай] Ошо Данытман суфыйҙың тәғлимәтен тоторға, тәриҡәт юлына баçырға тамам **бил быуҙы**.* (Ә. Хәкимов.)

*син.*: ең һыҙғаныу.

2. Хәл ҡылымдың *-п* формаһында килгәндә: ихласлыҡ, дәрт менән *(тотоноу, керешеү). Елкенеп, нык **бил быуып**, шул алғы көнгә атланыҡ.* (Т. Йәнәби.) *Айбикәнең иптәш ҡыҙҙары, күрше еңгәләр, **бил быуып** туй атҡарҙылар.* (Һ. Дәүләтшина.) *Беҙ, бурыстарыбыҙҙың ҙурлығын хәтерҙә тотоп, **бил быуып** көрәшергә тейешбеҙ.* (Ғ. Минһажев.) *Хәҙер миндә ҙур көс бар, көрәшкә **бил быуып** сыҡтыҡ.* (М. Ғафури.)

*син.*: ең һыҙғанып.

**билгә һуғыу.** Ҡыйынлыҡ кисереү, ауыр хәлгә ҡуйыу. *Бигерәк тә Әхмәҙиҙең китеүе **билгә һуҡты**. Совет эшен яҡшы алып барыр ине ул.* (Һ. Дәүләтшина.)

**билде биштән быуып (бәйләп).** Бик теләп, ҙур дәрт, ихласлыҡ менән *(эшләү, йә эшкә тотоноу). Барыһы ла колхозда ябай эшселәр — бригадир ҡайҙа ҡушһа, **билдәрен бишкә быуып**, шунда китәләр.* (Ф. Иçәнголов.) *Мәрүән Лоҡманов йәй ҡырҙа мал көтә, ҡыш **билде биштән быуып** аҙыҡ ташый.* («Сов. Башҡ.»)

**билдән балта (алъяпҡыс) төштө.** Ҡулдан эш китте *(ул йә ҡыҙ тыуғас, ярҙамсы була тип, ҡыуанып әйтәләр). Ул тыуҙы, **билдән балта төштө**.* (Әйтем.)

**биле ер күрмәгән** *кемдең.* Көрәштә, алышта бер кемдән дә еңелмәгән, йығылмаған. *Сәлмән батыр **биле ер күрмәгән**, Бәхтейәрҙе кеше уҙмаған... шөһрәт алған ине уҙаман.* (Ҡ. Даян.)

**билен (арҡа һөйәген) һындырыу** *кемдең.* Ҡабат ҡалҡмаçлыҡ, төҙәлмәçлек итеп ҡыйратыу. *...Әлегә **биле һындырылып** бөтмәгән синфи дошмандың да тынын һиҙеп, күреп торорға кәрәк.* (З. Биишева.) *Ҡалдырыуын-ҡалдырҙы, ләкин хакими-ғәләм Урҙаның **билен һындырып** китте.* (Ә. Хәкимов.)

**биленә һуҡҡан йыландай** [булыу]. Ауыр хәлгә ҡалып, ныҡ тынысһыҙланыу. *Гәрәй бай бөтөнләй тынныслығын юғалтты, һуңғы көндәре яҡынлауын тойоп,* ***биленә һуҡҡан йыландай*** *борһалана ул.* (Б. Бикбай.)

**бил яҙмай** [эшләү]. Арымай-талмай оҙаҡ *(эшләү). Хөпөтдинов башҡаларҙан ҡалышмаҫҡа тырышып,* ***билен дә яҙмай эшләй.*** (Н. Мусин.) *Бабайҙарыбыҙ, әсәйҙәребеҙ һәм апайҙарыбыҙ дошманды еңеү өсөн* ***бил яҙмай эшләй.*** («Сов. Башҡ.») *Көйҙөрөп, яндырып барған ҡояш нурҙары аҫтында ураҡсылар* ***бил яҙмай*** *арыш уралар.* (Б. Хәсән.)

**бит бешеү**. Оятлы булыу, оятсылыҡ кисереү. *Ит бешә, ит бешмәһә,* **бит бешә.** (Мәҡәл.)

**битендә (йөҙөндә) ҡаны юҡ** *кемдең*. 1. Йөҙө ап-аҡ булған. *Немецтың ҡобараһы осҡан,* ***йөҙөндә ҡан әҫәре ҡалмаған.*** (Ә. Бикчәнтәев.)

2. Ояты, намыҫы ҡалмаған. *[Шаҙағай:]* ***Битендә ҡаны бар,*** *йөрәгендә намыҫы бар ирҙәр был аяныслы хәлгә сыҙармы?* (Т. Хәйбуллин.)

*син.*: битен йыумаған.

**битен йыумаған** *һөйл*. Оятын юғалтҡан, намыҫы юҡ. *[Хафиз:] Ах, инәһеҙ икән, уның* ***битен йыумаған*** *икәнен мин әллә ҡасан белә инем. Әйтер ул, әйтер, оятһыҙ.* («Сов. Башҡ.») — *Хаслыҡ тигәндә,* ***бит йыумай*** *инде ул әҙәм, — тип ҡуйҙылар өсөнсөләре.* (Ж. Кейекбаев.)

*син.*: битендә (йөҙөндә) ҡаны юҡ, күн бит.

**битенән (йөҙөнән) алыу (тырнау)** *кемдең*. Кеше алдында оятлы итеү *(тупаҫ мәғәнәлә, мыҫҡыл менән). Кешенең* ***йөҙөнән алырға*** *ярамай, яҡшы әйтеүгә ни етә.* (Һөйл.)

**битенән көлөү** *кемдең*. Кеше алдында мыҫҡыл итеү. *Һин ул бына, эргәңә кешеләр йыйып, губернатор хәҙрәттәренең* ***битенән көләһең.*** (Ғ. Ибраһимов.)

**бит йыртыу**. Оятлы булыу (итеү), кәмселек тойғоһо кисереү. — *Шунан* ***бит йыртып*** *әйбер һорай буламмы һуң, муйынына боғала һалһаң да бирмәҫ ул, — тине Сәмиғулла.* (Ж. Кейекбаев.) *Яҡты донъяларҙа күп туҡмалдыҡ, төкөрмәйем инде — Урт ҡанда, ни күҙ менән йөҙгә баға икән* ***биттәреңде*** *һинең* ***йыртҡандар.*** (Т. Йосопов.)

**биткә ҡара яғыу**. Хурлау, хурлыҡҡа төшөрөү. — *Ҡарт көнөмдә* ***битемә ҡара яҡты,*** *бәдбәхет ҡыҙыҡай! — тип екеренде ҡарт.* (Н. Иҙелбай.)

**биткә (йөҙгә) бәреү**. Әҙәплелек һаҡлап тормай, туранан-тура ҡаты итеп әйтеү.

**биткә (йөҙгә) ҡыҙыллыҡ килтереү**. Оятлыҡ килтерерлек эш ҡылыу, оятҡа ҡалдырыу. *Бүләгебеҙ...* ***биткә ҡыҙыллыҡ килтермәҫлек*** *булһын.* (Б. Бикбай.) *Һеҙ, ирмен тигән егеттәр,* ***йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтерергә*** *тырышмағыҙ. Батша хәҙрәттәренә тоғро хеҙмәт итегеҙ.* (Һ. Дәүләтшина.)

**биткә төкөрөү**. Кеше алдында бик оятлы итеү, хурлау.

*син.*: битенән алыу.

**бит һыйпау***. Берәй нәмәнән яҙыу, буш ҡалыу.

*син.*: ҡолаҡ ҡағыу.

[*Хәйер бирғәндә доға ҡылып, хуш итеп ҡуя торған дини йолanaн ҡалған.]

**бит (йөҙ) һыуын <биш> түгеү**. Кемдеңдер алдында кәмһенеп үтенеү, үҙеңә кәмселек килтергән эште ҡылыу. *Мәғфүрә һаман кәңәш бирҙе: — Һүҙемде тыңла, Айбулат, бар. Көнөң төшһә, **бит һыуыңды биш түгеп**, яттарға инәләһең ул.* (Һ. Дәүләтшина.) *Утыны ла, бесәне лә кәрәк. Барыһы артынан да табанлап йөрөргә, **йөҙ һыуыңды түгеп**, бригадирыңа ялынырға кәрәк.* (Р. Низамов.)

**биш артыҡ**. Бер нәмәнең икенсе нәмәнән өҫтөн икәнлеген күрһәткәндә әйтелә. *Урядниғын әйтер инем. Бигерәк йүнһеҙ булып сыҡты... Әгәр ҙә уның урынына үҙебеҙҙең кешене ҡуйһалар, **биш артыҡ** булған булыр ине.* (Я. Хамматов.)

**биш бармағы һымаҡ (кеүек, шикелле) [белеү]** *нимәне*. Бик яҡшы, ныҡ *(белеү)*. *Пушкаһын да, пулемётын да, мылтығын да **биш бармағым кеүек беләм**.* (Б. Бикбай.) ...*Хәбибуллин йыл һайын тип әйтерлек «Оло юл» колхозына район вәкиле булып килә торғайны. Ҡунаҡҡолдо ул **биш бармағы кеүек белә**.* (Х. Ғиләжев.) *Мин Зыяның кем балаһы икәнен дә, холҡон, ғөрөфөн, ғәҙәтен дә **биш бармағым һымаҡ беләм**.* (М. Тажи.)

**биш былтыр**. Бик күптән, әллә ҡасан (булған эш-хәл, ваҡиға). *[Ғәрифә:] Шул ялҡау ҡыҙҙан туйҙым. [Закир:] Ә минең һинән туйғаныма **биш былтыр** инде.* (С. Мифтахов.)

**бишкә бөгөлөү**. Ярамһаҡлыҡ күрһәтеп, баш әйеү.

**бишкә төрләнеү**. Төрлөсәгә үҙгәреү. *Биш бармаҡтай беҙ биш малай үҫтек, бишебеҙ ҙә **бишкә төрләнеп**. Мутлыҡҡа ла, һөнәр, шуҡлыҡҡа ла беребеҙҙән беребеҙ өйрәнеп. (В. Әхмәҙиев.) Бишектәге бала **бишкә төрләнер** ҙә ат атланып сапмаҫ тимәгеҙ.* (Р. Ғарипов.)

**бишкә ярылырҙай булыу**. Эште, мәшәҡәтте бөтөрә алмай аҙапланыу. *Һин саҡ ҡына ҡул арама керер инең. Юғиһә, бер үҙем **бишкә ярылырҙай булып** йөрөйөм.* (М. Кәрим.) *Асыу ҙа килеп китә, һин **бишкә ярылырҙай булып**... йөрөйһөң, ә бисә тигәнең уның-быны менән иҫәпләшеп тормай...* (Ф. Иҫәнғолов.) *Шуға күрә әле, **бишкә ярыла яҙып** йөрөгән саҡта, уның [Ғәлиәнең] йәнә ишек төбөндә көтөп тороуы Ғиззәттең кәйефен ҡыра һуҡты.* (Н. Мусин.)

**боғаҙға арҡыры килеү (тороу)**. Файҙаға ашмау, ярамау.

**боғаҙға-боғаҙ килеү**. Ҡара-ҡаршы тороп, йәнтәслим алышыу. *Эшселәр... пролетариатты үҙҙәренә ҡол итергә тырышыусылар менән **боғаҙға-боғаҙ килешеп**, тартыша килделәр.* (Ш. Хоҙайбирҙин.) *Фильмдағы ваҡиға Совет республикаһының яҙмышы өсөн барған ауыр йылдарҙы, яңы донъя менән иҫке донъя араһын-*

*дағы **боғаҙға-боғаҙ килгән** аяуһыҙ көрәш дәүеренең үҙенсәлекле бер битен аса.* («Сов. Бангк.»)

**боғаҙҙан алыу** *кемдең.* Нығ ҡыҫырыҡлау, ауыр хәлгә ҡуйыу. *Был йыр алға барыр, һәр дошмандың был йыр **боғаҙынан алыр.*** (Ғ. Сәләм) ... *Антанта... ҡабат Совет власының **боғаҙынан алыу** өсөн уңай ваҡыт көтә.* (Й. Солтанов.) *Фронтта хәл йүнәтеү менән, Колчак иң тәүләй беҙҙең **боғаҙҙан аласаҡ...*** (Ф. Иҫәнголов.)

**боғаҙ йыртыу (иреү)** *һөйл.* Ныҡ ҡысҡырып һөйләшеү, йырлау һ. б. — *Ни хаҡ тора был ҡатын? — Һатылмай ул. — Ул саҡ нинә **боғаҙ йыртаһың?*** (Х. Ғиләжев.) ***Боғаҙ йыртҡансы** ҡысҡыр әйҙә: капиталға үлем!* (С. Агиш.) *Коридорҙа [Рәхимйәндең] ... асыулы ҡысҡырыуы ишетелде. — Әй, иҫең киткән икән шуның **боғаҙ киреүенә,** — тине Камилә.* (Р. Төхвәтуллин.)

**борсаҡ сәсеү (һибеү, атыу, бүрттереү).** Бик маҡтанып хәбәр һөйләү. — ... *Күрҙегеҙ, ниндәй бағырҙар тотто ул, ә беҙ, йүнһеҙҙәр, сабаҡтан башҡа нәмә ҡаптыра алманыҡ, — шулай **борсаҡ сәсә** Талха.* (Ә. Чаныш.) *Асыуланма, Тайфур, тыпырлатырға аяҡ бар һиндә. **Борсаҡ сәсергә** тиһәң, тел дә ярайһы үҙеңдә* (Ш. Бикҡол.) *Нурғәли ахун утыҙ йыл хәлфәлек иткән кеше. Бер-ике әйбер яҙып һәм **борсаҡ һипкән** кеше.* (Ш. Бабич.) *[Ҡотой старшина] ...беҙҙең ауылда ике полк ята тип, пулеметтары ла күп тип **борсаҡ ат,** — тине.* (А. Таһиров.)

**борсаҡ(ты) <эре> ярыу.** Ныҡ маҡтаныу. *Ат ярыштыра берәүҙәр, берәүҙәр һөйләй бүре, берәүҙәр «күргәндәрем» тип, **борсаҡты яра эре.*** (М. Кәрим.) *Өлкән тракторист, бер күҙен ҡыҫа биреп, **борсаҡты ярырға** кереште...* (Ә. Вәли.) *Булдыра алһаң, бутҡа бешер, бирәм ярма, булмай икән, телең менән **борсаҡ ярма.*** (Н. Иҙелбай.)

**бот буйы** *һөйл., кәмһ.* Бик бәләкәй кәүҙәле. ...*Ир затының көслөрәк икәнен **бот буйы** малай ҙа белә.* (М. Кәрим.) *Хәҙер Шәүрә — **бот буйы** Ирғәлегә кәләш, яныл һөйгән кешеһенә — килен...* (Б. Бикбай.) *Беҙҙең ауыл аша телефон сыбығы һуҙҙылар. ... Минең кеүек **бот буйы** малайҙарҙың түбәһе күккә тейҙе.* (И. Абдуллин.) ***Бот буйы** бала үҙенән ҙур күнәк күтәргән дә йомран тоторға бара.* (Ғ. Әмири.)

*син.*: бармаҡ буйы, балаҡ буйы.

*ант.*: тирәк кеүек.

**бот күтәреп [ятыу]** *һөйл.* Ваҡытты бушҡа уҙғарыу, бер ни ҙә эшләмәү. ...***Бот күтәреп** буш **ятһаң,** ашарға килтереп бирмәҫтәр.* (М. Ғафури.) *[Һуғыштан] кем файҙа итә? Әлбиттә, беҙ түгел. Әлбиттә, өйөндә **бот күтәреп,** түбәгә төкөрөп ятҡан байҙар файҙа итәләр.* (Д. Юлтый.) ...*Көтөүсе түшәмгә төкөрөп, **ботон күтәреп,** ял итеп ята, ти.* (Әкиәттән.)

*син.*: түбәгә (түшәмгә) төкөрөп [ятыу], ҡул ҡаушырып [йөрөү].

*ант.*: ең һыҙғанып [эшләү].

**бото бер тин** *нимәнең.* Баһаһы түбән, бер ни тормай. *Большевиктар әйтә: — Нәҫел-нәсәп, түрәлектең* ***бото бер тин****, тип; «ҡалын елкә» менән «ярылған ҡул» көнкүрештә булһын бер тиң, тип.* (Ш. Бабич.) *«Һеймәһәң, харап иттең, хәҙер миңә һинең һөйөүеңдең* ***бото бер тин****».* (Ә. Вәли.)

**бот сабып** [көлөү] *һөйл.* Мыҫҡыл менән рәхәтләнеп *(көлөү). Был хәбәрҙәрҙе ишеткәс, Усман Әхмәҙиҙән* ***бот сабып көлдө****, уны үсәп бөтә алманы...*(Ж. Кейекбаев.) *Рабфак студенттары Сանияның ҡыланышынан* ***бот сабып көләләр.*** (М. Тажи.)

*син.*: эс тырнап [көлөү].

**бөгөлөп төшөү.** 1. Хәлһеҙ булып ҡалыу. *Ир-егеткәйҙәрҙе, йәше үтһә,* ***бөгөлөп тә төшмәҫ****, тимәгеҙ.* (Р. Ғарипов.)

**боҙға яҙған.** Булмаҫтай, тормошҡа ашмаҫтай, ышаныcһыҙ (эш-хәл). *Камилә генә күңелгә шом һалды һалыуын. «Начальство һүҙенә ышанһаң!* ***Боҙға яҙған*** *вәғәҙә бит ул», — тигән була...* (Р. Төхвәтуллин.)

**боҙҙа быҙаулау.** Буш өмөттәр менән йәшәү, бушҡа ышаныу. *Уйҙар, өркәк аттар төҫлө, юҡҡа ла биленләне,* ***Боҙҙа быҙаулаған*** *дәртем Елдәрҙә еленләне.* (Т. Йосопов.)

**бойҙай араһындағы һоло.** Башҡаларҙан айырылып торған. *Ауыл ерендә шул инде ул: ситтән килгән кеше,* ***бойҙай араһындағы һоло*** *һымаҡ, күҙгә күренеп бара.* (М. Тажи.)

*син.*: арпа араһындағы бойҙай.

**бойомға ашырыу (атҡарыу)** *нимәне.* Ысынбарлыҡҡа әйләндереү. *Ултырышта сығарылған ҡарарҙы хәҙерҙән үк* ***бойомға атҡара*** *башлау кәрәк...* (Н. Мусин.)

*син.*: тормошҡа ашырыу, ғәмәлгә индереү.

**болғансыҡ (буръяҡ) һыуҙа балыҡ тотоу (һөҙөү)*.** Буталсыҡ хәл-шарттан файҙаланып ҡалырға тырышыу. *Шовинистар...* ***болғансыҡ һыуҙа балыҡ тотҡан*** *кеүек, моменттан файҙаланып, партияның ваҡ милләттәр тураһындағы тотҡан юлын кире ҡаға...* (Ш. Хоҙайбирҙин.) *Киреһенсә, улар үҙҙәре лә ошо* ***буръяҡ һыуҙа балыҡ тотоп*** *ҡалырға тырышалар. Ә Ныязғол ҡотолдиһә, уларға үҙҙәре күтәрә алғанса өлөш сығарасаҡ.* (Һ. Дәүләтшина.) *Ынйы сыҡмай, бары ләм сыға шул,* ***Болғансыҡта балыҡ һөҙгәндә.*** (Т. Йосопов.)

[**Рус телендәге:* «ловить рыбу в мутной воде» берәмегенең тәржемәһе].

**борғаҡ* кейеү.** Кемгәлер асыуланып, һөйләшмәй ултырыу.

[* **Борғаҡ** — *диал.* быҙау, бәрәс моронлоғо.]

**борсаҡ бешереү** *кем менән.* Килешә, һүҙ беректерә алыу. *Үҙ тиҫтерҙәре бер класҡа алға киткән. Ә бында — йыйын «еүеш танауҙар». Улар менән* ***борсаҡ бешерерлек*** *түгел.* (Я. Вәлиев.)

**борсаҡ бешеү (бешмәү, бығыу, быҡмау)** *кем менән.* Килешеп эшләү, татыу йәшәү йәки килешмәү, татыу булмау. *Иҫке хужа менән яҡшы ғына* ***борсаҡ бешә башланы****, тип һөйөнөп торғанда, тағы ҡырын һуҡты.* (Ф. Хәсәнов.) *[Хисмәтуллиндың] Ҡыҙ-*

*ҙар менән* **борсағы бешмәне.** (Р. Солтангәрәев.) — *Нимә, һинең Әмирханов менән* **борсаҡ бешмәйерәкме** *әллә?* (С. Агиш.) *[Ниғмәтулла:] Давай, әйҙә, тәүәккәлләп ҡарайыҡ. Һин һөйләш. Минең* **борсаҡ бешеңкерәмәй** *ул кафыр менән.* (Я. Хамматов.) *Килгәс тә ҡарт уҡытыусыларҙың күбеһе менән Булаттың* **борсағы быҡмай,** *күҙгә әтәс тип ҡарайҙар уға.* (Ә. Вахитов.)

2. Ҡайғы-хәсрәткә, ауырлыҡҡа бирешеү. *Бирешмәйем, тип йөрөп ҡарайһың да* **бөгөлөп төшәһең** *шул ҡайһы саҡта.* (Р. Солтангәрәев.) *Бөтөнләй ярҙамһыҙ, йәш сабыйҙар менән ҡалған Мәҙинә апай* **бөгөлөп төшмәне,** *донъя көттө.* («Сов. Башҡ.»)

**бөгөн бында, иртәгә теғендә.** Бер урында ғына тороп сыҙамаған, йөрөп ятҡан *(еңел-елпе кеше тураһында).*

**бөгөн килеп.** Ошо көндә генә, ошо көнгә еткәс. ***Бөгөн килеп*** *әйтте.*

**бөртөкләп (берәмләп) һанарлыҡ.** Бик аҙ. ...*Әҙәм ҡалдыҡтары, үкенескә ҡаршы, һаман да осраштырғылай. Әлбиттә, улар бик аҙ,* **бөртөкләп һанарға** *була, шулай ҙа... барҙар әле.* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: бармаҡ менән һанарлыҡ.

*ант.*: һанап бөткөһөҙ, иҫәбе-хисабы юҡ.

**бөткән баш — бөткән.** Берәй хәүефле эшкә, ҡылыҡҡа тәүәккәллек белдергәндә әйтелә.

*син.*: киткән баш — киткән.

**бөттө баш <ҡалды муйын һерәйеп>.** Хәүефкә төшөп, ҡайғырыуҙы белдерә. ...*Хәҙер миңә дүрт йыл төрмә тейеш.* ***Бөттө баш!*** *Атайымды, әсәйемде, туғандарымды уйлап алдым.* (М. Кәрим.) *Шунан булыр башҡорттар әйткәнсә:* ***бөттө баш — ҡалды муйын һерәйеп...*** (Б. Аҫылгужа).

**бөтә тәме (йәме, ҡыҙығы) шунда.** Һоҡланыуҙы белдергәндә әйтелә.

**буй биреү.** 1. Буйһоноу. *[Мотал Нисаға:] Мин һиңә кем? Теге газетаға төшөрҙөләр тигәс тә, бөтәгеҙ ҙә* **буй бирмәй** *башланығыҙмы инде.* (М. Хәйҙәров.) *Бейә Аҡъелекте өҫкә сөйгән, ергә алып һуҡҡан, әммә егет уны ҡулынан ысҡындырмаған. Шунан бейә* **буй биргән,** *ҡырыҫланмаҫ булған.* (Әкиәттән.)

2. Үҙ яйына ҡуйыу, буйлатыу. *[Урал Шүлгәнгә:] Дан эҙләргә теләнең, теләгеңә* **буй бирҙем.** (Эпостан.)

**буйға бөткән.** Ҡулынан эш килмәгән кешегә ҡарата хуп күрмәгәнде белдергәндә әйтелә. *Бер зәғиф, көсһөҙ, һөнәрһеҙ,* **буйға бөткән** *бәндә мин.* (Ш. Бабич.)

*син.*: ҡоро кәүҙә.

**буй(ға) етеү.** Үҫеп ҙур булыу. *Разия, тор инде. Ваҡыт етте. Йә кеше-фәлән килеп инер.* **Буй еткән** *ҡыҙға былай ярамай...* (Н. Кәрип.) *Зәлифәкәй һылыу* **буйға еткәс,** *һоҡланмаған кеше ҡалманы.* (Халыҡ йырынан.)

**буйға ҡалыу (уҙыу).** Балаға ҡалыу, балаға уҙыу. *Мин уянғанда, ҡатыным юҡ ине...* **Буйға ҡалғайны,** *нишләгәндер инде,*

*бахырҡай.* (Я. Хамматов.) *[Тәңкәбикә Шәфәҡҡә:] Хоҙай ҡушмағас, **буйыңа ла уҙмай** ҡалдың шул. Бала үҫтереп торор инең, исмаһам.* (М. Кәрим.) — *Ишәй дуҫ, икебеҙҙең дә бисәләр бер саҡта **буйға ҡалдылар.*** (Йырҙан.)

*син.*: ауырға ҡалыу.

**буйында булыу.** Йөклө булыу. *Берүк ата-әсәләренә еткер, ҡыҙҙарының хәле насар. **Буйында булғанын** да белмәгәндәр.* (Һ. Дәүләтшина.)

**булмаһа булмай икән баҙарҙа сөсө күмәс (икмәк).** Берәй эш-хәл тырышып-тырышып та килеп сыҡмаған саҡта әйтелә. *(Ишмырҙа:] ...Бер ауылды ла ҡалдырмай ҡыҙырып сыҡтым. **Булмаһа булмай икән баҙарҙа сөсө күмәс** тигәндәй, булмаһы, табылманы трактор.* (Ә. Вәли.)

**булыры (булаһы) булған, буяуы уңған (һеңгән).** 1. Үткәнгә үкенмәүҙе белдергәндә әйтелә. *Гөлсөмдән айырылыу бошондорманы Батталовты. **Булыры булғайны, буяуы уңғайны.*** (Я. Вәлиев.) *Юлға бағыр инем дә ул, тәҙрәләрем туңған. Инде хәҙер **булырым булып, буяуҙарым уңған.*** (Т. Йосопов.)

*син.*: булған да бөткән.

2. Көс-кәре ҡайтҡан, ғүмере үткән.

**булғас булыр икән.** Берәй эш-хәлгә, кешегә аптырап, иҫ-аҡыл киткәндә әйтелә.

**бумала баш** *һөйл., мыҫҡ.* Ҡатын-ҡыҙға ҡарата кәмһетеү һүҙе. *[Сәйҙел:] ...Һинең **бумала баш** машинала ултыра.* (Ә. Атнабаев.)

**буран уйнау (ҡубыу, сығыу).** Талаш-тартыш, ғауға ҡалҡыу. *[Фәрит:] Һиҙеп торам: өйҙә шау-шыу китәсәк, **буран уйнаясаҡ.*** (Ғ. Байбурин.) *Әминә әбей яңынан ҡараусыһыҙ ҡала. Хоҙайбирҙегә ҡайтырға мәжбүр була, йәнә Зәбихуллалар йортонда **буран ҡуба.*** («Сов. Башҡ.»)

**буран ҡуптарыу (сығарыу).** Талаш-тартыш, ғауға ҡалҡытыу. — *Ерле юҡҡа **буран ҡуптара** ул Фатима, — тине [Тимер].* (Б. Бикбай.) *[Әхмәтша бабай] Йә урманда, йә башҡа ерҙә кәйефе ҡырылып ҡайта ла, өйгә ингәс, **буран сығара,** күңеле баҫылғансы бер тулап ала.* (Ф. Әсәнов.)

**буш боғаҙ.** Юҡты-барҙы һөйләргә, шапырынырға яратҡан кешегә ҡарата әйтелә.

**буш итеү.** 1. Дөрөҫ эшләмәгәнгә үкенес белдергәндә әйтелә. *Кисә киноға бармай **буш иттем** әле, һәйбәт булды тинеләр.* (Һөйл.)

2. *күб. юҡл.* Түләүһеҙ, хаҡһыҙ итмәү, ҡоро ҡалдырмау. *Был юлы ла **буш итмәҫ,** ҡоро ҡул менән ҡайтармаҫ уны [Юламанды] рәхимле диңгеҙе...* (З. Биишева.)

**буш ҡул <менән>.** 1. Үҙең менән бер нәмә лә алмай, бер нәмәһеҙ. *Мырҙаш һымаҡ, **буш ҡул менән** барып инеүе лә оят бит.* (Б. Бикбай.)

2. Бер нәмә лә таба алмай, уңышһыҙ йөрөп *(кире ҡайтыу). Шунан батшаның хеҙмәтселәре кейәү менән ҡыҙҙы эҙләнеләр-*

*эҙләнеләр ҙә, таба алмағас,* ***буш ҡул менән*** *ҡайтып киттеләр.* (Әкиәттән.)

**буш ҡыуыҡ** *һөйл., яманл.* Тиккә маҡтанған кеше, ҡупыр. *Шатлығың да, ғазабың да булһын йондоҙ һанынса! Шунда ғына һин — ижадсы, ҙур кинәнес биреүсе, Ул юҡ икән, һин —* ***буш ҡыуыҡ,*** *тик ҡабарып йөрөүсе.* (Б. Бикбай.)

*син.*: ҡабыҡ ҡыуыш.

**буштың атаһы үлгән** *һөйл.* Ниҙелер хаҡ түләмәй генә алырға теләгән кешегә мыҫҡыл белдергәндә әйтелә. *Губерна канцелярияһы башлығы хәйләле йылмайҙы. — Мөмкин. Тик...* ***буштың атаһы*** *күптән* ***үлгән,*** *ти. Ундай яуаплы эште алыу күп аҡса торасаҡ...* (Я. Хамматов.)

**бушты (** *юҡты* **) бушҡа (** *юҡҡа* **) бушатыу (** *ауҙарыу* **).** Кәрәге булмаған, файҙаһыҙ эш менән булыу. *Ни эшләп* ***юҡты бушҡа бушатып,*** *был тиклем ергә килеп йөрөйһөгөҙ? — тиер [Зөләйхә әбей].* (З. Биишева.) — *Бар,* ***юҡты бушҡа бушатҡансы,*** *хәҙер үк быҙауҙарҙы тунатып, тиреләрен кирҙереп ҡуй.* (Б. Бикбай.)

*син.*: ҡомдан арҡан ишеү, иләк менән һыу ташыу.

**бүҙәнәнән май ал, ябалаҡтан йөн ал.** Һарыҡтың йөнөн ҡырҡып бөткәс әйтелә торған теләк.

**бүре ауыҙ** *һөйл.* 1. Ҙур ауыҙлы кешегә ҡарата мыҫҡыллау һүҙе.

2. Күп илаған баланы әрләү һүҙе.

3. Яман хәбәр һөйләгән кешегә ҡарата әйтелә. *Кит,* ***бүре ауыҙ,*** *юҡты һөйләп ултыраһың.* (Һөйл.)

**бүкән баш** *һөйл., әрл.* Башы самаһыҙ ҙур кешене мыҫҡыллау һүҙе.

**бүре бауыр.** Үтә ҡаты бәгерле, миһырбанһыҙ. *Эх, замандамы ни эш. Беҙҙең ауыл Фәғилә бахырҙы* ***бүре бауыр*** *Саҡай ни ҡара көнгә еткерҙе.* (Б. Бикбай.)

**бүре бауыры ашаған.** Бик уҫал, яуыз *(кеше).*

**бүре башы(** *н* **) ашарҙай булыу.** Ныҡ асығыу. *Әлмисаҡ туҡлыҡлы ашамлыҡтарҙы һыпырҙы ғына. Ситтән ҡарап тороусы булһа, йә был асҡа ҡырҡылып йөрөгән, көнө буйына һабан һөрөп,* ***бүре башы ашарҙай булып*** *асығып ҡайтҡан кешелер, тип уйлар ине.* (Б. Бикбай.)

*син.*: ҡарын асыу, ҡорһаҡ асыу, билбау аҫты бушау, эстә ас бүреләр олоу.

**бүрек һалыу** *кемгә, кем алдында.* Түбәнселек менән үтенеү. ***Бүректәр*** *барыбер Аллаяр алдында* ***һалыныр,*** *билдәр уның алдында бөгөлөр.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Йөрөгөҙ әле шунда, үҙегеҙгә күҫәк күтәргән кешегә* ***бүрек һалып,*** *баш эйеп...* (Ғ. Ибраһимов.)

**бүренән өрккән һарыҡ көтөүе кеүек.** Ҡурҡыштан эркелешеп ҡасҡан кешеләр төркөмөнә ҡарата әйтелә. *[Аҡтар]* ***Бүренән өрккән һарыҡ көтөүе кеүек,*** *ашығып сигенә.* (М. Ғафури.)

**бүре(һе) олоу** *кемдең.* Табышты, файҙаны көтмәгән ерҙән бик күп итеп алыу. ***Бүреһе олоно*** *Ҡәйүмдең: юҡ ҡына хаҡҡа урағын*

*урҙырыу, игенен һуҡтырыу ғына етмәне, көҙ көнө бер келәт урынына халыҡтан ике келәт иген йыйып алды.* (Ғ. Лоҡманов.) ***Бүреһе олоясаҡ** Сафыйҙың. Йәшел тоҡто аҡса менән тултырмай ҡайтмаҫ әле егетең.* («Һәнәк».) *Факиһа йорт хужаһының һүҙен ҡеүәтләне: — Ҡайным мәрхүм ҡорҙашың һуғышта саҡта үлеп, Шаһиәхмәт ҡайнағаның **бүреһе олоно** инде.* (Ж. Кейекбаев.)

**бүрәнә үтә бүре күреү**. Белмәгәнде беләм тигән кеше булыу *(яманлау һүҙе). — **Бүрәнә үтә бүре күрәһең!** — Вася асыуланып ҡуйҙы. — Ниндәй этлек булһын бында? Түләрмен тип ап-асыҡ әйтте бит.* (Х. Мохтар.) *[Председатель калдаушикка:] Улар килгән райондан, тәк бөтәһе лә важный инде, **бүрәнә үтә бүре күрә**, ҡустым, газға нажми инде.* (С. Иманғолов.)

**бүркен тышлау** *кемдең*. Ныҡ ҡына туҡмау, дөмбәҫләү. *[Халыҡ управляющий хаҡында:] — **Бүркен тышлап** алырға кәрәк әҙерәк! Аҙау тештәрен ҡойорға! Һелтә берәрҙе!* (А. Таһиров.)

*син.*: кәрәген биреү, тетмәһен тетеү, иҙмәһен иҙеү, ҡабырғаһын һанау, һырт ҡайышын алыу.

**былтырҙың күҙе йылтыр**. Күптәнгене һөйләгән кешегә ышанып етмәүҙе белдереп көлгәндә әйтелә.

**былтыр үлгән ябалаҡты быйыл атып алдыңмы**. Онотолған нәмәне һуңлап белеп, яңылыҡҡа һанаған кешегә ҡарата әйтелә. *... Ул иҫке саралырҙы яңы Америка асҡан кеше кеүек газета сәхифәләренә яҙып ятыуығыҙға аптырайым. Шулай уҡ һеҙҙең кеүектәргә беҙҙең башҡорттар «**былтыр үлгән ябалаҡты быйыл атып алдыңмы**» тиҙәр.* (Ш. Хоҙайбирҙин.)

**бына ғына**. Бик яҡында, эргәлә. *Туҡтағыҙ, мин барып киләйем, уның [Харистың] өйө **бына ғына** тора.* (Б. Бикбай.)

**бына(мын) тигән**. Бик шәп, шөйлә яҡшы. *Д. Юлтыйҙың... бик күп **бына тигән** әҫәрҙәре бар.* (Р. Ниғмәти.) *Минең бик һәйбәт, **бына тигән**, бер иптәш бар ине.* (С. Агиш.) *Хәҙер **бынамын тигән** ағайың булыр ине, үлде бит.* (Н. Ҡәрип.) *Төҙөлөшкә үҙ теләктәре менән килгәйне улар [Федор менән Пелагея]. Аралары татыу, көнкүрештәре **бына тигән**.* (М. Хәйҙәров.)

*син.*: ал да гөл.

**бына һин уны** (әле). Ғәжәпләнеп хуплағанда йәки шелтә белдергәндә әйтелә.

*син.*: бына <һиңә> кәрәк булһа.

**бына һиңә йоҙроҡ**. Берәй кешенең һораған нәмәһен асыу менән кире ҡаҡҡанда әйтелә.

**бына <һиңә> кәрәк булһа**. Көтөлмәгән хәлдән аптырауға ҡалғанда әйтелә. — ***Бына һиңә кәрәк булһа**, таң да ата, — тине Ҡотлояр.* (Һ. Дәүләтшина.) — ***Бына һиңә кәрәк булһа!** — тине староста һәм эсер сәйен эсмәй һикереп төшә башланы.* (Ж. Кейекбаев.)

*син.*: бына һин уны (әле).

**бырамат* сабыу**. Ваҡытты бушҡа уҙғарып йөрөү.

[* **Бырамат** — *рус.* промотать.]

*син.*: быраматта йөрөү, ел ҡыуыу, эт һуғарыу.

**быраматта йөрөү**. Ваҡытты бушҡа уҙғарыу.

*син. ҡар.*: бырамат сабыу.

**бысағын ашаған**. Үтә һаран, һарандың һараны. *[Мөьмин ҡарт] Ул **бысағын ашаған**, эшлектән сыҡҡан бер һаран нәмә ине.* (С. Ағиш.)

*син.*: ҡырҡһаң ҡаны сыҡмаҫ.

**бысағы май өҫтөндә** *кемдең*. Аш-һыуға, ризыҡ-нiғмәткә мул, һыйсыл *(ҡатын ҡыҙға ҡарата)*.

**бысаҡ булып (энә кеүек) ҡаҙалыу**. Көслө әрнеү һалыу, йөрәккә ауыр булыу. *Расихтың һүҙе йөрәгемә **бысаҡ булып ҡаҙалды**.* (Ғ. Ғүмәр.)

**бысаҡҡа (балтаға) бысаҡ килеү** *кем менән*. Талаш-тартышҡа инеү, янъяллашыу. *Беҙ [Тәскирә менән] ғүмер баҡый **бысаҡҡа бысаҡ килешеп** йәшәнек инде. Бер генә тапҡыр ҙа уртаҡ тел таба алманыҡ.* (М. Хәйҙәров.) *Иәләев беренсе көндәрҙән үк актив менән **бысаҡҡа бысаҡ килә** башланы.* (Ә. Атнабаев.) *Күрше менән күрше **балтаға бысаҡ килә**. Тикшерелмәгән «мәсьәлә», әйтелмәгән һүҙ ҡалмай.* («Сов. Башҡ.»)

**бысаҡ телле (теле бысаҡ кеүек)**. Үтә эсе телле. *Юҡ-барҙы күп күргән, **бысаҡ телле** кешенең алыҫыраҡ булғаны хәйерле.* (Б. Бикбай.)

**бысаҡһыҙ һуйыу**. Бик ауыр хәлгә ҡуйыу. *[Барый:] Ҡарағыҙ әле, нисек тә үткәрергә булмаймы? Тимәк, алманығыҙ инде иген-де? (Асыуланып). Ярай... Тик үкенмәгеҙ... (Трубканы ҡуйып.) Һуйҙылар, **бысаҡһыҙ һуйҙылар**.* («Сов. Башҡ.»)

**быуа быуырлыҡ**. Бик күп, иҫәбе-хисабына сығырлыҡ түгел *(еңелсә көлөү тойғоһо менән әйтелә). Тик үҙ һүҙен һүҙ итеп өйрәнгән колхоз председателе Ишбулды: «Ирҙәр етмәһә, беҙҙә бисәләр **быуа быуырлыҡ**», — тине.* (Ғ. Әмири.) *— Әй, беҙҙең кеүек йырсылар **быуа быуырлыҡ** ул, — ти [Рәшит].* (Р. Солтангәрәев.) *Ранетка ла **быуа быуырлыҡ** баҙарҙа, әммә беҙгә оҡшағаны — вағы юҡ.* («Ағиҙел».)

**быуын бөтөү**. Бөтөнләй хәлһеҙләнеү. *Ҡыҙыҡайҙың шунда уҡ **быуыны бөттө**, һыны ҡатты.* (Ф. Иҫәнғолов.)

*син.*: хәлдән тайыу, арманһыҙ булыу, һыу эскеһеҙ булыу, телде арҡыры тешләрҙәй булыу, үлемесле булыу.

**быуын бушау (йомшау)**. Хәлһеҙләнеү. *Көтмәгән ауыр ҡайғыны ишетеп, Кәримдең **быуындары бушаны**.* (Я. Хамматов.)

**быуынға төшөү** *кемдең*. 1. Хәлде бөтөрөү, хәлһеҙләндереү. *... Вареньеның **быуынға төшөүен**, күп ашарға ярамағанлығын бер-беребеҙгә әйткәнлегебеҙҙе лә әҙ генә беләбеҙ.* (Д. Юлтый.) *— Урман эше еңел эш түгел, ирмен тигән ирҙәрҙең дә **быуынына төшә** ул, — тип дауам итте Хикмәттең атаһы Рахман.* (Х. Ғиләжев.)

*син.*: быуынды алыу 1.

2. Нимәнелер нығып йөҙәтеү, мaҙаһын китәреү. ...*Йә йәнеңде, йә көтөүеңдән өс яҡшы ат һайлап бирәһең! — тип* ***быуынына төшәләр*** *[һыйбайлылар Насырҙың].* (М. Буранғолов.) *[Мәғфүрә:] «Еңгә, берүк шуны инәйемдән һорап ҡара әле, миңә уҡып торорға бирмәҫ микән?» — тип* ***быуыныма төштө.*** (Һ. Дәүләтшина.)

*син.*: йәнгә тейеү, маҙаға тейеү, теңкәгә тейеү, теңкәне ҡоротоу, тәҡәтте ҡоротоу, үҙәккә үтеү.

**быуынға ултырыу.** 1. Буйға үҫеп быуынланыу *(иген тураһында). Арыштар инде **быуынға ултырҙы.*** (И. Насыри.)

2. Буйға үҫеп нығыныу *(кеше тураһында). Минең атайымдың заманында районыбыҙҙа данлыҡлы балта оҫтаһы булған Арслан ҡарттың һүҙе менән әйткәндә, ирҙең самай* ***быуынға ултырған,*** *ҡулында тимер иректкән сағы.* (З. Биишева.) *Саҡ ҡына* ***быуынға ултырғас,*** *Вәлиәхмәт, башҡа ярлы балалары кеүек, байҙарҙа батраклыҡта йөрөй башланы.* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: быуын нығыу (ҡатыу).

3. Хужалыҡты нығытыу, хәлләнеү. *[Гәрәй] ... Исай ауылындағылар тирмәнен инде ҡабат ҡотайып, нығлы* ***быуынға ултырған*** *Иван Лесинға һатты...* (Б. Бикбай.)

*син.:* быуын нығыу (ҡатыу).

**быуынға һикереү**. Быуын-быуын булып үҫеү, быуынланыу *(игенгә ҡарата). Юлдың ике яғында ла инде* ***быуынға һикереп*** *килгән боиҙай баҫыуҙары ята.* (Ә. Вәли.)

**быуынды алыу** *кемдең.* 1. Хәлде бөтөрөү, арытыу. ...*Тубыҡтан ала ҡар йырмаслап текә тауға артылыу...* ***быуынды ала.*** (Н. Мусин.) *Анау Бәләбәй тауҙарын йөк менән менеү аттың ярты* ***быуынын ала.*** (Х. Ғиләжев.)

*син.*: быуынға төшоү 1.

2. Дәртте һүндереү, эшкә-тормошҡа ынтылышты ҡайтарыу. *Һәләкәткә дусар ителеү уйы* [*Ҡотлоярҙың*] ***быуынын алған,*** *ышанысын ҡайтарған.* (М. Минһажетдинов.)

**быуынды ҡырҡыу**. Тормош хәлен ҡаҡшатыу.

**быуын ҡаҡшау**. 1. Хәл бөтөү, нық арыу.

2. Тормош дәрте кәмеү. ***Ҡаҡшаны быуын,*** *ҡаҡшаны тамам. Ә элек бит урамға һыймаҫтай бара торғайны ул, хәҙер бына, уғры һымаҡ, арт ҡапҡанан ҡасып-боҫоп ҡына йөрөй.* (Б. Бикбай.)

*син.*: ҡарыу ҡайтыу.

**быуын (теҙ) ҡалтырау**. Нық ҡурҡыу. [*Кәңәшбай*:] ***Быуындарым ҡалтырап*** *ҡаушаным да киттем.* (Т. Хәйбуллин.)

*син.*: дер ҡалтырау, ҡойолоп төшөү.

**быуын ҡороу**. Бик нық арыу, хәлдән тайыу. [*Баян*:] *Мин тупһа аша өйгә ингәс тә,* ***быуыным ҡороп*** *йығылып киттем.* (М. Ауэзов. Н. Иҙелбай тәрж.)

*син. ҡар.*: быуын бөтөү.

**быуын ныҒыу (ҡатыу).** 1. Буйға етеп көскә ултырыу. *Етмәгәйне әле* ***ҡатып быуындар ҙа****, ҡылыс айҡап яу утына ташландыҡ.* (Х. Ғиләжев.) [*Йәнбирҙе*:] — *Икегеҙ ҙә, улдарым, күҙебеҙҙең нурҙары; тешәр сағығыҙ үтмәгән,* ***быуынығыҙ ҡатмаған...*** (Эпостан.)

2. Нығыныу, көсәйеү. ***Быуыны ныҒыҒан*** *колхозды 1959 йылда күрше Ленин исемендәге хужалыҡ менән берләштерергә ҡарар иттеләр.* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: быуынға ултырыу 3.

**быуын таралыу.** Йоҡо килеп иҙрәү, ойоу. *Иылыла малайҙарҙың* ***быуыны таралып****, күҙҙәре үҙенән-үҙе йомола башланы.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**быуынһыҙ ергә бысаҡ һалыу.** Булмаҫтай урында еңергә, үҙеңдекен итергә тырышыу. *Күңелеңә ауыр алма, тал бөгөлгән ерҙән һынмаһа,* ***быуынһыҙ ергә бысаҡ һалып та*** *бер эш тә сыҡмаҫ.* (Һ. Дәүләтшина.)

**бәбәк ярыу.** Башлап алып китеү, барлыҡҡа килеү. *Күңелдәргә ҡанат ҡуйҙы йәшлек яҙы, йөрәктәрҙә һөйөү тәү ҡат* ***бәбәк ярҙы****.* (Ш. Бикҡол.)

**бәғергә инеү.** Кешенең күңелен иретеү.

*син.*: бәғерҙе иретеү.

**бәғергә таш булыу.** Ауыр ҡайғыға һалыу. *Балалары араһында иң яҡын күргәне, үҙе иҫән ваҡытта уҡ имамлыҡҡа фатиха бирергә ниәтләгән Алсынбайы юғалыу* ***бәғеренә таш булып*** *ултырҙы* [*Аҡназарҙың*]. (Ә. Хәким.)

**бәғергә тейеү.** Ни менәндер йонсотоу, биҙрәтеү. «*Мәҙәниәт йортонда киҫәтеү яһап, Гавриковтың* ***бәғеренә тейҙеләр***». (А. Мағазов.)

**бәғергә тәҙ һалыу.** Күңелде әрнетеү. *Тағы ла тегенең* ***бәғеренә тоҙ һалам***: — *Был беҙгә табан килә, суҡынсыҡ.* (С. Ағиш.) ...*Нисек кенә әйтһәң дә, был бисә* ***бәғергә тоҙ һалды...*** (Ә. Бикчәнтәев.)

**бәғерҙе иретеү.** Күңелдә йылы тойғо уятыу.

*син.*: бәғергә инеү.

**бәғерҙе өҙөү (киҫеү, телеү).** Күңелде әсендереү. — *Был икеһе ул тиклем йәл түгел: ҙурҙар, бына иң бәләкәйе* ***бәғерҙе өҙә****, — тип аңлатты беҙгә өләсәйем.* (Ә. Чаныш.) *Һандуғасҡай, наҙлым, ҡуй, һайрама, һайрап, йәш* ***бәғеремде киҫмәй*** *тор.* (Ш. Бабич.) *Тыуған ерҙәр иҫкә төшөп, йөрәк-бәғерҙе киҫә.* (Халыҡ йырынан.) *Үкһеҙҙәрҙең үкенесе* ***телә бәғерҙе.*** (Р. Бикбаев.)

*син.*: йөрәк майын һыҙыу.

**бәғер(ем) киҫәге.** Бик яҡын күргән, яратҡан кешегә ҡарата әйтелә.

**бәғер итен ашау.** Йәнгә яфа килтереү, күңелде ғазаплау, әрнетеү. *Судьялар ҙа хөкөм итергә ялығаларҙыр. Һәр процесс* ***бәғер итен ашай*** *бит.* (Ә. Бикчәнтәев.)

**бәғер ҡатыу**. Хис-тойғо нескәлеге бөтөү, бәғерһеҙләнеү. *Больницала әҙәм тунап* ***бәғере ҡатып*** *киткән, ихтыяр ҡуйһаң, яңғыҙ балаһына көн яҡтыһы күрһәтмәҫ ине*! (Ш. Янбаев.) *Өфөгә яҡынлашҡан һайын Мәрйәмдең йәштәре кибә,* ***бәғере ҡата*** *барҙы*. (Р. Низамов.)

**бәғер ҡороу (һыҙлау)**. Күңелдән һыҙланыу, әсенеү. *Тәҡәтем юҡ,* ***бәғерем ҡорой*** *етем ҡалған балаға*. (Бәйеттән.) «*Ҡыҙ*» *тинеңме — ҡан ҡыҙырға башлай,* ***бәғерең һыҙлана****, йәш йөрәктә әллә ниндәй тәмле уйҙар ҡуҙғала*. (Ш. Бабич.)

*син*.: йөрәк әрнеү, йән әсеү.

**бәғер ташыу (яныу)**. Аҙарыныу, әсенеү. *Рәйсә*?!. *Эйе, Рәйсә шул, ана кем өсөн* ***бәғерҙәре таша*** *икән*. (Д. Бүләков.) *Улар тел беҙҙәрен сәнсеп, Ағыуланды бөтә йәнем. Аға йәшем,* ***яна бәғерем****, Мөғәҙҙәп дәхи выждәным*. (Д. Юлтый.)

**бәғер телгеләнеү (киҫелеү, ҡыйылыу)**. Күңел ғазабы кисереү, өҙәләнеү. *Улым иҫемә төшһә, йөрәк һулҡылдап китә,* ***бәғерем телгеләнә****, ҡайғым тағы ла арта*. (М. Уразаев.) ***Бәғере*** *нисек кенә* ***телгеләнмәһен****, үҙәге нисек кенә өҙгөләнмәһен, тешен ҡыҫып түҙҙе әсә*. (Я. Вәлиев.) *Ике күҙҙән берәүгә ҡалғас,* ***ҡыйыла бәғерҙәрем***. (Халыҡ йырынан.)

*син*.: йөрәк өҙөлөү, йән әсеү.

**бәйҙән ысҡыныу**. Ирекҡә сығыу. *Был үгәнһеҙлек, ҡапыл* ***бәйҙән ысҡыныу*** *уның сәләмәтлеген тиҙ ҡаҡшатты, өс ай тигәндә Гәрәйҙең ҡулдары ҡалтырауыҡҡа әйләнде... Зиһене ысындан да таралды*. (Б. Бикбай.)

**бәйҙән ысҡынған эт һымаҡ** *яманл*. Талашып-һуғышып, кешегә ташланып барган ҡотороҡ кешегә ҡарата әйтелә.

**бәйел* аҙыу**. Холоҡ боҙолоу, холоҡһоҙланыу. *Шәүрә килен, һинең* ***бәйелең аҙған****, егет-елән янына йыйылған*. (Халыҡ йырынан.) *Бынау һыйырҙың* ***бәйеле аҙып*** *китте әле, ултырһаң, тибешеп, һөттө түгә лә китә*. (Т. Морат.) *Башына бәлә килер кешенең* ***бәйеле аҙыр***. (Мәҡәл.)

[***Бәйел** — *ғәр*. холоҡ, ҡылыҡ.]

**бәйләгән кәүек**. Урындан ҡуҙгала алмау. *Бәйләгән кәүек тороу. Бәйләгән кәүек ҡалыу*. ▬ *Поездың йөрөшө рәхимһеҙ бит. Бер нисә минут эсендә йәйләүҙәрҙе* ***бәйләгән кәүек*** *артта ҡалдырып китте*. (Д. Юлтый.)

**бәйләп һоғондора**. Бик хәйләкәр кешегә ҡарата әйтелә.

**бәйән* итеү (ҡылыу)** *иҫк*. Белдереү, һөйләп биреү, аңлатыу. *Өсөнсө ырыу исеме булыр ҡыпсаҡ, белерһегеҙ,* ***бәйән итеп*** *яҙып ҡуйһаҡ*. («Күсәкбей».) *Өфөлә булған ваҡиғаларҙы бик нығ бороcлап, оҙон иттереп* ***бәйән ҡыл*** *әле*. (С. Ҡудаш.) [*Ғатаулла ҡарт*] *Кешеләрҙең ғүмер буйына ергә туймай, зар-интизар йәшәүҙәре, аҙаҡ нисек итеп бәхетле тормош ҡороп ебәреүҙәре тураһында* ***бәйән итә***. (Р. Солтангәрәев.)

[***Бәян** — *ғәр*. аңлатма.]

**бәкәлгә (билгә, бөгәргә, быуынға) һуғыу.** 1. Эшкә, тормошҡа ҙур ҡамасаулыҡ килтереү. *Ураҡ өҫтөндә... герман һуғышы сығып, **бәкәлгә һуҡты.*** (Ф. Иҫәнғолов.) *Машинаның йыш көйһөҙләнеүе **бәкәленә һуға** егеттең.* (Н. Мусин.) [*Айбулаттың*] *...Был арала өйҙә юҡлығы **билгә һуғып** тора. Ләкин улар оҙаҡламай ҡайтыр.* (Һ. Дәүләтшина.)

2. Өҫтөнлөк күрһәтеп, мыҫҡылға ҡалдырыу. *Халыҡ гөж килеп ҡалды: — Һыңар ҡуллы сатан **бәкәлегеҙгә һуҡты** бит, егеттәр!* (Ҡ. Ибәтуллин.) *Хат ташыусы Шәрифулла Ғәлләмов һөйләй: — Ҡуй инде, **быуынға һуҡтылар.** Газета-журналдар таратыуға редакциялар конкурс асҡас, шул тиклем тырышҡан булдым.* («Сов. Башҡ.»)

**бәлиғ * булыу.** Үҫеп етеү. ***Бәлиғ булған** балаларҙы булмаҫ алдап.* (М. Ғафури.)

[***Балиғ** — *ғәр.* үҫеп еткән.]

**бәлеш ауыҙ** *мыҫҡ.* Тиҙ генә илап барған, илаҡ.

**бәлеш төбө көтөү** *һөйл.* Ашыҡмай ғына, иң артта йөрөү. ***Бәлеш төбө** көтәһеңме әллә, тик ултыраһың.* (Һөйл.)

**бәләғә ҡалыу (осрау, тарыу).** Ауыр хәлгә төшөү, ҡазаға дусар булыу. *Бер фаиҙаһыҙ тирәк өсөн **тарыным** мин юҡ **бәләгә.*** («Сов. Башҡ.») ***Тарыны** баш **бәләгә**, тарыны! Әллә шул колхозынан, һыпырып ташлап, сығып китергә инде?* (Б. Бикбай.)

**бәләнән баш-аяҡ.** Хәүеф-хәтәрҙән алыҫ булыу яҡшы. [*Сәйҙел*] *улына: — Әй, балам, берүк үҙеңде һаҡла инде. **Бәләнән баш-аяҡ...*** (Я. Хамматов.) *Ахыр, Аҙнагөл килмәҫ була. Бер йыл үтә. Аҙнагөл күренмәй. — **Бәләһенән баш-аяҡ,** — тип ҡыуана Юламан ҡарт.* (З. Биишева.) *Һыйыр һауып ҡарарға дәрт булһа ла, өлкәндәр, **бәләһенән баш-аяҡ тип,** мине малға яҡын ебәрмәйҙәр ине.* («Сов. Башҡ.»)

**бәлә һалыу.** I. Юҡ-барҙан оло ғауға ҡуптарыу. *Ямғыр туҡтауһыҙ йыуған тәҙрә аша урам буйлап ҡайтыусы һыйыр, һарыҡ-кәзә көтөүе күренде. Уларҙың **бәлә һалып** баҡырған тауышы ишетелде.* (Н. Ғәйетбаев.)

*син.*: яр һалыу.

2. Берәй нәмәнең ауырлығын кешеғә төшөрөү. ***Бәләңде һалма** әле миңә.* (Һөйл.)

**бәрей алмаштырған.** Бик ҡыҙыу, дыуамал (*кеше*).

**бәрейе һөймәү** *кемдең.* Тәбиғәтең менән ҡабул итмәү, яратмау. *— Ҡуй, сихырсыны **бәрейем һөймәй** минең, — тине Ваһап, ағаһының кәнәшен кире ҡаҡты.* (Ж. Кейекбаев.)

**бәрәкәтен ебәреү (ҡасырыу)** *нимәнең.* Ҡәҙер-ҡотон, йәмен юҡҡа сығарыу. *Шулар инде ер һатып, йортто талап **бәрәкәтте ебәргәндәр** илегеҙҙән.* (Д. Юлтый.) *Аштың **бәрәкәтен ҡасырып,** тороп йөрөмә ашағанда.* (Һөйл.)

**бәҫе китеү** *кемдең, нимәнең.* Йәме, ҡәҙер-хөрмәте бөтөү. *Ауылда туҡталып **бәҫе киткән** Хисмәтулла яйлап төҙәлә һәм приискыға эшкә яллана.* (Ә. Вахитов.)

**бәхет асҡысы.** Бәхет килтергән хәл, сәбәп.

**бәхете асылыу (таш ярыу)** *кемдең.* Көткән, өмөт иткән нәмә үҙенән-үҙе килеү. *Бер көндө иртән Фәһимдең* ***бәхете таш ярҙы.*** *Фәйрүзә уны руль артына ултыртты.* (Ә. Ғәрәев.)

**бәхет йондоҙо ҡалҡыу** *кемдең.* Ғел генә уңышҡа ирешеп тороу, эш-тормош ыңғай килеп тороу. *Сабираның да* ***бәхет йондоҙо ҡалҡты*** *инде былай булғас. Бульдозерисы хәҙер артынан бер тотам да ҡалмай бит.* (И. Ғиззәтуллин.)

**бәхеткә ҡаршы.** Нимәгәлер ҡәнәғәт булғанда әйтелә. ***Бәхеткә ҡаршы,*** *оҙаҡламай Хасбулат олатайҙың йөҙө тағы ла асылып, күҙҙәре ирәбеләнеп китте.* (З. Биишева.) *Бибинурға Сәрмәсән урманы килеште.* ***Бәхеткә ҡаршы,*** *ул унан ауырға ҡалып ҡайтты.* (Р. Низамов.)

**бәхет ҡошо.** Бәхет сығанағы булған нәмә. *Әсмәнең йөрәгендәге үҙгәреште Заһир шунда уҡ һиҙеп алды,* ***бәхет ҡошо*** *уның ҡулына килеп ҡуна түгелме?* (Л. Яҡшыбаева.)

# В

**ваз* кисеү** *кемдән, нимәнән.* Ышанған, инанған нәмәнән, кешенән ситләшеү; баш тартыу. *Арба өҫтөндә зекер әйтеп барған саҡтарҙа бөтә донъянан* ***ваз кискән*** *кеүек күренәләр [муллалар].* (М. Ғафури.) *Әбей ғүмер буйы инанып килгән аллаһынан* ***ваз кистеме*** *икән ни?* (Х. Мохтар.) *Ерле юҡҡа ғына тормоштан* ***ваз кисергә*** *уйламайһыңдыр бит.* (Н. Мусин.) *Кәримгә үҙенең кәпәренеүен ташларға, «түрәлегенән»* ***ваз кисергә*** *тура килә...* (Ә. Хәкимов.)

*син.*: баш тартыу.

[***Ваз** — *фарс.* берәй нәмәнән баш тартыу.]

**вайран* итеү (ҡылыу).** Ҡыйратып ташлау, емереү. *Илгә инде баҫып,* ***вайран итеп,*** *ҡан эскес вәхши ордалар.* (Ғ. Ғүмәр.) *Иҫкелектәр мәмләкәтте* ***итер вайран...*** (М. Ғафури.)

[***Вайран** — *фарс.* ватыҡ, емерек; хараба хәленә килгән.]

**ваҡ иләктән иләү (үткәреү).** Бик ныҡ тикшереү, соҡсоноу.

*син.*: энә күҙенән үткәреү.

**ваҡыт (йәки көн) уҙһын, сабата туҙһын.** Ғүмерҙе бушҡа үткәргән кешегә ҡарата әйтелә. *Ваҡыт уҙһын, сабата туҙһын тип йөрөү.*

**ваҡытһыҙ ваҡыт.** Эш тығыз булған йәки ашаған-эскән, ял иткән мәл. *Ваҡытһыҙ ваҡытта йөрөү. Ваҡытһыҙ ваҡытта борсоу.*

**вафат* булыу.** Йәшәүҙән туҡтау, үлеү. *Әсәһе* ***вафат булған ваҡытта,*** *Зәйнәп һигеҙ йәшендә ине.* (М. Ғафури.) *Шиғырымды*

*һис дөрөҫ баҫмайҙар тип, бер шагир хәсрәтенән* ***вафат булган.*** (Ш. Бабич.) *...Тыуған илгә юлға сыҡҡанда, Ҡаһым түрә ағай* ***вафат булып ҡалды.*** (Ғ. Сөләймәнов.)

*син.*: ғүмер һүнеү, гүргә инеү, тормоштан китеү, (яҡты) донъянан китеү, теге донъяга китеү, гүр эйәһе булыу, донъя ҡуйыу, ҡәбер эйәһе булыу, аранан (беҙҙән) китеү.

[***Вафат** — *ғәр.* үлем.]

**выждан* газабы.** Кешенең эске намыҫ, әхлаҡи хис кисереше. *Выждан ғазабы кисереү.*

[***Выждан** — *ғәр.* намыҫ].

**Вәли — Ғәлигә, Ғәли — Вәлигә.** Ғәйепте, йәки бурысты бер-береһенә ауҙарган кешеләргә ҡарата әйтелә.

# Г

**гонаһ шомлого.** Тәҡдиргә төшкән бәлә-ҡаза. ***Гонаһыбыҙ шомлогонан*** *ер күтәрмәй, йәғмүрҙән ҡоро ҡалды беҙҙең баҫыу.* (М. Аҡмулла.) *Уйлаһаң —* ***гонаһ шомлого.*** *Бер уйлаһаң кәмит тә. Һөйлә хәлемде ил буйлап...* (Р. Түләк.) **Ғонаһ шомлогона ҡаршы:** ***Гонаһ шомлогона ҡаршы****, кемдер тегендә минең киләсәгемде алдан хәбәр итеп ҡуйған.* («Сов. Башҡ.»)

**гонаһына инеү.** Кешенең артында үҙең күрмәгән ғәйебен һөйләп, яҙыҡлыҡ эшләү, гонаһлы булыу. ***Гонаһына инер*** *хәлем юҡ, белмәйем уның хаҡында.* (Һөйл.)

**гөлт итеп тороу.** Таҙа, матур, йыйнаҡ булыу. *Донъяһы гөлт итеп тора.*

**гүргә инеү.** Йәшәүҙән туҡтау, үлеү. *Ат яманлаған тай менер, ир яманлаған* ***гүргә инер.*** (Мәҡәл.) *Күрәсәгең күрмәй,* ***гүргә инеп*** *булмай.* (Әйтем.) *Ете ҡыҙҙың ҡонон алмай* ***гүргә инмәҫ*** *һөйәгем.* (Ҡобайырҙан.)

*син. ҡар.*: вафат булыу.

**гүр газабы.** Бик ҡаты яза, этлек. *Гүр ғазабын күрһәтеү. Гүр ғазабында йәшәү.*

**гүр эйәһе булыу.** Йәшәүҙән туҡтау, үлеү. *Атайыбыҙ, март аҙағында беҙҙән айырылып,* ***гүр эйәһе булды.*** (С. Агиш.) *Ул да мәғлүм булһын: Яппар мулла* ***гүр эйәһе булды****, бахырың.* (Ғ. Әмири.) *...Сабый әҙәм була алманы, Фатималар барып, биш-алты көн торғас,* ***гүр эйәһе булды.*** (Ж. Кейекбаев.) [*Аллаяр*:] *Ҡәйнәң дә бына, бөгөнмө-иртәгәме тигәндәй,* ***гүр эйәһе булырга*** *тора.., йөрәге бигерәк бөттө бит...* (Ф. Иҫәнғолов.)

*син. ҡар.*: вафат булыу.

**гәп* һугыу (һатыу).** Юҡ-буш хәбәрҙе оҙаҡ итеп һөйләшеү. *Разведчиктар Эрнест менән* ***гәп һугырга*** *тотондолар.* (Н. Мусин.)

*Был ике йыл эсендә Ҡотлобай ҡарт менән Иван күпме төндәр* ***гәп*** *һәм әңгәмә* ***һуҡманылар.*** (С. Ағиш.) *Ситән буйы бүрәнәлә Ауылдаштар йыйылып* ***гәп һуға.*** (Т. Йәнәби.) *Самосадканы көйрәтеп, тәмләп кенә* ***гәп һатабыҙ*** *баҡсасы менән икәү.* (М. Кәрим.) *Бер көн шулай икәүләп* ***гәп һатып*** *ултырабыҙ...* (Р. Низамов.)

**[Гәб*** — *фарс.* һүҙ, әңгәмә.]

# Ғ

**ғазап сиғеү.** Яфа күреү, интеғеү. [*Гөлфирә:*] ...*Мин был* ***ғазапты*** *һинең арҡала* ***сигәм.*** (И. Абдуллин.) *Ата-әсәһеҙ ҡалған ул бер етем, шулай* ***ғазап сигә*** *донъяла.* (Ғ. Амантай.)

**ғарҡ* булыу.** Бик ныҡ туйыу. *Минең өйгә барһаң, майға, иткә* ***ғарҡ булырһың.*** (Ғ. Туҡай.) *Үлмәсбикә шатланып ризалашты, сөнки иҫерек иренән* ***ғарҡ булған...*** (З. Ҡаҙаҡбаева.) *Вәли* ***ғарҡ булғансы*** *ашай, бер ҡабырлыҡ урыны ла ҡалмай.* (Ғ. Ғүмәр.) **Ғарҡ булғансы:** *Ғарҡ булғансы ашау.*

[* **Ғарҡ** — *ғәр.* йөҙәү.]

**ғафил* булыу.** 1. Иғтибарһыҙ, вайымһыҙ булыу. *Егет булған елеп үтер, ел артынан барып етер,* ***ғафил булған*** *артҡа китер.* (Мөнәжәттән.)

2. Буш ҡалыу, һемәйеү.

[***Ғафил** — *ғәр.* моңһоҙ, иҫе китмәүсән.]

**ғибрәт алыу.** Ниҙең дә булһа яҡшылығына йәки яманлығына төшөнөп, яҡшыға һығымта яһау. ***Ғибрәт ал*** *һин йәннәт төҫлө һандуғаслы был ерҙәрҙән.* (М. Өмөтбаев.) *Эшкә яһалған анализ* ***ғибрәт алырлыҡ*** *күп кенә күренештәрҙе асып һалды.* («Сов. Башҡ.») *Ә һеҙ ауылдың үткәненән* ***ғибрәт алығыҙ ҙа*** *колхоздың бөгөнгөһөнә ҡарап шөкөр итегеҙ.* (М. Тажи.)

**ғибрәт өсөн.** Кемгәлер һабаҡ булһын тип (*гәҙәттә, насарлыҡ эшләмәһен өсөн*). *Ғибрәт өсөн оятлы итеү.* ▬ [*Хан:*] *Кем буйһонмай минең әмергә?..* ***Ғибрәт өсөн*** *ошо төйәккә тау өйөрмөн һеҙҙең һөйәктән.* (М. Кәрим.)

**ғилем эстәү** *иҫк.* Ғилем юлында йөрөү, уҡырға, белем алырға тырышыу. ***Ғилем эстәү*** *юлына кереп киткәнмен.* (Ғ. Рафиҡи.)

**ғишыҡ тотоу.** Йәр һөйөү, берәүгә ҡарата яратыу хисе кисереү. *Ғишҡым төштө бер ҡыҙға.* ***Ғишыҡ тотоу*** *— ут йотоу.* (Әйтем.)

**ғишыҡ утында яныу.** Көслө мөхәббәт кисереү, өҙөлөп һөйөү. ***Ғишыҡ уттарында янып-көйөп,*** *Ҡауышыр көнөм уйлап ябыҡтым.* (Халыҡ йырынан.) *Ҡыҙҙарҙың...* ***ғишыҡ утында янған***

*булып уфылдап көрһөнөргә яратыуын белмәйме ни инде ул* [*Закир*]. (З. Биишева.)

**ғөҫөрөн төшөрөү** *нимәнең кемгә.* Асыуын алыу, ниҙеңдер көсөн төшөрөү. *Хәмит бының әрәсәһенә төшөнөп, үҙ алдына үҙе: «Ә-ә-ә... Эштәр былай икән әле бында... Бисәһенә* ***ғөҫөрөн төшөрә*** *икән был ҡарт...» — тип уйланы.* (Ж. Кейекбаев.)

**ғүмер буйы**. Бик оҙаҡ ваҡыт, донъяла йәшәү дәүерендә. ***Ғүмер буйы*** *береһен-береһе улар шулай хурлайҙар.* (Д. Юлтый.) *Хушығыҙ, һылыу имәндәр, ялбыр толомло аҡ ҡайындар. Мин һеҙҙе* ***ғүмерем буйына*** *онотмам.* (М. Тажи.) *Исмәғилдең ни үсе булды икән бабайымда?* ***Ғүмер буйы*** *тигәндәй бергә туғын саптылар, дегет уртәп йөрөнөләр.* (Ж. Кейекбаев.)

**ғүмергә (ғүмер эсендә) бер <тапҡыр>**. Әллә ниҙә бер генә, бик һирәк. ***Ғүмергә бер тапҡыр*** *булһа ла, ғаилә мәжлесе ҡороп алмаҡсы ине Сания.* (З. Әхмәтов.) *Ғәйшә...* ***ғүмере эсендә бер*** *күргән был кешенең киң күкрәгенә башын ҡуйып, өндәшмәй шымтайып ҡалды.* (Һ. Дәүләтшина.)

**ғүмерҙе биреү**. Берәй эшкә йәнде фиҙа итеү.

**ғүмерен киҫеү (өҙөү, юйыу)** *кемдең, нимәнең.* Үлтереү, йәшәүҙән туҡтатыу. *Йәм-йәшел булып бер шыршы урманда үҫте. Ләкин кеше килеп уның* ***ғүмерен киҫте.*** (Н. Нәжми.) *Һуғыш тамамланырға бер нисә генә көн ҡалғас, дошман пуляһы Сабирҙың* ***ғүмерен өҙҙө.*** («Сов. Башҡ.») *Үткер бысаҡ алып ул* [*Баҙыян*] *ҡулына,* ***Ғүмерен юйырға ла*** *теләгән.* (Б. Вәлид.)

*син.*: һәләк итеү, йәнен ҡыйыу.

**ғүмере(ң) оҙон булыр**. Уның тураһында маҡтап һөйләп торғанда килеп сыҡҡан кешегә оҙаҡ йәшәүгә юрап, хуплап әйтелә.

**ғүмер ике килмәй**. Донъялыҡта йәшәгәндә рәхәтен күреп ҡалырға теләк белдергәндә, шуға өндәгәндә әйтелә. *Был* ***ғүмер ике килмәҫ.*** *Мал-йән, бала-саға һау саҡта, исмаһам, һаулыҡтан файҙаланып ҡалаһымы тием дә.* (Ғ. Дәүләтшин.) ***Ғүмер ике килмәй*** *ул,* ***ғүмер ике килһә лә,*** *береһе беҙгә теймәй ул.* (Таҡмаҡтан.)

**ғүмер итеү (кисереү, һөрөү, кисеү)**. Йәшәү, донъялыҡта тороу. *Күп* ***ғүмер иттек*** *ҡара тупраҡ эсендә тонсоғоп...* (Ш. Бабич.) *Ул ауылда Йәлмырҙа тигән бер ҡарт* ***ғүмер иткән,*** *ти.* (Әкиәттән.) *Бәхет, шатлыҡ менән* ***ғүмер кисерегеҙ,*** *туғандар.* (Б. Бикбай.) *Был тирәлә башҡортта дүрт ырыу булған, һәр береһе үҙенсә* ***ғүмер һөрөр*** *булған.* («Бабсаҡ менән Күсәк».) *Шулай үҫтем, шулай* ***ғүмер кистем,*** *шаян ҡылдар сиртеп үҫмәнем.* (Д. Юлтый.)

*син.*: көн итеү, көн күреү.

**ғүмер өҙөлөү (киҫелеү, һүнеү, бөтөү)**. Үлеү, һәләк булыу. *Күпме ҡан ҡойолған, күпме кешенең* ***ғүмере өҙөлгән!..*** *Оҙон һәм ҡатмарлы юл үтелгән.* («Башҡ. пионеры».) *Үлтергәндәр... Гөлкәйемдең* ***ғүмере өҙөлдө.*** (Б. Бикбай.)

*син. ҡар.*: вафат булыу.

**ғүмер уҙҙырып, сабата туҙҙырып** [**йөрөү**]. Бушҡа ваҡытты тәләфләү, файҙаһыҙға үткәреү.

**ғүмер үткәреү**. Буныҡа ваҡыт уҙғарыу. *Бынау һеҙҙең ҡунаҡ һыйлауҙарығыҙ төптө файҙалы эш түгел.* ***Ғүмер үткәреү*** *генә.* (Һ. Дәүләтшина.)

**ғүмер эсендә** <**бер**>. Бар булмышта бер генә тапҡыр. ***Ғүмер эсендә*** *бер тура килеп, ҡоро ауыҙ китеп ни!* (Һ. Дәүләтшина.) *Кем белә, бәлки был үтенес һәм шелтә һүҙҙәре бәхетһеҙ ҡатындың таш бәғер иренә* ***ғүмер эсендә*** *беренсе тапҡыр ҡыйып, ҡысҡырып әйткән зарҙары булғандыр.* (Б. Бикбай.)

**ғәҙемгә тейеү**. Намыҫты ҡуҙғатыу... *Һеҙ үҙ күләгәгеҙҙән үҙегеҙ ҡурҡаһығыҙ, — тип өҫтәне* [*Саҙрый*]. *Был һүҙҙәр Рәхмәйҙең* ***ғәҙеменә тейҙе***. (И. Ғиззәтуллин.)

**ғәжәп(кә) ҡалыу**. Ныҡ аптырау. *Әбей өйҙәге хәлде һөйләп биргәс, бабай* ***ғәжәпкә ҡалған***, *ти.* (Әкиәттән.) *Икенсе көндө ярҙамсы Мөләкөв барып, тағы буш ҡайтты. Складта наряд юҡ, тип, һөйләшергә лә теләмәгәндәр. Быға мин* ***ғәжәпкә ҡалдым***. (З. Хисмәтуллин.)

*син.*: иҫ китеү, иҫ-аҡыл китеү.

**ғәйбәт һатыу**. Кеше тураһында насар хәбәр таратыу. *Көндәштәрең турында* ***ғәйбәт һатма***, *киленсәк.* (Сеңләүҙән.) *Ошо йәшемә етеп, берәүҙең дә* ***ғәйбәтен һатып*** *йөрөгәнем дә юҡ...* (Т. Хәйбуллин.) *Шаулашҡан тауышты ишетеп килгән кешеләр һаны артҡандан-артты. Улар, силғауға төрөлгән алтынды тотҡан Хәйретдиндән көнсөлөктәре килеп, үҙ-ара* ***ғәйбәт һатылар***. (Я. Хамматов.)

**ғәйеп булыу**. Күҙ алдынан китеп, юҡ булыу, юғалыу. *Икенсе һалдат быны эҙләп сығып киткән дә үҙе* ***ғәйеп булған***, *ти.* *(Әкиәттән.) ...Күҙҙәй ҡарап торған өс тыу бейәбеҙ* ***ғәйеп булғайны***. (Т. Хәйбуллин.) *Һабан туйында беренселекте алған йүгерек ҡола байтал өйөрҙән* ***ғәйеп булды***. (Ж. Кейекбаев.) [*Зәйнәптең*] *атаһы һуғыштың тәүге йылдарында уҡ фронтта* ***ғәйеп булғайны***. (Ш. Насыров.)

**ғәйепкә алыу**. Насар тип ҡарау, килешмәгәнгә сығарыу. *Зыя ҡустым,* ***ғәйепкә алмаһағыҙ***, *ҡана бер йырлап эсәйем әле.* (М. Тажи.) *Тыңла, ханым,* ***алма ғәйепкә***, *ҡоҙғон ҡарай һинең мәйеткә.* (М. Кәрим.)

**ғәйеп итеү**. Ғәйепле тип ҡарау, ғәйепкә һанау. *Ҡайғы күрһәң, ила, батыр,* ***ғәйеп итмәҫ*** *һине кем дә.* (М. Кәрим.) ***Ғәйеп итмәгеҙ***, *кисерегеҙ, ғәйепкә алмағыҙ.* (Үтенеү һүҙе.)

**ғәйепләштән булмаһын**. Кешелә кире мөнәсәбәт тыуҙырырҙай нәмә эшләр, ҡылыҡ ҡылыр алдынан иҫкәртергә теләгәндә әйтелә. [*Әсмә*:] *Ярай, улайһа,* ***ғәйепләштән булмаһын***, *бейеп күрһәтәйем.* (Ғ. Ибраһимов.)

**ғәйептән булған**. Никахһыҙ тыуған, тыума.

**ғәләмәт* сиғеү**. Мәшәҡәт кисереү, ыҙаланыу.

[*Ғәләмәт — *ғәр*. билдә, тамға.]

**ғәмәлгә ашыу**. Үтәлеү, тормошҡа ашыу.

**ғәмәл дәфтәре**. 1. *иҫк*. Эш-хеҙмәтте яҙып бара торған дәфтәр. *Иәһәт кенә Ғәләүиҙе саҡырып алып кил. Йыллыҡ отчет кенәгәһен, башҡа* ***ғәмәл дәфтәрҙәрен*** *ҡалдырмаһын*. (Ғ. Әхмәтшин.) 2. *дини*. Һәр кешенең ғонаһы яҙылып бара торған дәфтәр.

**ғәрешкә*** китеү *иҫк*. Үлеү, донъялыҡтан китеү.

[*Ғәреш — *ғәр*. тәхет.]

**ғәфләт йоҡоһо**. 1. Вайымһыҙ йоҡо. *Төндә урмандан юлбаҫарҙар килеп сыға. Шул* ***ғәфләт йоҡоһолор*** *инде, былар бер нәмә тоймайҙар, ә юлбаҫарҙар Аҡназарҙың ҡатынын, аттарын алалар ҙа урманға ҡасалар*. (Әкиәттән.)

2. Вайымһыҙлыҡ, ғәмһеҙлек хәле.

**ғәфү итеү**. Кисереү. Ғәфү итегеҙ — ғәйепте кисереүҙе һорау, йәки үтенес белдереү формаһы. *Инде хәҙер яҙа алмайым,* ***ғәфү итә*** *күрегеҙ*. (Бәйеттән.) *Әгәр ҙә һин, Сәғиҙә, быны шулай аңлап, мине* ***ғәфү итһәң***, *выжданым ғазапланмаҫ... ине*. (М. Тажи.)

**ғәфү үтенеү**. Кисереүҙе һорау, йәки итәғәтлек күрһәтеү. *Хужа ҡунаҡтарҙан* ***ғәфү үтенде***. (Д. Юлтый.)

# Д

**дан артынан ҡыуыу**. Кеше араһында бик билдәле, данлыҡлы булырға тырышыу, шуны төп маҡсат итеп алыу.

**данға күмеү**. Оло маҡтауға лайыҡ булыу. *Һеҙ ҙә, егеттәр, Гитлер яуын тыуған ерҙән һеперел түгеп, исемегеҙҙе* ***данға күмеп*** *ҡайтығыҙ*. (М. Тажи.)

**данға сығыу (һалыу)**. Бик яҡшы булып танылыу, шәпкә сығыу. *Аттың яҡшыһы алға сыға, егеттең яҡшыһы* ***данға сыға***. (Мәҡәл.) *Дүрт ырыуҙың батырҙары* ***данға сыға***. («Бабсаҡ менән Күсәк».)

**дан йырлау** *кемгә*. Бик ныҡ күтәреп маҡтау, данлау. ***Дан йырланһын*** *яҡшы атҡа, затлы иргә, ҙур шәмгә, тик күп йырланмаһын донъяны алып барған әҙәмгә*. (М. Кәрим.)

**дан ҡаҙаныу (алыу)**. Яҡшы яҡ менән танылыу, ныҡ маҡталыу. *Башҡорт шиғыры, башҡорт музыкаһы, башҡорт бейеүе беҙҙең көндәрҙә бөтә донъя кимәлендә* ***дан ҡаҙанды***. (Ғ. Әмири.)

**дан сығыу**. Ыңғай йәки кире яҡтан билдәле булыу, исем таралыу. ***Даның сыҡҡан*** *менән йәнең сыҡһын*. (Мәҡәл.) *Егет кенә булһаң, ай, батыр бул. Батырлыҡтар менән* ***дан сыға***. (Халыҡ йырынан.) ***Дан сығарыу***: *Сыҡһын, әйҙә, дандарыбыҙ,* ***дан сығарыр*** *сағыбыҙ*. (Халыҡ йырынан.)

**дан тотоу**. Данлыҡлы булыу, данга эйә булыу. *Ҡәйнәңде бөгөн генә һынамайһың, ул уҫаллығы менән яҡын тирәлә* ***дан тотҡан*** *кеше*. (Т. Хәйбуллин.) *Съезд Иҙел аръяғында әүәл-әүәлдән ҙур мәҙрәсәһе менән* ***дан тотҡан*** *башҡорт ауылында йыйылды*. (Ф. Иҫәнголов.)

**дан(ын) һатыу** *кемдең, нимәнең*. Насар исемен таратыу, йәмһеҙ яҡтан билдәле итеү. *Кеше данын һатыу. Дан һатып йөрөү*.

**дары еҫен еҫкәү***. Һугышта булыу, һугыштың ни икәнен татыу.

[*Рус телендәге «понюхать пороху» берәмегенән.]

**дарыны ҡоро тотоу***. Һөжүмгә яуап бирергә, илде һаҡларга һәр ваҡыт әҙер булыу. *Ватаныма ҡарап ҡай берәүҙең Ҡомһоҙ күҙе ҡыҙа һаман да;* ***Коро тотоу*** *кәрәк* ***дарыны*** *ла Былдай киҫкен, хәтәр заманда*. (Ҡ. Аралбай.) [*Империалистар һуғышҡа әҙерләнгән*]... *шарттарҙа беҙ* ***дарыны ҡоро тоторға*** *тейешбеҙ*. («Сов. Башҡ.»)

[*Рус телендәге «держать порох сухим» берәмегенән.]

**дер ҡалтырау**. Ныҡ ҡурҡыу. *Үкереп барған ҡуйҙар көтөүе кеүек, дошмандарым* ***дер-дер ҡалтырай***. (Эпостан.) *Ирьегет ...үҙ йәне өсөн* ***дер ҡалтырап***, *ышыҡта, кәмәлә ултырған*. (З. Биишева.) *Муса Таулыҡаев батыр партизан ине, дошманды* ***дер ҡалтыратты***! (Б. Бикбай.)

**дер һелкетеү**. 1. Тирә-йүнде тетрәтеү, шау-шыу ҡуптарыу. [*Һалдаттар*] *...урамдан барғанда*, ***дер һелкетеп*** *атлайҙар*. (М. Ғафури.) [*Новиков*:] *Иптәштәр, барыбер иртәгә фронтҡа китәбеҙ, давай бөгөн* ***дер һелкетеп*** *күңел асайыҡ*. (Д. Юлтый.)

*син.*: геү килтереү.

2. Халыҡты тетрәтеп, ҡурҡытып тотоу. *Шәп атта уҙып китеүсе, ваҡытында Ҡайынлы ауылын* ***дер һелкетеп*** *торған, шаҡман араһының атаҡлы байы Гәрәй Шаҡманов ине*. (Б. Бикбай.)

**дилбегә буйы**. Ниҙеңдер бик оҙон булыуын күрһәтергә теләгәндә әйтелә. ***Дилбегә буйы*** *мандатта «һәр ерҙә ярҙам күрһәтергә һорама» тигән юлдар булһа ла, артыҡ әһәмиәт бирелп торолмай ине*. (Ғ. Хәйри.)

**дилбегә ҡулдан ысҡыныу**. Идара итеүҙе юғалтыу, етәкселек йомшарыу. *Төн йоҡолары ҡасҡан сәғәттәрҙә Аллаяр бына нәмәгә өҙгөләнә. Донъя* ***дилбегәһе ҡулдан ысҡынырға*** *самалай*. (Ф. Иҫәнғолов.)

**дилбегәне бушатыу**. Эштә, тормошта йомшарыу, көсөргәнеште кәметеү. — *Ҡара инде һин, улым*, ***дилбегәне бушатма***, *унынсыны бөткәс, институтҡа ебәрермен*, — *тип киҫәтә* [*атайым*]. (Н. Мусин.)

***дилбегәне ҡулға алыу***. Етәкселекте, идараны үҙ өҫтөнә алыу. *Гәрәй егерме-егерме ике йәштәрендә саҡта уҡ хужалыҡта* ***дилбегәне үҙ ҡулына алып***, *атаһының ҡыйрап барған донъяһын тау үренә табан тәгәрәтеп ебәрә алған кеше*. (Б. Бикбай.)

[*Зөбәржәт*:] — *Әһә, шулайтып апаң **дилбегәне үҙ ҡулына алдылыр**?* (М. Әпсәләмов.)

**дилбегәне ҡыҫҡа тотоу (ҡыҫҡартыу).** Эш-ҡылыҡты сикләү, тәртипте ҡаты ҡуйыу. *Хәҙер ни, үҙеңә мәғлүм, бер ҡайҙа ла сыҡҡан юҡ бит, **дилбегәне ҡыҫҡарттылар**.* (Б. Бикбай.)

**димсе диңгеҙ кистерә.** Бик оҫта димләй белгән кеше тураһында әйтелә.

**диңгеҙ тубыҡтан** *кемгә, кем өсөн.* Ҡурҡып-нитеп тормай, бик ҡыйыу (артыҡ батырайып китеп, һаҡлана белмәгән кешегә ҡарата әйтелә). *Йыһаннурға хәҙер **диңгеҙ тубыҡтан**, ул машинаны тышҡа сығарҙы.* (Р. Солтангәрәев.) *Йәнәһе, был кеше ҡалаға килеп ниҙер һатҡан да, хәҙер инде типтереп йөрөй. Уның өсөн **диңгеҙ тубыҡтан**.* («Сов. Башҡ.») *Ләкин Емельян рухланып киткәйне инде. Уны туҡтатыу мөмкин түгел ине. Уға **диңгеҙ тубыҡтан ине**.* (С. Злобин. Р. Нигмәти тәрж.)

**доға ҡылдырыу.** Ниҙәндер яҙҙырыу, һемәйтеү (мыҫҡыл белдергәндә әйтелә).

**донъя аҫҡысын тотоу**. Тормоштоң төп терәге булыу. — *Әлегә **донъяның аҫҡысын** беҙ — ҡарттар — **тотоп киләбеҙ**, ҡарттар үлеп бөткәс, был донъя кемгә таяныр икән?* (Ш. Шәһәр.)

**донъя бабайы.** Тормош көтөүгә бик әүәҫ иргә ҡарата хуп күреп әйтелә.

**донъя баҫыу.** Тормош ауырлығына бирешеү. *Нығ торабыҙ. **Донъя баҫмай** беҙҙе — Ул муйынға аҫҡан гер түгел.* (М. Кәрим.) *Үҙгәргәнһең, иҫке шуҡлығың юҡ, **Донъя баҫа**, тиһең ирҙәрҙе.* (М. Кәрим.) ***Донъя баҫһа**, тоҙ ҙа татлыға әйләнә.* (Мәҡәл.) *Иәшлектең ҡәҙерен бик нығ белегеҙ, **донъя баҫып килһә** лә, бөгөлмәгеҙ, балалар.* (Һ. Дәүләтшина.)

**донъя беҙҙән ғенә ҡалмаған.** Бер кем дә мәңгелек түгел, һәр кемгә лә үлем килә. ***Донъя беҙҙән генә ҡалмаған** ул, Бер саҡ килер үлем — ят ҡунаҡ.* (М. Кәрим.)

**донъя бер алдын, бер артын күрһәтә.** Эш, тормош гел уңып ҡына тормай, уңышһыҙлығы ла була тигәнде белдерә.

**донъяға килеү**. Тыуыу, барлыҡҡа килеү. *...Тау ҡултығында, ҡыуышта, тағы бер ир бала **донъяға килде**, ти.* (Әкиәттән.) *Хәҙер генә ул бер бала **донъяға килгәнен** ишетеп ҡалһалар, духтыры ла, фельдшеры ла сумкаларын аҫып килеп етәләр.* (М. Тажи.) *Ана Шабак баярға беҙ арыш ташыған йылды яҙ һин **донъяға килдең**.* (Һ. Дәүләтшина.)

**донъяға сығыу**. 1. Тормошта, ҙур эштә катнашлыҡ итә башлау. *Ауыл тарихында күрелмәгән ячейкалар унда төҙөлдө; Комсомолдар **сыҡты донъяға**, мулла ҡорған план өҙөлдө.* (Д. Юлтый.)

2. Баҫылыу, нәшер ителеү (китап һ. б. тураһында). *Врач В. Ғүмәровтың икенсе китабы **донъяға сыҡты**.* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: донъя күреү.

**донъяға төкөрөү**. Тормош мәшәҡәттәренә, ҡайғы-хәсрәттәренә ҡул һелтәү, бошмаҫҡа әйләнеү. ***Төкөр донъяһына**, бул түҙемле, Ағыулама юҡҡа тамырыңды.* (Ш. Бабич.)

**донъяға һыймаҫтай булыу**. Бик ныҡ туҙыныу, боларыу.

**донъяға һыймау**. Артыҡ маһайып, мин-минләнеп, эш-тормошта кешеләрҙе ҡыҫыу.

**донъя йөгөн тартыу**. Тормош ауырлығын күтәреү. *...Заманаһы шундай ине: балиғ булмаған малайҙар менән алма кеүек ҡыҙҙар **тартты донъя йөгөн**.* (Т. Килмөхәмәтов.)

**донъя көтөү**. Тормошто, хужалыҡты алып барыу, йәшәү. *Шул көндән алып егет менән ҡыҙ бик татыу **донъя көтөп** китәләр.* (Әкиәттән.) *Ҡарт атам менән әсәйем генә ауылда **донъя көтәләр**.* (Д. Юлтый.) *Биктимер менән Гөлъямал түңәрәк кенә **донъя көтә** башланылар.* (Б. Ишемғол.) *Бер баш малһыҙ, ағай-эне ярҙамынан башҡа **донъя көтөп** китеүҙәр бик ҡыйын ул.* (Һ. Дәүләтшина.)

**донъя көтөп, йөн тетеп** [йәшәү]. Бер көйө генә йәшәп ятыу (*әкиәттәргә хас һүҙбәйләнеш*).

**донъя күреү**. 1. Тормош менән яҡындан танышыу, яманын, яҡшыһын татыу. ***Донъя күрмәй** аҡыл кермәй ата балаларына.* (Халыҡ йырынан.) *Ҡаланан ҡайтҡан кеше шул, йәш булһа ла **донъяны күргән**.* (Б. Бикбай.) *...Уҡырға дәрт бик ҙур булһа ла дарман етмәне. Тик аҙыраҡ **донъяны күреп**, шымарып ҡайттым.* (Б. Ишемғол.) **Донъя күргән** — тормош тәжрибәһе ҙур. ***Донъя күргән** иргә сәйнәп ҡаптырыу кәрәкмәй.* (Һ. Дәүләтшина.)

2. Баҫылып сығыу (*китап һ. б. тураһында*). *Тик Октябрҙән һуң ғына атаҡлы тюрколог Н. К. Дмитриев ярҙамында был мираҫ **донъя йөҙө күрә алды**.* (К. Мәргән.)

*син.*: донъяға сығыу 2.

**донъя күрһәтеү** *диал.* Киленгә тәү башлап ҡашығаяҡ йыуырға өйрәтеү.

**донъя ҡуйыу**. Үлеү. *Бураншаҡайтманы. Бер аҙҙан уның кәләше Ирьегет менән ҡасып китте... Шунан ...әсәһе **донъя ҡуйҙы**.* (З. Биишева.) *Сажидәгә бише тулыр-тулмаҫ саҡта әсәһе, ҡапыл ғына ауырып, йәшләй генә **донъя ҡуйҙы**.* (Н. Мусин.) *Тормош тын күл түгел, Тып-тын йәшәп, шып-шым ғына **донъя ҡуймамын**.* (М. Кәрим.) *Иртәгеһен ҡарт **донъя ҡуйҙы**. Васыят буйынса мөлкәт икегә бүленде.* (Д. Бүләков.)

*син. ҡар.*: вафат булыу.

**донъя ҡуптарыу**. Бик ныҡ тауыш сығарыу, ғауғалау. *Гөлйөҙөм бер ҡалаҡ юғалған өсөн дә **донъя ҡуптарып** әрләй торған Ғәзимәгә ҡарағанда ла Миңлекәйҙән шикләнеңкерәй.* (Һ. Дәүләтшина.)

**донъя ҡыйратыу (емереү)** *мыҫҡ.* Үҙен бик шәп эшләгән һанау (*эше менән маҡтанған кешегә ҡарата әйтелә*). [*Сәлих Йәнтимергә:*] *...Һинең бик эреләнергә самаң бар. Йәнәһе, һин генә эш-*

*лекле лә, һин генә* ***донъя ҡыйратаһың.*** (С. Ағиш.) **Донъя ҡыйратырҙай (емерерҙәй) булыу:** *Сынбулатовтың көнө килеп терәлгәс кенә, ...* ***донъя ҡыйратырҙай булып,*** *һикергеләнә, екергеләнә торған ғәҙәте барлығын беләһең бит.* (М. Тажи.)

**донъя <артынан> ҡыуыу.** Мал табыу, мөлкәт йыйыу өсөн ныҡ тырышыу. *...Беҙгә* ***донъя ҡыуып,*** *уның артынан етеү ҡайҙа?* (Ғ. Дәүләтшин.) — ***Донъя артынан ҡыуған*** *юҡ та... Һаман яҡшыраҡ йәшәргә тырышҡан булабыҙ инде.* (С. Кулибай.) *Биктимер ҡарт үҙ ғүмерендә* ***донъя ҡыуып*** *йәшәмәне.* (Ж. Кейекбаев.) *Берәү шунда йәшәй йәшен булып, Берәү* ***донъя ҡыуа*** *ҡалтырап.* (В. Әхмәҙиев.)

**донъяны ҡоротоу.** 1. Булғанды юҡҡа сығарыу; емереү, туҙҙырыу. *Совет власына ҡаршы һөйләй бит, ә! Бөтә нәмәңде,* ***донъяңды ҡороторбоҙ.*** (Ғ. Дәүләтшин.)

2. Илгә бәлә-ҡаза килтереү. [*Айбулаттың*] *Иөрәге ошо* ***донъя ҡоротоп*** *йөрөүсе дошмандарға асыу, нәфрәт менән ҡатҡайны.* (Һ. Дәүләтшина.)

**донъянан китеү (кисеү, үтеү).** Үлеү. *Шәғәли бей* ***донъянан үтте.*** (Шәжәрәнән.) *Навалихин байыбыҙ* ***донъянан китте.*** *Был үлем хәбәре илгә бик тиҙ таралды.* (Т. Хәйбуллин.) *Һуғыштан алып ҡайтҡан яраларын күтәрә алмай,* [*ағайым*] *беҙҙе ҡалдырып, яҡты* ***донъянан китеп барҙы.*** (Ғ. Вәлиев.) *Әсәйең һине тыуҙырғандың һуңында* ***донъянан кисте,*** *хоҙа урынын ожмахта ҡылһын...* (Ғ. Хәйри.) *...Унан Ҡуҙыйкүрпәсте ҡосаҡлап ҡыҫты, ти, шулайтып Маянһылыу ҙа* ***донъянан кисте,*** *ти.* (Эпостан.)

*син. ҡар.*: вафат булыу.

**донъяны ҡалдырыу (ташлау).** Үлеү (*үлгән кешегә ихтирам белдергәндә әйтелә*). *...Яҡшы күңелле батша ла бер саҡ* ***донъяны ҡалдырған.*** (З. Биишева.)

*син. ҡар.*: вафат булыу.

**донъяның артына тибеп йәшәү.** Бер ниндәй ауырлыҡ күрмәй, етешһеҙлек белмәй, мул тормошта рәхәт йәшәү. [*Мөдир*:] *Үҙемдең Яңыбай ҡорҙашты әйтәм. Вот йәшәй дек йәшәй... Өйҙәренә инһәң, боролоп сыҡмалы түгел...* ***Донъяның артына тибеп йәшәй*** *улар.* (Ә. Байрамов.)

**донъяның аҫтын-өҫкә килтереү.** 1. Туҙҙырып ташлау, емереү. *Ала ҡарға: — ...Ҡаршылыҡ күрһәтер булһаң,* ***донъяңдың аҫтын-өҫкә килтерермен!*** *— тип иҫкәртте, ти.* (Экиәттән.)

2. Тормошто, мөнәсәбәттәрҙе бөтөнләй бутап, болартып ебәреү. **Донъяның аҫты-өҫкә килеү** — тормош ныҡ боларып, буталып китеү.

**донъяның төбөнә етеү.** Бик күп мал табырға, тормошто бик шәп алып барырға тырышыу. *...Төкөрҙөм эштәренә. Минең атайым ҡарт икешәр ялсы тотоп та* ***донъяның төбөнә етә алмаған.*** (Ҡ. Даян.)

**донъяның (тормоштоң) әсеһен-сөсөһөн <күп> татыу (күреү).** Ауырлыҡты күп күреп, ҙур тормош тәжрибәһе туплау. *Сурағол белмәй ҡаңғылдамаиҙыр. Ул* ***донъяның әсеһен-сөсөһөн күп татыған.*** (Т. Хәйбуллин.) *Йәштән тол ҡалып, етем балалар аҫырап үҫтереп, ул [ҡарсыҡ] донъяның әсе-сөсөһөн Муйылға ҡарағанда күп күргән.* (Һ. Дәүләтшина.) *Мин* ***тормоштоң әсеһен-сөсөһөн күп татыған кеше.*** *Кем генә булырға теләһәң дә, аҡыл өйрәтә алырмын.* (С. Агиш.) *Сәлмән ағай яҡшы уҡ олоғайған,* ***донъяның әсеһен-сөсөһөн татыған кеше.*** (Т. Йәнәби.)

*син.*: күпте күреү.

**донъяны онотоу.** Берәй эшкә, уйға һ. б. ныҡ бирелеп китеү. *Һыңарайаҡтың бер ташты яҫтыҡ итеп ятыуы булған —* ***донъяһын онотоп*** *йоҡлап китеүе булған.* (Әкиәттән.) *Мин [йылғаның урғылып аҡҡан урынына] ҡарағанда, үҙемде, бөтә* ***донъяны онотам.*** (Д. Юлтый.) *Салиха ...һаман Сөнәғәттең ҡайтмауына зарланды: — Ҡайтмай бит әле булһа, бер эшкә тотоноп китһә,* ***донъяһын онота ла*** *ҡуя бит ул.* (Ж. Кейекбаев.) *Эсер сәйен һыуытып, Бар* ***донъяһын онотоп****, Иыйылып ултырыр ҡарттар бар.* (Ҡобайырҙан.)

**донъяны һыу баҫһа, өйрәккә ни ҡайғы.** Тормоштағы бер нәмәгә лә бошмаҫ, моңһоҙ кешегә асыу белдергәндә әйтелә.

**донъя тармы әллә.** Кешегә бәрелеп-һуғылып, ҡыйырһытып йәшәгән кешегә ҡарата асыу белдергәндә әйтелә.

**донъя теүәлләнеү (түңәрәкләнеү).** 1. Тормош-көнкүреш кәрәктәрен етештереп, күңелде тыныслау, борсолорлоҡ урын ҡалмау. ***Донъяң теүәлләнгән*** *икән, ҡыҙҙы үҙеңә ҡаратҡас.* (Х. Ғәбитов.) *Әсмә тупылдатып иренә ике йылда ике ул табып бирҙе. Машина алып ебәрҙеләр.* ***Донъя түңәрәкләнде****, күңел бөтәйҙе.* (Л. Яҡшыбаева.)

2. Иҫергәндә тормош етеш булып тойолоу. *Иҫереп,* ***донъяһы теүәлләнеп*** *алған берәү ауыл буйлап ҡарлыҡҡан тауыш менән һөрәнләп ҡайтып бара.* (Ф. Иҫәнголов.)

**донъя тотҡаһы (күсәре, кендеге, терәге).** Тормоштағы төп мәсьәләләрҙе хәл итеүсе, бөтә эште алып барыусы, йәки үҙен шулай тип һанаусы. *Ярлыҡапов үҙен был* ***донъяның бер тотҡаһы****, алыштырғыһыҙ бер етәксе итеп иҫәпләп йөрөй.* (Ғ. Әхмәтшин.) *Кендектәрем һиңә берекмәгән, һиндә түгел* ***донъя күсәре.*** (Н. Нәжми.) *Күрһәтәйем әле мин һиңә* ***донъяның кендеге*** *кем ҡулында икәнлекте!.. — тип һөйләнде Әүхәҙи. [Рәсих ағай:] Носрат* ***донъя кендеге*** *түгел, был мәсьәләлә беҙҙең дә тауыш бар.* (Й. Солтанов.) *[Ҡыҙрас:] Олатай кеүектәр күберәк булһын ине әле, инәй! Шундай диуаналар инде ул* ***донъя терәге.*** (Я. Вәлиев.)

**дөбөрҙө* биреү.** Нимәгәлер бик ныҡ бирелеү.

*син.*: мөкиббән китеү, баштан-аяҡ сумыу.

[***Дөбөр** — *ғәр.* арт һан].

**дөйә ҡойроғо ергә еткәс (тейгәс).** Булмай, тормошҡа ашмай торған йәки булыры бик алыҫ эш-хәл тураһында мыҫҡыллабыраҡ әйтелә. **Дөйә ҡойроғо ергә тейер:** [*Ғәйнекәй:*] *Оялмай ҙа «ҡарт еңгәң» тисе! Һин ҡартайғансы **дөйә ҡойроғо ергә тейер** әле.* (Һ. Дәүләтшина.) *Һеҙ байыҡҡансы, **дөйә ҡойроғо ергә тейер**.* («Әҙәби Башҡ.»)

*син.*: ҡыҙыл ҡар яуғас.

**дөйә муйынынан да кәкре.** Хилаф эш-ҡылыҡҡа ҡарата әйтелә. [*Ҡолморҙа ҡарт*] ... *өҫтәне Шакир әйткән һүҙгә тағы ярһып, үҙенең фекерен. — Күреп тораһығыҙ, уның эше **дөйә муйынынан да кәкре**.* (Б. Вәлид.)

**дөмбөр (дөбөр) батмау** *кемдең кемгә, нимәгә.* Нимәнелер эшләргә ҡулдан килмәү, булдыра алмау. *Сәлимә хат яҙыша башлағаны бирле, Ҡасимдың Шафиҡ тигәнгә **дөмбөрө батмай** йөрөй ине.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Ял көнө түгел, был көндәрҙә лә* [*Валяның*] *дәрес әҙерләргә **дөмбөрө батып етмәй...*** (Ҡ. Ибәтуллин.) *Колхозда яҙғы сәсеү башланғас, совхозға олаҡтың. Унда ла эшкә **дөбөрөң батманы**.* (М. Тажи.) *Ә бит был кәсепкә* [*солоҡсолоҡҡа*] *һәр кемдең дә **дөмбөрө батмай**.* (С. Иманғолов.)

**дөм китеү.** Бөтөнләй бирелеү. *Ҡәйүм староста, ил янсығын ҡағып, уның өйөн дә һипләтеп биргәс,* [*Әхтәри*] *«**дөм китте**», уларҙың ни бойорһалар, шуны үтәүсе хеҙмәтселәренә әүерелде.* (Ғ. Лоҡманов.)

**дөрөҫөн әйткәндә.** Эш-хәлдең сәбәбен асып, дөрөҫләп ҡуйғанда ҡулланыла.

**дуга бөгөү.** Бик ныҡ өшөү, дер-дер ҡалтырау.

**дуга менән бесән сабыу.** 1. Йәй бесән әҙерләмәй, ҡыш кешенән бесән һорап йөрөү. *Әҙерләнгән аҙыҡты тағы ла бер тапҡыр «әҙерләүселәр» халыҡтың «**дуга менән бесән сабыу**» тигән тапҡыр һүҙҙәрен иҫкә төшөрә.* («Сов. Башҡ.») / *диал.* Кеше бесәнен урлау.

2. Һүҙҙең айышына төшөнмәй яңылыш һөйләү. *Ниһайәт, Камалов төшөндө: ул **дуга менән бесән сабып** ултырған икән. Начальник ысынлап та ҡурсаҡ тураһында һөйләй.* («Һәнәк»).

**дусар булыу.** Ауыр хәлгә төшөү. «*Ике етәксе, — тип яҙа газета, — үҙҙәрен «30 сентябрь хәрәкәте» тип атаған һатлыҡ йәндәрҙең эше һөҙөмтәһендә ил халҡы **дусар булған** күңелһеҙ ваҡиғаларҙы тикшерҙе*». («Сов. Башҡ.»)

**дуҫыңа түгел, дошманыңа күрһәтмәһен.** Бик ауыр хәлгә ҡалған кешегә ҡарата әйтелә.

**дүрт аяҡлы ат та һөрлөгә (абына).** Хаталанған кешенең ғәйебен йомшартыу ниәте менән әйтелә. *Әҙәм балаһы түгел, **дүрт аяҡлы ат та абына**. Һуңынан үкенмәһен өсөн Мағишаға әле ярҙам кәрәк...* (Л. Яҡшыбаева.)

**дүрт күҙ менән [көтөү].** Бик ныҡ өҙөлөп (көтөү). *Беләм, һинең өҙөлөп һағынғаның, **дүрт күҙ менән** мине **көткәнең**.* (Ғ. Амантай.) *Инспекторҙың килгәнен **дүрт күҙ менән көттө** Ғәләү.*

(Т. Йәнәби.) *Әбей-бабай* ***дүрт күҙ менән көттө****, көттө ейәнен.* (Ғ. Дәүләтов.) ***Дүрт күҙ менән көткән*** *ваҡыт етте, Каруанһарай бөттө һалынып.* (Р. Бикбаев.) *Ҡуш ҡул менән,* ***дүрт күҙ менән көттөк*** *һеҙҙе яҙҙа. Һыуһап көттөк, сарсап көттөк, ялбарҙыҡ ҡыуан яҙҙа.* (Р. Ғарипов.)

**дүрт мөйөшләнеү**. Камил хәлгә килеү. [*Фатима*:] *Гөлдәр килгәс, өйөм* ***дүрт мөйөшләнеп*** *киткәндәй булды.* (Б. Бикбай.)

**дүрт яғы(ң) ҡибла**. Теләһә(ң) ҡайҙа китһен, тотҡарлыҡ юҡ. [*Сәлих ҡыҙҙарға*:] *...элек йырлағыҙ, унан һуң инде* ***дүрт яғығыҙ ҡибла****, теләгән ерегеҙгә осорһоғоҙ.* (Х. Ибраһимов.) [*Мырҙабай ҡарт Камиләгә*:] — *...Төҫ бирмәнеңме —* ***дүрт яғың ҡибла****, килен балаҡай. Донъя кендеге бер һиңә генә барып терәлмәгән.* (Д. Исламов.) *Берәйһенең яман ҡылыҡтары, ҡомһоҙлоғо йәнгә тейгәндә, Төңөлгәндә унан барыһы ла, «****Дүрт яғың ҡибла****» тигәндәр.* (Р. Бикбаев.)

**дылдыл йөрөү**. Бушҡа ваҡыт үткәреү.

*син. ҡар.*: ел ҡыуыу.

**дәм ороу**. Ҡупырайыу, маҡтаныу.

*син.*: танау күтәреү.

**дәрт итеү**. Нимәгәлер ынтылыу, теләк менән яныу. *Крәҫтиән йәштәренең теләгән мәктәбе тип әйтергә мөмкин. Сөнки* ***дәрт иткән*** *кешегә, ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә уҡып, машина йөрөтөү оҫтаһы булып сығырға мөмкин.* («Сов. Башҡ.»)

**дәрт мөйөшләнеү (түңәрәкләнеү)**. Ниәтләгән, дәрт иткән нәмәне тормошҡа ашырыу; йыуаныу. — *Әйҙә, мин әйтәм,* ***дәртең мөйөшләнһен*** *... уҡығас, уҡы инде.* (С. Агиш.) ***Дәрте түңәрәкләнгән*** *ҡыҙыҡай ҡалаға барған көндө үк кино, театрҙарҙың белдереүҙәрен күҙәтә башланы.* («Башҡ. ҡыҙы».)

**дәүләт ҡошо**. Дини хөрәфәт буйынса: бәлә-ҡаза килгәндә ярҙам итә торған изге ҡош (*сәмреғош кеүек*).

**дәфен итеү (ҡылыу)**. Ерләү, ҡуйыу. *Бынан өс ай ярым элек атаиҙы нисек* ***дәфен итһәләр****, әсәиҙе лә шулай* ***дәфен иттеләр.*** (М. Ғафури.) *Шәғәли бей донъянан үтте. Уны Сәсәлкә янына* ***дәфен ҡылдылар****.* (Шәжәрәнән.) *Зариф ағайың вафат булып, 17-ндә* ***дәфен ҡылдыҡ****.* (Н. Ҡәрип.)

# Е

**ебегән (ебек) ауыҙ**. Бар булмышы менән үтә йомшаҡ; мәшәү, булдыҡһыҙ.

*син.*: ауыҙына ҡаптырған һары майҙы ла йота алмай.

*ант.*: ауыҙы менән ҡош тота.

**ебеп төшөү**. Эштә, тормошта йомшаҡлыҡ күрһәтеү, ауырлыҡ алдында юғалып ҡалыу. *Әлбиттә, ҙур заводты аяҡҡа баҫтырыу еңелдән булманы. Шулай ҙа йәштәр ауырлыҡтар алдында* ***ебеп төшмәнеләр***. («Сов. Башҡ.»)

**егет ҡорона тулыу (инеү)**. Үҫеп етеп, балиғ булыу (*ир-ат затына ҡарата әйтелә*). *Хәҙер һин* ***егет ҡорона тулғанһың***, *бала түгелһең. Ун һигеҙең тула.* (Һ. Дәүләтшина.) *Бала, сит ерҙә, ҡоллоҡта үҫеп,* ***егет ҡорона тула***. («Сов. Башҡ.»)

**егет тиһәң дә ярай**. Бар булмышы менән егет, егет сифатлы, булдыҡлы.

**ек* күреү** *кемде, нимәне*. Сит-ятҡа һанау, үҙ итмәү. *Яуыз был донъяға эсем боша, барлыҡ тәбиғәтте* ***ек күреп***. (Х. Ғәбитов.) *Сарыбай, атайым үлгәс тә, уның менән булған дуҫлығын онотоп, мине* ***ек күрә*** *башланы.* (Эпостан.) ***Ек күрмәй****, мин уның арҡаһынан һыйпап торайыммы ни?* (Ғ. Вәлиуллин.)

[***Ек** — *фарс*. ен-шайтан, яуыз рух.]

**ел алғандай (булыу)**. Ҡапыл юҡҡа сығыу.

**ел аяҡ**. Бик шәп йүгерә, тиҙ йөрөй торған кешегә ҡарата әйтелә.

**елгә еленләп <боҙға быҙаулау>**. Буш хыял, уй менән тиккә ғүмер уҙғарыу. [*Ишмырҙа*]: *Һин, Аҫылбай, улай итеп* ***елгә еленләп, боҙға быҙаулап*** *йөрөмә, хәҙер беҙҙә ҡал!* (Д. Юлтый.) *Ер биләүҙе байлыҡ һанау — ул* ***елгә еленләү***. *Ундай кеше — ил кәсебенә, ил бәхетенә аяҡ салыусы.* (Т. Хәйбуллин.)

**елгә китеү (осоу)**. Бушҡа сығыу, әрәм булыу. *Ҡарайым үткән ғүмергә, ғәзиз ғүмерем минуттары гелән генә* ***елгә киткән***. (М. Ғафури.) *Күңеле өмөт менән тулы саҡтар* ***елгә осалар***. (Һ. Дәүләтшина.) *Әйткән һүҙҙәр* ***осто елгә***, *ҡул һелтәнем бөтәһенә.* (Р. Бикбаев.) **Елгә осороу** *нимәне*: ... *Бөтә ил күләмендә бер минут ваҡытты юғалтыу 50 миллион һум аҡсаны* ***елгә осороуға*** *тиң.* («Сов. Башҡ.») *Ул [врач] бит һүҙҙе* ***елгә осора*** *торған, алай-былай ғына кеше түгел.* (З. Биишева.) *Атам рухын рәнйетмәм, һүҙемде* ***осормам елгә***. (А. Ғарифуллина.)

*син*.: юҡҡа сығыу.

**елгә ҡаршы атлау (төкөрөү)**. Тормош ағышына кире барыу, ҡаршы булыу. [*Жураев*:] *Ҡадировҡа әйт,* ***елгә ҡаршы атламаһын***. *Әле ишетеүегеҙсә Ташкентҡа Икрамов янына китергә йөрөй икән.* (Ә. Хәким.)

**елгә ташлау (туҙҙырыу)**. Бушҡа сығарыу, әрәм итеү. [*Гәүһәр Фәйзуллина*]... *биргән һүҙен* ***елгә ташлай*** *торғандарҙан түгел.* («Сов. Башҡ.») [*Хәжәр ашығып ҡуйынынан аҡса сығара*]. *Мә, был аҡсаларҙы ла. Бер тинен дә* ***елгә туҙҙырма***... (Ш. Янбаев.)

**елдең ҡайҙан иҫкәнен белеү**. Тормош ағышын һиҙеп тороу. *Етте! Булды! Күп өгөтләнеләр, күп ҡурҡыттылар! Заманы үткән,* ***елдең ҡайҙан иҫкәнен беләләр***. (Р. Солтангәрәев.)

**елдән килгән**. Бик еңел табылған, буштан ғына ҡулға килеп ингән (*аҡса, мал-мөлкәт тураһында*). ***Елдән килгән*** *елпендер-*

*мәй нишләһен, нәфсе тағы тынғы бирмәй.* (Р. Низамов.) ***Елдән килгән 309 һумды кеҫәһенә һалған Бердинский...*** («Һәнәк».)

**елдәр иҫеү.** 1. *кемдән.* Китеп, эҙһеҙ юғалыу. *Һәйбәт кенә сыуаҡ бер иртәлә әбейебеҙҙән* ***елдәр иҫкән.*** (З. Әхмәтов.)

2. *нимәнән.* Алып кителеп, юҡ булыу. *Кире әйләнеп килгәндә, машинанан* ***елдәр иҫкәйне.*** (Д. Исламов.) *Көл һәм торомбаштар араһынан Ғилман һабы яртылаш янған бер сүкеште генә тапты. Башҡа ҡоралдарҙан* ***елдәр иҫкәйне.*** (Ғ. Лоҡманов.)

**елеген киптереү** *кемдең.* Яфа сиктереү, нык интектереү. [*Яппар*:] *А-ай, ошо бисәне! Ғүмер буйы көнләшеп* ***елегемде киптерҙе*** *бит...* (Б. Бикбай.)

**елеген һурыу** *кемдең.* Кеше иҫәбенә йәшәү. *Кәрәк, кәрәк халыҡтың* ***елеген һурған*** *Байғураларҙың өңөн уртәргә.* (М. Тажи.)

**елеккә (елек майына) үтеү (төшөү).** 1. Бөтә тәнгә үтеп инеү (*һыуыҡ хаҡында*). *Аһ, быйыл ҡыш! Төкөрөк ергә төшмәй,* ***електәргә үтә*** *һыуығы.* (Б. Бикбай.) *Һалҡын һинең* ***елек майҙарыңа хәтле үтеп бөткән...*** (З. Биишева.) *Шулай ҙа ҡар ҡатыш ямғыр аҫтында күшегә-күшегә,* ***електәргә үткән,*** *әсе елдәрҙә сайҡалышып ... үҙҙәренә тейгән ерҙәренә барлы-юҡлы орлоҡтарын һибеп сыҡтылар.* (Ф. Иҫәнголов.)

2. Хис-тойғоға нык тәьҫир итеү. *Сабыр кеше эстән көйрәй, һыҙа. Бына шуныһы* ***елеккә үтә*** *лә инде ҡайғының.* (Б. Бикбай.) *Ғазаптарым сигенә етте, әрнеүҙәрем* ***елегемә төштө.*** (М. Кәрим.) *Һай-һай Ҡорманбай, ... байға ҡаратып йырлағаның бөтә* ***електәренә*** *тиклем етте бит...* (Т. Хәйбуллин.) *Биргән бәхет өсөн рәхмәт уҡыу* ***үтте*** *лә һуң, ай-һай,* ***елеккә.*** (Р. Йәнбәк.)

**елек ҡороу.** Ыҙа сигеү. ... *Урҙа хакимлығынан* ***елеге ҡороған*** *ырыу-ҡәбиләләр Иҙеүкәйгә һырт бирҙе.* (Ә. Хәким.)

**ел етмәҫ** *фольк.* Бик шәп йөрөшлө, осҡор (*ат тураһында*). *Заятүләк өсәр тапҡыр һуға — күк дүнән* ***ел етмәҫ*** *толпар булып, осортоп алып та китә.* (Әкиәттән.) *Береһе буй бирмәҫ бурыл ат, икенсеһе* ***ел етмәҫ*** *ерән ат, ти.* (Әкиәттән.)

**ел йотоу.** Сараһыҙҙан эшһеҙ йөрөү. [*Зөһрә апай*:] — *Ауыҙ күтәреп ләпелдәп ултырған булаһың. Былтыр оҙон йәй буйы* ***ел йотоп*** *йөрөгәне лә еткән.* (Ш. Янбаев.) — *Нимә һин, асыҡ ауыҙ,* ***ел йотоп*** *тораһың, алдыңдан юл ярып уҙған төлкөгә ҡаршы сыҡманың?* (Ғ. Сөләймәнов.)

**елкә батыу (йәки батмау)** *нимәгә.* Эште булдыра алыу, барым булыу (йәки булмау). *Урман эшенә уның* ***елкәһе батмай.***

**елкәгә менеү (атланыу).** Өҫкә сығып ихтыярһыҙлау, тулыһынса буйһондора алыу. *Әгәр шулайтып һин собрание һайын халыҡ ихтыярына ҡуйһаң, улар бик тиҙ* ***елкәңә менерҙәр.*** (Һ. Дәүләтшина.) — *Бисәң* ***елкәңә менеп атланған,*** *тиҙ генә төшөрлөк түгел...* (Д. Исламов.) [*Яҡуп старшина*] *хасланды,* ***елкәмә атланмаҡсы*** *итә, алдында теҙ сүгеүемде теләй.* (Б. Бикбай.)

**елкәгә тейеү.** 1. Туйҙырыу, ялҡытыу (*күп көс талап иткән эш хаҡында*). *Ҡаты эш Шәкирәнең* ***елкәһенә*** *тиҙ* ***тейҙе...*** (К. Мәргән.) *Эйе, был һуғыш һәр кемдең* ***елкәһенә тейеп****, йөҙәткән, тешләндергән.* (Д. Юлтый.) *Үҫмер столярға был эш таныш булһа ла, башта* ***елкәһенә тейеп*** *йөҙәтте.* (И. Нигмәтуллин.) *Һауынсы эше түҙемһеҙерәк кешеләрҙең* ***елкәһенә*** *тиҙ* ***тейә****, улар ферманан тайыу юлын эҙләй башлай.* («Сов. Бапгк.»)

2. Ашағы килмәү, бүгеү (*һимеҙ ит һ. б. тураһында*).

**елкәгә төшөү (ятыу).** Ҡарау, ҡайғыртыу нәмәһенә әйләнеү, өләшкә тейеү (*ҡыйынлыҡ, мәшәҡәт һ. б. тураһында*). *Ҡасандан бирле һыу юҡ тип тирмәнде эшләтмәй ята [ҡарт]. Улар бит барыһы ла Зиннәт мырҙа* ***елкәһенә төшә.*** (Х. Ибраһимов.) [*Зәбиҙә апай*:] — *Атайыбыҙ вабанан үлеп ҡалды, шуға ла тормоштоң бөтә ауырлығы әсәй* ***елкәһенә төштө.*** (Ф. Абдуллин.) *Мәктәптә уҡытыу һәм ғаиләләге бөтә донъя мәшәҡәте Зөләйха апайҙың* ***елкәһенә төштө.*** («Сов. Башҡ.»)

**елкәлә күтәреү.** Үҙ өҫтөндә алып барыу (*ауырлыҡ, мәшәҡәт* һ. б. *тураһында*). *Муллабаева Иәмлихалар кеүек бөтә ауырлыҡтарҙы үҙ* ***елкәләрендә күтәреүсе*** *бик күптәр хөрмәткә һәм данға лайыҡлы был ауылда.* («Сов. Башҡ.»)

**елкәнән <ҡамыт> төшөү.** Яуаплылыҡтан, бурыстан, эштән ҡотолоу, бушау. *Мәктәп асылғас, олатайымдың* ***елкәһенән ҡамыт төштө****: «азъ, буки, веди, глава, добрый, есть» тәре менән мине артыҡ ҡаңғыртмай башланы.* (Б. Бикбай.)

**елкәнән (өҫтән) тау төшкән кеүек (төшкәндәй) булыу.** Ҙур яуаплылыҡтан ҡотолоу. *...Балалары өйләнгән кешеләр үҙҙәрен* ***елкәләренән тау төшкән кеүек*** *итеп тояларҙыр.* (З. Хисмәтуллин.)

**елкә сейләнеү.** Ауыр эштән ныҡ йонсоу. ***Елкәһе сейләнгән*** *халыҡ белмәй ҡысҡырмай ул.* (Б. Хәсән.)

**елкә соҡорон күрмәгәндән үлмәм әле** *һөйл.* Берәй кеше менән асыуланышып айырылышҡанда, «һине күрмәгәндән бер ни ҙә булмаҫ» тигәнде белдерер өсөн әйтелә.

**елкәһе йоҡа (соҡор, осло)** *кемдең* (йоҡа елкәле, соҡор елкәле). Эшкә барымһыҙ, бик ялҡау. [*Батырйән Килдебайға*:] *Эш һөймәйһең,* ***елкәң соҡор****, ә нәфсе тигәнең убыр өңөләй. Һиңә бөтәһе лә аҙ.* (Ә. Мирзаһитов.) *Арҡан менән тарттырһаң да, фермаға яҡынламаҫ ул* ***йоҡа елкәләр.*** («Сов. Башҡ.») *Маяҡ тигәнде төрлөһө төрлөсә аңлай икән.* ***Елкәһе ослолар*** *уны күтәрә алмай икән.* (Т. Арслан.)

**елкәһе ҡалын** *кемдең* **(ҡалын елкә)** *һөйл.* Хәлле, бай. *Атаһының* ***елкәһе ҡалын****, бер улын түгел, бишеһен дә уҡытыр.* (Һөйл.)

**елкәһендә ултырыу** *кемдең.* Кеше көсө менән йәшәү. *Миңлеяр менән Лоҡман ағай, кулактарҙың яғаһынан тотоп алып, түрҙән һөйрәп төшөрәләр: етте һеҙгә халыҡ* ***елкәһендә ултырырға...*** («Сов. Башҡ.»)

**елкәһен кимереү** *кемдең*. Кеше иҫәбенә, кеше көсө менән йәшәү. [*Ямал*:] *Һин бит алағанат, летун, бисәңдең* ***елкәһен кимереп*** *ятаһың*. (М. Тажи.) *Төрлө байғуралар, баярҙар, түрәләр элек халыҡ* ***елкәһен кимергән****, кеше ризығын ашаған*. (М. Кәрим.) [*Әхмәҙулла мулла*] *Ғүмер буйы аңһыҙ халыҡты алдап,* ***елкәһен кимерҙе****.* (З. Биишева.) *Управляющийҙар беҙҙең браттың* ***елкәһен кимерә*** *генә бирәләр, эш хаҡын йолҡҡолап бөтәләр*. (Ж. Кейекбаев.) **Елкәне кимертеү**: ***Елкәләрҙе*** *һеҙҙән тик* ***кимертеп****, Беҙгә бер файҙалы нәмә юҡ*. (Д. Юлтый.)

**ел ҡултыҡ** *һөйл*. Юҡҡа-барға ҡабарынып барған, маҡтансыҡ.

*син.*: буш ҡыуыҡ.

**ел ҡыуыу**. Бушҡа ваҡыт уҙғарыу. *Иөрөмә ситтә* ***ел ҡыуып*** *һин, ҡайт, Ғилемдар, ҡайт әле*. (Ш. Бабич.) *Вахит хәҙер урамда* ***ел ҡыуып****, ... ләстит һатып уҙғармай ғүмерен*. (М. Садиҡова.)

*син.*: урам тапау, бушты бушҡа бушатыу.

**ел тейеү (ҡағылыу)**. Насар тәьҫире, йоғонтоһо булыу. *Кәбеҫтә лә иҫән булһын, кәзә лә баш эймәһен, Месткомға ла* ***ел теймәһен****, Ғарифҡа ла теймәһен*. (Т. Арслан.)

**ел теймәҫ ерәнсә**. Һүҙ күтәрмәй торған, артыҡ үпкәсел. *Ана,* ***ел теймәҫ ерәнсә*** *үҙе бит, үйнап әйткәнде күтәрмәй, осоноп тора*! (Һ. Дәүләтшина.) [*Гөлйөҙөм*:] *Әй инде, ошо Яланбикә булһа уйнағаныңды ла күтәрмәй. Бигерәк* ***ел теймәҫ ерәнсәһең*** *инде*. (Һ. Дәүләтшина.)

*син.*: себен теймәҫ сер итер.

**ерәк кеүек**. 1. Үҫеп еткән, өлгөргән (*йәш егет, ҡыҙ тураһында*). *Бибигөлдөң әле* ***еләк кеүек*** *сағы. Былай ҙа алты йыл буйы көтөп ултырҙы*. (Б. Бикбай.) *Бер заман бөтә ил өҫтөнә көрән өйөрмә ябырылды. Ул өйөрөлдөрөп-өйөрөлдөрөп,* ***еләк кеүек*** *егеттәрҙе алыҫ яҡтарға алып китте*. (М. Кәрим.)

2. Бик матур (*ҡатын-ҡыҙ тураһында*). *Ишмырҙа: Кантондың* ***еләк кеүек*** *ҡыҙы бер ҡараҡ тураһында уйларға тейешме? Ул мөмкин түгел*!.. (Д. Юлтый.)

**ел яғына ҡабыҡ ҡуйып** [йәшәү]. Эш-тормошҡа ғәмһеҙ ҡарауҙы белдерә. *Алай итербеҙ әле, былай итербеҙ әле.* ***Ел яғына ҡабыҡ ҡуйып****, донъя көтөрбөҙ әле*. (Таҡмаҡтан.)

**ел яҡ**. Уйлап-нитеп тормай эш итә торған кеше тураһында. *Ә Латибы — ҡатыны тигәндә минең кеүек* ***ел яғыраҡ*** *бер әҙәм икән — уны-быны уйлап тормаҫтан, табындан вобланы дәррәү алып китеү яғын ҡараны*. (Ф. Хөсни.)

**ел-ямғыр теймәү** *кемгә*. Зыян, зарар булмау, насар шауҡым ҡағылмау. *Бығаса шул ике эт арҡаһында ҡулактарға* ***ел-ямғыр теймәй*** *килде...* (Б. Бикбай.) *Мин эшләй башлармын, һиңә ологайған көнөңдә* ***ел-ямғыр тейгеҙмәм****, бәхет менән, муллыҡ, ҡыуаныс, иғтибар менән солғармын*. (Ф. Иҫәнғолов.) **Ел-ямғыр тейеү**: *Ғаиләмә насарлыҡ эшләрҙәр. Нәҫел-нәсәбемә, туғандарыма* ***ел-ямғыр тейер*** [*ти Нурлы*]. (Ә. Вахитов.)

**емерелеп ятыу**. Бик күп булыу. *Эш ҡайһылай* ***емерелеп ята****. Иген тапалмаған, бесән ташылмаған, ҡура ябылмаған, тиҙәк өйөлмәгән, ҡуй инде... (Һ. Дәүләтшина.)*

**ен (шайтан) алғыры** *һөйл.* Асыуланғанда әйтелә торған әрләү һүҙе. [*Әсәһе, ярһып, улына*:] — *Ай,* ***ен алғыры****! Нисә тапҡыр әйттем мин һиңә, туйған һыйырҙы шәп ҡыумай ғына алып ҡайт, тип.* (Һ. Дәүләтшина.)

**ен алмаштырған**. Бик йәмһеҙ, ғәрип кешегә ҡарата әйтелә. *Теге мәлгүндең* ***ен алмаштырған*** *балаһын берәрһе шунда үҫтереп ташлаһа, сауаплы булыр ине.* (Д. Юлтый.)

**ен ботағы**. Артыҡ шаян, шаталаҡ кешене орошҡанда әйтелә. — *Ҡәһәр һуҡҡан бит ул минең Диләфрүз,* ***ен ботағы****! Әйткәнде аңламай, теңкәмде ҡорота, әйтәгүр*! (Һ. Дәүләтшина.)

**ене кеүек күреү** *кемде.* Күрә алмау, нығ яратмау. *Үгәй атай булған кеше — һуған һөймәҫ бер суфый. Минең комсомоллыҡты* ***ене кеүек күрә****.* (С. Агиш.) [*Наҡышев*:] *Старателдәрҙе иҫтән сығарырға ярамай. Улар мине* ***ене кеүек күрә****. Приискынан китеүемде талап итәләр.* (Я. Хамматов.) *Яратмай ул Шәмсибанатты,* ***ене кеүек күрә****.* (Ш. Насыров.)

*син.*: ен урынына күреү.

**ене ҡағылыу** *кемдең, нимәнең.* Ни менән булһа ла нығ мауыҡҡан кешегә ҡарата әйтелә. *Уға ат ене ҡағылғандыр. Китап ене ҡағылған кешеләр.* ▬ *Китапты, уны, араҡы кеүек бөтәһе лә алмай. Уҡыусы балалар менән китап* ***ене ҡағылған*** *бер нисә кеше генә осрай.* (И. Ғиззәтуллин.) *Минең үҙемә бәләкәйҙән «балыҡ* ***ене****»* ***ҡағылған****. Теләһә ни ваҡытта, теләһә ниндәй күләүеккә ҡармаҡ ташларға әҙермен.* (М. Кәрим.)

**ене ҡуҙғалыу (тотоу, ҡубыу, ҡуҙыу)** *кемдең.* Нығ асыуланып, биреләнеп китеү. *Сабир, уға яуап ҡайтармайынса, тәҙрә яғына әйләнеп ятты. Ни өсөн* ***ене ҡуҙғалған*** *һуң уның*? (Д. Бикташев.) — *Атаҡ-атаҡ!* ***Енең тоттомо*** *әллә? Ниңә тоҡтомалға мине төрткөләйһең*? (Б. Ишемғол.) *Шулай ҙа «Кендек»те Әсғәт ауыҙынан ишеткәндә, мин сығырҙан сығып гәрләнмәнем, уны тыйыуым да асыуҙан түгел, ә «ҡунаҡ булһаң, тыйнаҡ бул» тигәнде аңлатыуым ғына ине. Ә бүтәндәр әйтһә, йә әйтергә уйлаһа,* ***енем ҡуҙғала****.* (М. Кәрим.) [*Ғәйзулланың*] ***ене ҡыҙҙы*** *ла китте.* (Я. Хамматов.)

**ене (бәрейе) һөймәү** *кемдең кемде, нимәне.* Нығ яратмау, һис кенә лә оҡшатмау. [*Гөлнур*:] — ***Енем һөймәй*** *ул күлдәкте, күҙемә лә күрһәткем килмәй.* (Р. Ниғмәти.) *Әҙәм затының йыуаның, өҫтәүенә күп ашағанын* ***енем һөймәй****.* (С. Кулибай.) ***Енем һөймәй*** *шул буржуйҙарҙы, бөтәһен бер юлы ҡыра һуғаһы ине*! (Б. Бикбай.)

**енен өҙөү** 1. *кемдең.* Ҡыйратыу, туҙҙырып ташлау. *Данлы йылдарҙың арттырып данын,* ***Өҙәйек енен*** *ҡара йыландың.* (Ғ. Ғүмәр.)

*син.*: пыр туҙҙырыу, тетмәһен тетеү.

2. *нимәнең*. Бик ҡаты итеп, дер һелкетеп эшләү. *«Урал» колхозында атаһы Әхмәткирәй менән улы Мөхәмәткирәй эшләйҙәр, әлә-лә!* ***Енен өҙәләр.*** (Р. Солтанғәрәев.)

**ен кеүек (шикелле, һымаҡ).** 1. Бик ҡаты, ныҡ (*эш-хәрәкәт тураһында*). *Тимеркәй, эшкә килһә,* ***ен кеүек*** *эшләй ул.* (Д. Юлтый.)

2. Бик таҙа, ныҡлы, кослө. **Ен шикелле таҙа.** ▬ *Ғосман менән Хәйри ҡарт эшсе Андрейҙың станогы янына килделәр. — Исәнме, Андрей ағай? —* ***Ен кеүек.*** (Ш. Шәһәр.)

*син.*: ат кеүек.

**ен ҡағылыу (һуғылыу, һуғыу).** Дини хөрәфәт буйынса: тәбиғәттән тыш көстөң насар тәьҫиренә дусар булыу. *Был Таҙ берәй* ***ен ҡағылған*** *әҙәмдер. Уны үлтерәм тип, башыңа әллә ниндәй бәлә-ҡаза алыуың бар.* (Әкиәттән.) [*Ғәйзулланы*] ***ен һуғып*** *зәғифләне.* (Я. Хамматов.)

**ен сәсеү.** Ныҡ асыуланып туҙыныу, дыу килеү. *Әкбәр түрә* ***ен сәсеп*** *әрләй...* (Т. Хәйбуллин.) *Был өйҙә* ***енен сәсеп*** *торған бер Мәскәй әбей йәшәй икән.* (Әкиәттән.) *Сафура Ғилаждың уландарына һүҙ әйтә башлаһа,* ***енен сәсеп*** *уның оло бисәһе Гөлйемеш сыға.* (Ж. Кейекбаев.) *Хангилдин ...* ***ен сәсеп*** *Ғафарға йәбешә, бөтә ғәйепте уның өҫтөнә ауҙара.* (Н. Мусин.)

**ен урынына күреү.** Ныҡ яратмау, күрә алмау. *Һуң, немец һалдаттары ла һуғыш теләмәй бит. Улар ҙа бит үҙ батшаларын* ***ендәре урынына күрәләр.*** (Д. Юлтый.)

*син.*: ен кеүек күреү.

**еңел аҡыллы (аҡылға еңел, аҡылы еңел).** 1. Фекер йөрөтөү йәһәтенән камил түгел. *Кешеләр был хаҡта төрлөсә һүҙ йөрөттө. Берәүҙәр, имеш, ул* ***аҡылға еңелерәк*** *ине, аңһыҙҙан эшләгәндер, тинеләр...* (Б. Бикбай.)

*син. ҡар.*: аҡылға бер төрлө.

2. Етди түгел; тормошҡа, эшкә өҫтән-мөҫтән генә ҡарай торған.

**еңел аяғы менән <килһен>.** Килен төшкәндә әйтелә торған теләк.

**еңел аяҡлы (аяғы еңел).** Йөрөгән ерендә ҡот, уңыш килә торған кеше хаҡында әйтелә. *...Һөйләнә-һөйләнә Хәҙисә апай килеп инде: минең* ***аяҡ еңел*** *була торған, был йортта туй булмай ҡалмаҫ.* (Ә. Бикчәнтәев.)

**еңел ҡулдан <булһын>.** «Башлаған эш уң булһын, һәйбәт тамамланһын» тигән теләкте белдергәндә әйтелә.

**еңел ҡулдан (ҡул менән).** Өҫтәнерәк, еңелсәрәк башҡарылған (*эш-хәл*). *Элегерәк* ***еңел ҡулдан*** *яҙылған шиғырҙар бик күпкә күрә, поэзия аҡрын үҫә ине.* (Ә. Харисов.)

**еңел ҡуллы (ҡулы еңел).** Башлаған эше уңыш менән, яҡшы тамамлана торған кешегә ҡарата әйтелә. *Беҙҙең Сәлимә бик* ***еңел ҡуллы****, ул башлаһын, ти әсәйем, үҙе беләгенә беләксә кейә.*

(М. Ғафури.) ***Ҡулы еңел***, *тиҙәр* [*Зәйтүнәне*], *ултыртҡан ағасы ерҙе яратып тамыр ебәрә.* (Ш. Янбаев.)

**еңел һөйәкле.** Эшкә, хәрәкәткә бик етеҙ, өлгөр. *Эшкә, хәрәкәткә етеҙ, тилбер Арыҫландың әсәһе, илле-алтмыш йәштәрҙәге* ***еңел һөйәкле***, *ҡаҡса әбей...* (З. Биишева.) ***Еңелерәк һөйәклеләре*** *йәйәүләп ҡайтыр яҡҡа һалдыралар.* (Т. Килмөхәмәтов.) ***Еңел һөйәкле*** *инең һин, хәҙер ҡара: оҡшап ҡалдың ҡуҙғалта алмаҫ умартаға.* (М. Илбаев.) *Уның кеүек малайҙы «****еңел һөйәкле****» тиҙәр. Йүгерһә, алдан килә, көрәште лә шәп белә...* (М. Ғәли.)

**ең һыҙғанып** [эшләү]. Ҙур тырышлыҡ менән, бик теләп (*эшкә тотоноу*). [*Тимер*] *Аҡыл биреп кенә йөрөмәй шул, башҡаларға хеҙмәт өлгөһө күрһәтә,* ***ең һыҙғанып*** *ҡара эшкә үҙе егелә.* (Б. Бикбай.) *Ун бишләгән малай* ***ең һыҙғанып*** *эшкә тотонған.* («Башҡ. пионеры».) ***Ең һыҙғанып*** *ғәйрәт, шатлыҡ менән, Күңел биреп хеҙмәт итермен.* (Т. Йәнәби.) *Ҡотлояр ағаң да японДарҙы туҡмарға китергә* ***ең һыҙғанып*** *ултыра инде...* (Һ. Дәүләтшина.)

**ең һыҙғаныу.** Берәй эшкә әҙерләнеү, әзер булыу. *Ерҙең* ***ең һыҙғанған*** *аҫабаһы — Шундай халыҡ йәшәй Бөрйәндә, Иөрәгендә былбыл һайрата ул, «эштәйем» тип янып йөрөгәндә.* (Х. Назаров.) *Ҡартайһам да, һеҙҙең менән бергә* ***ең һыҙғанып*** *эшләрмен әле.* (Т. Йәнәби.)

**еп өҙөрлөк** <**тә**> **хәл ҡалмау.** Бик ныҡ арыу. *Фәриҙәнең дә, ерҙе буйынан-буйына һыулы биҙрә күтәреп йөрөп,* ***еп өҙөрлөк тә хәле ҡалмағайны.*** (Ф. Әсәнов.) *Ятыр алдынан* [*Хөрмәт*] *...****еп өҙөрлөк тә хәле ҡалмауын*** *тойҙо.* (Я. Вәлиев.) *Аҙаҡ,* ***еп өҙөрлөк тә хәле ҡалмағас***, *ҡәһәрле яҙмышына буйһоноп, егет бер мәмерйәгә инеп йығыла.* (Әкиәттән.) **Еп өҙөрҙәй** <**ҙә**> **хәл юҡ:** ***Еп өҙөрҙәй ҙә хәлем юҡ***, *быуындар һүтелгән арҡан һымаҡ бушаған...* (Ғ. Аллаяров.)

**еп(тең) осо.** Йәшерен эш-хәлдең эҙенә төшөрлөк дәлил. *Ептең осон табыу.* ▬ *Биш йыл үткәс кенә,* ***ептең осо*** *сыҡты: Мәҡсүт ауылының Насырыйы үлтергән икән* [*Басырҙы*]. (Б. Бикбай.)

**еп тартҡандай.** Төп-төҙ, бик тура сығарылған. *Үргә менгәс, трактор күренде. Ул,* ***еп тартҡандай*** *төҙ бураҙна һалып, беҙгә ҡаршы килә ине.* («Сов. Башҡ.»)

**ептәре сейәлгән** *кемдәрҙең*. Мөнәсәбәттәре буталған. *Бисәкәйе яҡшы уның, ҡайһы ваҡыт* ***ептәре*** *тиҙ* ***сейәлһә лә****, балалар алдында ҡараңғы сырай күрһәтмәй.* (Б. Бикбай.)

**ер аҫтында йылан көйшәгәнде белеү (ишетеү, һиҙеү).** Бик һиҙгер булыу, ҡайҙа ни булғанын ишетеп, белеп тороу. *Алламорат* ***ер аҫтында йылан көйшәгәнде белә.*** (Һ. Дәүләтшина.) *Бына һиңә Рахмай. Ул* ***ер аҫтында йылан көйшәгәнен ишетә.*** *... ҡасан Ҡарыя тураһындағы хәбәрҙе белеп алған.* (К. Кинйәбулатова.) [*Ҡорбанов*] *...* ***ете ҡат ер аҫтында йылан көйшәгәнен***

***ишеткән** кеүек, эштең ҡайҙа нисек барғанын ишетеп ята.* (М. Тажи.)

**ер аяғы ер башы.** Бик алыҫ урын. *Йәйәүләп **ер аяғы ер башы** оҙам юл килеүгә [егеттең] аяҡтары талыҡҡан...* (Ж. Кейекбаев.) *Беҙҙең аҡ һыйыр бик алама, һәр ваҡыт тиерлек көтөүҙән айырылып ҡала ла **ер аяғы ер башы** ергә сыға ла китә.* (Ш. Насыров.) *Бөтә тирә-яҡты йәмләп торған аҫыл бер затты **ер аяғы ер башы** ергә үҙ ҡулыбыҙ менән биреп ебәрәйекме ни.* (М. Кәрим.) *Әллә һин нң **ер аяғы ер башынан** йөрөп килгәс, беләһеңдер тип һорауым да.* (Ғ. Дәүләтшин.)

*син. ҡар.*: ете ҡат ер аҫты.

**ер балаһы (улы).** Ер кешеһе, ерҙә йәшәгән кеше. *Күкте гиҙгән **ер улына** ғашиҡ булған Ай тыуҙы.* (Ҡ. Даян.)

**ер бит.** Оятын юғалтҡан, оятһыҙ. [*Гөлбикә*:] *Рәхмәт әйтәһе урынға, битеңә төкөрөп сығып китһен әле, **ер бит**...* (Н. Асанбаев.) *Шул тиклем ояддым Юламан өсөн. **Ер бит** икән был Юламан.* (Ф. Иҫәнголов.) *Оятһыҙ, **ер бит**!.. Оятлы кеше бандит буламы ни?!.* (З. Бәшири.)

*син.*: эт тиреһен битенә ҡаплаған.

**ергә йығыу (һалыу)** *нимәне*. Исәпкә алмау, һанламай, түбән ҡуйыу. *Иәш батыр, кеселеклек күрһәтеп, тәүҙә көрәштән баш тарта, әммә халыҡ һүҙен **ергә йыҡмай** ахырҙа, ирекһеҙҙән уртаға сыға һәм Көслөбай менән алыша башлай.* (Эпостан.) *Ҡәһәр төшһөн алдаҡ-ялғанға, Ниндәй генә төҫкә кермәһен! Ил йолаһын **ергә һалғанға** Ләғнәт минән — күҙем күрмәһен.* (Р. Ғамзатов.)

**ерҙә <ятып> ҡалыу.** Һөҙөмтәһеҙ юғалыу, юҡҡа сығыу. *Әй алла, ҡыҙым, ... беҙҙең балаларҙың түккән ҡаны **ерҙә ҡалмаған икән**, беҙҙең теләктәр ҡабул булған икән, балаҡайым.* (Һ. Дәүләтшина.) *Изгелек **ерҙә ҡалмаҫ**.* (Мәҡәл.) *Уның [Юламан ҡарттың] өмөтө **ерҙә ҡалмаған**.* (З. Биишева.)

**ерек тәртә (тәртәһе ерек)** *кемдең*. Тиҙ генә үпкәләп, үсегеп бара торған; артыҡ үпкәсел. *Өндәшмәйһең, һөйләшмәйһең, ипкә килмәһә көйөң, Мырт итеп һынырға тора, **ерек** шул **тәртәң** һинең.* (А. Игебаев.)

**ер емереп** [эшләү]. Бик ҡаты, бик нық итеп [*ниҙер эшләү*]. *Беҙҙең матур Мимылдыҡ бер яңғыҙы булһа ла, **Ер емереп эшләгәс**, артыҡ булды әрҙәнә.* (Ғ. Мәсғүт.)

**еренә еткереп** [үтәү, башҡарыу]. Тейешле кимәлдә, кәрәгенсә (*эшләү*). [*Ҡыҙҙар*] ... *бар эштәрен дә **еренә еткереп** эшләнеләр.* (Ә. Вәли.) *Һәр нәмәне йыбанмай, **еренә еткереп** эшләй ул Баймораt.* (Н. Мусин.) — *Мин ҡыҙымды өс шартымды **еренә еткереп үтәүсе** кешегә бирәм, — тигән батша.* (Әкиәттән.) *Талантлы артистка һинд халыҡ бейеүен һәм куба халыҡ бейеүен килештереп, **еренә еткереп башҡарҙы**.* («Сов. Башҡ.»)

**еренә еткереү.** Тейешенсә башҡарыу, тормошҡа ашырыу. *Бер нисә взводҡа Андреев тураһында булған хөкөмдө **еренә еткереү**,*

*атыу өсөн приказ булһа ла, улар үтәмәнеләр.* (Д. Юлтый.) *Биш минут үтеүгә бойороҡ **еренә еткерелгән**.* (Әкиәттән.) *Тимер* [*Гәрәйҙең*] *һүҙен ҡырҡа бүлде: — Ярлылар йыйылышы ҡарарын **еренә еткерергә** кәрәк: һине раскулачивать итәбеҙ.* (Б. Бикбай.)

*син.*: ғәмәлгә ашырыу.

**ер йотһон (йотҡоро).** *һөйл.* 1. Ҡарғағанда әйтелә. *Их, яуыз бай, ҡарун, **ер йотҡоро**, көсөбөҙҙө бысраҡ ҡулына бәйләй, ә бер телем икмәген ҡыҙғана.* (Ғ. Хәйри.)

2. Һүҙеңдең дөрөҫлөгөн раҫлап, ант иткәндә әйтелә. *Әгәр алдаһам, ошо урынымда **ер йотһон**!* (Б. Бикбай.) *Был хәбәр әсәйемде шаҡ ҡатырҙы, күҙҙәре томаланды, маңлайындағы һырҙар тәрәнәйҙе. — Ысынмы был, Земфира? — **Ер йотһон**, әгәр алдаһам.* (Я. Вәлиев.)

**ер йоттомо ни (йотҡан кеүек).** Ҡапыл ғына күҙ алдынан юҡ булған кеше йәки берәй нәмә тураһында әйтелә. [*Хәйруш*:] *Әллә үҙен **ер йотто** инде, һис бер ерҙән табып булмай.* (Х. Ибраһимов.)

**ер күтәрмәҫ (күтәрә алмаҫлыҡ).** Гонаһлы, насар эш-ҡылыҡ, ауыр ҡайғы тураһында әйтелә. *Ер күтәрә алмаҫлыҡ ҡайғы.* — *Был хәтле бысраҡлыҡты **ер күтәрмәҫ**.* (Һ. Дәүләтшина.)

**ер итеү.** Ҡоллоҡҡа, иҙгенлеккә төшөрөү, хурлыҡҡа ҡалдырыу.

**ер ярып (йыртып)** [ҡысҡырыу, илау...]. Бик ҡаты итеп (*ғауға һалыу*). *Мин дә **ер йыртып**: «Йәшә!» — тип, һөйөнә-һөйөнә ҡысҡырам.* (Ш. Бабич.) *Баярҙың береһенән-береһе уҫал, йөҙләгән эре һыйырҙарын, **ер ярып** үкереп, яндарына яҡын ебәрмәй торған үгеҙҙәрен таң ҡараңғыһынан тороп яланға ҡыуырға кәрәк.* (Һ. Дәүләтшина.) *Мин ҡайтып ингәндә, Сания караватында тәгәрәп, **ер ярырҙай булып**, ахылдап илап ята ине.* (М. Тажи.) *Айыу тәненең әсетеүенә сыҙай алмай, өңөнән килеп сыҡҡан һәм **ер йыртып үкереп** ебәргән.* (Ж. Кейекбаев.)

**ер ҡорто.** 1. Бәләкәй генә бик теремек, үткер балаға ҡарата әйтелә. [*Хәсәндең*] *Ауыҙы-мороно маиға буялып бөтә. Әммә үҙе илай белмәй инде, **ер ҡорто**.* (Ф. Әсәнов.)

2. Ер эшенә бик бирелеп эшләгән кешегә ҡарата әйтелә. *Киләсәктә агроном булып эшләргә уйым юҡ, минән башҡа ла **ер ҡорттары** бөтмәгән.* (Н. Мусин.)

**ер ҡуйынына инеү.** Үлеү, вафат булыу. ***Ер ҡуйынына инер** ваҡытым еткән, ниндәй бабай кәрәк булһын миңә, — тине әбей.* (Хикәйәттән.)

*син. ҡар.*: вафат булыу.

**ер ҡуйынына тапшырыу.** Ерләү, ҡәбергә ҡуйыу.

**ерле юҡҡа.** Бушҡа ғына, буштан-бушҡа. [*Хафиз*:] *Әйттем бит инде ҡаиҙа булғанымды, моғайын, **ерле юҡҡа** ғына борсолаһыңдыр әле шул.* («Сов. Башҡ.»)

**ер менән күк араһы** <**кеүек**>. Аралағы айырманың ҙурлығы тураһында. *Ҡыҙҙар менән ҡыҙҙар араһы ла **ер менән күк араһы***

***кеүек** була.* (Һ. Дәүләтшина.) *Ул йылдарҙағы Өфөнө бөгөнгө менән сағыштырһаң, **ер менән күк араһы**.* (Т. Алюк.) *...Ысынлап та, [Гүзәлдең] ҡалалағы өләсәһе менән ауылдағы өләсәһе араһында **ер менән күк араһы һымаҡ** айырма бар шул.* (Ф. Рәхимғолова.)

**ер менән күк араһында**. 1. Бер ҡайҙа ла урынлашмаған хәлдә. 2. Теләһә ҡайҙа (*йәшәү*).

**ер менән тигеҙләү**. Юҡ итеү, бөтөрөү, ҡырыу. *Беҙҙең бер снаряд фашистарҙың алға сығып барған йөҙләп һалдатын **ер менән тигеҙләне**.* (Д. Юлтый.)

**ер сиге**. Бик алыҫ урын.

*син. ҡар.*: ер аяғы, ер башы.

**ер тишегенә инерҙәй булыу (инер ине)**. Хурлыҡтан ни эшләргә белмәү, ныҡ оялыу. *...Исламов бойороҡто уҡығанда шундай уңайһыҙ хәлдә ҡалды, әгәр ер ярылһа, **ер тишегенә инеп китер ине**.* (Ғ. Хәйри.) *...Бик асыуым килде, халыҡ алдында **ер тишегенә инерҙәй** булдым.* (Б. Бикбай.) *Ҡабаттан ул кешегә күренеү Юлдыбикә әбей өсөн **ер тишегенә инерҙәй** оят килтерәсәк.* (Т. Хәйбуллин.)

**ер һелкетеп (һиңкетеп)** [бейеү, атлау...]. Бик көслө, бик ныҡ итеп. **Ер һелкетеп йөрөү.** ▬ *Бергә килеп **ер һиңкетеп** уйнап-көлөү бар беҙҙә.* (Халыҡ йырынан.)

**еҫе лә ҡалманы (юҡ)**. Бөтөнләй юҡҡа сыҡты, юғалды. *Йыйылыштың **еҫе лә ... ҡалманы**. Халыҡ яғаға килеп һуғышырға тотондо.* (И. Насыри.)

**ете атаһына етеү**. Зат-ырыуын ҡалдырмай тирғәү, хурлау.

**ете диңгеҙ аръяғы (арты)** *фольк.* Бик алыҫ тип иҫәпләнгән урын. *Атлантика һыуҙарының сикәһендәге алһыу миң шикелле, был ил [Куба] алыҫта, әкиәттәгесә әйтһәк, «**ете диңгеҙ аръяғында**» ята.* («Ағиҙел».)

**ете ҡат ер аҫты***. Бик алыҫ урын; әҙәм аяҡ баҫмаған ер. *Йәштәр ни, улар ике аҡсарлаҡ кеүек остолар инде. Уларҙы, ете ҡат күк өҫтөнә менеп, **ете ҡат ер аҫтына** төшөп, шәм менән эҙләһәң дә — табалмайһың инде.* (Һ. Дәүләтшина.) *Мин ул Аппаҡовты таныйым. **Ете ҡат ер аҫтынан** табырмын уны.* (Р. Нигмәти.) *Башҡа берәй ен-пәрейгә эләкһәң, **ете ҡат ер аҫтында** ятыр инең бит, алтынҡайым.* (С. Кулибай.) *Бының кеүек галушты ауыл ерендә **ете ҡат ер аҫтына** төшөп эҙләһәң дә табып булмай бит, ҡаиҙа ул.* (Н. Мусин.)

*син.*: ете диңгеҙ аръяғы, Ҡаф тау арты, йәһәннәм тишеге, ер сиге, ер аяғы ер башы.

[*Боронғо мифологиялағы ерҙең, күктең ете ҡатламдан тороуы тураһындағы ҡараштан.]

**ете <ҡат> йоҙаҡ**. Ныҡ ҡуйылған бик, һаҡ. *Ҡарттың бөтә донъяһы **ете ҡат йоҙаҡ** аҫтында.* (А. Ғирфанов.)

**ете ҡат тиреһен тунау** *кемдең*. 1. Бик ҡаты язалау. [*Браун*:]... *Ҡағыҙға тынысլыҡты яҡлап ҡул ҡуйҙырып йөрөгәнемде белһәләр, минең **ете ҡат тиремде тунаясаҡтар***. (Ғ. Ғүмәр.)

2. Ныҡ талау. *Беренсе гильдия купецы. Башҡорт ауылдарында халыҡтың **ете ҡат тиреһен тунаған***. (С. Ағиш.) *Был әшегеҙ менән әләкһегеҙ — һеҙгә бер ни ҙә булмаясаҡ, ә минең **ете ҡат тиремде** һалдырып аласаҡ*. (Ә. Мирзаһитов.)

**ете ҡат тир сыҡҡансы**. Арығансы, хәлдән тайғансы (*эшләү*). [*Ҡунаҡтар*] ... ***ете ҡат тир сыҡҡансы** фамильный сәй эстеләр ҙә таралыштылар, ти*. (Әкиәттән.) *Ай һай, баиҙар батракты эшләтә белделәр. **Ете ҡат тиреӊ сыҡҡансы**, һуӊғы ҡаныӊды һыҡҡансы, эштән туҡтау юҡ ине*. (М. Тажи.)

**ете ҡат үлсәп, бер ҡат киҫеү**. Бик ҡарап, ныҡ уйлап эш итеү. *Гёте шиғыры тыуған һараиҙарҙа, **Ете үлсәнеп, бер ҡат киҫелгән**, Һарай аша ғына ярлыларҙың Ҡайғы, зарын, гәмен кисергән*. (Д. Юлтый.) *Сәйфулла Бәҙретдинов — **ете ҡат үлсәп, бер ҡат киҫә** торған инженер*. (Ю. Әхмәҙиев.) *Йәшерәктәр, моғайын, оло-лар алдында әҙәп һаҡлауҙан өндәшмәиҙер. Өлкән йәштәге ғалимдар иһә **ете үлсәп бер ҡырҡырға** күнеккән*. (Ә. Хәким.)

**ете төн <уртаһы>**. Бик һуӊ, төн уртаһы ауғас. ...*Бер нәмә лә күрмәйем, миңә **ете төн уртаһы** кеүек ҡараңғы*. (М. Ғафури.) ***Ете төн уртаһында** эс бошороп ҡысҡырған яңғыҙ ябалаҡтай, пулемет-пугач таҡылдай*. (Ә. Чаныш.) *Ул йылды бик ҡапыл, **ете төн уртаһында** ҡотороп ташып китте шул Аҡселән*. (Б. Бикбай.) ***Ете төн уртаһында** ҡаиҙа бармаҡсы булаһың? — тип гәжәпләнде Әсмә апай улына*. (Х. Мохтар.) ***Ете төндә**: Салауаттың йөрәк тибешенән сыңлап ҡуиҙы тимер күлдәге. Бер ҡараштa осраштылар улар: — Ниңә, — ти ул, — **ете төндә** һин*? (К. Кинйәбулатова.)

**ете ят**. Бөтөнләй туған-ҡәрҙәш түгел; сит. *Зилдәһе Зилдә, Хәйрулла өсөн **ете ят** кеше*. (М. Хәйҙәров.) ***Ете ятҡа** төшкән йотҡайғыға күҙебеҙҙән сыға йәш бәреп*. (Р. Бикбаев.) *Хатта сыбыҡ осо ла ҡәрҙәшлегем юҡ — мин уларға **ете ят** кешемен*. (Ф. Иҫәнғолов.)

*син*.: сыбыҡ осо.

**ете ятып бер төшкә инмәү**. Уйлап та бирмәү, иҫләмәү. *Мин аптыра ла кит... **Ете ятып бер төшөмә инмәгән** кеше тотһон да «коҙа» тип күрешһен*. (Н. Ҡәрип.) *Кешеләр күңел аса ана. Хәүеф-хәтәр **ете ятып бер төштәренә инмәй** торғандыр. Әллә ситтән генә шулай күренәме*? (Я. Вәлиев.)

**етәккә бау өҙмәй йөрөү**. Бик тә кеше ыңғайлы булыу.

**етә ҡалыу**. Берәй эш-ҡылыҡ өсөн сәбәп булыу. *Һылыу ҡорт ҡаға был һүҙ **етә ҡалды**. Шунда уҡ әллә ниндәй доғалар уҡый һалды*... (Т. Йәнәби.) *Ҡурҡыуға төшкән илгә был кәңәш **етә ҡалды**. Ике-өс көн эсендә йәйләүҙәге бөтә ил күсеп тә китте*. (И. Көҫәиҡол.) *Бейә, ҡышҡа кергәс, ҡорсаңғы булды. Сөнәгәтте үсектерер өсөн **етә ҡалды***. (Ж. Кейекбаев.) *Халыҡҡа был **етә***

***ҡалды.** Күҙҙәренән йәш сыҡҡансы көлә-көлә Шәрифулланы ҡоторталар.* (Я. Хамматов.)

**еүеш танау** *һөйл.* Үҫеп, ир ҡорона инеп өлгөрмәгән йәш кешегә ҡарата түбәнһеткәндә әйтелә. *Юҡ инде. Киткән баш — киткән. Был **еүеш танау** алдында сер биреп булмай.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Бына һеҙгә бер хикмәт, **еүеш танауҙар**.* (М. Кәрим.)

# З

**заман ахыры (ахыры заман).** Дини хөрәфәт буйынса: ботә тереклек, донъя юҡҡа сыға торған ваҡыт. [*Һылыу әбей:*] *Эй, ғүмеркәйҙәр... **Ахыры заман** яҡындыр инде. Шулай булмаһа, халыҡ был тиклем аҙмаҫ ине.* (Т. Йәнәби.)

**заман ахыры һалыу** *иҫк.* Үлтереү, юҡ итеү. [*Бабсаҡ:*] *Туҡтамаҫтан, хоҙай ҡушһа, барайым мин, ул йыртҡысҡа **заман ахыры һалайым** мин.* («Бабсаҡ менән Күсәк».)

**заман(а) еле.** Билдәле бер осорға хас шауҡым. *Яҙыусы йәшенә һәм тәжрибәһенә ҡарамай, ... уның һәр һүҙе **заман еле** менән һуғарылырға тейеш.* («Сов. Башҡ.»)

**зил-зибәр килтереү** *кемде.* Пыран-заран итеү, туҙҙырыу. *Ғәскәреңә әмер бирсе, хан, **зил-зибәр** үк **килһен** хас дошман.* (М. Кәрим.)

**зиманын * кутарыу.** Пыр туҙҙырыу, туҡмау йәки ҡаты әрләү. [*Гөлзада — Барыйға:*] *Малды рәтләп ҡарамаһа, ... мин ул кешеңдең **зиманын ҡутарырмын**, буш тегеләй.* (Ш. Насыров.)

*син.*: кәрәген биреү, тетмәһен тетеү.

[***Зиман** — ғәр.* эс.]

**зифаф төнө.** Егет менән ҡыҙҙың ҡауышыуы. [*Надир*] ... ***зифаф төнөндәге** шикелле, ҡомһоҙланып ҡосорға, үбергә кереште.* (М. Әбсәләмов.)

**зыйтына булыу** *кемдең.* Ыңғайына тороу.

**зыйтына тейеү** *кемдең.* Асыуын килтереү. *Мансурҙың битенә ҡуйы ҡыҙыллыҡ йүгерҙе. «Снабженец» тигән һүҙгә ғәрләнде. Сикәһенә сәпәкләһә лә дуҫы, был тиклем **зыйтына теймәҫ** ине.* (Ш. Янбаев.)

**зыҡ ҡубыу.** 1. Шау-гөр килеү, ғауғалашыу. [*Балалар*] ... *ҡайһыһы илай, ҡайһыһы ҡаса, әсәләренән айырылмай **зыҡ ҡубалар**.* (Һ. Дәүләтшина.) *Мәктәп ишеге алдында **зыҡ ҡубышып** балалар уйнай.* (Р. Низамов.) *Ҡатын-ҡыҙ **зыҡ ҡупҡан** арала, Сәйфи квартираға күҙ йүгертеп сыҡты.* (Х. Ғиләжев.)

2. Асыуланып туҙыныу. *Ҡотора, дулай, **зыҡ ҡуба** ғифрит кеүек, Үкерә, ауыҙынан сәсеп ҡайнар күбек* [*иблис*]. (Ш. Бабич.)

[*Старшина*:] *Бынағайыш, әле өс бисә үҙ-ара* ***зыҡ ҡуба.*** (Б. Бикбай.)

**зыярат итеү (ҡылыу)** *иҫк.* Үлгән кешене, ҡәберенә барып, йәки изге урынды хөрмәтләп иҫкә алыу, ҡарау. *Ата-инәң барҙа хөрмәт ит, үлгәс,* ***зыярат ит.*** (Мәҡәл.) [*Әбей*:] *Бер нисә көндән* [*тәүге Ҡөрьәнде*] *Сәмәрҡәндкә оҙаталар икән. Ана шуны* ***зыярат ҡылырға*** *... мөмкин тинеләр.* (С. Агиш.)

**зәмзәм* һыуы** *шаяр.* Араҡы. *Ирҙәр ярыша-ярыша* ***зәмзәм һыуы*** *йота.* (А. Игебаев.)

[***Зәмзәм** — *ғәр.* Мәккә ҡалаһында изге ҡойоноң исеме.]

**зәһәр сәсеү.** Ҡаты асыу белдереү, асыуланып ҡотороноу.

**зәһәр һыуы** *һөйл.* Араҡы. *Ул* [*шахтер*] *бергә эшләгән иптәштәренә ҡарай ҙа: «Ах, земляк, где наша не пропадала», — тип янған йөрәгенә* ***зәһәр һыуы*** *һибергә тотона.* (Ш. Шәһәр.)

**зәңге ҡасырыу.** Ырым һүҙҙәре әйтеп, яҙ көнө тәүге йыуа, ҡуҙғалаҡты ауыҙ итеү.

# И

**иблис (шайтан) төкөргән** *яманл.* Бик оятһыҙ, хаяһыҙ кешегә ҡарата әйтелә. *Бар, йортомдан сығып кит,* ***иблис төкөргән*** *бәндә! Күҙемә күренәһе булма! — тип ҡысҡырҙы Ҡулай.* (Әкиәттән.)

**иғтибар үҙәгендә <булыу>*.** Әһәмиәтле һаналыу, дөйөм ҡыҙыҡһыныуға лайыҡ булыу.

[* Рус телендәге «быть в центре внимания» берәмегенән.]

**иҙен итеү.** Мөмкинлек биреү, ихтыяр ҡуйыу.

**иҙмәһен иҙеү** *кемдең.* Бик ҡаты туҡмау. *Һеҙ тотмаһағыҙ, мин уның* ***иҙмәһен иҙә*** *инем инде.* (Ә. Вәли.) *Бәхетең инде, кешеләр бар. Юғиһә,* ***иҙмәңде иҙә*** *инем!* (Ш. Бикҡол.) *Ҡара уны, әгәр ошаҡлаһаң, урамға сыҡма,* ***иҙмәңде иҙермен!*** (Х. Мохтар.) *Был юлы Кәрим сәсәнден үҙен* ***иҙмәһен иҙеп*** *туҡмайҙар ҙа юл ситенә ырғыталар.* (Ә. Вахитов.)

*син.*: ҡабырғаһын һанау, тетмәһен тетеү.

**ике арала бер турала [йөрөү].** Рәтле эш менән булмай, буталыу; унда-бында ташланып бушҡа ваҡыт уҙғарыу. [*Әхмүш*] *Өйөндә эшләмәгән кеүек, ячейка эшендә лә кинәндереп эшләмәне. Шул «****ике арала бер турала****» йөрөп ҡышты үткәрҙе.* (Д. Юлтый.)

**ике арала ғына ҡалһын.** Сер итеп һүҙ һөйләгәндә әйтелә.

**ике аягын бер ҡуңысҡа тығыу** *кемдең.* Ҡаты яза биреү, яфалау. *Мин һеҙҙең* ***ике аяғығыҙҙы бер ҡуңысҡа*** *тығып ҡуйырмын, тыңламай ҡарағыҙ әле.* (Һөйл.)

**ике аяҡка <бер юлы> аҡһау**. Эш-тормошта бөтә яҡлап артҡа китеү.

**ике аяҡлы бүре (эт һ. б.)** *һөйл.* Ошо хайуандарға хас кире сифаттары булған кешегә ҡарата ғәйепләп әйтелә.

**ике аяҡтың береһен <дә> баҫмау (атламау)**. Берәй урынға барыуҙан ҡырҡа баш тартыу (*ара боҙолоуҙан да була*). *Бәләгә тарырымды алдан белһәм,* ***ике аяғымдың береһен баҫмаҫ*** *инем бында!* (Я. Хамматов.) *«Былай етем быҙау шикелле кеше туп-һаһында йөрөрөмдө белһәм,* ***ике аяғымдың береһен дә баҫмаған*** *булыр инем», — тип уйланы Буранбай.* (И. Ғиззәтуллин.) *Әле булһа үкенеп бөтә алмайым, былай килеп сығырын белһәм, театрға* ***ике аяғымдың береһен атламаҫ*** *инем.* (Д. Исламов.) *Рабиға апаиҙың, ана, баҫыуға ҡарай* ***ике аяғының береһен дә атлағаны*** *юҡ.* (Я. Вәлиев.)

**ике быҙауға кәбәк айыра белмәү (алмау)** *мыҫҡ.* Бик ябай ғына нәмәне лә аңлай алмау. ***Ике быҙауға кәбәк айырып бирә алмай,*** *үҙе ҡазый булам, ти.* (Һ. Дәүләтшина.) *Бер һүҙҙе ҡат-ҡат сәйнәп,* ***ике быҙауға кәбәк айыра белмәгән*** *Аптыраҡҡа йыйын теҙгенен тоттора буламы һуң Бирҙеғол.* (Ғ. Ибраһимов.)

**ике донъя — бер мөрйә** *кемгә, кем өсөн.* Үтә ғәмһеҙ, бер нәмәгә лә иҫе китмәгән кешегә ҡарата әйтелә. *Рахмайға ни —* ***ике донъя — бер мөрйә****, Рахмай шулай ғәмһеҙ генә көн итә.* (К. Кинйәбулатова.) *Әлегә ул* [*Ласточкин*], *ауыҙын сәпелдәтә-сәпелдәтә татлы төштәр күреп ята. «...Бына кемгә ул* ***ике донъя — бер мөрйә****», тип бошондо Йәнтимер.* (М. Кәрим.) *Эй, ҡустым, беҙгә ни* ***ике донъя бер мөрйә****, үгеҙ үлһә — ит, арба ҡыйралһа — утын.* (Һ. Дәүләтшина.) [*Сираев*] *иптәштәре менән йүнләп һөйләшмәне, ҡушҡан эштәрҙе өнһөҙ-һүҙһеҙ, ләкин, «минең өсөн* ***ике донъя — бер мөрйә****» тигән кеүек, мыҙылып йөрөп кенә үтәне.* (Н. Мусин.)

*син.*: үгеҙ үлһә — ит, арба ватылһа — утын; ике ярты — бер керәндил, беште ни ҙә төштө ни.

**ике донъяла <ла> рәхәт, изгелек күрмәгер.** Ҡарғау һүҙе.

**ике донъяны бер итеү**. Бик иркен ҡыланыу, йүгәнһеҙләнеү. ***Ике донъяны бер итеп*** *йөрөү.* ▬ *Моталлап ағай* ***ике донъяны бер итеп*** *һине таптыра, ҡайҙа йөрөйһөң?* (М. Хәйҙәров.)

**ике донъя һыу алла** *кемгә, кем өсөн, һөйл.* Бер нәмәгә лә иҫе китмәгән, ғәмһеҙ кешеғә ҡарата әйтелә.

**ике иҫле**. Аҡылы инәле-сығалы; аҡылһыҙыраҡ, иҫәүән.

*син. ҡар.*: аҡылға бер төрло.

**ике иҫәп — бер хисап**. Тегеләй ҙә, былай ҙа ярай, барыбер килеп сыға (*берәй эште самалап ҡарап, тәүәккәлләгәндә әйтелә*).

**ике йөҙлө**. Бер нәмә һөйләп, икенсене эшләй торған; мәкерле, алдаҡсы. *Маҡталған бай балаһы* ***ике йөҙлө*** *була ул. Алда мине йыуатыр, ситтә ятты һөйөр ул.* (М. Буранғолов.) *Тимәк, мин* ***ике йөҙлө*** *кеше, бер төрлө һөйләйем, икенсе төрлө эшләйем?* (И. Абдуллин.) [*Сәлим*:] *Бына һин ниндәй дуҫ икән, хатта бүләк*

*тә алып ҡайтҡан, алдаҡсы, **ике йөҙлө** һис ни ҙә күрмәгәндәй-белмәгәндәй, алдыңда көлөп тора.* (Д. Бүләков.)

<**ике**> **күҙ (күҙҙәр) дүрт булыу.** Бик ныҡ аптырау. *Буласаҡ председателдең телмәре бөтә. «Был кем?» — Халыҡтың **ике күҙе дүрт була.*** («Сов. Башҡ.») **Ике күҙҙе дүрт итеү:** *Кәримов Камил тигәс тә, студенттар ҡылт итә, әй, егеттәр, һеҙгә милләт **ике күҙен дүрт итә.*** (Ш. Бабич.)

*син.*: иҫ китеү, шаҡ ҡатыу, таң ҡалыу, хайран ҡалыу.

**ике күҙе(м) ҡояш күрмәһен.** Ант итеп раҫлағанда йәки берәйһен ҡарғағанда әйтелә.

**ике кәмә ҡойроғон <бер юлы> тоторға тырышыу.** Ике эште бер юлы башҡарырға маташыу. *Минеңсә, бында питомник хужалығын яйға һалыу өсөн дә байтаҡ көс түгергә тура киләсәк. **Ике кәмә ҡойроғон тоторға тырышыу** һымағыраҡ булып ҡуймаһын.* (Н. Мусин.)

*син.*: ике ҡуян артынан ҡыуыу.

**ике ҡанат — бер ҡойроҡ.** Һәр нәмәгә әҙер булған, «мин» тип торған кешеғә ҡарата әйтелә. *Уның кеүек эшкә **ике ҡанат — бер ҡойроҡ** булған һәм шундай эште табыш итеп алған һайт тигәнгә тайт тип тороусы Мырҙахан ең һыҙғанып яусылыҡ эшенә тотоноп алып китте.* (Ж. Кейекбаев.) [*Таиба әбей:*] *Теге Баҙыян еңгәң, беләһеңдер, ул бит хәҙер беҙҙең сәүит, Нәғимәне өйгә ебәргән. Нәғимә ни ундайға «**ике ҡанат — бер ҡойроҡ**» инде ул.* (З. Биишева.)

*син.*: һайт тигәнгә тайт тип тороу.

**ике ҡарбуз бер ҡултыҡҡа һыймау.** Ике эште бер юлы эшләй алмау.

**ике ҡулға бер эш.** Билдәле генә булған, бер төрлө ғенә эш-шөғөл тураһында әйтелә. *Был урынымда рәхәт, **ике ҡулға бер эш.***

**ике (ҡуш) ҡуллап [ҡаршы алыу, ҡабул итеү...].** Бик теләп, хуп күреп (*тотоноу, ҡаршылау.*) ***Ике ҡуллап**, хуплап ҡаршылайбыҙ Тимер юлсыларҙың был хатын...* (Ғ. Мәсғүт.) *Беҙ һынаныҡ, хәҙер һыналдыҡ та, Беҙ беләбеҙ, беҙгә кемдәр дуҫ, Шуға совет хөкөмөн **ике ҡуллап** ҡаршыланыҡ, беҙҙе күргәс хуп.* (Д. Юлтый.) [*Йомағолов*] *Николай Антоновичты **ҡуш ҡуллап** ҡаршы алып, яуаплы эшкә тәғәйенләү урынына һөйләшеп тә торманы.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**ике ҡулды <ла> бәйләү.** Эш-хәрәкәткә мөмкинлек бирмәү; тотҡар, ҡамасау яһау. *Иәш бала ике ҡулды ла бәйләне лә ҡуйҙы.*

**ике ҡулһыҙ [булыу, ҡалыу...].** Бер ни ҙә эшләй алмау. [*Юлтыев*:] *Эшемдең бисмиллаһы колхозда партия ойошмаһы төҙөү булырға тейеш. Шунһыҙ һин **ике ҡулһыҙ**.* (Ғ. Әмири.)

**ике ҡулы кеҫәһендә.** Эшкә ҡатнашмай, ярҙам итмәй, буш йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә.

**ике ҡуян артынан ҡыуыу.** Ике эште бер юлы эшләргә маташыу.

*син.*: ике кәмә ҡойроғон <бер юлы> тоторға тырышыу.

**икенең бере.** Йә теғеләй, йә былай (*ҡырҡа ҡарар ҡабул итергә кәрәклекте белдергәндә әйтелә*). *Ял иттем инде, — тине ул. — Лапаҫ аҫтында ла, ҡаҡ һикелә лә бына былай ял иттем. — Ул ҡулы менән боғаҙынан үткәрҙе. — Мәрхүмәмдең ҡәберен ҡоймалап ҡуям да —* ***икенең бере.*** (Х. Ғиләжев.)

**икенсе күҙ менән ҡарау.** Башҡа төрлө аңлау, элеккегә ҡарағанда тәрәнерәк төшөнөү. *Хәҙер мин донъяға, тормошҡа* ***икенсе күҙ менән ҡарайым****, гел яҡшылыҡҡа ынтылам, Ватанға һәм халыҡҡа файҙа килтереүемә ҡыуанам.* («Сов. Башҡ.»)

**ике тамсы һыу кеүек** [оҡшау, булыу...]. Бер-береһенә ныҡ оҡшаған кешеләр йәки нәмәләр тураһында әйтелә. — *Ҡарасы үҙҙәрен.* ***Ике тамсы һыу кеүек*** *һөнәрсенең көршәктәренә оҡшап торалар ҙа баһа! — тип ғәжәпләнгән кешеләр.* (З. Биишева.) [*Мәжит ағай менән*] ... ***ике тамсы һыу кеүек*** *бер-берегеҙгә оҡшағанһығыҙ.* (Т. Алюк.) *Рус егете Дмитрий Ребейкиндың бөтә яҙмышы башҡорт егете Хәкимйән Янбаевтыҡына* ***ике тамсы һыу кеүек оҡшаш...*** (Ш. Янбаев.) **Ике тамсы һыумы ни**: — *Әсәһе, улым бигерәк үҙемә оҡшаған, әйеме?* — ***Ике тамсы һыумы ни****?* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: ҡойоп ҡуйған кеүек.

**ике тин* бер аҡса (баҡыр).** Бер ни тормай, бик еңел (*ниҙелер башҡарыу, үтәп сығыу тураһында*). [*Яппаров Сәлимгә*:] — *Әгәр ҙә теләгең булһа, һине эшеңдән алыу* ***ике тин бер аҡса.*** (С. Агиш.) — *Бәй, эшләй белһәң, быны эшкә ашырыуы ни* ***ике тин бер аҡса.*** (Ғ. Дәүләтшин.) [*Надир*:] — *Һиңә ни уҡыу —* ***ике тин бер аҡса*** *кеүек инде ул.* (М. Әпсәләмов.)

[*Тин — Ж. Ғ. Кейекбаев аңлатыуынса — тейен (белка) һүҙенән килеп сыҡҡан, йәғни борон ике тейен тиреһе бер көмөш аҡсаға бәрәбәр булған.]

**ике тәкә башы бер ҡаҙанға һыймау.** Килешеп йәшәй алмау, һыйышмау (*Түрәлекте бүлешә алмай ыҙғышыу*). Императрица — аҡыллы бисә, ***бер ҡаҙанға ике тәкә башы һыймағанды*** аңламай тиһеңме ни... (Б. Аҫылғужа.)

**ике уртала тороу (булыу).** Фекер, эш-хәрәкәт йәһәтенән ҡайһы торкөмгә ҡушылырға белмәү, арала тороп ҡалыу. [*Әсәһе — Гөлйөҙөмгә*:] *Мин ҡалай итәйем инде,* ***ике уртала****, ҡайһығыҙға булайым? Ни эшләп улай итеп атайың биргән ергә бармайым тигән хәбәр сығараһың?* (Һ. Дәүләтшина.)

**ике ут араһында [ҡалыу, булыу...].** 1. Ҡапма-ҡаршы яҡтарҙың ҡайһыһына ҡушылырға белмәй, хәүефле хәлдә (*тороу*). *Саҡай Солтанов та* ***ике ут араһында*** *үртәләнә хәҙер.* (Б. Бикбай.) *Шәмсетдиндең ҡатыны* ***ике ут араһында*** *янды. Ләкин утты һүндерергә көсһөҙ ине ул. Шулай ғүмере буйына иренең һүҙенә күнеп йәшәне.* (Р. Низамов.)

2. Ҡапма-ҡаршы булған мәсьәләне хәл итә алмай үрһәләнеү, көйөү. *Абдулла ла ошондай* ***ике ут араһында*** *йөрөй. Үҙе Зәли*

*фәне ғәләмәт бер талпыныу менән һөйә, .. ә уның менән осрашып һөйләшеү түгел, яҡын барырға ла баҙнат итмәй.* (Н. Мусин.)

**ике һүҙҙең береһендә.** Бик йыш, әлдән-әле булып торған *(һүҙ, хәбәр хаҡында). Фәхри ... **ике һүҙҙең береһендә**: «Шулай кәрәк, бәй, шулай итмәй ни! — тип һәр кемде ҡеүәтләп ултырҙы.* (Б. Бикбай.) *Ул **ике һүҙҙең береһендә,** әллә ҡайҙан көтөлмәгән йор һүҙ табып, көлдөрөп ала.* (Һ. Дәүләтшина.) *Элек бөтә бәләне, бөтә ауырлыҡтарҙы Николай батшанан күрә ине* [*Ғәйзулла*]. ***Ике һүҙҙең береһендә** уны яманлай, уны ҡәһәрләй ине.* (Я. Хамматов.)

**ике яҡлы бәке (бысаҡ).** Ҡапма-ҡаршы булған йәки дошманлашҡан кешеләрҙең икеһенә лә ярай торған; ике йөҙлө. *Хәйер, кешеләр бөтә ерҙә лә Сәлмән ҡарт кеүек **ике яҡлы бысаҡ** түгел дә!* (Ф. Хөсни.)

**ике ярты — бер керәндил (бер бөтөн)** *кемгә, кем өсөн.* Үтә ғәмһеҙ, бошмаҫ кешегә ҡарата әйтелә.

*син. ҡар.*: ике донъя — бер мөрйә.

**ике (ете) ятып бер төшөнә лә инмәү** *кемдең нимә.* Уйлап та бирмәү, иҫкә лә төшмәү. ...*Мин ҡәләм тота башлаған замандарҙа ҡағыҙ-ҡәләм тигән йән аҙыҡтары күптәрҙең **ике ятып бер төшөнә лә кермәй** ине, тиһәм, ул саҡлы ныҡ хаталанмамдыр.* (Ғ. Ғүмәр.) [*Наилә*:] — *Эш, имеш... Ҡасан бөткәне бар уның? Һиңә мин әллә бар, әллә юҡ инде. **Ике ятып бер төшөңә лә инмәйемдер,** ахыры.* (Ғ. Ибраһимов.)

**ике энә бер ептән, ике имән бер төптән.** Үтә ныҡ, көслө (*дуҫлыҡ*).

**икмәгенә май яғыу** *кемдең.* Ярамһаҡланыу, ярарға тырышыу. [*Зөһрә*:] *Ун өсөнсөлә лә, башҡорттарҙыҡында ла йә үҙе буржуй, йә буржуазия **икмәгенә май яғыусылар.*** (А. Таһиров.)

**икмәк өҫтө.** Ниҙелер раҫлап, ант иткәндә әйтелә. *Мин иларҙай булып танам: — Яҡты ҡояш, **икмәк өҫтө!** Әйтмәнем, — тим.* (М. Кәрим.) *Валлаһи, **икмәк өҫтө.** Иәннәт шулдыр, ахыры!* (Н. Үстүн. Ш. Мәхмүтов тәрж.)

**икмәк серетеү.** Эшләмәйенсә, мал тапмайынса бушҡа ашап ятыу. *Юҡҡа **икмәкте сереткән** бәндә мин.* (Ш. Бабич.) [*Ата*] *Улы, ҡыҙы елкәһендә Үгеҙ кеүек елкә менән **Икмәк серетеп** ята!* (С. Кулибай.)

**икмәк-тоҙ бүлешеү.** Бик дуҫ булыу, бөтә нәмәне уртаҡ итеү. *Мин нисәмә йылдар уларға иптәштәрсә, хатта дуҫтарса ышаныр, күңел ихласлығымды биреп йәшәнем, **икмәк-тоҙ бүлештем,** фекер уртаҡлаштым.* (М. Кәрим.)

**икмәк-тоҙлоҡ белеү.** Ят телде аҙ-маҙ аңлау, аралашырлыҡ белеү. *Электән **икмәк-тоҙлоҡ** та русса белмәгән ... крәҫтиән балалары өсөн был нәмәне аңлау, белеү сикһеҙ ауыр булды.* (М. Ғафури.)

**икмәк-тоҙ менән** [ҡаршы алыу]. Ҙур хөрмәт менән (*ҡаршылау*). *Ауылдың байҙары аҡтарҙы **икмәк-тоҙ менән** ҡаршы алдылар.* (С. Ханов.)

**икмәк-тоҙом — яҡты йөҙөм.** Әллә ни һый булмаһа ла, ихлас ҡабул итеүҙе белдергәндә әйтелә.

**икмәклегенә (икмәк шүрлегенә) менеп төшөү** *һөйл.* Бер аҙ биргеләп, туҡмап алыу.

**ил ағаһы.** Дәрәжәле, абруйлы ир кеше.

**ил аралау.** Халыҡ араһында йөрөү, кешеләр менән киң аралашыу.

**ил ауыҙына иләк ҡаплап булмай.** Бөтә кешене һүҙ йөрөтөүҙән, һөйләүҙән туҡтатып булмай. — ***Ил ауыҙына иләк ҡаплап буламы!** Ҡаранай ҡабат өндәшмәне.* (Б. Асылғужа.)

**ил аяғы һил булыу.** Ҡараңғы төшөп, кеше йөрөмәс булып, тынлыҡ урынлашыу.

**илдә бер.** Бик хөрмәтле, мәртәбәле кеше хаҡында.

**илдән сыҡҡан.** Боҙоҡлоғо, яманлығы менән сиккә еткән, эшлектән сыҡҡан. *Илдән сыҡҡан алдаҡсы. Илдән сыҡҡан уғры.*

**илла-алла <ҡырҡ мулла> менән.** Көскә, көс-хәл менән, саҡсаҡ (*ниҙелер башҡарыу, еңеп сығыу*). *Иәшен бәргән һайын беҙҙең былай ҙа **илла-алла менән** генә торған өйөбөҙ дер ҡалтырай.* (Ә. Вәли.) *Улы Исхаҡ та, быйыл **илла-алла менән** кәләш алып бирәбеҙ тип торғанда, һуғышҡа ҡыуылып китеп барҙы.* (Һ. Дәүләтшина.) [*Оло ағай*] *көс-хәл менән һыу өҫтөнә ҡалҡып йөҙөргә лә хәле ҡалмай, энеһе ағастар ташлап, **илла-алла ҡырҡ мулла** менән саҡ сыға.* (Әкиәттән.)

**ил өҫтөндә имән сөй.** Үҙен бик ҡәҙерле, хөрмәтле һанаған (*күберәк һауаланып маташҡан кешегә ҡарата асыу менән әйтелә*). *... Шаһиәхмәт ҡайнаға **ил өҫтөндә имән сөймө** әллә ул хәтле, атаң артағы түгел дәһә. Сәлимгәрәй, Әхмәҙиҙең һүҙенә ҡаршы төшөп: — Һеҙ генәме әллә **ил өҫтөндә имән сөй!** Беҙҙең дә гөбөрнатырҙы һыйларлыҡ хәлебеҙ бар.* (Ж. Кейекбаев.)

**ил өҫтөндә сыпсыҡ үлмәй.** Илгә ылығырға, таянырға кәрәклекте белдерә. *Һеҙ халыҡҡа тәүҙә һүҙ ҡатығыҙ, **ил өҫтөндә сыпсыҡ үлгәне юҡ** — ҡайтығыҙ һеҙ тиҙерәк, тик ҡайтығыҙ, ҡайтығыҙ.* (С. Ғәбиҙуллин.)

**иләк ауыҙ** *һөйл.* Сер тотмаған, ишеткән-белгәнен һөйләп йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә. — *Эй, бынауы Ямал **иләк ауыҙ** ҙа инде. Райком секретары алдында хәбәрҙе һалды ғына.* (М. Тажи.) *Ауыл — **иләк ауыҙ**... Беҙҙең хаҡта ғәйбәт китте урам буйына.* (Ғ. Әмири.)

**иләк аша үткәреү.** Бик ентекләп, һәр яҡлап тикшереү.

**иләк менән һыу ташыу.** Файҙаһыҙ, мәғәнәһеҙ эш менән булыу. *...Тормошта күпме кешеләрҙең ғүмере әрәмгә үтә — йә ул асылған ишекте асып йөрөй, йә бушты бушҡа бушатып, **иләк менән һыу ташып**, йә ҡомдан арҡан ишеп, донъяға үҙен ошо арҡан менән генә бәйләп ҡуя...* (Р. Ғарипов.)

*син. кар.*: бушты бушҡа ауҙарыу.

**иләктән силәккә (силәктән иләккә) бушатыу.** Файҙаһыҙ, буш эш менән булыу.

*син. ҡар.*: бушты бушҡа ауҙарыу.

**иләнмәгән-һуғылмаған, ҡайным, һиңә бер ыштан (күлдәк).** Булмаған, булыр-булмаҫы билдәһеҙ нәмәне вәғәҙә итеүгә ҡарата шаяртып әйтелә. [*Зөбәржәт*:] — *Атаһы, талаш булмаһын өсөн, миңә үгеҙҙе табырға кәрәктер, бәлки? «**Иләнмәгән-һуғылмаған, ҡайным, һиңә бер ыштан**», тигәндәй.* (М. Әпсәләмов.)

**иманға ултыртыу** *кемде.* Тәртипкә килтереү, һабаҡ биреү. *Юҡ-барҙы лығырлағандан һуң мин, яйын табып, быларҙы **иманға ултыртыу** ниәте менән ғибрәтле, кинәйәле вәғәз һөйләргә керештем.* (М. Кәрим.)

**иманы(м) камил.** Үҙ эшенә, маҡсатына, ҡарашына ышанысы нығ булыуын белдергәндә әйтелә. *Бына күрерһең, бер-ике йылдан минең исем элеккенән дә юғары яңғыраясаҡ — быға **иманым камил**.* (Й. Солтанов.)

**иман(ды) һатыу (йотоу, юғалтыу).** Оятты, намыҫты юғалтыу. *Һаҡалым билемә етеп, 60 йыл буйына тотҡан **иманымды йотоп** алдар хәлем юҡ.* (Т. Хәйбуллин.) *Был Имаиҙың ғына эше булыр. Бер тин тиһәң, **иманын һата**, йөҙө ҡара, күн бит.* (Һ. Дәүләтшина.) *Атайым уны* [*Заһитты*] *ҡарғай. Теге донъяла ла рәхәт күрмәһен, ти... — Ниңә ҡарғай? — Алтын йыуған урыҫтарға **иманын һатҡанға**. Ниғмәтулла баиҙың өйөн үртәп, уны асыуландырғанға.* (Я. Хамматов.)

**иманын уҡытыу** *кемдең, һөйл.* Бик ҡаты яза биреү, тиргәү йәки туҡмау. *Разия апай саҡырта башлаһа, **иманыңды уҡытыр** ине.* (К. Кинйәбулатова.) *Ҡунаҡ ашы ҡара-ҡаршы булһын. Йә әле, бер көнгө эше өсөн* [*Ғабдрахмандың*] ***иманын уҡытайыҡ**.* (И. Ғиззәтуллин.)

*син.*: кәрәген биреү, тетмәһен тетеү.

**иманы юлдаш булһын.** Үлгән кешегә теләк рәүешендә әйтелә. [*Тимерғәле*:] *Бик ир-егет ине мәрхүмең. **Иманы юлдаш булһын**.* (Һ. Дәүләтшина.)

**имәндә икән сәтләүек** *һөйл.* Билдәле булған нәмәне яңылыҡ итеп һөйләгән кешегә ҡарата көлөп әйтелә.

**имән кеүек.** Бик таҙа, ныҡлы кәүҙәле. *Ҡарттар әйтмешләй, айыу кеүек ауан, **имән кеүек** таҙа инем мин йәш саҡта.* (Һ. Дәүләтшина.) *Алтмышты ҡыуа барһа ла, Әбделкәбир ағай **имән кеүек** мыҡты ине.* (Ф. Исҫәнғолов.)

**инер тишек тапмау.** Ҡайҙа ҡасырға, йәшенергә белмәү (*ғәҙәттә, берәй эш-ҡылыҡ өсөн оят булғанда әйтелә).*

**инсе теләү.** Ырым буйынса: балаларҙың ҡолаҡ арты һыҙлағанда, боҙолғанда, берәй мал йә тауыҡ һуйып, шуның ҡанын яраға һөртөү.

**инән-ҡанан булыу.** Ҡараңғылы-яҡтылы мәл етеү. *Иртә менән, **инән-ҡанан булғас**, Ташбатҡан ауылының ҡарты-йәше,*

*олоhо-кесеhе Әхмәҙи урамына айыу күрә килделәр.* (Ж. Кейекбаев.)

**инәнән тыума.** Шыр яланғас. *Теге ҡыҙ быны бер ҙә әҙәмгә hанамай. Йәй көнө, Әлимде эйәртеп, hыу буйына бара ла, уның алдында* ***инәнән тыума*** *сисенеп, hыуға төшөп китә.* (С. Агиш.) *Тиҙҙән йылым да әҙер булды. Балыҡсылар ҙа* ***инәнән тыума*** *тигәндәй сисенделәр.* (Р. Ғабдрахманов.)

**инә hөтө.** Тырнаҡҡа төшкән аҡ тап (*бәхет төшкәнде белдерә, имеш*).

**инәhенән-атаhынан төшөп (инәhен-атаhын ҡалдырмай)** [әрләү, тиргәү]. Бик тупаҫ, әшәке hүҙҙәр менән хурлау.

**интизар булыу.** Зарығыу, зарығып көтөү. *Күптән күрергә* ***интизар булып*** *йөрөгән шагирым Мәжит Ғафуриҙы яҡшылап ҡарарға тырыштым.* (С. Кулибай.)

**инhә бар сыҡhа юҡ.** Мәшәкәт тыуҙырмай торған, зыянhыҙ кеше тураhында. *Мин бит, барhам, Ғилаждың донъяhын ҡоротороға бармайым.* ***Инhәм бар сыҡhам юҡ.*** (Ж. Кейекбаев.)

**иңе килhә буйы килмәй, буйы килhә иңе килмәй.** Етешhеҙ тормоштан интеккәнде белдергәндә әйтелә.

**ипкә (ипкә-hапҡа) килеү.** 1. Бер ыңғайға, тәртипкә килеү, ыңғайлау. *Ул [Ныязғол] уйҙарын тупларға тырышhа ла, улар* ***ипкә килмәне.*** (Һ. Дәүләтшина.) *Машина тауышы туҡтағас, донъя бөтөнләй hилгә ҡалды. Турысай ҙа* ***ипкә килде.*** (Т. Хәйбуллин.)

2. Тейешле ҡулайға, яйға килеү. *Саҡай башын ҡалҡытты, тормаҡ булды, аяҡтары* ***ипкә килмәне.*** (Б. Бикбай.)

3. Кеше ыңғайына килеү, нимәгәлер күнеү. *Иллегә еткәс, ирҙәр ҙә* ***ипкә килер.*** (Мәҡәл.) *Председателе Фазылов* ***ипкә килмәй*** *тора.* (М. Кәрим.) *Булат улай ҙа hөйләп ҡараны, былай ҙа, ләкин* ***ипкә килтерә*** *алманы бисәhен.* (Б. Бикбай.)

**ир арыҫланы (солтаны, азаматы).** Батыр, тәүәккәл ир-атҡа ҡарата маҡтау hүҙе итеп ҡулланыла. *Атайыңа, Хисамый дуҫҡа, оҡшамағанhың hин, юҡ. Вәт* ***ир арыҫланы*** *ине ул, исмаhам, сылата ла, киптерә лә белде!* (Б. Бикбай.) *Егет түҙмәгән: — Бына минең hунар атымды ал... Ҡошомдо ла, — тигән. — Һай, уҙаман егет,* ***ир азаматы*** *икәнhең, —* [*тигән Таңатар*]. (Ә. Вахитов.)

**ир бауыры.** Ысын ир холоҡло, ваҡай түгел. *Үҙе* [*ҡустым*] ***ир бауыры*** *булып сыҡты, тик ҡылтым бисәhе генә эре ҡыланып йәнде үртәне.* (Ә. Бикчәнтәев.)

**ирек асыу** *иҫк.* Күңел асыу, иркенләп хозурланыу. *Сикhеҙ киң күк йөҙөн сыбарлаған Иондоҙҙарға ҡарап* ***ирек асам.*** (Д. Юлтый.) ***Ирек аса*** *торған киң йәйләүҙәр Беҙҙең ҡулдан сығып китте бит.* (Халыҡ йырынан.) *Арыҡ тәндәренән, төпкә батҡан күҙҙәренән үк уларҙың* [*малайҙарҙың*] *баҫыу ҡапҡаhы төбөнә* ***ирек асыр*** *өсөн генә сыҡмағандары күренеп тора.* (Ф. Иҫәнғо-

лов.) *Баш һунарсы көн дә кейек атҡан, һунарҙан ҡайтҡас, ҡурай уйнап, йырлашып* ***ирек исҡан***. (Әкиәттән.)

**ирекле ҡош кеүек.** Ирке сикләнмәгән, ысын иректә булған. *Ҡыҙ булғансы, булһам* ***ирекле ҡош***. *Тотҡон булмаç инем донъяла.* (Б. Бикбай.)

**ирекһеҙҙең көнөнән.** Башҡаса мөмкинлек булмағанға, сараһыҙҙан.

**иреп төшөү.** Йомшап ҡалыу, мөкиббән булыу. *Тик тырыштым* ***иреп төшмәçкә*** *мин Килеп китер шатлыҡ ҡаршында.* (М. Кәрим.) *Йылы һүҙҙән ветеринар врач та* ***иреп төштө***. («Сов. Башҡ.»)

**ир етеү.** Үçеп етеп, балиғ булыу. *...Балалар* ***ир етә алманы***, *аяҡҡа баçҡан береһе үлә барҙы.* (Б. Бикбай.) *Хәҙер Сәхиулла,* ***ир етеп***, *ҡатын, бала-сағаһы менән үҙе донъя көтөп тора.* (З. Биишева.)

*син.*: ир ҡорона инеү.

**ир йораты.** Ниндәйҙер етешһеҙлеге булған ир-атты кәмһеткәндә әйтелә. *Гөлйөҙөм арттарынан әйәреп тирмәнгә табан бөксәңләгән сибек кәүҙәле Латиптың ҡабырғаһына төрттө: — Атағатаҡ!* ***Ир йораты***. *Һин ҡал, — ҡаршыла.* (Ф. Исәнғолов.)

**ир йөрәкле.** Ысын ирҙәргә хас холоҡло. *Хаммат үҙенең ҡырҡыу, талапсан, ләкин ғәжәп ғәҙел холоҡло,* ***ир йөрәкле*** *әсәһен ныҡ ярата, ысын күңелдән хөрмәт итә.* (З. Биишева.)

**ир ҡаҡҡанды мир ҡаға.** Күмәк кеше ситләткәндә, әйтелә. *Тай ҡаҡҡанды, ат ҡаҡҡанын белдем,* ***ир ҡаҡҡанды*** *илдә* ***мир ҡаға***! (З. Йәнбирҙина.)

**ир ҡашҡаһы.** Арҙаҡлы, абруйлы ир кеше... «*Дуçлыҡ*» *тигән хәҡиҡәтте әйтеү өсөн дә* ***ир ҡашҡаһы*** *булыу кәрәкмәйҙер.* (Р. Ғарипов.)

**ир ҡорона инеү (тулыу, етеү).** Үçеп етеп, балиғ булыу. *Ҡайһы берәүҙәр Хөсәйенде ҡыҙғанды: — Бахыр ғына, ата-инәһенән йәшләй икәүҙән-икәү етем ҡалып,* ***ир ҡорона инеп*** *бөткәйнеләр бит әле ул...* (Ж. Кейекбаев.) *Егеттәр* ***ир ҡорона*** *тулдылар. Бер-бер артлы өйләнә башланылар.* («Сов. Башҡ.») *Ун дүрт йәштән Аҡъюл ҡалъян аçып, саҡса тағып йөрөнө урманда.* ***Ир ҡорона еткән*** *аусыларҙан ҡалышманы кейек ҡыуғанда.* (Р. Бикбаев.)

*син.*: ир етеү.

**ир тиһәң, әү тиер** *мыçҡ.* Ир-атты кәмһеткәндә, меçкенгә һанағанда әйтелә.

**иртәгәһен ишәк ҡайғыртҡан.** Нимәнелер алдан уйлай белмәгән, ғәмһеҙ кешегә ҡарата әйтелә. *Бөгөнгөһөн уйлайым, иртәгәһен буйлайым,* ***иртәгәһе — ишәккә***, *тип ҡулым һелтәп ҡуймайым.* (Р. Ғарипов.)

**иртәгә байрам түгел.** Бөгөнгө ялды, күңел асыуҙы тиҙерәк тамамларға, буласаҡ эште онотмаçҡа саҡырыуҙы белдергәндә әйтелә. *Һорауҙар булманы. Кемдер берәү: —* ***Иртәгә байрам түгел***, *һөйләргә күсергә кәрәк! — тине.* (С. Агиш.) [*Мәғфүрә*:] —

*Әйҙәгеҙ, булмаһа, йоҡлайыҡ.* ***Иртәгә байрам түгел бит.*** (Һ. Дәүләтшина.)

**исемгә* тап (кер) төшөрөү**. Яманлыҡ эшләп, насарлыҡ менән үҙеңә хурлыҡ килтереү. *Райкомға хәбәр итһәң, Маһираға әләгәсәк, әйтмәһәң, үҙеңдең* ***исемеңә кер төшә.*** *Нишләргә?* (Х. Ғиләжев.)

[***Исем** — *ғәр.* гонаһ, яҙыҡ.]

**исеме генә ҡалыу**. Үҙенең төп сифаттарын юғалтһа ла, элеккесә аталып йөрөгән нәмәләр, күренештәр хаҡында әйтелә. *Йорт тулы әрем, алабута, ҡырмауыҡ үҫеп ултыра. Ихата ситәненең* ***исеме генә*** *тороп* ***ҡалған.*** (Д. Исламов.) *Шул золомдар тамам бөтөп, реакцияның* ***исеме ҡалмаҫ*** *ер йөҙөндә.* (М. Ғафури.)

**исеменә күрә есеме**. Ҡылығы, сифаттары тышҡы ҡиәфәтенә тап килгән кешегә ҡарата әйтелә (*күберәк кире яҡты тасуирлағанда*).

**исем(е) күтәреү**. 1. Берәй хәлгә төшөү. *Тағы бер ҡатлам йәш килендәр, йәш кәләштәр һалдатка* ***исеме күтәрҙеләр.*** (Һ. Дәүләтшина.) *Шуны ла белмәгәс, һунарсы* ***исеме күтәреп,*** *төлкө алыу хаҡында хыялланып йөрөүҙең ни кәрәге бар...* (М. Тажи.)

2. Насар дан сығыу, хурға ҡалыу. *Донъяла яҡшы кеше булып йөрө-йөрө лә насар* ***исем күтәреп*** *үл, имеш.* (Б. Бикбай.) *Сурағол һымаҡ ярлы, гөрбөян* ***исемен күтәрә*** *алмам инде.* (Т. Хәйбуллин.)

**исеме менән атау** *нимәне*. Дөрөҫлөктө туранан-тура әйтеү.

**исемем <фәлән> булмаһын**. Берәй эште башҡарыуға тәүәккәллек, ныҡлы теләк белдергәндә әйтелә. *Этҡол бай: — Бына, ант итеп әйтәм, әгәр ҙә Сурағолдоң башын киҫеп килтермәһәм,* ***исемем*** *Этҡол* ***булмаһын,*** *— тип бүркен ергә орҙо.* (Т. Хәйбуллин.) «*...Сәлимә еңгәмде Байышҡа ебәрһәмме, төптө ир булып йәшәмәйем, ошо бүркемде үк киймәйем,* ***исемем*** *Айҙар* ***булмаһын***!» (Һ. Дәүләтшина.)

**исеме(ң) юғалыр (ҡалыр)**. Кешенең берәй насар ғәҙәтенә, ҡылығына ҡарата шелтә белдергәндә әйтелә. *Әйткәнде тиҙ генә тыңлай һалмаһа, уның* ***исеме юғалыр.*** (Һөйл.)

**исем өсөн**. Иҫәп-һан өсөн генә, юрый ғына, яһалма рәүештә (*ниҙер эшләү*). *Фельдшер ҡалған никруттарҙы ла* ***исем өсөн*** *өҫтән-мөҫтән генә ҡара(ны).* (Я. Хамматов.) *Стакандар күтәрәләр.* ***Исем өсөн*** *Федор ҙа эскән була.* (С. Мифтахов.) *Һүҙгә йомарт күсерҙең ҡулында бөгөн ни эшләптер дилбегә бик һүлпән ҡуҙғала, сыбыртҡыһы ла аттарҙың арҡаһын онотҡанда бер,* ***исем өсөн*** *генә, һыйпаштырып ала.* (Н. Ғоголь. Ф. Иҫәнғолов тәрж.)

**исем сығыу**. Насар яҡтан дан таралыу, хурға ҡалыу. *Әсәһе Санияны ғына бер аҙ һаҡлай. Ҡыҙ кеше бит, әллә ни* ***исеме сығып*** *ҡуйыр, тип ҡурҡа.* (С. Ағиш.) **Исем сығарыу**: *Алмаҫ һәм минең* ***исемемде сығарып*** *йөрөр булһаң, мине күреү түгел, хат та яҙма...* (М. Ғафури.)

**исем һатыу.** 1. Абруйҙы төшөрөрлөк хәбәр таратыу. *Сөнәғәт Ташбатҡан ауылындағы айыу урлау вәҡиғаһын һөйләргә тип ауыҙ ҙа асып ҡуйғайны, ләкин үҙенең киләсәктә ҡайны булаһы кешенең, **исемен һатырға** теләмәне.* (Ж. Кейекбаев.) — *Маҡтайһың колхозды, күтәрмәк булаһың, ә унда кешеләрең уның **исемен һаталар**.* (Б. Бикбай.)

2. Ғәйбәт һөйләп, яманатын сығарыу. — *Көпә-көндөҙ килеп, минең **исемемде һатырға**, әҙәм көлкөһөнә ҡалдырырға итәһеңме?* — *тип ҡаршыланы* [*Сәрби Тимерғәлене*]. (Я. Вәлиев.) *Үҙе сәсрәп китһен ине лә, **исемде һата** бит әле...* (Һ. Дәүләтшина.)

*син.*: данын һатыу.

**иҫ-аҡыл китеү.** Ныҡ аптырау, ғәжәпкә ҡалыу. *Ҡайҙан һиндә шундай дәрт?.. **Иҫ-аҡылым китеп**, тыңлап торам ... һандуғасым.* (Р. Ғарипов.) *Тыңлаусыларҙың **иҫе-аҡылы китте**.* (Х. Сафин.)

**иҫ-аҡыл ҡороу (бөтөү).** Ниндәйҙер ауыр хәлдән сыға алмай яфаланыу. *Бабай, тағы ла нығырыраҡ ҡайғырып, **иҫ-аҡылы ҡороған**.* (Әкиәттән.)

**иҫ алыу.** 1. Аңға килеү, һушты, зиһенде йыйыу. *Бер аҙ **иҫ алып**, ян-яғыма ҡараһам, бер кем дә юҡ.* (Т. Баишев.)

2. Хәл йыйыу, бер аҙ көс туплау.

**иҫ белеү.** Бер аҙ үҫә төшөп, тирә-йүнде аңлай башлау. *Ай үҫәһен көн үҫеп, Балалары **иҫ белгән** ...* (Эпостан.) *Шәүәли биш йәшкә етеп, **иҫ белә** башлаған саҡтар...* (Б. Бикбай.) *Үҙе **иҫ белгәндән** бирле Ныязғол өйөнән күргән нужалары* [*Айбулаттың*] *күҙ алдына килде.* (Һ. Дәүләтшина.)

**иҫ белмәй** [йоҡлау, ятыу]. Бик ҡаты, онотолоп китеп. *Ауыр эштән арыған малайҙар **иҫ белмәй** йоҡлайҙар ине.* (Й. Мостафин.)

**иҫе дөрөҫ** *кемдең*. Уйлау, фекер йөрөтөү һәләте боҙолмаған, үҙ аңында. *Иҫерһә лә **иҫе дөрөҫ**, туп-тура быҙауҙар өйөнә китте.* (Б. Бикбай.)

**иҫенә <лә> инеп сыҡмау** *кемдең*. Ни тураһындалыр бөтөнләй уйламау. *...Һәр ваҡыт була торған бындай тәбиғи ҡыйынлыҡ **иҫкә лә инеп сыҡмай**.* (С. Агиш.) *Иҫереп йығылыу Ҡуҙыйкүрпәстең **иҫенә лә инеп сыҡмай**, ти.* (Эпостан.)

**иҫең бар булғыры (ҡороғоро).** Ниҙелер онотоп, иҫкә төшөрә алмай үртәлгәндә әйтелә. *Эй, **иҫең ҡороғор**, саҡ ҡына онотмағанмын, йә!* (Һ. Дәүләтшина.)

**иҫе(ң) киткән икән иҫке сәкмәнгә.** Берәй кешенең ҙур яңылыҡ тип хәбәр итеүен юҡҡа сығарырға теләгәндә әйтелә. ***Иҫең киткән икән иҫке сәкмәнгә***, — *тине* [*Ишбулды ағай*], *беҙҙең башҡортта ат урлау бер бөгөн килеп сыҡҡан йоламы ни?* (Ғ. Әмири.) *Минең атай хәҙер инженер, тип, Меңенсе ҡат әйтә Азамат. **Иҫе киткән иҫке сәкмәнгә**, ә! Уны инде күптән беләбеҙ.* (Ш. Бикҡол.)

**иҫеңә төшөр.** Эш-ҡылығыңды һуңынан уйлап үкенерһең әле, тип киҫәтеүҙе белдергәндә әйтелә. *Әле **иҫеңә** төшмәһә лә,*

*һыуынан* ***төшөр*** *әле.* (Халыҡ йырынан.) *Яңы* ***иçенә төшкән*** *икән Ныяҙголдоң! Башта уҡ әҙәмгә һанап, үҙе яусылатҡан булһа, был көнгә, был хурлыҡҡа төшмәй инек.* (Һ. Дәүләтшина.)

**иç инеү (кереү).** Аңға килеү, тирә-йүнде тойоу хәленә килеү. *Бер ваҡыт,* ***иçе инеп****, ергә ҡараһа, урман күренә.* (Әкиәттән.) *Кискә табан Йәмиләгә* ***иç кергәндәй*** *булды.* (Ф. Иçәнғолов.)

**иç йыйыу.** Зиһенде, уй-фекерҙе туплап алыу. ***Иç йыйып*** *йөрөгөм бер аҙ бүлмәмде буйлап уйланып, һайрашып ҡыҙҙар менән һөйләгәндәремде уйға алып.* (Ш. Бабич.) [*Ғәбделхәкимов*] ***Иç йыйып*** *өлгөрмәгән бригадирҙы исемләп торғоҙоп, яңынан шаңҡытты.* (Я. Вәлиев.)

**иçке ауыҙҙан яңы һүҙ (хәбәр).** Көтмәгәндә ысҡындырылған хәбәргә аптырау, оҡшамаған һүҙгә ризаһыҙлыҡ белдергәндә әйтелә. — *Бынағайыш!* — *тине әбей.* — ***Иçке ауыҙҙан яңы һүҙ*** *тигәндәй, ул һуғыш әллә ҡарсыҡтарға кәрәк тиһеңме?* (Х. Мохтар.) *Ҡыҙыл Армияға, связға, күгәрсендәр менән йөрөргә,* — *ти апаным. Вот быныһы* ***иçке ауыҙҙан яңы һүҙ.*** (Н. Ҡәрип.) [*Гөлъямал*:] — *Бына һиңә* ***иçке ауыҙҙан яңы хәбәр****! Бында Хисмәтулланың ни ҡыçылышы бар?* (Я. Хамматов.)

*син.*: иштең ишәк сумарын.

**иçке ауыҙ(ға) яңы аш <ауырыу, һыҙлау минән ҡас>.** Яңы өлгөргән емеш-еләкте, тәүге иген икмәген тәүләп ауыҙ иткәндә әйтелә торған теләк. *Ҡарт-ҡоролар, ауыҙ итеп, һындыра эçе ҡалас: «Сабыйҙар бәхетенәндер.* ***Иçке ауыҙға яңы аш!****»* (Р. Хисаметдинова.)

**иçке ауылдан яңы хәбәр** *мыçҡ.* Күптән билдәле хәлде яңылыҡҡа һанап һөйләгән кешегә ҡарата әйтелә.

**иç китеү.** 1. Аңды юғалтыу. *Бәһлеүән байтаҡ ваҡыт* ***иçе китеп*** *ята.* (Әкиәттән.)

*син.*: иçтән тайыу (яҙыу), һуштан яҙыу, аңды юйыу.

2. *кемгә, нимәгә.* Таң ҡалыу; һоҡланыу. *Уйланиһәң барын, тоттон алып,* ***иçең китә*** *бөйөк еңеүгә.* (Ғ. Амантай.) *Минең ҡатындың күҙҙәренә бөтә кешенең* ***иçе китә*** *ине.* (С. Ағиш.) *Утяголов Тимербулаттың был тиклем атаһына оҡшағанына* ***иçе китте.*** (Һ. Дәүләтшина.) Ғәжәпкә ҡалыу, аптырауға төшөү. *Һуғыш йылдарында ауылдың бөлгөнлөгөн күреп, Садрисламдың* ***иçе китте.*** (Ф. Иçәнғолов.) *Шундай көтөлмәгән осрашыуҙан* ***иçем китеп*** *ултырам.* (Н. Мусин.)

*син.*: хайран ҡалыу, шаҡ ҡатыу, ике күҙ дүрт булыу.

3. *нимәгә.* Артыҡ ҙур иғтибар биреү, ныҡ бирелеү. — *Аҡсаға* ***иçе киткән*** *кеше кәрәкмәй миңә. Мин ундайҙарҙы яратмайым* [*тине ҡыҙ*]. (И. Ғиззәтуллин.) *Тәүҙә иплән кенә өгөтләп ҡарарға булды* [*Фәриҙә*:] — ***Иçең китте лә*** *баһа шул ергә. Улай беҙҙән ҡасырға уйлаһағыҙ, ана, өçтәге туғайға һалығыҙ.* (Р. Солтангәрәев.)

**иç киткес (китерлек, китмәле, китерҙәй).** Эше, сифаты менән оло иткесы; һоҡланғыс. *Ҡая өçтөндәге күл* ***иç киткес*** *гүзәл күл.*

*Тик ул күлдән кешеләр бер тамсы ла һыу эсә алмаған.* (З. Биишева.) *Ишкилде* ***иҫ киткес*** *бейей, Бер һикерә, бер сүгәләй.* (Б. Бикбай.) *Мин, нисек әйтһәң дә, бөтөнләй үк ауыл малайы түгел, ыңды-һулды айыра беләм... Бик* ***иҫ китерлек*** *нәмәләр осрағанда, үҙемде нисек тә ҡулға алырға тырышам.* (С. Агиш.) ***Иҫ китерлек*** *үҙгәрештәр килде, тормош балҡый башҡорт Димендә.* (С. Исмәғилев.) *Аҫалы балаҫ* ***иҫ китмәле****, күҙҙең яуын алырлыҡ ине.* (Ф. Рәхимғолова.)

**иҫ китмәү.** 1. *кемгә, нимәгә.* Бер ҙә иғтибар итмәү, аптырамау. *Егет, быға тамсы ла* ***иҫе китмәй****, һаман шул бер көйө генә туйтаңлап атлауын белде.* (Й. Солтанов.) *Дөрөҫөн әйткәндә, Нуриәхмәттең ҡарамаһына минең* ***иҫем китмәй.*** (И. Абдуллин.) *Ямғырға, көндөң болотло булыуына һис тә* ***иҫтәре китмәй*** *һандуғастар сутылдай.* (Ш. Янбаев.)

2. *нимәгә.* Ғәмһеҙлек күрһәтеү, һис тә бошмау. *«Их, Ғәлиәкбәр ҙә тырышһын ине. «Яҡшы»ға ғына уҡыһын ине», — тип теләктәр теләнем. Ә уның бер ҙә* ***иҫе китмәне****, киреһенсә, минән көлдө генә.* (З. Биишева.) *Эшселәр араһында йөрөгән асыу һүҙен ишеткәс, уның [управляющийҙың]* ***иҫе лә китмәне.*** (Ж. Кейекбаев.) *Өләсәһе менән булған ошо хәл бер нәмәгә лә* ***иҫе китеп*** *бармай торған Гүзәлде лә уйланырға мәжбүр итте.* (Ф. Рәхимғолова.)

*син.*: уйлап та бирмәү.

**иҫкә алыу.** 1. Хәтергә төшөрөү, яңынан иҫкә килтереү. *Шулай ҡарт булһам да, йәш ваҡыттағы әңгәмәләрҙе* ***иҫкә алып*** *ҡуйыла бит.* (Т. Хәйбуллин.) *... Һеҙҙе* ***иҫкә алып****, күҙ йәштәрен түгәбеҙ.* (Д. Юлтый.) *Берәүҙәр икенселәрҙең тормошо өсөн үлә, икенселәре рәхәтләнеп йәшәп алып китә. Хатта уның ҡасандыр ошо донъяла булыуын да* ***иҫкә алып*** *тормайҙар.* (Р. Солтанғәрәев.)

2. Иҫәпкә, иғтибарға алыу. *Яҡшы ғалим нәсихәтен* ***иҫкә алмайҙар****, хаҡтан ҡурҡмаҫ, әҙәмдәрҙән аянмаҫтар.* (Бәйеттән.) *Аяныс тәгәрләү түбән —* ***Иҫкә ал****, әҙәм!* (В. Әхмәҙиев.) *...Ҡыҙыл кирбестән һалынған пожар бинаһын* ***иҫкә алмағанда****, [ауыл] гел бер төрлө ваҡ ҡына ағас йорттарҙан тора.* (М. Тажи.)

3. Билдәләп, күрһәтеп үтеү. *Был һүҙҙәр, бигерәк тә үлемде* ***иҫкә алыу****, балаларға тәьҫир итте.* (С. Ағиш.)

**иҫкә <лә> инеп сыҡмау.** Ни тураһындалыр бөтөнләй уйламау, башҡа килмәү. ... *Һәр ваҡыт була торған быйндай тәбиғи ҡыйынлыҡ* ***иҫкә лә инеп сыҡмай.*** (С. Ағиш.) *Александр Тимофеевичтың ... үҙе етәкселек иткән предприятиены алға ебәреү* ***иҫенә лә инеп сыҡманы.*** («Сов. Башҡ.»)

**иҫкә килеү.** 1. Һушһыҙ хәлдән сығыу, аңға ҡайтыу. *Бер нисә минуттан Түрәбай* ***иҫкә килде.*** (Т. Хәйбуллин.) / Аҡылға ҡайтыу. *Яланбикә,* ***иҫкә килмәйенсә****, ҡыш буйы өйҙә ултырҙы.* (Һ. Дәүләтшина.) *Ғәмилә* ***иҫенә килде.*** (Я. Хамматов.)

*син.*: һушҡа килеү.

2. Аптырау хәленән сығыу. *Хөрмәт, **иҫенә килә алмай**, аңшайып байтаҡ торҙо.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Ошо ҡаты бәрелештән һуң дошмандар ҙа **иҫтәренә килә алмайҙар**, өңдәренә боҫалар.* (Й. Солтанов.)

3. Уйға инеү, ни хаҡындалыр уйлай башлау. *Күҙ күреп йөрөгән дуҫтар Тороп ҡалды Өфөлә. Ләкин айырылыу һағышы **килмәне лә иҫемә**.* (Х. Ғиләжев.)

*син.*: башҡа килеү.

4. Яңылышлығыңды аңлап, төҙәлеү уйына килеү. ***Иҫеңә килерһең**, һуң булыр.*

**иҫкә төшөрөү.** 1. *кемде, нимәне.* Хәтерҙә яңыртыу, хәтергә, уйға килтереү. *Әлеге өс тюкты **иҫкә төшөрҙөм**.* (С. Агиш.) *Ул көндө **иҫенә төшөрһә**, Айбулатҡа әллә нисек, тормошта бер нужа ла ҡалмаған һымаҡ, еңел тойола.* (Һ. Дәүләтшина.)

2. *кемдең нимәне, кемде.* Кешенең хәтеренә килтереү; иҫләтеү. *Мин һеҙгә бер хажи әкиәтен **иҫегеҙгә төшөрәм**.* (С. Агиш.) *Тик вәгәҙәмде улар [балалар] үпкә менән **төшөрәләр** ҡайсаҡ **иҫемә**.* (М. Кәрим.) *Шул ҡараҡтарҙы **иҫкә төшөрҙөң** әле һин, Хәйретдин ҡустым.* (Б. Бикбай.)

3. Ни тураһындалыр уйлау, ҡайғыртыу. [*Өмөт*:] *Беҙҙең халыҡ ялҡау ҙа инде. Маяҡ ҡаҙауҙы ошо көнгә тиклем **иҫтәренә лә төшөрмәгәндәр** исмаһам.* (Д. Юлтый.)

**иҫкә төшөү.** 1. Хәтерләү, хәтергә килеү. *Туғандарым **иҫемә төшкәндә**, Бер-бер төндәр була йыл кеүек.* (Халыҡ йырынан.)... *Былтырҙан бирле кеҫәлә йөрөгән балдаҡ **иҫкә килеп төштө**.* (Т. Йәнәби.) *Шишмәкәй, тын, аҡрын, сеү, шаулама, Үткән ғүмерем, **иҫемә төшмәй** тор.* (Ш. Бабич.)

2. Эшләгән эштең, ҡылыҡтың насарлығын аңлап, кире яҡшыға ҡайтыу, төҙәтергә тырышыу. *Ҡыҙыҡайҙың **иҫенә бер төшөр** әле, үкенер...* (Б. Бикбай.)

3. Ниҙер эшләү уйы тыуыу.

**иҫкә төштө — һабан екте.** Уйлап-нитеп тормай, ҡапыл ғына бер уйға, ҡарарға килеү, эш ҡылыу тураһында. *Әбейе лә Ғиндулланы бына шулай, **иҫкә төштө — һабан екте**, ҡапыл ғына йылы өйөнән сығарып ебәрҙе.* (Я. Вәлиев.)

**иҫ(те) йыйыу.** 1. Аңға килеү, тирә-йүнде аңларлыҡ хәлгә килеү. *Харис бер аҙ **иҫен йыя алмай** ултырҙы.* (Ғ. Ибраһимов.) ***Иҫемде йыйғанда**, Сания ятаҡҡа инеп киткән ине.* (Н. Мусин.)

2. Фекер тарҡаулығынан сығыу, фекерҙе туплау. *Малайҙар, ... һин сығып киткәндә, **иҫтәрен йыя** алмай ҡалдылар.* (С. Ағиш.) *Туҡмалған ҡараҡ онотолоп бер ситтә ятып ҡалды. Аңҡы-тиңке торған кешеләр **иҫтәрен йыйҙы**.* (Ф. Иҫәнғолов.)

3. Үҫеп, аңлы була башлау. *Туғандарым үҫә, **иҫ йыя** төшкәс, уҡыр инем әле.* (Я. Вәлиев.)

**иҫте юғалтыу.** 1. Аңһыҙ хәлгә төшөү, һушһыҙ ҡалыу. *Түҙемғол шул уҡ ағас төбөндә етенсе көн инде үлем көтөп ята икән. Ул хәҙер бөтөнләй хәлһеҙ, **иҫен юғалтҡан**.* (Әкиәттән.)

2. Хәтерһеҙгә әйләнеү, хәтер йомшаҡланыу.

**иҫтән сығыу**. Онотоу, хәтерҙә һаҡламау. *Йәш саҡта күргәндәр бер ҙә* ***иҫтән сыҡмай.*** (Т. Баишев.)

*син.*: баштан сығыу.

**иҫтән яҙыу (ауыу, тайыу)**. 1. Һушты юғалтыу, иҫһеҙ хәлдә ҡалыу. *Бай аунап көлдөксәгә барып төштө...* ***Иҫтән ауҙы.*** (Т. Хәйбуллин.) *Мин, күрәһең, бик оҙаҡ ваҡыт* ***иҫтән яҙып*** *торғанмын.* (С. Агиш.) *Иығылып китә бала шунда* ***иҫтән тайып***, *Күсәккә һүҙ һөйләй был ибен табып...* («Бабсаҡ менән Күсәк».)

2. Хискә бирелеп, ныҡ тәьҫирләнеү. *Шул гүзәлде уйлай-уйлай* ***иҫтән тайып***, *Нисә көндәр ашап-эсмәй йөрөгән саҡтар*! (Ш. Бабич.)

**иҫтә (хәтерҙә) тотоу (һаҡлау)** *кемде, нимәне.* Онотмау, иҫләү. *Мине мәңге онотмаҫтар,* ***тоторҙар*** *һәр ваҡыт* ***иҫтә.*** (Д. Юлтый.)

*син.*: башта тотоу.

**иҫ үңгәләү**. Һушһыҙ ҡалыу, иҫһеҙләнеү. [*Ялал хажи*] *...Һәнәк һабы менән һелтәүенә Түрәбай,* ***иҫе үңгәләп***, *ултыра төшә.* (Т. Хәйбуллин.)

*син.*: иҫтән яҙыу, иҫте юғалтыу.

**иҫ-һуш китеү**. Ныҡ аптырау, ғәжәпкә ҡалыу. *Үлмәҫбикәнең һылыулығына Гарольдтың* ***иҫе-һушы китеп*** *ултырған, ти.* («Сов. Башҡ.»)

**иҫәбе-һаны (иҫәбе-хисабы) юҡ**. Бик күп. [*Баярҙың*] *мал-тыуарының* ***иҫәп-һаны ла*** *булмаған.* (М. Тажи.) **Иҫәбе-һанына сығҡкыһыҙ:** ***Иҫәбе-һанына сыҡмаҫлыҡ*** *күп ине ул көндө ылау.* (Н. Мусин.)

*син.*: һанап бөткөһөҙ.

*ант.*: бармаҡ менән генә һанарлыгк.

**иҫәп биреү**. Эш-ҡылыҡ өсөн яуаплылыҡ тойоп, сәбәбен аңлата алыу. *Тышҡа сыҡҡас, был турала үҙемә* ***иҫәп бирә алманым.*** (Д. Юлтый.) *Белмәйем, хәҙер мин был хаҡта үҙемә* ***иҫәп бирә*** *алмайым...* (Ғ. Әмири.)

**иҫәпкә алыу**. Иғтибарға алыу, һанлау (*күберәк юҡлыҡ формаһында ҡулланыла*). *Һөнәрсе, арыуын да, ауырыуын да* ***иҫәпкә алмай***, *эшләүен дауам иткән.* (З. Биишева.) *Шахта төбөнә төшөп еткәндә, ниндәйҙер шытырлаған тауыш ишетелһә лә, Күсәрбай ағай уны* ***иҫәпкә лә алманы.*** (Т. Хәйбуллин.)

**иҫәпкә бар, һанға юҡ**. Эше, сифаты йәһәтенән түбән, талапҡа яуап бирмәгән. [*Айыу*:] — *Ҡуян да булдымы мал*! *Бер һоғонорлоҡ ите лә юҡ, имеш. ...**Иҫәпкә бар, һанға юҡ**!..* (Ж. Кейекбаев.) *Клуб мөдире* ***иҫәпкә бар, һанға юҡ.*** («Сов. Бапгк.») *Күңел наҙы, керһеҙ һөйөүҙәр, борсолоуҙар, янып көйөүҙәр,* ***иҫәпкә бар, һанға юҡһың***, *тип, эстән генә көлөп йөрөүҙәр.* (С. Ғәбиҙуллин.)

**иҫәпкә һан**. Кәрәкккәнгә түгел, исем өсөн генә. *Иҫәпкә һан булыу.* ▬ *Тары һуңғы йылдарҙа* ***иҫәпкә һан*** *ғына булып йөрөтөлдө.* (Р. Низамов.)

**иҫәпте өҙөү** *кем менән*. 1. Эш, алыш-биреш өсөн түләп ҡуйыу.

2. Бәйләнеште, мөнәсәбәтте туҡтатыу, боҙолошоу. *Хужа менән* ***иҫәпте өҙҙөм****.* (Һөйл.)

3. Өмөтләнеүҙән төңөлөү, өмөттән яҙыу.

**иҫәп тотоу**. 1. Ниҙер эшләргә ниәтләнеү, план ҡороу. [*Рәшиҙә Сәғиҙәне*] *...* *ғәйепләргә* ***иҫәп тотҡайны****.* (М. Тажи.)

2. *кемгә, нимәгә*. Кемдеңдер ярҙамына йәки нимәгәлер өмөт итеү, таяныу.

**ит бүкәне (сүмәләһе, лаҡаны)** *һөйл., мыҫҡ.* Артыҡ йыуан кәүҙәле, һимеҙ кешегә ҡарата әйтелә. [*Сәлим*] *Ғәфү ит, Хафиза, анау* ***ит бүкәне*** *икән тип, танауыңа берҙе тондора яҙҙым бит.* (И. Ғиззәтуллин.) *Ҡара, Мөхтәбәр түгелме һуң? Ул бит!* ***Ит бүкәне*** *лә инде шул. Ҡалай баҡа кеүек һыҙылған.* (Ғ. Лоҡманов.) *...Рәтле икмәге менән шәкәре лә юҡ. Булһа ла бирмәй ебәргәндер инде,* ***ит сүмәләһе****, — тип мығырланы* [*Фәйзулла ҡарт Иыһанша кулак бисәһен әрләп*]. (Ғ. Ғүмәр.)

**итек башындай**. Кешенең бик бәләкәй икәнен һыҙыҡ өҫтөнә алғанда әйтелә (*күберәк бала-сағаға ҡарата ҡулланыла*). *Тимер инде ҙурайған, егет булған, кәләш алырлыҡ егет. Ауылдан киткән саҡта,* ***итек башындай*** *ғына малай ине әле ул.* (Б. Бикбай.) *Врач,* ***итек башындай*** *Шаһғәлиҙе ҡотҡарам тип, шыуғаҡ ергә тиклем йүгергән.* (Ш. Янбаев.) *Зәйнулла ишанды пәйғәмбәр урынына күреп ихтирам иткән хужа, үҙенә һүҙ ҙә ҡушмай, ҡунаҡтың* ***итек башындай*** *балаға мөкиббән китеүенә эсе бошто.* (Л. Яҡшыбаева.)

**ите — һиңә, һөйәге — миңә**. Элек баланы хәлфәгә, муллаларға ата-әсә «теләһәң ни эшләт, уҡыт» тигән мәғәнәлә әйткән һүҙ. *Атайымдың: «****Ите — һиңә, һөйәге — миңә****», — тигән һүҙҙәрен ишеттем дә ҡалтыранып ҡуйҙым.* (Ғ. Ғүмәр.) *Борон беҙҙе хәлфәгә илткәндә: «****Ите — һиңә, һөйәге — миңә****», — тип бирәләр ине.* (С. Агиш.) *— Бына, Мәхмүт, — тине тимерсе ҡарлыҡҡан тауыш менән, — өлкән улымды килтерҙем:* ***ите-майы — һиңә, һөйәге-тиреһе — миңә****. Әрәм итмә, әҙәм ит.* (М. Кәрим.)

**ит йоғоу (ҡуныу, ултырыу)**. Бер аҙ таҙарыу, көрәйеп алыу. *Балаға* ***ит ҡуна башланы****, бик ябыҡ ине.* (Һөйл.) [*Аҡназар ҙа*], *минең кеүек, бер ҙә тәненә* ***ит ҡунмай*** *торған ҡаҡса ғына бер кеше.* (Ҡ. Даян.)

**ит көймәҫкә исем көйҙөрөү**. Артыҡ мәшәҡәтләнеү, үтә ҡайғыртыусанлыҡ күрһәтеү. [*Ҡанышбикә*:] *Йәнә* ***ит көймәҫкә исем көйҙөрәһең****. Улар үҙҙәре сараһын күргәндәрҙер әле, һиңә ни ҡалған...* (Н. Иҙелбай.)

**ит күрмәгәндә (юҡта) үпкә <лә> танһыҡ**. Шәбе юҡта насарырағына ла риза булыуҙы белдергәндә әйтелә.

**итәгенән ике (бер) иле ҡалмау**. Артынан ҡалмай, эйәреп йөрөү.

*син.*: итәгенә йәбешеп йөрөү.

**итәк аҫтынан** [һатыу, ...]. Йәшереп кенә (*һатыу итеү*). *Заманында «Эптер купис» тип даны киткән был кеше хәҙер ҙә **итәк аҫтынан** ғына булһа ла сауҙа итә.* (Һ. Дәүләтшина.) *Ғайнанов **итәк аҫтынан** араҡы һата, спекуляция менән шөғөлләнә.* (А. Карнай.)

**итәк-еңде (итәк-сабыуҙы) йыйыу.** 1. Йыйынып, әҙерләнеберәк тороу, абай булыу. *Йә, ҡунаҡтарың ҡасан килә инде? Беҙ ҙә үҙебеҙсә **итәк-еңде йыйған** булып торабыҙ.* (Ғ. Дәүләтшин.) *Был арала йыш ҡына ауыҙы бешкән ауыл халҡы алдынартын ҡарай, **итәк-еңен йыйыу** хәстәрен күрә.* (Ф. Иҫәнғолов.)

2. Ғәйепте, насарлыҡты йәшереп, һаҡлыҡ күрһәтеү. *Беләм, хәҙер уларҙың миңә бик асыуҙары киләсәк, берәй төрлө этлек эшләргә тырышасаҡтар... **Итәк-еңде йыйыбыраҡ** йөрөргә тура киләсәк.* (Б. Бикбай.) *Ул үҙе лә асыҡ аңламаҫтан, тоҙаҡтан һаҡланған ҡош кеүек, Миңлекәйҙән һаҡланды, **итәк-еңен йыйып** йөрөргә өйрәнде.* (Һ. Дәүләтшина.) *Йөрөгән еремдә **итәксабыуымды йыйып**, әҙемде аҙаштырып йөрөнөм.* (М. Кәрим.)

**итәк-еңе ҡыҫҡармаҫ** *кемдең*. Артыҡ зыян күрмәҫ (*һаранлыҡ күрһәткән кешегә ҡарата әйтелә*). — *Ошонан Фаризаң һин булмаған сүрәттә лә, булғанда лә итәк тулы бала менән ҡалған бер һалдатҡаға өлөш сығарһалар, **итәк-еңе ҡыҫҡармаҫ** ине әле, моғайын,* — *тине* [*Исмәғил*]. (Ж. Кейекбаев.)

**итәк киҫеп ең ямау.** Бер нәмә иҫәбенә икенсе эште башҡарыу. *Әйт, Миңнулла, был гәҙәттәр һаман һиндә ҡалырмы, **Итәк киҫеп ең ямауҙар** Тағы ҡабатланырмы?* (Т. Арслан.) *Беҙҙең халыҡта: «**Итәк киҫеп ең булмаҫ**, иҫке дошман иш булмаҫ», тигән әйтем бар.* (Ә. Хәким.)

**итәккә йәбешеп (тағылып) йөрөү.** Берәйһенең артынан ҡалмай, гел эйәреү.

*син.*: итәгенән ике иле ҡалмау.

**итәккә ут ҡабыу.** Ауыр хәлгә төшөү, ҡурҡыныс алдында тороу. — *Әле килеп **итәгенә ут ҡапты**!* — *Үмәр ҡарт, улының сабырһыҙланып тороп йүгереүен оҡшатмай, артынан һөҙөп ҡарап ҡалды.* (Ш. Янбаев.) [*Шәмсетдин*] *Хәтер һаҡлап торманы, тураһын һуҡты:* — ***Итәгеңә ут ҡаба** башлағас, килеп еттем тиң, ә?* (Р. Низамов.)

**итәккә ут ҡапҡандай булыу.** Ныҡ ашығып йөрөү, ваҡыт бик тығыҙ булыу.

**итәк осо ла һелкенмәй** *кемдең*. Ыжламай ҙа, ыһ та итмәй.

**итәк тултырып [алыу, биреү].** Күп итеп, үлсәп, һанап тормай. *Алла һиңә бәхетте көрәп-көрәп, **итәк тултырып** биргән.* (Т. Хәйбуллин.)

**итәк тулы.** Бик күп (*гәҙәттә, бала-саға күплеге хаҡында*). ***Итәк тулы** бала өйҙә, Ниңә ташлап йөрөйһөң?* (Халыҡ йырынан.) ***Итәк тулы** баланан бары шул кинйәм, Ханым менән генә тороп ҡалдым.* (Н. Ҡәрип.) *Меҫкен, Әсҡәп еңгәң **итәк тулы***

*бала менән ултырып ҡалды.* (М. Ғафури.) *Һин яңғыҙ. Ашамай ҙа түҙерһең. Ә минең бит* ***итәк тулы бала.*** (З. Биишева.)

**их тигән.** Бик яҡшы (*һоҡланғанда әйтелә*). [*Ғариф ҡарт*:] *Ҡарсыҡҡа* ***их тигән*** *ҡата тегеп бирәм инде.* (Б. Бикбай.)

*син.*: бына(мын) тигән.

**ихтимал тотоу.** Ниндәйҙер хәлдең ошоноҡо булыр тип уйлау, һынау. [*Сәрүн*] *Миҙрәнең иҙән аҫтына төшөп китеүен* ***ихтимал тотоп...*** *баҙға төшөп китте.* (М. Ғафури.)

**ихтыяры бәрәңге, мәйеле солтан.** Бик тәмләп, теләп ашау тураһында әйтелә.

**ишеге ҡайһы яҡҡа асылғанды ла белмәү.** Берәйһенең өйөнә бөтөнләй бармау, йөрөмәү (*гәҙәттә, үпкәләшеү арҡаһында*). *Беләһеңме, беҙҙең тимерлектең* ***ишеге ҡайһы яҡҡа асыла****?* (С. Ҡудаш.)

**ишек яңағын тындырмау (ятҡырмау, талдырмау, ятмау).** Йыш инеп-сығып тороу. [*Бибисара абыстай ҡыҙына*:] — *Я алла,* ***ишек яңағы ятҡырмайҙар****, нисә килмә, кеше, нисә ҡарама, кеше.* (З. Биишева.) *Кискә тиклем* ***ишек яңағы ятманы.*** (Д. Исламов.) *Бала-саға, ҡыҙ-ҡырҡын төш еткәнсе тигеләй өҙөлмәне, бере инеп, бере сығып* ***ишек яңағын талдырмай*** *йөрөп торҙолар...* (Ж. Кейекбаев.)

**ишек асыҡ.** 1. Теләп, яҡты йөҙ менән ҡабул итергә әҙер булыуҙы белдергәндә әйтелә. *Мал булһа, ҡайҙа барһаң,* ***ишек асыҡ.*** (М. Ғафури.)

2. Көсләп тотмау, теләһә ҡайҙа китергә ихтыяр ҡуйыуҙы белдергәндә әйтелә.

**ишеккә күрһәтеү**. Бер-берәүҙе ойҙән ҡыуып сығарыу.

**ишетмәһәң ишет** *һөйл.* 1. Белмәгән булһаң, белеп ҡуй. [*Рәхимә — Айбулатҡа*:] *Бына һиңә кәрәк булһа!* ***Ишетмәһәң ишет****! Һеҙгә ни етмәй тағы... Ул ни тигән башҡа сығыу?* (Һ. Дәүләтшина.)

2. Үҙе өсөн уңайһыҙ булған хәбәрҙе ишеткәндә, аптырап әйтелгән һүҙ.

**ишле ише менән, Ишмөхәмәт ишәге менән.** Һәр кем үҙенә яраған, оҡшаған менән тура килә.

**иштең ишәк (арыш) сумарын** *һөйл.* 1. Тырышып та булдыра алмаған, ҡулынан килмәгән кешегә ҡарата әйтелә. — *Һеҙҙең менән* ***ишерһең ишәк сумарын****, — тип, Азамат ҡыҙҙарҙы әрләп алып китте.* (Ә. Бикчәнтәев.) «***Иштең арыш сумарын*** *былай булһа, — мин әйтәм, ҡапҡанға эләгәһең*», — *тип көлөп торам.* (Ш. Насыров.)

2. Йәпһеҙ, килешһеҙ ҡылыҡ ҡылыу, һүҙ әйтеү. — *Ун биш тин! — тип һалды теге төпөш малай. — Һе-е,* ***иштең арыш сумарын.*** (Ж. Кейекбаев.) *Күреп торам, һиҙеп торам, ҡайһы берәүҙәр ауыҙын ҡыйшайта:* ***иштең ишәк сумарын****, имештер.* («Сов. Башҡ.»)

**ишемгә ҡушым.** Булганга ниҙер өҫтәлгәндә ҡыуаныс менән әйтелә.

*син.*: иш янына ҡуш.

**ишетһен ҡолағың.** Берәй нәмәне киҫәтеп әйткәнде белдергәндә ҡулланыла. [*Аҙнаев Хәйретдиновҡа*:] — *Өндәшмәйһеңме? **Ишетһен ҡолағың**: тағы шундай хәл булһа, туп-тура райкомға — Назаровтың үҙенә шылтыратам да пыран-заран ҡыуып ҡайтарам.* (Н. Мусин.)

**ишмәһен ишеү** *кемдең*. Бик нык ҡыйырһытыу, туҡмау. *Ҡарынбай инде алған дүртенсе бисә, хәҙер уның **ишмәһен ишә**.* (С. Ҡудаш.)

*син.*: кәрәген биреү, эшен килтереү.

**ишәй менән ҡушай.** Гел генә бергә булған, һис айырылмаҫ кешеләргә ҡарата көлөбөрәк әйтелә. [*Өләсәһе*:] *Ятығыҙ инде, төн убырҙары, көнө буйы эттәй сабалар ҙа, кискә керһәң, әйҙә йоҡо маҙаһын бирмәйҙәр, **ишәй менән ҡушай**.* (Ф. Иҫәнголов.)

**ишәү итеү** *диал.* 1. Ауыр нәмәне күтәрешеү.

2. Ярҙамлашыу.

**иш янына ҡуш** [булыу, итеү, яһау]. Булғанға өҫтәгәндә, арттырганда кинәнес менән әйтелә. *Әсәйем дә ҡыш буйына кешегә йөн, сүс иләп, йәйен көнләкләп эшләп, «**иш янына ҡуш**» яһай торғайны.* (Т. Йәнәби.) *Ҡатыны Ҡунаҡбикә лә **иш янына ҡуш** булып, иҫке хөрәфәттәргә мөкиббән киткән.* (Ғ. Хөсәйенов.) *Ил ҡарттары*: — *Рәмиҙе ҡайҙа ҡалдырҙың. Һәр саҡ икәү бергә инегеҙ бит. **Иш янына** инде **ҡушмы ни**?* (Т. Йосопов.)

# Й

**йоҙроҡ (туҡмаҡ) ашау.** Туҡмалыу, йәбер күреү.

**йоҙроҡ еҫкәтеү.** Туҡмау менән янау, ҡурҡытыу. *Ҡолморҙа старшинаның танауына сүместәй **йоҙроғон еҫкәтеп**: — Йәнең ҡыйбатмы, малың ҡыйбатмы, икенең бере.* (Т. Хәйбуллин.)

**йоҙроҡ хәтле (тиклем, саҡлы).** 1. Бәләкәй нәмәне ҙур итеп күрһәтергә теләгәндә әйтелә. *Йоҙроҡ хәтле еләк. Йоҙроҡтай таш.*

2. Ҙур нәмәне кесерәйтеп күрһәтергә теләгәндә әйтелә. *Йоҙроҡ хәтле генә бала.* — ***Йоҙроҡ хәтле** генә бер өйҙөң һалам һымаҡ ҡына мөрйәһенән ҡыл кеүек кенә төтөн сығып тора, ти.* (Әкиәттән.)

**йоҡа тиреле (тиреһе йоҡа)** *кемдең*. Эшкә йомшаҡ, ҡатыңҡы түгел. — *Хәҙерге йәштәр **йоҡа тиреле** булып үҫәләр! Беҙ һинең кеүек саҡта былай ғына түгел, иртә таңдан тора инек тә,*

*ҡояш байығансы эшләй инек.* (С. Ағиш.) [*Етембай Моталлапҡа*:] *Үҙең дә бигерәк* ***йоҡа тиреле*** *икәнһең.* (М. Хәйҙәр.)

**йоҡо асылыу (осоу, ҡасыу).** Йоҡо бөтөү, йоҡо килмәй башлау. *Тимофей Алексеевич тыныслана алманы,* ***йоҡоһо*** *бөтөнләй* ***осто*** *уның.* («Сов. Башҡ.»)

**йоҡо баҫыу.** Нык йоҡо килеү, ауырайтыу. [*Сабира апай*] *Бик тә* ***йоҡо баҫып*** *барғас, саҡ ҡына күҙемде алдап алайым тип, урынға барып ятты.* (Ә. Вахитов.)

**йоҡоға талыу (сумыу, батыу).** Бик ҡаты итеп йоҡлап китеү. *Ваҡ һыу ҡуңғыҙҙары — өйөрсөктәр ләмгә күмелә һәм* ***йоҡоға тала.*** («Сов. Башҡ.»)

**йоҡо сүлмәге (тоҡсайы, мискәһе, һандығы).** Йоҡларға артыҡ яратҡан, ялҡауыраҡ кешегә ҡарата әрләү һүҙе итеп ҡулланыла. *Төшкә саҡлы йоҡлап тик ята.* ***Йоҡо сүлмәге*** *ул — Миңлеғата.* (С. Муллабаев.) [*Рабиға*:] *Беҙ барғансы уҡ, клубта йөрөй ине инде ул. Беҙҙе,* ***йоҡо тоҡсайҙары*** *тип, ҡаршы алды.* (Ш. Бикҡол.) [*Әлифә*:] — ***Йоҡо сүлмәге.*** *Өйҙә мине Сафуан ағайым да, ну, йоҡоно бешәһең, әллә шуға үҫмәйһең, тип көлә торғайны.* (И. Абдуллин.)

**йоҡо һимертеү (һүтеү)** *мыҫҡ.* Ваҡытлы-ваҡытһыҙ оҙаҡ итеп йоҡлау. [*Камил Рифҡәткә*:] — ***Йоҡоно күп һимерттең*** *шул, Эй һин, балыҡсы!* (Ф. Иҫәнғолов.) *Бөтә яҡшы нәмәләр таң алдынан эшләнә, ә Самат шундай бәхетле ваҡытты* ***йоҡо һимертеп*** *үткәрә.* (Ә. Бикчәнтәев.) *Яновтың шылтыратыуы Ғәбделхәкимовты төн уртаһында йылы түшәгенән күтәрҙе. —* ***Йоҡо һимертәһеңме****? — тип һораны райбашҡарма комитеты председателе ниндәйҙер ят тауыш менән.* (Я. Вәлиев.)

**йомғаҡтың осо сығыу.** Ниҙер асылыу, сер булып торған нәмә билдәле булыу.

**йомғаҡтың осон юғалтыу (йәшерелеү).** Эш-хәлдең сиселеше ҡулдан ысҡыныу, буталыу. ***Йомғаҡтың осо*** *бик нык* ***йәшерелде.*** *...Ҡыҙылдарға ҡаршы һуғышҡан кешеләрҙе табыуы ҡыйын ине.* (З. Шәрҡи.)

**йомғаҡты сисеү (һүтеү, тағатыу).** Ауыр булған хәлде асыу, серҙе билдәле итеү. *Дүрт йыл тула инде, енәйәтсе фаш ителмәгән. Ваҡыт күп үткән, әлбиттә. Шулай ҙа эште алып ҡара әле. Бәлки* ***йомғаҡты сисә алырһың.*** («Сов. Башҡ.»)

**йоморҡанан йөй эҙләү.** Юҡ ғәйепте табырға тырышыу. *Шәһәрбаныу Кәлимәнең ошо яуабынан,* ***йоморҡанан йөй эҙләгәндәй*** *итеп, тауышын күтәрә биреп, төрткө телләнеп дауам итте...* (Һ. Дәүләтшина.) *Мөнирә, әлдә Сәрби әбей* ***йоморҡанан йөй табырға*** *торған әсе телле ҡәйнәләр кеүек, күп һүҙле кеше түгел.* (Ғ. Лоҡманов.)

**йомро баш (башы йомро)** *кемдең.* Бик хәйләкәр һәм аҡыллы. *Боғара тирә-яҡта үҙен* ***«йомро баш»****, «хәйләкәр төлкө» тип йөрөтөүҙәрен белә. Әйҙә, тип көлә, кинәнһендәр.* (Ә. Хәким.)

**йомшаҡ (мәмәй) ауыҙ** *һөйл.* Үтә булдыҡһыҙ; ебегән. *Беҙ генә ул* ***мәмәй ауыҙҙар****, үҙ хаҡыбыҙҙы үҙебеҙ яулай алмайбыҙ.* (И. Ғиззәтуллин.) *Йыһаннурҙы ата-әсәһе ҡартайғансы ҡулына эш тейгеҙмәй үҫтермәһә, шул тиклем* ***мәмәй ауыҙ*** *ҙа булмаҫ ине.* (Н. Мусин.)

**йомшаҡ түшәп (йәйеп) ҡатыға ултыртыу.** 1. Тыштан матур һөйләп, һемәйтеү. [*Бохарбаев*:] *Һеҙ беҙҙе* ***йомшаҡ түшәп ҡатыға ултыртмаҡсы*** *булаһығыҙмы*?.. (Н. Иҙелбай.) *Юҡ, ул саҡта Гәрәй* ***йомшаҡ түшәп ҡатыға ултырта*** *ғына белде. Асыҡ ауыҙҙы шулай итәләр ул.* (Б. Бикбай.)

2. Асыуланмай, оҫта итеп әсе әйтеү. *Ғәзимәһе туп-тура әйтә, ә Рәхимәһе* ***йомшаҡ түшәп ҡатыға ултырта***. (Һ. Дәүләтшина.)

**йомшаҡ урын (ер, яҡ).** Эштәге, ҡылыҡ-холоҡтағы бушаҡлыҡ. *Әгәр дошманды еңергә теләһәң, уның көслө яғын өйрән,* ***йомшаҡ урынын*** *белеп, емергәнсе һуҡ.* (Б. Бикбай.) [*Индрил*:] — *Һәр кемдең ләззәт тапҡан бер нәмәһе була бит, — тип, үҙенең* ***йомшаҡ яғын*** *куләгәләргә тырыша.* (Д. Юлтый.)

**йомшаҡ урындан (ерҙән) тотоу.** Етешһеҙ, бушаҡ яҡты эләктереп алыу. *Һеҙ нимә? Минең* ***йомшаҡ урындан*** *тотоп алмаҡсы булаһығыҙмы*? (Н. Иҙелбай.)

**йондоҙ һанарлыҡ.** Түбәһе тишек-тошоҡло йорт-ҡаралты хаҡында әйтелә. *Түбә таҡталары мүкләнеп, тетелеп бөткән —* ***йондоҙ һанарлыҡ***. (Б. Бикбай.)

**йондоҙ һанау.** Эшһеҙ йөрөү, ваҡытты бушҡа үткәреү.

*син.*: эт һуғарыу, йөн тибеү.

**йортҡа бәрәкәт!** Кеше йортона ингәндә әйтелә торған теләк. [*Нурый*:] *Әссәләмәғәләйкүм!* ***Йортҡа бәрәкәт***! (Х. Ибраһимов.)

**йорт күрһәтеү.** Туйға тиклем ҡоҙаларҙы кейәү өйөнә саҡырып, ҡунаҡ итеп, бүләк биреү.

**йөҙ (ҡырҡ) атаның балаһы** *һөйл.* Төрлө кешеләр, төрлө халыҡ. — *Йә, шул машиналар ғына эшләмәһә ... Юҡһа,* ***йөҙ атаның балаһын*** *бер юлдан йөрөтөп ҡара әле*! (З. Биишева.)

**йөҙ аҡлығы.** Дәрәжәлелек, ғорурлыҡ.

**йөҙгә берәү тулмаған.** Аҡылы камил булмаған; ахмаҡ, алйот.

*син. ҡар.*: аҡылға бер төрлө.

**йөҙгә-йөҙ килеү.** 1. Ҡырҡа ҡаршы тороу (*гәҙәттә, дошманлашыусы яҡтар тураһында әйтелә). Был операцияла Әнүәр Абдуллин гүмерендә беренсе тапҡыр ҡоралды дошманға* ***йөҙгә-йөҙ баҫты***. (Ғ. Әмири.)

2. Күҙгә-күҙ, тура ҡарап (*осрашыу, һорау*). ...***Йөҙгә-йөҙ әйтәм****, тәнҡит юҡ беҙҙә һаман.* (С. Кулибай.)

**йөҙгә ҡара яғыу.** Хурлыҡҡа төшөрөү, оятлы итеү. *Һин уларҙы йыйғас, аллаға, батшаға итәғәтле булығыҙ, мосолмандарҙың* ***йөҙөнә ҡара яға*** *күрмәгеҙ, тип әйтергә ҡуш.* (А. Таһиров.) *Бер туған тигәндәй ағаһының* ***йөҙөнә ҡара яғып****, башынан атлап ситкә яллана.* (Һ. Дәүләтшина.) *Етер, иптәштәр! Шул*

*кулак артынан йөрөп, бөтә донъя эшселәре ҡаршыһында фәҡир башҡорт* ***йөҙөнә*** *күп* ***ҡара яҡтырҙыҡ*.** (Ш. Хоҙайбирҙин.)

**йөҙгә ҡыҙыллыҡ (серкеү)* килтереү.** Оятлы итеү, оятҡа ҡалдырырлыҡ ҡылыҡ ҡылыу. *Һеҙ, ирмен тигән егеттәр,* **_йөҙгә ҡыҙыллыҡ килтерергә_** *тырышмағыҙ. Батша хәҙрәттәренә тоғро хеҙмәт итегеҙ.* (Һ. Дәүләтшина.) *Ҡолойҙоң* **_йөҙөнә ҡыҙыллыҡ_** *килтермәне егеттәр*! (Б. Аҫылғужа.)

[* **Серкеү** — *диал.* боҙоҡлоҡ.]

**йөҙ йәшә(геҙ).** Яҡшылыҡ эшләгән кешегә рәхмәт белдереп, йәки ҡотлап әйтелә. [*Иомабикә*:] *Маҡтаулы исем менән ҡотлайым, Әсҡәпъямал апай!..* **_Йөҙ йәшә_.** (Б. Бикбай.)

**йөҙ күрһәтеү (биреү).** Ҡунаҡ итеп, үҙең менән яҡындан таныштырыу.

**йөҙ ҡараһы (ҡаралығы).** Хурлыҡ, оятсылыҡ. — *Балаң шулай* **_йөҙ ҡаралығы_** *килтерһә, ни эшләр инең?* (М. Ғафури.) *Ҡыҙҙың кейәүе ташлап китеү ниндәй хурлыҡлы булһа, ҡыҙ һорап барған ерҙән кире ҡағылыу шул тиклем үк оят, шундай үк* **_йөҙ ҡараһы_** *итеп иҫәпләнә.* (К. Мәргән.)

**йөҙ менән бөрөлоу** *нимәгә.* Бөтә иғтибарҙы йүнәлтеү. *Хәҙер ауыл Советы колхоз производствоһына* **_йөҙ менән боролдо_.** («Сов. Башҡ.») *Беҙҙең бурыс: публицистика жанрына* **_йөҙ менән боролоп_**, *башҡорт әҙәбиәтендәге төп жанрҙарҙың береһе кимәленә күтәреү.* («Ағиҙел».)

**йөҙө аҡ булғыр(ы).** Яҡшы теләк итеп әйтелә (*еңелсә генә шелтәләгәндә лә ҡулланыла*). *Инәйең ҡымыҙҙы кәзә һөтө менән шимләп маташҡан. Боҙҙомо икән инде,* **_йөҙө аҡ булғыр_.** (Ә. Вахитов.)

**йөҙө килеү** *нимәнең.* Матур булып бешеү (*икмәк, бәлеш һ.б. тураһында*). *Эштәремде гелән* **_йөҙө килгән_** *икмәктәрҙәй итеп мин үңдырам.* (Ш. Галин.)

**йөҙ(ө) асылыу** *кемдең.* 1. Йөҙө яҡтырыу; күңел күтәрелеп, йөҙгә шатлыҡ билдәһе сығыу. *Сәлимә уйланып торҙо ла, шунан* **_йөҙө асылып_** *китте.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Бәхеткә ҡаршы, оҙаҡламай Хасбулат олатайҙың* **_йөҙө_** *тағы ла* **_асылып_**, *күҙҙәре ирәбеләнеп китте.* (З. Биишева.) *Егеттең күңеле күтәрелеп китте,* **_йөҙө асылды_.** («Сов. Башҡ.»)

2. Фашланыу, ғәйебе билдәле булыу. *Дошмандарҙың йөҙө асылды.*

**йөҙөк ҡашы урынына йөрөү.** Бик хөрмәтле, ҡәҙерле булып һаналыу. *Элек Мырҙаш кеше теленә кергән кеше түгел ине... Хәҙер Мырҙаш* **_йөҙөк ҡашы урынына йөрөй_.** (Д. Юлтый.) **Йөҙөк ҡашы кеүек күреү:** *Ейәндәре лә ярата өләсәйҙәрен.* **_Йөҙөк ҡашы кеүек күреп_**, *ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп торалар.* (С. Рахманғолов.)

[*Р. Солтангәрәевтың*] *... бөгөнгө прозабыҙҙың* **_йөҙөк ҡашы_** *булырлыҡ хикәйәләре уҡыусыларыбыҙҙы ҡыуандырҙы.* (Р. Бикбаевтан.)

**йөҙө ҡара** *кемдең* (ҡара йөҙлө). 1. Асыуланғанда әйтелгән әрләү, хурлау һүҙе. «...*Мин күрше ауылдағы штабҡа барам. Мин ул* ***йөҙө ҡараларҙы*** *йәлсетмәм*!» — *ти бит*. (Ғ. Дәүләтшин.) [*Ғариф*] ... *уландарын һәм хеҙмәтсеһен әрләп, үҙ алдына үҙе һөйләнә, ҡайҙа барып бәрелергә белмәне:* — ***Йөҙө ҡаралар!*** *Нисәмә тапҡыр әйттем мин һеҙгә, шул тиҙәктәрҙе сығарып түгегеҙ тип*. (Ж. Кейекбаев.) — *Уух,* ***йөҙө ҡара,*** *тағы саба*, — *тине Мөхәмәтулла бабай*, — *өйгә еткәс*, *йүнле әҙәм һыуындыра атты*... (Ә. Вахитов.)

2. Еңелсә генә орошоп, һоҡланыуҙы белдергәндә әйтелә. *Сәрүәр шул егерме биштәр тирәһендә булдымы икән? Бик сибәр ине*, ***йөҙө ҡара***! (С. Кулибай.)

**йөҙө лә күҙе (күҙе лә йөҙө).** Кемделер шаһит итеп күрһәтеп, ниҙелер дөрөҫләргә тырышҡанда әйтелә. *Икенсе бер апай тороп баҫты ла, әргәһендә ултырған иренә бармағы менән төртөп:* — *Бына юрамал алып килдем үҙен*, ***күҙе лә йөҙө***... («Сов. Бапгк.»)

**йөҙөн асыу** *кемдең*. Кешенең мәкерен, хәйләһен фашлау. *Йыйылыш кластың* ***йөҙөн асты***, *уҡыусыларға кемдең кем икәнен күрһәтте*. (К. Яйыҡбаев.) *Ошо ҡарт, төпсөнә торғас*, *Ҡорбановтың бысраҡ* ***йөҙөн асҡан***. (Б. Бикбай.)

**йөҙөн йыртыу** *кемдең*. Кеше алдында тупаҫ рәүештә кәмһетеү; хур итеү. *Етерлек* ***йыртТылар йөҙөңдө***, *серттеләр золмәттә үҙеңде*, *һин хәҙер ватандың хөр улы*, *бынан һуң асыҡ тот күҙеңде*. (Ш. Бабич.) *Шундай тура һүҙле ҡатын инде ул* [*Бәғиҙә*], *саҡ ҡына хилафлыҡ эшләнеңме*, *ситтәр алдында* ***йөҙөңдө йыртам*** *тип тормаҫ*, *таснатып әйтер ҙә һалыр*. (Ш. Янбаев.) [*Юнысов*:] ... *Правление ултырышында* ***йөҙҙө йыртмаһа*** *була бит инде. Элек председатель булып эшләгәс*, *дуҫ бар*, *дошман бар тигәндәй*... (Ә. Атнабаев.)

**йөҙөн күрмәйем.** Асыуланып, ҡарғап әйтелә. [*Үмәр*:] *Һары ҡарғышым төшһөн мәлғүнгә*! ***Йөҙөн күрмәйем***, *кафырҙың*. (Һ. Дәүләтшина.)

**йөҙөнә йәбешеү** *кемдең*. Әрләп, хурлап оятлы итеү. *Ирҙәр*, *ҡайтҡас*, *үҙенә осоп ҡунасаҡтарын белә ул* [*Гөлйөҙөм*]. ***Йөҙөнә йәбешәсәктәр***. (Ф. Исәнголов.)

*син.*: **йөҙөнән** алыу.

**йөҙөнән (битенән) алыу** *кемдең*. Кеше алдында әрләү, ғәйепләү, оятлы итеү. — *Ярар инде*, — *тине әбей*, — *һыйлауыңды бел*, *ниңә кешенең* ***йөҙөнән алаһың***? (Ә. Вахитов.)

*син.*: йөҙөнә йәбешеү.

**йөҙөнә бәреп** [әйтеү]. Туранан-тура, йәшермәй (*әйтеп биреү*). — *Былай зарланып йөрөһәң*, *Бәхтиәров иптәш*, *әлбиттә*, *бер эш тә сығара алмаҫһың. Партия ойошмаһы секретары булыуыңды әйтер инем*, — *тине уға* [*Ғиззәт*] ***йөҙөнә бәреп***. (Н. Мусин.)

*син.*: күҙенә ҡарап [әйтеү].

**йөҙөнә ҡарамаҫлыҡ булыу** *кемдең.* Мөнәсәбәттәр боҙолоу арҡаһында кемделер күрге лә килмәү.

**йөҙөнә әйләнеп тә ҡарамау** *кемдең.* Мөнәсәбәтте бөтөнләй өҙөү, ситләшеү.

**йөҙ сөйөү (сөйөрөү)** *кемдән, нимәнән.* Уй-теләктән кире ҡайтыу. *Әллә, юҡһа, улар үҙ идеалдарынан* ***йөҙ сөйҙөләрме****? Әллә, юҡһа, улар кисәге дошмандарына ҡул бирҙеләрме*? (И. Насыри.)

*син.*: баш тартыу.

**йөҙ тотоу.** Ниндәйҙер йүнәлеш алыу, шуны тотоу. *Айндар хәҙер бөтөргә* ***йөҙ тотҡан*** *ҡәбилә булыуҙары, үлемгә дусар ителгән этник группа булыуҙары иҫәбенә йәшәп яталар.* (К. Мәргән.) «*Башҡорт халҡы быға са ҡалай иҙелеп килгән, шулай ҡалыр. Үлергә* ***йөҙ тотҡан...***» *— тигән өмөтһөҙ уй Закирҙың күңелендә нығынғандан-нығый ғына барҙы.* (З. Биишева.) *Заманының алдынғы ҡарашлы кешеһе, рус культураһына* ***йөҙ тотҡан*** *мәғрур Абайҙың үҙе иҫән сағында ни бары бер шиғыры баҫылып сыҡҡан.* («Сов. Башҡ.»)

**йөҙтүбән китеү (килеү, ҡапланыу)** *тупас.* Үлеү, дөмөгөү. [*Сурағол*:] *Хәби байҙың* ***йөҙтүбән китеүе*** *минең өсөн гәжәп түгел.* (Т. Хәйбуллин.)

**йөҙ һөртөү.** Түбәнселек менән табыныу. *Бары ла эйелеп ергә сәждә иттеләр, ҡул-аяғын үптеләр,* ***йөҙ һөрттөләр.*** (Ш. Бабич.)

**йөҙ һытыу (сирылтыу).** Ризаһыҙлыҡты, ҡәнәғәт булмауҙы йөҙгә сығарыу. *Байғужа менән беҙ ҙә* ***йөҙҙәребеҙҙе һыта-һыта*** *кейенәбеҙ.* (Д. Юлтый.) *Туҡта!* ***Йөҙөң һытып****, сәскәләрҙең күҙҙәренән шатлыҡ өркөтмә.* (Р. Бикбаев.) **Йөҙ һытылыу**: *Үмәр ҡарттың сырайы асылманы, йылмайырға теләгәйне —* ***йөҙө*** *генә* ***һытылды.*** (Ш. Янбаев.)

**йөҙ һыуы.** Намыҫ, оят. ***Йөҙ һыуы*** *китһә битеңдән, ул саҡта эштәр харап*! (С. Ҡудаш.)

**йөҙ һыуын түгеү.** Түбәнселек менән нимәлер һорау, оятсылыҡҡа төшөп үтенеү. *Атайың мәрхүм* ***йөҙ һыуы түгеп*** *килмәһә, әлегә саҡлы буйҙаҡ йөрөр бер мәжнүн инең бит һин, алла ҡоло*! (М. Кәрим.) *Прошение яҙып, өлөш һорап,* ***йөҙ һыуҙарын түкмәҫ*** *батырҙар.* (Ә. Вахитов.) [*Һылыуҡай*:] *Кешегә көнөң ҡалһа, шул инде, балам. Барыбер күпсетеп эткә һалаһы ҡатығы өсөн дә* ***йөҙ һыуы түктерәләр.*** (Б. Бикбай.) *Вагонға аҡсаһыҙ ултырһаң, байтаҡ* ***йөҙ һыуыңды түгергә****, күп кенә ҡыуылырға, һүгелергә кәрәк буласаҡ.* (С. Агиш.)

**йөк аты.** Эш-йомоштан баш тартмай торған, бик күндәм кешегә ҡарата әйтелә.

**йөктө тигеҙ тартыу.** Эште, бурысты бер сама башҡарыу. *Юлдыбай рабкоопы планды арттырып үтәгәндә, Йылайыр сельпоһының һәм ҡайһы бер сауҙа ойошмаларының айҙар буйы бер тинлек тә китап һатмауын нормаль күренеш тип булмай.* ***Йөктө тигеҙ тартырға*** *кәрәк.* («Сов. Башҡ.»)

**йөндө ҡабартыу**. Ҡаршылыҡ күрһәтеп асыу белдереү.

**йөн йоттороу** *кемгә, кемде*. Ауыр язаға дусар итеү, ыҙалау, йонсотоу. [*Айыу*] *төлкө янынан китеү яғын ҡараған. Айыу белә: бөрсәләр төлкөнән уның үҙенә күсергә мөмкин, сөнки уларҙың айыуҙы ла* ***йөн йотторғандары бар***. (Ж. Кейекбаев.)

**йөнлө йылан кеүек күреү**. Яратмау, ерәнеп ҡарау. *Юлғотло: Ни булһа ла булыр, Вәлиҙе* ***йөнлө йыландай күрерлек*** *итеп эшлә инде, Сабира инәй. (М. Буранғолов.)*

**йөнөн тарау** *кемдең*. Аҡсаһын, мал-мөлкәтен талап алыу. — *Әйҙә, был байҙың* ***йөнөн*** *ныгыраҡ* ***тарайыҡ***! *Һарыҡты күберәк һуйҙырайыҡ*. (Д. Юлтый.)

**йөн тибеү**. Бушҡа ваҡыт уҙғарыу. ***Йөн тибеп*** *йөрөү*.

*син. ҡар.*: бушты бушҡа ауҙарыу.

**йөрәге күкрәгенә һыймау** *кемдең*. Бик ныҡ ярһыу, ашҡыныу.

**йөрәге мүкләнгән** *кемдең*. Дәрте һүнгән.

*син.*: йөрәгенә йөн үҫкән.

**йөрәген алыу** *кемдең*. Ныҡ ҡурҡытыу. [*Ғилми ҡарсыҡ*] *бербереһенән ҡурҡыныcыраҡ һүҙҙәр менән ҡурҡытып, Ғәлимә апайҙың да, әсәйҙең дә* ***йөрәген ала***. (М. Ғафури.) *Биктимер үҙ йортондағы кеүек йөрөй. Һаҡсыларҙың* ***йөрәген ала*** *— ҡурҡыуҙан бөтөнләй ҡаушап төшәләр*. (Әкиәттән.) *Ҡаршы килгән буржуйҙарҙың* ***йөрәктәрен алырбыҙ***. (Халыҡ йырынан.) **Йөрәк алыныу:** *Аш бешереүсенең хәҙер* ***йөрәге алынды*** *бит инде. Үҙе бер ҡарыш, һаҡалы мең ҡарыш ҡарт ни ҡушһа, шуны йүгертеп эшләргә генә тора*. (Әкиәттән.)

*син.*: ҡотон алыу, ҡотон осороу.

**йөрәген иретеү** *кемдең*. Тулыһынса үзеңә ҡаратыу. *Борма, борма һайын боролма Ир-егеттәр үткән юл булыр, ҡыйғыр ҡоштай сабып килгән, Ҡыҙ* ***йөрәген ереткән*** *шул булыр*. (Халыҡ йырынан.)

**йөрәген (күңелен) ҡуҙғатыу** *кемдең*. Тәрән тулҡынландырыу, борсолдороу. *Гөлбикә ҡаланан ялға ҡайтҡайны. Ул ата* ***йөрәген ҡуҙғатып*** *китте, күрәһең*. (Р. Низамов.) *Сания бер күреүҙә* ***йөрәгемде ҡуҙғатты***. (Н. Мусин.)

**йөрәген телгеләү (яралау)** *кемдең*. Рухи ғазапҡа дусар итеү. *Ҡолсобай менән Гөлъямал әйткән һүҙҙәрҙе иҫләп, Ниғмәтулланың асыуы ҡабарҙы. Уларҙың ҡыланышы* ***йөрәген телгеләне***. (Я. Хамматов.) *Юламан ҡарттың япа-яңғыҙ, илай-көлә, йырлай-бейей үҫтергән Зөлхизәһе, ҡартатаһының* ***йөрәген*** *телемдәргә* ***телгеләй*** *торған, шулай йыр уйлап сығарған хәҙер*. (З. Биишева.)

**йөрәген һоро бесәй тырнау** *кемдең*. Тынғы бирмәү, ныҡ борсоу. *Күпмелер ваҡыт үтһә лә, һаман, бригадирлыҡтан төшөргәнгә, уның* [*Шәмсетдиндең*] ***йөрәген һоро бесәй тырнай*** *ине*. (Р. Низамов.)

**йөрәгенә инеү** *кемдең*. Ышаныс ҡаҙаныу, күңелгә ныҡ яҡынайыу. *Сәғиҙә уның һайын ҡыҙҙарға яҡынайырға,* ***йөрәктәренә***

*инергә тырышты.* (М. Тажи.) *Йөрәктән сыҡҡан һүҙ **йөрәккә инә**.* (Мәҡәл.)

**йөрәгенә йөн үҫкән** *кемдең.* Үтә дәртһеҙ, вайымһыҙ (*күберәк йәш кешеләргә ҡарата әйтелә.)*

*син.*: йөрәге мүкләнгән.

**йөрәген яулап алыу** *кемдең.* Үҙенә ҡаратыу, яҡын иттереү. *Йәш уҡытыусы тиҙ арала ауыл халҡының **йөрәген яулап алды**.* («Сов. Башҡ.»)

**йөрәк атылып сығырҙай булыу.** Бик ныҡ ярһыу, тулҡынланыу.

**йөрәк аша үткәреү** *нимәне.* Тәрән кисереү.

**йөрәк баҫылыу.** Борсолоуҙан, шомланыуҙан ҡотолоп, тынысланыу.

**йөрәк башы.** Иң нескә тойғолар тупланған тип һаналған урын. *Илкәйемде һағынып уйлай-уйлай **йөрәк башҡайымды** һары алды.* (Халыҡ йырынан.) *Киҫекбикәнең **йөрәк башҡайына** ҡан һауырлыҡ йән әрнеү-рәнйеүҙәре, тән һыҙланыуҙарын уйларға ирек бирмәне* (М. Бураҡаева).

**йөрәк етеү** *нимәгә, ни эшләргә.* Ҡыйыулыҡ, тәүәккәллек күрһәтә алыу. — *Барып, ҡарап киләйемме утрауҙы?* — *тип һораны* [*Камал*]. — ***Йөрәгең етһә...*** (Ә. Бикчәнтәев.) [*Тәҡи*:] *Ғимай бабайҙың мурҙалары ҡаралғас киткән, әлбиттә. Ул мурҙаларға ҡағылырға атамандан башҡа кемдең **йөрәге етһен**?* (Ш. Бикҡол.) **Йөрәк етмәү**: *Беҙ фронтта саҡта һуғышты туҡтатыу хаҡында йыш ҡына әңгәмәләшә инек, әммә берәүҙең дә хөкүмәткә, батшаға тел тейҙерергә **йөрәге етмәй** ине.* (Д. Юлтый.)

**йөрәк итө (ҡаны).** Иң ғәзиз, ҡәҙерле кешегә (*күберәк балаға ҡарата әйтелә*). *Бала — **йөрәк ите** тип, юҡҡа ғына әйтәләрме ни?* (Н. Мусин.) *Мәрфуға апай ике ҡулын ҡаушырып өҫтәл өҫтөнә ҡуйған да, ауыҙына тәғәм ризыҡ ҡапмай, үҙенең **йөрәк итен** — улын күҙәтә.* (Н. Ҡотдосов.)

*син.*: күҙ ҡараһы.

**йөрәк итен ашау (телеү).** Бик ныҡ борсоу, рухи ғазапҡа дусар итеү. *...Үтә ҡурҡыныслы һүҙ Таибә әбейҙең **йөрәк итен** үтмәҫ бысаҡ менән **телгеләп** үтте.* (З. Биишева.) *Юлда ҡойолоп ҡалған орлоҡтар, Ҡырҙа сәселеп ҡалған башаҡтар Етем булып ҡырҙа яталар. Шулар **йөрәк итен ашайҙар**.* (Д. Юлтый.) *Судьялар ҙа хөкөм итә-итә ялығалар ҙыр. Һәр процесс **йөрәк итен ашай** бит.* (Ә. Бикчәнтәев.)

**йөрәк (күңел) ҡайтыу.** Хис-тойғо тупаҫланыу.

**йөрәккә боҙло һыу һибеү.** Ауыр, күңелһеҙ тәьҫир яһау. *Быҫҡаҡлап һибәләп яуған яуында кәртәләге һыйырҙарҙың бөршәйешеп, мөңөрәп тороуҙары һылыуҙың **йөрәгенә боҙло һыу һипкән** һымаҡ булды.* (Т. Йәнәби.)

**йөрәккә дауа булыу.** Күңелгә ятышлы, борсолоуҙы алырлыҡ булыу. *Аҡыллы һүҙ генә янған **йөрәккә дауа була** алмай.*

(Ғ. Әхмәтшин.) *Яҡты исем менән ҡайтһа инең,* ***Дауа булып йөрәк ярама.*** (Ә. Вахитов.)

**йөрәккә инеү (үтеү).** Хискә тәрән тәьҫир итеү. ***Йөрәктәргә*** *бәреп* ***инһен*** *йырым, Дорфа булһа, ғәйеп итмәгеҙ...* (З. Биишева.) *Ниндәй йылы һүҙ бар туған телдә Әсмә* ***йөрәгенә инерлек.*** (С. Кулибай.)

**йөрәккә (эскә) йылы инеү.** Ҡурҡыныс, хәүеф бөтөп, күңелдә ышаныс тыуыу. *Ҡырҡ өсөнсө йылдың йәйе. Заманаларҙың ауыр, шулай ҙа кешеләр* ***йөрәгенә йылы ингән*** *сағы.* (Н. Мусин.)

**йөрәккә ҡаҙалыу.** Кешегә ауыр тәьҫир итеү, рухи ғазапҡа дусар итеү.

**йөрәккә <ҡара> ҡан һауыу.** Ауыр ғазап кисереү, ныҡ ҡайғырыу.

**йөрәккә сыҙай алмау.** Эске кисерештән ни эшләргә белмәү, тынғыһыҙланыу. — ***Йөрәгемә сыҙай алмай,*** *... кисә кискә табан урманға сығып киттем, — тип һөйләй башланы Разия апай.* (Н. Мусин.) *Шул ауыр минуттарында, яңғыҙлыҡтан бойоғоп,* ***йөрәгенә сыҙай алмай*** *йөрөгән саҡтарында, Фатимаға йылы һүҙ ҡушыусы, уның хәл-әхүәлен һорашыусы Сәлиха булды.* (Ж. Кейекбаев.) *Был бәйетте яҙмаҫ инем,* ***Сыҙап булмай йөрәккә.*** (Бәйеттән.)

**йөрәккә таш булып ятыу.** Ауыр тәьҫир ҡалдырыу.

**йөрәккә тейеү.** 1. Күңелде уйнатыу, ҡоҫҡоно килтереү.

2. Насар тәьҫир итеү, кәйефте боҙоу.

**йөрәккә тоҙ һалыу.** Хафа һалыу, борсоу. *Зинһар* ***йөрәгемә тоҙ һалма****, минең унан башҡа ла йөрәк иттәрем телгеләнеп бөткән.* (М. Ғафури.) *Ләкин тағы ла әйтәм, әгәр шулай, Һаман шулай үсле* ***йөрәккә Тоҙ һалһалар,*** *һаман хеҙмәт халҡы Ҡурҡып торор микән өрәктән.* (Д. Юлтый.) [*Пассажирҙарҙың*] *ҡайһыныһы әле һиңә рәхмәт әйтә, ихлас һөйләшеп, күңеләңде күтәрә, ҡайһыныһы* ***йөрәгеңә тоҙ һала.*** (Н. Мусин.)

**йөрәккә төйөн булыу.** Күңелдә ауыр тойғо тыуҙырыу, хафа һалыу. *Мәрйен дә теҙҙем ебәккә, Йылҡы ла ебәрҙем төбәккә, Атаҡайымдың бер һүҙе* ***Төйөн булды йөрәккә.*** (Халыҡ йырынан.)

**йөрәккә төшөү.** 1. Ныҡ яфалау (*ауыртыу, һыҙланыу тураһында*). *Тештең һыҙлауы* ***йөрәккә төштө.*** (Һөйл.)

*син.*: үҙәккә үтеү.

2. Тәрән хискә һалыу.

**йөрәккә уйылыу.** Көслө тәьҫир яһау, күңелдә тәрән эҙ ҡалдырыу. *Емеше инде булған да бөткән, әммә ағайҙың бер һүҙе ғүмерлеккә* ***йөрәккә уйылып*** *ҡалған.* (М. Ғәли, Р. Сафин.)

**йөрәккә уҡ булып ҡаҙалыу.** Күңелгә ауыр тәьҫир итеү. *Был һүҙҙәр Фатиманың* ***йөрәгенә уҡ булып*** *барып* ***ҡаҙалдылар.*** (Ж. Кейекбаев.)

**йөрәккә ут һалыу.** 1. Күңелдә мөхәббәт хисе уятыу, ғашиҡ итеү. *Һис хәтерҙән сыҡмайһың һин, — Ғүмерлеккә ҡалаһың,*

*Йәшлегемдәй эҫе булып*, ***Йөрәккә ут һалаһың.*** (Н. Иҙелбай.) *Батыр егет, Алпамыша*, ***йөрәгемә ут һалдың.*** (Әкиәттән.)

2. Күңелгә борсолоу хисе һалыу, хафаландырыу. *Етмәһә, һыу буйында уйнап йөрөгән балалар ҙа уның* [*Сәгиҙәнең*] ***йөрәгенә ут һалдылар.*** (М. Тажи.) *Рәхимә апай түҙмәне, һүҙгә килде, ... иренең былай ҙа янған* ***йөрәгенә ут һалды.*** («Сов. Башҡ.»)

**йөрәккә яҡын алыу (ҡабул итеү).** Тәрән хис менән кисереү. *Бәлки минең бында эшем юҡтыр, ләкин ғаиләһенең хәленә ҡағылышлы бөтә нәмәне Ғәлим ни өсөн шулай* ***йөрәгенә яҡын ала****?* («Сов. Башҡ.»)

**йөрәккә ял булыу.** Күңелгә хуш килеп, тынысландырыу. *Ҡоштар килеп һайраһа ла,* ***Ял була йөрәгемә.*** (Халыҡ йырынан.)

**йөрәккә ятыу.** Күңелгә нык оҡшау, хуш килеү. *Ислах хәҙрәттең ... һүҙе* [*Ғарифтың*] ***йөрәгенә ятты.*** (Ғ. Хәйри.) *Һәр* ***йөрәккә ятыр*** *йырың барҙа, Хәсрәтлеһен миңә йырлама.* (С. Кулибай.)

**йөрәк ҡабарыу.** Нык ҡыҙып китеү, асыу килеү. ***Йөрәк ҡабарынған****, әйтәһе һүҙҙе әйтеп булмай. Мин ауа-түнә урыныма барып ултырҙым.* (Д. Юлтый.)

**йөрәк ҡағыу.** Нык елкенеү, ярһып китеү. ***Йөрәк ҡағып*** *Аҡбуҙ килә, саба-елә, саба-елә.* (М. Кәрим.)

**йөрәк ҡайнау.** Нык ярһыу хистәр ташыу. *Һис өҙлөкһөҙ яна ялҡынланып вулкан,* ***йөрәк ҡайнай****...* (Д. Юлтый.)

**йөрәк ҡаны.** Бик ғазаплы, әсендергән хис. *Әллә ни яҡшы ла булманы, ләкин* ***йөрәк ҡаны*** *менән яҙылған бит улар* [*шиғырҙар*]. (Р. Ғарипов.)

**йөрәк ҡатыу.** Йылы тойғоларҙан азат булыу, ҡаты күңеллегә әйләнеү.

**йөрәк ҡубыу.** Ҡапыл шомланыу, нык ҡурҡыуға, хафаға төшөү. *Пахарун ғына булмаһа ярар ине тип,* ***йөрәгем ҡупты.*** (М. Кәрим.) ***Ҡупты йөрәк****, шиңде ҡолаҡ — шөрләне меҫкен ҡуян.* (Ш. Бабич.) *Миңлеямал, уттың үҙ яҡтарында булғанлығынан шикләнеп,* ***йөрәге ҡубып****, аҙымдарын йышайта башланы.* (Ғ. Дәүләтшин.)

*син. ҡар.*: йөрәк үксәгә китеү.

**йөрәк ҡуҙғалыу.** Нык тулҡынланыу, борсолоу. *Улының шул хәбәрҙе әле ысынлап һөйләп ултырыуын күргәс, Фәриҙәнең* ***йөрәге ҡуҙғалды*** *ла китте.* (Р. Солтанғәрәев.)

**йөрәк ҡылы** *шиғр.* Күңелдәге иң нескә тойғоларға ҡарата әйтелә. *Ҡурай моңо* ***йөрәк ҡылдарын*** *сиртеп, күңелгә бөтмәҫ шатлыҡ һала.* («Сов. Башҡ.»)

**йөрәк ҡырҡылыу.** Майлы ит ашамай, һурпа эсмәй хәлһеҙләнеү.

**йөрәк ҡыҫылыу.** Хистәргә бирелеп, йөрәк һыҙлап китеү.

**йөрәк майы.** Бик ҡәҙерле, ғәзиз булған нәмә тураһында әйтелә. *Әллә ҡайҙан уҡ аяҡ тауышымды танып, көмөш тояҡ-*

*тарын супсанлатып, хәбәр биреп килә бит,* ***йөрәк майғынам.*** (И. Солтанов.) *Һ. Дәүләтшинаның «Ырғыҙ» романын донъяға сығарыу өсөн Рәшит Нигмәтиҙең ни тиклем көс һалғанын, ни тиклем* ***йөрәк майҙарын*** *һыҙлатҡанын өлкән быуын яҙыусылары хәтерләйҙер, моғайын.* (А. Игебаев.)

**йөрәк майын һыҙыу**. Әрнеү хисе уятыу, әрнетеү. *Һәр яҙған йыр* ***һыҙа йөрәк майын****, ҡәләм янмаҫ борон эс яна.* (Д. Юлтый.) *Эшсене күп иҙҙеләр. Улар һаман түҙҙеләр, Фирғәүендәр, ҡарундар* ***йөрәк майын һыҙҙылар.*** (Ш. Бабич.) *Улынан да яҡын күргән ошо егеткә бик ышанғайны ул* [*Үмәр ҡарт*]. ***Йөрәк майын һыҙҙырған*** *ғәрлек араны һыуындырҙы...* (Ш. Янбаев.) **Йөрәк майы һыҙылыу**: *Ҡамыт бауын ялғай-ялғай* ***һыҙыла йөрәк майҙары.*** (Халыҡ йырынан.)

**йөрәк менән**. Хис-тойғоға бирелеп. *Йөрәк менән ҡабул итеү. Йөрәк менән эш итеү.*

**йөрәк өҙөлөү**. 1. Ныҡ асығыу. *Асығыуҙан* ***йөрәктәр өҙөлөп****, түҙер хәл ҡалмағас, ерҙән йәшел үләндәр өҙөп ҡабып ҡарайбыҙ...* (Д. Юлтый.) *Шәрифулламдың* ***йөрәге өҙөлөп*** *асығып китһә, тотторормон тип алып килгән берҙән-бер йомортҡаны Мөслимә һөйөнсө әйтеүсе Хәйерзаманға сығарып бирҙе.* (Ф. Иҫәнголов.)

2. Хисләнеү, тәрән кисерешкә бирелеү. *Егет кенә йыры тәсбих түгел, егет йырлай* ***йөрәге өҙөлөп.*** (Халыҡ йырынан.)

*син.*: үҙәк өҙөлөү, йән әсеү.

**йөрәк өшөү**. Биҙеп бөтөү, ҡурҡыу. *Бүтән алда йөрөгән кешебеҙ юҡ. Коммундан йөрәгебеҙ* ***өшөп бөткән.*** (Ғ. Дәүләтшин.) *Сәғиҙәнең* ***йөрәге өшөп*** *китте. Бала ауыҙынан ошондай һүҙҙе ишетеүе ни тиклем ауыр...* (М. Тажи.) *Баштарын баҫып, аҫҡа ҡарап ултырған әлеге үҙенә ҡаршы кешеләрҙең күҙенә бәрелгәс,* [*Абдуллиндың*] ***йөрәге өшөп*** *китте.* («Сов. Башҡ.»)

**йөрәк параһы**. Бик яҡын күргән, һөйгән кешегә ҡарата әйтелә.

*син.*: йән киҫәге.

**йөрәк сығып барыу (килеү)**. Ныҡ ярһыу, тулҡынланыу. *Пианино тауышын, карауатҡа ултырып, икебеҙ ҙә тын ғына тыңлайбыҙ. Ләкин* ***йөрәктәр сығып бара.*** (Д. Юлтый.) *Бейәләр һауған ерҙән һорап ҡайттым. Түҙмәнем. Аҙна буйы* ***йөрәгем сығып барғанға*** *ҡайтҡайным.* (Я. Хамматов.) *Әллә ҡаушап, әллә оялып башым ауырта,* ***йөрәгем сығып килә.*** (Н. Ҡәрип.)

**йөрәкте асыу** *кемгә*. 1. Уй-хистәреңде кемгәлер һөйләп биреү, эс сереңде һөйләү. *Ромашка, Ромашка! Әле мөхәббәттең ни икәнен дә белмәгән саҡта тәү башлап* ***йөрәген асҡан*** *малай!* (Ш. Янбаев.) [*Ғәбделхай*] *Миңә* ***йөрәген асты****, бөтәһен дә һөйләп бирҙе.* (Ғ. Әмири.)

2. Мөхәббәт хистәреңде һөйгән кешеңә туранан-тура белдереү, әйтеп биреү. ***Йөрәгемде асып*** *бирер инем, Һин булмаһаң, башҡа берәүгә.* (Халыҡ йырынан.) *Улар бер-береһенә тиңме? Әгәр* [*Аб-*

*дулла*] **йөрәген асып** *һалһа, иң изге тойғолары селпәрәмә килмәҫме?..* (Н. Мусин.)

**йөрәкте баҫыу.** Ярһыуҙы алыу, тынысландырыу. *Беҙ хәҙер күрҙек ҡәҙәхтә ул матур йәрҙең йөҙөн: Бир шараптың көслөһөн,* **баҫмай йөрәкте** *был йөҙөм!* (Д. Юлтый.) *Шулай ҙа Моратшиндар бөгөлмәгәндәр. Эш менән* **йөрәктәрен баҫҡандар.** (Д. Мәһәҙиев.)

**йөрәкте киҫеү.** Ауыр кисерешкә дусар итеү, өҙәләндереү. *Өҙә үҙәкте,* **киҫә йөрәкте** *«хуш бул!» тигән һүҙҙәре.* (Халыҡ йырынан.)

*син.*: үҙәкте өҙөү.

**йөрәкте өҙөү.** Көслө хис тыуҙырыу (*күберәк һөйөү хисе тураһында*). *Бөгөн уйҙарыма үҙем хужа түгел. Уйҙарыма хужа тан нуры; Төнгө йырҙар* **йөрәк өҙәләр,** *Шатлыҡ бирә миңә таң нуры.* (Д. Юлтый.) *Ҡил тиеп,* **йөрәкте өҙҙөң** *бер, Әйтмәнең шул инде иртәрәк ... Фәниәм, ҡәҙерлем, Фәниәм!..* (М. Илбаев.) *Һыуҙа балыҡ йөҙәлер, һыу һалҡынын һиҙәлер. Ауылыбыҙҙа бер һылыу бар,* **йөрәгемде өҙәлер.** (Йырҙан.)

**йөрәкте өйкәү (тырнау).** Ныҡ борсоу, тынғыһыҙлау (*күберәк уй-хистәр хаҡында*). *Гөлсөм онотолоп уҡырға, шуның менән* **йөрәкте өйкәп** *торған шомло уй-фекерҙәрен баҫырға теләй.* (Я. Вәлиев.) *Шуныһы* **йөрәкте өйкәп** *тора: ҡайһы берҙә күп нәмәгә күҙ йомабыҙ, килешеүсәнлек күрһәтәбеҙ.* (В. Исхаҡов.) *Йыр тымды.* **Йөрәкте** *ниҙер* **тырнай** *ине.* (Ә. Вахитов.) *Юҡ, былай булмай. Рәсимәнең* **йөрәген** *күптән бирле бер уй* **өйкәп йөрөй.** (Р. Солтангәрәев.)

**йөрәкте өшөтөү.** Күңелгә шом, хәүеф һалыу. *Хаттың аҙағындағы шомло юлдар, аңлайышһыҙ һүҙҙәр* [*Гөлсөмдөң*] *ҡотон алды,* **йөрәген өшөттө.** (Я. Вәлиев.)

**йөрәкте эретеү.** Асыу, үпкәне юҡҡа сығарып, күңелде йомшартыу.

**йөрәкте телеү.** Көслө рухи ғазапҡа һалыу. — *Их, Ғәзизәм, беҙҙең бәхетте Ҡулға төшмәҫ борон эт алды... Ағам шулай тине һөйгәненә,* **Йөрәгемде телде** *ҡылыстай.* (Д. Юлтый.) *Әллә ҡайҙа кәкүк саҡырғаны, Былбылдарҙың* **йөрәк телгәне!** (Р. Бикбаев.) — *Уларҙан башҡа минең кемем бар? — Ҡарсыҡтың тауышы йомшарҙы. — Унан башҡа ла* **йөрәгем телгеләнеп** *бөткән.* (Р. Низамов.)

**йөрәк табанға килеү (төшөү).** Бик ныҡ ҡурҡыу, шөр ебәреү. *Малай менән егет тәүҙә абайламай ҡалһалар ҙа, шомло дөбөрләү тауышына* **йөрәктәре табанға төштө.** (М. Иҙелбаев.)

*Син. ҡар.*: Йөрәк үксәгә килеү.

**йөрәк тулҡынланыу.** Ныҡ хисләнеү. *Урамда яҙ ... Тәрән канау ярын Ишеп аҡҡан һыуҙай тулышып,* **Йөрәк тулҡынланды,** *Ҡан йөрөшө бер бушатты, ҡыҫты һулышты.* (Ғ. Сәләм.)

**йөрәк түҙмәү.** Хистәр ташып ашҡыныу, елкенеү. *Таһир Ғүмәр ауылында туҡтаманы, көн кисләһә лә, ҡайтырға ашыҡ-*

*ты, **йөрәге түҙмәне**.* (Ж. Кейекбаев.) *Тракторист Шәкир Абдуллин, беҙҙең менән ҡул ҡыҫышҡас та, аңлата башлай: — **Йөрәк түҙмәй** бит, бөгөн эшкә бик иртә сығылды, ә ысыҡ кибеп өлгөрмәгән.* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: йөрәк ярһыу.

***йөрәк түре*** **(*яны, төбө, уртаһы*)**. Иң ҡәҙерле, иң нескә хистәр тупланыуы хаҡында әйтелә.

**йөрәк түрендә һаҡлау (йөрөтөү).** Яҡын күреп иҫтә тотоу, онотмау.

**йөрәк ултыртыу.** Ырым буйынса: ҡурҡыуҙан йөрәге ҡуҙғалған кешенең йөрәге өҫтөнә һуйған тауыҡтың йөрәген ултыртып ҡарайҙар — тауыҡ йөрәге һулымай ултырһа, кеше үлмәй, тынысланa, имеш.

**йөрәк урынына ултырыу.** Тынысланыу.

**йөрәк урынында түгел.** Борсоулы, хәүефле хәлдә булыу. [*Хәйруш*:] *Юҡ, Фәйруш, **йөрәк** бер ҙә **урынында түгел**.* [*Фәйруш*:] *Тыныслан, һүҙҙе туҡтатайыҡ.* (Ҡ. Даян.) [*Фатиманың*] *атаһы йортонда тол булып йәшәгән көндәре күңелһеҙ һәм һағышлы үтте, **йөрәге үҙ урынында түгел**, атлығып сығып килгән һымаҡ булды.* (Ж. Кейекбаев.)

**йөрәк ус төбөндә булыу (тороу).** Ныҡ хәүефләнеү, ҡурҡып тороу. *Ә инде бына көндәр аҙ ғына ҡороға китә башланымы, **йөрәгең ус төбөндә** тора.* (А. Карнай.)

**йөрәк үксәгә китеү.** Ныҡ ҡурҡыу, шөрләү (*кәмһетеү төсмөрөн бирә*). *Хәҙер ул ҡайтып килгәс, был тирәләге баярҙарыңдың **йөрәктәре үксәләренә китте** инде.* (Һ. Дәүләтшина.)

*син.*: йөрәк ҡубыу, ҡойолоп төшөү, йәнде уста тотоу, йән алҡымға килеү, ҡот осоу, йөрәк ярылыу.

**йөрәк һалып [эшләү].** Күңелде тотош биреп шөғөлләнеү. *Ауылдаштары был оҫтаны бик яратҡан, хөрмәт иткән. Сөнки ул үҙенең эшенә бөтә йәнен, **йөрәген һалып** эшләй.* (З. Биишева.)

**йөрәк һарыуы.** Тәрән ҡайғы, аһ-зар.

**йөрәк һурылыу.** Ныҡ асығыу.

*син.*: билбау аҫты бушау, үҙәк өҙөлөү.

**йөрәк һыҡрау (әрнеү).** Тәрән рухи ғазап кисереү. *Нисек таутау болот төҫлө өйөлгән өҫкә ҡайғылар, **йөрәк һыҡрай**, атып ялҡындарын күкрәктә ҡайнайҙар.* (Д. Юлтый.) *Хисмәттең **йөрәге һыҡраны**, эсе бошто.* (Я. Хамматов.)

**йөрәк шыу (жыу) итеү.** Ҡапыл ҡурҡыу, шомланыу. *Ғәтиә апай менән әлеге Зөләйхә килеп тә сыҡтылар. Минең **йөрәк шыу итеп** китте.* (Т. Йәнәби.)

**йөрәк (үҙәк, йән) өҙгөс.** 1. Йөрәккә үтеп инерлек, тетрәтерлек (*хис-тойғо тураһында*).

2. Йән өшөткөс, хәүефле, ҡурҡыныс (*эш-хәл тураһында*).

**йөрәк әсеү.** Әрнеү хисе кисереү. *Мәғфүрә, ҡыҙып китеп, Диләһен һуғып алһа ла, уның ғәйепле түгел икәнлеген белгәнгә,*

*йөрәге йәлләү менән әсене, Ғәзимәгә асыу менән ярһыны.* (Һ. Дәүләтшина.)

**йөрәк ялҡыны**. Ташып торған көслө хис.

**йөрәк яныу**. 1. Хәсрәтләнеү, ныҡ ҡайғырыу. *Ауырта ла башым, **яна йөрәгем**, Һеҙ дуҫтарҙы көн дә күрмәһәм.* (Халыҡ йырынан.) *Ҡыҙғаныс та, аяулы ла, **йөрәк тә яна**, нисек итәһең, башыңды ташҡа ороп булмай.* (Т. Хәйбуллин.) *Үҙенең донъяла иң яратҡан, иң яҡын кешеһенең шулай юҡҡа кәмһетелеүенә Айбулаттың **йөрәге янды**.* (Һ. Дәүләтшина.)

2. Һөйөү хисе кисереү, яратып хисләнеү. *Керпегенән гөлдәр тама. Күрһәм, **йөрәгем яна**.* (Халыҡ йырынан.) *Һүндермәй һыу һалҡыны. Йәш **йөрәк яна**.* (Д. Юлтый.)

**йөрәк яраһы**. Ниҙең дә булһа күңелдәге ауыр эҙе. *Таштарҙағы яра ныҡ күренә, Аҙ күрәбеҙ **йөрәк яраһын**.* (Ҡ. Кулиев.) *Күпме ваҡыт үтеп киткән, ә **йөрәк яраһы** һис кенә лә уңалмаған.* (З. Биишева.)

**йөрәк ярғыс**. Бик ҡурҡыныс, көслө. *Ел ишектән кереп өҫтәлдәге Ҡағыҙҙарҙы сәсте, туҙҙырҙы. Унан сығып тышҡа, **йөрәк ярғыс** Әсе тауыш менән һыҙғырҙы.* (М. Йәлил.)

*син.*: ҡот осҡос.

**йөрәк ярһыу**. Ныҡ тулҡынланыу, хисләнеү. ***Йөрәк ярһый**, йөрәк тулҡынлана, йөрәк бер урында түгел.* (Д. Юлтый.) *Һикереп-һикереп ағалыр ҡар һыуы, Ник баҫылмай **йөрәктең ярһыуы**.* (Х. Ибраһимов.) *Айбулат **йөрәге ярһып**, урынынан торҙо.* (Һ. Дәүләтшина.)

**йөрәк ярылыу (алыныу)**. 1. Ҡурҡыуҙан йөрәк шартлап үлеү. *Ярай әле һинең ҡанлы сағыңды күрмәнем. Ни эшләр инем, беләһеңме? **Йөрәгем ярылыр** ине.* (С. Агиш.)

2. Ныҡ ҡурҡыу. *Хатта ҡурҡҡан инде Мәғүзә, хатта ҡурҡҡан, саҡ **йөрәге ярылмаған**...* (Б. Бикбай.) [*Нәфисә*] *аҙаҡ үҙенең һатылғанын ишетеп, **йөрәге ярыла** яҙҙы, үкһеп-үкһеп иланы.* (И. Көҫәпҡол.)

*син. ҡар.*: йөрәк үксәгә китеү.

**йөрәк ятыу**. Оҡшатыу, яратыу.

**йүкә сөй (шына) ҡағыу**. Алдап маҡтау, юрый маҡтаған булыу. *Салауат ағаһы инде саңғыла йөрөй, утын ташый, минең менән бергәләп, әгәр **йүкә сөйҙө** нығыраҡ **ҡаҡһаң**, бик дәртләнеп утын быса.* (Р. Ғарипов.)

**йүкә түбәтәй** *һөйл.*, *кәмһ.* Бик ярлы кешегә ҡарата әйтелә.

*син.*: ауыҙын асһа, үпкәһе күренә.

**йүкә телефон**. Кешенән кешегә йылдам таралған хәбәр (*күберәк ғәйбәт*)... *«Сочинениенан провалить иткән» тигән хәбәр **йүкә телефон** буйлап уның үҙенән* [*Надирҙан*] *алда ҡайтып етте.* (М. Әпсәләмов.)

**йығылғанға йоҙроҡ**. Бәлә өҫтөнә бәлә килеү тураһында әйтелә. [*Ғафури*:] ***Йығылғанға** йөҙ **йоҙроҡ** — шул булалыр инде. Заһретдин ҡартҡа бәхетһеҙлек төрлө яҡлап килә.* (С. Ҡудаш.)

**йығылып килеү** *нимәгә*. Ашҡа, ризыҡҡа ныҡ ынтылыу (*асҡағыраҡ кеше йәки хайуан тураһында*).

**йығылып ятыу** *нимәгә*. Ниҙелер алырға, эләктереп ҡалырға йәки күрергә тырышып ябырылыу, ташланыу. *Хәҙер крәҫтиәндәр эре биҙәкле тауарға* ***йығылып яталар***. (С. Агиш.) — *Ҡаланың ошо ҡаҡ урам ташына тоҙ һипкәндәр тиерһең, — тине башҡорттарҙың береһе, — тамағы ас, өҫтө яланғас булһа ла, күп кеше ошонда* ***йығылып ята***. (Ғ. Ғүмәр.) [*Мөхәмәтғәле*] *йәйләүгә етәрәк мөмкин тиклем яйыраҡ атларға тырышты. Йәнәһе, дәрәжә һаҡлай, һыиға артыҡ* ***йығылып ятмай***. (Ф. Иҫәнголов.)

**йылан аяғы(и) киҫкән (ашаған)**. Бик үткер, һис юғалып ҡалмай торған (*күберәк кире баһа биргәндә ҡулланыла*). *Ильясов һәр ваҡыттағыса өлгөр булып сыҡты. Өйләнде лә ҡуйҙы тиҙ генә...* ***Йылан аяғы ашаған*** *нәмә инде ул Ильясов*. (Ә. Вахитов.) *Итерһең уны йыуаш:* ***йылан аяғын киҫкән*** *ул*. (Б. Бикбай.) [*Аҡмал*:] *Үҙе хәйләкәр: ялан ҡул менән генә тотормон тимә. Беҙ ебәргән кешеләрҙе лә үҙ ҡулы аҫтына ҡаратып ала, өгөтө менән, башҡорттар әйтмешләй,* ***йылан аяғын ҡайсыһыҙ киҫә***. (Й. Солтанов.)

*син.*: үтеп сыҡҡан.

**йылан ите ашаған**. Бик үткер, хәйләле. *Ул бит ете ҡат ер аҫтынан йылан көйшәгәнен ишеткән,* ***йылан ите ашаған***, *ерән төлкө*! (З. Биишева.)

*син.*: ер аҫтында йылан көйшәгәнен ишеткән.

**йыландай телде сығарыу**. Бик ныҡ ялағайланыу, уҫал, яуыз ниәтле хәбәр һөйләү.

**йылан мөгөҙө**. Ырым буйынса: бөтмәҫ-төкәнмәҫ байлыҡ, хазина сығанағы. *Йылан мөгөҙө ингәндер. Йылан мөгөҙө барҙыр*. — *Ҡом ишелеп ята, ләкин уны сығарыу үтә тәртипһеҙ алып барыла. Карьерҙың хужаһы юҡ. Кем ҡайҙан теләй, шунан ала. Әйтерһең дә, был карьерҙа «****йылан мөгөҙө****» ята, ул һис тә бөтә торған түгел*. («Сов. Банҡ.»)

**йылан мөгөҙө генә юҡ**. Бөтә нәмә лә бар (*муллыҡ, байлыҡ тураһында*).

*син.*: күгәрсен һөтө генә юҡ.

**йылҡы йылы(ң) алдараҡ**. «Бынан да насар булыр әле», тип үсәгәндә әйтелә.

**йылы ҡанат аҫтында** [һаҡлау, тотоу]*. Кешенән йәберләтмәй, яҡлап ҡына тороу. *Председатель ышаныс юғалтҡан автомеханикты үҙенең* ***йылы ҡанаты аҫтында һаҡлап*** *килә*. («Сов. Башҡ.»)

[* Рус телендәге «под теплым крылышком» берәмегенән.]

**йылы урын**. Эш, йәшәйеш өсөн үтә тыныс; ҡулай шарттар тыуҙырылған ер. *Уҙған йыл уҡ, йәйге каникул ваҡытында, ҡаҙаҡтар араһында булып, үҙенә дуҫ-иш,* ***йылы урын*** *табып ҡайтҡайны Сафа*. (Б. Бикбай.) *Зөлфирә иһә Раевкала ветерина-*

*рия-бактериология лабораторияһында* ***йылы урын*** *тапҡан.* («Сов. Башҡ.»)

**йылы (эҫе) тәнеңдә туҙһын.** Яңы кейем кейгән кешегә әйтелгән теләк һүҙе. — *Һеҙ иң һәйбәт тауарҙарҙы ғына алып килдегеҙ.* ***Эҫе тәнегеҙҙә туҙһын,*** *— тине автолавка шоферына.* («Сов. Башҡ.»)

**йыры йырланған*** *кемдең.* Әһәмиәте, артыҡ кәрәклеге ҡалмаған кешегә ҡарата әйтелә.

[*Рус телендәге «песенка спета» берәмегенән.]

**йырып сығыу** *ниҙе.* Ниндәйҙер ауырлыҡты еңеү. *Хуш абзый ... Ер аҫтына һалып, Ер өҫтөндә ҡалдыҡ сыҙарға ... Тик бит беҙгә: һине юғалтыуҙы нисек кенә* ***йырып сығырға****?..* (Р. Мифтахов.)

**йыуаштан йыуан сыға.** Өн-тынһыҙ йөроп, көтөлмәгән берәй нәмә килтереп сығарған кеше тураһында әйтелә.

**йыуан ҡорһаҡ.** Кеше хаҡын ашаған байҙарға ҡарата әйтелә. *Ҡандары ҡомарып, яралары тоҙланып килгән* ***йыуан ҡорһаҡтар****, был һүҙҙе ишеткәс, ярыла яҙҙылар.* (Ғ. Дәүләтшин.)

**йәбешеп ятыу.** Нимә менәндер ныҡ мауығып, шуға бирелеп китеү. *Ауылға йәбешеп ятыу.* ▬ *...Кулактар ҙа, беҙҙең бәхетле, ҡояшлы колхоз тормошобоҙҙо юҡ итер өсөн, теш-тырнаҡтары менән* ***йәбешеп яталар.*** (Б. Бикбай.) *Дарыуҙың уныһын эсереп, быныһын еҫкәтеп, әнәләре менән дә тәненә дарыу ебәреп, балаларҙы йәшәтергә теше-тырнағы менән* ***йәбешеп яталар.*** (М. Тажи.) *Трестың баш геологы фәнгә* ***йәбешеп ятыусы*** *Сөннәтов Павловтың был идеяһына бөтөнләй ҡаршы төшә.* (Ә. Харисов.)

**йәй ташы.** Ырым буйынса: ямғыр яуыуын теләгәндә өҫтөнә һыу һибә йәки әйләндереп һала торған тылсымлы һаналған таш.

**йән аҙығы.** Рухи ҡәнәғәтлек биргән эш-шөғөл. *Баһалары тиңһеҙ алтынға* ***йән аҙығы*** *алам халҡымдан.* (С. Кулибай.) *Кешегә икмәк менән бергә башҡаһы —* ***йән аҙығы*** *ла кәрәк.* (Й. Солтанов.)

**йән алкымға (ус төбөнә) килеү.** 1. Үлер хәлгә етеү. *Күптән түгел генә көйөнөп,* ***йәне алҡымына килерҙәй*** *булып йөрөгән бригадир Яҡуп Мырҙабаев иркен тын алды.* (Б. Бикбай.) *Йөрәк һуға, ауыҙ кибә, һыу юҡ.* ***Йән алҡымға килә,*** *пуляһыҙ-ниһеҙ үлем көтөлә.* (Д. Юлтый.)

2. Ныҡ ҡурҡыу. *Анау бер яурынына уҡа баҫҡандары килгән саҡта, төптө* ***йәнең алҡымыңа килә*** *торғайны.* (Ғ. Дәүләтшин.)

**йән асыуы менән.** Бик ныҡ ҡыҙып, асыуланып (*ниҙер эшләү).* *Ярошенко бөтә көсөн йыйып, люкты асты ла ут солғап алған кәүҙәһен* ***йән асыуы менән*** *тышҡа ырғытты.* (М. Кәрим.) *Тик аҡтар ҡулына төшмәгән егет. Биленән һуңғы бомбаны алып,* ***йән асыуы менән,*** *үҙен уратып алған аҡтарға ташлаған.* (Ә. Вахитов.) *Әсәйем ни әйтергә белмәне,* ***йән асыуы менән*** *һуғып ебәрҙе.* (Ш. Янбаев.)

**йән аҫрау**. Аслы-туҡлы йәшәү. *Сейә, еләк, ҡыр емеше менән булһа ла **йән аҫрайһың**.* (Т. Хәйбуллин.) *Илебеҙҙә ни бары ярты быуат элек кенә эшселәр иң ауыр шарттарҙа, иң бысраҡ һәм иҫке йорттарҙа **йән аҫрарға** мәжбүр булғандар.* («Сов. Башҡ.») *Олораҡ кешеләр, алда ҡот осҡос хәлдәр торғанлығын һиҙеп, ҡаты ҡайғырышалар: «Ҡайһылай итеп **йән аҫрарбыҙ** икән?»* (Б. Бикбай.) [*Әптелғәлимдең*] *келәтенә инһәң, аҫыулы торған туң түшкәләргә бәреп, маңлай тишерһең. Ә хеҙмәтселәр ҡатыҡ эсеп **йән аҫрай**.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**йән атыу**. Ҙур теләк менән нимәгәлер ынтылыу, ашҡыныу. *Минең өсөн йән ата. Дуҫ тип йән атыу.* ▬ *Аһ, белмәйем, ниңә ҡайтыр өсөн, ҡайтыр өсөн **йәнем аттым** мин.* (Д. Юлтый.) *«Тиҙерәк атла!» — тиеп, тыуған йорттоң Мөрйәһе бит тора **йән атып**.* (Х. Назаров.) *Иштуған **йән атып** йүгереп килгән ыңғайға һеңләһен күтәреп алды.* (З. Биишева.) *Юҡ, тиҙерәк әллә ҡайҙағы сит ҡалаға, ят кешеләр араһына китәм тип **йән ата*** [*Ҡасим*]. (Ш. Янбаев.)

**йән белмәй** [йоҡлау, ятыу...]. Бик ҡаты, һис бер нәмәне тоймай (*йоҡлау*). — *Йә, егет арыҫланы, яҡшы йоҡланыңмы? — тине Йомағол ағай. — Рәхмәт, атай, **йән белмәй йоҡланым**, — тине* [*Айбулат*]. (Ғ. Ибраһимов.) *Етем үҫмер ҡаҡ һикелә, бүркенә башын һалып, ҡолас ташлап, **йән белмәй йоҡлай** ине.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**йән биҙеү** *кемдән, нимәнән*. Бөтөнләй туйыу, күрергә, кисерергә теләмәү. *Полтаваның Бысраҡ урамдарын йөҙгәндә, Һуғышынан, бөтә әмеренән, Ирегенән **йәндәр биҙгәндә**: — Һуғыш бөтһөн!* (Д. Юлтый.) *Ауыл халҡының **йәне биҙеп** бөткән был һатыусыларҙан.* («Сов. Башҡ.»)

**йән биреү**. I. Вафат булыу, үлеү. *Ә һин инде һалҡын окоп төбөндә, һуңғы тыныңды алып, ғәзиз **йәнеңде биргәнһең**. Һин хәҙер мәңгегә ер ҡуйынына инәсәкһең.* (Д. Юлтый.) *Күпме ҡоҙғон күпме йылдар буйы **Йән биререн** көткән халҡымдың.* (Р. Бикбаев.) *Ҡарт ыһ та итмәгән, күҫәген тотҡан көйө **йән биргән**.* (Ә. Вахитов.) *Хәбәр килтергән күҙәтсе иһә күҙен йомдо, арҡаһына ҡаҙалған ағыулы уҡтан **йән бирҙе**.* (Ә. Хәкимов.)

II. 1. Донъяға килтереү, терелтеү. *Һауа матур, яҙғы йылы елдәр үлән, япраҡтарға **йән бирә**.* (Д. Юлтый.)

*син.*: йән бөркөү.

2. *Нимәгә, ни өсөн*. Бөтә тырышлыҡты һалыу, нык бирелеү. *Һағыштарын баҫыр өсөн әллә, Эшкә **бирҙе йәнен** — ир ине!..* (Р. Ғарипов.)

**йән боғаҙға килеү**. Нык арып, үлер хәлгә етеү.

**йән бөркөү**. 1. *кемгә*. Йән индереү, терелтеү. *Ямғыр игендәргә **йән бөрктө**.* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: йән биреү II. 1.

2. *нимәгә*. Йәм биреү, матурлау. *Әсмә, ҡайтып, өй эсенә **йән бөрктө**.* («Сов. Башҡ.»)

**йәнгә инеү**. Кешегә йәшәргә дәрт биреү.

**йәнгә талашыу**. Үлем хәлендә булыу. *Атылған иптәштәр* ***йәнгә талашып*** *ятҡанда ла: «Йәшәһен пролетариат революцияһы!» тип ҡысҡырып ҡорбан булдылар.* (И. Көҫәпҡол.)

**йәнгә тейеү**. Ни менәндер ыҙалау, йонсотоу. [*Ильяс*:] *Улай булғас, ҡыҙҙың ҡолағын игә, минең* ***йәнгә теймә***! (Б. Бикбай.) *Хисбулланы күрмәйһеңме,* ***йәндәренә*** *ығыраҡ* ***тейһәм***, *бирәйһенән салдырырҙар әле, тип, ығышып ултыра ла баһа.* (З. Биишева.)

*син*.: теңкәгә тейеү, маҙаға тейеү, эт итеү.

**йәнде алыу**. 1. Һәләк итеү, үлтереү. *Дошман һыртын биреп ҡасһа ла,* ***Йәнен алыр*** *өсөн барырбыҙ.* (Д. Юлтый.)

*син*.: ғүмерен өҙөү, йәнен өҙөү.

2. Ҡаты ҡыҫыу, ҡурҡытыу (*янағанда әйтелә*). [*Сәрбиямал*:] *Әгәр берәр бәпкәм юғала торған булһа,* ***йәнеңде алырмын***. (З. Биишева.) *Ә бындағы түрә, Наҡышев, уға* [*Касьяновҡа*] *һылтана, ҡыҙа.* ***Йәнебеҙҙе ала***. (Я. Хамматов.) [*Наза*:] *Туҡта әле, мин һинең йөрәгеңә ут һалайым,* ***йәнеңде алайым***! (Б. Бикбай.) *Берүк мин әйткәнде кешегә белдермә,* ***йәнемде алырҙар***. (Һ. Дәүләтшина.)

3. Теңкәгә тейеү, ыҙалау. *Уҫалыраҡ малайҙар Вәхит ҡарт күренһә: — Ана һинең бабаң! — тип* ***йәнде ала***. (Д. Юлтый.) *Сират етте, аҙым һанала,* (*Арттағылар «тиҙ!» тип* ***йән ала***). (М. Илбаев.)

**йәнде аямау**. Көрәштә, эштә үҙеңде йәлләмәү. [*Илья*:] *Эх, молодец Ильяс, ул булмаһа, Янғын промысланы ялмар ине ... Ул иң элек килеп еткән дә,* ***Йән аямай***, *утҡа ташланған.* (Б. Бикбай.) *Башҡорт балалары ошо яуға килгәндә, быға бик ныҡ ышанып, шул юлда* ***йәндәрен аямаҫҡа*** *ант итеп килделәр.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**йәнде ашау**. Тынғы бирмәй әрләү, игәү. [*Ҡотлобай*:] *Йомабикә еңгәң бик гәрсел бисә бит. Ферманан төшөргәндәре өсөн* ***йәнемде ашай***. (Д. Исламов.) *Хәйер, ундай бәндәнең ҡайтмауы яҡшы, тағы* ***йәнеңде ашай*** *башлаһа, үҙең ҡасырға етешерһең.* (Ф. Мансуров.)

**йәнде (йөрәкте) биреп** [эшләү]. Ҙур ихласлыҡ менән, бирелеп (*эшләү*). *Бәхеткә күрә, Исаев һымаҡ эшкә* ***йәнен биреп*** *эшләүселәр районда бик күп.* («Сов. Башҡ.»)

**йәнде уста (ус төбөндә, ҡул осонда) тотоу**. Ныҡ ҡурҡып, ҙур хафа кисереү. *Аҫта упҡын, өҫтә күк тын, Бер хәүефлән, бер кинән... Ҡайсын йырлай, мин* ***йәнемде Усымда тотоп*** *киләм.* (М. Кәрим.) ***Йәнен ус төбөндә тотҡандай*** *булып ҡурҡышынан саҡ ултырған Касьянов кашауаиҙан һикереп торҙо.* (Я. Хамматов.) *Ҡайны-ҡәйнә ҡулында унһыҙ ҙа ҡурҡып ҡына йәшәгән Фатима шунан аҙаҡ* ***йәнен ҡул осона тотоп*** *йөрөгәндәй йөрөнө.* (Ж. Кейекбаев.) **Йәнде ус төбөнә (усҡа) ҡуйыу (алыу)**: ***Йәнде ус***

***төбөнә ҡуйып*** *йәшәй торған ҡот осҡос заманалар килде.* (Ф. Рәхимғолова.)

**йәнде фиҙа ҡылыу.** Үҙеңде ҡорбан итеү, ныҡ бирелеү. *Иген өсөн был яҡтар бик тә уңайлы. Атайым ер эштәренә* ***йәнен фиҙа ҡылған*** *кеше.* (К. Кинйәбулатова.) *Шулай ҙа артҡа сигенеүҙе трест начальнигының ене һөймәй. Дуҫ өсөн* ***йәнен фиҙа ҡылырға*** *әҙер.* («Сов. Башҡ.»)

**йәнде һатыу.** Намыҫҡа ҡаршы эш итеү. [*Әлмәт — Рыҫҡолға*:] *Алланан оял аҙыраҡ,* ***йәнеңде һатма.*** (Б. Бикбай.)

**йәндәй күреү.** Бик ҡәҙерле һанау, яҡын итеү. *Һары ла сәсең үрермен дә, һине* ***йәндәй күрермен.*** (Халыҡ йырынан.)

**йән дә тән.** Бар көскә, бөтә көстө, тырышлыҡты һалып (*ниҙер һөйләү*). ***Йән дә тән*** *ер туҡмайым бер заман, айыу тора бит һаман.* (Һөйл.)

**йәндән артыҡ.** Бик ҡәҙерле, нык яҡын. *Аh! Шул күҙҙәр миңә* ***йәндән артыҡ,*** *бәхет табам ҡарап тороуҙан.* (Ш. Бабич.)

**йәне йөрәк төбөндә** *кемдең.* Ғүмере бик аяулы, үтә ҡәҙерле.

**йәне йәннәттә булһын.** Үлгән кешегә әйтелгән яҡшы теләк. *Мин уларға көйөп баҡтым, көлөп баҡтым, баҡтым йәлләп тә. Әй, иҫәүән, меҫкен һарыҡ баштар,* ***йәндәрегеҙ булһын йәннәттә.*** (Р. Түләк.)

**йәне ҡыл өҫтөндә** *кемдең.* Ғүмере ҡурҡыныс аҫтында, үлем хәлендә.

**йәне ҡайышыу** *кемдең.* Бик нык өҙгөләнеү, рухи ғазап кисереү. *Күрәсәге шул булғандыр баланың... , — тип кенә һүҙҙе бөтөрә. Улы өсөн* ***йәне ҡайышыуын*** *бер кемгә лә белдермәй.* (З. Биишева.)

**йәне ҡом булһын.** Көйәләнеп яфаланһын тигән насар теләк. *Көнсөлдөң* ***йәне ҡом булһын:*** *Байлығым минең бикһеҙ, Керер ере лә киң уның, китер ере лә сикһеҙ.* (Р. Хисаметдинова.)

**йәнен иретеү** *кемдең.* Күңелен үҙеңә ҡаратыу, йомшартыу. *Рәхимә йылы һүҙҙәр менән ярлылыҡтан интеккән Мәғфүрәнең* ***йәнен иретә,*** *үҙенә тарта.* (Һ. Дәүләтшина.)

**йәнен йәһәннәмгә ебәреү (оҙатыу)** *кемдең.* Үлтереү, һәләк итеү. *Динебеҙ һәм батшалыҡтың хас дошманы булған ул Салауаттың* ***йәнен йәһәннәмгә ебәрергә*** *кәрәк.* (Б. Бикбай.) [*Сәрбиямал*:] *Әй, динһеҙ! Сиған балаһы, ниңә эт муйынсағы тағып алдың?* ***Йәнеңде йәһәннәмгә ебәрәм*** *бит хәҙер!* (З. Биишева.) *Рәүеф Дәүләтов үҙе алты фрицтың* ***йәнен йәһәннәмгә оҙатты.*** (Ә. Ихсан.)

*син.*: теге донъяға оҙатыу, йәнен ҡыйыу.

**йәнен көйҙөрөү** (үртәү) *кемдең.* Көйәләндереү, утҡа һалыу. *Өҫтәүенә, колхоз председателе Мирғәли ҙә килеп,* ***йәнемде үртәп китте.*** (Ф. Әсәнов.) *Субудай баһадир тураһындағы көйлө хикәйәт айырыуса* ***йәнен үртәне*** *уның* [*Еҙүкәйҙең*]. (Ә. Хәкимов.)

*син.*: йәнен ҡыйыу.

**йәнен ҡуймау** *кемдең*. Һау, бөтөн ерен ҡалдырмау, туҙҙырыу. *Балыҡ, иртәнсәк килһәк, ауҙың* ***йәнен ҡуймаған***. (Һойл.)

**йәнен ҡыйыу** *кемдең*. 1. Үлтереү, һәләк итеү. *Өс йөҙ йыл аһ орҙоң Ватан тип* ***Йән ҡыйҙың***, *Ҡан ҡойҙоң Ватан тип.* (Ш. Бабич.) *Ҡан өсөн — ҡан ағыҙырға, Йән өсөн* ***йән ҡыйырға***. *Һәр аҙымда дошман* ***йән ҡыя***, *Һәр аҙымда дошман ҡан ҡоя.* (Ғ. Әмири.)

*син.*: йәнен йәһәннәмгә ебәреү, теге донъяға оҙатыу, йәнен өҙөү.

2. Үртәндереү, көйәләндереү. [*Рабиға*:] — *Ҡарасы, Һандуғас еңгә, бынау Алаҡай һауҙырмай ҙа ҡуя, суҡынсыҡ. Шуның* ***йәнемде ҡыйыуы*** *барҙыр мәгәр*. (Я. Вәлиев.) *Донъя йәмен, Кеше* ***йәнен ҡыйыр*** *Болот сыҡмаһын, тим, нисек тә!* (М. Илбаев.) [*Сәкинә — Зарифаға*:] — *Исмаһам, һин бында* ***йәнемде ҡыйма*** *инде, — тип ялынды*. (Н. Мусин.)

*син.*: йәнен көйҙөрөү.

**йәнен өҙөү** *кемдең*. Үлтереү. *Һауаға атҡан уҡҡайым Тау-урмандар аша уҙһасы, Ҡарлуғасҡай ҡошто үлтергәнсе, Бер дошмандың* ***йәнен өҙһәсе***. (С. Юлаев.)

*син. ҡар.*: йәнен ҡыйыу.

**йәнен өйкәү**. Тынгы бирмәү, тынгыһыҙлау. *Мирасовтың түш кеҫәһендәге бер хат, һис тыныслыҡ бирмәйенсә,* ***йәнен өйкәп*** *торған һымаҡ ине*. (Ғ. Ибраһимов.)

**йәненә инеү** *кемдең*. Ауыр хәлдән ҡотҡарыу, үлем тырнағынан йолҡоп алыу. — *Рәхмәт ағай,* ***йәнгә индең***, — *тиҙәр юлсылар һәм урман һуҡмағынан ары китәләр*. («Сов. Башк.»)

**йәне(ң) рәхәт (тыныс)**. Ҡайғы юҡ, күңелең тыныс. *Ғишыҡһыҙҙың* ***йәне тыныс***: *ятһа, үлеп йоҡлайҙыр*. (Халыҡ йырынан.)

**йәнеңә ни кәрәк**. Теләгән нәмә барлығын белдергәндә әйтелә.

**йәне юҡ**. 1. Үтә моңһоҙ, вайымһыҙ.

2. Кешене йәлләй белмәй.

*син.*: ҡаты бәгерле.

**йәне сығырға тора** *кемдең*. Бик хәлһеҙләнгән (*йонсоуҙан, ауырыуҙан һ. б.*)

*син.*: сыҡмаған йәне генә ҡалған.

**йәнен бирергә тороу**. Бөтә көстө, күңелде һалыу. *Алты-ете ай үттеме-юҡмы, эш өсөн* ***йәнен бирергә әҙер торған*** *тынғыһыҙ Ғиндулланы председатель итеп үрләттеләр*. (Н. Ҡотдосов.)

**йән индереү (керетеү)**. Кешенең күңелен йылытыу, йәшәү дәрте уятыу. *Был һүҙ ҡаушап ҡалған балаларға* ***йән индерҙе***. (З. Биишева.) *Кем ул һары таңдан һыйыр һауып, Көтөү ҡыуа йәйен һәр иртә? Ҡарсыҡтарҙың һүнгән донъяһына Килеп инеү менән* ***йән кертә***? (Ф. Рәхимғолова.)

**йән инеү (кереү)** 1. Терелеү. *Декабрь ҡояшының һаран нурҙарын күргәс, туңып барған Һиммәткә* ***йән ингәндәй***, *йылынып киткәндәй булды*. (Р. Өмөтбаев.)

2. Иҫкә килеү, теремекләнеү. *Быға тиклем ҡурҡып ҡына ултырған Ҡәсәй ҡартҡа* ***йән ингәндәй*** *булды.* (И. Көҫәпҡол.) *Бәгиҙәгә лә* ***йән инде.*** *Ҡайын ботағын һындырып, ҡыуыш тирәһен һепереүгә лә тотонҙо.* (Ш. Янбаев.) *Баш гауптвахта тәңгәлендә лә туҡталманылар. Илмырҙаға* ***йән инеп,*** *тағы икеләнеү тойғоһо тыуҙы.* (Я. Хамматов.)

3. Хәрәкәткә килеү, ҡуҙғалыу. *Бөтә нәмәне онотоп, эшкә тотондолар. Төшкә табан машинаға* ***йән керҙе.*** (Я. Вәлиев.) *Һүрелеп барған утҡа* ***йән инде.*** (Я. Хамматов.)

**йән иреү.** 1. Рухи ләззәт кисереү, кинәнеү. ***Йәнем ирей,*** *күктәр шаулатып, Ямғыр ҡойоп болот елгәндә.* (М. Ғәли.) [*Садрисламдың*] *күкрәгендә һаман Гөлйөҙөмдөң йылы тыны* ***йәнен иретеп*** *торғандай.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Аһ, һинең тауышың, ҡанун, Ысын сихырлы мөғжизә, Ысын рәхәт,* ***йәндәр ирей,*** *Ҡандар таша, бәғрең өҙә.* (Ш. Бабич.)

2. Кемгәлер йылы хис күрһәтеү. *Ошо Рахман төп башына ултыртмаһамы, мин иген тапшырыуҙы районда беренсе булып тамамлай инем... Ул кешегә ғүмер буйы* ***йәнем ирейәсәк*** *түгел.* (Д. Исламов.) [*Горячев*:] *Еңеүселәр киң күңелле була, тиҙәр. Шайтан белһен, минең* ***йәнем иремәй.*** (М. Кәрим.)

**йән кибеү.** Йәшәрлек кос ҡалмау. *Ҡасандыр элегерәк бер нисә йыл рәттән ҡоролоҡ була. Иген түгел, үлән дә үҫмәй, Мал ҡырыла, кешеләрҙең* ***йәне кибә.*** (Ә. Вахитов.)

**йән (йөрәк) иреткес.** Күңелгә рәхәтлек, ләззәт биргән. *Ниндәй йөрәк тетрәткес,* ***йән иреткес*** *йырҙар йырлаған башҡорт.* (Ғ. Әмири.)

**йән йәһәннәмгә китеү.** Үлеү (*асыу тойғоһон белдерә.*) — *Ола тайығыҙҙы аттылар дошмандар. Оҙаҡламай үҙҙәренең дә* ***йәне йәһәннәмгә китте,*** — *ти әсәйем.* (К. Кинйәбулатова.)

**йән киҫәге.** Һөйгән, күңелгә бик яҡын кешегә ҡарата әйтелә. ***Йән киҫәгем,*** *алтыным тинем һине, һөйҙөм һине.* (Т. Йәнәби.)

**йән көйөү.** Асыу килеп, көйәләнеү. *Шәрип үҙе лә һиҙмәҫтән, ығы-зығылана башланы. Юҡҡа-барға* ***йәне көйә.*** (Ә. Вахитов.) *Әллә ҡайҙа йөрөгән Тимерйәнгә* ***йәне көйҙө*** *Үмәр ҡарттың.* (Ш. Янбаев.) ***Йән көйөп*** *киткән саҡта, колхоздың хужаларын әрләп тә ташлайым мин, минең етешһеҙлегем шунда ғына.* (М. Тажи.) *Таштар, ышҡылып, тупраҡтары ҡойолоп, ағарып бөткән. Миһрандың уларға ниңәлер* ***йәне көйҙө.*** (Р. Солтангәрәев.)

**йән ҡарайыу.** 1. Бик ныҡ үртәнеүҙән, асыуҙан түҙә алмау.

2. *диал.* Бик ныҡ үпкәләү.

*син.*: хәтер ҡалыу.

**йән ҡороу** *кемгә.* Күңел йылылығы бөтөү, һыуыныу. *Элек-электән ағаһына* ***йәне ҡорогайны*** *инде уның. «Әйҙә, көтөү көтөп йөрөһөн ине шунда...», тип уйланы Тимерҡаҙыҡ.* (Ғ. Ибраһимов.)

**йән ҡуйыу**. Үлеү. *Ҡуҙыйкүрпәс шул ваҡыт, Билдән бысағын алған, Дейеүҙең уң табанына бик ҡаты яра һалған. Дейеү ҡот осҡос үкереп шул урында **йән ҡуйған**.* (Эпостан.)

*син. ҡар.*: йән биреү 1.

**йән өрөү** *кемгә, нимәгә*. 1. Терелтеү. *Бына бөгөн инде Мәғәфүров һауығып өйөнә ҡайтып китте. Тимәк, Татьяна Ҡәҙерғәлина тағы ла бер түгел, ике ғүмергә **йән өрҙө**.* («Сов. Башҡ.»)

2. Хәрәкәткә килтереү, тере кеүек итеү. *Бында [Мәскәүҙә] иң оҫта совет реставраторҙары һәләк булыуға дусар ителгән картиналарға **йән өрәләр**.* («Сов. Башҡ.») *Түбәндә бала-сағаларҙың сыр-сыуы ошо бер ҡараштa артыҡ тын тойолған, кешеһеҙлектән моңһоуланып киткән тирә-йүнгә **йән өрөп** ебәргәндәй тойола.* (Ә. Вахитов.) *Таш һынға **йән өргән** тылсымлы һүҙ кеүек булды Гөлгөнәнең өндәшеүе.* (Ш. Янбаев.)

3. Эшмәкәрлеген көсәйтеү, ҡуҙғатыу. *Буранбай хәбәре иптәштәргә яңы **йән өрҙө**. Буранбай арҡыры улар яңы донъя асҡан кеүек булдылар.* (Д. Юлтый.) *Ә ни бары ун ете көндән һуң улар беренсе пьесам «Туй дауам итә»лә минең зәғиф кенә парсаларыма **йән өрҙөләр**.* (М. Кәрим.)

**йән өшөү**. Бик ныҡ биҙеү, ытырғаныу. [*Ҡыраубикә:] Эшең уң сыҡмаһа, бәләһе үҙеңә булыр. Былай ҙа **йән өшөп** бөткән.* (Д. Юлтый.) *Шиктәреңде ташла ситкә, Йылмая күр, **йәнем өшөй**, Ҡараштарың алманы — таш, Ташты алма итер кешем.* (Р. Бикбаев.) *Май аҙағы еткәс, **йән өшөткөс** хәбәр килде: «Көтөп ҡаңғырма...»* (Р. Сафин.)

**йән сығыу**. 1. Үлеү. *Һинең менән даным сыҡты, **йәнем сыҡһын** ҡуйыныңда.* (Халыҡ йырынан.)

*син. ҡар.*: гүргә инеү.

2. Бик ныҡ арыу, йонсоу. *Бына беҙҙең Айбикә киленде әйтәм әле, бер эш мәнеһе белмәй бит бахырҡай. Әйтә-әйтә, өйрәтә-өйрәтә **йәнең сыға**.* (Һ. Дәүләтшина.)

*син.*: хәлдән тайыу.

3. Ҙур хафа кисереү, оҙәләнеү. *Күрше-фәләнгә сыҡһаң, былар сыулашып бер нәмә ҡуптармаһындар, тип **йәнең сыға**.* (Т. Хәйбуллин.)

**йән тапшырыу** *иск*. Үлеү. *Дошман ҡулынан **йән тапшырып**, Бабсаҡ батыр ятты шулай.* («Бабсаҡ менән Күсәк».)

**йән тартыу** *кемгә*. Аралашыуға, яҡын булырға теләк тыуыу.

**йән ҡыйналыу**. Яфа кисереү, ыҙаланыу. ***Йән ҡыйналмай** йомош бөтмәй.* (Әйтем.)

**йән теләгән [нәмә]**. Кәрәк булған, оҡшаған. — *Хәҙер магазиндарҙа ла **йәнең теләгән** нәмәне алып була, — ти хужабикә Ғәлиә апай.* («Сов. Башҡ.») ***Йәне теләгән** саҡта **йәне теләгән** кешеләр менән генә аралашты һәм яҡынлашты ул [Б. Бикбай].* (М. Кәрим.)

*син.*: күңел тартҡан.

**йән теләгәнсә**. 1. Күпме кәрәк шулай (*ниҙелер алыу*).

2. Нисек оҡшай шулай (*эш итеү*). *Гүзәл! Гөлсөм! Гөлкәй, булмаһа! Исемдәр күп,* ***йәнең теләгәнсә*** *һайла ла ал шул иң-иң аҫылын.* (Ф. Рәхимғолова.)

**йән терәге**. Тормошта ышаныр, таяныс булыр кеше. «***Йән терәгем*** *кем?» — тип һорағанда,* «***Йән терәгем*** *фәлән кеше»,* — *тип яуап бирәләр.* (Т. Морат.)

**йән тетрәү**. Бик ныҡ тулҡынланыу. *Шундай бер йыр йырлармын, ҡыҙҙарҙың* ***йәне тетрәр.*** (Р. Шәкүров.)

**йән тиргә төшөү (батыу)**. Ныҡ арыу, хәлдән тайыу. *Ҡоласын йәйеп уларға ташланған ыңғайға, Заһиҙә әбей* ***йән тиргә төшөп*** *уянып китте.* (Н. Мусин.) *Ханов иптәш, аэропортты пассажир булмаған йән әйәләренән тиҙерәк таҙартыу өсөн,* ***йән тиргә батып****, саба ла саба.* («Сов. Башҡ.»)

**йән түҙмәү**. Сыҙай алмау, ашҡыныу.

**йән-тән менән**. Бар булмышы менән, ысын күңелдән. *Беҙ уны* [*апайымды*] «*Мир әсәһе*» *тип кенә йөрөтәбеҙ.* ***Бөтә йәне-тәне менән*** *халыҡтыҡы ул.* (К. Кинйәбулатова.)

**йән тәслим***. Бар булған коскә, бөтә көстө һалып. ***Йән тәслим*** *тырышыу.* ***Йән тәслим*** *сабыу.*

[***Тәслим** — *ғәр.* бирелеү.]

**йән ус төбөнә килеү (етеү)**. Бик ныҡ ҡурҡыу, тетрәп тороу. *Йәмғиҙең көтөлмәгән хәбәренән ҡыҙҙың* ***йәне ус төбөнә етһә лә****, Фәтихте күреү менән уның күҙ алды ҡараңғыланып китте.* (Х. Ғиләжев.) [*Шаһи:*] *Кәкре күпер тиерлекме һуң? Машина менән сыҡҡан һайын* ***йәнем ус төбөнә килеп етә*** *торғайны.* (М. Кәрим.)

*син.*: ҡот осоу, ҡот ботҡа китеү.

**йән һөйгән**. Ныҡ яратҡан кеше. *Диңгеҙҙең ҡотороуы хәҙер сиктән ашты. Ләкин Зөлхизәне был ҡурҡытмай. Аҙнағоло —* ***йән һөйгәне*** *барында уға ниндәй ҡурҡыныс булыуы мөмкин!* (З. Биишева.)

**йән һөймәү** *кемде*. Яратмау, оҡшатмау. *...Хәҙер бына егет Аҙнағолдо тәү тапҡыр күреүҙә үк Юламан ҡарттың* ***йәне һөймәне.*** (З. Биишева.)

**йән әсеү (әрнеү)**. Ауыр рухи ғазап кисереү, аҙарыныу. *...Йөрәгем һурылып бара. Күҙем күрмәһә, әллә, бәлки, улай булмаҫ та ине. Күҙ күргәс,* ***йән әсей*** *бит.* (Ғ. Дәүләтшин.) *Саптар айғырҙы һәр ваҡыт Ғилаждың оло улы Мансур менеп йөрөй. Ул юҡ саҡта уның энеләре Шакир менән Закир менеп йөрөй. Сөнәгәттең* ***йәне әсей****, әлбиттә.* (Ж. Кейекбаев.) *Ил зарын күреп, аҡҡоштар, Аҡ ҡайындар илаған, Ярлы меҫкен* ***йән әсеүен*** *Көйгә һалып йырлаған.* (А. Игебаев.)

*син. ҡар.*: бәғер телғеләнеү.

**йә уңа ла йә туңа**. Ниндәйҙер эш-ҡылыҡты тәүәккәлләгәндә әйтелә.

**йәһәннәм аҫты (аръяғы, арты, төбө)**. Бик алыҫ урын. *Тыуған ауыл әллә ҡайҙа* «***йәһәннәм» аҫтында*** *ҡалған һымаҡ булып*

*тойола.* (Т. Йәнәби.) *Беҙ ни уйлап йөрөгәнде әйткәс, улар: «Ниңә әле* ***йәһәннәм аҫтында*** *тигәндәй, алыҫтағы, хан заман юғалған ерҙе юллап маташаһығыҙ?..» тиҙәр.* (Һ. Дәүләтшина.) *Ата-йымды күрер өсөн* ***йәһәннәм артына*** *китер инем. Бик һағындым.* (Р. Низамов.) *Район бик алыҫ,* ***йәһәннәм төбөндә*** *ята.* (Я. Хамматов.)

*син. ҡар.*: ер аяғы ер башы.

**йәш башы(ң) менән.** Ололарҙан алға сығып эш ҡылған кешегә шелтәләп әйтелә. *Кешеләр ҙә миңә ҡарай: йәнәһе,* ***йәш башы менән*** *ултыра, ә оло кеше баҫып тора.* (Р. Солтангәрәев.)

**йәшел билет** *иҫк.* Хәрби хеҙмәттән ваҡытлыса ҡалдырыу хоҡуғы биргән йәшел төҫло документ. *Был арала тағы ла бер тапҡыр призывҡа барырға тура килһә лә, һаман да «****йәшел билет****»ҡа ҡалдым.* (Т. Йәнәби.)

**йәшел ағыу.** Наркотик матдәләр. *Улар беҙҙең яҡтарға* ***йәшел ағыуҙы*** *йәшерен юл менән килтерә.* («Башҡортостан».)

**йәшен йәшәгән, ашын ашаған.** Ныҡ ҡартайған кешегә ҡарата үлһә лә үкенесле түгел икәнде белдергәндә әйтелә. *Бабай васыят әйтеп ҡалдырған: — Уландарым, инде мин* ***йәшемде йәшәнем, ашымды ашаным****, үлһәм дә үкенмәйем, — тигән.* (Әкиәттән.)

**йәшен тиҙлеге менән.** Бик тиҙ. *«Салинский!» тигән уй* ***йәшен тиҙлеге менән*** *Нестеровтың башынан үтте.* («Сов. Башҡ.») *Был уй Ғилаждың башынан* ***йәшен тиҙлеге менән*** *үтеп китте.* (Ж. Кейекбаев.)

*син. ҡар.*: күҙ асып йомғансы.

**йәште ҡан итеү.** Ҡаты йәберләү, әсе йәш түктереү. [*Мөләк ҡарт*:] *Үсең булһа, минән ал. Зинһар, башҡаларҙың* ***йәшен ҡан итмә.*** (Т. Хәйбуллин.)

**йәш түгеү (ағыҙыу).** Зар илау, интегеүҙән илау. *Әсе йәш түгеү. Әсе күҙ йәшен түгеү. Ҡанлы күҙ йәше түгеү.* ▬ *Шунда әрнеп, мин дә* ***йәште түктем****, кем, тип, олаҡтырған бесәйҙе?* (Ш. Бабич.) *Ишетелә ҡолдарҙың зар йыры,* ***Йәш түгә*** *һылыуҙар зинданда.* (М. Кәрим.)

**йәшәй ҙә китә.** Берәй нәмәгә тиҙ генә ҡыуанып барған кешегә ҡарата әйтелә. *Ҡомартҡыларын һанларҙай кеше килһә,* ***йәшәй ҙә китә*** *ул Хасбулат апам.* (З. Биишева.)

# К

**кейеҙ ҡолаҡ.** Кеше һүҙенә ҡолаҡ һалып бармай, әйткәнде алмай торған. *Беҙҙең Тимеркәй бик* ***кейеҙ ҡолаҡ****, бер ҙә әйткәнде ишетмәй...* (М. Буранголов.) [*Имай — Айбулатҡа*:] *Һиңә әйтәм бит,* ***кейеҙ ҡолаҡ!*** (Д. Юлтый.)

**кейәһе етеү.** Аш-һыуҙың, мал-мөлкәттең хөрмәт ителергә, ололанырға тейеш булып, шуны боҙған кешегә зарары тейеү. [*Кунаҡбикә*:] *Ҡуй инде хоҙайым, бөгөнгө һөтөм бөтөнләй әшлектән сыҡты.* ***Кейәһе генә етмәһә*** *ярар ине, исмаһам.* (Д. Юлтый.)

**кем белә.** Билдәһеҙ (*икеләнеү, ышанып етмәүҙе белдергәндә ҡулланыла*). *Бәлки юл тура килһә, тағы ла килеп сығырбыҙ,* ***кем белә****?* (Д. Юлтый.) ***Кем белә****, ул үҙенең киләсәге өсөн шулай бошона торғандыр.* (С. Агиш.)

**кемгә барып бәрелергә белмәү.** Кемдән кәңәш, ярҙам һорарға белмәй аптырау. [*Ильяс*] ***Кемгә барып бәрелергә****, ҡайғыһын кем менән уртаҡлашырға белмәй яфаланды.* (Ғ. Ибраһимов.)

**кемдеке — шуныҡы.** Эш-ҡылығы, тәртибе, өҫ-башы һ. б. менән оят килтерерлек булмаһын. [*Председатель*:] *Ҡустым, аттың иң яҡшыһын һайлап ек.* ***Кемдеке — шуныҡы****: колхоздың йөҙөнә ҡыҙыллыҡ килтермәһен.* («Сов. Башҡ.»)

**кемдең кем икәнен белеү (аңлау).** Бер-берәүҙең ысын йөҙөн асыу (*ғәҙәттә, кире мөнәсәбәт белдергәндә әйтелә*).

**кемдең үҙе <маңлайында ике күҙе>.** Һүҙ үҙе хаҡында барғанды белмәй, «кем дә кем» тип һораған кешегә ҡарата шаяртып әйтелә.

**кем дә кем.** Кем булһа ла, берәй кеше.

**кем етте <шул (шуға...)>.** Кем теләһә шул, төрлө кеше. *Өфө һәм Ырымбур губерналарындағы ваҡиғаларҙы өҫтән-мөҫтән,* ***кем етте шунан*** *ишетеп кенә белә* [*Хисмәтулла*]. (Я. Хамматов.) *Һуңғы йылдарҙа балыҡты* ***кем етте шул*** *тота.* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: теләһә кем.

**кем менән уртаҡ.** Бөтә кеше лә файҙалана ала, берәү ҙә тыймай. *Вагон түбәләре, буферҙар* ***кем менән уртаҡ****, тинек тә, алмаш күлдәктәр һалынған төйөнсөктәрҙе алып, юлға сыҡтыҡ.* (С. Агиш.)

**кендек <менән> йәбешеү (бәйләнеү)** *һөйл.* Берәй кешегә йәки урынға нык эйәләшеп, айырыла алмаҫ булыу. — *Исламдарға* ***кендегем йәбешкәнме*** *ни? Мин дә башыма бүрек кейгән ир ҙә баһа.* (Ә. Зәйнуллин.) *Крәҫтиән ғаиләһендә тыуып,* ***кендектәре менән ергә йәбешеп*** *үҫкән һалдаттарға эсерҙар айырыуса йоғонто яһай.* (В. Исхаҡов.) *Артыҡ ... һорама, билдәле бит кемлегем. Ары китәм, киләсәккә* ***бәйләнгән бит кендегем****.* (Т. Йосопов.)

**керпегенән гөл(дәр) тама** *шиғр.* Бик матур, ифрат та мөләйем; гүзәл. *Урамдан уҙып бара, Ҡашынан күҙе ҡара;* ***Керпегенән гөлдәр тама****, күрһәм, йөрәгем яна.* (Халыҡ йырынан.)

*син. ҡар.*: күреп туймаҫлыҡ.

**керпек ҡаҡҡансы.** Бик тиҙ, йәһәт. **Керпек ҡаҡҡан тиклем:** ***Керпек ҡаҡҡан тиклем*** *ғүмеремдә ирек алған халыҡ эсендә, иркен ерҙә, иркен ҡалһа инем өнөмдә, ләкин түгел төшөмдә.* (Д. Юлтый.)

*син.*: күҙ асып йомғансы, «һә» тигәнсе.

**керпек <тә> ҡаҡмау.** Бөтөнләй йоҡламау. *Өммөгөлсөм был һуңғы өс төндә* ***керпек тә ҡаҡмай*** *үткәрҙе.* (З. Биишева.) ***Керпек тә ҡаҡмай*** *уның баш осонда ултырып төн сыҡҡан Зөлхизә...* (Н. Мусин.) [*Йәрмөхәмәтов*] *Төнө буйы* ***керпек тә ҡаҡманы...*** (Ф. Исәнғолов.)

*син.*: күҙ ҙә йөммау.

**кесерткән тел(ле).** Үтә зәһәр, төртмә һүҙле, үткәргәнсе әйтә торған. — *Яңы хужа эште кәңәшмәнән башларға уйланы, эсергә һыу ғына етһә ярар ине, — тип төрттөрҙө Гөлъямал исемле* ***кесерткән телле*** *апай.* (Н. Ҡөтдосов.)

*син.*: әсе (әрем) телле.

**кеҫәгә инеү.** Аҡсаны, мал-мөлкәтте үҙләштереү. *Колхоз* ***кеҫәһенә инеү.***

**кеҫәгә һуғыу*.** Аҡса, хаҡ яғынан ныҡ зыян күреү. *Дүртенсе көндө Аҙнагол: — Сауҙаны шунан да оҙаҡҡа һуҙыу* ***кеҫәгә нык һуғасаҡ,*** *— тип белдерҙе.* (З. Биишева.) *Ун биш-егерме көн үтеүгә мал ябығасаҡ, тимәк, хәҙерге ауырлығы кәмегәс, колхоз* ***кеҫәһенә һуға.*** («Сов. Башҡ.») *Сығымдарҙы нык ҡына ҡыҫырға тура килде. Әлбиттә, был ҡайһы берәүҙәрҙең* ***кеҫәһенә һуҡты,*** *командировкаларға тотоноуҙарҙы ла кәметергә тура килде.* («Башҡортостан».)

[* Рус телендәге «бить по карману» берәмегенән].

**кеҫә ҡалынайтыу.** Аҡса туплау, байлыҡ йыйыу. *Ҡулында аты йәки автомашинаһы булған кешеләр араһында, ағасты рөхсәтһеҙ ҡырҡып,* ***кеҫә ҡалынайтыусылар*** *ҙа аҙ түгел.* («Сов. Башҡ.»)

**кеҫәлә елдәр уйнау.** Бер тин аҡса ла булмау.

**кеҫә таҡырайыу (һайығыу).** Аҡса нык кәмеү, бөтөү. [*Аллаяр:*] *Николашка батшаның да* ***кеҫә таҡырая,*** *Дауыт мырҙа.* (Б. Бикбай.)

**кеҫәһе ҡалын (ҡалын кеҫәле).** Аҡсаһы күп, бай. ... *Уларға ни булыр тиһең, уларҙың* ***кеҫәләре ҡалын,*** *теләһәләр, ике донъяны бер юлы һатып алырҙар.* (Һ. Дәүләтшина.)

**кеше айырыу.** 1. Кешеләрҙе таный белеү.

2. Төрлө кешегә төрлөсә ҡарау; берәүгә яҡшы, берәүгә насар булыу. [*Низам:*] *Колхоз булғас, тигеҙ булһын ине,* ***кеше айырырға*** *ярамаҫ ине, тим.* (М. Тажи.)

**кеше (әҙәм) аяҡ баҫмаған [урын, ер].** Бер кем дә булмаған, ҡырағай (*урын*). *Тыуған илебеҙҙе ташлап, беҙ алыҫ далаларҙа,* ***кеше аяҡ баҫмаған*** *тау араларында йөрөйбөҙ.* (Ш. Шәһәр.) *Артабан әҙәм* ***аяғы баҫмаған*** *урмандар башлана.* (Ж. Кейекбаев.) *Илтегеҙ һеҙ уны* [*Талипты*] *шундай ергә —* ***Әҙәм аяҡ баҫмаҫ*** *урынға.* (Б. Вәлид.)

**кеше булыу.** 1. Үҫеп етеп, уҡып үҙ аллы йәшәрлек булыу. [*Новиков:*] *Разве һиңә һуғышҡа китергә кәрәк! Һинең уҡый торған*

*вакытың — **кеше булыу** өсөн әҙерләнә торған вакытың.* (Д. Юлтый.)

2. Ауырыуҙан арынып, хәл алыу; һауыгыу. [*Карам*:] *Мин **кеше булыуҙан** уҙғанмын. Тыныс кына үлергә ирек бирегеҙ.* (Р. Хөсәйенов.)

*син.*: аяҡҡа баҫыу.

**кеше итеү.** 1. Үҫтереп укытып, үҙ аллы йәшәрлек хәлгә еткереү. *Яңылыкка ынтылыусы Заһиҙулла карт Ғәйнулланы **кеше итергә тырыша.*** («Сов. Башк.») *Маладис хөкүмәт, **кеше итә** етемдәрҙе.* (Б. Бикбай.)

2. Ауырыуҙан тергеҙеп, аяҡҡа баҫтырыу.

**кеше йығылғанға осаны ыуыу** *һөйл.* Бүтәндәр кайғыһып кайғы итеп һанау (*был кылыкты хуп күрмәгәндә әйтелә*). *...Добровтың, үҙе теләп, Воробьевка ярҙамға килгәнен Ырғакбаев башкаса аңланы. «Командир алдында якшатланырға тырыша, — тип уйланы ул. — Югиһә, **кеше йығылғанға осаһын ыуып** йөрөмәҫ ине».* (З. Рафиков.)

**кеше йәнле.** Кешегә якшы мөнәсәбәтле, кешелекле. *Ауыр хәлдән коткарҙығыҙ. **Кеше йәнле** кешеләр икәнһегеҙ.* (Ғ. Ғүмәр.)

**кеше көлдөрөп, эт өрҙөрөп (йөрөү).** Көлкөгә, мыҫкылга калып нindәйҙер эш кылып йөрөү. [*Фатиха апай*:] *...Балалар хакына кисерә бөтәһен дә, булған эш булған, йөрөмә былай итеп, **кеше көлдөрөп, эт өрҙөрөп.*** (З. Йәнбирҙина.)

**кеше көнөнә калыу.** Үҙеңде-үҙең карай алмаҫлык хәлгә төшөү (*картайып йәки ауырыуҙан.*) *Картлык һорап килмәй. Ғүмер үтеү менән, колак катыланып, күҙ зәғифләнеп, зиһен таркала. Тора-бара **кеше көнөнә калаһың.*** (Д. Мәһәҙиев.)

**кеше күҙендәге сүпте күреү.** Башкаларҙың ғәйебен асып, үҙеңдекенә иғтибар итмәү.

**кеше йырын йырлау.** Үҙ фекере булмау, башкаларга гына эйәреү. [*Сәғиҙә*:] *Куй, былай һөйләшмәгеҙ, был һеҙҙең үҙ һүҙегеҙ түгел, колхозга каршы уйлы **кешеләрҙең йырын йырлайһығыҙ** бит.* (М. Тажи.)

**кеше күңелле.** Башкаларға ихлас мөнәсәбәтле, кеше көйөнә тора торған, кеселекле. ***Кеше күңелле** кешеләр икәнһегеҙ.* («Сов. Башк.»)

**кешенеке — кештәктә (итәктә) <үҙеңдеке — үҙәктә>.** Ят кеше өсөн кайғырмау, хәсрәтен күңелгә якын алмау. *Башка ауылдарҙың яндырылғанын күрһә лә [Киҫәкбикә] «**кешенеке итәктә, үҙеңдеке үҙәктә**» тигәндәй булғайны.* (М. Буракаева.)

**кешенең менен* табыу** *һөйл.* Башкаларҙың тырнак аҫтынан кер эҙләү.

[***мен** — *иҫк.* һүҙ.]

**кеше рәтенә инеү.** Тормош хәлен рәтләп алып, башка кешеләр һымак йәшәй башлау.

**кикереген төшөрөү (шиңдереү)** *кемдең.* Тәкәбберлеген кыйратыу, артык мактаныуына сик куйыу. *Кустыһы Хәбибрахман*

*кеүек танау аҫтында яңы мыйыҡ шытып килгән малайҙар, комсомолға инеп алып, уның кеүектәрҙең* ***кикректәрен тиҙ шиңдерҙе.*** (Д. Буләков.)

**кикрек төшөү (шиңеү, һалыныу).** Тәкәбберлек, маһайыу юҡҡа сығып, күңелһеҙләнеп ҡалыу. [*Ғәфүр Дауытҡа*:] *Ни булды һиңә? Нимәгә* ***кикрегең төштө****?* (Ш. Янбаев.) [*Егет*] *Иллә хәтәр ебәрҙең, апай, шәп иттең. Әтәсләнеп торһа ла теге ...* ***кикреге шиңгәндер.*** (Н. Мусин.)

**килен күрһәтеү.** Килен төшөргәс, туған-ырыуҙы саҡырып һыйлау.

*син.*: килен сәйе эсереү.

**килен сәйе эсереү.** Килен төшөргәндә туған-ырыуҙы саҡырып алыу.

**килен туны.** Килен менән бергә килгән мал-мөлкәт. *Булырым булған,* ***килен туным*** *туҙған.* (Мәҡәл.)

**килен һөйөү.** Кейәү тугандарының килен менән танышып, бүләк биреү йолаһы.

**килер ере киң булһын.** Мал-мөлкәт, табыш күп булһын, тип теләгәндә әйтелә. *Тир ағыҙып, күкрәк киреп эшләһәң,* ***килер ерең дә киң булыр****, ғүмерең, бәхетең дә тиң булыр.* (А. Игебаев.)

**киң күңелле.** Оло тәбиғәтле, кешегә ярҙамсыл, йомарт. *Таиба әбей, былай изгелексән* ***киң күңелле*** *булһа ла, ҡорораҡ, ҡатыраҡ һөйләшеүсән.* (З. Биишева.)

*ант.*: тар күңелле.

**киң урамды тар итеп** [йөрөү]. Үҙенде урамда иркен тотоп, эре генә атлап (йөрөү, үтеү). *Демократик аҙымдар менән ғорур атлап,* ***киң урамды тар итеп*** *үтте улар.* (М. Сәлимов). *Киң урамдар тар ине,* ***киң урамды тарҙар итеп*** *йөрөгән саҡтар бар ине.* (Халыҡ йырынан.)

**кирегә бөткән.** Үҙ һүҙен генә һүҙ итә торған, тиҫкәре. *Минең шундай ҡарышыуҙарға ерәнеп тә ҡуялар. Бик* ***кирегә бөткән****, тиҫкәре малай итеп күрәләр.* (С. Агиш.) *Бер аҙ тынысланһын, уйлаһын, бөтөнләй үк* ***кирегә бөткән****, тиҫкәре кеше түгел бит.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Ләкин уны шул хәтле* ***кирегә бөткән*** *әҙәмдер тип уйламағайным.* (Н. Мусин.)

**кире(гә) китеү.** Бөтөнләй насарланыу, уңмай башлау. *Бәхете* ***кире киткәндең*** *эте ҡараҡ киткәс өрөр.* (Мәҡәл.) *Хәбирйән һөйләй: «...Эш бер* ***кирегә китһә*** *китә бит ул — яңғыҙ аттан да яҙылды».* (Б. Бикбай.)

**кирегә һаплау.** Ыңғай һүҙҙе, эш-ҡылыҡты тиҫкәрегә тартыу, ҡапма-ҡаршы мәғәнә сығарыу. *Ер һатыу тураһында мәсьәлә ҡырҡа өҙөлдө, һис кемдең дә ғауға-тауыш сығарыуға, тауыш күтәреүгә,* ***кирегә һапларға*** *хаҡы юҡ...* (Т. Хәйбуллин.) [*Сәләх*:] *Ҡуйсы әле, Абил. Коммунист башың менән гел* ***кирегә һаплайһың.*** (А. Таһиров.)

**кире ҡағыу.** 1. Тәҡдимде, үтенесте һ. б. ҡабул итмәү, кәрәк тапмау. *Һораүҙы кире ҡағыу.* ▬ *Был никахтың аҙағы хәйерле*

*бөтөүенә ышанысым булмаһа ла, **кире ҡаҡмам** бүтән.* (З. Биишева.)

*син.*: кире һуғыу.

2. Ҡаршы тороу, ҡайтарыу; бирелмәү. *Һуғыш ике сәғәткә һуҙылды. Дошмандың танк атакаһы **кире ҡағылды**.* (Ә. Харис.)

2. Ниҙелер танымау, баш тартыу. *Ғәйепте **кире ҡағыу**.*

**кире һуғыу**. Тәҡдимде, үтенесте һ. б. ҡабул итмәү, уиан баш тартыу. *Йөҙөкәс, үҙең беләһең, мин ебәргән яусыны атайыңдар **кире һуғып** ҡайтарҙылар.* (Һ. Дәүләтшина.)

**кире һүреү** *кемде*. Уй-ниәттән ҡайтарыу. [*Садрислам Фәйзуллаға*:] *Шул әүен һуғыуҙан халыҡты **кире һүреп** булмаҫмы икән?* (Ф. Иҫәнғолов.)

**кире уйлау**. Уй-ниәттән ҡайтыу, дүнеү.

**кире һүтеү**. Эште тәүге хәленә ҡайтарыу. [*Үмәр ҡарт*:] *Мулла һиңә уҡыған никахты **кире һүтә** аламы ни?* (Һ. Дәүләтшина.)

**китап ене ҡағылған**. Китап йыйып, күп уҡып, шуның менән генә мәшғүл булған (*кеше*). *Риза Фәхретдинов китап күсереүсе каллиграфтарға — ғөмүмән, «**китап ене ҡағылған**» кемсәләргә тәү башлап ҡыҫҡа-ҡыҫҡа характеристика биргән.* (Ә. Харисов.) *Һинең һымаҡтарға **китап ене ҡағылғандыр**, тиҙәр, электән, Ен тигәне нишләп ҡушылғандыр, килеп сыҡҡандыр ул нилектән?* (И. Кинйәбулатов.)

**китап ҡушмай**. Ниндәйҙер эш-ҡылыҡтан тыйғанда әйтелә; ярамай.

**китап маҡтай**. Эш-ҡылыҡты хуп күргәндә әйтелә. *Егеттең мут булыуын, ике күҙе ут булыуын да **китап маҡтай**.* (В. Нафиҡов.)

**кит артабан (кит унан, кит әле)**. 1. Көтөлмәгән хәбәр ишеткәндә ышанмау, аптырап ҡалыуҙы белдерә. *Ҡотлоярҙың ысынлап та иҫе китте: — **Кит артабан**. Юҡты һөйләмә! Әллә һин төш һөйләйһеңме? Әллә ысынлап та Григорий менән осраштыңмы?* (Һ. Дәүләтшина.) *Мин Ивановты осраттым һуғышта, Тихонды. Беләһеңме, Ырымбурҙан. — Иванов Тихон тиһеңме? **Кит әле, ысынмы**?* (Ж. Кейекбаев.)

2. Һүҙҙе ҡабул итмәүҙе, кире ҡаҡҡанды белдерә. ***Кит әле**, бармайым мин унда.*

**киткән баш киткән**. Сараһыҙҙан тәүәккәллек эшләгәндә, үҙенде-үҙең ҡеүәтләп әйтелә.

**китте баш, ҡалды муйын һерәйеп**. Ниндәйҙер еңелерәк бәләгә осрағанда шаяртып әйтелә.

**кишер сәйнәү**. Юҡ-бар хәбәрҙе ҡат-ҡат һөйләү. — ***Кишер сәйнәмә**! — Әшнәһе лә уҫалланды. — Йығылғанды типкеләмә.* (А. Мағазов.)

**көҙгө кеүек** [ялтыр, шыма]. 1. Бик тигеҙ, шыма булып, ялтырап ятҡан нәмә, майҙан тураһында.

2. Ялағай, үтә ярамһаҡ кеше тураһында. *Хәҙер беләм мин, танйым мин хәҙер ундайҙарҙы,* ***күҙгә keyek ялтырап,*** *үтә күренеп торалар улар хәҙер миңә.* (З. Биишева.)

**күҙгә әтәс** *һөйл., кәмһ.* Хәл-әхүәленә, көсөнә ҡарамай үҙенән көслөрәктәр менән алышып, көрәшеп маташҡан кешегә ҡарата мыҫҡыллап әйтелә. *Килгәс тә, ҡарт уҡытыусыларҙың күбеһе менән Булаттың борсағы быҡмай,* ***күҙгә әтәс,*** *тип ҡарайҙар уға.* (Ә. Вахитов.)

**күҙән йыйырыу.** Ҡапыл тән өлөштәре тартышыу (*һыуыҡтан, ауырыуҙан һ. б.*). *Сәғиҙә хатты йән асыуы менән йомарлап усына йоммаҡ булғайны, бармаҡтары* ***күҙән йыйырып,*** *бер-береһенә йәбештеләр, конверт иҙәнгә төшөп китте.* (М. Тажи.) *Тәмәке тартыусы күп кенә кешеләрҙең йыш ҡына аяҡтары ауырта, балтырҙарын* ***күҙән йыйыра.*** («Сов. Башҡ.»)

**көйгә килеү.** 1. Өготкә, һүҙгә ыңғайлау; тыңлау. ***Көйгә килә*** *торған кеше түгел ул.* (Һөйл.)

2. Көйләнеү, рәтләнеү (*эш-хәл тураһында*).

**көй килеү.** 1. Йырларға дәрт уяныу. *Ай-һай ғына тимәй,* ***көйҙәр килмәй.*** (Халыҡ йырынан.)

2. Кәйеф күтәренке булыу. ***Көйө килһә,*** *эшләй, килмәһә юҡ.* (Һөйл.)

**көйө китеү** *кемдең, нимәнең.* 1. Эштең рәте, барған тәртибе боҙолоу. *Һуңғы ваҡытта ни эшләптер команданың* ***көйө китә*** *башланы. Торған һайын балалар эшкә күңелһеҙерәк тотоналар.* (Ф. Иҫәнғолов.)

2. Кәйеф ҡырылыу, күңелһеҙләнеү. *Иртәндән ҡатындың* ***көйө китеп*** *тора әле.* (Һөйл.)

**көйөн табыу (күреү)** *кемдең.* Ыңғайына тороп, кәйефен күтәреү. *Көйһөҙ кейәүҙең* ***көйө табылмаҫ.*** (Мәҡәл.)

**көйөнә (ыңғайына) тороу** *кемдең.* Үҙенә, теләгенә ҡаршы килмәй үтәп тороу. *Балаңдың гел* ***көйөнә тороп,*** *боҙоп бөтәһең инде.* (Һөйл.)

*син.*: ыңғайына һыпырыу.

**көйһөҙ кейәү** *һөйл.* Үҙ көйөн көйләтеп кенә торған, бик мыжыҡ кеше.

**күлгә аунаһын, күнөн күрһен.** Зыяны теймәһә, теләһә нишләһен. [*Әбей — Сәлимәгә:*] *Ҡуй, балам, юҡты һөйләмә.* ***Күлгә аунаһын, күнөн күрһен*** *тигәндәй, кешелә ни эшең бар.* (Һ. Дәүләтшина.)

**күл итеү** *кемде, нимәне.* Ватып-емереп, туҙҙырып, йәки үлтереп юҡҡа сығарыу.

**күлкө яңырыу.** Банҡаларҙы мыҫҡыллап, күләп йөрөгән кешегә ҡарата, үҙе ауыр хәлгә ҡалғанда, үсәп әйтелә. *«Күлә етер, артынан һөрә етер» тигәндәй, бара торғас, байҙарҙың да, подкулачниктарҙың да* ***күлкөләре яңыра.*** («Сов. Башҡ.») **Күлкөнө яңыртыу:** *Бер күләгөҙ, ҡырыҫ донъя* ***яңыртһа ла күлкөнө.*** (Т. Йосопов.)

**көлө күккә осоу** *кемдең, нимәнең.* Емерелеп, ватылып йәки үлеп юҡҡа сығыу. ***Көлө күккә осҡан** кулактары менән маҡтанып ултырыусы бабайға бик уҫал ғына һүҙ әйтке килә...* (З. Ғәлимов.) *Шартланы миллионщик, **көлө күккә осто.*** (Б. Бикбай.)

**көлөн күккә осороу** *кемдең, нимәнең.* 1. Яндырып юҡҡа сығарыу, үртәү. [*Баян*:] *Имениегыҙҙың **көлөн күккә осорам.*** (М. Кәрим.) [*Зөбәйҙә — Йәмилгә*:] *Икегеҙ ҙә бер яҡлымы? Уҡып сығам да* [*көндәлектең*] ***көлөн күккә осорам.*** (И. Абдуллин.)

2. Ватып, ҡыйратып, йәки үлтереп юҡ итеү. *Ҡурҡҡан управляющий ҙа уға ҡушылды. — Әйе. Шунһыҙ улар* [*старателдәр*] *барыбыҙҙың да **көлөбөҙҙө күккә осорасаҡ**!* (Я. Хамматов.) *Башҡорт атлылары Буг йылғаһы буйында фашистарҙың ояһы Берлинды алырға һәм ефрейтор Гитлерҙың **көлөн күккә осорорға** ант иттеләр.* («Сов. Башҡ.»)

3. Ниҙеңдер нигеҙен юҡҡа сығарыу. *Ленин Либер Церетели килтергән дәлилдәрҙең **көлөн күккә осора.*** («Сов. Башҡ.»)

**көлтә (сүбәк) баш** *һөйл.* Ҡатын-ҡыҙға ҡарата кәмһетеп әйтелә. *Әйттем бит мин һиңә, берәй **көлтә баш** төп башына ултыртһа, аҡылға килер әле, тинем.* (Н. Мусин.)

**көн(ө) бөтөү.** 1. *кемдең.* Үлер ваҡыт етеү. ***Көнө бөткәнгә** көнөндә үлем.* (Мәҡәл.)

2. *нимәнең.* Йәшәйештә, ҡулланышта булырға урын ҡалмау, файҙаланып, ҡулланыу ваҡыты үтеү. *Бара-тора Өйрәнсектең тупаҫ балсыҡ көршәктәренә **көн бөткән.** Инде уларҙы һатып алыусы түгел, буш алыусы ла булмаған.* (З. Биишева.) *Быймаға **көн бөттө** хәҙер, тышта йылы.* (Һөйл.) *Кем уйлаған шулай кинәт уның **көнө бөтөрөн.*** (З. Ҡаҙаҡбаева.)

**көнгә төшөү.** Үкенесле, ауыр хәлгә ҡалғанда әйтелә. ...*Низамый, Бәхтиәр кеүек һәтәү ҡарттар ҙа йәшелдәрҙең кем икәнлектәрен аңланылар. Былар ҙа яңынан йәшелдәрҙе үҙ тирәләренә килтермәҫ **көнгә төштөләр.*** (И. Ҡыпсаҡ.)

**көндө төнгә, төндө көнгә ялғау.** Ҡара таңдан төнгә тиклем туҡтауһыҙ эшләү. ***Көндө төнгә, төндө көнгә ялғап** уйлай кеше бәхет турында.* (С. Ғәбиҙуллин.)

**көндөҙ сыра (шәм, ут) яндырып эҙләһәң дә таба алмаҫһың** *кемде, нимәне.* Бик кәрәкле кешене, затлы нәмәне таба алмай яфаланғанда әйтелә. [*Фәһимә*:] *Харис кеүек һылыу егетте **көндөҙ сыра яндырып эҙләһәң дә тапмаҫһың.*** (Ш. Янбаев.) *Врачын түгел, яҡын-тирәнән фельдшерын да — хатта **көндөҙ сыра яндырып эҙләһәң дә табып булмай.*** (М. Сиражетдинов.) *Балсыҡтан эшләнгән көршәктәрҙе хәҙер **көндөҙ шәм яндырып эҙләһәң дә табып булмай.*** («Сов. Башҡ.»)

**көн дә байрам, көн дә туй** *кемгә.* Гел генә кәйеф-сафа ҡороп, эште онотоп йәшәгән кешеғә ҡарата кире баһа менән әйтелә. *Уға* [*баярға*] *ни **көн дә байрам, көн дә туй** инде, — тине Сөнәғәт, еҙнәһенең һүҙенә яуап итеп.* (Ж. Кейекбаев.)

**көн итеү.** Бер яй менән генә йәшәп ятыу. *Өлкән улдары, үҙе ғаиләле булып башҡа сыҡҡас,* ***көн итеү*** *тағы ла ауырлашты.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Илаҡ булһаң әгәр,* ***көн итмә*** *был донъяла йөк булып, егет...* (Й. Солтанов.)

*син.*: көн күреү.

**көн кеүек [асыҡ].** Аңлашылып тора, ныҡ билдәле. *Беҙҙең көстәрҙең бөтөнләй тарҡалғанлығы, немецтарға ҡаршы тора алмаясағыбыҙ* ***көн кеүек асыҡ*** *ине.* (Д. Юлтый.) — *Был* ***көн кеүек асыҡ,*** *мин уны кисә үк һиҙҙем, — тине* [*Гөлнара*]. (Д. Бүләков.)

**көн күреү.** Ауырлыҡ менән тормош ҡороп йәшәү. [*Ярлы*] *Нисек тура килде, шулай* ***көн күргән.*** (З. Биишева.) *Эшләп* ***көн күргән*** *халыҡҡа, тирҙәрен түккән улдарға, Ай кеүек һылыу ҡыҙҙарға Донда тормош тар икән, унда ла тормош тар икән.* (С. Юлаев.) *Зөлхизә ни эшләһен — донъяһына, эшенә әүрәп,* ***көн күрә* *бирҙе.*** (Н. Мусин.)

*син.*: көн итеү.

**көн күрһәтмәү (бирмәү)** *кемгә.* Тыныс йәшәргә ирек бирмәү, төрлөсә ҡыҫырыҡлау, йәберләү. *Ниғмәтулла өйләнде. Шуның өсөн үсләшкән Хажисолтан бай Ғәйзуллаға* ***көн күрһәтмәне.*** (Я. Хамматов.) *Уның* [*Флүрәнең*] *ире Тимерхан Мусаҡаев ҡатынына ла, балаларына ла* ***көн күрһәтмәй*** *икән.* («Сов. Башҡ.») *Аталары үлгәс, был Мәскәй әбей егеттәргә бер ҙә* ***көн бирмәгән,*** *уларҙың бөтә тапҡан малдарын ашап тора икән.* (Әкиәттән.)

**көнйәлә* баш** *һөйл.* Сәсен-башын йыймаған, ялбыр баш (*ҡатын-ҡыҙға ҡарата кәмһетеп әйтелә*). [*Гөлзифа — Асяға*:] ***Ай көнйәлә баш, көнйәлә баш!*** *Нимә һөйләп торғаның ҡара!* (Б. Бикбай.)

[***Көнйәлә** — иләргә тетелгән йөн, мамыҡ, сүбәк һ. б. йомарлағы.]

**көн ҡаҙағына һуғыу.** Көндәлек тормош талаптарына яуап биреү, актуаль булыу. *Мәҡәлә көндөң* ***ҡаҙағына һуға.*** («Сов. Башҡ.»)

**көнө бөгөн түгел** *нимәнең.* Күрәсәгең алда әле тип, үсәгәндә янау менән әйтелә. *Ну, Ҡотлахмәт, бер килеп әләгерһең әләгеүен,* ***көнө бөгөн түгел.*** (М. Кәрим.)

**көн тимәй, төн тимәй.** Бер нәмәгә ҡарамай (*эш менән мәшғүл булыу*).

**көн төшөү (ҡалыу)** *кемгә.* Эштә, тормошта берәй кешенең ярҙамына мохтаж булыу. *Көнлөксөгә* ***көнөң төшмәһен.*** (Мәҡәл.) [*Мәғфүрә*:] *Һүҙемде тыңла, Айбулат, бар.* ***Көнөң төшһә,*** *яттарға ла инәләһең ул.* (Һ. Дәүләтшина.)

**көн тыуыу** *кемгә.* Иркен йәшәргә шарт килеп сығыу. *Ҡыҙылдар үткәндә беҙгә рәхәт, аҡтар үтһә — Исхаҡ, теге Әбдерафиҡ муллаларға* ***көн тыуа.*** (К. Кинйәбулатова.) *Совхоз, колхозды иртә әле төҙөй башларға; Ялҡауҙарға бында* ***көн тыуыр*** *тыныс ятып икмәк ашарға.* (Д. Юлтый.)

**көн уҙһын, сабата туҙһын** [тип йөрөү]. Файҙалы эш эшләмәй, ваҡытты бушҡа уҙғарыу. **Көн уҙҙырып, сабата туҙҙырып** [йөрөү]: *Минең эшемдә хуплаймы, ул, әллә ҡайһы берәүҙәр кеүек йөрөйһөгөҙ шунда* ***көн уҙҙырып, сабата туҙҙырып****, бушты бушҡа ауҙарып, тип кенә ҡараныммы...* (Ә. Вахитов.)

**көн ултырыу**. Көндәр аяҙға китеү. ***Көндәр ултырып*** *китеп, баҫыуҙан иген аға башлаһа, был колоннаның игендә ташып өлгөртә алмаясағына совхоз етәкселәренең шикләнеп ҡарауы нигеҙле.* («Сов. Башҡ.»)

**көн юҡ** *кемдән, нимәнән*. Йәшәргә, эшләргә ирек булмау.

**көн яманы китер**. Көн рәтләнер, кешене генә төҙәтеп булмай мәғәнәһендә ҡулланыла. ***Көн яманы*** *баҫылып* ***китер****. Көйәләнмәй тор, сабыр ит.* (С. Ғәбиҙуллин.)

**көплө ҡорт** *һөйл.* Кәрәкмәгәндә ҡат-ҡат кейенеп йөрөгән кеше.

**көрәп алыу**. Аҡсаны бик күпләп табыу. *Ҡотләхмәт бына тигән тракторист — бер булдымы? Аҡсаны, икмәкте* ***көрәп ала*** *— ике булдымы?* (М. Кәрим.)

**көрәш биреү**. Көрәшкә, алышҡа сығыу. *Барһынһылыу ҡашына [егет] килһен, Барһынға* ***көрәш бирһен****.* (Әкиәттән.)

**көрәш тотоу**. Ярышта көрәшеү. *Башҡорт илендә Аҡсахан тигән хан булған. Был бер көн йыйын ҡорған. Ул йыйынға батырҙар килгән. Бик ҙур* ***көрәш тотҡандар*** *улар бында.* (Әкиәттән.)

**көс биреү** *кемгә*. Хуплап ҡеүәт биреү. *Ҡарт ҡул сабып, балаға дәрт,* ***көс биреп*** *торҙо.* (М. Тажи.)

**көс етеү** *кемгә, нимәгә*. Эшләргә, башҡарырға хәлдән килеү. *Ярҙам итергә көс етә. Күтәрергә көс етмәй.*

**көс килеү (төшөү)**. Ауырлыҡ төшөп, ҡыйын булыу. *Иәнгә көс килеү. Намыҫҡа көс килеү.*

**көслөнөкө замана (донъя)**. Көслө кеше һәр нәмәгә хужа була мәғәнәһендә (*ҡулындағы мөмкинлекте үҙ файҙаһына йүнәлткән кеше тураһында*). ***Көслөнөкө****, тиҙәр, был* ***донъяны****, көслөнөкө микән был донъялар!* (Т. Йосопов.)

**көсө еткәнгә көсөктәй**. Урынһыҙға ғәйрәтләнеп, башҡаларға ҡарата көс ҡулланған кешегә гәйепләп әйтелә. [*Йәмилә*:] *Үҙеңдән көслөләрҙең табанын яларҙайһың. Ә* ***көсөң еткәнгә көсөктәйһең****.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**көстән (хәлдән) килеү**. Ниндәйҙер эште башҡарырға мөмкинлек булыу. *Латифа Фәтихова һәм башҡа ветерандар әле һаман иҫәндәр һәм* ***көстәренән килгән*** *хәтлем тыуған колхоздарына ярҙам итәләр.* («Сов. Башҡ.»)

**көтмәгән ерҙән**. Уйламағанда, көтмәгәндә, ҡапыл килеп сыҡҡан эш-хәл тураһында. *Әллә һис бер* ***көтмәгән ерҙән*** *һатыу туҡталдымы?* (М. Ғафури.)

**көтөп тор**. Булмаҫтай эш-хәл тураһында иҫкәрткәндә асыу менән әйтелә. [*Зәйнәп*:] *Миңә анау тиҙәк тапатҡан өсөн биш*

*тәңкәне бирмәй бит ҡарун мулла.* [*Хөсәйен*:] *Бирер, бирмәй ни,* ***көтөп тор.*** (Һ. Дәүләтшина.)

**көтә-көтә көтөк (кол) булыу.** Кемделер, ниҙелер бик оҙаҡ көтөп-көтөп тә ала алмау. *Кескәй әнеләре был ике ағаһын* ***көтә-көтә көтөк булып*** *бөткән, ти.* (Әкиәттән.) [*Мәрйәм*:] *Әй, һағындыҡ һине, Мәҙинәкәй! Ҡыҙҙар ҡайтҡаныңды* ***көтә-көтә кол булғандыр*** *инде.* (Ш. Янбаев.)

**көтоүе менән.** Күмәкләшеп (йөрөү). ***Көтөүе менән*** *килеү.*

**көт тә тор.** Һөҙөмтәһе уңайһыҙ килеп сығыры билдәле булған эш-хәл тураһында иҫкәртеү белдергәндә әйтелә. ***Көт тә тор,*** *үҙеңде капитализмдың иң әшәке иҫке ҡалдығына илтеп тиңләр әле ул...* (Б. Бикбай.) *...Әгәр ошо үҙем тәүге төрткән балыҡты эләктермәһәм,* ***көт тә тор,*** *миңә балыҡ төртөргә бөтәнсә рөхсәт булмаясаҡ.* (Н. Мусин.)

**күгәрсен (ҡош) һөтө генә юҡ.** Бөтә нәмә бар (*гәҙәттә, ризыҡ, һый-нигмәт муллығы хаҡында*). *Аҫыл күстәнәсе: ни генә юҡ! — Ҡаҙ, бауыр, ҡаҡ, йүкә балдары... Тик* ***күгәрсен һөтөн*** *генә тапмай Бала өсөн әсәй ҡулдары!* (Р. Ғарипов.)

*син.*: йәнеңә кәрәге бар, йылан мөгөҙө генә юҡ.

**күҙ аларыу.** Тулҡынланыу, һиҫкәнеүҙән ни эшләгәнде белмәү.

**күҙ алдына баҫыу (килеү).** Тышҡы ҡиәфәт, күренештәр иҫкә килеп, һынланыу. *Уйлай торғас, уның* [*Мөхлисәнең*] *тышҡы һыҙаттары берәм-берәм* ***күҙ алдына килә*** *башланы.* (М. Тажи.)

**күҙ алдына килтереү (баҫтырыу)** *кемде, нимәне.* Һүрәтен, рәүешен фараз итеп һынландырыу. *Исмәғил ошо күңелле йәшлек дәүеренең матур картиналарын, буласаҡ һылыу еңгәһен дә* ***күҙ алдына килтереп,*** *шәп-шәп атланы...* (Һ. Дәүләтшина.) *Мин Ямалды* ***күҙ алдына*** *шулай* ***килтерәм.*** *Бер ҡарағанда ул һағышлы, уйсан, икенсе тапҡыр балаларса вайымһыҙ...* (М. Тажи.) *Тимер, яңғыҙы тороп ҡалғас, иҫенә төшөрөп, Фәхриҙең үҙен дә, атаһын да* ***күҙ алдына баҫтырҙы.*** (Б. Бикбай.)

**күҙ алдынан китмәү (йәки китеү).** Буй-һыны рәүеше онотолмау, иҫтән сыҡмау. *Онотолһа ла әйткән һүҙҙәрең,* ***күҙ алдымдан китмәҫ*** *күҙҙәрең.* (Р. Ғарипов.)

*син.*: күҙ алдында тороу.

**күҙ алдынан үткәреү** *кемде, нимәне.* Уй-фаразда бер-бер артлы күҙҙән үткәреү. *Хасбулат олатай, күрәһең, алыҫ үткәндәрҙе* ***күҙ алдынан үткәреп,*** *оҙаҡ ҡына тынып торҙо.* (З. Биишева.)

**күҙ алмау** *кемдән, ниҙән.* Ҡараштты ситкә бормай һоҡланып оҙаҡ ҡарап тороу. *Ҙур Сабир күтәрелеп тә ҡарамай. Ул, алыҫта ҡарайып торған урмандарҙан туйған төҫлө, ерҙән* ***күҙен алмай.*** (Ә. Бикчәнтәев.)

**күҙ алмаһы кеүек күреү** *кемде, нимәне.* Бик яҡын, ғәзиз күреп һаҡлау, ҡәҙерләү. [*Сәрби әбей*:] *Меҫкенкәйемде* ***күҙ алмаһы кеүек күрә*** *инем дә бит, китә инде.* (М. Ғафури.)

**күҙ <ҙә> (күҙен дә) астырмау.** Үҙен яҡларға ирек бирмәү. [*Розалия*] *Яңғыҙы ғына әйләнеп ҡайтһа,* ***күҙ ҙә астырмаҫтар,*** *көлөрҙәр.* (Р. Низамов.) — *Илде һеҙҙән башҡа кем һаҡлаһын?! Китәһегеҙ! — тип* [*байҙар*] ***күҙ ҙә астырманылар.*** («Сов. Башҡ.») *Рифғәт бер аҙна элек кенә өйләнгәйне. Хәҙер ике һүҙҙең береһендә уға бәйләнәләр, мәрәкәләп* ***күҙен астырмайҙар.*** (Ш. Янбаев.)

**күҙ асҡыһыҙ** [буран, төтөн]. Бик ҡаты йәки ҡуйы. ***Күҙ асҡыһыҙ*** *ҡаты ҡышҡы буран бүре кеүек олоп ҡотора.* (Ш. Бикҡолов.)

**күҙ асылыу.** 1. Аң-белемгә эйә булып, донъяны таный башлау. *Ҡыш буйы уҡылһа, арыу ғына* ***күҙем асылып*** *ҡалған булыр ине.* (Б. Бикбай.)

2. Кемдең кем икәнен, ижтимағи тормошто аңлай башлау. *Февраль революцияһын ул* (*Садрислам*] *апаруҡ* ***күҙе асылған,*** *хаҡлыҡты төҫмөрләгән, үҙенең артабан кем яғында булырын төплө билдәләгән һалдат булып ҡаршыланы.* (Ф. Иҫәнғолов.) ***Күҙ асылды*** *минең, яҡын иткән байтаҡ кеше инде ташланы, ҡайһы берәүҙәргә оҡшамауым үҙемә лә оҡшай башланы.* (Ғ. Рамазанов.)

**күҙ асып <күҙ> йомғансы (йомған арала).** Бик тиҙ, минут эсендә. *Сәй эсеп иртүк, еңел мылтыҡ алып шылдыҡ икәү, ауылыбыҙҙан* ***күҙ асып йомғансы*** *юҡ булдыҡ икәү.* (Ш. Бабич.) *Көн элгәре әйтеп ҡуйғанға, ауыл халҡы* ***күҙ асып йомғансы*** *ауыл осона сыҡты.* (Ж. Кейекбаев.) ***Күҙ асып йомғансы*** *ай һикереп төшкән дә ҡыҙҙы үҙенә алып менгән.* (Әкиәттән.) [*Ниғмәтбаев*] ***Күҙ асып йомған арала*** *ҡарарға килде.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Тейен* ***күҙ асып йомған арала*** *икенсе ҡарағайҙың ылыҫына аҫылынып, зыр-зыр әйләнеп торҙо ла ҡарағайҙың башына уҡ менеп китте.* (М. Тажи.)

*син.*: шул ике арала, һә тигәнсе, керпек ҡаҡҡансы.

**күҙ атыу** *кемгә.* Иғтибар менән төбәлеп ҡарап тороу. *Һаман тәҙрәгә сиртәм, йән-яғыма* ***күҙҙәр атамын.*** (Д. Юлтый.) *Һин ҡыҙҙы ҡулыңдан ысҡындырма. Юғиһә Тимербүкән ауылынан бер егет* ***күҙ атып*** *йөрөй, тиҙәр.* («Сов. Башҡ.») *Тағы бына ҡыр ҡаҙҙары китә, ҡул болғамай ҡалам* ***күҙ атып.*** (И. Кинйәбулатов.)

*син.*: ҡараш ташлау.

**күҙ-баш алыу.** Мәшәҡәттәрҙән бушанып, иркенәйеп ҡалыу, үҙ яйыңараҡ йәшәй башлау.

**күҙ буяу.** Юҡты бар итеп күрһәтеү, ялған менән кешеләр яңылыш фекер тыуҙырыу. ***Күҙ буяп,*** *ул ябына хаҡлыҡ пәрҙәһен үҙ өҫтөнә.* (М. Ғафури.) *Ҡайһы бер һунарсылар* ***күҙ буяу*** *өсөн генә мышы атырға рөхсәт ҡағыҙы алалар ҙа браконьерлыҡ менән шөғөлләнәләр.* («Сов. Башҡ.») *Ҡайһы берәүҙәр* ***күҙ буяр*** *өсөн генә колхозға керә*(*ләр*)... (М. Тажи.) *«Быйыл ремонт шәп үтте» тип, Китә шунан* ***күҙ буяуҙар.*** (С. Ғәбиҙуллин.)

*син.*: күҙгә төтөн ебәреү.

**күҙ быуыу (бәйләү).** Алдап, хәйләләп кешелә яңылыш күренеш тыуҙырыу. *Йүләр булдым, табындым мин, ул бит **күҙҙе быуған** икән. Алла тиеп йөрөгәнем шайтан үҙе булған икән.* (М. Кәримов.) *Көпә-көндөҙ **күҙ бәйләйҙәр** бит. Шулай булғас, «сихырсы» тимәй, ни тип атайһың уларҙы.* («Сов. Башҡ.»)

**күҙ бәйләнеү.** Киске ҡараңғылыҡ төшөп, күҙ күрмәй башлау. [*Көнһылыу*] *Ҡаратал төбөнә бармаған, сөнки кис булып, **күҙ бәйләнә** башлаған саҡ булған.* (Легенданан.) ***Күҙ бәйләнә** башланы. Тау башындағы йорттарҙы бер-береһенән асыҡ айырып булмай.* (Ж. Кейекбаев.) ***Күҙ бәйләнә**. Төшә киске эңер, ҡысҡырыша ярһып тартайҙар.* (Р. Ғарипов.)

**күҙгә аҡ-ҡара күренмәү.** Ярһыуҙан, асыуҙан йәки ҡурҡыуҙан бер ни ҙә күрмәҫ хәлдә булыу. [*Ғариф староста*] *Бик ҡабаланып кейенде лә, **күҙенә аҡ-ҡара күренмәй** тышҡа сығып китте.* (Ж. Кейекбаев.) ***Күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәй** атлаған был халыҡты шул ваҡыт бер кеше туҡтата.* (М. Ғәли, Р. Сафин.)

**күҙгә-башҡа күренеү (салыныу).** Кеше күҙенә ташланыу, кешеләр менән аралашып, күрешеп тороу. *Яҡын тирәлә бер ҙә ундай кешенең **күҙгә-башҡа салынғаны** юҡ.* (Б. Бикбай.)

**күҙгә бәрелеү (бәрелеп тороу).** Ниндәйҙер яғы менән иғтибарҙы йәлеп итеү, үҙенә тартып тороу. *Өйҙә тушәк менән самауыр юҡлығы әллә ҡайҙан **күҙгә бәрелеп тора**.* (М. Ғафури.) *Октябрҙән һуңғы осорҙа сәсәндәр ижадында ҙур активлыҡ **күҙгә бәрелә** башланы.* (К. Мәргән.) *Ракета яҡтыһында туш менән алға шыуған һалдаттар, һоро түңгәклек кеүек, **күҙгә бәреләләр**.* (Д. Юлтый.)

**күҙгә бәреп** [әйтеү]. Һүҙҙе уратып, сурытып тормай, туранан-тура әйтеп биреү. *Халыҡ Сынбулатовтың ундай ҡылығын ҡасан да бер **күҙенә бәреп** әйтер.* (М. Тажи.)

**күҙгә кереп барыу.** Ныҡ әрһеҙлек күрһәтеп, үҙ һүҙен, эшен үткәрергә тырышыу. *Шул тиклем үткер ҡатын, **күҙгә кереп бара**.* (Һойл.)

**күҙгә йоҡо тойнәлеү.** Йоҡлағы килеү, йоҡо баҫыу. *Мәүлет байҙың өлкән бисәһе Иәнбикә ологайған **күҙҙәренә йоҡо төйөлмәгәнгәме**, ҡарты янында мыштырлай ине.* (Ғ. Дәүләтшин.) *Ҡадирҙың **күҙенә йоҡо тойнәлә** башлағайны инде.* (Б. Бикбай.)

**күҙгә кол һибеү.** Ялған хәбәр һөйләү, алдау.

*син.*: күҙгә көрпә осороу.

**күҙгә күренеп** [үҫеү]. Бик етеҙ, тиҙ үҙгәреү. *Башҡорт частәрендәге таркалыш **күҙгә күренеп**, көн һайын үҫә бара...* (Ф. Иҫәнғолов.) *Һөнәрсе **күҙгә күренеп** шиңә, һүнә башлаған.* (З. Биишева.)

**күҙгә күренеп** [үҙгәреү...] Күҙ алдында беленеп, танылып (үҙгәреш кисереү). [*Р. Солтангәрәевтың*] *һүҙ оҫталығы **күҙгә күренеп** үткерләнде.* (Р. Бикбаев.)

**күҙгә көрпә осороу.** Ялған һүҙ менән кеше йәки эш-хәл тураһында хата ҡараш тыуҙырыу. [*Шахнияз — Ләйсәнгә:*] *Һин больницаңды тел менән генә төҙөмәксе булдыңмы? Әллә* ***күҙгә көрпә осороу*** *өсөн генә төҙөлөш хаҡында һөйләнеп йөрөнөңмө?* (Ә. Мирзаһитов.)

*син.*: күҙгә төтөн ебәреү, күҙгә көл һибеү.

**күҙгә <ҡара> ҡан һауыу.** 1. Күҙ ныҡ ҡыҙарыу. *Цех етәксеһенең бер нисә көн туйғансы йоҡлағаны юҡ, шуға күрә* ***күҙенә ҡан һауған.*** (Ә. Бикчәнтәев.)

2. Асыуҙан иҫте юғалтыу. ***Күҙенә ҡан һауған,*** *асыуы йөҙөнә сыҡҡан Ҡарағөлөмбәт күренеү менән халыҡ Бабсаҡҡа: «Һаҡлана күр, батыр, был әҙәмдән...»,* ти. (Эпостан.)

**күҙгә-күҙ терәшеп** [һөйләшеү]. Ҡара-ҡаршы ултырып, асыҡтан-асыҡ (*аңлашыу, фекер алышыу*). *Мин Борай яҡтарынан. Быға тиклем* ***күҙгә-күҙ терәшеп*** *һөйләшеп ултырған да, осрашҡан да юҡ ине.* («Сов. Башҡ.»)

**күҙгә <тура> ҡарап** [алдау, әйтеү]. Уңайһыҙланып, тартынып тормай, туранан-тура (*әйтеп биреү*). [*Хафиз:*] *Ҡорбанов ул урыны менән маҡтай ҙа белә, етешһеҙ яғыңды* ***күҙеңә тура ҡарап*** *әйтә лә белә.* (М. Тажи.) *Иәш килен «тәпәндән май тумырып әпсәһенә ташығанда ғына сапсан ул, ә эшкә тигәндә ығыр», — тип* ***күҙгә ҡарап*** *алдап тора* [*Ғәзимә*]. (Һ. Дәүләтшина.)

**күҙгә ҡарау (ҡарап тороу).** Берәй кешегә бирелгәнлекте күрһәтеү. *Асыҡҡан ат ҡулыңды ялай, ят ат* ***күҙеңә ҡарай.*** (Мәҡәл.)

**күҙгә ҡуш күренеү.** Тулҡынланыуҙан, ҡурҡыуҙан бер нәмә икәү булып тойолоу.

**күҙгә ҡырып һалырлыҡ <ҡына>.** Бик аҙ күләмдә, саҡ ҡына. *Хәҙер байҙан* ***күҙгә ҡырып һалырлыҡ*** *та арҙам көтөргә ярамай.* (Т. Хәйбуллин.)

**күҙгә салыныу.** Ҡарар күҙгә күренеп тороу. *Ни булһа ла булғандыр, әммә егеттең йөрөгән юлынан бик бай ҡайтҡаны көндән-көн* ***күҙгә*** *асығыраҡ* ***салына*** *бара ине.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**күҙгә сүп һалыу (төшөрөү).** Кешенең эшенә ҡамасау яһау. *Мин тирмән директоры булғас, әйҙә миңә кладовщик булып кил,* ***күҙеңә сүп һалмам.*** (М. Кәрим.) *Минең, тип әйтә ти, унда Ҡалҡаманов тигән бер дуҫ бар. Ул, тип әйтә ти, минең* ***күҙгә сүп төшөрә*** *торған егет түгел.* (С. Агиш.)

*син.*: тәгәрмәскә таяҡ тығыу.

**күҙгә ташланыу (төртөлоү).** Ни менәндер айырылып, күренеп тороу. *Фәһим — Усман ауылында артыҡ* ***күҙгә төртөлөп*** *барған малай түгел ине.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Ҙур ғына ихатаның һәр ерендә* ***күҙгә ташланып*** *торған тәртип.* (Н. Мусин.)

**күҙгә торткөһөҙ** [ҡараңғы] *ҡар.* Күҙгә төртһәң күренмәҫлек.

**күҙгә төртһәң күренмәҫлек (күренгеһеҙ)** [ҡараңғы]. Дөм ҡараңғы, бер ни күрерлек түгел. [*Мәмерйәлә*] ***Күҙгә төртһәң күренмәҫлек*** *ҡараңғы булһа ла, эсенә тирмәләр ҡороп ҡыш-*

*ларға бынан да уңай урын табылмаҫ ине.* (Ф. Иҫәнголов.) ***Күҙгә төртһәң күренмәҫлек** ҡараңғы төнлө, ыжғыр елле, шәрәһе әйләнеп ятҡан болғансыҡ көҙ уткәйне инде.* (Ғ. Дәүләтшин.) *Тирә-яҡ ҡараңғыланды, **күҙгә төртһәң** дә бер ни **күрерлек** түгел.* (Я. Хамматов.)

**күҙгә төртөп.** 1. [әйтеү]. Ҡурҡмайынса, асыҡтан-асыҡ дөрөҫлөктө әйтеп биреү. *Кешеләр ҙә яман инде, ер аҫтында йылан көйшәгәнен беләләр. **Күҙгә төртөп** битәрләй башланылар.* (Ф. Абдуллин.)

2. [биреү, күрһәтеү һ. б.] Эшләнгән эште тупаҫ итеп күрһәтеү, алға сығарыу. ***Күҙгә төртөп** биргән ярҙамдарҙы һанама һин шәфҡәткә.* (Д. Кугультинов. Ә. Әхмәтҡужин тәрж.)

**күҙгә төтөн ебәреү.** Алдаҡ хәбәр менән ялған фекер тыуҙырыу. *«Башҡортса уҡыйҙар» тип гәзиттәр яҙғанға ауыҙ асып, донъябыҙҙы онотоп китмәйек әле. Был — йәнәһе, илдә барыһы ла ал да гөл тип алдау, **күҙгә төтөн ебәреү**.* (Р. Аҙнағолов.)

*син.*: күҙ буяу, күҙгә көрпә осороу, күҙгә көл һибеү.

**күҙгә төшкән сүп (аҡ) кеүек.** Эштә, тормошта ҡамасау тыуҙырып торған кеше йәки хәл. *Фашистар **күҙҙәренә төшкән аҡ кеүек** күренгән был ер киҫәген нисек кенә булһа ла алырға тырышты.* (И. Ғиззәтуллин.)

**күҙгә эленеү.** Күренеп ҡалыу, һирәк-һаяҡ күренгеләү. *...Ер аҫты һыуын эҙләүсе разведчиктарҙың вагон-өйҙәре генә **күҙгә эленеп ҡала**.* («Ағиҙел».)

**күҙ дүрт булыу.** Көтолмәгән хәлдән ныҡ аптырау, ғәжәпкә ҡалыу. *Йәш шул әле, донъя күрмәгән. Бер һалдат килеп сыҡҡайны, **күҙе дүрт булды**.* (Х. Ғиләжев.) *Хәкимдең **күҙе дүрт булды**. Беҙ барыбыҙ ҙа хайран ҡалдыҡ.* (Ш. Шәһәр.) *Байтаҡ ҡына араны яфаланмай-нитмәй, ылдым ғына уткәнгә дәртләнмәгән шоферҙарҙың **күҙе дүрт булды**.* (Ш. Янбаев.) **Ике күҙ дүрт булыу**: *Бына шуға иҫе китте Фәриттең: Мәскәү тинеңме, уның **ике күҙе дүрт була**.* (Н. Ғәлимов.)

*син.*: күҙ шарҙай булыу.

**күҙҙе алмай** [ҡарау] *кемгә, нимәгә.* Ныҡ текләп күҙәтеү. *Уҡытыусылар бүлмәһендәге сторожиха стеналағы өлкән сәғәттән **күҙен алмай** ҡарап тора ине.* (С. Агиш.)

**күҙҙе алыу.** Ҡарашты икенсе нәмәгә күсереү. *Тимер уңайһыҙланып унан [Фатиманан] **күҙен** ситкә **алды**.* (Б. Бикбай.)

**күҙҙе астырмау** *кемдең.* Өҙлөкһөҙ кәмһетеп, тиргәп йәки шаяртып тынғы бирмәү. *Берҙән-бер балаларын да әҙәм төҫлө тәрбиәләй алманылар тип, **күҙҙәребеҙҙе астырмаҫтар**.* (И. Абдуллин.)

**күҙҙе асыу.** 1. Дөрөҫлөктө аңлау, ниҙең ни икәнен, кемдең кем икәнен белеп алыу. *Ҡаһарман башҡорт егеттәре! **Күҙҙәрегеҙҙе асығыҙ**, ҡарағыҙ, кем өсөн һәм ни өсөн һуғышаһығыҙ!* (Ш. Хоҙайбирҙин.) *Уҡы, егет, **күҙеңде ас**, ти.* (З. Биишева.)

2. Бер аҙ хәлләнеп алыу. *Байдәүләт нимә теләй — колхоздар шуны бирҙе: аҡсаһын да, игенен дә, онон да килтерҙеләр. Ауыр ваҡыттарҙа, өҫтәүенә балалары бәләкәс саҡтарҙа, был —* ***күҙҙе асырлыҡ*** *булды.* (Т. Килмөхәмәтов.)

**күҙҙе йәшереү.** 1. Кешегә тура ҡарамай, ҡараштьı ситкә бороу (*берәй ғәйепте һиҙеп* һ. б.).

2. Күҙгә күренмәҫ булыу, ҡасыу. ***Күҙен ҡасырып*** *йөрөй.*

**күҙҙе ҡан алыу (баҫыу).** Ҡаты асыуҙан ни эшләгәнде белмәҫ хәлгә килеү. «*Атайыңды мал урлаған тип ғәйепләнеләр. Тиҙерәк ҡайтырға кәрәк. Халыҡтың* ***күҙен ҡан баҫҡан.*** *Үлтереп ташлауҙары мөмкин*». (Ш. Шәһәр.)

**күҙҙе ҡыҙҙырыу.** Бик ныҡ ҡыҙыҡтырыу, һоҡландырыу. *Ә килер ҡунаҡ йыйынға* ***күҙҙәр ҡыҙҙырып.*** (Ш. Бабич.) *Мышы ите шулай уҡ Шәһәргәзе менән Далха Сырбаевтарҙың да* ***күҙен ҡыҙҙырҙы.*** («Сов. Башҡ.»)

**күҙҙе майландырыу** *кемгә, нимәгә.* Нәфсе менән ҡарау.

**күҙҙең яуын алыу.** Балҡып, ялтырап торған бик матур нәмәгә ҡарата маҡтап әйтелә. *Ул түшәмгә тиклем ҡуйылған урын-ер нәмәләре, аҫыл келәмдәр* ***күҙҙең яуын алып*** *тора, ти.* (Әкиәттән.) *Үҙ мәлендә ямғырҙары ла булғас, арыш та бик һәйбәт булып ҡурпылып сыҡҡан. Иәп-йәшел булып* ***күҙҙең яуын алып*** *ултыра.* (Ғ. Дәүләтшин.) *Икеһенең дә түшендә Алтындан йондоҙҙары, Ҡараһаң —* ***күҙ яуын ала*** *Нурланып тороуҙары.* (Н. Нәжми.)

**күҙҙе сығарғансы** [әйтеү]. Дөрөҫлөктө туранан-тура кешенең үҙенә әйтеп биреү. [*Барый*:] *Сәлимәнең теленә эләкмә инде. Атаһы мәрхүм дә шулай ине бит.* ***Күҙеңде сығарғансы*** *әйтер ине.* («*Сов. Башҡ.*») [*Ғәйниямал*] *Эс серҙәрен бер ҡасан да йәшерә белмәҫ, кешенең хәтерен һаҡлап тормаҫтан,* ***күҙен сығарғансы*** *әйтер ҙә һалыр.* (Ф. Рәхимголова.)

**күҙҙе томалау.** Иғтибарҙы икенсе нәмәгә йүнәлтеп, яңылыш фекер тыуҙырыу.

**күҙ(ҙе) тырнап асыу.** Йоҡо туйыр-туймаҫтан тороу, көслән уяныу. *Шулай мин иртүк торам да,* ***күҙҙе тырнап асыу*** *менән ҡулға йүгән алып, ҡырға йүгерәм.* (М. Ғафури.)

**күҙҙе уйнатыу.** Мәғәнәле итеп ҡараш ташлау. *Ашты ашап бөтөп, Зинаның сәйен көткәндә, Михаил ултырғысында артҡа-раҡ сайҡалып, мыйыҡтарын һыйпаны ла ялтыр ҡара* ***күҙҙәрен уйнатып,*** *Айбулатҡа һораулы ҡараны.* (Һ. Дәүләтшина.) «*Ҡайҙа һуң ер еләге?*» — *тип, Ғәли* ***күҙен уйната***... (Ф. Мөхәмәтйәнов.)

**күҙ ҙә йоммай** [әйтеү, алдау, раҫлау һ. б.]. Күҙгә тура ҡарап, оялып, тартынып тормай (*хәбәр һөйләү*). *Мөдир* ***күҙен дә йоммай*** *алданы, ләкин тыңлап тороусылар уның йөҙөнән саҡ ҡына шик килтерерлек тә яһалмалыҡ әҫәрен тапманылар.* (Б. Бикбай.) *Хисмәт ағайҙың* ***күҙ ҙә йоммай*** *аныҡлауы буйынса «Ғилмияза» көйөнөң легендаһы тап беҙҙең ауылдың тарихына бәйләнгән.* (С. Кулибай.)

**күҙ <ҙә> йөммау.** Ботөнләй йоҡламау, уяу булыу. *Күҙгә йоҡо төйөлә, етмәһә, һине* ***күҙ йоммай*** *һаҡларға ҡуштылар.* (Һ. Дәүләтшина.)

*син.*: керпек тә ҡаҡмау.

**күҙ ҙә ҡаш** [көтөү]. Бик өҙөлөп, һагынып көтөп тороу. *Иләлбабай улын айҙар, йылдар* ***күҙ ҙә ҡаш*** *булып көткән.* (Әкиәттән.) — *Мин арыным инде, мырҙа, — тине Көнһылыу. — Әсәйең менән Зәйтунәңдән кәм көтмәнем мин һине.* ***Күҙ ҙә ҡаш*** *көттөм.* (Ғ. Ибраһимов.) *Һин яуҙа йөрөгәндә, үҙеңде* ***күҙ ҙә ҡаш*** *көтөп алған кеше әлеге мин түгел инемме?* (Д. Исламов.)

**күҙҙән кисереү (үткәреү, уҙғарыу)** *кемде, нимәне.* Ҡараш менән барыһын да барлап сығыу, ҡарап үткәреү. *Георгий Береговой һәм уның юлдаштары, бер тәҙрәле йыйнаҡ ҡына бүлмәне* ***күҙҙән үткәреп,*** *ишек эргәһендә туҡталдылар.* («Сов. Башҡ.») [*Мотойғулла ҡарттың*] *ҡулында ҙур ғына тоҡ та бар ине. Уны стенаға һөйәп ҡуйғас, малайҙарҙы тауыш-тынһыҙ ғына* ***күҙҙән үткәрҙе.*** (Р. Ғабдрахманов.)

**күҙҙән төшөрөү** *кемде, нимәне.* Абруйын кәмһетеү, етешһеҙлектәрен ҡабартып күрһәтергә тырышыу. [*Атаулла*] *Һайланырға ихтимал кешеләрҙе нисек тә* ***күҙҙән төшөрөргә*** *тырыша, уларҙың «насар» яҡтарын ҡабартып һөйләй.* (С. Йыһангиров.)

**күҙҙән төшөү.** Халыҡ алдында абруй кәмеү, дәрәжә түбәнәйеү. *Бер тәғәм шул сабаҡ өсөн* ***төштөгөҙ ҡапыл күҙҙән...*** (Р. Ғарипов.) [*Хәйри*] *Өр-яңы өҫ-баш менән һыуға һикермәгән булһа, бөгөн таҙа мунсаға Мәсрүрәһе менән уны ебәрергә тейеш булғандарҙыр. Күпме кәрәк һуң* ***күҙҙән төшөр*** *өсөн.* (Ф. Хөсни.) *Был йылдарҙа инде ошо мәшһүр шағир, үҙ фекерле редактор, оло шәхес ҡараш бойондороҡһоҙлоғо арҡаһында рәсми властар алдында* ***күҙҙән төшөп*** *килә ине.* (М. Кәрим.)

**күҙҙән ут күренеү.** Һуҡҡанда йәки бәрелгәндә күҙ алдында осҡондар осҡан кеүек булыу.

**күҙҙән ысҡындырмау** *кемде, нимәне.* Күҙ алдынан ебәрмәү, гел ҡарап, күҙәтеп кенә тороу.

**күҙҙән юғалыу (яҙыу).** Күҙ алдынан ситкә китеү, күренмәҫ булыу. *Ат шунда уҡ китеп* ***күҙҙән юғалды,*** *ти.* (Әкиәттән.) *Ана ултыра өс балаң, ҡултыҡла ла теләһә ҡайҙа кит,* ***күҙемдән юғал...*** (Т. Хәйбуллин.) *Көҙгө ҡояштың тауҙан артылып сығыуы менән, көсһөҙ ҡырау йылынып һыуға, унан быуға әйләнеп* ***күҙҙән юғала.*** (Ғ. Дәүләтшин.)

**күҙҙән яҙҙырыу.** Күҙ алдынан ебәреү. *Ағалары арттан баҫтыра сығып ҡараһалар ҙа, ҡыуып етә алмайҙар, уны* [*Заятүләкте*] *бөтөнләй* ***күҙҙән яҙҙыралар.*** (Әкиәттән.) **Күҙҙән яҙҙырмау:** *Ошо ваҡыт уны* [*Тимерҙе*] ***күҙҙән яҙҙырмай,*** *бер квартал самаһы арттараҡ ҡалып, Фатима ла йүгерә-атлай бара ине.* (Б. Бикбай.) *Өйрәк аҡһай-аҡһай Өршәк яғына китте.* ***Күҙҙән яҙҙырмайыҡ*** *тип, беҙ ҙә ҡуҙғалдыҡ.* (С. Агиш.)

**күҙҙә тотоу.** Ниҙер эшләгәндә, уйлағанда, һөйләгәндә икенсе бер нәмәне уйҙа һаҡлау, иҫәптә тотоу. *Съездың делегаттары тик сауҙагәрҙәрҙән, алпауыттарҙан ғына тороу сәбәпле, съездың ҡарары ла халыҡ мәнфәғәтен* ***күҙҙә тотманы...*** (Я. Хамматов.) *ҡар.*: күҙ уңында тотоу.

**күҙҙә шайтан бейеү (уйнау).** Ниндәйҙер эске хәйлә, мәкер менән яныу. *Һөнәрсе изгелекле күршеһенең алдында уңайһыҙланып, ҡул ҡаушырып тора. Өйрәнсектең хәйләкәр күҙҙәрендә ниндәй* ***шайтан бейегәнен*** *күрмәй ҙә, абайламай ҙа.* (З. Биишева.)

**күҙе аҡайған** *кемдең.* Бер нәмәгә генә иҫе китеп, ныҡ мауығып, бүтән нәмәне онотҡан кешегә ҡарата әйтелә. *Ғашиҡ булған,* ***күҙе аҡайған*** *уның.* (Һөйл.)

**күҙ ебетеү.** Илау. *Аҙаҡҡы ҡан һарҡып сыҡҡанда ла,* ***күҙ ебетмәй*** *беҙҙең кешеләр.* (Х. Ғиләжев.)

**күҙе — ботаҡ урыны (тишеге)** *һөйл., яманл.* Күҙ алдында ятҡанды таба алмаған кешегә ҡарата әйтелә.

**күҙе(м) күҙеңдән китмәй.** Бер-береңә һөйөү менән ҡарашып тороу (*ғашиҡ кешеләр тураһында*). ***Күҙем күҙеңдән китмәне,*** *Хоҙайым насип итмәне.* (Халыҡ йырынан.)

**күҙе лә йөҙө** *ҡар.*: йөҙө лә күҙе.

**күҙе инешле урынға тура килгән.** Үтә илаҡ. *Яу ҡайтарырға бөтәһе лә талпынып тора. Тик ҡатын-ҡыҙҙар ғына илашыуҙан туҡтамайҙар. Уларҙың шундай инде,* ***күҙҙәре инешле урынға тура килгән.*** (Ғ. Ибраһимов.)

**күҙе ҡаты** *кемдең* (ҡаты күҙле). Күҙе тейеп барған, ҡарашы зыянлы кешегә ҡарата әйтелә.

**күҙе маңлайына менгән** *кемдең.* Күҙ алдындағын күрмәй йөрөгән йәки аптыраған кешегә ҡарата әйтелә. *Арышты уны беҙ, борсаҡ йыйып алғас, сәсәбеҙ тим. Билдәле, председателдең* ***күҙҙәре маңлайына менде.*** (Ә. Вәли.) [*Сураҡай — Юлғотлоға:*] *Ни бар? Ниңә* ***күҙең маңлайыңа менде****?* (М. Буранғолов.) [*Фәйрүзә:*] *— Таня китте.* [*Шатморат:*] *— Китте? Ҡайҙа? — Егеттең* ***күҙе маңлайына менде.*** (Ф. Аҡбулатова.) *Ырымбур губернаторы Рейнсдроптың* ***күҙе маңлайына менде...*** (Б. Аҫылгужа.)

**күҙе менән ашау (ашарҙай булыу).** Кешегә бик ныҡ асыуланып йәки ныҡ яратып, әҫәрләнеп ҡарау.

**күҙемә күренмә (күҙемдән юғал).** Ныҡ асыуланып яндан ҡыуғанда әйтелә. — ***Күҙемә күренмә*** *алйот, хәйерсе балаһы! — тип, Ҡәмәр ҡортҡа Ғәләүҙең өҫтөнә менеп бара.* (Т. Йәнәби.)

**күҙҙән сүп эҙләү.** Юҡ гәйепте табырға тырышыу, гәйеп эҙләп бушҡа бәйләнеү. *Кеше* ***күҙенән сүп эҙләгәнсе,*** *үҙеңдекендәген алыу йүнен ҡара.* (Һөйл.)

**күҙе ҡара күтәрмәгән (йығылған)** *һөйл.* Йәберләнгән кеше үҙенән дә ныҡ йәберләнене рәнйетеүгә ҡарата әйтелә.

**күҙен алған күгәүен кеүек (күгәүендәй).** Ҡайҙа барғанын, ни ҡылғанын белмәй ҡаңғырып йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә.

**күҙен асыу** *кемдең.* 1. Донъяны танырлыҡ хәлгә еткереү, аңбелемен күтәреү. *Ошолай белем алыу, илдәге, донъялағы хәлдәр менән өҙлөкһөҙ танышып барыу сәбәпле, ул [Әхкәм] түңәрәктә лә уҡыны, иптәштәренә күпме яңылыҡты һөйләне лә, күпме кешенең* ***күҙен асты.*** («Сов. Башҡ.»)

2. Кемдең кем икәнен танырға, кешене белергә өйрәтеү. *Ваҡиғалар үҙҙәре үк, күңелдәрҙәге иллюзияларҙы таратып, бик күптәрҙең* ***күҙен асты.*** (Р. Бикбаев.) *Быға тиклем һуҡырҙың һуҡыры булған икән Ҡәптершин,* ***күҙен асты*** *бит Хөршиҙәһе.* (Ш. Янбаев.)

**күҙен-башын әйләндереү** *кемдең.* Үҙеңә ҡаратып алыу, тамам ғашиҡ итеү.

**күҙен дә йоммай.** Күҙгә тура ҡарап, оялып-тартынып тормай (*алдау, хәбәр һөйләү* һ. б.).

**күҙендә (йоҙондә) омот юҡ.** Һәр төрлө этлекте, яуызлыҡты ҡылырға һәләтле кешегә ҡарата асыу белдереп әйтелә. «*Китсәле, булмаҫ! Нисек кеше үлтермәк кәрәк!*» «*Булыр ул малайҙан,* ***күҙендә өмөт*** *әҫәре* ***юҡ*** *уның*». (И. Насыри.)

**күҙен дүрт итеү** *кемдең.* Аптыраушта ҡалдырыу. [*Ғаиса*] *Ҡапыл ҡайтып төшөп, Саниәһын ауыл Советына етәкләп алып барып яҙылышаһаҡ та, Өфөләге фатирына килтереп индереп,* ***күҙен дүрт итәсәк.*** (Н. Мусин.)

**күҙенән йәше кипмәй** *кемдең.* Гел генә илап тора торған.

*син.*: күҙе инешле урынға тура килгән.

**күҙе сыҡҡан** *һөйл.* Берәй эш-хәлде тәрән белгән, серенә төшөнгән. *Белеүемсә, һеҙгә архивтарҙа эшләргә кәрәк, ә Сергей ул мәсьәләлә лә* ***күҙе сыҡҡан кеше.*** (Й. Солтанов.)

**күҙе тоҙ булыу.** Кемделер көтә-көтә арып бөтөү. *...Мулла һаман юҡ та юҡ. Иртә-кис урамға сығып ҡарай торғас, Мөтәүәллиҙең* ***күҙҙәре тоҙ була*** *башланы.* (Б. Бикбай.)

**күҙ йомоп.** 1. [ҡарау, ҡалыу]. Иғтибарһыҙлыҡ менән, белеп тә белмәҫкә тырышып. — *Дуҫтарым минең, ҡаршыбыҙҙағы ҡурҡыныҫҡа* ***күҙ йомоп*** *ҡарарға тейеш түгелбеҙ.* (Я. Хамматов.)

2. [алыу, кейәүгә барыу, йәки башҡа берәй эш ҡылыу]. Алдыартты уйлап тормай, ҡыйыу ғына.

**күҙ йомоу** *кемгә, нимәгә.* 1. Күреп тә күрмәмеш булыу (*ғәҙәттә, етешһеҙлекте, хилаф ҡылыҡты*). *Ҡайһы берәүҙәр «хәтер һаҡлайым» тигән уй аҫтында, иптәштәрҙең бәләкәй һәм оло яңылыштарына* ***күҙ йомоп*** *үтәләр.* (С. Агиш.) *Етешһеҙлектәр бар беҙҙә,* ***күҙ йомоп*** *булмай.* (М. Тажи.) *Был бисә, Имайҙың бөтә яман ҡылыҡтарынан* ***күҙ йомоп,*** *баш әйеүҙән башҡаны белмәй ине.* (Һ. Дәүләтшина.) *Ҡунаҡҡолдоң был хикмәттәре колхозды алдынғылар иҫәбендә йөрөтөргә мөмкинлек биргәс, ул бөтәһенә лә* ***күҙ йомдо.*** *(Х. Ғиләжев.)*

2. Үлеү.

**күҙ йөрөтөү (йүгертеү).** Өҫтән-мөҫтән генә ҡарап, уҡып сығыу. *Ҡай береһе һорай Сәйҙелдән орден тарихын да һөйләргә.* —

*Һөйләйем, ти, ләкин ҡыҫҡа ғына...* ***Күҙ йөрөтөп*** *алды тирәләп.* (Ғ. Сәләм.) *...Генерал Белов картаға тағы ла бер* ***күҙ йөрөтөп*** *сыҡты.* («Сов. Башҡ.»)

**күҙ йәше кеүек.** Бик таҙа, саф (*һыу кеүек шыйыҡлыҡтарға ҡарата*).

**күҙ йәше менән.** Илай-илай, нык үтенеп. ***Күҙ йәше*** *менән һорай.*

**күҙ көйөгө.** Эше, ҡылығы менән йәнде көйҙөргән, асыуға тейгән кеше. *Һин дә ултыраһың* ***күҙ көйөгө*** *булып.* (Х. Ғиләжев.) *Яу ҡырҙарын ташлап ҡайтып килгәс,* ***күҙ көйөгө*** *булды үҙ балам.* (Ә. Вахитов.) *Яҡты донъяла йәшәргә тырышырға кәрәк. Йәшәйем тиһәң инде,* ***күҙ көйөгө*** *булып әрәмтамаҡ булып йөрөмәҫкә кәрәк.* (Әкиәттән.)

**күҙ күргән** [кеше]. Күреп-белеп йөрөгән, яҡын таныш булған. ***Күҙ күргән*** *таныш булһа, эш табыуы еңелерәк булыр ине. Ләкин Ырымбурҙа уларҙың* [*Сөнәғәт менән Хәбибулланың*] *бер кешеһе лә юҡ ине.* (Ж. Кейекбаев.) ***Күҙ күреп*** *йөрөгән дуҫтар тороп ҡалды Өфөлә.* (Х. Ғиләжев.) *Нисә әйтһәң дә, Аллаяр тирә-яҡта даны сыҡҡан бай кеше,* ***күҙ күргән*** *әҙәм.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**күҙ күргән, ҡолаҡ ишеткән** *фольк.* Быуаса билдәле булған. *Тау батыр тауҙы икенсе ергә күсереп алып киткән. Был ысынлап та* ***күҙ күргән, ҡолаҡ ишеткән*** *эш түгел икән.* (Әкиәттән.)

**күҙ күреме** [ер]. Күҙ менән байҡарлыҡ (*ара-ер тураһында*). ***Күҙ күреме*** *ергә йәйелгән дала. Ҡараңғылыҡ беҙҙе ... ҡыҫып килә.* (Ф. Иҫәнголов.)

**күҙ күреме етмәҫ(лек).** Киңлеген, алыҫлығын күҙ менән иңләрлек булмаған. *Ййыҡты ике яҡлап үле татырлауыҡтар менән ҡылғанлы яландарҙың* ***күҙ күреме*** *етмәҫ киңлектәре йәйрәп ята.* (С. Злобин.)

**күҙ күрер.** Ваҡыты еткәс, сараһын күрербеҙ, ҡарарбыҙ (*тынысландырыу өсөн әйтелә*). *Көҙгә тиклем, завод эшкә башлағансы, Лена тулҡыны, бәлки, бер аҙ баҫылыр. Баҫылмай икән,* ***күҙ күрер...*** (Ж. Кейекбаев.) *Украинанан апаһы менән еҙнәһе: «Тура үҙебеҙгә ҡайт, артабан* ***күҙ күрер****», — тип хаттар яҙҙы.* (Р. Низамов.) — *Китеү-китмәү тураһында бер төрлө лә планым юҡ. Ҡайтҡас,* ***күҙ күрер*** *әле, — тип һүҙен бөтөрҙө* [*Илсур*]. (Ш. Галин.)

**күҙ ҡабагын төйөү.** Йөҙғә асыу төҫө сығарыу.

**күҙ ҡарайыу.** 1. Эшләй-эшләй бөтөрә алмай йәки көтә-көтә көтөп ала алмай аптырап бөтөү. [*Ҡарлуғас*:] *Ҡайҙа юғалдың шул тиклем оҙаҡ? Көтә-көтә* ***күҙем ҡарайҙы.*** (Б. Бикбай.)

2. *диал.* Бик нык арыу, хәлдән тайыу.

**күҙ ҡараһы.** Бик ҡәҙерле, ғәзиз. *Ай, балам, бәғерем, бауырым... Минең* ***күҙ ҡарам.*** (С. Мифтахов.) ***Күҙ ҡараһы*** *булған йәш балаһын етем итеп, айырып юғалған...* (Ғ. Амантай.) *Яҙмыш һуҡмаҡтары төрлө яҡтарға алып йөрөнө мине, әммә һис ҡасан*

*да онотмайым мин һине! Һин минең ике* ***күҙем ҡараһы****, йөрәгемдең параһы.* (А. Иғебаев.)

*син.*: йән киҫәге, йөрәк ите, йөрәк майы.

**күҙ ҡараһы кеүек (ҡараһылай)** [күреү, һаҡлау]. Бик нык ҡәҙерләп, ғәзиз күреп (*ҡарау, һаҡлау*). *Халыҡ үҙенен ҡаһарман улы Салауат исеме менән бәйле булған һәр документты, һәр хикәйәтте* ***күҙ ҡараһы кеүек*** *һаҡлай.* (Ә. Әсфәндиәров.) *Шымсылар ... ебәктең сере алтмыш йоҙаҡ аҫтында, ҡыҙыл билле алтын һандыҡта* ***күҙ ҡараһылай*** *һаҡлана, тип ҡайта.* (Й. Солтанов.)

**күҙ ҡасырыу.** Эш-хәлдең асылын йәшереү. *Хәрәкәттең ысынға тап килмәү рәүешлеге* ***күҙ ҡасырыуҙы****, эште, хәрәкәтте ысынлап эшләмәүҙе белдерә...* (Ж. Кейекбаев.)

**күҙ-ҡолаҡ булыу.** Күҙ уңынан ебәрмәй, ҡарап, күҙәтеп тороу. [*Ҡарағол*:] *Бик яҡшы. Һин, Мозой, минең йортҡа* ***күҙ-ҡолаҡ бул.*** (Д. Юлтый.) *Аҡыл өйрәтер кеше юҡ. Һин, Юламан ағай, минең балаларға ла* ***күҙ-ҡолаҡ булырһың*** *инде.* (З. Биишева.) *Ғәзимә командировкаға киткән саҡтарында фатирыма* ***күҙ-ҡолаҡ булып*** *тора, гөлдәремә һыу һибә.* («Сов. Башҡ.»)

**күҙ ҡоросо.** Күҙҙең күреү һәләте. *...Һуҡырайма кинәт яҡтыларға,* ***күҙ ҡоросоң*** *ҡалһын ҡарағa. Аҡҡа өмөт, аҡҡа ынтылыш та ҡара көндәреңдә ярала.* (Р. Хисаметдинова.)

**күҙ ҡорто.** Күҙҙе ҡыҙҙырып, ҡыҙыҡтырып торған нәмә. *Батмустың әйләнәһен, ҡалас, май, йомортҡа, лампасый кеүек, бисәләрҙең* ***күҙ ҡорто*** *булған нәмәләр әйләндереп алған.* (Ғ. Дәүләтшин.)

**күҙ ҡыҙыу (ҡыйыу).** Бик нык ымһынып ҡарау, ҡыҙығыу. *Баҡсаң бик оҡшағас,* ***күҙем ҡыҙып****, һинең алмағасың төбөнә килеп, ял итеп китергә ултырҙым.* (Әкиәттән.) *Башҡа малайҙар саң борҡотоп урамда уйнап йөрөйҙәр,* ***күҙ ҡыҙа.*** (Б. Бикбай.) *Бәғиҙә Исхаҡтың һаҡал-мыйығы саҡ беленеп килгән йөҙөнә, көс-ҡеүәт инә башлаған күкрәгенә, беләктәренә* ***күҙе ҡыҙып****, оҙаҡ төбәлеп ҡарай.* (Ш. Янбаев.)

**күҙле бүкән** *һөйл.* Тирә-яҡта ни булғанын аңламай ҡарап торған кеше; тупаҫ, аңра. — ***Күҙле бүкән*** *һин. Күреү генә етмәй, айышына төшөргә кәрәк, — тине Иәмғи, маңлайына күрһәтеп.* (Х. Ғиләжев.) *Нишләргә белмәйем. Ултыра бирәм* ***күҙле бүкән*** *кеүек.* (Р. Солтангәрәев.) [*Хәжәр Дауытҡа*:] *Эргәгеҙҙә булмағас та, ни эшләгәнегеҙҙе, ни ҡылғанығыҙҙы күрмәй ҙә, ишетмәй ҙә тип уйлайһығыҙмы? Мин әле* ***күҙле бүкән*** *хәленә ҡалмаған.* (Ш. Янбаев.)

**күҙ менән ҡаш араһында.** Шунда уҡ, бик тиҙ (*ғәҙәттә, юғалыу, ҡайҙалыр китеү*). *Шул* [*Мәсем*] *хандың ҡыҙы* ***күҙ менән ҡаш араһында*** *ғәйеп булды.* (М. Буранғолов.)

**күҙ нуры.** 1. Күҙҙең күреү һәләте, көсө. ***Күҙ нурын*** *түгеү.* ***Күҙ нуры*** *бөтөү.*

2. Күҙ ҡарашындағы йылылыҡ. ***Күҙе*** *бигерәк* ***нурлы.***

3. *Эйл. ф.* Яҡын күреп, иркәләп әйткән һүҙ. *Рәхмәт, **күҙ нурым**, бөркөт йөрәклем минең.* (Й. Солтанов.) ***Күҙ нуры** кеүек ғәзиз балалар*(*ым*)... (М. Ғафури.)

**күҙ өҫтөндәге ҡаш кеүек** [күреү, итеү...]. Бик ҡәҙерле һанау. [*Шәмсиә*:] ***Күҙ өҫтөмдә ҡашым** бул да Донъяла яҡшым бул.* (Б. Бикбай.) *Ауылдың **күҙе өҫтөндәге ҡашы** ине ҡыҙ. Үҙенә һоҡланмаған кеше булмағандыр.* (Ғ. Лоҡманов.) *Яҡын итеп Салауаты кеүек, **күҙ өҫтөндә** торған **ҡаш** итеп, бер тауына халыҡ исем биргән...* (И. Кинйәбулатов.)

**күҙ (ҡараш) ташлау.** Ҡапыл ҡарап алыу. *Һалдат, эштең ниҙә икәнен аңлап, тирә яҡҡа **күҙ ташлаһа**, үҙенең яңғыҙ түгел икәненә ҡыуанып ҡуйған, ти.* (Әкиәттән.)

*син.*: күҙ төшөрөү (һалыу).

**күҙ төбәү.** 1. Текләп ҡарап тороу.

2. Ышаныс, өмөт белдереү. ...*Исемдәре билдәле яҙыусылар, шағирҙар һәм башҡа зыялылар **күҙ төбәп** уға* [*Фәнүзә Хәмитовнаға*] *килә.* («Башҡортостан»).

**күҙ сығыу.** Бер эш менән күп шөғөлләнеп, ныҡ оҫтарыу. — *Һин инде, иптәш Хәмитов, мине өйрәтмә! Боронғолар әйтмешләй, сауҙа эшендә минең **күҙем сыҡҡан.*** (С. Ағиш.)

**күҙ ташыу.** Ни эшләгәнде, ҡайҙа барғанды белмәй шашыу. *Бына әле, **күҙе ташҡан**, ауыл ҡыҙы тигәс тә, хәҙер үк әйәреп китергә һап итеп тора, тип уйлайҙыр әле!* (Ф. Иҫәнғолов.)

**күҙ теғеү.** Текәлеп ҡарау. *Таянып әйәккә, **күҙ теғеп** ыраҡҡа, ултырам уйланып, бер үҙем бер яҡта.* (Ш. Бабич.) *Бер бала **теккән күҙен**, һулығып илай, йырҙар яҙа...* (Д. Юлтый.) *Ниҙер уйлай, **теғеп күҙен** әсәһенең маңлайында ҡойо кеүек яраһына.* (К. Кинйәбулатова.)

**күҙ тейеү.** 1. Кешенең ҡарашынан насар тәьҫир алыу. *Хәлимә һылыу ҡыҙ бала, нисек үҫкән **күҙ теймәй**.* (Халыҡ йырынан.) *Ҡайһылай һылыу, аҡыллы ҡыҙ булып үҫеп еттең бит! Тфү, тфү, **күҙем теймәһен**...* (Ф. Иҫәнғолов.)

2. Артыҡ маҡтауҙан боҙолоу.

**күҙ теймәһен.** 1. Яңы нәмәне, йәш баланы яман күҙҙән һаҡлау өсөн әйтелә.

2. Һоҡланыуҙың кейәһе төшмәһен өсөн әйтелә. *Мин артыңдан ҡарап ҡалдым, улым... **Күҙ теймәһен**, абау, үҫәһең!* (Ш. Бикҡол.)

**күҙ тейҙереү.** Артыҡ маҡтап боҙоу. *Маладис ир ул беҙҙең Фәхри. Тик артыҡ маҡтап, **күҙ тейҙереп** ҡуймайыҡ.* (Б. Бикбай.)

**күҙ текәү (төбәү, терәү)** *кемгә, нимәгә.* Текәлеп ҡарау. *Күпме тапҡыр күккә **күҙ терәнем**, юҡ күҙҙәрем минең алдамай...* (М. Илбаев.)

**күҙ терәп торған.** Ҙур өмөт, ышаныс бағлаған; йәшәү сығанағы, таяныс булған. [*Хәжәр Фәтхигә*:] *Иремде һуғыш тартып алды, **күҙ терәп торған** улымды һеҙ бергәләп аҙҙырҙығыҙ.* (Ш. Янбаев.) *Аллаярҙың **күҙ терәп торған** иҫәбе — үҙе заманса-*

*рак та булған, үҙе уңған, үҙе күндәм бер егетте Сәлимәгә йортка индереп алыу. (Ф. Иҫәнғолов.) Отряд менән китеүселәрҙең **күҙ терәп торған** актык һыйырҙарын, кәзә-һарыктарын бергә йыйып, кайҙалыр кыуҙылар...* (Я. Хамматов.)

**күҙ терәп** [калыу, тороу...]. *Донъя мазлумдары хәсрәт йота, Миллион тора һиңә **күҙ терәп**!* (Д. Юлтый.) *Эй-эй, бисәкәйем, аккошом, икенсе кешегә барһам, акса һорай, һиңә килдем **күҙ терәп**, карасы.* (К. Кинйәбулатова.)

**күҙ тигәнең ботак урыны (тишеге)** *һөйл.* Алдындағын күрмәй, тапап, емереп килгән кешегә асыу белдереп әйтелә.

**күҙ тоҙ(ҙай) булыу.** Ни эшләгәнде белмәҫ хәлгә килеп шашыу. *«Кыҙ» тигәс тә һелкенә күкрәк, колактар шәмрәйә, **Күҙҙәр** урынынан куба, **тоҙҙай була**, шашкан кеүек.* (Ш. Бабич.) *Аяҙ көтөп, **күҙем тоҙ булды** бит, кайнап китә эстә курҙарым. Игендәрҙең биле яҙылһын да, алғыш баҫһын кырҙарым.* (Т. Йосопов.)

**күҙ тоноу.** 1. Бер ни күрмәү (*ярһыу аркаһында*). *Янғындан куркып, **күҙҙәре тонған** йәнлектәр, кәртәне кәртә тимәй ... көнбайышка саба ине.* («Сов. Башк.»)

2. Аптырап бөтөү, йөҙәү. *Төшкө аш вакытын еткерә алмай, **күҙҙәребеҙ тондо**.* (Д. Юлтый.) *«Киленкәйем менән сабыйым Ғайса көтөп **күҙҙәре тонғандыр инде**», — тип хафаланды* [*Сәғүрә*]. (Ф. Иҫәнғолов.) *Һине кайтара алмай **күҙ тондо**.* (С. Кудаш.)

**күҙ тотоу.** Ниҙелер ышанып көтөп тороу. [*Местком председателе*] *Бик мөләйем итеп, киләһе йыл кайҙа ял итергә **күҙ тотканлығымды** һораша.* (Й. Солтанов.)

**күҙ тошороу** *кемгә, нимәгә.* Кыҙыкһынып карап алыу. *Хаттың конвертын йыртып, эсендәге кағыҙға **күҙ төшөрҙөм**.* (Т. Йәнәби.) *Беҙ берәм-берәм* [*өйҙәге*] *кешеләргә **күҙ төшөрөп** сыктык. Улар ҙа беҙгә караны.* (Д. Юлтый.)

**күҙ тошөү** 1. *кемгә, нимәгә.* Ирекһеҙҙән күреп калыу. ***Күҙем төштө** тауҙың аҫтында күккә карап, бакырып илап яткан олактырылған бесәй меҫкенгә.* (Ш. Бабич.) *Килдебай йоҙроғон күтәреп, өҫтәлгә һуғайым тип, кулын күтәргәнсе, бер нисә аҙым ерҙә карап торған Арыҫланғәлегә **күҙе төштө**.* (Ғ. Дәүләтшин.)

2. *кемгә.* Ғашик булыу, яратыу. *Кара, кара, кәләш тигәс тә, ауыҙҙары колактарына етте! Әллә **күҙең төшөп** йөрөгән берәй кыҙың бармы?* (Б. Бикбай.) [*Гөлъямал:*] *Ниңә шак каттың? Әллә миңә **күҙең төштөмө**?* (Я. Хамматов.)

**күҙ түбәгә менеү.** Бик нык аптырау, ғәжәпкә калыу. *Хәбәр ысынлап та шак катырлык ине. Малайҙарҙың **күҙҙәре түбәгә менде**.* (М. Кәрим.)

*син.*: күҙ дүрт булыу, күҙ шарҙай булыу, шак катыу.

**күҙ тышта ҡалыу.** Тыштан ингәс, күрмәй тороу (*гәҙәттә, яҙын аяҙ көндә була торған хәл*). ***Күҙем тышта ҡалған**, бер ни күрмәйем.*

**күҙ уғы.** Ырым буйынса: күҙҙең кешене арбай торған сихри көсө. ***Күҙ уғың** төшөп ҡалмаһын.*

**күҙ уйнатыу.** Күҙҙе ялт-йолт йөрөтөп, мут итеп ҡарау.

**күҙ уңынан ебәрмәү (ысҡындырмау, сығармау).** Иғтибар үҙәгендә тотоу. [*Хәлит:*] *Уның башы беҙҙең яҡҡа әйләнергә тейеш. **Күҙ уңынан ысҡындырма.*** (Ә. Атнабаев.)

*син.*: күҙ уңында тотоу.

**күҙ һалыу** *кемгә, нимәгә.* Ҡарап алыу. *Дон буйынан ҡуҙғалып, яҡ-яғына **күҙ һалып**, Бүгәсәү тигән бер батыр ... халыҡҡа оран ташлаған.* (С. Юлаев.) *Кем **күҙ һалғаны** бар: өсөнсө номерлы магазинда беспорядок, вот шул, минең әйтә торған һүҙ шуның менән бөттө.* (С. Агиш.) *Сәми тегегә-быға **күҙ һалып**, ҡунаҡ булып оҙаҡ ҡына йәшәй.* (Ә. Вахитов.) *Уңайһыҙланып ситкәрәк боролоп ултырҙым, ләкин китапҡа **күҙ һалыу** менән баяғынан да яман ҡысҡырып көлөп ебәрмәмме!* (Ә. Хәкимов.)

*син.*: ҡараш ташлау.

**күҙ һатыу.** Маҡсатһыҙ-ниһеҙ ҡыҙырып, ҡарап йөрөү. *Бары йәкшәмбе көн һайын теләгәнсә йөрөй бир, ваҡыт үҙ ихтыярыңда. Баҙарға сығып **күҙ һатабыҙ.*** (Б. Бикбай.) *Өлкәнерәктәр яйлап тарала. Йәштәр араһында бер үҙем **күҙ һатып** ултырыу уңайһыҙ ине.* (Ф. Исәнголов.)

**күҙ һирпеү.** Тиҙ генә ҡарап алыу. ***Күҙен һирпһә** — күңеленде иретә, һүҙен әйтһә — йөрәгеңде елкетә.* (Я. Ҡолмой.)

**күҙ һытыу.** Бушҡа илау.

*син. ҡар*: балауыҙ һығыу.

**күҙ шар(ҙай) булыу.** Ныҡ аптырау. ... *21 йыл бергә йәшәгән әбейемде һәм өс баламды ташлап, йәш бисә яғына бөтөнләйгә күсеп килдем. Ауыл халҡының **күҙе шар булды.*** (Ф. Абдуллин.) *Ямғыр нисек тиҙ яуа башлаһа, шулай тиҙ туҡталды. Быны күргән Ғәбиҙулланың **күҙе шарҙай булды.*** (Л. Яҡшыбаева).

**күҙле-башлы булыу.** Ирле йәки ҡатынлы булыу, ғаилә ҡороу.

**күҙ шәмәреү.** Иламһырау, илау.

**күҙ эйәрмәү** *кемгә, нимәгә.* Тиҙ хәрәкәт итеүен, эшләүен ҡарап, күҙәтеп өлгөрөп булмау. *Төндә бер кеше килә лә быныҡ сыҡҡан игенен тегендә күсереп ултырта, **күҙ эйәрмәй** быныҡ эшенә.* (Әкиәттән.) *Айһылыуҙың ... бармаҡтарының йөрөшөнә **күҙ эйәрмәй.*** (З. Биишева.)

**күҙ элеү.** Әҙ генә йоҡлап алыу, серем итеү. *Ун көн, ун төн **күҙ элмәйсә**, Баш осонда булды әсә.* (Х. Назаров.)

**күҙ яҙҙырыу (яҙылдырыу)** *кемдән.* Эҙҙе йәшереп, бутап, күҙәтеү аҫтынан сығыу, ҡасыу. *Был ваҡытта инде Күк толпар ҡыуғынсыларҙан **күҙ яҙҙырып**, бер ҙур күл яғына килеп сыҡҡайны, ти.* (Әкиәттән.) *Ҡуян **күҙ яҙҙырып** китте, эт торҙо ла*

*калды.* (М. Ҡулаев.) [*Тейен*] *Ағастан-ағасҡа һикергеләп, тау аръяғына китеп* ***күҙ яҙҙырҙы.*** (М. Тажи.)

**күҙ яҙыу.** Күҙ алдынан юғалтыу. *Ҡарттар* ***күҙ яҙыу*** *менән, малайҙар туҡтап, һабан көйләргә тотоналар.* (Ж. Кейекбаев.)

**күҙ ялтыратыу** *кемгә.* Мәғәнәле итеп, ғишыҡ белдереп ҡарау. *Ғәрифә ҡыҙ булып еткәс, бер муллаға аҫрау булып эшкә кергән икән. Мулла халҡын беләһегеҙ бит инде, теге Ғәрифәгә* ***күҙен ялтырата*** *башлаған, ти.* (Әкиәттән.)

**күҙ яуын алырлыҡ (алырҙай).** Бик матур (*ялтырап торған, баҙыҡ итеп биҙәлгән нәмәләр тураһында*). [*Аллаярҙың*] *Ҡыйығы* ***күҙ яуын алырлыҡ*** *итеп — йәшелгә, ҡылансыҡландырып ырмай яһалған тәҙрә ҡапҡастары зәңгәргә буялды.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Ә зәңгәр быяла аша ҡараһаң, донъя бигерәк тә матур икән,* ***күҙҙең яуын алырлыҡ.*** (И. Абдуллин.)

**күҙ яуын алыу (алып тороу).** Бик матур булыу (*тәбиғәт күренештәре йәки биҙәлгән нәмәләр тураһында*). ***Күҙҙең яуын алған*** *сәскәләр Матур туғайҙарҙа булалар...* (Д. Юлтый.) *Балыҡтың тәңкәләре алтындан да, гәүһәрҙән дә яҡуттан ғына икән.* ***Күҙҙең яуын алып торалар,*** *ти.* (Әкиәттән.)

**күбәләк кеүек** [осоу]. Еңел, етеҙ (*атлау*). *Мәрйәм* ***күбәләк кеүек*** *осоп минең эргәгә килде.* (Д. Юлтый.)

**күккә күтәреү (сөйөү).** Үтә ныҡ маҡтау, самаһыҙ данлау. *Председателгә эйәреп, улар ҙа колхоздағы барлыҡ уңышты Тимергә япһарып, уны* ***күккә күтәрергә*** *тотондолар.* (Б. Бикбай.) *Ил тигәндең кеме генә юҡ инде хәҙер. Кемделер кәпәс сөйә-сөйә саманан тыш* ***күккә күтәрәләр,*** *кемделер бинахаҡҡа тәпәҫләйҙәр.* (А. Игебаев.)

**күк ҡабағы (шаршауы) асылыу.** Дини ҡараш буйынса: рамаҙан айының алтынсы ҡәҙер төнөндә күк асылыу (*ошо ваҡытта теләгән теләк ҡабул була, имеш, тиҙәр*).

**күк ҡабағы асылғанды көтөү.** Булмаҫтайға өмөтләнеү.

**күккә ҡарап төкөрөү.** Ниҙеңдер ҡәҙерен белмәй шашыныу. *Халыҡ күңеле ул күк йөҙө кеүек киң, сикһеҙ. Ә һин улай* ***күккә ҡарап төкөрһәң,*** *төкөрөгөң үҙеңдең йөҙөңә генә төшөр...* (Р. Ғарипов.)

**күккә өсөү.** Юҡҡа сығыу, селпәрәмә килеү. *Офицер быңдай ҡарышыуҙы көтмәгәнгә, уның шаярыуы* ***күккә осто.*** (С. Агиш.)

**күкрәк (түш) килеү.** 1. Үҙеңде иркен тойоу. *Революцияға тиклем ярлы-ябағайға* ***күкрәк кирәп*** *эшләп ашарға ла мөмкинлек юҡ ине.* (К. Кинйәбулатова.)

2. Көс күрһәткән ғорур төҫ алыу.

**күкрәк көсө.** Кешенең үҙ хәләл көсө, үҙ тырышлығы.

**күкрәк көсө менән табыу.** Үҙең эшләп, үҙ көсөң менән. *Аталарҙан ҡалған, ай, ир бала* ***күкрәк көсө менән мал таба.*** (Халыҡ йырынан.)

**күкрәк ҡағыу (һуғыу).** 1. Ярһыу, йөрәкһеү. ***Күкрәк ҡағып*** *юрғаларһың, ялың һыйпап һөйәрмен.* (Р. Ғарипов.)

2. Мин-мин тип маҡтаныу, кәпәренеү. *Әҙ генә шул юлда ҡайғы, хәсрәт эсмәгән әҙәм «мин» менән **күкрәк һуғып**, шөһрәт ҡамын таҡмаҡ була.* (Д. Юлтый.) [*Дилбәр*:] *Рәхмәт, ағайым! Юғиһә, ҡайһы берәүҙәр һөйләгәндә **күкрәк һуғалар**, эшкә күскәндә, ышыҡҡа ҡасалар.* (М. Кәрим.) [*Ефим*:] *Ғәзиз дә килә, теге «...мин комсомол!» — тип, **күкрәк һуғып** йөрөгән Миҙхәт тә килә.* (Ғ. Хәйри.)

*син.*: түш һуғыу.

**күкрәк ҡалҡыу**. Үҫеп етеп, эшкә ярарлыҡ булыу. *Үҫеп **күкрәге ҡалҡҡас**, ул [Татлыбай] ололар менән бер ҡатарҙан дегет ҡайнатты, бесән сапты, һунарға йөрөнө.* (Ш. Шәһәр.)

**күк талаҡ итеү** *кемде*. Нык туҡмап, тәнен тотош күм-күк итеп бөтөү. *Ҡыҙ йыртҡыланып бөткән эске күлдәксән килеш кенә ята. Тәндәренә ҡарарлыҡ түгел, **күк талаҡҡа** әйләнгән.* («Башҡ. пионеры».)

**күктең төбө төшкән (тишелгән)**. Өҙлөкһөҙ яуып торған ямғырға ҡарата зарланыу белдереп әйтелә. ***Күктең төбө тишелгәндәй**, туҡтауһыҙ ямғыр яуа. Ерҙә баҫыр урын юҡ.* (В. Исхаҡов.) — *Көндәр аяҙ торһон, — тигәйнең дә ҡайтып барған саҡта еләктән, **күктең төбө әллә тишелгәнме**, ҡойоламы икән иләктән?* (Т. Йосопов.)

**күктән алып** [һөйләү]. Юҡ хәбәрҙе бар итеп, яһап һөйләү.

**күктән төшкән кеүек (төшкәндәй)**. Ҡапыл, көтмәгәндә булған эш-хәл, килеп сыҡҡан кеше. *Инде күптән ер ҡуйынында тип иҫәпләнгән кешенең, **күктән төшкән кеүек**, ҡорал тотоп, алдарында баҫып тороуы уларға аяҙ көндә йәшен һуҡҡан төҫлө тәьҫир итте.* (Ф. Иҫәнғолов.) ***Күктән төшкән кеүек** килеп кергән был ят ҡыҙ егеттең дә күңелен болартып ҡуйҙы, ахырыһы.* (Р. Солтангәрәев.)

**күктән төшөү**. Көтмәгән ерҙән үҙе килеп ҡулға инеү. *Гүйә байып китеү: **күктән төшкән**, Алла биргән бәхет күренә.* (Д. Юлтый.) *Ижадсы ла, һуғышсы ла, эшсе лә булдың һин, Башҡортостан! Яҡты көндәр һиңә **күктән төшмәне**.* («Башҡ. ҡыҙы».)

**күктән төшмәгән**. Әллә ҡайҙан, белмәгән-күрмәгән ерҙән килмәгән; килгәне билдәле. *Фабрикаларҙа, заводтарҙа, ҡалаларҙа шундай кешеләр бар, революционер тиҙәр уларға. Уларҙың береһе лә **күктән төшмәгән**, Ҡафтау артынан да килмәгән.* (С. Агиш.) — *Әхмәҙигә лә байлыҡ **күктән төшмәгән** инде. Шул бүҙрәтчиккә кереп кенә байып китте ул да, — тине Зәкәриә.* (Ж. Кейекбаев.)

**күлдәккә һыймау**. Нык ҡыҙышыу, хисләнеү. *Шундай ҡырыҫ яҙ ҙа булыр икән: Ҡырау өттө имән бөрөләрен, Эй, шул саҡта, эскәйҙәрем янып, **Күлдәгемә һыймай** йөрөүҙәрем!* (С. Ғәбиҙуллин.)

**күлдәктең яғаһын кейеп** [үҫеү]. Ауыр тормошта, етешһеҙлектә йәшәү.

**күләгәнән өркөү**. Нык ҡурҡып, ҡалтырап тороу. *Ысын көрәшсе юғалтмаҫ үҙ һуҡмағын, **күләгәнән өркөп** йығылмаҫ.* (Ғ. Хәйри.)

**күн (сарыгк) бит.** Оятһыҙ, оятын юғалтҡан.

**күңел аҙығы.** Күңелгә йыуаныс бирә торған эш, нәмә.

**күңел асҡысы(н) табыу** *кемгә, кемдең.* Кешенең яй, көйөн белеп эш итеү. — *Һөйләшергә, был кешенең **күңел асҡысын табырға** кәрәк, — тип уйланы Хаммат.* (З. Биишева.)

**күңел асыу.** Кәйеф-сафа ҡороу. *Минең Наиләм Һамарҙа уҡый, ул йәй көнө ҡайтып, иптәштәре менән шулай **күңел асып** китә.* (С. Агиш.) *Беҙҙә дуҫтар менән осрашҡанда йәки байрам көндәрендә **күңел асыу** йолаһы бар.* («Сов. Башк.») [*Өсөнсө аҡһаҡал:*] *Зөбәржәтте кинйәң Ишмырҙаға йәрәштереп, ике туйҙы бергә үткәрерһең. Ашап-эсеп, **күңел асып** ҡалыр ырыу.* (М. Кәрим.)

**күңел баҫыу** *кемгә, нимәгә.* Ауыр ваҡытта берәй кешегә йәки нимәгәләр йыуаныу. *Балаға **күңел баҫыу**.*

*син.*: бауыр баҫыу.

**күңел биреү (һалыу)** *нимәгә.* Ихласлыҡ менән, нык бирелепниҙер эшләү. *Ошо көндәше һөйләгәндә **күңел биреп** тыңлаған Гөлмәҙинә ҡурҡты.* (Я. Хамматов.) *Сәсеүен сәстеләр, ләкин эшләй белмәгәнгәме, **күңел бирмәгәнгәме** — кукуруз үҫмәне.* (К. Мәргән.)

**күңел бөтөү** *кемдең кемгә, нимәгә.* Кемдеңдер ҡылығынан, эшенән ҡәнәғәт булып, ҡыуаныу. *Йәш килененең килгән көндән үк белекле рәүештә ғөрөф-ғәҙәтте һаҡлауына, бигерәк тә уларҙың һүҙен тыңлап, ҡасып килеүенә Йомай әбейҙең **күңеле бөттө**.* (Һ. Дәүләтшина.) — *Рәхмәт инде, — ти ҡарт, ҡәнәғәтләнеп, — быйыл тағы Әхмәтсафа өйөмдөң тирә-яғын кәртәләтһә, күңелем **бөтөр ине**.* (Р. Низамов.)

**күңел бөсмаҡланыу (бөтәйеү).** Ҡәнәғәтлек кисереү, бик риза булыу. *Ниңә күпһенәйем, улар ҙур бүләккә хаҡлы кешеләр. Әйҙә, бир, **күңелдәре бөсмаҡланһын**.* (Б. Бикбай.)

**күңел булыу** *кемдең, нимәнән.* Эш-ҡылыҡҡа йәки башҡа берәй нәмәгә риза булып, күңелләнеп китеү. *Ғаббас мулла, һыйлаусының **күңеле булһын** өсөн, нык ҡына кикереп, мыйығын ҡулының һырты менән һыпырғылап алды.* (З. Биишева.) *Һәр көн тыңлайым йырыңды **Күңелдәрем булғансы**.* (А. Игебаев.) [*Гөлйемеш:*] *Ҡыҙҙар, тәғәстәрегеҙ тулды, йырланығыҙ, бейенегеҙ, **күңелегеҙ булды**, әйҙәгеҙ, ҡайтһаҡ та ярай.* (Б. Бикбай.)

**күңел бәйләү** *кемгә, нимәгә.* Уй-хисте биреү. *Уралды* [*Һомай*] *күргәс тә, батырлығын белгәс тә, яҡшылығын һиҙгәс тә, Уралға **күңел бәйләгән**.* (Эпостан.)

**күңелгә ауыр алыу**. Берәй кешенең эш-ҡылығына, әйткән һүҙенә хәтер ҡалыу, ауыр кисереү. *Әбейгә был турала әйтһәң, бер ҙә яратмай, **күңеленә ауыр ала**.* (Һ. Дәүләтшина.) *Ҡуян ул тапҡан, ҡуйыр урын тапмаған тиһәм, күңелегеҙгә **ауыр***

***алмагыҙ.*** (М. Тажи.) *Кейәү донъя күргән кешегә оҡшай, бер ҙә* ***күңеленә ауыр алмаҫ****. Аламаны аламаға, яҡшыны яҡшыға сағыштырыр.* (Б. Бикбай.)

**күңелгә ауыр булыу.** Уй-тойғоға, йөрәккә насар тәьҫир итеү. [*Сәғиҙә*:] *Бабай, бынауы саңғыларҙы алып килеп, берәй ергә йәшереп ҡуй әле.* ***Күңелемә ауыр булып****, күҙ алдымда тормаһын.* (М. Тажи.)

**күңелгә йылы өрөү.** Ышаныс, ыңғай хис-тойғо тыуҙырыу.

**күңелгә таш һалыу.** Шик-шөбһә төшөрөү, ауыр тәьҫир итеү. *Имзаһыҙ хат тураһында беҙ Йәмилдең үҙенә әйтергә теләмәнек ...****күңеленә таш һалырға*** *ҡыйманыҡ.* («Сов. Башҡ.»)

**күңелгә төйөн (төйөр) булыу.** Ауыр тәьсир ҡалдырыу. *Әйткән һүҙең* ***күңелгә төйөн булып*** *тик тора әле.* (Һөйл.)

**күңелгә һалыу.** 1. Ниндәйҙер хис-тойғо уятыу. ***Күңелгә*** *һөйөү* ***һалдың****, Эй, Ҡорғаҙаҡ, Ҡөрғаҙаҡ!* (Ш. Галин.)

2. Иҫтә ҡалдырыу, хәтергә бикләү.

**күңелгә тейеү.** 1. Ҡоҫҡо килеп тороу. *Майлы ит* ***күңелгә тейҙе.***

2. Берәй эш-ҡылыҡ, һүҙ оҡшамау, рәнйеү, ризаһыҙлыҡ тыуҙырыу. *Шунан халыҡтың тыныслығы уның* [*атамандың*] ***күңеленә тейҙе*** *булһа кәрәк, ул аҡырып уҡ ебәрҙе.* (Ә. Вахитов.)

**күңелгә ут һалыу.** Ауыр хис-тойғо уятыу, тыныслыҡты бөтөрөрлөк эш эшләү, һүҙ әйтеү.

**күңелгә һеңеү (һеңешеү).** Тәрән хис уятыу, иҫтә ҡалыу. ...*Ул моң тора-бара* ***күңелгә һеңеште****, ошо көйҙө һыҙғырып та, эстән дә көйләп йөрөнөм.* (Р. Солтангәрәев.)

*син.*: йөрәккә үтеү.

**күңелгә яҡын алыу.** Тәрән тойоп, кисереш менән ҡабул итеү.

**күңелгә ятыу.** Хис-тойғоларға хуш килеү. *Зифа кәүҙәле, мөләйем йөҙлө был ҡыҙ, нисектер беренсе күреүҙә үк* ***күңелгә ятты.*** (З. Хисмәтуллин.)

**күңелде йығыу.** Кешенең һүҙе, теләге менән иҫәпләшмәй рәнйетеү. [*Малай*] *Насар тай янына баҫа ла шуны алайыҡ, ти. Атаһы, ярар, бының* ***күңелен йыҡмайым****, тип тайҙы ала.* (Әкиәттән.)

**күңелде китеү.** Эш-ҡылыҡ, һүҙ менән йәберһетеү. *Тырыш хеҙмәт һәм уңыштар күңелде шатландыра, ә ҡайһы бер кәмселектәр* ***күңелде китеп*** *ҡуя.* («Сов. Башҡ.»)

**күңелде күтәреү.** Хис-тойғоға ыңғай тәьҫир итеү. *Көлкө һүҙ* ***күңелде күтәрә****, сафландыра, тәрбиәләй.* («Сов. Башҡ.»)

**күңелде ҡырыу (тырнау).** Эсте бошороп, тынғы бирмәй тороу. [*Нәфисә апаһын*] *күреп, исмаһам, бер туғансы һөйләшә алмауы* [*Ғәйзулланың*] ***күңелен ҡырҙы.*** (Я. Хамматов.) *Һыуыҡта һөт бишәр-дүртәр литрға тороп ҡалды. Тап өшо хәл малсыларҙың* ***күңелен ҡыра*** *ла инде.* («Сов. Башҡ.»)

**күңелде ҡытыҡлау.** Елкендереп, түҙемһеҙлек тыуҙырып тороу, тәьҫирләндереү.

**күңелде тартыу**. Ни ягы менәндер үҙенә йәлеп итеү.

**күңелде һаҡлау**. Хис-тойғоға йәбер килтермәҫкә тырышыу.

**күңелде өҙөү**. Ауыр тәьҫир итеү. ***Күңелемде өҙә** йәмһеҙ тойғолар, Мине сырмаған әсе ҡайғылар.* (Д. Юлтый.)

**күңелен асыу** *кемдең*. Кәйефен күтәреү, һәйбәт хис-тойғо уятыу. ...*Нәҙекәй билдәрен өҙҙөрөп, үҙенә камзул, елән дә тегеп кейҙе. Етмәһә, уйнап-көлөп, йырлап-бейеп ҡартатаһының* ***күңелен дә асты***. (З. Биишева.) *Йыры менән егет ауылдаштарының **күңелен асҡан**, ауыр тормошон онотторған.* (Ә. Вахитов.)

**күңелен (йәнен) бәйләү** *кемдең*. Ни ягы менәндер оҡшап, тотоп тороу. [*Ғәлә*] *Үҙенең* ***күңелен бәйләгән*** *китаптарынан айырылғыһы килмәне.* (М. Ғафури.) *Наҙлы ҡыҙҙай* ***йәнде бәйләй*** *киң үҙән ағымдары.* (Х. Ғәбитов.)

**күңелен күреү (табыу)** *кемдең*. Көйөн көйләп, ыңғайына ҡуйып, йәки эш-ҡылыҡ менән күңелләндереү, ҡәнәғәт итеү. [*Мәҙинә*:] *Дауыт, һин хаҡлы түгел! Ғәфүр ағайҙың* ***күңелен күрергә***, *уны араҡы тырнағынан нисек тә тартып алырға, ҡотҡарырға кәрәк.* (Ш. Янбаев.) *Ошо сал сәсле ағай, юлда осраған бер ят үҫмергә иғтибар итеп, минең* ***күңелемде күрҙе***. (Ғ. Вәлиев.) *Ә инде разведка ойоштороп, алтын ятышын эҙләргә тигәндә, тәжрибәле кешеләр приискыла етерлек. Уларҙың* ***күңелен таба*** *ғына белергә кәрәк.* (Я. Хамматов.)

**күңелен күтәреү** *кемдең*. Рухландырыу, дәрт уятыу. [*Айбулат*] *Үҙе бер ҡасан да бошонмаҫ, мәҙәк һүҙҙәр һөйләп дуҫтар* ***күңелен күтәрер*** *ине.* (З. Биишева.) *Полк командиры Йәрмөхәмәтовтың оборона тотоусыларға етәкселек итергә үҙ теләге менән ҡалыуы һуғышсыларҙың* ***күңелен күтәрҙе***. (Ф. Иҫәнғолов.)

**күңелен яулап алыу** *кемдең*. Хис-тойғоларҙы үҙенә ҡаратыу. *Яр буйында кескәй тирмән, көмөш һыу йырлап аға. Үткән, киткән юлсының* ***күңелен яулап ала***. (Ш. Ғалин.)

**күңелеңде киң тот**. 1. Берәй эш-хәл булмау, йәки насар килеп сығыу. — *Наҡышев урынына һинең кеүекте ҡуймаясаҡтар.* ***Күңелеңде киң тот***, — *тип Ниғмәтулла ла һүҙгә ҡушылды.* (Я. Хамматов.)

2. Тарыҡма, бөтә кешеғә лә булыр, етер. *Рәйсә көлә. — Бында жом һиңә лә, миңә лә етерлек, Зәйнәп апай.* ***Күңелеңде киң тот.*** («Сов. Башҡ.»)

**күңел ireү**. 1. (йомшарыу, нескәреү). Нескә тойғоларға биреләү. *Бесәй ҡойроғон болғай-болғай малайҙың аяғына һырышты. Нуруллаһың* ***күңеле ирене***. (Ш. Янбаев.) *Тиң-тош килмәй* ***күңел иремәй***. (Мәҡәл.) *Маҡтауҙы яратҡан Аралбайҙың* ***күңеле*** *май кеүек* ***ireп китте***. (Ш. Шәһәр.) *Егеттең йырҙары шул тиклем моңло булған, иң ҡаты бәғерле кешенең* ***күңеле*** *лә балауыҙ һымаҡ* ***ireгән***. (Ә. Вахитов.)

2. *кемгә*. Кемдеңдер һүҙенә, ҡылығына риза булып, уға ҡарата нескә тойғо уяныу. *Әсәйгә **күңел иреү**.*

**күңел килеү**. Кәйеф яҡшыға йүнәлгән булыу. ***Күңелем килһә**, апаруҡ һүҙ оҫтаһымын икән үҙем*! (Д. Юлтый.)

**күңел кителеү**. Ниҙәндер риза булмай күңелһеҙләнеү, хәтер ҡалыу. *Әллә нисек **күңел кителеп** ҡалды, ә күҙҙәрҙә һаман ер ягы*. (Ғ. Сәләм.) *Ләкин бөтәһе беҙгә сит ине, һаман да беҙҙең **күңел кителде***. (Ғ. Ғүмәр.)

**күңел китеү**. Күңелһеҙләнеү, кәйеф ҡырылыу. *Азамат өндәшмәне.Ниндәй кеше был Сидор? Кешенең **күңеле китер**, тип тә уйлай белмәйме икән ни*? (Ә. Бикчәнтәев.)

**күңел көҙгөһө**. Хәтер, иҫ. *Бала саҡ йылдарының иҫтәлектәре **күңел көҙгөһөндә** уйылып ҡалған*. («Башҡ. пионеры».)

**күңел күҙе**. Эске рухты, булмышты аңлау, тойоу һәләте. *Баязит Бикбай — башҡорт халҡының рухи донъяһын, тормошто **күңел күҙенән** үткәреү аша Ватанының һәм тыуған халҡының бөйөклогөн ... юғары сәнғәт дәрәжәһенә күтәргән шағирҙарыбыҙҙың береһе*. (Ғ. Хөсәйенов.) *Улар, һинең кеүек, күҙһеҙ ҙә түгел үҙҙәре. Ә, асылда, улар тома һуҡыр, күрмәгәс ни **күңел күҙҙәре***. (Ш. Бикҡолов.) *Айлы төнгә моңло юлдаш булып, тағы торам Иҙел ярында. **Күңел күҙем** күреп етмәгәндең тойоп белгем килә барын да*. (С. Ғәбиҙуллин.)

**күңел күтәрелеү**. Дәрт уяныу, рух артыу. *Уйынсыларҙың бәхетенә ҡаршы, көн бик һәйбәт, шар аяҙ. Йәштәрҙең **күңелдәре күтәрелде***. (Ж. Кейекбаев.) *Рәйсәнең йөҙө асылып, **күңеле күтәрелеп** китте*. (Һ. Дәүләтшина.) [*Хат ташыусы*:] *Хат күп килгән һайын, минең **күңелем күтәрелә***. (М. Кәрим.)

**күңел ҡайтыу**. 1. Теләк бөтөү; төңөлөү, түйыу. *Сидзуконың бейеусе булып китеүенә бер ай ваҡыт үтә. Ошо ваҡыт эсендә ул көтөлмәгән хәлдәрҙе байтаҡ осрата һәм күп нәмәнән **күңеле ҡайта***. («Сов. Башҡ.») *Күк донъяһы тураһында яҙыуҙан **күңеле ҡайтты**...* (Ә. Вахитов.)

2. Һыуыныу, хис-тойғо ботөү. *Был ҡыҙҙан **күңелем ҡайтты***.

**күңел ҡатыу**. Мәрхәмәтте, нескәлекте юғалтыу. ***Күңеле ҡатҡан** ахыры, иламай ҙа*.

**күңел ҡошо**. Кешегә дәрт бирғән һөйөү хисе, татлы тойғо. ***Күңел ҡошом** һин минең*.

**күңел ҡояшы**. Рух биреүсе йән һөйгән кеше.

**күңел ҡылын сиртеү (тибрәтеү)**. Нескә тойғоларҙы ҡуҙғатыу. *Талдан талға ҡунып һандуғас **күңел ҡылын сиртә** яҙ булғас*. (Я. Ҡолмой.) *Әлбиттә, егет уның **күңел ҡылдарын** өҙҙөрөп **сиртергә** өлгөрһә, ҡыҙҙар тырышыуы ғына әллә ҡайҙа китмәҫ тә ине*. (Ғ. Байбурин.)

**күңел өшөү**. Ытырғаныу, өшәнеп ҡалыу. *Таратһаңсы күктән болоттарҙы, Тик бер һүҙгә **күңелем өшөнө**. Ниңә, ваҡыт, болоттарға төрөнөп, Туҡтап ҡалдың былай тешегеп*. (Р. Бикбаев.)

**күңел тартыу (ятыу, ултырыу).** Ыңғай хистәр уятып, үҙенә йәлеп итеп тороу, йән теләү. *Шунда бесәй әйткән төҫлө булды: «Нисек мине **күңелең тарта** һуң?»* (Ш. Бабич.) ***Күңелем тартҡас,** тағы ҡайттым Ямашлы буйҙарына.* (М. Кәримов.) **Күңел тартмау (ултырмау):** *Беҙҙең яман ауылға **күңеле ултырмайҙыр** инде йәш кешенең.* (Ғ. Дәүләтшин.)

**күңел төшөү.** 1. *кемгә.* Хис-тойғо уяныу, ғашиҡ булыу. *Күҙем төшһә, **күңелем төшмәй** һинән башҡа бутәнгә.* (Халыҡ йырынан.) *Егеттең егетлеге шунда, **күңеле төшкәнен** үҙенә ҡаратмай ҡалмай.* (М. Тажи.)

2. Күңелһеҙләнеү, кәйеф булмау. *Саған сәскәһенән дә, йүкәнән дә бал алып булманы, ҡырауҙар бөткәйне, ямғырҙар башланды. Шуға **күңел төшөп** йөрөй әле.* («Сов. Башҡ.») *Ни эшләйһең, был йырҙар минең **төшкән күңелемә** аҙыҡ булмайҙар.* (С. Агиш.)

3. *нимәгә.* Дәрт уяныу, эшләргә теләү. *Эшкә **күңел төшөү**.*

**күңел тулыу.** Нескә хистәргә бирелеп, илағы килеү. *Эреҫ еңгә был һүҙҙәрҙе әйткәндә, **күңеле тулып,** илап ебәрҙе.* (Ғ. Дәүләтшин.) *Ғүмәр ауылын үтеп, биләнгә менгәс, Ташбатҡан ауылын күреү менән Сөнәғәттең **күңеле тулды**.* (Ж. Кейекбаев.) *Ғәйшә бойоғоп Ҡадир күкрәгенә башын ҡуйҙы, үҙе һулыға, Ҡадирҙың да **күңеле тулды** быға.* (Ғ. Амантай.)

**күңел уйнау (бөлғаныу).** Ҡоҫҡо килеү.

**күңел үҫеү.** Рух күтәрелеү. *Күрән яҡшыҡ күрәйеп алды, тирегә ҡалған тәненә яңы төк сығарҙы. Быға **күңеле үҫә**.* (Б. Бикбай.) *Имтихандарҙы ла елле генә тапшырҙым, **күңел үҫеп** китте, малай.* («Сов. Башҡ.») ***Үҫһен** өсөн кеше **күңеле,** яҙ ҡояшы кеүек боҙҙо иретерлек йылы һүҙҙәр кәрәк түгелме.* (Р. Янбулатова.)

**күңел һалыу** *нимәгә.* Дәрт итеп, ихласлап тотоноу. *Аллаяр, иҫ керә-керә, ҡарун атаһының хөсөтләшеүен арттыра. Хужалыҡҡа **күңел һалмай**.* (Ф. Иҫәнғолов.) [*Мөнибәнең*] *Үҙ эшен **күңел һалып,** ихлас башҡарыуы тел төбөнән үк һиҙелеп тора.* («Сов. Башҡ.») **Күңел һалып (эшләү):** *Аяуһыҙ бәрелде Һибәтуллаға сырхау, **күңел һалып эшләгән** эшенән, яландарынан айырҙы.* (Ш. Янбаев.) *Агитаторҙарҙан Гөлсирә Зәйнәғәбдинова, Нәғимә Әминева, Хәбирә Хәлитова **күңел һалып эшләйҙәр**.* («Сов. Башҡ.»)

**күңел һүрелеү (һыуыныу).** Һалҡын ҡарай башлау, биҙеү. *...Әҙләй һәр саҡ еңелде, һөйгәнемдең шул ғәҙәте **һүрелдерҙе күңелде**.* (Ҡ. Даян.)

**күңел һыҙлау (әрнеү).** Тәрән хәсрәт, ҡайғы кисереү. ***Күңел һыҙлай,** һыҙлай, һыҙлауыҡ бар, Ҡара көстәр мине тотҡанға... Күңел әрней, әрней, боҙло һалҡын, Буранлы ел мине һуҡҡанға.* (Ш. Бабич.)

**күңел һыҙылыу.** Эске кисереш менән яныу. *Әсе хәсрәт көйөн көйләп, **һыҙыла күңелем** көндөҙ вә төн.* (Д. Юлтый.)

**күңел һыныу**. Рух төшөү, бойоғоу. *Тарлыҡтарҙан күптән-күптән* ***күңелем һынған.*** (Ғ. Туҡай.) ***Күңеле һынмаһын*** *тип, бик тырыштым.* (Һөйл.)

**күңел эреү**. Нескә хистәргә бирелеү, йомшарыу. *Һәйбәт шул Хәтиптең ағаһы! Шундай яҡшы кешегә нисек* ***күңелең эремәһен.*** (Ф. Иҫәнғолов.)

**күңел яныу**. Әрнеү менән ярһыу, аҙарыныу. *Нишләйем һуң — зәҡҡумлы хәсрәттәр менән* ***күңелем яна...*** (Ш. Бабич.)

**күңел яраһы**. Йөрәккә үтерлек ауыр яра, рәнйеү. *Тән яраһы китһә лә,* ***күңел яраһы*** *китмәй.* (Мәҡәл.)

**күңел ятыу** *кемгә, нимәгә.* Ыңғай хистәр тыуыу, оҡшатыу.

**күпер башында күсәр башы эләккән**. Бик алыҫ ҡәрҙәш.

**күпме кәрәк**. Кемдең йәки нимәнең көсөн, мөмкинлеген, ихтыяжын кәметеп күрһәткәндә әйтелә. *Балаға* ***күпме кәрәк*** *инде.* — *Кешегә* ***күпме кәрәк*** *инде, һыйың, йылы һүҙең булһа, шул баштан ашҡан.* (Б. Бикбай.)

**күпте күргән**. Тормошта төрлө хәлдәрҙе башынан үткәргән, кисергән. *Бына шулай* ***күпте күргән*** *баш был, Сәрбиямал.* (З. Бишева.) ***Күпте күргән*** *күркәм грузин ере Килеп керҙе кеүек ишектән, Ҡыҙҙар тауышында тауҙар телен, Руставели өнөн ишетәм.* (Ғ. Рамазанов.) — *Мин тормошта бик* ***күпте күрҙем,*** *күп нәмәләрҙе башымдан кисерҙем.* («Сов. Башҡ.»)

**күптән күп**. Бик күп. *Батыр бер ап-аҡ тирмә күрҙе, малы* ***күптән күп,*** *ти.* (М. Ҡулаев.)

**күп һорамай**. Ниҙер эшләгәндә, ҡылғанда оҙаҡ уйлап тормай, ҡыла ла ташлай. *Ҡунаҡҡа саҡырам тиһә,* ***күп һорамай,*** *тота ла саҡыра.*

**күреп (ҡарап) туймаҫлыҡ (туйғыһыҙ)**. Күҙ алғыһыҙ, бик матур, һоҡланғыс. *Тирә-яҡта урман шаулай, Гөл-сәскәгә тулған ер.* ***Күреп туйғыһыҙ*** *баҡсалай — Ниндәй гүзәл Тыуған ил!* (Я. Ҡолмой.) *Йырлай, бейей, оса алсаҡ ҡыҙҙар,* ***ҡарап туймаҫлыҡ*** *һис уларға.* (Р. Ғарипов.)

**күрергә ҡалған баш**. Киләсәктә ауырлыҡ күрергә дусар булғанды белдереп, көнгәндә әйтелә. [*Мөлөк ҡарт*:] *Теләһәң нишлә, миңә тиһә ошо урында тотоп һуҡтыр, барыбер* ***күрергә ҡалған баш.*** (Т. Хәйбуллин.)

**күргәне-күрмәгәне шул булһын**. Ниҙелер дау менән алған кешегә асыу белдереп әйтелә (*йәлсемәһен, изгелеген күрмәһен тигән теләк менән.*)

**күрер күҙгә**. Ҡарап торғанда, былай ҡарауға (*ҡарап ҡына баһалаған әйбер хаҡында.*) ***Күрер күҙгә*** *һәйбәт күренә.*

**күрмеште күреү**. Бик нығ этләнеү, яфа сигеү.

**күрмәгәнен күрһәтеү** *кемгә.* Бик ҡаты тирғәү йәки туҡмау. [*Сәрүәр*:] *Ни эшләп мин уға яуап яҙып торайым? Атайымдарға ишетелһә,* ***күрмәгәнеңде күрһәтер.*** (Х. Ибраһимов.) *Мәхмүт ҡыҙҙы ла китте: — Дегәнәк икәнһең һин! Ят тиҙерәк. Федор ҡайтһа,* ***күрһәтер күрмәгәнеңде.*** (Ә. Хәкимов.)

*син.*: һырт ҡайышын алыу, кәрәген биреү.

**күр ҙә тор**. Мотлаҡ булыр, әйткән булыр. — ***Күр ҙә тор,*** *күҙ йәшен ағыҙып килеп сығасаҡ* [*Сәғирә*], — *тип күрәҙәлек ҡылды Зифа.* (Д. Буләков.) *Каруанһарай булғас,* ***күр ҙә тор,*** *Мин дә унда уҡып ятырмын.* (Р. Бикбаев.) *Тырыш, уйыңдан бер аҙым да сигенмә,* ***күр ҙә тор,*** *ҡосағыңа ташланыр һөйгәнең.* («Сов. Башҡ.»)

**күрмәҫтәй булыу** *һөйл.* Комһоҙланып нимәгәлер ташланыу, йәбешеп ятыу (*күберәк ашау-эсеүгә ҡарата*).

**күрә алмау**. Ныҡ яратмау, нәфрәт менән ҡарау. [*Әмирхановтың*] *Иөҙөндә тәрән асыу, кешегә белдерергә теләмәүенә ҡарамаҫтан сырайына бәреп сыҡһа, бер* ***күрә алмаумы,*** *борсолоумы, ғөмүмән, бер ажарлыҡ бар ине.* (С. Агиш.) [*Зарифа әбей:*] *Артыҡ йәш, сапсан, байҙарҙы үлеп* ***күрә алмаусы*** *бер кеше ине минең ирем.* (Б. Бикбай.)

**күрә ҡарау**. Күҙенә яҡын килтереп ҡараған кеше; күрәш. *Бабай туп-тура барҙы ла һандыҡтың ҡапҡасын күтәрҙе. — Буш теләк менән,* ***күрә ҡарау*** *менән текләмә китаптың биттәренә, бер нәмә лә күрмәҫһең йә...* (Ә. Вахитов.)

**күсеп барғанда күсәр баштары тейгән**. Ҡан ҡәрҙәшлектәре юҡ; бик алыҫ ҡына туған.

**күсәр баштары бәрелеү**. Оло һүҙгә килеү, ыҙғышыу.

**күҫәк күтәреү**. Ныҡ гәйепләп сығыу, ҡаты әрләү. *Трест управляющийы Бобров иптәш тәнҡиткә* ***күҫәк күтәреп,*** *ҡағыҙ бысратҡансы, үҙ хужалығында тәртип булдырыу хәсрәтлеген күрһә, отҡан ғына булыр ине лә бит.* («Сов. Башҡ.») *Татар зыялыйҙары араһында «әҙәбиәт кисәләре» яһау мәсьәләһе ҡуҙғала. Был хәрәкәткә татар байҙары, муллалары* ***күҫәк күтәреп*** *ҡаршы сыға.* (Д. Юлтый.)

**күтән һурпаһы эсеү** *һөйл.* Ныҡ яфа сигеү, этлек күреү.

**күтәрелеп бәрелеү**. Ныҡ ҡыҙып китеү, туҙыныу. *Абдразаҡовтың был һүҙҙәргә артыҡ иҫе китмәһә лә, Ирназаров тигәне* ***күтәрелеп бәрелде.*** (И. Насыри.) [*Бабай әбейгә:*] *Кеше көн оҙон эшләп ҡайтҡан, йүнләп ҡаршы ала ла белмәйһең, — тип* ***күтәрелеп бәрелде.*** (В. Исхаҡов.) — *Сәлим туған, улай* ***күтәрелеп бәрелмәйек*** *әле, ярылып китербеҙ.* («Сов. Башҡ.»)

**күтәрелеп тә ҡарамау** *кемгә, нимәгә.* Бөтөнләй иғтибар күрһәтмәү, әһәмиәт бирмәү.

**күтәренке күңел**. Яҡшы кәйеф. [*Һайыҫҡан*] ***Күтәренке күңелле*** *мулланың кәйефен боҙайым тигән һымаҡ, юлдың әле уң яғына, әле һул яғына сығып шыҡырыҡланы.* (Я. Хамматов.) — *Татыу булғас,* ***күңел дә күтәренке.*** *Эш тә ырай, — ти Хәмдиә апай.* («Сов. Башҡ.»)

**күтәреп алыу** *кемде, нимәне.* Хуп күреп, яҡлау. *Тимер, Фатима ҡуҙғатҡан һәр бер яңылыҡты* ***күтәреп алып,*** *тиҙерәк колхозға таратырға тырышты.* (Б. Бикбай.)

**күтәреп йөрөтөү** *кемде.* Бик ныҡ ҡәҙерләү.

**күтәрә алмау** *нимәне*. 1. Кисерергә, баштан үткәрергә көс таппмау. *Әйе, әҙәм балаһы күтәрерлек ҡайғы инеме ни был?!* ***Күтәрә алманы*** *бисәкәй,* ***күтәрә алманы.*** (З. Биишева.)

2. Дан-шөһрәткә, муллыҡҡа сыҙамай шашып китеү. [*Миңнеғәли*:] *Байгилдин ...күкрәк ҡаға, власть харап итә уны,* ***күтәрә алмай.*** (Х. Ғиләжев.)

**күшеккән тауыҡ <кеүек>.** Меҫкен булып ебеп торған кешегә ҡарата әйтелә. *Былай* ***күшеккән тауыҡ кеүек*** *ебеп йөрөһәң, бер ваҡытта эш сыҡмаҫ.* (С. Агиш.)

**кәбәк баш(лы)** *һөйл.* Фекерләү һәләте бик түбән булған кешегә кәмһетеп әйтелә. *Һалам башлы өй ҙә барҙыр әле ҡайбер ауылда, әммә ҡыйын,* ***кәбәк башлы*** *бәндә булһа янында.* (Ғ. Дәүләтов.) *Фән эшмәкәрҙәрен, юғары уҡыу йорто уҡытыусыларын ул тиклем* ***кәбәк баш*** *итеп күҙ алдына килтереүсе авторҙар үҙҙәре ...уңайһыҙ хәлдә ҡалды.* («Сов. Башҡ.»)

**кәбеҫтә һурпаһын аҙ эскән.** Донъяла еңел йәшәп, артыҡ этлек күрмәгән.

*син.*: нужа ҡаласын аҙ ашаған.

*ант.*: күпте күргән, донъяның әсеһен-сөсөһөн татыған.

**кәбән баш.** Иләмһеҙ ҙур баш.

**кәбәтәһенә ҡатыу.** Үҫмәй, бәләкәй көйгә ҡатып ҡалыу.

**кәзә билеты** *иҫк.* Башҡа урынға эшкә, уҡырға инергә хоҡуҡты юҡ иткән таныҡлыҡ. *Был кешегә* ***кәзә билеты*** *бирергә кәрәк.* (М. Ғафури.) [*Саҡайҙы*] ***Кәзә билеты*** *биреп, эшенән бушаттылар.* (Б. Бикбай.) *Ул арала булмай,* ***кәзә билетлы*** *Рамазан ҡайтып керҙе эштән.* (З. Йәнбирҙина.)

**кәзә майын сығарыу.** 1. Беләккә киҫә һуғып ҡабартыу.

2. Хәлде алыу. [*Иәғләмун*:] *Ну кисә Ғәззәмиевтың* ***кәзә майын сығарҙыҡ.*** (А. Ғирфанов.) *Бигерәк тә һул яҡтағы ярға менеү малайҙарҙың* ***кәзә майҙарын сығара.*** (Я. Вәлиев.)

**кәзәне кәбеҫтә ҡарауылларға ҡуйыу*.** Урлай, эш боҙа торған кешегә ышанып, ниҙелер һаҡларға ҡушыу.

[*Рус телендәге «пустить козла стеречь капусту» берәмегенән.]

**кәзәһе артынан ҡалмай (эргәһендә йөрөй, төкөй)** *һөйл.* Үсексән. — *Кеше булғас, һөйләшә лә бел.* ***Кәзәң төкөгән*** *кеүек киләһең.* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: тәртәһе ерек.

**кәйеф ҡырылыу.** Күңелһеҙләнеү. *Әхәттең ҡыҙыл түйһыҙ ғына өйләнергә риза булыуын белгәс, Иштуғандың бөтөнләй* ***кәйефе ҡырылды.*** (З. Биишева.) *Атаһының* ***кәйефе*** *генә* ***ҡырыла*** *барыуын һиҙеп, Хәкимйән хәҙер ундай һорауҙарҙы бирмәй башланы.* (Д. Исламов.)

**кәйеф-сафа ҡороу.** Ни менәндер шәп итеп күңел асыу. *Сәмәрҡәндтәге «Интурист» ҡунаҡханаһына төшкән кешеләр төрлөсә ял итә: берәүҙәр кафела йәшел сәй эсә, икенселәре яңы танышы менән һөйләшеп* ***кәйеф-сафа ҡора.*** («Ағиҙел».)

**кәкрегә бөкрө**. Эш бер ҙә уңайға бармай, гел кире килеп тик торғанда әйтелә.

**кәкре ҡайынға терәтеү (терәү, һөйәү)**. Бик оҫта итеп алдау. [*Мозой*:] *Әпкәләй ауыҙына ҡарап торһағыҙ, ул һеҙҙе* ***кәкре ҡайынға терәтер*** *әле*!.. (Д. Юлтый.) *Шәрәфи бик мут кеше, шуға ла унан шикләнде. Арыш урғанда Садрыйҙың үҙен саҡ* ***кәкре ҡайынға терәмәне*** *бит*. (Т. Килмөхәмәтов.) *Ышандым мин, юлдарымда булған гел ауыҙ асып.* ***Кәкре ҡайынға һөйәгәс***, *киткәндәр менән ҡасып*. (Т. Йосопов.)

*син*.: төп башына ултыртыу, тишек кәмәгә ултыртыу, төпһеҙ кәмәгә ултыртыу.

**кәкре ҡуллы (ҡулы кәкре)**. Урлашыуға әүәҫ; ҡулсыр.

**кәләп һалып** [йөрөү]. Эш тапмай, ҡаңғырып (йөрөү). *Ильяс урынынан тороп китте лә, ни эшләргә белмәй, бүлмәнән бүлмәгә* ***кәләп һалып*** *йөрөй башланы*. (Р. Байымов.)

**кәмәгә һыу инеү**. Эш-хәл насарайып китеү. *Хәкимуллин да йоҡлап ятмай бит: ул да үҙ* ***кәмәһенә һыу индермәҫкә*** *тырыша*. (Й. Солтанов.)

**кәмә ҡомға терәлеү (ҡырсынға тейеү)**. Эш бармай башлау, тотҡарлыҡҡа осрау. *Аҡтыҡ сиккә етеп,* ***кәмә ҡомға терәлгәс***, *1920 йылдың ғинуар башында Юденич аҡ армияһының тарҡалыуы хаҡында рәсми белдереү яһаны*. (Ф. Иҫәнғолов.) *Әйтер хәл юҡ, беҙҙең* ***кәмә ҡомға терәлгәс***, *Михләтбаев үҙе лә, зоотехнигы ла, ветераны ла, урынбаҫар-фәләндәре лә әленән-әле килеп кенә торалар*. (Д. Исламов.) *Хәҙер материал алыуға ла, машиналар ремонтлауға ла аҡса кәрәк.* ***Кәмә тамам ҡомға килеп терәлгән***. («Сов. Башҡ.») *Сәбәләнмә, эй ҡырсынма,* ***кәмә тейгән ҡырсынға***. (Т. Йосопов.)

**кәңәшегеҙ берекһен**. Һөйләшеп, кәңәш ҡорон ултырған кешеләргә әйтелгән теләк. *Сәлим ағай килә-килә үк сәләм бирҙе, иҫәнлек-һаулыҡ һорашты. —* ***Кәңәшегеҙ берекһен***, *ерегеҙ емешле, эшегеҙ өмөтлө булһын! — тине ул*... (Ғ. Ғүмәр.)

**кәпәс кейгән** [ир, кеше]. Берәүҙән дә кәм түгел, үҙ һүҙе, фекере булған. *Мин дә* ***кәпәс кейгән*** *кеше әле, һиңә һалышып торорға*. (Һойл.)

**кәпәс менән кәңәшләшеү** *шаяр*. Уйлап, дөрөҫ фекергә килеү. *Бар, ҡайтып* ***кәпәсең менән кәңәшләшеп*** *кил*. (Һойл.)

**кәпәс һалыу**. Түбәнселек белдереү, ниҙер үтенеү.

**кәпәс(те) күтәреп һуғыу**. Әйткән һүҙемдә торам, тип ант итеү. ***Кәпәсте күтәреп һуҡтым***, *өйгә кире ҡайтмайым*. (Һойл.)

**кәртәгә инеү**. Ипкә килеү, тәртиплегә әйләнеү. *Өлкән улының ...* ***тәртәгә инеренән*** *тамам өмөт өҙгән ҡарун Әптелғәлим уны ҡарғап өйөнән ҡыуып сығарҙы*. (Ф. Иҫәнғолов.)

**кәрәге (хәжәте) бер тин (бар ине)**. Һис кенә лә кәрәкмәй (*баһаһы юҡ кеше, нәмә һ. б. тураһында*). Кәрәкһеҙ, әһәмиәтһеҙ. [*Иәнтимер*:] ***Кәрәге бар ине***, *комсомол башым менән һинең пальто өсөн һатыулашып йөрөргә*. (С. Агиш.)

**кәрәген биреү**. 1. *кемдең*. Ҡаты язаға дусар итеү (*туҡмау, яфалау йәки бик ныҡ тиргәү һ. б.* ). ***Бирҙе донъя кәрәкте****, иламаҫҡа өйрәтте ... Ҡайһығыҙҙың ҡулы йылы? — Бәйләйһе бар йөрәкте.* (Х. Туфан.) *Бер төркөм кешеләр геү-гү итеп ҡалды: — Алығыҙ, тотоғоҙ үҙҙәрен!* ***Бирәйек кәрәктәрен!*** («Сов. Башҡ.»)

*син.*: тетмәһен тетеү, уттан алып һыуға һалыу, эҫе табаға баҫтырыу, эҫе табала бейетеү.

2. *ниҙең*. Бер эш-ҡылыҡты саманан аштырып башҡарыу. *Ашауҙың кәрәген биреү. Йоҡоноң кәрәген биреү.* ▬ *Шатморат бейеүҙән туҡтап улар эргәһенә килде. —* ***Кәрәген бирҙең әй!*** *— тип дуҫының яурынына һуҡты Ильяс.* (Д. Исламов.)

**кәрәк ҡырҡып (өҙөп) ал.** Һүҙҙе тыңламаған, өйрәткәнде ала белмәгән кеше хаҡында асыу менән әйтелә; киҫәүһеҙ.

**кәрәкле кишер япрағы**. Берәй эш-хәлдә бәләкәй генә урын тотоп та ҙур булып күренергә тырышҡан кеше хаҡында мыҫҡыллап әйтелә. *Колхозсылар [Хәсәнде],* ***кәрәкле кишер япрағы****, һин генә кәрәк инең, ҡыйратырһың инде эшеңде, тигән кеүек һүҙҙәр менән ҡаршы алды.* (С. Ҡудаш.)

**кәрәк сәсрәп китһен.** Яҡларға, хәленә инергә теләмәгәнде белдерә.

**кәрәкте алыу.** Туҡмалыу йәки бик ҡаты тиргәлеү. ***Кәрәгегеҙҙе алырһығыҙ*** *әле, кеше ҡәҙерен белмәгән эттәр!* (Һ. Дәүләтшина.) *Минең иптәштәр яуҙай ҡуҙғалды, һәм дошман шунда* ***кәрәген алды****.* (Ғ. Ғүмәр.)

# К

**ҡабағына ҡарыш ҡар яуғандай**. Асыуҙан төҫө боҙолған, йөҙө йәмерәйгән.

**ҡабағын һалындырыу**. Һытыҡ йөҙ менән ҡарау, асыуҙы төҫкә сығарыу.

**ҡабаҡ аҫтынан ҡарау**. Күҙҙе әйләндерә биреп, асыу менән һоҙөп ҡарап тороу. *Тимергәле ҡарт сынаяғына сәйен ҡоя-ҡоя улына* ***ҡабаҡ аҫтынан*** *ғына* ***күҙ һалды****, өндәшмәне.* (Ғ. Дәүләтшин.)

**ҡабыҡ ҡағыу** *һөйл*. Юҡҡа маҡтаныу, кәпәренеү. *Улар нәҫеле* ***ҡабыҡ ҡағырға*** *оҫта инде.* (Һөйл.)

**ҡабыҡ ҡанат.** Маҡтансыҡ.

**ҡабыҡ һуғып бесәй өркөтөү**. Юҡтан бәлә һалып, һорәнләп йөрөү.

**ҡабырғаһы менән ҡуйыу*** *нимәне*. Мәсьәләне, эште ҡәтғи рәүештә алға баҫтырыу.

[*Рус телендәге «ставить ребром» фразеологизмынан.]

**ҡабырғаһын һанау** *кемдең*. Бик ҡаты туҡмау, дөмбәҫләү. — *Әйҙә, Алексей, **ҡабырға һөйәктәрен һанайыҡ** шуларҙың, бер нәмә лә булмаясаҡ, барыбер китәбеҙ һуғышҡа*... — [*тине теге өс кешенең береһе*]. (Ж. Кейекбаев.) *Башҡа ваҡыт булһа, бындай һүҙҙәре өсөн мин Талханың **ҡабырғаһын һанаған** булыр инем, хәҙер иһә түҙергә тура килә.* (Ә. Чаныш.) *Ҡоторонған бандиттар тотҡондарҙы аҙым һайын ҡайыш ҡамсы менән «һыйлайҙар», имән таяҡтар менән **ҡабырғаларын һанайҙар**...* («Сов. Баш҄к.»)

*син.*: һырт ҡайышын алыу.

**ҡағиҙә рәүешендә (булараҡ)***. Мотлаҡ була, ҡабатлана торған эш-хәл хаҡында.

[*Рус телендәге «как правило» берәмегенән.]

**ҡағыҙ бысратыу**. Бушҡа документ яҙыу, файҙаһыҙ яҙыныу менән булыу.

**ҡағыҙға төшөү**. Берәйһенең ҡәләм осона эләгеү, рәсми хөкөм ҡулына тикшерелеүгә ҡалыу.

**ҡаҙалып (сәнселеп) киткере (китһен)**. Ҡарғағанда әйтелә. [*Фатима*:] *Килмәгеҙ, **ҡаҙалып китегеҙ**! Туй һеҙҙән башҡа ла үтер*! (Б. Бикбай.)

**ҡаҙан аҫыу**. Ҡунаҡҡа һый әҙерләү. *Астан **ҡаҙан аҫтырма**, ялангастан кейем тектермә.* (Мәҡәл.)

**ҡаҙанда ҡайнау**. Айырым ижтимағи төркөм кешеләр араһында булып, шуларҙың ҡараштарын, йәшәү рәүешен үҙләштереү. [*Файза әбей*] *председателгә ҡарап*: — *Йә, сәләмегеҙ ҡайҙа ҡалған һеҙҙең? Үҙең ҙур ғына **ҡаҙанда ҡайнаған** кешеһең, ологайып бараһың*. (Ж. Кейекбаев.)

**ҡаҙан ҡорһаҡ**. Эсе ҙур кешегә ҡарата кәмһетеп әйтелә. [*Закир*:] *Нур, хәҙер **ҡаҙан ҡорһаҡ** байҙар түҙеп кенә торһон.* (З. Биишева.)

*син.*: ҡап ҡорһаҡ.

**ҡаҙан төбө көйөү**. Берәйһе менән ара боҙолоу, яманлашыу. *Үҙем эшләгән институттың местком председателе ул. Сәсәп йығылырҙай булдым. Бер саҡ бит уның менән минең **ҡаҙан төбөм** шөйлә **көйөп** ҡуйғайны.* (Й. Солтанов.)

**ҡаҙаным ташып бармай**. Эшем үтә ашығыс түгел, ваҡыт бар. *Ярар, ул хәтле **ҡаҙаным ташып бармай**, бында бер аҙ ултыра алам.* (А. Таһиров.)

**ҡаҙ биреп өйрәк алыу**. Күп урынына аҙға ҡалыу, берәй нәмә алышҡанда отолоу.

**ҡаҙ өлтөгө**. Балаға күҙ теймәһен өсөн, кейеменә таға торған мамыҡ осоғо.

**ҡазаға ҡалыу (осрау)**. Ауыр хәлгә төшөү.

**ҡайғы баҫыу** *кемде*. Ҙур бәлә-каза килеү. *Кешеләрҙе **ҡайғы баҫты**.*

**ҡайғыға ҡалыу (төшөү)**. Тәрән хәсрәт кисереү, ҡайғырыу.

**ҡайғыны баҫыу (таратыу).** Кисерелгән хәсрәтте еңеләйтеү. *Йыр күңелде аса ул, Йыр күңелде лә аса ул,* ***ҡайғыны ла баҫа ул.*** (Халыҡ йырынан.)

**...ҡайғыһы китте.** Берәй мөһим хәл тыуып, элеккеһен онотоуҙы белдереү өсөн әйтелә. *Ашау* ***ҡайғыһы китте.*** *Йоҡлау* ***ҡайғыһы китте.***

**ҡайҙа барып бәрелергә (һуғылырға) белмәү.** Ауыр хәлдән сыға алмай ҡаңғырып йөрөү, сараһыҙҙан аптырау. *Староста* ***ҡайҙа барып һуғылырға белмәне,*** *ат менән урам буйына сыҡты, осраған бер кешене ауыл осона ҡыуаланы.* (Ж. Кейекбаев.) *Карам бына шулай уйланып,* ***ҡайҙа барып бәрелергә белмәй*** *йөрөгәндә, ауылға ғәләмәт күп ғәскәр килеп тулды.* (Н. Мусин.)

**ҡайҙа баҫҡанды тоймау (белмәү).** 1. Ҙур шатлыҡ кисереү. *Баныу инәйҙең бөгөн күрһәгеҙ ине йөҙөн — шатлығы эскә һыймай,* ***ҡайҙа баҫҡанын тоймай.*** (К. Хәбиб.)

2. Бик нык ҡыҙҙырып, әрләп оятлы итеү. [*Старшина*:] *Бейетермен, шундай итеп бейетермен мин уларҙы ...* ***ҡайҙа баҫҡандарын да белмәҫтәр.*** (Б. Бикбай.)

**ҡайҙа баҫҡанын белеү** *кемдең.* Ни эшләгәнен, уйлағанын һиҙеп, күреп тороу. *Ул* [*Вася*] *үҙе урмандарҙа, тау араларында ҡасып, яңғыҙ йөрөһә лә, крәҫтиәндәр уның* ***ҡайҙа баҫҡанын белеп торалар.*** (Д. Юлтый.)

**ҡайҙа етте — шунда.** Теләһә ҡайһы ерҙә, төрлө урында. [*Зәйнулла*] ***ҡайҙа етте шунда,*** *кем тура килә — шуның менән эскән.* («Сов. Башҡ.») [*Әмәтерәй*] ... *йәйҙәрен* ***ҡайҙа етте шунда*** *— йәшел үләндә тәгәрәп ятып йоҡлай.* (М. Иҙелбаев.)

**ҡайҙа китмәгән.** Ниҙелер йәлләмәй, ҡыҙғанып тормай тотонғанда әйтелә. ***Ҡайҙа китмәгән*** *1000 һум аҡса ...* ***Ҡайҙа китмәгән*** *өс көн ваҡыт, барып ҡайтайым әле.*

**ҡайҙа ҡуйырға белмәү.** Нишләргә, нишләтергә белмәү. [*Сәриә*] *Асыуын* ***ҡайҙа ҡуйырға белмәй*** *... төҫөн үҙгәртте.* (Я. Хамматов.)

**ҡайҙан килгән.** Артыҡ маһайған кешегә ҡарата мыҫҡыллап әйтелә. *Ай-һай,* ***ҡайҙан килгән*** *тиерһең.*

**ҡайҙа ул.** Ниндәйҙер эш-хәлде башҡарырға тулыһынса әҙер булыуҙы белдергәндә әйтелә. — *Ятыу* ***ҡайҙа ул***! *Хәҙер үк донъя күләмендә әһәмиәтле асыш тураһында ғилми очерк яҙырға ултырам.* (Х. Мохтар.) *Башта хәрби дружина төҙөү эшен хәл итергә кәрәк. Һеҙ шуға ризамы? — тип һораны Хисмәтулла. — Риза! Риза булмаған* ***ҡайҙа ул***! *Үҙебеҙ өсөн дә баһа.* (Я. Хамматов.)

**ҡайттым (ҡайтһа) — бар, киттем (китһә) — юҡ.** Өйҙә бик һирәк булам, мәшәҡәтем, ҡамасауым берәүгә лә теймәй. *Мин ни* ***ҡайттым — бар, киттем — юҡ.***

**ҡайтып ҡалыу.** Нимәгәлер килеп терәлеү, бәйләнеү. *Мәсьәлә иген йыйыуға* ***ҡайтып ҡала.***

**ҡайһы ереҙ ҡысый (ҡысыта).** Бик ныҡ ҡыҫымға алыу, туҡмау, дөмбәҫләү тураһында һөйләгәндә әйтелә. [*Тулыбай*:] *Ауылдан сығып бер аҙ канауҙан килә биргәйнем, канауҙы ике яҡлап ятҡан ҡыҙылдар, **ҡайһы ереҙ ҡысыта**, килеп пулеметтан, мылтыҡтан бирә башланылар.* (И. Ҡыпсаҡ.) [*Ҡорттар*] *Айыуҙарҙың еҫен тойоп, аяуһыҙ сағырға тотоналар. **Ҡайһы ереҙ** генә **ҡысый**.* (Әкиәттән.)

**кайырып алғыһыҙ.** Ныҡ уңған (иген, бесәнгә ҡарата). *Йәрәүҙе тамағында бесән **ҡайтарып алғыһыҙ** була торғайны.* (Ә. Вәли.)

**ҡайыш биреп йүкә алыу.** Нимәләлер отолоу.

**ҡайыш тәрилкә тотоу.** Ныҡ ярамһаҡланыу.

**ҡаҡҡан бағана <кеүек>** *һөйл.* Ни эшләргә белмәй бер урында торған кешегә ҡарата асыу менән әйтелә.

**ҡаҡ таҡтаға (боҙға) ултыртыу.** Бик ныҡ һемәйтеү, ниҙәндер буш ҡалдырыу.

**ҡаҡ һөйәк.** Бик ябыҡ, йоҡарған. *Мин артыҡ бирешмәнем, әсәйем **ҡаҡ һөйәккә** ҡалды.* (С. Агиш.)

**ҡалған эшкә ҡар яуа.** Эшләнмәй ҡалған эшкә ҡарата әйтелә. *Көн йонсоуы һис баҫылмай һуҙылды бер аҙнаға. **Ҡалған эшкә ҡар яуа**, ти, ҡар яуа бураҙнаға.* (Т. Йосопов.)

**ҡалғанын ҡазый ашаһын.** Аш-һыуға һаран хужаға ҡарата әйтәләр.

**ҡалтаһы ҡалын** *кемдең.* Бай, хәлле.

**ҡалын тиреле** *ҡар*: тиреһе ҡалын.

**ҡалын елкәле** *ҡар*: елкәһе ҡалын.

**ҡалыпҡа һалыу (кереү)** *нимәне.* Тәртипкә килтереү. *Председатель бөтә колхозды бер **ҡалыпҡа кереп**, бер үлсәү менән үлсәп көн итте.* (Н. Ғәлимов.)

**ҡалъя ҡабыу*.** Мал-молкәттән мул ғына өлөш эләгеү. *Бында ла уларға мул ғына **ҡалъя ҡапты**. Колхоз председателе ... уларға ... бер мең өс йөҙ илле ете һумды һоғондороп өлгөрҙө.* («Сов. Башҡ.»)

[* «ҡапҡан һайын ҡалъя булмай» мәҡәленән.]

**ҡамсы кеүек һалынып төшөү.** Һынып, аҫылынып тороу (*ҡулаяҡҡа ҡарата*.)

**ҡамылға ултырыу.** Һабаҡланыу (*иген тураһында*). *Бойҙай **ҡамылға ултыра** башлаған.*

**ҡамыр аяҡ.** Оҙаҡ атлай алмай ултырған балаға ҡарата әйтелә.

**ҡамыр батыр.** 1. Тулы кәүҙәле, ауыр ҡуҙғалыусан кешегә ҡарата әйтелә. [*Ғәтифә*:] *Тор, атаң башы! Мин һиңә ниндәй әсәй булайым. Иыу битеңде һалҡын һыу менән, **ҡамыр батыр**.* (Ә. Мирзаһитов.)

2. Үҙен батырға һанап, маҡтанған кешегә ҡарата мыҫҡыл менән әйтелә. [*Әжмәғол*:] — *Ха-ха-ха, **ҡамыр батырҙар**! Зирәк кеше буласаҡ минең кейәү.* (М. Кәрим.)

**ҡанат аҫтына алыу** *кемде*. Ҡарамаҡҡа алып, яҡлау, ҡурсалап тороу. *Ул, баҡтиһәң, үҙе иҫкене ҡыуыусы, хәллерәк кешеләрҙе **ҡанат аҫтына алыусы** аумаҡай бер кеше икән.* (Б. Бикбай.) — *Шул балаға бәйләнмәгеҙ инде,* — *ти Бибинур ҡарсыҡ. Еиәнен **ҡанат аҫтына ала**, һүҙ тейҙермәй.* (Р. Низамов.) *Абдрахман кантон булып эшләй башлаған дәүерҙә, атаһы кеүек үк, ырыуҙаштарын, туған-ырыуҙарын үҙ **ҡанат аҫтына алып**, һәр ваҡыт яҡлап килгән.* («Сов. Башҡ.»)

**ҡанат аҫтына һыйыныу** *кемдең*. Иәбер, яфанан ҡасып, берәй кешегә арҡаланыу. *Һигеҙ баланы үҙ **ҡанаты аҫтына һыйындырып**, ун кеше булып береге п, йәшәп киттеләр* [*Хәмдиә менән Шәриф*]. («Сов. Башҡ.»)

**ҡанат аҫтында** [йәшәү, булыу...] *кемдең*. Кемдеңдер ҡарауында, яҡлауында булыу. *Йылдар үтеү менән әсәйемдең **ҡанат аҫтында** йылынып ҡына үҫтергән өс ҡошсоғо өсөһө өс яҡҡа осоп китте.* («Сов. Башҡ.»)

**ҡанат йөнө еткән** *һөйл*. Ҡайҙалыр китергә әҙерләнеп бөткән.

**ҡанат йәйеү**. 1. Ҡайҙа булһа ла юл алыу. *Ауыҙлыҡлап ул* [*егет*] *атын, йыраҡ юлға **йәйҙе ҡанатын**.* (М. Кәрим.)

2. Таралып, ҡаплап алыу. *Ер өҫтөнә **ҡанат йәйгән** яҙғы кистәрҙе кем яратмаһын.* (Ш. Янбаев.)

3. Иркенәйеп тормош юлына, йәмәғәтселеккә сығыу, үҫеш алыу. *Рихтерҙың һәм Ростроповичтың бөтә донъяны таң ҡалдырған башҡарыу һәм артислыҡ таланттары ла бында* [*Мәскәү консерваторияһында*] ***ҡанат йәйҙе**.* («Башҡ. уҡ.»)

**ҡанат ҡуйыу** *кемгә*. Күңелен үҫтереп, эшкә, тормошҡа дәртләндереп ебәреү. *Киләсәккә булған яҡты хыялдар, йәшлек дәрте беҙҙең күңелдәргә **ҡанат ҡуя**.* (Ш. Янбаев.) *Күңелдәргә **ҡанат ҡуйған** да, илһамландырып йөрәкһеткән дә шул йыр-моң бит ул.* («Сов. Башҡ.») *Шул яҙ еҫе беҙгә **ҡанат ҡуйғандай** булды, беҙҙе алға әйҙәне, көрәшергә, еңергә, йәшәргә саҡырҙы.* (Т. Ғирфанов.)

**ҡанат төшөү (һыныу, ҡайырылыу)**. 1. Тормошта, эштә ярзамсы, таяныс булған кешенән (йәки нәмәнән) яҙыу. *Айырылғандың **ҡанаты ҡайырылған**.* (Мәҡәл.)

2. Тормош дәрте һүнеү, эшләр һәм йәшәр өсөн кәрәк булған көс бөтөү. *Аҙна буйынса берсә күккә ашып, берсә упҡынға төшөп йәшәгән Любомир Зух һуңғы ике көндә бөтөнләй **ҡанаты төшөп**, миңрәүләнеп йөрөнө.* (М. Кәрим.)

**ҡанат осороу**. Кейәү кем булырын алдан белер өсөн, ҡаҙ өмәһе ваҡытында ҡаҙ йөнө осороу (*йөн кем өйөнә барып төшһә, кейәү шул өйҙән була, йәнәһе*). *Шаулап ҡаҙ өмәләре үтте, ҡыҙҙар йырлай-йырлай **ҡанат осорҙо**, ҡанаттар, йөрәктәрҙе елкендереп, ауыл өҫтөнә күтәрелде, ҡайҙа барып төшөрө күҙәтелде.* («Сов. Башҡ.»)

**ҡанатын ҡырҡыу (һындырыу, киҫеү, ҡыйыу)** *кемдең*. Көсөн, дәртен ҡайтарыу; ауыр хәлгә ҡуйып, күңелен төшөрөү.

**ҡан боҙоу**. Бер-бер нәмәгә көйөнөп, ҡыҙышып йөрөү. *Ул* [*Ныязғол*] *нисә йылдар буйы ни тиклем көс һалып,* ***ҡан боҙоп****, ошо дәрәжәгә ирешә.* (Һ. Дәүләтшина.) *Дөрөҫлөктө табыу өсөн беҙҙең заманда ла күп* ***ҡан боҙорға*** *тура килә...* (Д. Исламов.)

**ҡанға тоҙ һалыу**. 1. Йәнде әрнетеү, асыуға тейеү. *Маянһылыу бик асыуланып, йүгереп сыҡты ла: «Нимә юҡты һамаҡлап,* ***ҡанға тоҙ һалып*** *йөрөйһөң, бысаҡ ҡаҙалғыры!» — тип, бысағын һелтәп ебәргәйне, бысаҡ ҡуйҙың осаһына тейеп, ярып ебәрҙе, ти.* (Эпостан.)

2. Үҙәккә үткәреп ғазаплау, йәберләү. *Тимерғәленең сабырлығы бөттө. Тоҙ тураһында көн дә йырланған бер йыр комсомолдар башлығының* ***ҡанына тоҙ һалды****.* (И. Ғиззәтуллин.)

**ҡанға (тәнгә) таралыу**. Ниҙеңдер тәьҫире тотош тәнгә китеү.

**ҡанға һеңеү**. Кешенең булмышына үтеп, тәбиғи бер сифатына әйләнеп китеү. *Нишләйем һуң, ҡайнар металл еҫе йәшләй* ***һеңеп ҡалғас ҡаныма****.* (Ғ. Мәсғүт.) — *Атты ярataһың һин, Зариф ағай! — Ғүмер буйы шул эштә эшләгәс,* ***ҡанға һеңгән*** *бит инде.* (С. Агиш.) ... *Ләкин миндә ҡурҡыу бар,* ***ҡаныма һеңгән*** *ҡурҡыуҙар.* (Н. Нәжми.)

**ҡанға һыуһау**. Һуғышырға, ҡан ҡойорға ярһыу.

**ҡанға туҙыу (батыу)**. Һуғышып ныҡ ҡанһырау.

**ҡан дошман**. Үтә ныҡ дошманлашҡан кеше. [*Ныязғол*:] *Моратшаны үҙең беләһең, минең* ***ҡан дошман****.* (Һ. Дәүләтшина.) [*Ирьегет*:] *Үҙ-ара* ***ҡан дошмандар*** *икәнлегебеҙҙе аңлайһыңдыр, һорау алып маташма.* (Н. Мусин.)

**ҡанды боҙоу**. Оҡшамаған эш-ҡылыҡ менән асыу килтереү, интектереү. *Эх, ҡайһылай интектерҙе,* ***ҡанын боҙҙо*** *ул йылдарҙа Степан* [*Ҡолсобайҙың*]. (Я. Хамматов.) *Ирештереп баланың* ***ҡанын боҙҙолар****.*

**ҡанды иретеү**. Күңелгә хуш килеп, ҡыуандырыу. *Мырҙабулат инде лә: «Ҡунаҡтар, хәҙрәттәр, Ольга ханымдың һеҙгә бирәһе бүләктәре бар, сығырға ҡушманы», — тип хәбәр ташланы. Был һүҙ төшөм ҡайғыртып ултырған халыҡтың* ***ҡандарын иретеп*** *ебәрҙе.* (Т. Хәйбуллин.)

**ҡанды йыуыу**. Түгелгән ҡандың ҡонон ҡайтарыу. *Илен яҡлап яу сапҡан, Ерен һаҡлап Дан тотҡан, яраланған батырҙың* ***ҡанын йыуған*** *саҡ булыр.* (Ҡобайырҙан.)

**ҡанды ҡоротоу**. Эш-ҡылыҡ менән йөҙәтеп бөтөү, үҙәккә үткәреү. *Етте һиңә,* ***ҡанымды ҡоротма****, туҡта.* (А. Таһиров.)

**ҡанды ҡыҙҙырыу**. Кешене ярһытыу, ныҡ асыуландырыу.

**ҡан илау**. 1. Бик ҙур ҡайғы-хәсрәт кисереү; кисерештән ҡаты илау. ***Ҡан илап****, ярлы-ябағай таштарға яҙған ҡарғыш. Мең-мең ҡарғыш яҙылһа ла, еңеләймәгән яҙмыш.* (А. Иғебаев.) **Ҡан илатыу** *кемде*: *Кешеләр, утлы ташҡын кеүек ҡайнап, үҙҙәрен* ***ҡан илатып*** *килгән синфи дошман төйәгенә ашығалар.* (Й. Солтанов.)

*син.*: ҡан-йәш түгеү.

2. Бик нык зарланыу. [*София*:] *Йәйгелеккә балалар йәслеһе яһағанда ... расходы-маҙары ла күп булмаç кеүек ...* ***Ҡан иланы*** *бит йәш балалы бисәкәйҙәр.* (Ә. Мирзаһитов.)

**ҡан йотоу**. Бик ҙур ҡайғы кисереү. ...*Хаин булһам, түләрмен кәфарәт, Бер ғүмер ут йотоп та* ***ҡан йотоп***. (Ш. Бабич.)

**ҡан-йәш (ҡанлы йәш) түгеү**. Ҙур кисерештән, ҡайғынан аҙарынып илау. [*Көнһылыу*:] *Әллә һеҙ бисәләрегеҙҙең яуға башлап сығыуҙарын көтәһегеҙме? Нимә кәрәк, ни етмәй? Күпме әсәләр бөгөн* ***ҡан-йәш түгә****; ҡаты хурлыҡ күтәрәләр.* (Б. Бикбай.)

*син.*: ҡан илау.

**ҡан кибеү**. Ҡаты асыуҙан шашыу. [*Шакир*:] ***Ҡан кипкәйне***, *йөрәк асыу менән ҡабарғайны, бөгөн бер аҙ эсем бушап ҡалды.* (Д. Юлтый.)

**ҡан көйөү**. Бик нык һыуһау, сарсау.

**ҡан ҡайғырыу**. Бик нык кисереү, әрнеү. *Вәт шайтан малай. Ҡайҙа барып сыҡҡан. Әсәһе бында* ***ҡан ҡайғыра***. (Ғ. Ибраһимов.)

**ҡан ҡайнау**. Нык асыу килеү, ярһыуҙың сигенә етеү. *Түрәбайҙың асыуҙары ҡабарҙы, күҙҙәре ут булып яна.* ***Ҡаны ҡайнаны***, *күҙенә ҡан тулды.* (Т. Хәйбуллин.)

**ҡан ҡаҡшатыу**. Яфа күрһәтеү, этлек менән ыҙалау.

**ҡан ҡалтырау**. Ҡурҡып, елтерәп тороу. [*Новиков*:] — *Ҡалаларҙа забастовка ойоштороу бер ни тормай, ә бында иһә һәр береһе үҙе өсөн генә* ***ҡан ҡалтырап*** *тора...* (Д. Юлтый.) *Тимерҡаҙығым ҡайта аламы, юҡмы инде тип тә әсә һәр көн* ***ҡан ҡалтырап*** *торҙо.* (Ғ. Ибраһимов.) *Аңланы Мөхәмәҙғәле. Йөрәге шыу-у итеп ҡалды. Быға тиклем дә ул, ике ут араһында икәнен тойоп,* ***ҡан ҡалтырап*** *йөрөй башлағайны.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**ҡан ҡарайыу**. Асыу менән эстән яныу, нык үртәлеү. *Кешелек һәм кеше ҡәҙерен белмәй кешелеген йотҡан «кешеләргә», асыуланып,* ***ҡаным ҡарайғанда***, *ихтыярымдан тыш йырлай инем асыуымдан ошо бер йырҙы.* (Б. Вәлид.)

**ҡан ҡойоу (түгеү)**. Ҡаты һуғышып, үлтерешеү. *Әсә һуккән йәш ҡойор, дау сығарған* ***ҡан ҡойор***. (Ҡобайырҙан.) *Беҙ фронтта күп* ***ҡан ҡойҙоҡ***. (Д. Юлтый.) *Хисмәтулла төрлө һүҙҙәргә иғтибар итмәне. Ауылдаштарына фронттан,* ***ҡан түгеүсе*** *улдарынан сәләм тапшырҙы.* (Я. Хамматов.) **Ҡан ҡойош:** *Тыуған ерем, һинең өсөн, һинең иркең өсөн, Ерҙә барған күпме* ***ҡан ҡойош***. (Ш. Бикҡол.)

**ҡан ҡыҙыу**. Бик ҡаты асыу килеү, асыуҙан ярһыу. *Һигеҙ эшсенең ғәйепһеҙ ҡулға алыныуынан һуң, эшселәрҙең* ***ҡаны ҡыҙғайны***. (Ж. Кейекбаев.) *Барғанда-ҡайтҡанда, юл буйында, тегендә-бында үҙҙәренә ер ҡаҙып интеккән кешеләрҙе күрәм.* ***Ҡан ҡыҙып*** *китте.* (Д. Исламов.) *Ғәйни ағайҙың тәне әҫелеһыуыҡлы булып китте.* ***Ҡаны ҡыҙҙы***. (Т. Иәнәби.) **Ҡанын**

**ҡыҙҙырыу** *кемдең*. *Нәфрәт көсө ана шул дәрәжәгә еткереп **ҡыҙҙырған** уның **ҡанын**.* (Ә. Вахитов.)

**ҡан таратыу**. Ойоған, талған тәнде яҙып алыу.

**ҡан тартыу**. Туған-ҡәрҙәшеңде үҙең дә аңламайынса яҡын күреү, үҙ итеү. *Йән тартмаһа ла **ҡан тарта**.* (Мәҡәл.)

**ҡан ташыу**. Ярһып, ашҡынып тороу. — *Бына минең теш-тәр! — тине ул, ярһыуынан **ҡандары ташып**...* (Б. Бикбай.) — *Ҡара йөрәк [Чемберлен], беҙгә ҡарап **ҡаның ташамы**?* (Ғ. Мәсғүт.)

**ҡан (ҡан-тир) түгеү**. Ниҙелер башҡарыр өсөн ҙур көс исраф итеү, ғүмерҙе һалыу. *Бәхет, шатлыҡты Ватан яулап алды **ҡан түгеп**.* (Р. Ниғмәти.)

**ҡан төкөрөү**. Ауыр кисереш менән яфаланыу, ныҡ ҡайғырыу. *Быйылғы байрамдың ҡыҙығы булманы. Мин **ҡан төкөрөп** үткәрҙем, дуҫым ғүмерлеккә һыңар ҡолаҡлы булып ҡалды.* (М. Кәрим.)

**ҡан һауыу**. Тәндең берәй урынына тамыр ярылыуҙан ҡан йыйылыу. *Дробяткин ҡайтып килешләй санаһында мейеһенә **ҡан һауыуҙан** үлгән.* (Н. Гоголь. Ф. Иҫәнғолов тәрж.)

**ҡаны ҡатҡыр**. Ҡарғау һүҙе.

**ҡанын ҡойоу**. 1. *кемдең*. Ҡаты туҡмап, яралап, ҡанын ағыҙыу.

2. *нимәнең*, *һөйл*. Күмәкләп күп итеп эшләү. *Беҙҙең яҡта шәл бәйләүҙең **ҡанын ҡоялар**.*

**ҡанын һурыу** *кемдең*. Кеше көсө иҫәбенә йәшәү. [*Байғуралар*] *Алдап-йолдап, юхалап, ҡурҡытып, ярлы-ябағайҙың **ҡанын һурҙы**.* (И. Ғиззәтуллин.)

**ҡанын эсеү** *кемдең*. Хеҙмәтен үҙләштереп, бик ҡаты иҙеп йәшәү. *Һинең Имайың нисә йылдар үҙенә хеҙмәт иткән кеше-ләргә оялмай аҡыра, уларҙың **ҡанын эсә**.* (Һ. Дәүләтшина.) *Алһыуҙарҙың ауылдарында ла әҙәм **ҡанын** күп **эскән** бер ҙур кулак булған, тиҙәр ине.* (Ғ. Ибраһимов.)

**ҡан эскес**. Бик яуыз, уҫал. *Ниғмәтулла миңә еҙнәй булһа ла яҡламайым. Ул **ҡан эскестең** өйөн үртәү түгел, үҙен үлтереү ҙә аҙ.* (Я. Хамматов.)

**ҡаны юҡ** *кемдең*. Үтә лә миһырбанһыҙ, аяуһыҙ.

*син.*: таш йөрәк(ле).

**ҡанъяғаһы ҡаты** *кемдең*. Күмәк һунарҙа ҡанъяғаһына йән-лек аҫыр нәүбәте еткәндә, йәнлек осрамай йәки алдырмай этләтә торған уңышһыҙ (*кеше*).

**ҡан ялатыу**. Ауыҙ-моронон ҡанға туҙҙырыу. *Бер көндө, тәнәфес ваҡытында, Фәтхерәхмән исемле үҙемдән ҙурыраҡ малай, ни өсөндөр, тимер көрәк һырты менән һуғып, ауыҙ-моро-номдо **ҡан ялатты**.* (Б. Бикбай.)

**ҡапҡанға төшөү (эләгеү)**. Хәйләгә, мәкергә бирелеү.

*син.*: тоҙаҡҡа эләгеү, ҡармаҡҡа ҡабыу.

**ҡапҡан һалыу (ҡороу).** Кемделер эләктерер өсөн хәйлә ҡороу, мәкер менән ҡулға алырға тырышыу.

**ҡапҡа төбөндә.** Килеп еткән, бик яҡын (*берәй эш, ваҡиғаға ҡарата әйтелә*). *Туйым* ***ҡапҡа төбөндә****, орсоҡ-табам ҡайҙа икән?* (Әйтем.)

**ҡап ҡорһаҡ** 1. Йыуан ҡорһаҡлы кеше.

2. Бай кеше.

**ҡапсығыңды киң тот** *мыҫҡ.* Булмаҫтай ерҙән күпте өмөт иткән кешегә ҡарата әйтелә. *Индрил ҡысҡырып көлөп ебәрҙе: — Двореցтар!* ***Ҡапсығыңды киң тот!*** *Миллион ғәрипкә һарайҙар һалып биргәнен көтәһеңме? Был — көлкө генә.* (Д. Юлтый.)

**ҡап (тап) уртаһына баҫыу** *ниҙең.* Һүҙ-хәбәрҙең айышына төшөнөп, асылын дөрөҫ кенә билдәләү.

**ҡара аҡыл.** Кешенең тормош тәжрибәһенә нигеҙләнгән ҡараш, уй-фекер. ***Ҡара аҡыл*** *менән эш итеү.*

**ҡара алтын.** Нефть. *Ҡара алтын табыу.*

**ҡара бауыр.** Бик яуыз, эскерле. [*Хәмзә*] *Кешеләрҙе бер-береһенә һөсләтә, ҡулынан килһә, бер-береһенең үңәсен сәйнәтер ине уларҙың,* ***ҡара бауыр****.* (Я. Вәлиев.) *Эй,* ***ҡара бауыр*** *шаҡман, нимә һин хушлашмай ҙа таяһың?* (Б. Бикбай.)

**ҡара башыңа булғыры.** Үлем килеүен теләү (*ҡарғыш һүҙе*). *...Начальниктарҙы һыйлап, һуғыштан ҡалыуың етмәйме ни, ҡарун!* ***Ҡара башыңа булғыры.*** (И. Көҫәпҡол.)

**ҡара биҙәктәр менән** [күрһәтеү, һүрәтләү]. Гел насар итеп күрһәтеү, яҡшы яғын күрмәү. *Ҡайһы саҡта сенсация менән мауыға* [*газета*] *һәм районның тормошон* ***ҡара биҙәктәр менән*** *генә күрһәтә башлай.* («Сов. Башҡ.»)

**ҡара биҙәү** *һөйл.* Бер бала ла аҫрамаған ҡатын. ***Ҡара биҙәүгә*** *ҡалыу.*

**ҡара буран сығыу.** Бола, тауыш-талаш ҡубыу. ... *Күлдәкфәлән алырға булһа, өйҙә* ***ҡара буран сыға.*** (Ғ. Ғүмәр.)

**ҡара гүргә инеү.** Үлеү. *Бахыр Гөлйыһан, хатта Закир ағайҙың үлеүенә лә ышанмай, ти. Сәрүәретдин мәғзүмгә барғансы,* ***ҡара гүргә инәм****, тип әйтә лә ҡуя, ти...* (З. Биишева.)

*син.*: ҡара ер аҫтына инеү.

**ҡара ер аҫтына инеү.** Үлеү, вафат булыу. *Ғәжәп эш. Ер һелкетеп тор ҙа, бөтә мөлкәтеңде ташлап,* ***ҡара ер аҫтына*** *керсәлең.* (Т. Хәйбуллин.) *Әлдә докторға рәхмәт, мин әйтәм, ул булмаһа,* ***ҡара ер аҫтына инер*** *инем бит әле, тим.* (Н. Ҡәрип.)

**ҡара исемлек*.** Тәртип боҙған йәки башҡа берәй ғәйебе булған кешеләр иҫәбе. *Ҡара исемлеккә индереү.*

[*Рус телендәге «черный список» берәмегенән.]

**ҡара иҫәп.** Сама менән билдәләнгән һан, хисап йәки уй. ***Ҡара иҫәп*** *менән әйтеү.* ***Ҡара иҫәп*** *менән уйлап ҡарау.*

**ҡара йөҙ(лө) (йөҙө ҡара)** *кемдең.* Уҫал уйлы; оятһыҙ, битһеҙ. *Николай батша,* ***йөҙө ҡара****, етте әҙәм башына.* (Бәйеттән.)

**ҡара йөрәк(ле).** Күңелендә миһырбаны булмаған; яуыз, уҫал. *Йығылды инде башҡа байраҡтар, Еңелде инде* ***ҡара йөрәктәр.*** (М. Ғафури.) *Минең теләк шул:* ***ҡара йөрәктәрҙе****, иманын юғалтҡан бәндәләрҙе аямағыҙ*! (Я. Хамматов.) [*Хәжәр Ғәфүргә*:] *Һин* ***ҡара йөрәкте*** *араҡынан тулайһыңдыр тип уйлай инем. Айныҡ сағыңда тағы ла зәһәрлерәк икәнһең.* (Ш. Янбаев.)

**ҡара йылан.** Үтә мәкерле, яуыз кешегә ҡарата. [*Әжмәғол Дәүләтбайға*:] *Төрмәлә серетәм мин һинең башыңды!* ***Ҡара йылан***! (М. Кәрим.) [*Халыҡ*:] *Юҡ итергә был* ***ҡара йыланды***! (Б. Бикбай.)

**ҡара көйөү.** 1. Күкле-ҡаралы тоҫ алыу (*тәнгә һуғыуҙан, бәрелеүҙән һ. б.*). *Башҡортостан ере* ***ҡара янған*** *меңәрләгән ҡамсы эҙенән.* (Б. Бикбай.)

2. (...ҡойолоу). Бик ныҡ үртәнеү, асыуы йөҙөнә сығыу.

**ҡара тон.** Ауыр, аслыҡлы ваҡыт. ***Ҡара көнөңдә*** *ҡара икмәгең булһын.* (Мәҡәл.)

**ҡара ҡағыҙ.** Һуғышта һәләк булыу хаҡындағы документ (ғәҙәттә ҡара төҫтә булған). *Беләһегеҙме, әсәй нисек көттө Ағайымдың ҡайтыуҙарын. Хатта «****Ҡара ҡағыҙ****»ҙан һуң көттө ишек ҡағыуҙарын.* (Р. Мифтахов.)

**ҡара ҡорһаҡ** *һөйл.* Ашау-эсеүгә талымһыҙ кеше хаҡында. [*Марс*:] *Беҙҙең ише* ***ҡара ҡорһаҡ*** *әшсегә ошолай ҙа батамы*? (Ә. Хәкимов.)

**ҡарама коло һибеп ҡалыу.** Берәйһе кире әйләнеп килмәһен (йәки ҡайтмаһын) өсөн эшләнгән ырым.

**ҡара күкрәк** *диал.* Үтә уҫал, яуыз. *Йәш килен бигерәк* ***ҡара күкрәк*** *булып сыҡты.*

**ҡарап ҡарау.** 1. Ни эшләргә, нисек хәл итергә икәнде уйлау, самалау. [*Әбйәлил*:] *Тәүҙә һин үҙең әйләнеп сыҡ, шунан мин* ***ҡарап ҡарармын.*** (Әкиәттән.)

2. Һынау, тикшереү. *Ярар,* ***ҡарап ҡарайым*** *әле.*

**ҡарап торам да.** Ниҙелер күҙәтеп, өйрәнеп һығымта яһағанда әйтелә. [*Юлия*:] *Бына* ***ҡарап торам да****, русса һөйләүегеҙ ҙә бик яҡшы.* (Һ. Дәүләтшина.)

**ҡарап торған.** Ҙур өмөт тотоп, ҡәҙерле һанап йәшәгән берҙән-бер нәмә. ***Ҡарап торған*** *малым шул булыр.*

*син.*: күҙ терәгән.

**ҡарап тороуға.** Тышҡы ҡиәфәте, күренеше менән; ҡарамаҡҡа (*ышаныс белдергәндә әйтелә*). ***Ҡарап тороуға*** *һәйбәт кеүек.*

*син.*: күрер (ҡарар) күҙгә.

**ҡарап туйғыһыҙ** (туймаҫлыҡ). Күрер күҙгә бик тә хуш; матур, сибәр. *Хисам* ***ҡарап туйғыһыҙ*** *матур, таҙа бала булып үҫә башланы.* (Б. Бикбай.)

*син.*: күреп туйғыһыҙ.

**ҡарап туймау (туя алмау)** *кемгә, нимәгә.* Матурлығына һоҡланып, яратып күҙҙе ала алмау. *Ҡырҙарымды күҙҙәр* ***ҡарап туймай****, һәр бер аҙым алға баҫҡанда.* (Д. Юлтый.) *Әсә кеше*

*эштән [illegible] ныҡ эҙерләргә тырыша. Үҙе улдарына, ҡыҙ-ҙарына **ҡарап туя алмай.*** («Сов. Башк.»)

**ҡарар ере (урыны) ҡалмау.** Бик ныҡ бысраныу (йәки тауша-лыу, тетелеү). *Күлдәгенең **ҡарар ере ҡалмаған.***

**ҡара сәүкә кеүек.** Бик күмәк булып (*эркелгән халыҡҡа ҡара-та*). *Һылыубикә инәй ауласлап йөрөргә уйлаһа ла, ул белгәнде кеше лә белгән булып сыҡты. Бара-бара эҫкерт төбөн **ҡара сәүкә кеүек** һырып алдылар.* (Б. Туйөмбәтов). *Абдрахман **ҡара сәүкә кеүек** ябырылып килгән дошман яуына атырға керешкән.* (Ә. Вахитов.)

**ҡара таҡта.** Хурлыҡ тамғаһы һугыла торған урын (*эштә арт-та ҡалған һ. б. кешеләр өсөн 30-сы йылдарҙа булған*). [*Фазуҡ*:] *Ул* [*атайым*] *бөгөн дә нормаһын үтәмәгән, уны бөгөн дә **ҡара таҡтаға** яҙғандар.* (С. Агиш.)

**ҡара таныу.** Уҡый-яҙа белеү. *Ҡолмәт **ҡара танып**, уҡып-яҙмаһа ла, активлығы булды һәр эштә.* (Т. Йәнәби.)

*син.*: әлепте таяҡ тип белеү.

**ҡара ҡанын ҡойоу** *кемдең*. Бик ҡаты туҡмау; киҫеү, ярыу. [*Старшина*:] *Эйе, эйе, атлы казак саҡыртып, **ҡара ҡанын ҡойҙорорбоҙ**.* (Б. Бикбай.)

**ҡара таңдан (таң менән).** Бик иртә, яҡтырыр-яҡтырмаҫтан. *Әлеге Шәмсетдин. **Ҡара таң менән** ҡар йырып нишләп йөрөй тағы?* (Р. Низамов.)

**ҡара тап.** Өҫкә төшкән хурлыҡ билдәһе. *Ни эшләтһәләр ҙә күнермен. Әммә үҙемдең өҫтән **ҡара тапты** йыуырмын.* (Н. Му-син.)

**ҡара тиргә батыу (төшөү).** Бик ныҡ көс түгеп, хәлдән тайыу.

**ҡара тир түгеү.** Ныҡ тырышып, көс түгеп эшләү. *Сынтимер ҙә атайымдың һыңары. Тау-таш араһында эш күрһәтәм тип, **ҡара тирен түкһен**, радикулиттан башҡа бер ни ҙә яулай алмаясаҡ.* (Ш. Янбаев.)

**ҡара тырыш.** Үтә лә үҙ һүҙле кешегә ҡарата әйтелә. *Былай ҙа **ҡара тырыш** булырһың икән, кит инде.* (Һөйл.)

**ҡара уй.** Бик насар, яуыз ниәт. [*Юлай*:] *Әбей батшаға гел тоғро булдың, **ҡара уй** башыңа килмәне.* (Б. Бикбай.) **Ҡара уйлы:** *Иҙеүселәр ҙә, иҙелеүселәр ҙә, **ҡара уйлы**, бысраҡ күңелле кешеләр ҙә булмаған саф, матур, яҡты тормошто көттөләр.* (З. Биишева.)

**ҡара уны.** Кемгәлер янағанда әйтелә. [*Иәмилә Баязитова*:] — *Ырыу башлығы... **Ҡара уны**, бала менән бер-бер хәл булһа, сәсеңде йолҡорҙай хәлгә төшөрһөң.* (М. Иҙелбаев.)

**ҡара һаҡал.** Берәй етешһеҙлек, кәмселек. *Башәймәҫов башың менән штрафбатта йөрө инде! Хәбәр ауылға етһә, ят та үл. Ҡотолорға кәрәк был «**ҡара һаҡал**»дан.* (Р. Солтангәрәев.) *Ҡай-ҙа барһалар ҙа, «халыҡ дошманы»ның **ҡара һаҡалы** улар арты-нан эйәреп йөрөй.* (С. Төпәйев).

**ҡара һарыҡ.** Аңһыҙ, томана кеше. [*Ҡолой*:] *Ха-ха-ха ... Халыҡ — **ҡара һарыҡ**, ә һин түрә, ниңә күп инәлеп тораһың?* (Б. Бикбай.)

**ҡара һин уны.** Нимәгәлер һоҡланғанда, ғәжәпләнгәндә әйтелә.

**ҡараш ташлау (атыу).** Ҡарап алыу. (*Хасбулат олатай*) *...Минең яҡҡа мут **ҡараш ташлап**, һөлөк мыйығының ҡойроғон тағы баяғыса борғолап ала.* (З. Биишева.) *Бабай миңә һынаулы **ҡараш ташланы**.* (Ә. Вахитов.)

*син.*: күҙ һалыу.

**ҡара эсле.** Көнсөл, мәкер тотҡан, яуыз уйлы. *Ә батша, донъяла минән дә яҡшы йәшәүсе кеше булмаҫҡа тейеш, тип йәшәгән **ҡара эсле**, көнсөл бер нәмә булған.* (Әкиәттән.) [*Сәбилә*:] *Шул, мин әйтәм, берәй төрлө этлек уйлап йөрөй торғандарҙыр улар. Икеһе лә **ҡара эсле** әҙәм.* (Б. Бикбай.)

**ҡара яға.** Ярлы-ябаға. *Ҡыҫҡаһы, һәр **ҡара яға** байғоштоң башынан һыйпарға ашыҡма.* (Ә. Хәким.)

**ҡара яғыу.** Кешегә булмаған ғәйепте ташлау, исемен бысратыу. *«Бунт күтәреүселәр» тигән исем менән эшселәрҙең йөҙҙәренә **ҡара яҡҡандар**.* (З. Шәрҡи.)

*син.*: тап төшөрөү.

**ҡара яныу.** Асыуҙан, борсолоуҙан һ. б. кисерештәрҙән йөҙ ҡара яныу. *Айбулат хурлығынан **ҡара янды**. Маңлайынан шыбыр тир аҡты.* (Һ. Дәүләтшина.) *Ораторҙар килделәр, «Долой һуғыш!» — тинеләр. Шул ваҡытта әфисәрҙәр **ҡара янып** йөрөнөләр.* (Халыҡ йырынан.) ***Ҡара янып**, тештәрен ҡыҫып, ишек төбөндә ҡарап торған Ҡарабаш бер урынға ла һайланманы.* (И. Насыри.)

**ҡарғышы(ң) ҡара башыңа.** Ҡарғаған кешегә ҡарғышы үҙенә кире ҡайтһын, тип әйтелгән һүҙ.

**ҡарлуғас ҡанаты кеүек [ҡаш].** Ҡыйылып торған ҡап-ҡара ғына ҡашҡа ҡарата әйтелә.

**ҡармаҡҡа ҡабыу (эләгеү).** Хәйләгә, мәкергә алданыу. *Тимерхан бөтөнләй **ҡапты ҡармаҡҡа** — өйләнде! Беләһеңдер әле, көн дә уға хат килә.* (Ш. Янбаев.)

*син.*: тоҙаҡҡа төшөү.

**ҡармаҡ ташлау (һалыу).** Хәйлә, мәкер менән берәйһен ҡулға алырға, эйәләштерергә тырышыу.

**ҡар өҫтөндә ҡаҙан ҡайнатыр.** Бик уңған, етеҙ. *Өлгөр* [*Әсмә*], ***ҡар өҫтөндә ҡаҙан ҡайнатырҙай** уңған ... бисә инде.* (Л. Яҡшыбаева.)

**ҡартайғанда тыртайған.** Оло кешенең ололарға хас булмаған ҡылыҡ ҡылыуына ҡарата әйтелә. — *Харап, килешә тип беләләр инде, **ҡартайғанда тыртайған**! — тиештеләр ҡарсыҡтар.* (М. Садиҡова.)

**ҡартайғансы аҡыл инмәгән (ултырмаған).** Оло кешенең ниндәйҙер ҡылығын хуп күрмәй, шелтә белдергәндә әйтелә.

[*Котлояр*:] ***Картайгансы** һиңә лә **акыл ултырманы**, «Рәхимә еңгәм, Ныязгол кайнагам» тип, ауыҙ һыуың корой*. (Һ. Дәүләтшина.)

**картая белмәгән <карт ишәк>.** Үҙен тотошонда, кыланышында йәшенә күрә олпатлыгы булмаған кешегә шелтә менән әйтелә. *Үлмәҫбикә торорға ынтылған карттың салғыйынан тартып урынына ултыртты. — **Картая белмәгән карт ишәк**! — Үҙе кыскырып көлдө*. (З. Каҙакбаева.)

**картая белмәү.** Карт булыуын тоймаған, эш-кылығында карт икәнен һиҙҙермәгән кешегә карата әйтелә. — *Бер ҙә **картая белмәйһең**, Ғариф ағай, — тине Ғәләү, уның һыҙланмай-нитмәй етеҙ йөрөүенә һокланып*. (Б. Бикбай.)

**карт башы(ң) менән.** Оло кешене берәй килешмәгән кылығы өсөн шелтәләгәндә әйтелә.

**карт бүре.** Күпте күргән, нык йышылған кеше. [*Котлояр*:] *Һеҙ әле мине, **карт бүрене**, алдамаксы булаһығыҙмы әле. Мин һеҙҙең кеүекте күрмәгәнме*? (Һ. Дәүләтшина.) *Ул, **карт бүре**, алып китәһе бик кимммәтле нәмәләре калған булмаһа, был якта моронон күрһәтмәҫ*. (Б. Бикбай.)

**карт төлкө.** Үҙен алдатмай торған, бик хәйләкәр кеше. ***Карт төлкө** Гәрәй быны тиҙ үк һиҙеп алды, һәм, түрьякка үтеп, баҫынкы тауыш менән һөйләшә башланы*. (Б. Бикбай.) *Тукта, мин әйтәм, был күҙҙе сағылдырмак булып кайткандыр инде, әммә барып сыкмаҫ*! *Беҙ үҙебеҙ **карт төлкө**!* (Б. Бикбай.) *Ер аҫтында йылан көйшәгәнде лә һиҙәлер был **карт төлкө**.* (И. Ғиззәтуллин.)

**каршы алыу.** 1. Килгән кешенең юлына, алдына сығып, көтөп тороу; каршылау. *Кунакты **каршы алыу**. Поезды **каршы алыу**.*

2. Килгән кешегә мөнәсәбәт белдереп, кабул итеү. *Якшы **каршы алыу**. Насар **каршы алыу**.*

**каршы барыу.** Берәй кешенең ниәтенә, эшенә йәки йәмгиәттәге хәрәкәткә кире эш итеү.

**каршы килеү.** Берәйһенең уй-ниәтенә, теләгенә риза булмай, кире тороу. *Управляющий, Касьяновты үҙендә калдырырға тырышып, **каршы килде**. Кемде тыңларға белмәгән Петр Тимофеевич, бер аҙ икеләнеберәк торғандан һуң, икеһенең дә тәкдименән баш тартты*. (Я. Хамматов.)

**каршы куйыу.** 1. Кире миҫал рәүешендә бер нәмәне икенсе нәмә менән сағыштырыу.

2. Кешеләрҙең араһын боҙоп, дошманлаштырыу.

**каршы тороу.** 1. Берәйһенең ниәтенә, теләгенә кире булыу.

2. Ниҙеңдер тәьҫиренә, көсөнә бирешмәҫкә тырышыу.

**каршы сығыу.** 1. Яу аскан дошманга каршылык күрһәтеү.

2. Кемдеңдер ниәтенә, иркенә, фекеренә кире мөнәсәбәт белдереү. *Йыйылышта **каршы сығыу**.*

**ҡаршы төшөү**. Кешенең һүҙенә, теләгенә, эшенә кире мөнәсәбәт белдереү, риза булмау. *Солтанов... ни әйтһә лә Тимерҙең* ***ҡаршы төшөүенә*** *өйрәнә башлағайны инде*. (Б. Бикбай.)

**ҡарын (ҡорһаҡ) асыу**. Бик ныҡ асығыу. ***Ҡарыны асҡанға*** *ҡара талҡан майҙай күренер*. (Мәҡәл.) *Өҙөлөп-өҙөлөп* ***ҡарын асты***, *ашағы килә*. (Д. Юлтый.)

**ҡарыуҙы ойотоу**. Бик ныҡ асыуландырыу, асыуға тейеү. [*Агроном*:] *Кешенән бик ҡаңғырам... Маҙаһыҙлап бөтөрәләр,* ***ҡарыуҙы ойоталар***. (А. Игебаев.)

*син.*: һарыуҙы ҡайнатыу.

**ҡарыуын ҡайтарыу**. Үсен алыу, асыуын сығарыу. *Әйтерһең, ул* [*Гөлйөҙөм*] *бында иркенгә сыҡҡас, ҡыштың-ҡыш буйы сараһыҙҙан өндәшмәй телен тешләп йөрөүенең* ***ҡарыуын ҡайтара***. (Ф. Иҫәнғолов.)

**ҡасан да булһа**. Берәй ваҡыт. *Хаҡлыҡ* ***ҡасан да булһа*** *табылыр әле, тип уйланды Сәғиҙә*. (М. Тажи.)

**ҡарышҡан һымаҡ**. Берәй эш-хәл теләгәнсә түгел, киреһенсә килеп тик торғанда әйтелә. *Ә балыҡ* ***ҡарышҡан һымаҡ*** *ҡапты ла ҡапты*. (Ж. Кейекбаев.)

**ҡаҫта эсле**. Тар күңелле, үсле. *Һаҙый бай бының ғөҫөрөн ҡайтармайынса ҡалырмы икән, бик яуыз кеше бит ул,* ***ҡаҫта эсле*** *әҙәм*. (Н. Мусин.)

**ҡаты бәғерле**. Күңеле бик ҡаты: аяуһыҙ, мәрхәмәтһеҙ. *Сергей ҡарт Мраковкала бер тин өсөн кешенең күҙ алмаһын соҡоп алырға әҙер торған, ғәжәп ҡомһоҙ,* ***ҡаты бәғерле*** *байҙарҙың береһе*. (З. Биишева.) *Таш кеүек* ***ҡаты бәғерле***, *ҡарун кеүек ҡомһоҙ нәмә ине мәлғүнең*. (И. Ғиззәтуллин.) *Егеттең йырҙары шул тиклем моңло булған, иң* ***ҡаты бәғерле*** *кешенең күңеле лә балауыҙ һымаҡ ирегән*. (Ә. Вахитов.)

*син.*: таш бәғерле.

**ҡаты бәрелеү (ҡағылыу)** *кемгә*. Кешегә ныҡ итеп әйтеү, күңелен уйлап тормай өндәшеү. *Батша егеткә бер ҙә* ***ҡаты бәрелмәҫкә***, *уның күңелен табырға булды, ти*. (Әкиәттән.) *Шул хәтле* ***ҡаты бәрелмәһәңсе*** *кешегә*. (М. Кәрим.)

**ҡаты ҡолаҡ (ҡолаҡҡа ҡаты)**. 1. Һаңғырау, ҡолағы насар ишеткән (*кеше*).

2. Әйткән һүҙҙе тыңлап бармаған, үҙ һүҙле. *Бригадир* ***ҡаты ҡолаҡ*** *шул, ҡаты ҡолаҡ. Шымартырға, күҙ буярға оҫта*. (Ғ. Шафиҡов.)

**ҡаты ҡуллы (ҡулы ҡаты)**. Хужалыҡты, ғаиләне үҙ ҡулында ныҡ тотҡан. ... *Колхоздың элекке председателе шаҡтай тәжрибәле кеше,* ***ҡаты ҡуллы***, *ләкин ҡартлыҡ менән бер аҙ туҙа төшкән*. (С. Агиш.) *Хәҙер шуларҙы хәтерләйем дә ул ваҡытта* ***ҡаты ҡуллы*** *булып күренгән өләсәйҙең ни тиклем яҡшы күңелле булыуын аңлайым*. (М. Кәрим.) *Эйе, һылап-һыйпап ҡына торма. Бисәләр ирҙең* ***ҡаты ҡуллыһын*** *ярата ул*! (З. Биишева.)

**ҡаты тороу.** Үҙ ҡарашыңа, иманыңа ышанып эш итеү, үҙеңдекен итеү.

**ҡау аҫтына ут төртөү.** Кешеләр араһын аҫтан ғына болартыуы, боҙоу.

**Ҡафтау* арты.** Бик алыҫ урын, ер сиғе. [*Айбулат*:] *Гөлйөҙөм, һин ҡайғырма. Улар теләһә һине **Ҡафтау артына** алып барып ташлаһындар, барыбер мин һине улар ҡулында ҡалдырасаҡ түгелмен.* (Һ. Дәүләтшина.)

*син.*: ете ҡат ер аҫты, йәһәннәм тишеғе.

[***Ҡафтау** — фараз ителгән ер сигендәге мифик тау, Кавказ тауы атамаһынан булырға тейеш.]

**ҡаш биреү** *һөйл.* Кешегә яҡты йөҙ күрһәтеү. *Ашын биреп, **ҡашын биреп** тора.* (Һөйл.)

**ҡашҡа ир.** Бик булған, дан кеше. *— **Ҡашҡа ир** икәнһең, кейәү, мең йәшә! — ти ҡарт, кейәүенән бик риза булып.* (Әкиәттән.)

**ҡаш менән күҙ араһында.** Бик тиҙ генә, ул-был иткәнсе (*кемдең йәки ниҙең юҡ булыуы хаҡында*). *Хәҙер ул яр буйы ҡола ялан булып ҡалды. Матур ғына булып үҫеп килгән ҡыуаҡлыҡ **ҡаш менән күҙ араһында** юҡ булды.* («Сов. Башк.»)

*син.*: шул ике арала, һә тигәнсе, күҙ асып йомғансы.

**ҡаш төҙәтәм тип күҙ сығарыу.** Бер нәмәне йүнәтәм, яҡшыртам тип, икенсеһен, мөһимерәк булғанын боҙоп ҡуйыу. *Ғөмдә, инсафлы шәкерт, «Тормош» та эшләй, сәркәтип, **ҡаш төҙәтәм тип, күҙ сығарып**, барса эште тарҡатып.* (Ш. Бабич.) *Совхозға саналарҙы райпромкомбинаттан алыу арзаныраҡ. Ләкин уларҙы ҡайтанан эшләтеү өсөн барыбер хаҡ түләнә бит. **Ҡаш төҙәтәбеҙ, тип күҙ сығармайбыҙмы** икән?* («Сов. Башк.») *Кемдеңдер иҫ киткес ғәмһеҙ ҡулы менән **ҡаш ҡуям тип күҙ сығарылған**!* (Р. Ғарипов.)

**ҡаш төйөү (емереү).** Асыу, ризаһыҙлыҡты йөҙгә сығарыу. *Һөйәһеләр һөйөлмәгән, көйөлмәгән көйәһе, Яттарға **ҡаш төйәһе** бар. Алда әле төйәһе...* (Т. Йосопов.)

**ҡаш һыныу.** Ризаһыҙлыҡты йөҙгә сығарып, ҡашты төйөү. *Залда тауыш тынғас, директор ағай сәхнәгә менде. Уның **ҡаштары һынған**, төҫө ҡасҡан.* (Ҡ. Ибәтуллин.)

**ҡашыҡ-аяҡ шылтырау.** Ғаиләлә сыҡҡан ығы-зығы, еңелсә талаш-тартышҡа ҡарата әйтелә. *Кешеләрҙең күбеһе ғаилә тормошоноң беренсе айҙарын бигерәк тә күңелле үткәрә, һуңынан аратирә **ҡашыҡ-аяҡ шылтырай** башлай.* (Ш. Шәһәр.)

**ҡашыҡ буйы.** Буйға бик бәләкәй. *Ишбулдиндың бойҙайы ул йылды **ҡашыҡ буйы** ғына үҫкән дә һарғайып ҡатҡан.* (Ә. Вәли.)

**ҡобара осоу.** Тулҡынланыуҙан, ҡурҡыуҙан ағарып китеү, төҫ үҙгәреү. *Был көтөлмәгән ауыр хәбәрҙе ҡапыл ишеткәс, Миңнекәй еңгәй ни әйтергә белмәй **ҡобараһы осоп**, бер аҙ ҡатып, аптырап торҙо...* (Һ. Дәүләтшина.) *Әхмәҙиҙең **ҡобараһы осто**: ул бер һүҙ ҙә өндәшмәне, судтың ҡарары — закон, Әхмәҙи быны*

*яҡшы белә ине...* (Ж. Кейекбаев.) *Әмирханов бөгөн магазинда йүнләп торманы, бер инеп, бер сығып йөрөнө. Сәғәт дүрттәр самаһында* ***ҡобараһы осоп****, битенең һөрөмө ҡойолоп килеп инде.* (С. Агиш.)

**ҡоҙағый ашы менән ҡунаҡ һыйлау.** Кеше иҫәбенә яҡшы, йомарт булып күренергә тырышыу.

**ҡойолоп <төшөп> барыу.** Тән ныҡ ҡаҡшап ауырайыу, арыу. *Артыҡ арығанлыҡтан, тәндәр* ***ҡойолоп бара****, тиҙерәк йоҡо һорай.* (Д. Юлтый.)

**ҡойолоп төшөү.** Көтөлмәгән эш-хәлдән, хәбәрҙән бөтөнләй юғалып ҡалыу. *Тәүҙә Хәбибуллин* ***ҡойолоп төштө****, аҙаҡ үҙен ҡулға алырға тырышты...* (Х. Ғиләжев.) *Тирәктәр араһынан Әхтәмдең дүрт егете килеп сыға. Ләкин улар, ярһыған Сахайҙы күргәс,* ***ҡойолоп төшәләр****.* (Б. Бикбай.) *Һеләүһендең кешегә тейеүен белһә лә, Сәбилә апай бик үк* ***ҡойолоп төшмәне****.* (Р. Солтангәрәев.) *Ишек асһам, әсәй* ***ҡойолоп төшә****, Күкрәгемә унан һарыла.* (Х. Назаров.)

**ҡойон уйнатыу.** Аяҡ аҫтында саң туҙҙырып бик етеҙ хәрәкәт итеү, елеү. *Байрамдарҙа [Юламан]* ***ҡойон уйнатып*** *бейегән, тау яңғыратып йырлаған.* (З. Биишева.)

**ҡойоп ҡуйған <кеүек>.** Бик матур, зифа (*гәҙәттә буй-һын*). [*Садрисламдың*] *күҙ алдында сибәр йөҙ,* ***ҡойоп ҡуйған кеүек*** *һын. Ҡолаҡ төбөндә: «Садрислам ағай!» — тигән ҡайнар бышылдау.* (Ф. Иҫәнголов.) *Мария-Терезаны, әлбиттә,* ***ҡойоп ҡуйған*** *сибәрҙәрҙән тип булмай. Ләкин барыбер уны хоҙайҙың ябай һөнәрсеһе генә әүәләп ташламаған, илаһи ҡул үҙе ҡағылған уға.* (М. Кәрим.) *Минең күҙ ҡушаҡҡа тағылған көрән атта булды. Ул* ***ҡойоп ҡуйған*** *кеүек матур.* (Д. Юлтый.)

**ҡойоп ҡуйған(дай).** Бер-береһенә бик ныҡ оҡшаған. *Оло улы Фәйзрахман инде еткән егет ине,* ***ҡойоп ҡуйған*** *атаһы.* (Д. Буләков.)

**ҡойоп ҡуйған кеүек** [булыу]. Бик ныҡ килешеп тороу (*кейемһалым һ. б. тураһында*). *Был йүгән ... ерән атҡа* ***ҡойоп ҡуйған кеүек*** *була инде.* (Б. Бикбай.)

**ҡойошҡанға ҡыҫылған тиҙәк <кеүек>.** Кәрәк-кәрәкмәгән урынға тығылып барған кешегә асыу белдергәндә әйтелә. *Ҡайһы ваҡытта Байғужа уға башҡортсалап: — Һин* ***ҡойошҡанға ҡыҫылған ат тиҙәге****! Мишайтлама әле! — тип, уның күкрәгенән этеп, урынына ултырта.* (Д. Юлтый.) [*Ғәни — Тайыпҡа:*] *Эс бошҡанда йөрөмә әле,* ***ҡойошҡанға ҡыҫылған тиҙәк кеүек****, асыуҙы килтереп.* (Н. Ҡәрип.)

*син.*: ат дағалағанда баҡа ботон ҡыҫтырған.

**ҡойроғона баҫтыра торған түгел.** Бик хәйләкәр, үткер кеше хаҡында.

**ҡойроғо бергә туңған** *кемдең.* Берәй насар эште бергә башҡарған кешеләр хаҡында әйтелә. *Бында барыбыҙҙы ла һөйләп*

*тораһы юҡ. Быңдай мөнтөктәрҙән берегеҙ ҙә буш түгелһегеҙ. Килдебайҙың да беҙҙең менән* ***ҡойроғо туңған.*** (Ғ. Дәүләтшин.)

**ҡойроғон да тота алмаҫһың** *кемдең.* Яуаплылыҡтан бик оҫта ғына ҡотолоп йөрөй алған кеше хаҡында.

**ҡойроғона баҫыу** *кемдең.* 1. Берәй мутлыҡ ҡылған, эш боҙған кешене фашлау, тотоу. ... *Беҙ ҡайҙа яҙырға белербеҙ, әммә* ***ҡойроғоңа баҫмай*** *ҡуймабыҙ, тиҙәр ҡыҙҙар* [*һатыусыға*]. (И. Ғиззәтуллин.) *Бар,* ***ҡойроғон баҫып*** *ҡарағыҙ: баяғы һаҡалтай күкрәгеҙ иң беренсе ҡалҡан итеп ҡуясаҡ.* (Б. Аҫылғужа.)

2. Берәй эш-ҡылыҡтан, һүҙҙән ҡәтғи генә тыйып ҡуйыу, туҡтатыу. *Ер бүлгәндә Муллаҡай, Сәлмәндәр быйыл да тауыш сығарырға итеп ҡарағайнылар ҙа, уларҙың* ***ҡойроғона*** *тиҙ* ***баҫтылар.*** (И. Насыри.) [*Хәмди:*] *Минең Ҡотошом, саҡ күҙ яҙлыҡтырһаң, күҙен алан-йалан уйнатып, сит бисәләр артынан эйәрер ине. Ярай әле, үҙем һаҡ,* ***ҡойроғона ныҡ баҫҡанмын.*** (Ш. Янбаев.)

**ҡойроғон бороу** *кемдең.* Бик ҡаты шелтәләү, орошоу. [*Үҙәнбай:*] *Мин уларҙың, өмәгә сыҡмағандарҙың,* ***ҡойроғон борормон*** *әле.* (М. Тажи.) *Бажа кеше була бит* [*Хәмит Солтановҡа*], *бер аҙ* ***ҡойроғон борһасы*** *шуның.* (Б. Бикбай.)

**ҡойроғон ҡыҫыу (ҡыҫҡартыу)** *кемдең.* Ҡыҫмаҡҡа алыу, эшхәлен сикләү. *Билалдар килеп етмәҫ борон халыҡ үҙ-ара һөйләшкәндә: «...башлап байҙарҙың* ***ҡойроҡтарын ҡыҫырға*** *кәрәк тиеүсе иҫке шинелле кеше Билал эргәһенә үк килде.* (А. Таһиров.) *Ҙурыраҡ магазин һалырға ла әҙерләнә ине, ләкин уларыбарып сыҡманы — уның* ***ҡойроғон ҡыҫтылар:*** *ауылда колхоз ойоштора башланылар.* (Ғ. Ибраһимов.)

**ҡойроғон тотоу** *кемдең.* Берәй мутлыҡ ҡылған, эш боҙған кешене фашлау, ҡасырға ирек бирмәү. ...*Бына әкиәт кеше. Уның* ***ҡойроғон тотор*** *хәл юҡ. Нимә һөйләгәнен дә аңлап булмай.* (С. Ағиш.) — *Ҡасҡан кеше бында торамы ни? Әллә ҡайһы яҡҡа сығып киткәндәрҙер әле.* ***Тоторһоң*** *уларҙың* ***ҡойроғон,*** *— тине Ғилаж.* (Ж. Кейекбаев.)

**ҡойроҡ болғау.** 1. Түрәләр, хәлле кешеләр алдында ҡуштанланыу, ярамһаҡланыу. *Үҙ эсебеҙҙән дә уларға* ***ҡойроҡ болғап*** *йөрөүселәр булмаҫ тип булмай.* (Т. Хәйбуллин.) *Шулай ҙа Усман үҙе губернатор алдында* ***ҡойроҡ болғарға*** *яратты.* (Ж. Кейекбаев.)

2. Шартына ҡарап төрлө һүҙ һөйләү, хәйләләү. *Һинең ҡарт көнөңдә нисек алдауыңды күреп торабыҙ, һин улай* ***ҡойроҡ болғама.*** (Б. Хәсән.) *Кулак төлкө төҫлө* ***ҡойроҡ болғап,*** *йөҙөн йәшерергә ҡылана.* (Д. Юлтый.) *Бына ниңә Ҡолсобай* ***ҡойроҡ болғай!*** *Гелән Сафуан хөсөтөнә төшә. Бишитәк тауы урманында алданыуын онотҡанмы икән ни?* (Я. Хамматов.)

**ҡойроҡ бороу.** Тәртипте, ҡарашты үҙгәртеп тороу. *Иөрөмәсе, Зыя Насир, һин төрлөсә* ***ҡойроҡ бороп,*** *Мәғәнә сыҡмай төрлө бабтарға кереп йүгереп йөрөп.* (Ш. Бабич.)

**ҡойроҡта һөйрәлеү**. Эш, хеҙмәттә ғел артта булыу. [*Ҡайһы берәүҙәр*] *яңғыҙ тороп ҡалыуҙан йә* ***ҡойроҡта һөйрәлеү*** *хурлығынан ҡурҡты, әлбиттә.* (Ғ. Ибраһимов.)

**ҡойроҡ текә тора**. Көслө, ҡеүәтле (*йәш кеше тураһында*). *Йәш заман,* ***ҡойроҡ текә тора.*** (Һөйл.)

**ҡойроҡто йәшереү (тоттормау)**. Эшләгән мутлыҡты, насар ҡылыҡты оҫта ғына йыйыу.

**ҡойроҡто ҡыҫыу**. Ҡурҡыштан тынып ҡалыу, шым ғына йөрөү. Ҡойроҡ ҡыҫылыу: ***Ҡойроғо ҡыҫылған*** *ҡарт мулла ҙур пландар ҡора башлағайны.* (И. Ғиззәтуллин.)

**ҡойроҡто ла күрһәтмәү**. Күҙгә-башҡа күренмәй йөрөү, кеше күҙенән йәшеренеү.

**ҡойроҡто төрөү (төйнәү)**. Ҡасып китергә әҙерләнеп бөтөү. *Беҙ икәү генә кәңәшеп,* ***ҡойроҡто төйнәнек*** *тә, атайҙарға белдермәй-нитмәй генә китергә булдыҡ.* (Б. Ишемғол.)

**ҡойроҡто һыртҡа һалыу**. Берәй эш боҙоп ҡасыу. [*Ишдәүләт*] *Ат алыштырам тип, ҡайтып киткәйне, шунан бирле күргәнем юҡ,* ***ҡойроҡто һыртҡа*** *һалды булырға кәрәк, — тине Тулыбай ағай.* (И. Ҡыпсаҡ.) *Намыҫты йотоп,* ***ҡойроҡто һыртҡа һалған*** *әҙәмде һин түгел, мин дә иш итә алмаҫ инем.* (Ш. Янбаев.)

**ҡолағына кейеҙ ҡаплаған** *мыҫҡ.* Ишетмәмешкә һалышҡан, әйткәнде тыңламаған кеше хаҡында. *Һиңә әйтәм,* ***ҡолағыңа кейеҙ ҡапланыңмы*** *әллә?* (Һ. Дәүләтшина.)

**ҡолағы осло** *кемдең* (осло ҡолаҡ). Бик һиҙгер, һүҙҙең асылын тиҙ тоя торған.

**ҡолаҡ итен ашау (сәйнәү)**. Бер һүҙҙе ҡабат-ҡабат һөйләп интектереү. *Балалар ҙа, Рәми менән Рәйфәнең әттәһе ҡасан килә инде? — тип* ***ҡолаҡ итен ашап*** *бөттөләр.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Ваҡиға ханым минең* ***ҡолаҡ итен сәйнәргә*** *тотондо. Иртә-кисен аш урынына таш йоттора бит, малай!* (С. Кулибай.) [*Хәтмулла:*] *Ысынлап та яҡшылыҡ теләгән булһағыҙ, пенсияға сыҡ та, пенсияға сыҡ, тип атайығыҙҙың* ***ҡолаҡ итен сәйнәмәҫ*** *инегеҙ.* (Д. Исламов.)

**ҡолаҡ ҡағыу**. Кемдән йәки нимәнәндер тороп ҡалыу, һемәйеү; кемде йәки ниҙелер ҡулдан ысҡындырыу. *Мин ҡайтыу менән Сәлмән ағай: — Энекәш, Зөләйханан* ***ҡолаҡ ҡаҡтың*** *бит, — тине.* (Т. Йәнәби.) *Бер үткенсе һүҙенә ҡарап, үҙ байлығыңдан* ***ҡолаҡ ҡаҡ*** *инде.* (Х. Ғиләжев.) [*Рәбиға:*] *Гөлсәсәктән* ***ҡолаҡ ҡаҡҡың*** *киләлер, ахыры?* (Ш. Бикҡол.)

*син.*: ҡоро ҡалыу.

**ҡолаҡҡа киртеү**. Ниндәйҙер ҡылыҡты ҡабатламаҫҡа ныҡ иҫкәрткәндә әйтелә. *Ә болдорҙа ылау һанап тороу мәсьәләһен һин дә* ***ҡолағыңа киртеп*** *ҡуй, — тине Мирасов, тағы шул һүҙгә ҡайтып.* (Ғ. Ибраһимов.) ***Ҡолағыңа киртеп*** *тороу кәрәк.* (С. Ҡудаш.)

**ҡолаҡ ҡарпайтыу**. Бик һаҡ тыңлау, ишетергә, белергә тырышып тыңлау. — *Йә, йә, шуны ишеткем килә, **ҡолағым ҡарпайып** ултырам да*. (Һ. Дәүләтшина.) ***Ҡолаҡтарын ҡарпайтып** тыңлап ултырыусы һатлыҡ йәндәр был һүҙҙе күтәргәндәй тауыш менән ... ҡаршы алдылар*. (Т. Хәйбуллин.)

*син.*: ҡолаҡ үрә тороу.

**ҡолаҡҡа ҡаты (ҡаты ҡолаҡ(лы))**. Ишетмәй, һаңғырау. ***Ҡолаҡҡа ҡаты** кеше әйткәнде ишетмәй яфалай*.

**ҡолаҡҡа салыныу**. Ишетелеп ҡалыу. *Бая **ҡолаҡҡа салынған** тауыш хәҙер яҡын, ҡолаҡтың янында ғына булып ишетелә*. (С. Агиш.)

**ҡолаҡҡа төшөү**. Билдәле булыу, ишетелеү. ... *Ырымбурҙа Иванов менән булған бәйләнештең полиция шымсыларының **ҡолағына төшөү** Сөнәғәтте борсоно*. (Ж. Кейекбаев.) **Ҡолаҡҡа төшөрөү (өрөү)**: *Фатима ҡала ҡыҙының кем булыуы тураһында Ғариф ағайҙың үҙенең генә **ҡолағына төшөрөп** ҡуйырға ла өлгөргәйне*. (Б. Бикбай.) *Мәсеткә барған ышаныслы ағайҙарҙың **ҡолағына төшөрөргә** кәрәк. Ул кеше йыйған ергә бармаһындар*. (Я. Хамматов.)

**ҡолаҡҡа элеү** *нимәне, күберәк юҡлыҡ форм*. Тыңлау, үҙен иҫәпкә алыу. *Минең һүҙемде **ҡолағыңа элеп**, тыңлап йәшәһәң, был хәлдә лә йөромәҫ инең*. (Ш. Янбаев.) **Ҡолаҡҡа <ла> элмәү**: *Оло кеше һин үҙең киҫәтеп әйт уға, Мәғфүрә килен. Башҡаларҙың һүҙен ул Асатай **ҡолағына** ҡапыл ғына **элмәй** торған*. (Һ. Дәүләтшина.) *Ҡара һин уны, колхоз председателе райсовет председателенең һүҙен **ҡолағына ла элмәҫкә** самалай*. (Н. Мусин.)

**ҡолаҡҡа яҡмаған (яҡмаҫ, ятмаған, ятмаҫ, йоҡмаған, йоҡмаҫ)** [һүҙ, хәбәр...] Төптө дөрөҫ булмаған, килешһеҙ, буш (*хәбәр*). [*Ғәләмбай*:] *Һин дә, Кәримә, **ҡолаҡҡа яҡмағанды** һөйләп тораһың*. (Ф. Иҫәнғолов.) [*Барый — Гөлзадаға*:] *Ҡуй әле, бисәкәй, һис **ҡолаҡҡа ятмаҫ** һүҙ һөйләйһең. Һин барында миңә кем кәрәк тағы*. (Ш. Насыров.)

**ҡолаҡ өшөй** *нимәнән*. Һүҙе, хәбәре килешһеҙ, яғымһыҙ. *Һүҙенән **ҡолаҡ өшөй***.

**ҡолаҡ сите менән генә** [ишетеп ҡалыу]. Һүҙҙе, хәбәрҙе әҙ-мәҙ генә, яҙа-сала ғына ишетеү.

**ҡолаҡ тешләтеү**. Ҡыҙ менән егет аҙаҡ ҡауышһын өсөн, сабый саҡтан малайҙан ҡыҙҙың ҡолағын тешләтеү йолаһы. ...*Шунда уҡ бәләкәс Алтандан сәңгелдәктәге Барһындың **ҡолағын тешләтеп** үк ҡуйҙылар, ти*. (Әкиәттән.) *Миңнеғол да һылыуҙы Бер күреүҙә оҡшатты, Ҡыҙ атаһы Мәүлетбай, Бик хуп күреп был эште, ҡыҙ **ҡолағын тешләтте***. (М. Буранғолов.)

**ҡолаҡ тондороу**. Ҡысҡырып оҙаҡ һөйләп ялҡытыу.

**ҡолаҡ торғоҙоу**. 1. Һағайып тыңлау. *Егет бар көсөн йыйып, **ҡолағын торғоҙоп**, күҙен секерәйтеп, ныҡлап ҡараһа, таш*

*ҡойманың аръяғында хырылдап ятҡан бер кешене күргән.* (Әкиәттән.)

2. Әһәмиәт биреү, ҡыҙыҡһыныу. *Был һорау бөтәбеҙҙең дә **ҡолағын торғоҙҙо**.* (С. Агиш.) *Фазыл ағай минең һүҙҙәрҙе ишеткәс, **ҡолағын торғоҙҙо**, ҡаштарын йыйырҙы, ә мин һаман һөйләй бирәм.* («Сов. Башҡ.»)

**ҡолаҡты ярыу**. Бик көслө булып ишетелеү (*тауыш, шау-шыу һ. б. тураһында*). *Ауыл гөж килеп торҙо. Ҡатын-ҡыҙ, әбей-һәбейҙәр үкереп илаша, китеүселәр тәкбир әйтә, бер ситтәрәк йыр, гармун тауышы **ҡолаҡты яра**.* (Б. Бикбай.) *Тағы ла бесәй тауышы **ҡолаҡты ярҙы**.* (Ә. Бикчәнтәев.)

**ҡолаҡ үрә тороу**. Һағайыу, игтибарҙы йүнәлтеү. *Татар байҙарының **Ҡолағы үрә тора**. Былар һәммәһе лә ниҙер һиҙенә ... берәй үҙгәреш көткән кеүек ҡурҡыуға төшә.* (М. Ғафури.)

*син.*: ҡолаҡ ҡарпайтыу.

**ҡолаҡ һалыу** *нимәгә* 1. Иғтибар, һаҡлыҡ менән тыңлау. *...Мин полк командиры менән беренсе батальон командиры штабс-капитан Андреев араһында барған һөйләшеүгә **ҡолаҡ һалып** торҙом.* (Д. Юлтый.) *Хаммат, тирә-яҡҡа **ҡолаҡ һалып**, оҙаҡ ҡына тынып ултырҙы.* (З. Биишева.) *Шамил да, брикет бушатҡан көрәгенә таянып, Зөлфиәнең йырына ихлас **ҡолаҡ һалды**.* (Ш. Янбаев.)

2. Иғтибарға алыу, диҡҡәт итеү; тыңлау. *Быға тағы әлеге Әртел Әптерәй ҡаршы сығып ҡарай, әммә уның һүҙенә **ҡолаҡ һалмайҙар**.* (Ә. Вахитов.) *Ололар һүҙенә **ҡолаҡ һалыу** кәрәк. Анһат, бик тиҙ эшләйһең. Кеше әллә ни тиер.* (Р. Солтангәрәев.) ***Ҡолаҡ һал**, тыңла беҙҙәрҙе*! (М. Өмөтбаев.)

**ҡолас алыу***. Тарала барыу. *Забастовка торған һайын киң **ҡолас ала**.* («Сов. Башҡ.»)

[*Рус телендәге «принять <широкий> размах» берәмегенән.]

**ҡолас йәйеү (киреү)**. 1. Ихласлыҡ, алсаҡлыҡ күрһәтеү (*ҡаршы алғанда, ҡабул иткәндә*). *Ил һаҡсыһы, әйҙә, түрҙән уҙ! — тип **ҡолас йәйеп** ҡаршы алалар.* (Н. Иҙелбай.) *Сафа мулдакәне таныштары **ҡолас киреп** ҡаршы алды.* (Б. Бикбай.)

2. Иркен үҫеш, юл алыу. *Минең уйымса бында ябай фетнә йәки бандитизм түгел, ә бик етди милли хәрәкәт **ҡолас йәйә**.* (Й. Солтанов.) *Заводта хеҙмәт ярышы **ҡолас йәйҙе**.* («Сов. Башҡ.»)

**ҡолон майы өҫтөндә (төшмәгән)**. Тормош ауырлығы күрмәгән.

**ҡолон һалған ҡола бейәләй** [булыу]. Яурындар төшөн, хәлһеҙләнеп йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә.

**ҡомалаҡ ҡыштырлау**. Көнсөллөк килеү, конләшеү. *Бер ҡараһаң, әле һаман мин кисәге мыштыр малай. Ә шулай ҙа сит бәхеткә **ҡомалағым ҡыштырламай**.* (Т. Йосопов.)

**ҡомар төшөү**. Дәрт ҡуҙғалыу.

**ҡомға ултыртыу** *кемде, нимәне.* Эште дөрөҫ алып бармай, ауыр хәлгә төшөрөү. *Ошо уҡ трибунала Рәшиттән алдағы председателде, ғилми институттан килгән белгес, тип маҡтап ҡуйғайнылар. Ләкин ул ышаныcты аҡламаны, хужалыҡты* ***ҡомға ултыртты.*** («Сов. Башҡ.»)

**ҡомға һеңгән һыу кеүек.** 1. Бик яҡшы үҙләштерелеү, хәтергә алыныу. *Гөлйөҙөмдөң хәтеренә барыһы ла,* ***ҡомға һеңгән һыу һымаҡ,*** *тиҙ үк һеңә, уның уҡыуға, яҙыуға һәләтлеге күҙгә күренеп арта бара.* (Ф. Исәнғолов.)

2. Бәрәкәтһеҙ булған, ҡулдан китеп тик торған мал-мөлкәт тураһында. *Атай малы, тота белмәһәң,* ***ҡомға һеңгән һыу кеүек*** *юҡ була.* (Һөйл.)

**ҡомдан арҡан ишеү (үреү).** Файҙаһыҙ эш менән булыу. [*Сәғит Вәлигә*:] — *Нишләп бында ятаһың, һаман* ***ҡомдан арҡан ишеп,*** *күлде күккә аҫырға әҙерләнәһеңме?* (А. Таһиров.) *Әгәр мәхрүм булһаң өмөттән, Вәғәҙәләр, янау, өгөттәр —* ***ҡомдан ишкән арҡан*** *кеүектәр.* (М. Кәрим.) ***Ҡомдан үргән арҡан*** *менән Батҡан инде һөйәркәйҙәр. Сыр-сыр килә меҫкен халыҡ, ҡото осҡан өйрәктәрҙәй.* (Т. Дәүләтбирҙина.)

*син.*: иләктән силәккә ауҙарыу, тиктән тун тышлау, бушты бушҡа бушатыу, бушты юҡҡа ауҙарыу, эт һуғарыу.

**ҡом елек** *һөйл.* Бик йомшаҡ, бушаҡ. [*Келәт*] *Яртылай ауышҡан, бүрәнәләре* ***ҡом елек*** *кеүек — ҡыуыш, саҡ ҡына ҡағылһаң, һап-һары сереге ҡойола башлай.* (Б. Бикбай.)

**ҡом күҙ(ле).** Үтә ҡомһоз. *Һөҙөмтәлә мулланың йырттҡыслығы,* ***ҡом күҙлелеге*** *асыҡланғас, ауылдан бер арба ла ғөшөр бирмәҫкә, Ғәйни тураһында үҙен судҡа биреү өҫтөнә, ауылдан ҡыуырға булдылар.* (Т. Йәнәби.)

**ҡом ҡанлы.** Ҡаты бәғерле, үтә лә шәфҡәтһеҙ. [*Көнһылыу*:] *Түрә, аҙ ғына ҡыҙғанһаңсы беҙҙе! Юҡ, был таш йөрәкле,* ***ҡом ҡанлы*** *кеше ишетергә лә теләмәй.* (Б. Бикбай.)

**ҡомо ҡойола башлаған** *кемдең.* Ҡартая, хәле бөтә башлаған. [*Зиннәтулла управляющий тураһында*:] — *Оло инде. Илленән уҙған,* ***ҡомо ҡойола башлаған*** *кеше,* — [*тине*]. (Ф. Әсәнов.)

**ҡорал күтәреү.** Һуғыш асыу.

**ҡорал ташлау*.** Ҡаршы яҡҡа бирелеү, ҡул күтәреү. ... *Германияның союздаштары бер-бер артлы* ***ҡорал ташланы.*** («Сов. Башҡ.»)

[*Рус телендәге «бросать оружие» берәмегенән.]

**ҡорбан булыу.** Ил-йорт, халыҡ өсөн, хаҡлыҡ хаҡына һәләк булыу, йәнде фиҙа ҡылыу. *Ватан өсөн ҡорбан булыу.*

**ҡоро йылғаға батырыу** *кемде.* Алдыҡ юл менән, йыумалап һәләкәткә дусар итеү. *Бөгөндән тотоп, ҡабып йоторға йөрөүселәр бар. Ҡайһыһылыр уны* ***ҡоро йылғаға батыра,*** *йәнәһе.* (Ғ. Ибраһимов.)

**ҡоро күҙҙә.** Көн аяҙ булған, ямғыр яумаған саҡта. — *Ниңә бер-ике көн тора бирмәйһегеҙ әле?* — ***Ҡоро күҙҙә*** *ҡайтып*

*ҡалырға кәрәк. Ямғыр яуып ебәрһә, йәйәү кешегә бысраҡта атлауы ҡыйын була, — тине Рәхмәт.* (Ж. Кейекбаев.)

**ҡоро кәүҙә.** Эшлекһеҙ кеше хаҡында асыу менән әйтелә.

**ҡоро ҡалмаҫ Ҡорбанбикә.** Һәр урынға етешергә, бер нәмәнән ситтә ҡалмаҫҡа тырышып яткан кешегә ҡарата әйтелә.

**ҡоро ҡалыу** *кемдән, нимәнән.* Мәхрүм булыу, буш ҡул тороп ҡалыу. ... *Яттарға күҙеңде һалма, Еңгәңдән* ***ҡоро ҡалма.*** (Б. Бикбай.) *Өмөт итһә кем кеше мөлкәтенән,* ***ҡоро ҡалыр*** *ул көнсө дәүләтенән.* (М. Өмөтбаев.)

**ҡоро ҡул менән** [килеү, ебәреү]. Буш ҡына, бер нимһеҙ. *Айбулат улай һин уйлағанса* ***ҡоро ҡул*** *ҡайтмаған. Ул донъясыл, бөтмөр егет. (Һ. Дәүләтшина.) Был егет тә әшләй-әшләй ҙә* ***ҡоро ҡул менән*** *ҡайтып китә.* (Әкиәттән.)

**ҡоро (буш) ҡыуыҡ.** Тыштан шәп күренеп, асылда мәғәнәһеҙ булған буш кеше хаҡында әйтелә. *Аҡыллы ағай-энеләр әйтә торғайнылар шул һине буш бәндә тип, йәғни* ***ҡоро ҡыуыҡ*** *тип, хаҡ һүҙ.* («Сов. Башҡ.»)

**ҡоро тарамыш.** Үтә ябыҡ, яшыҡ. *Шундай шартта Ҡорбан ағайығыҙҙың тәненә ниндәй ит ҡунһын да, ул ниңә* ***ҡоро тарамышҡа*** *әйләнмәһен, ти.* (С. Кулибай.)

*син.*: ҡаҡ һөйәк, төртһәң ҡоларға тора.

**ҡоро тел (һүҙ) <ҡуңалтаҡ итек>.** Матур һөйләп, эшен эшләй алмаған кешегә ҡарата мыҫҡыл менән әйтелә.

**ҡоро тотоу.** 1. Эштә, мөнәсәбәттә рәсмилек күрһәтеү. *Кириллов ҡоро ҡаршы алған кеүек, эште лә* ***ҡоро тотто...*** (Б. Бикбай.)

2. Эш-йомошто тиҙ-тиҙ генә ботор采оу, оҙаҡҡа һуҙмау.

**ҡоро (ҡаҡ) һөйәккә ҡалыу.** Бик нык ябығыу. — *Әйттем, йөрөмә, тинем. Сығып йөрөрлөк хәлең бармы ни инде һинең?* ***Ҡоро һөйәккә ҡалдың*** *да баһа хәҙер...* (З. Биишева.) *Көнө буйына ашамай йөрөгәнгә, хәлең бөткәндер. Былай йөрөһәң,* ***ҡоро һөйәккә ҡалырһың*** *әле.* (М. Тажи.)

**ҡоро һүҙ.** Буш вәғәҙә, эш булмау хаҡында. ***Ҡоро һүҙҙең*** *файҙаһы юҡ.* (Мәҡәл.)

**ҡортон ҡоҫтороу** *кемдең.* Кеше алдында фашлау, ғәйебен асыу. *Ә Ғибат менән үҙебеҙ һөйләшербеҙ. Уның* ***ҡортон ҡоҫторорға*** *ғына ҡулдан килер.* (Н. Мусин.) *Ун минут та үтмәгәндер, башлыҡтары Турыйән килеп етте. Уға ҡапҡас, үҙең беләһең:* ***ҡортоңдо ҡоҫтора****, йәнеңде алмай ҡуймай.* (И. Ғиззәтуллин.)

**ҡорт саҡҡан кеүек (саҡҡандай).** Ығы-зығы килеп, сәбәләнеп былай-тегеләй сабыулау.

**ҡорһаҡ киреү.** Бик шәп кеше булып маһайып маташыу.

**ҡорһаҡ асыу.** Бик нык асығыу. *Туйҙан ҡайттым да мин дә самауыр ҡуйҙым.* ***Ҡорһаҡ асҡан****, әйҙә, улым, бергәләп сәй эсеп алайыҡ.* (Әкиәттән.) *Шул ваҡыт өҙөлөп* ***ҡорһаҡ асты.*** (Д. Юлтый.)

**ҡорһаҡты онотоу**. Асыҡҡанды ни менәндер алдап тороу. *Сания, балалар **ҡорһаҡты онотһондар өсөн**, уйын менән, һүҙ менән алдаштырып көндәрен үткәрә*. (Б. Туйөмбәтов.)

**ҡорһаҡ (тамаҡ) ағын ҡайғыртыу**. Ашау тураһында хәстәрләү.

**ҡосаҡ йәйеү**. 1. Бер-берәүҙе ихлас ҡаршы алыу, ысын күңелдән ҡабул итеү.

2. Киң таралыу, солғап алыу. *Хәлдән тайған ярлы-етем халыҡ өҫтөнә дәһшәтле аслыҡ ҡомһоҙ **ҡосағын йәйҙе***. (З. Биишева.)

**ҡоҫҡоно килтереү**. Тәртибе, әрһеҙлеге менән йонсотоу, туйҙырыу.

*син*.: теңкәгә тейеү, йәнгә тейеү.

**ҡот алыныу**. Ҡапылдан ныҡ ҡурҡыу. ***Ҡото алынған Ғәлимә** илай ҙа алмай ... ҡатып ҡалды*. (Б. Бикбай.)

*син*.: ҡот осоу, ҡойолоп төшөү, ҡот ҡалмау.

**ҡот бот буйына китеү** *һөйл*. Бик ныҡ ҡурҡыу; шөрләү. *Әле һөйләгәндә генә ҡыҙыҡ һымаҡ, ағай-эне, ул саҡта **ҡот бот буйына китте***. (Н. Мусин.)

*син*.: шөр ебәреү.

**ҡот ҡалмау**. Ҡапыл ныҡ ҡурҡыу, һиҫкәнеп китеү.

*син*.: ҡот алыныу, ҡот осоу, ҡойолоп төшөү.

**ҡот ҡойоу**. Ныҡ ҡурҡҡан кешенең ауырыуын бөтөрөү өсөн ырымлау йолаһы. *Ауырыуың бары ҡурҡыуҙан ғына. Һиңә **ҡот ҡойорға** кәрәк*! (Ғ. Хәйри.) *Сәхиптең кесе улы сәсрәп ауырып киткән. [Барсын әбей] шуға **ҡот ҡойорға** барған. Эттән ҡурҡҡан икән, ҡурғашында ялбыр эт һүрәте төшә*. (Әкиәттән.)

**ҡот ҡуныу**. Муллыҡ, бәхет килеү. *Эйе, коллектив хужалыҡ ойошторолғас ҡына, **ҡот ҡунды** был яҡҡа*. («Сов. Башҡ.»)

**ҡотло аяғы менән <килһен>**. Бәхет, муллыҡ килтерһен (*яңы төшкән киленгә әйтелгән теләк*). — *Яраған, бик яраған. **Ҡотло аяғы менән килһен***. (Һ. Дәүләтшина.)

**ҡотло булһын**. Байрам, туй булғанда, берәй әйбер алғанда әйтелгән теләк. *Туй **ҡотло булһын**! Күлдәк **ҡотло булһын**, өҫтөңдә туҙһын*!

**ҡотон (йөрәген) алыу** *кемдең*. Ҡапыл ныҡ ҡурҡытыу. *Ҡыҙыҡайҙың **ҡотон алдың**, ҡалтырап төштө меҫкенкәй*. (Н. Иҙелбай.) *Биктимер һаҡсыларҙың **йөрәген ала** — ҡурҡыуҙан бөтөнләй ҡаушап төшәләр*. (Әкиәттән.) *Мин, йөк-фәләнем булмағас ни, шоферҙарҙың **ҡотон алған** был текәне өсөнсө тиҙлек менән «һә» тигәнсе менеп еттем*. (Н. Мусин.)

**ҡот осҡос (осорлоҡ)**. 1. Бик ҡурҡыныс, дәһшәтле. *Тик таңда эшелонда дневальный булып тороусы килтергән ҡыҫҡа хәбәр **ҡот осҡос** ине*. (Ф. Иҫәнғолов.) ***Ҡот осҡос** яңылыҡты ишетеп эсе бошҡан Хисматулла һүрелә башлаған ут эргәһенә килде*. (Я. Хамматов.)

2. Бик ныҡ, саманан тыш (*кире йәки ыңғай сифатты көсәйтеү өсөн ҡулланыла*). *Беҙҙең ятҡан өй* ***ҡот осҡос*** *йәмһеҙ, стеналары ҡара, түшәмдәре емерелгән...* (Д. Юлтый.)

**ҡот осоу (ҡубыу).** Ныҡ ҡурҡыу. [*Ҡарлуғас*:] *Уф... Атайым ҡайтып килер ҙә, һөйләшә алмай ҡалабыҙ икән тип,* ***ҡотом осто.*** (Б. Бикбай.) *Сәлимәкәй, мине мылтыҡлы көйө күргәс,* ***ҡото осҡайны.*** (З. Биишева.) *Нисек машинамды туҡтатып ултырырмын, тип шунда уҡ* ***ҡотом осто.*** (Ш. Янбаев.)

**ҡоштар осоп етмәҫ ер.** Бик алыҫ урын. ***Ҡоштар осоп етмәҫ* ***ергә китә һалдат баштары.*** (Халыҡ йырынан.)

*син.*: йәһәннәм аҫты, Ҡаф тау арты.

**ҡош телендәй** [хат, хәбәр]. Бик ҡыҫҡа ғына. *Ниғмәтйән сауҙагәр шундағы Таҡтағыуыш ауылындағы бер бай әшнәһенә* ***ҡош телендәй*** *генә мәктүп яҙҙы.* (Ф. Иҫәнғолов.) [*Бибинур ҡарсыҡ*:] *Мәхрүм итмә.* ***Ҡош телендәй*** *генә нәмә* [*хат*] *ебәр.* (Р. Низамов.)

**ҡояш йөҙөн күрмәйем.** Нимәгәлер ышандырырға тырышып, ант иткәндә әйтелә.

**ҡояш тиҫкәре (кире) яҡтан сығыр (сыҡмаһа ярар ине).** Ғәҙәтендә булмаған, тәбиғәте өсөн ят нәмә эшләгән кешегә ҡарата әйтелә. [*Ҡотлояр*:] *Ныязгол да улай иреп киткәс, ...* ***ҡояш кире яҡтан сыҡмаһа ярар ине.*** (Һ. Дәүләтшина.)

**ҡояшы байыу** *кемдең.* Даны һүнеү, көнө бөтөү. — *Валлаһи, тип әйтәйем, Өйрәнсектең көршәктәре Һөнәрсенекенән күберәк! — тип тә ебәргән. — Былай булғас, Һөнәрсенең дан* ***ҡояшы байыны!*** — *тип лаф орған.* (З. Биишева.)

**ҡояш һөңгө (тәртә) буйы күтәрелгәс.** Ҡояш сығып, офоҡтан байтаҡ алыҫлашҡас, иртә менән төш араһы.

**ҡөддәһенә сығыу.** 1. *нимәнең.* Бөтөрөү, туҙҙырыу. — *Килен булған кеше ҡайны ҡәйнә донъяһының* ***ҡөддәһенә сыҡмаға*** *килә бутта, — тип һөйләнеләр Түйралы ауылында.* (Ж. Кейекбаев.)

2. *кемдең.* Кәрәген биреү (*ҡурҡытып янағанда әйтелә*). ***Ҡөддәһенә сыҡмай*** *ҡуймайым мин уны.*

**ҡуҙға (утҡа) баҫҡан бесәй кеүек (шикелле),** ҡуҙға баҫҡандай булыу. Ныҡ тынғыһыҙланыу, сәбәләнеү. *Бай хәҙер,* ***утҡа баҫҡан бесәй шикелле,*** *ни эшләргә белмәй, аптырауҙа ҡала.* (Әкиәттән.) ... *Ул* [*мулла*] *үҙенең мәсете, ауылдың ҡарттары менән нисек етте шулай әл-йөл итеп* ***ҡуҙға баҫҡан бесәй кеүек*** *кенә тора.* (Ғ. Дәүләтшин.) *Сынбулатовтың көнө килеп терәлгәс кенә,* ***утҡа баҫҡан бесәй шикелле,*** *һикергеләнә, екергеләнә торған гәҙәте барлығын беләһең бит.* (М. Тажи.)

**ҡуҙын ҡуҙғатыу** *кемдең.* Асыуландырып, ҡыҙҙырып ебәреү.

**ҡуй (ҡуҙы) күҙ.** Ҙур һоро күҙ. ***Ҡуҙы күҙле*** *Буҙйегет был ерҙәрҙә бармы икән?* («Буҙйегет».)

**ҡуй өҫтөнә турғай оялай.** Бик бай, мул тормошҡа ҡарата әйтелә.

*син.*: эт башына эркет түгелеп тора.

**ҡуйынға алыу.** Үҙ яҡлауына, ҡарамағына алыу. *Ялҡында янған Украинанан ваҡытлыса күсеп киткән бик күп балалар һәм ҡатын-ҡыҙҙарҙы беҙҙең республика хеҙмәтсәндәре үҙ **ҡуйындарына алды**.* (Ғ. Әмири.)

**ҡуйында йылан аҫырау.** 1. Берәй кешегә ҡарата мәкер һаҡлау.

2. Яҡын күргән, бергә ашап-эскән кеше мәкер эшләгәндә йәки көтмәгәндә ҡаршы сыҡҡанда әйтелә. *Хәҙер үк, бөтә ауылға ишетелерлек итеп һөрән һалғыһы килде уның* [*Йәмиләнең*]: *«Эй, туғандар, **ҡуйыныбыҙҙа йылан аҫырап** ятҡырабыҙ бит!»* (Ф. Исәнголов.) *Имаметдин белеп әйтә шул, «**ҡуйынығыҙҙа йылан аҫырайһығыҙ**», ти. Ысын шул, ҡайһылай ҡаты сағаһың.* (Һ. Дәүләтшина.)

**ҡуйында таш йөрөтөү.** Кемгәлер ҡарата мәкер һаҡлау. *Бәғзе берәүҙәр шул уҡ замандарына ҡарата «теге саҡта» **ҡуйынында таш йөрөтөүҙәре** менән маҡтаналар — үҙҙәре совет власына суҡынып китеп хеҙмәт итһәләр ҙә.* (М. Кәрим.)

*син.*: ҡуйында йылан аҫырау 1.

**ҡул алмаш.** Бер эште ике кеше сиратлап, ярҙамлашып (*башҡарыу*).

**ҡул араһына инеү.** Эшкә ярай башлау, ярҙам итерлек булыу (*гәҙәттә, үҫеп килгән балаларға ҡарата*). [*Муллайән*] ***ҡул араһына инә** башлағас, атаһы уны ныҡлап эшкә екте.* (Ф. Исәнғолов.) *Бәхет менән үҫә алманығыҙ шул, балаҡайҙарым. Һеҙ үҫеп, **ҡул араһына инә** башлағас ҡына булмаһа...* (С. Ҡудаш.) *Һинең, исмаһам, **ҡул араһына инергә** һеңлең бар. Минең әсәй ҡарсыҡ бөтөнләй яңғыҙ бит.* (Х. Ибраһимов.)

**ҡул <арты> (ҡулы) ауыр** *кемдең.* Кемдеңдер һуңынан эшкә, мал-тыуарға уңышһыҙлыҡ килеүгә ҡарата әйтелә.

*ант.*: ҡул <арты> еңел.

**ҡул <арты> (ҡулы) еңел** *кемдең.* Берәй эш башҡарған, нәмә биргән кешенән һуң башҡаларға уңыш килеүгә ҡарата әйтелә. *Вәлим менән Халиҡ ҡарттарҙың **ҡул арты еңел** булды, төнгө сәғәт икеләрҙә бөтә колхоздан егерме биш мең һум аҡса йыйылды.* (С. Агиш.) [*Зәйтүнәнең*] ***ҡулы еңел** тиҙәр, ултыртҡан ағасы ерҙе яратып тамыр ебәрә.* (Ш. Янбаев.)

*ант.*: ҡул <арты> ауыр.

**ҡул арты еңел булһын** *кемдең.* Берәй кешенән һуң башҡарылған эш уңһын, алған нәмә ҡотло булһын тигән теләк һүҙе. *Урам тын. Бәхет ҡапҡаларын асам, **Еңел булһын ҡул артым.*** (Т. Йосопов.) ***Ҡул артың еңел булһын**, йәғни башҡалар ҙа тиҙ арала ҡайтып төшһөн.* (З. Ғәлимов.) *Тәүге покосты колхозсы, коммунист Сөнәғәт бабай Исәнбаев башлап ебәрҙе. — **Ҡул артың еңел булһын**, — тине уның артынан саба төшкән Рабиға апай.* («Сов. Башк.»)

**ҡул аҫтына инеү (кереү).** 1. Кемдеңдер иркенә буйһоноу. *Ғөмүмән, ауыл кулактары һәм ауыл ҡуштандары ойошҡан рәүештә хәрәкәт итәләр, ... фәҡирҙәр уларҙың* ***ҡул аҫтарына керә*** *баралар.* (Ш. Хоҙайбирҙин.)

2. Үҫеп етеп ярҙамсыға әйләнеү (*балаларға ҡарата*). *Сөнки нисәмә йыл — атаһы мәрхүмдең* ***ҡул аҫтына ингәне*** *бирле — ошо урмандарҙа йөрөргә, ҡайһы бер төндәрен дә урманда үткәрергә тура килгәйне бит уға* [*Байморатҡа*]. (Н. Мусин.)

**ҡул аҫтынан сығыу** *кемдең.* Буйһонмай башлау, үҙ иркенә эш итә башлау.

**ҡул аҫтында.** 1. Яҡында, эргәлә генә. *Ниндәй биҙәк төшөрөргә икән стенаға...* ***Ҡул аҫтында*** *трафарет юҡ.* («Ағиҙел».) *Кирбес һуғыу өсөн сырье үҙебеҙҙә,* ***ҡул аҫтында*** *ғына. Балсыҡ, ҡом һорап ситкә китеп йөрөүҙең кәрәге юҡ.* («Сов. Башҡ.») — *Эш ҡоралдарың һәр саҡ* ***ҡул аҫтында*** *торһон, — ти* [*Тимерғәли ағай*]. (Ә. Зәйнуллин.)

2. Буйһонған хәлдә, ҡарамаҡта. *Батша кинйә ҡыҙын биреү өсөн,* ***ҡул аҫтындағы*** *бөтә халыҡты йыя ...* (Әкиәттән.) *Батша хәҙрәттәре, үҙенең бөтә* ***ҡул аҫтындағы*** *халыҡтарын кафыр дошман яуынан ватанды һаҡларға саҡырып, фарман ебәргән.* (Һ. Дәүләтшина.)

**ҡул-аяҡты бәйләү.** Эштә, хәрәкәттә иректе сикләү.

**ҡул барыу** *нимәгә, ни эшләргә.* 1. Ниҙер башҡарырға ҡыйыулыҡ етеү. *Башҡалар өсөн үле булһа ла, Фәриҙә өсөн өйҙөң хужаһы тере бит. Уның донъяһын туҙҙырырға нисек* ***ҡул барһын.*** (Р. Солтанғәрәев.) *Шундай файҙалары булған атты* ***ҡулың барып*** *нисек һуяһың*! (М. Ғафури.)

2. Ниҙер башҡарырға теләк булыу (*күберәк юҡлыҡ формаһында ҡулланыла*). *Ә бына Әфҡәт нисектер икенсерәк кеше булып сыҡты. Эшкә артыҡ* ***ҡулы барманы.*** (Ә. Вахитов.) *Артҡан ер юҡ, эшкә* ***ҡул бармай.*** («Сов. Башҡ.»)

**ҡул бысратыу (буяу).** Кемгәлер ерәнеп тотоноу, һуғыу, ҡул тейҙереү. ***Ҡулымды бысратмаҫ*** *элек юғал бынан.* (Ә. Бикчәнтәев.) [*Тимер Шәүәлигә*:] *Ҡурҡма, мин һиңә* ***ҡул бысратмам,*** *ни япраҡ һымаҡ ҡалтырайһың*? (Б. Бикбай.) — *Ташла, Әхтәм, кемгә* ***ҡул бысратаһың***? — *тип бышылданы уға Федор.* (В. Исхаҡов.)

**ҡулға алыу** *кемде.* 1. Тәртипкә килтереү, тыйыу. *Директорҙың ыңғайын һиҙеп алған Рафиҡ үҙен* ***ҡулға алды.*** (Ә. Вахитов.) *Шәйехебеҙ беҙҙе* ***ҡулға ала*** *тиҙәр, беҙҙе ул тура юлға һала, тиҙәр.* (Бәйеттән.)

2. Иркенән мәхрүм итеү, һаҡ аҫтына алыу. *Биш кеше* ***ҡулға алынды,*** *ҡалғандары өйҙәренә таратылды.* (Я. Хамматов.)

**ҡулға инеү (төшөү).** 1. Милек булып килеү, кемдекенәлер әйләнеү (*аҡса, мал хаҡында*). *Ә* ***ҡулға ингән*** *аҡса — бесәй төкөрөгө.* (Ғ. Лоҡманов.)

2. Ҡул аҫтына эләгеү (*хөкөм, кеше хаҡында*). *Бер саҡ Врангель шунан [Ай-Петриҙан] ташлаған* ***ҡулға төшкән*** *партизандарҙы.* (Ғ. Сәләм.) *Хәҙер бөтә власть үҙ* ***ҡулыма инеп*** *торған саҡта, ни тип унан көн элгәре шөрләп ултырайым, ти.* (Һ. Дәүләтшина.)

**ҡулға ирек биреү***. Үҙеңде тыя алмай кешегә ҡул тейҙереп барыу. *Бына әле, күҙе ташҡан, ауыл ҡыҙы тигәс тә, хәҙер үк эйәреп китеүгә һап итеп тора тип уйлайҙыр әле!* ***Ҡулдарына ирек бирә.*** (Ф. Иҫәнғолов.)

[* Рус телендәге «давать волю рукам» берәмегенән.]

**ҡулға ла йоҡмау.** Һиҙелмәй ҙә ҡалыу, тиҙ генә бөтөү. *Кискә тиклем Фәхри ағайҙың сабынлығы* ***ҡулға ла йоҡмай*** *ҡала ул.* (Ә. Чаныш.)

**ҡулға төшөрөү** *нимәне*. Ниндәйҙер законһыҙ юл менән үҙеңдеке итеү, үҙ милкеңә әйләндереү. *Базанан барып алаһыңмы, таныш-белештәрең аша* ***ҡулға төшөрәһеңме*** *— табып кей баштыңа бәҫле бүрек.* (Ш. Янбаев.) *Нәфсе аҙҙырыусан була, тиҙәр. Толстованың нәфсеһе артҡандан-арта бара. Килоһына 30-ар тиндән түләп, 2 центнерлыҡ уйнаҡлап торған тайҙы* ***ҡулға төшөрә.*** («Сов. Башҡ.»)

**ҡул башлау.** Эште, хәрәкәтте башлап ебәреү. *Ысын батыр тар ерҙә* ***ҡул башлар****, ысын сәсән тар ерҙә һүҙ башлар.* (Мәҡәл.)

**ҡул биреү** *дини*. Юғары дин эшмәкәренән муллалыҡҡа фатиха алыу. *1910 йылдың ҡышында, ишанға* ***ҡул бирергә*** *барыусы үҙебеҙҙең ауыл Сафиулла ағайға ултыртып, мине Стәрлебаш ауылына уҡырға ебәрҙеләр.* (Т. Йәнәби.)

**ҡулға-ҡул тотоноп** [эшләү]. Берҙәм, бер төптән (*ниҙер башҡарыу.)*

**ҡулдан эш төшөү.** Эш, бурыс кәмеү. *Улы ҙурайғас, ҡарттың* ***ҡулынан эш төштө.*** («Сов. Башҡ.»)

**ҡулдан килгән тиклем.** Булдыра алғансы, хәлдән килгәнсе (*ярҙам хаҡында*).

**ҡулдан килеү.** Булдыра, башҡарып сыға алыу. [*Иштуған*:] — *Һин, еңгә, власть бит. Бойороҡ бирергә* ***ҡулынан килгән*** *кешегә һуҡраныу, зарланыу килешмәй...* (З. Биишева.) *Хөсәйен — оҫталығы тирә-яҡта танылған данлыҡлы кеше. Уның* ***ҡулынан килмәгәне*** *юҡ.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Көнләште ул әсе әрнеү менән йән дуҫының сихри йырынан. Эх, шул йырҙар һымаҡ йыр яҙырға* ***Килһә*** *икән уның* ***ҡулынан...*** (Р. Сафин.)

**ҡулдан китеү (ысҡыныу)**. 1. Буйһоноуҙан сығыу, тыңламай башлау. *Азамат үҙе генә өйҙә ултыра. Ағаһы һуңғы ваҡытта бөтөнләй* ***ҡулдан ысҡынды.*** *Урамдан ҡайтып инә белмәй.* (Ә. Бикчәнтәев.)

2. Ҡарамаҡтан китеү, ситкә тайыу. **Ҡулдан ысҡындырыу:** *Мал аҙығын етерлек әҙерләү өсөн ҡурпы ҙур өҫтәмә сығанаҡ булып тора. Быны ла* ***ҡулдан ысҡындырырға*** *ярамай.* («Сов. Башҡ.»)

**ҡулда ут уйнау**. Дәрт ташып тороу. *Йәштәр* ***ҡулдарында ут уйнаталар***. («Сов. Башҡ.»)

**ҡулды алыу**. Оронмаҫ, теймәҫ булыу.

**ҡулды ҡыҫҡартыу**. Баш-баштаҡлыҡты, тәртип боҙоуҙы тыйыу.

**ҡулды тотоу**. Тотҡарлыҡ итеү, эшкә ҡамасаулау.

**ҡул еле**. Ваҡ-төйәк эш-йомошҡа түккән көс. [*Сәхипгәрәй*:] *Ниңә һин, булмай ҙа булмай тип тартҡылашаһың? Әллә* ***ҡул елеңде*** *ҡайтармаҫ тип ҡурҡаһыңмы*? (И. Ғиззәтуллин.)

**ҡул етеү** *кемгә, нимәгә*. Әләктерергә, ҡулға алырға өлгәшеү. [*Граф*] *тиккә генә шөрләмәгән, Пугачевтың бында ысынлап та* ***ҡулы еткән***. («Сов. Башҡ.»)

**ҡул етмәү** *нимәгә*. Эшләп өлгөрә алмау. *Ситән үрергә бағаналары ла етерлек, сыбығы ла килгән, ҡыйығына ла ағастары әҙер. Ә шуларҙы аҙбар итеп өйөргә* ***ҡул етмәй*** *ҙә ҡуя*. (Ә. Гәрәев.) — *Баҫыуҙы ҡатуҡларға* ***ҡул етмәне***... — *тине агроном*. («Сов. Башҡ.»)

**ҡул килеү**. Уңай булыу, ыңғай булып ҡына тороу.

**ҡул күтәреү**. 1. Һуғыу. [*Килен*] *Тора-бара тамам шашты,* ***ҡул күтәреүгә*** *тиклем барып етте*. («Сов. Башҡ.») [*Сәлим Кәримгә*:] *Ғиззәт ағайҙың ғүмерендә лә кешегә* ***ҡул күтәргәне*** *юҡ*. (Х. Ибраһимов.)

2. Еңелеүҙе, бирелеүҙе белдереү (*ике ҡулды юғары күтәреп*).

**ҡул ҡалыу**. Эште кәрәкһеҙ һанау. *Күршегә ярҙамдан ҡулың ҡалмаҫ.*

**ҡул ҡаушырып** [йөрөү, ултырыу]. Бер ни ҙә эшләмәү, бушҡа ғүмер уҙғарыу. — *Йә, һалдат,* — *тине Яубаҫаров.* — ***Ҡул ҡаушырып*** *йөрөү һиңә төҫ түгел. Халыҡ алдына сығайыҡ*. (Х. Ғиләжев.) — *Әлбиттә,* ***ҡул ҡаушырып*** *ултырырға беҙҙең хаҡыбыҙ юҡ. Башҡорт халҡының үткән тормошо әйтеп бөтөргөһөҙ ауыр һәм ғазаплы ине. Ләкин халыҡ һыҡтап, күҙ йәше түгеп,* ***ҡул ҡаушырып*** *ҡына ултырмаған*. (Ә. Чаныш.)

*син.*: бот күтәреп ятыу.

**ҡул ҡуйыу**. 1. Документҡа исем-фамилияңды яҙыу (*ниҙелер раҫлау маҡсатында*). *Ведомосҡа ҡул ҡуйыу.*

*син.*: ҡул <тамғаһын> һалыу.

2. Кешенең эш-ҡылығын, ниәтен хуп күреү, ҡеүәтләү. *Билалдың шулай таныштырыуына Шадрин: «Әһә, шулай икән» һүҙҙәре менән* ***ҡул ҡуйып*** *барҙы*. (А. Таһиров.) *Закон бар бит әле. Булмаҫ, атай. Мин бындай эштәргә* ***ҡул ҡуя*** *алмайым*. (Һ. Дәүләтшина.)

**ҡул ҡысыу**. 1. Һуғышырға теләп ҡысынып тороу. [*Баян*:] *Ҡараҡтар ҡайҙа? Ух,* ***ҡул ҡысый***! (М. Кәрим.)

2. Берәй эште эшләргә ашҡынып тороу. *Чиновниктың ... берәй ерҙә тәртип урынлаштырырға, станция смотрителенең йәки ылаусыларҙың шәхесен соҡсоноп тикшерергә* ***ҡулы ҡысып тора***. (Н. Ғоголь. Ф. Иҫәнғолов тәржемәһе.)

**ҡул менән һыпырып алғандай (ташлағандай) булыу.** Ҡапыл ғына тотошлайы менән юғалыу (*йоҡо, арыу һ. б. хаҡында*). *Абдулла һыуҙан бөтөнләй күңеле күтәрелеп сыҡты, арыуы* ***ҡул менән һыпырып алғандай*** *осто.* («Ағиҙел».) *Аяғындағы алтмыш йылдан ашыу һыҙлаған яраһы уяныуға әрнеүҙән туҡтаған. Әйтерһең,* ***ҡул менән һыпырып алып ташлағандар.*** (М. Ямалетдинов.)

**ҡул осонда.** Эргәлә, яҡында ғына. [*Ғариф староста*:] *Мин дәхи ҙә шуны әйтәм: балаç, кейеҙ һәр бер кешелә барҙыр, аларҙы* ***ҡул осонда*** *тотоу кәрәк.* (Ж. Кейекбаев.)

**ҡул тамғаһын һалыу (ҡуйыу, һуғыу).** Имзаны яҙын ҡуйыу, исем-фамилияңды яҙыу.

*син.*: ҡул ҡуйыу.

**ҡул тейҙереү** 1. *кемгә.* Һуғыу, туҡмау.

2. *нимәгә.* Алыу, тотоноу.

3. *кемдең* (*күберәк юҡлыҡ формаһында*). Эшләү, башҡарыу. *Балалар эште бүлешеп башҡаралар, әсә* ***ҡулына тейҙермәçкә*** *тырышалар.* («Сов. Башҡ.»)

**ҡул тейеү (йәки теймәү).** Ниҙер эшләргә ваҡыт, форсат булыу (*йәки булмау*). *Мин Өфөгә барып сығырға* ***ҡул теймәүен*** *яҙам.* (С. Кулибай.) — *Кисә генә ике машина утын килтерткәйнем. Кистән өйөп ҡуйырға* ***ҡул теймәне.*** (Ф. Иçәнғолов.)

**ҡул түгел.** Уңайһыҙ, яйһыҙ, йәмһеҙ. — *Хәҙер кейемдәреңде һал, хәйерсе, улар һиңә* ***ҡул түгел,*** — *тип ҡысҡырҙы* [*ул Ғәләүгә ҡарап*]. (Т. Йәнәби.)

**ҡул тығыу** *нимәгә.* 1. Кәрәкмәгән, ярамаған эшкә ҡыçылыу. *Производство тармағына кем дә* ***ҡул тыға ала,*** *ә идеологик эш һәр кемдең дә ҡулынан килеп бөтмәй.* («Сов. Башҡ.»)

2. Үҙләштерергә ынтылыу. *Ғәбит ағай ... колхоз милкенә* ***ҡул тыҡмай*** *торған кеше ине.* (К. Мәргән.)

**ҡул һалыу.** 1. *нимәгә.* Һорамай алыу, урлау. *Был һайланты тамғалы ағастарға урмандың яҙылмаған законы буйынса берәүҙең дә* ***ҡул һалырға*** *хаҡы юҡ.* (Ж. Кейекбаев.) [*Иçәнгилде*:] *Кеше малына* ***ҡул һалырға*** *белгәнһең бит!* (К. Мәргән.)

2. *кемгә.* Кешене, йәки үҙен үҙе үлтереү. *Алла һаҡлаһын, аралайым тип тығылып, атайыңдың үҙенә* ***ҡул һалып*** *ҡуймаһындар.* (Ф. Иçәнғолов.)

**ҡул һелтәп** [ҡарау]. Иғтибар итмәү, әһәмиәт бирмәү. *Өфөгә, Ырымбурға барған һайын губком етәкселәренә был хаҡта әйтә килдем. Улар мин әйткәнгә әһәмиәт итмәнеләр.* ***Ҡул һелтәп*** *ҡаранылар.* (Я. Хамматов.) *Ғөмүмән, тарихҡа* ***ҡул һелтәп*** *ҡарау үҙ халҡыңдың биографияһына ғәмһеҙлек күрһәтеүҙер ул.* («Сов. Башҡ.»)

**ҡул һелтәү** *кемгә, нимәгә.* Ғәмһеҙ мөнәсәбәт күрһәтеү, өмөтһөҙ тип ҡарап, иғтибар бирмәү. *Ҡаршылыҡтар һаман йәшәйҙәр, Уны күрмәү, Уны аңламау —* ***Ҡулды һелтәү*** *ерҙә йәшәүҙән.* (Д. Юлтый.) *Әптелғәлим донъя эштәренә* ***ҡул һелтәй...***

(Ф. Исәнғолов.) *Зәйнәғәбдин иһә өй эшенә күптән **ҡул һелтәгән**, уға беште ни ҙә көйҙө ни.* («Сов. Башҡ.») *Барыһына **ҡул һелтәнем**, ятам тынып ҡына.* (С. Әбүзәр.)

**ҡул һуғышыу**. Һатыу-алыуҙа хаҡ ҡуйышып килешеү. *Алыусылары ла, һатыусылары ла шау килеп һөйләшә, **ҡул һуғыша**, алдай, алдана.* (Ғ. Дәүләтшин.)

**ҡул һуҙыу** 1. *нимәгә.* Хаҡы булмағанға ымһыныу, үҙенеке итергә тырышыу. *Күп тә үтмәй, беҙҙең ергә ситтәр **ҡул һуҙа**. Оло улдарын тәүҙә оҙата Шәмсиә.* (Ә. Вахитов.) *Әммә шул ғәжәпләндерә беҙҙе: шундай ҙур ағайҙар, ошондай ҡарарҙың барлығын белә тороп, нисек ояламай дәүләт милкенә **ҡул һуҙалар** икән?* («Сов. Башҡ.») *Тәбиғәт байлығына **ҡул һуҙыусы** хәсрәт һунарсыларға беҙҙең йәмғиәттә урын булырға тейеш түгел.* («Сов. Башҡ.»)

2. *кемгә.* Үҙенә алырға тырышып, ымһыныу (*ҡатын ҡыҙға.*)

**ҡул һырты менән доға ҡылыу**. Насар теләк теләп, ҡулдың һырт яғы менән битте һыйпау (*элекке ышаныуҙан килә*).

**ҡул шымарыу**. Ниндәйҙер насар эшкә ныҡ өйрәнеп китеү. *Ә мулланың үҙенең дә бысраҡ эштә **ҡул шымарған** инде: «Ярар, — ти абыстайға, — таң атыуға он алдыңда булыр!»* (Б. Бикбай.)

**ҡулы артына етмәй** *кемдең.* Ишекте, ҡапҡаны ябып йөрөмәгән кешегә ҡарата әйтелә. *Магазиндарҙың һәм ҙур өйҙәрҙең тышҡы ишектәре бер ваҡытта ла йүнләп ябылмағанын күргән һайын Ҡотлойов, **ҡулдары арттарына етмәй**, тип ысынлап бошона.* (Ә. Вәли.)

**ҡулы йомоҡ (кәкре, шуҡ)** *кемдең.* Ҡулсыр, кеше нәмәһенә тейеп барыусан. *Директор мәктәп ихтыяждарына ғәмһеҙ булһа ла, үҙе тураһында һис тә онотмай икән. — Һеҙҙең **ҡулығыҙ йомоҡ**, Әҙһәм Садиҡович, — тигән ғәйепләү ташланы уға уҡытыусы Таһиров.* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: ҡулы оҙон, ҡулы тик тормай.

**ҡулы ҡалмаҫ <ине>** *кемдең.* Эшләй алғанын да эшләмәгән, кешегә ярҙам итергә теләмәгән кешегә ҡарата ғәйепләү менән әйтелә. *Ярҙам итһәң, **ҡулың ҡалыр** инеме ни?* [*Фәриҙә*:] — *Һүҙ ыңғайында әйтәйем әле: өҫ-башығыҙ ҙа ҡатҡан күренә. Өйөгөҙҙә лә һирәк булаһығыҙ, ахыры. Тартынып тормағыҙ, беребеҙҙең дә **ҡулыбыҙ ҡалмаҫ**.* (Ғ. Ибраһимов.)

**ҡулы ҡороһон** *кемдең.* Йәбере тейгән кешегә ҡарата әрнеп әйтелгән ҡарғау һүҙе.

**ҡулы ҡулға теймәй** *кемдең.* Эшкә бик шәп. *Айбулат менән Гөлйөҙөм икәүһе лә бик шәп ураҡсы. Улар ураҡ урған саҡта **ҡулдары ҡулға теймәй**.* (Һ. Дәүләтшина.)

*син.*: ҡулына күҙ эйәрмәй.

**ҡулына <ҡарап> ҡалыу** *кемдең.* Тәрбиәһенә, ҡарамағына күсеү (*етем бала, ҡараусыһыҙ, ғәрип кешеләр хаҡында*). *Балалар ҡулына ҡалыу.*

**ҡулынан тотоу** *кемдең*. Мутлыгын фашлау, урлашыуын асыу. *Халыҡ контролерҙары ... оятын юғалтҡан хәсрәт-мөдир Федорованың бысраҡ* ***ҡулынан тоттолар****. Уның мутлыҡтары асыла*. («Сов. Башҡ.»)

**ҡулынан үтеү** *кемдең*. Ҡарамағында булыу. *Артабан Ибраһим ағай егерменән ашыу госпиталдә дауаланды, тиҫтәләгән врачтар* ***ҡулынан үтте****.* («Сов. Башҡ.»)

**ҡулын йыумаған**. Кеше әйберен урларга әүәҫ, ҡулсыр.

*син.*: ҡулы оҙон (шуҡ).

**ҡулын ҡыҫҡартыу** *кемдең*. Иркен сикләп, тыйып тороу. *Үсләшмәне Зәйтүнә, шулай ҙа Әйүповтың мутлыҡтарын күрмәй үтергә теләмәне. Уның берәй шомлоғон һиҙеп ҡалһа, шунда уҡ кәрәген әйтеп, Минулланың* ***ҡулын ҡыҫҡарта** торҙо.* (Ғ. Ибраһимов.)

**ҡулын тотоу** *кемдең*. Эшләргә, ни менәндер шөғөлләнергә ирек бирмәү, ваҡытты алыу. *Бына ике бала ғына* ***ҡулымды тота****. Булмаһа, бөгөндән ташлап сығып китер инем*! (Һ. Дәүләтшина.)

**ҡулыңдан кинән**. Яҡшылыҡ эшләгән, ярҙамсыл кешегә рәхмәт йөҙөнән әйтелә.

**ҡулы(ң) ҡыҫҡа**. Булдыра алмаҫһың (*янауға ҡаршы әйтелә*). [*Хажисолтан бай*:] — *Ата-әсәң өйрәтмәгәнде өйрәтермен мин һиңә*! *Артыңдан көл һиптереп ауылдан ҡыуҙыртасаҡмын*. — ***Ҡулың ҡыҫҡа****, бай. Хәҙер Николай заманы түгел һиңә*! (Я. Хамматов.)

**ҡулы оҙон (тик тормай)** *кемдең*. 1. Кеше нәмәһенә тейеп бара торган; ҡулсыр.

*син.*: ҡулы үҙенә кәкре, ҡулын йыумаған.

2. Ҡулын тыя белмәгән, кешегә ҡағылып, тотоноп барған.

**ҡулы үҙенә <табан> кәкре** *кемдең*. Кеше нәмәһенә тейеүсән; ҡулсыр, уғры.

*син. ҡар.*: ҡулы оҙон.

**ҡул ялғау**. Күмәкләшеп, ярҙамлашып бирҙәм эшләү.

**ҡурайына бейеү** *кемдең*. Ҡуштанлыҡ күрһәтеп, ярарға тырышып ҡына тороу. [*Мәрйәм*:] *Ирҙәр* ***ҡурайына бейей** торған заман түгел, беҙ үҙебеҙ колхозда ҙур көс хәҙер.* (М. Тажи.) *Нәүшарбан үҙ* ***ҡурайына бейегәндәрҙе** генә ярата.* (Ә. Мирзаһитов.) *Улар байҙар* ***ҡурайына бейейҙәр** һәм улар файҙаһына кәрәк булғандың бөтәһен дә ... табалар.* (Б. Хәсән.)

**ҡурғаш иретеп ҡойған һымаҡ**. Баш нык ауыртып, ауырайтып тороу. *Саҡай уфылдап ҡуҙғала алмай ята бирҙе. Тотош тәне һыҙлай уның, башы* ***ҡурғаш иретеп ҡойған һымаҡ** ауыр, туң.* (Б. Бикбай.)

**ҡурғау тотоу**. Яуга ҡаршы һаҡ ҡуйыу. ***Ҡурғау тотмай** дошман ... кем һуң башын һалып киҫтерһен.* (Т. Хәйбуллин.)

**ҡурҡыуҙың ни икәнен белмәү**. Бик ҡыйыу булыу. *Был замандың балалары бит улар, **ҡурҡыуҙың ни икәнен дә белмәйҙәр**...* (Һ. Дәүләтшина.)

**ҡурсаҡ кеүек**. Бик матур, ҡупшы ҡатын-ҡыҙға ҡарата һоҡланып әйтелә.

**ҡурҡаҡ ҡуян**. Үтә ҡурҡып, ҡалтырап ҡына торған кешегә ҡарата мыҫҡыллап әйтелә.

*син.*: үҙ шәүләһенән ҡурҡа, ҡуян йөрәкле.

*ант.*: батыр йөрәкле, арыҫлан йөрәкле.

**ҡуш боғаҙ**. Буш хәбәр һөйләп йөрөргә яратҡан кешегә ҡарата асыу менән әйтелә.

**ҡуш йөрәк(ле); йөрәге ҡуш** *кемдең*. Ҡурҡыу белмәҫ, үтә лә батыр, ҡыйыу. *Таиба әбей уйын Закирҙан Хамматҡа күсерергә тырышты. «Бына, исмаһам, арыҫлан ир... **Ҡуш йөрәкле** баһадир...»* (З. Биишева.) [*Әхмәҙулла бабай*:] *Ул батыр егет беҙҙең ауылдан, минең тиңдәшем Сәлих булған... Ир намыҫлы кеше ине ул, **ҡуш йөрәкле**...* (Ә. Вахитов.) ... *Батыр булып йәшәһен, Сәйет, Күсемгә оҡшаһын, **йөрәктәре ҡуш** булһын...* (М. Буранғолов.)

*син*. арыҫлан йөрәкле.

*ант.*: ҡуян йөрәкле, ҡурҡаҡ ҡуян.

**ҡуш (дүрт) ҡуллап (ҡул менән)** [ҡабул итеү, риза булыу һ. б.]. Бик теләп, риза булып (*башҡарыу*). [*Йомағолов*] *Николай Антоновичты **ҡуш ҡуллап** ҡаршы алып, яуаплы эшкә тәғәйенләү урынына, һөйләшеп тә торманы.* (Ф. Иҫәнголов.) *Рәхим ит, **дүрт ҡуллап** ҡаршы алабыҙ.* (М. Кәрим.) ***Ҡуш ҡул** менән, **дүрт** күҙ менән көттөк һеҙҙе яҙҙа, һыуһап көттөк, сарсап көттөк, ...ҡыуан яҙҙа.* (Р. Ғарипов.)

**ҡуян йөрәк(ле)**. Бик ҡурҡаҡ, дерелдәп торған кешегә ҡарата әйтелә. [*Әминә*:] *Ҡурҡаҡ һанайһыңмы? Хата уйың! Бар һулышы менән һөйә белгән ҡатын **ҡуян йөрәкле** түгел. Барамын!* (Б. Бикбай.) [*Ҡолсобай Хисмәтуллаға*:] — *Мәйтәм, һине шундай **ҡуян йөрәкле** кеше булырһың тимәгәйнем. Уғата ҡурҡаҡ икәнһең.* (Я. Хамматов.) *Азамат башын ҡаҡты. Бынан һуң артҡа сигенһәң, ғүмергә «ҡурҡаҡ» исемен тағырһың, шуны ул яҡшы аңлай. Кемдең генә **ҡуян йөрәк** булаһы килә!* (Ә. Бикчәнтәев.)

*син.*: ҡурҡаҡ ҡуян.

**ҡыҙғанғаның ҡыҙыл еткә**. Мал-мөлкәтте, үтә йәлләп, бушҡа киткәндә, юҡҡа сыҡҡанда әйтелә.

**ҡыҙған табаға баҫтырыу (табала бейетеү)** *кемде*. Бик ҡаты итеп әрләү. *Ярты сәғәттән ашыу Рәшит ағай мине **ҡыҙған табала бейетте** лә аҙаҡтан йәлләне, буғай...* (М. Искәндәр.)

**ҡыҙғаныуға ҡаршы**. Булыуы теләнмәһә лә ғәмәлгә килгән эш-хәлгә ҡарата әйтелә. [*Ғәйзулла*] *сатанлай-сатанлай, Хәким йәшәгән өйгә барып инде. **Ҡыҙғаныуға ҡаршы**, һалҡын өйҙөң*

*ҡараңғы мөйөшөндә Хәкимдең иң кесе улы Әптрәхимдән башҡа кешене осрата алманы.* (Я. Хамматов.)

**ҡыҙыл ауыҙ.** 1. Үҫеп етмәгән, етлекмәгән (*кәмһетеберәк әйтелә*). *Егеттән өсөнсө мәртәбә килгән яусыны: — «**Ҡыҙыл ауыҙ** зимагорҙар өсөн ҡыҙ үҫтермәнем», — тип бороп ҡайтарҙы ул.* (М. Хәйҙәров.)

2. Властҡа ҡаршы һүҙ күтәргән кешегә ҡарата әйтелә. *Бөтәһен һөрөп сығарырға кәрәк ул **ҡыҙыл ауыҙҙарҙың**! — тип ҡысҡырҙы мәзин.* (Ғ. Ғүмәр.)

**ҡыҙыл ҡар яуғас (яуыр).** Бер ҡасан да үтәлмәй, булмай торған эш-хәл тураһында әйтелә. [*Фәһимә*:] *Өйләнәйем тип Рәхим ауыҙ асҡанды көтһәң, **ҡыҙыл ҡар яуыр**.* (Ш. Янбаев.) [*Байрамбикә*:] *Етембай менән минең туйыым булғансы, **ҡыҙыл ҡар яуып ҡуймаҫмы икән**?* (М. Хәйҙәров.)

*син.*: дөйә ҡойроғо ерғә тейгәс.

**ҡыҙыл ҡоҙа.** Яңы власть, совет эше өсөн өгөтләп йөрөүселәр. *Коллективлашыу тураһында йыйылыштарҙа һөйләү менән генә ҡәнәғәтләнмәйенсә, «**ҡыҙыл ҡоҙалар**» ысулын ҡулландыҡ. Һәр ағза һүҙе үткән кешенең өйөнә бара. Ҡатыны, балалары алдында коллективҡа ағза булып инергә өндәй, вәғәҙә ала.* («Сов. Башҡ.»)

**ҡыҙыл сәкмән йәйгән кеүек (төҫлө, һымаҡ).** Еләк бик күп булған урынға ҡарата әйтелә. *Беҙҙең һай соҡорҙа еләк тәгәрәп бешә. Урыны-урыны менән **ҡыҙыл сәкмән йәйгән төҫлө**, тотош ҡыҙарып ята.* (М. Кәрим.)

**ҡыҙыл таҡта*.** Яҡшы эш тураһында маҡтап яҙа торған урын, хеҙмәт таҡтаһы. [*Ибрай Ғилманға*:] *Орлоҡ тулған... Беҙҙең ауыл хәҙер яҙылған, ти **ҡыҙыл таҡтаға**.* (С. Ҡудаш.)

[*30-сы йылдарҙа күмәк хеҙмәт тәжрибәһенән сыҡҡан һүҙбәйләнеш.]

**ҡыҙыл туй*.** Яңыса үткәрелгән йәштәр туйы. ***Ҡыҙыл туй** бит ул — былғаса йәшәп килгән ҡыҙ һатыу кеүек иң хурлыҡлы йолаға ҡаршы ут асыу тигән һүҙ*! (З. Биишева.)

[*Совет дәүерендә тыуған яңы йола.]

**ҡыҙыл ылау.** Тәүге уңышты ҙур тантана менән күмәк атҡа йәки машинаға тейәп ҡалаға, элеваторға оҙатыу.

**ҡыҙыл ыштан кейҙереү** *һөйл.* Ошаҡ, хөсөт йөрөткән кешегә ҡарата асыу менән әйтелә. [*Сәсән Боҫтанға*:] *Харап булған икән, әйтә кур, **ҡыҙыл ыштан кейҙереп** сығарыр.* (Б. Бикбай.)

**ҡыҙыл эт ашаһын.** Харам малға йәки үтә һаран кешенең нәмәһенә ҡарата әйтелә. *Үҙенә яҙған мал булмаһын, урлағанын **ҡыҙыл эт ашаһын**.* (Һөйл.)

**ҡыҙыл этәс ебәреү (ҡундырыу)*** *нимәгә.* Ут һалыу, яндырыу. *Ҡайҙа һуң, ни ҡарай янғын һүндереүселәр? Ниңә ебәрелгән **ҡыҙыл этәсте** тыймайҙар?* («Сов. Башҡ.») **Ҡыҙыл этәс ҡуныу:** *Берҙән-бер көндө Асанбайҙың яҙмышын улар* [*халыҡ*] *үҙҙәре хәл*

*итә. Унының мөлкәтенә **ҡыҙыл әтәс ҡуна**, пар тирмәне яныпкүккә оса.* (К. Кинйәбулатова.)

[*Рус телендәге «пустить красного петуха» берәмегенән.]

**ҡыҙыл юл***. Юл башын уңғараҡ тартып яҙылған юл. *Яны фекерҙе абзацтан, икенсе төрлө әйткәндә, **ҡыҙыл юлдан** башлап яҙыу мотлаҡ.* («Сов. Башҡ.»)

[*Рус телендәге «красная строка» берәмегенән.]

**ҡыҙыу ҡанлы (ҡаны ҡыҙыу)** *кемдең*. Холҡо менән үтә яндырай, ҡыҙыу. *Гел ут тирәһендә уралғас та, әллә **ҡыҙыу ҡанлы** булырға тигәнме?* (Б. Бикбай.) *Закир үҙенә хас күп уйлап тормаусанлыҡ, **ҡыҙыу ҡанлылыҡ** менән көрәш эсендә ҡайнарға керешеп китә.* (З. Биишева.)

**ҡыйыш атып, тура тейҙереү**. Бер һүҙ һөйләп, икенсене аңлатыу. *Ҡатын аптырап ҡалды: «Немец офицерҙары» тураһында Ғабдулла **ҡыйыш атып, тура тейҙерҙе** булыр.* (М. Кәрим.)

**ҡыйыш тейәү**. Эсеп, иҫереп алыу. *Минйәшәр йыш ҡына «**ҡыйыш тейәп**» ғауға күтәрә ине.* («Сов. Башҡ.»)

**ҡыланмаған ҡалмау**. Төрлө нәмә эшләп, төрлөсә ҡыланып ҡарау (*күберәк кире ҡылыҡтарға ҡарата әйтелә*).

**ҡыл да (ҡыл башы ла) ҡыбырлатмау (ҡыймылдатмау)**. Бер нәмә лә эшләмәү, тик ятыу. [*Ғафар*:] — *Мин йәйләүгә киткәндә, нимә тигәйнең? Ә хәҙер малдар елгә елләп, ел йотоп тора, **ҡыл да ҡыбырлатмағанһың** бит, исмаһам.* (Н. Мусин.) *Ауылда ошондай ыҙғыш барған бер ваҡытта һеҙ бит **ҡыл да ҡыймылдатмағанһығыҙ**.* («Сов. Башҡ.»)

**ҡылдан нәҙек, ҡылыстан үткер** *фольк*. Теге донъяла бар тип фараз ителгән ожмах юлындағы сират күперенең һүрәтләнгән рәүеше. *Һылыу ҡортҡа инде бөтөнләй икенсе донъяға барып сыҡҡан. Ул теге **ҡылдан нәҙек, ҡылыстан үткер** сират күперен нисек үтеп киткәндер, уның бөтөнләй эше юҡ. Һылыу ожмахтың иң түренә барып ингән.* (Т. Йәнәби.) *Был ике ҡая араһындағы илгизәр болот кеүек ышаныcһыҙ күпер түгел. Был **ҡылдан нескә**, ләкин бөтә суйын таштарҙан нығыраҡ күпер* [*дуҫлыҡ күпере*]. (Р. Ғарипов.)

**ҡылды ҡырҡҡа ярыу**. Бик оҫта, уңған, етез булыу. *Әсҡәпъямал еңгә, иҫән саҡта, **ҡылды ҡырҡҡа ярған** — эшләмәгән эше ҡалмаған.* (Ә. Вәли.) *Халҡыбыҙҙың **ҡылды ҡырҡҡа ярыр** аҡыллы тапҡырлығы булып тыуған сәсәндәр Б. Бикбай әҫәрҙәренең ҡаһармандары булды.* (Ә. Вахитов.)

**ҡылды ҡырҡҡа ярырҙай**. 1. [булыу, ярыр саҡ]. Эштең бик тығыҙ, ваҡыт етмәгән мәле. *Ошо уттай сәсеү осоронда, **ҡылды ҡырҡҡа ярырҙай** булып торғанда, трактор ҡәҙәре тракторҙың ватылып ятыуы асыуҙы килтерерлек хәл ине шул.* (Ғ. Лоҡманов.)

2. [тел]. Үткер, сая һүҙле. ***Ҡылды ҡырҡҡа ярырҙай** теле кәрәк ил өсөн.* («Иҙеүкәй менән Мораҙым».)

**ҡылйыуғыс.** Бик шыма телле, йомшаҡ теле менән алдай торған.

**ҡылҡаһы ҡалмау** *нимәнең.* Таушалып, туҙып бөтөү (*тетелгән кейем-һалым хаҡында*).

**ҡыл өҙөрлөк тә хәл булмау (ҡалмау).** Бөтөнләй арып эштән сығыу. *Әйләнеп ҡайта алмаясағым күңелгә килеп тора: **ҡыл өҙөрлок тә хәл юҡ.*** (Т. Килмөхәмәтов.) *Шундай арыған саҡтар була: **ҡыл өҙөрлөк тә хәл ҡалмай.** Саҡ һөйрәлеп ҡайтып етәһең дә урындыҡҡа ауаһың.* (И. Ғиззәтуллин.)

*син.*: хәлдән тайыу.

**ҡыл өҫтөндә (осонда)** [тороу, булыу, ҡалыу]. Һәләк булыуҙан саҡ-саҡ ҡына ҡалып, бик ҡурҡыныс хәлдә булыу. *Азат ҡотолоуына һаман ышанып бөтмәй әле. Бынан бер сәғәт элек кенә ғүмере **ҡыл өҫтөндә** ине.* (Ә. Бикчәнтәев.) *Халыҡ үҙ гәскәрен ойоштороуҙы талап итә, ... ил яҙмышы **ҡыл өҫтөндә** бит.* (Ә. Ихсан.) *Шаһишәрәфтең хәле бик ауыр: йәнселгән аяғына операция өҫтөнә операция яһаиҙар, ғүмере **ҡыл өҫтөндә** торған саҡтар була.* («Сов. Башҡ.»)

**ҡыл тамаҡ.** Бик әз ашаған кеше. *Борис Красоткин Таһир Сәубәновты «туймаҫ ҡорһаҡ» тип атаны, ә Таһир уға «**ҡыл тамаҡ**» тине.* (Ә. Бикчәнтәев.)

*ант.*: туймаҫ тамаҡ, ҡап ҡорһаҡ.

**ҡылт та итмәү.** Ыжлап та бирмәү, уйлап та ҡарамау.

**ҡыл тартҡан кеүек (тарт кандай).** Туп-тура һалынған юлға ҡарата әйтелә. — *Юл ни берәү инде, **ҡыл тартҡан кук.** Маңлайың туры китәһең дә китәһең, — тине хужа иҫе китмәй генә.* (Ж. Кейекбаев.) ***Ҡыл тартҡандай** тура алға юлдар Алыҫ-алыҫ ятҡан яҡтарға.* (С. Ғәбиҙуллин.)

**ҡылын тартып (сиртеп) ҡарау** *кемдең.* Уй-ниәтен самалап, ситләтеп кенә тикшереү. *Факиһа Һөйөмбикәнең яңы килдәгенә лә бик теклап ҡарап үткеләне осрағанда, хатта уларға бер-ике тапҡыр барып, Һөйөмбикәнең **ҡылын да тартҡылап ҡараны.*** (Ж. Кейекбаев.) [*Сәйет*] *төрлөсә йомалап ҡыҙҙың **ҡылын тартып ҡараған,** тик тегеһе, уны яндырырҙай булып, етеҙ генә ҡараш ташлаған да китеп барған.* (Ә. Вахитов.)

**ҡыл ярырҙай** [һүҙ]. Үтә лә үткер, аҡыллы (*һүҙ*). *Сәсән ирҙең өнөнән **ҡыл ярырҙай** һүҙ сығыр. Аҡыллы ир башынан донъя ҡорор уй сығыр.* («Иҙеүкәй менән Мораҙым».)

**ҡыпыштан ҡоро ҡалмау** *һөйл.* Һәр ергә ҡыҫылып барыу. *Һыуһылыу әбеиҙең сәйе ҡайнар самалыраҡ, күршеләге әбеиҙәр килә башланы. Килгән әбеиҙәр араһында ауылдағы **ҡыпыштан ҡоро ҡалмай** торған Кизәр әбей зә бар ине.* (Ғ. Дәүләтшин.)

**кыр кәзәһе.** Бик ҡырыҫ тәбиғәтле ҡыҙзарға ҡарата әйтелә. *Ҡарағыҙ әле бынау **ҡыр кәзәһен,** мине янына ултыртмай.* (З. Биишева.)

**ҡырҡ ата балаһы.** Милләте, уй-фекере, ҡылығы буйынса төрлө кешеләр. ***Ҡырҡ атаның балаһы** — ҡырын яры тартмай*

*була тиме... — тип, артабан һөйләп китте.* (З. Биишева.) *Рейс һайын алмашына торған әллә нисәмә төрлө холоҡло **ҡырҡ ата балаһы** үҙен ул* [*Сажидә*] *теләгәнсә генә тотамы ни?* (Н. Мусин.)

**ҡырҡ быуынынан тураП утҡа һалһаң да үс ҡанмаҫ.** Бик ныҡ асыуҙы килтергән кешегә ҡарата йән әсеү менән әйтелә. [*Сурағол:*] *Ҡан илатҡан был түрәләрҙең **ҡырҡ быуынынан турап утҡа һалһаң да үс ҡанмаҫ.*** (Т. Хәйбуллин.)

**ҡырҡ ҡабат** [һөйләү, әйтеү...]. Бер үк һүҙҙе бик күп мәртәбә ҡабатлауға ҡарата әйтелә. *Бер һүҙҙе **ҡырк ҡабат** әйттерәһең.* (Һөйл.)

**ҡырҡҡа бөрәү тулмаған.** Аҡылы камил уҡ түгел.

*син. ҡар.*: аҡылға теүәл түгел.

**ҡырҡҡа түкмәстереү.** Ишеткән, күргәнде арттырып, төрләндереп һөйләү.

**ҡырҡҡа ярылырҙай** [булыу]. Эш, мәшәҡәт күплеккә, бөтәһен дә башҡарып өлгөрә алмауға ҡарата әйтелә. [*Нәүширбан:*] *Рәхмәт. Маҡтаның. Мин, белһәң, **ҡырҡҡа ярылам...*** (Ә. Мирзаһитов.) *Бына әле арыш урағына төшөлдө, бесән дә әҙерләргә кәрәк. Халыҡ әйтмешләй, **ҡырҡҡа ярылырҙай** ваҡыт етте.* («Сов. Башҡ.»)

**ҡырҡ ҡатлы.** Бик ҡатмарлы, мәкерле, аҫтыртын эш итә торған кешегә ҡарата яманлап әйтелә.

**ҡырҡ ҡойроҡ** *һөйл.* Һүҙендә тора белмәгән, бер генә йүнәлеше булмаған, ауматай кешегә ҡарата яманлап әйтелә.

**ҡырҡ ҡорама (ҡорау, ҡоршау).** Бик ныҡ туҙған, иҫкергән, ватыҡ нәмә тураһында. *Ваҡ ҡына тәҙрә күҙҙәре ҡайһыһы **ҡырҡ ҡорау** быяла, ҡайһыһы ҡарындыҡтан бөткән.* (Ғ. Дәүләтшин.)

**ҡырҡ ҡорама, илле сөй.** Ниҙеңдер ныҡ тарҡаулығын, берҙәм булмағанлыҡты белдергәндә әйтелә. [*Ямал:*] *Тыштан ғына колхоз инде, ә эсенән — **ҡырҡ ҡорама, илле сөй.*** (М. Тажи.)

**ҡырҡмаһа ҡырҡ.** Бик күп төрлө (оҡшатып етмәү тойғоһо менән әйтелә). *Ҡырҡмаһа ҡырҡ хәбәр һөйләү.* — *Хәҙер иһә Юша тыр һыҙып ҡына таша, хатта ҡайһы бер йылдарҙа боҙҙар ҙа ултырып ҡала. Төплө бер үҙәндән аҡмайынса, **ҡырҡмаһа ҡырҡ** ерҙән аға.* («Сов. Башҡ.»)

**ҡырҡһаң ҡаны сыҡмаҫ(лыҡ).** Бик һаран; ҡарун. *Ныяҙғолға мал түгел ҡыҙ алыу ҡайҙа ул һыҡмырға, **ҡырҡһаң ҡаны сыҡмаҫ**, шундай һаран.* (Һ. Дәүләтшина.) *Шәкерт сағынан уҡ һаранлығы, ҡомһоҙлоғо беленгән Әптелғәлим **ҡырҡһаң ҡаны сыҡмаҫлыҡ** хужаға әйләнә.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Кеше менән аралашмаҫ, хатта айыу һунарына ла япа-яңғыҙы йөрөүсән, **ҡырҡһаң ҡаны сыҡмаҫ** һаран бәндә ине ул.* (Н. Мусин.)

**ҡырҡ эш ҡырылып ятыу.** Эш күп булып, башҡарырға ҡул етмәү. [*Миша:*] — *Хәҙер ысҡын. Күрмәйһеңме ни, **ҡырҡ эшем ҡырылып ята.*** (Ә. Бикчәнтәев.) *Унда, өиҙә,* ҡырҡма ***ҡырҡ эш ҡырылып ята.** Әсәй үҙе генә йөрөй, йән тиргә бата-бата.* (М. Кәримов.)

**ҡырҡ һүҙгә етеү**. Юҡ ҡына сәбәп өсөн дә мыжып һөйләнеү. [*Майгөл әбей*] *бәләкәй генә нәмә өсөн **ҡырҡ һүҙгә етә**, нәҫелнәсәбеңде ҡалдырмай тетеп ташлай.* (К. Мәрғән.) *Башҡорт ерендә урман бөткәнме ни. Ниңә шуның өсөн **ҡырҡ һүҙгә етергә**? (Ж. Кейекбаев.)*

**ҡырҡ ямау(лы)**. Ямау өҫтөнә һалынған ямау; туҙған. *Сәңгелдәк янында **ҡырҡ ямаулы**, ләкин барынса таҙа күлдәк кейгән, ете йәштәр самалы Һылыуҡай Өмөтҡужаны бәүетеп ултыра.* (Ғ. Дәүләтшин.) *Ун ике кеше тотонғайны. Төрлөһө төрлө йәштә. Арала танау аҫты саҡ ҡарая башлағандары ла, ир уртаһына еткәндәре лә бар. Өҫ-баштары **ҡырҡ ямау**, күбеһе ялан аяҡ.* (Ә. Хәким.)

**ҡырмыҫҡаға таяҡ тыҡҡан кеүек**. Ығы-зығы, тынғыһыҙлыҡ, бола хаҡында әйтелә. *Һин, ҡустым, кем, Нуретдин, **ҡырмыҫҡаға таяҡ тыҡҡан һымаҡ**, бында шаулап йөрөмә.* («Сов. Башҡ.»)

**ҡырмыҫҡа иләүеләй (иләүе кеүек)**. Шау-шыу килеп ҡайнашҡан, ығы-зығыланған халыҡ төркөмөнә ҡарата әйтелә. *Ҡала көндәге тормошо менән үҙенә күрә **ҡырмыҫҡа иләүе кеүек** ҡайнарға тотонған булды.* (И. Насыри.) *Тимер юл төйөнө булған Шишмә станцияһы **ҡырмыҫҡа иләүеләй** өҙлөкһөҙ болғаныусы, ҡайнаусы, ығы-зығы, шау-шыу килгән халыҡ менән шығырым тулы ине.* (Х. Ғиләжев.) *Күрше-тирә ауылдыҡылар ҙа килгәнлектән, халыҡ бик күп ине, туғай **ҡырмыҫҡа иләүендәй** ҡымйып тора ине.* (Н. Мусин.)

**ҡырт киҫеү**. Өҙә генә әйтеү, ҡәтғи ҡарарға килеү. *Кешегә төртөнөп йөрөмәһен, үҙе килеп алһын, — тип **ҡырт киҫте** ҡарсыҡ.* (Х. Ғиләжев.) *Тейеш нәмә күп ул донъяла, әммә булмай. Теге кеше **ҡырт киҫте**.* («Сов. Башҡ.»)

**ҡыртыш ҡырҡыу**. Мал тыуарға бәлә-ҡаза килмәһен тип, әжер биреп, доға ҡылдырып үткәрә торған дини йола.

*син.*: тел-теш ҡырҡыу.

**ҡырылмаһа ҡырҡ**. Бик күп төрлө. *Ҡырылмаһа ҡырҡ эш.* — *Әй, болоттар! Миңә тимәһә, һеҙ **ҡырылмаһа ҡырҡ** төр булығыҙ. Ҡайһы ил күгенә елһәгеҙ ҙә, һәр саҡ ун булһын, тим, юлығыҙ.* (М. Илбаев.)

**ҡырым сиреүе***. Бик күп, һанһыҙ (*гәзәттә, ғаиләләге бала-сағаға, күмәк кеше хаҡында.*)

[***Сиреү** — боронғо төрки телендә ғәскәр; тимәк, Ҡырым ғәскәре кеүек күп.]

**ҡырын <күҙ менән> ҡарау**. Ҡырыҫ мөнәсәбәт белдереү, кире ҡарау. [*Хажисолтан бай*] *Бала-сағаларын эйәртеп, һалдатты күрергә килгән ҡатындарға, әбей-һәбейҙәргә **ҡырын күҙ менән ҡарап** башын һелкте...* (Я. Хамматов.) *Әйтәм, һине алдынғы һанап, бик иҫәпләшә инде. Гел **ҡырын ҡарап** йөрөй.* (Б. Бикбай.)

**ҡырын ҡағыу**. Нимәнелер ҡырға ебәреү, ҡулдан ысҡындырыу. *Бындай еңел кәсепте хатта ул ауылдың муллалары ла* ***ҡырын ҡаҡмаған***. (Б. Бикбай.)

**ҡырын тейәү**. Эсеп иҫереү. [*Клубта*] ***Ҡырын тейәп****, тауыш күтәреп йөрөүселәр ҙә осраштырғылай*. («Сов. Башҡ.»)

**ҡырын һуғыу**. Берәй эште алып барып сығарыуға нык ҡамасаулау. *Алма баҡсаһы ҡороп ебәрергә хыяллана ине ул, тик аслыҡ йыл* ***ҡырын һуҡты****...* (Б. Бикбай.) *Аҙыҡ базаһының наҡыҫ булыуы ла малсылыҡты үҫтереүгә* ***ҡырын һуға***. («Сов. Башҡ.»)

**ҡырын ятыу**. Бер ни ҙә эшләмәү, ваҡытты тиккә уҙғарыу.

*син.*: бот күтәреп ятыу.

**ҡысыған (ҡысыҡҡан) ерҙе ҡашыу (ҡысыған ергә тейеү)**. Кешенең йомшаҡ урынын табып алып, әсе тәнҡитләү, фаш итеү. *Халыҡ тағы ла бер гөрләне... Тауыштар зал буйлап яңғыраны. — Закон барлығын онотма! — Тиҙ генә ҡыуып сығара алмаҫһың! — Үҙең осоп китә күрмә! —* ***Ҡысыҡҡан ереңде ҡашынымы ни****?* (С. Ағиш.)

**ҡыҫҡа тотоу**. 1. Эш-хәлде оҙаҡҡа ебәрмәй, тиҙерәк тамам итеү. *Мәүлет бай һүҙ башланы: — «Бында оҙаҡ һөйләшеп ултырырға ярамай, эште* ***ҡыҫҡа тоторға*** *кәрәк»*. (Ғ. Дәүләтшин.) *Атаһы уны* ***ҡыҫҡа тотто****: уйынға-маҙар сығарыу, кейем менән маһайтыу юҡ, гел эш тә эш*. (Б. Бикбай.)

2. Артыҡ иреккә ҡуймай, ҡатылыҡ күрһәтеү.

**ҡыҫыҡ сикә (сикәһе ҡыҫыҡ)** *кемдең*. Бик үпкәсел, тиҙ генә үсегеп барған.

**ҡыҫыр көйөк (хәсрәт)**. Уйлап сығарылған, ғәмәлдә булмаған ҡайғы-хәсрәт, хәстәргә ҡарата әйтелә. [*Фәхри*] *Аҡса әрәм, имеш... Юҡҡа ҡайғырма. Тапҡанһың* ***ҡыҫыр көйөк****. Егет ҡулына мал төшмәй тормай ул*. (Б. Бикбай.) ***Ҡыҫыр көйөк*** *менән көйөп йөрөйһөң, еңгә, тиһәм, хәтерең ҡалыр*. (М. Кәрим.)

**ҡытыҡ килгән ер**. Берәйһенә бик үк оҡшап етмәгән һүҙ, хәбәр тураһында әйтелә. *Капитандың һуңғы һүҙҙәре Сираевтың* ***ҡытығы килгән ерена*** *төртөлдө*. (Н. Мусин.)

**ҡыу томшоҡ**. Ырыҫтан, өлөштән мәхрүм булған, бәхетһеҙ кешегә ҡарата әйтелә.

**ҡыуыҡ баш**. Буш һүҙ һөйләп, аҙ эш башҡарған мәғәнәһеҙ кешегә ҡарата әйтелә. *Сал сәсенә ҡарап, һәр кешене күпте күргән тиеп аңлама! — Бер елғыуар,* ***ҡыуыҡ баштың*** *да бит Ваҡыты менән сәсе саллана*. (С. Әлибаев.)

**ҡыуыҡ осороу**. Буш хәбәр һөйләү, юҡҡа маҡтаныу. «*...Булмаҫ, буш хәбәрҙер, — тинеләр улар, — юҡҡа* ***ҡыуыҡ осораларҙыр*** *әле шул*». (Ж. Кейекбаев.)

**ҡыш бауыры** <**оҙон**>. Ҡыш оҙаҡ дауам итә (*уға әҙерләнергә кәрәклекте белдергәндә әйтелә*). [*Бибинур ҡарсыҡ*:] *Машина ҡабат әләкмәҫ, бер барғанда нык тейәгеҙ, килен.* ***Ҡыш бауыры***

**оҙон**. (Р. Низамов.) ***Ҡыш бауыры оҙон** ул беҙҙә. Бер ҡышты үткәрәһең дә икенсеһенә әҙерләнә башлайһың.* («Сов. Башҡ.»)

**ҡәбергә тығыу**. Үлтереү, һәләк итеү.

**ҡәбереӊ яҡын булмаһын** *кемгә, кем менән*. Яуыз, мәкерле кешенән һаҡланыу, ситтәрәк тороу теләген белдергәндә әйтелә. — *Тфү... Әстәғәфирулла, ундай кешегә **ҡәбереӊ яҡын булмаһын**, алла һаҡлаһын.* (Т. Хәйбуллин.) *Сәмиғулла Әхмәҙиҙе әрләргә тотондо: — **Ҡәберем яҡын булмаһын** шул дуӊғыҙға.* (Ж. Кейекбаев.) *Сидор Айтуганович үҙенеӊ бөтә көсөн, һәләтен күршеләрен күҙәтеүгә йүнәлтте. Ундай кеше менән **ҡәбереӊ яҡын булмаһын**!* (Ә. Бикчәнтәев.)

**ҡәбер (гүр) эйәһе булыу**. Үлеү, вафат булыу. *Сәлмән бай бик ҡартайып, алъяп үлеп китте. Ул ҡышҡы сатлама һыуыҡта **ҡәбер эйәһе булды**.* (Ж. Кейекбаев.)

*син. ҡар.*: теге донъяға китеү.

**ҡәҙерен белеү** *кемдеӊ, нимәнеӊ*. Тейешле баһаны биреп, һаҡлай, дөрөҫ файҙалана алыу. *Ғөмүмән, «Иылайыр» совхозында эшләгән кешенеӊ **ҡәҙерен беләләр**. Бында эшкә ылыҡтырыу, дәртләндереү юлдарын да оҫта табалар.* («Сов. Башҡ.»)

**ҡәҙер кисе**. Дини ҡараш буйынса: кешенеӊ бәхете асылыр көн. *Яҙмыш бирер яҡты сырайын, тип, **ҡәҙер кисе көтөп** ятманым.* (Й. Солтанов.)

**ҡәһәт итеү**. Ант итеп һүҙ биреү. «*Ауылдаштарҙыӊ йорттарын эшкинмәгән көршәктәр менән сүпләүҙән туҡтатырмын!*» — *тип **ҡәһәт иткән*** [*оҫта*]. (З. Биишева.)

**ҡәһәр һуҡҡан**. Яманлап әрләү һүҙе. *Вәлишә бисәһе йәй буйы ҡаҙағын ике тәӊкәнән етен һатып ятты, **ҡәһәр һуҡҡан** нәмә.* (Һ. Дәүләтшина.) *Аҡса тигән нәмә, **ҡәһәр һуҡҡан**, баш-күҙҙе тиҙ бәйләй.* (Р. Низамов.)

**ҡәһәр һуҡҡыры (һуҡһын; төшкөрө, төшһөн)**. Ҡарғау һүҙе. *Ашағы килгәнде белеп тора бит, **ҡәһәр һуҡҡыры**, шунда былай ғына булһа ла, «әиҙә, ашап ал», тип әйтә белмәй.* (С. Агиш.) [*Гөлбадуан*] ***ҡәһәр төшһөн** был күгенә. Боҙ бит был.* (М. Кәрим.)

## Л

**лаф ороу**. Буш һүҙ һөйләү. ... *Күбеһе шинелле, ҡолаҡлы бүрекле тоҡсолар «фронтовик» булалар, иҙеү ҡаптырмаларын асып, күкрәктәрен һуғалар: «Мин дүрт йыл буйына окопта ятҡан кеше...» һүҙҙәре менән **лаф оралар**.* (А. Таһиров.) — *Былай булғас, һөнәрсенеӊ дан ҡояшы байыны! — тип **лаф орған*** [*Өйрәнсек*]. (З. Биишева.)

[*Лаф — *фарс.* буш һүз, маҡтансыҡлыҡ.]

**ләғнәт төшһөн.** Ҡарғау һүҙе.

**ләм-мим* тип әйтмәү (һүҙ әйтмәү, өндәшмәү).** Өндәшмәү, һөйләшмәү. *Сәгиҙә уны, Зоя хаҡында ла һорашмаҫмы, тип көтөп ултырғайны. Ләкин Рәшиҙә ул турала* ***ләм-мим һүҙ әйтмәне.*** (М. Тажи.)

*син. ҡар.*: ауыҙға һыу уртлау.

[*Ләм, мим — *ғәр.* Л, М хәрефтәренең исеме.]

**ләстит тоҡсайы** *һөйл.* Ғәйбәтсе, буш һүҙ һөйләүсе. [*Яхин*:] *Кисә мин бына ошо* ***ләстит тоҡсайын*** *конторанан елтерәтеп сығарҙым.* (Н. Мусин.)

**ләстит һатыу (сәйнәү).** Юҡ-бар һүҙ, ғәйбәт һөйләү. *Мәжлестә һәр ҡатын үҙе белгәнен һөйләй, үҙе белгәнсә* ***ләстит һата.*** (Ғ. Хәйри.) *Сәй менән кәнфит һурып, йәш кенә ике ҡатын ултыра һай гөрләшеп, берләшеп,* ***ләстит һатып.*** (Р. Ниғмәти.)

**ләх булыу.** Ныҡ иҫергәнсе эсеү, иҫереү. *Шул көндө Минулла Әйүповичтың, үҙ өйөнә ҡайтмайынса, ҡайҙалыр* ***ләх булып*** *иҫереп йөрөүен күргәндәр.* (Ғ. Ибраһимов.)

**ләхәүләһен уҡытыу** *кемдең.* Ҡурҡытыу, кәрәген биреү.

# М

**маҙаға тейеү (төшөү).** Эш-ҡылыҡ, һүҙ менән йонсотоу, йоҙәтеү. *Үҙем тирә-яҡ ауылдарға сығып әйләнәм дә гелән ошо йөҙйәшәр әбей ауылына киләм. ... Йөрөй-йөрөй әбейҙең* ***маҙаһына ла тейҙем, буғай.*** (Ә. Вахитов.) ***Маҙаһына тейгән,*** *үҙ маҡсатын тормошҡа ашырыуға аяҡ салған Хисмәтулла менән Заһитты халыҡ күҙе алдында язалап үлтереп, приискыны үҙ исеменә күсермәйенсә тыныслана алмаясаҡ ул* [*Ниғмәтулла*]. (Я. Хамматов.) *Мин дә шулай шунда тыуған, шунда үҫкәнмен, мин дә шулай, бында «болаҡ» яһап, әсәм* ***маҙаһына төшкәнмен.*** (Д. Юлтый.)

*син.*: теңкәгә тейеү.

**маҙаһын китәреү** *кемдең,* **маҙаны алыу.** Ни менәндер ялҡытыу, тынғы бирмәү. *Эре панелдән һалынған йорттарҙа күршенең* ***маҙаһын китәрәйем*** *тиһәң, сараһы, әмәле табылып ҡына тора ул.* («Сов. Башҡ.»)

**май бөрөү.** 1. Бик ныҡ һимереү. *Ауыр эшкә егелмәй, илкеһалҡы ғына йөрөгәнлектән,* ***май бөргән*** [*аттың*] *эсен, һимергән.* (Б. Бикбай.)

2. Үтә ныҡ байып, һаранға әйләнеү.

**майҙанға килеү**. Барлыҡҡа килеү, хасил булыу. *Беренсе совет йылдарында уҡ кооперативтар* ***майҙанға килә*** *башланы.* («Сов. Башҡ.»)

**майҙа (май эсендә, балда-майҙа, май-балда) йөҙөү**. Рәхәт тормошта йәшәү. [*Садиҡ*:] «*Алла бер нәмә лә белмәй ул. Ул белһә, һинең менән мине забуйға ҡыуып, Фәтхи байҙы* ***май-балда йөҙҙөрмәҫ*** *ине*», — *тип ҡуйҙы.* (С. Азаматов.)

**майҙан тотоу**. 1. Халыҡ алдында телмәр һөйләү.

2. Халыҡ алдына сығып көс күрһәтеү. [*Мәсем хан*:] *Ҡыуаны сым бик ҙур булғас, илем данлап майҙан йыйғанмын,* ***майҙан тотҡан*** *батыр егеткә ҡыҙым бирәм, тип вәғәҙә иткәнмен.* (С. Мифтахов.)

**май күүек ireү**. Йылы һүҙгә рәхәтләнеп китеү. *Ҡарттың аҡылын, яҡшылығын маҡтап, Татлыбай бер нисә йыр әйтеп бирҙе. Маҡтауҙы яратҡан Аралбайҙың күңеле* ***май күүек иреп китте.*** (Ш. Шәһәр.)

**май ҡабыу**. Бер һүҙ ҙә әйтмәү, өндәшмәү. — *Һау ғынамы, Ислам, һин минең Билал исемем тураһында* ***май ҡап,*** *бер ваҡыт килер, тағы иркенләп һөйләшербеҙ,* — *тине, ҡул бирҙе* [*Билал*]. (А. Таһиров.)

*син. ҡар.*: ауыҙға һыу уртлау.

**майлаған күүек (майлағанмы ни)**. Бик уңай, тотҡарлыҡһыҙ (*барыу*; *гәҙәттә, эш-хәл тураһында*): *Шул көндө үк эш табып ҡайтты, хатта былтырғыһына ҡарағанда ла аҡсаһы ла артығыраҡ икән. Уның эше* ***майлаған күүек*** *булды.* (С. Агиш.) *Эш* ***майлаған күүек*** *шып-шыма барҙы.* («Сов. Башҡ.»)

**майлап ташлаһаң эт яламаҫ**. Бик йәмһеҙ, һөйкөмһөҙ (*күберәк ҡатын-ҡыҙ хаҡында*). *Хәлимәне генә алып ҡара: кейәүгә сыҡҡанға тиклем* ***майлап ташлаһаң эт яламаҫ*** *нәмә ине, ана ҡайһылай булып китте. Таныўлыҡ та түгел.* (Ш. Шәһәр.)

*син.*: йөҙөнә ҡарағыһыҙ.

*ант. ҡар.*: ҡаран туйғыһыҙ.

**майлы бутҡа булмау (түгел)**. Көтөлмәгән ауыр эш-хәлгә дусар булған кешегә ҡарата әйтелә. ... *Иәш ҡыҙыҡайға тәүге хеҙмәт көндәрен башлап ебәреү* ***майлы бутҡа булманы****, әлбиттә.* («Башҡ. ҡыҙы».)

**май эсендәге (эсендә йөҙгән) бөйөр күүек**. Бик рәхәттә, һис кенә яфа, мәшәҡәт күрмәй байлыҡта, муллыҡта (*йәшәү*). *Быға тиклем* ***май эсендәге бөйөр күүек*** *кенә йәйләгәнмен икән.* (Ғ. Ибраһимов.) — *Нужа күреп, донъяның әсеһен-сөсөһөн татып үҫкән ҡыҙ.* ***Май эсендәге бөйөр*** *булып йәшәһә, бик улай итмәҫ ине әле.* (С. Агиш.) *Тағы ҡайтыр ул замандар,* ***май эсендә йөҙгән бөйөр һымаҡ,*** *рәхәт йәшәрбеҙ.* (Б. Бикбай.)

**майына сыҙамау (һыйыша алмау)**. Рәхәт тормошто күтәрә алмай ҡоторона башлау. *Майына сыҙамай ҡылана ул.* — *Беҙ фронтта, окоптарҙа сереп яттыҡ. Улар бында* ***майҙарына сыҙаша алмай.*** (А. Карнай.)

*син.*: майы төртөү.

**майын имеү** *кемдең*. Кеше иҫәбенә йәшәү, байыгыу. [*Байҙар*] *нисә йылдар фәҡир башҡорт халҡының* ***майын имеп*** *йыйған малдарын, ерҙәрен ҡулдарынан ысҡындырып, фәҡир башҡорт халҡы файҙаһына бирмәйәсәктәр.* (Ш. Хоҙайбирҙин.)

**майы төртөү**. Артыҡ рәхәтлеккә түҙмәй ҡотороноу, шашып китеү.

*син.*: майына сыҙамау.

**майһыҙ ҡалаҡ ауыҙ йырта**. Кешенең күңелен күрмәйенсә йомошто йомошлап булмай.

**мал (донъя) артынан ҡыуыу**. Байырға ныҡ тырышыу.

**мал булыу**. Үлмәй ҡалыу, тере булыу. *«Ул инде* ***мал булмаҫ****, мин уны һуйырмын», — тине прасол.* (Б. Бикбай.)

**мал еле ҡағылған**. Мал табыу, мал ҡарауға үтә ныҡ бирелгән кешегә ҡарата әйтелә. *Фәтҡуллиналарҙың бөтә нәҫеле менән* ***мал еле ҡағылған*** *кешеләр икәнен күптәр белә.* («Сов. Башҡ.»)

**мал йәнле**. Малды үтә ярата торған кешегә ҡарата әйтелә.

**мал мөгөҙөнә элерлек** [нәмә юҡ]. Йүнле нәмәһе булмаған, үтә ярлы. *Ә элек был юл беҙгә тәгәм ризыҡ,* ***мал мөгөҙөнә элерлек*** *тә әйбер килтермәгән, ә күпме алып сыҡҡан ул үҙе.* (Ә. Вахитов.)

**малым юҡ аранда, эшем юҡ буранда**. Хуш күңеллелек, ҡәнәғәтлек күрһәткәндә әйтелә. *Бер егет йөрөй һыҙғырып, өрпәк ҡарҙы туҙҙырып,* ***Малым юҡ****, тип,* ***аранда, эшем юҡ****, тип,* ***буранда***. (С. Ғәбиҙуллин.)

**мамай* заманы (заманында)**. Әллә ҡасан, бик күптәнге. *Мамай заманында булғанды һөйләйһең.*

*син.*: Нух заманы, хан заманы.

[***Мамай** — Алтын Урҙа дәүләте ханының исеме.]

**маң булыу** I. Берәй эш-шөғөлгә мөкиббән китеп бирелеү. *Эшкә* ***маң булып****, апайымдың эргәмә килеп торғанын да һиҙмәгәнмен.* (Ш. Бикҡол.)

II. Саҡ ҡалыу. *Киҙәгәс күлдең буйында күп командаға дәл булдым. Үләнле күлдең баштарында тотолорға шуға* ***маң булдым.*** (Халыҡ йырынан.)

**маңлайҙы ҡуйыу** *кемгә, нимәгә*. Үҙеңде асыҡтан-асыҡ ҡурҡынысҡа дусар итеү.

**маңлай менән ер һеперeү**. Бик ныҡ түбәнселек күрһәтеү, кәмһенеү. [*Ҡолтүбә*] *Бүләр хандың алдына килеп,* ***маңлайы менән ер һепереп****... һүҙ башланы, ти.* (Әкиәттән.)

**маңлай тирен түгеү**. Нимәгәлер күп көс һалыу. *Маңлай тирен түгеп эшләү.*

**маңлайына яҙылған** *кемдең нимә*. Кешегә мотлаҡ килә, яҙмышына төшә тип фараз ителгән эш-хәл. *Әҙәм балаһы тыуымыштан* ***маңлайына яҙғанды*** *күрмәй булдыра аламы.* (Һ. Дәүләтшина.) *Әллә, Нурисламдың өләсәһе әйткәнсә, бәндәләрҙең тәҡдире, ысынлап та, уларҙың* ***маңлайына яҙылғанмы****?* (Ә. Хәким.)

**маңлай яҙып** [һөйләшеү]. Асылып, сиселеп китеп (*фекер алышыу*). *Ҡайһылай тап килештек әле. Ошолай* ***маңлай яҙып*** *бер һөйләшеп ултырыуың ни тора*! (Б. Бикбай.) *Мин Ғәли Хикмәтуллин менән өйөндә күрешеп,* ***маңлай яҙып*** *иркен һөйләшеүҙән өмөт өҙмәйем әле.* («Сов. Башҡ.»)

**мах* биреү** *һөйл.* Берәй эштә үҙеңде һынатыу, һыр биреү. ***Мах бирмәй*** *үк йөрөнөм дошмандарға, ҡулдарымда форсат бар саҡта.* (Халыҡ йырынан.) *Башҡалар* ***мах бирә*** *икән, ул ғәйепле-ме ни? Аҙ йоҡлап, үҙеңде аямайыраҡ тотонһаң, эш ырай ул.* (М. Хәйҙәров.)

[*Рус телендәге «дать маху» берәмегенән.]

**мейене игәү.** Бәйләнсек уй-фекерҙән ҡотола алмау, гел бер нәмәне уйлап яфаланыу. *Был уй Иштуғандың* ***мейеһен*** *юл буйы үтмәҫ игәү булып* ***игәп*** *барҙы.* (З. Биишева.)

**мейене һыу алыу.** Аҡылды юйыу, иҫәүәнгә әйләнеү.

**мейе серетеү.** Баш эшләмәһә лә уҡырға тырышып, ныҡ уйлап яфаланыу. [*Малай*:] «*Ҡуйсы, атай, уҡып мулла, суҡып ҡарға булмам, шайтан һабағы менән* ***мейемде сереттмә***». (Б. Бикбай.)

**мейеһенә ярып һалһаң да булмай** *кемдең.* Тыңламай, аҡылына, зиһененә һеңмәй.

**мейе шыйыҡланыу.** Уйлау һәләтен юғалтыу. ***Шыйыҡланып*** *бөтһә бөтһөн* ***мейе****, Аҡыл өйрәткәнде алыу ҡайҙа*?! *Бәхет килеп янға ятыр төҫлө, яҙмыш теҙгендәре ул — хоҙайҙа.* (Р. Йәнбәк.)

**мең алтын.** Бер нәмәне, хәлде икенсеһе менән сағыштырып, береһенең өҫтөнлөгөн күрһәтергә теләгәндә әйтелә. ***Мең алтыны*** *— өндәшмәйсә түҙәлһәң, шуны уйла иң беренсе, һүҙ алһаң.* (Г. Ҡотоева.)

**мең артыҡ.** Ниҙелер икенсе нәмәнән өҫтөн күргәндә әйтелә. [*Фәһим*:] *Әлеге шул бала ваҡытындағы ҡырыҫлығын ҡыуҙы — яңғыҙы ғына ҡалып моңайыуҙы* ***мең артыҡ*** *күрҙе.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Аяҙлана ир-егеттең рухы арғымаҡта бәйге сапҡанда. Тик* ***мең артыҡ*** *миңә сабыр булыу һыҙылып ҡына таңдар атҡанда.* (Х. Назаров.)

**мең бәлә (газап) менән (сигеп).** Бик күп ауырлыҡтар кисереп, ҡаршылыҡтар үтеп (*ниҙер башҡарыу, еңеп сығыу*). *Шулай итеп,* ***мең бәлә менән*** *Лапашты заводына барып еттек.* (М. Ғафури.) *Марина менән Ҡыҙрас шул араны* ***мең бәлә менән*** *һигеҙ көн самаһында үттеләр.* (М. Хәйҙәров.) ***Мең бәлә менән*** *тапҡан ҡәҙерле бүләк әрәм була бит.* (М. Садиҡова.)

**мең йәшә.** Кешене яҡшы эше, ҡылығы өсөн хуплау һүҙе. — *Молодец, бабай*! ***Мең йәшә***! (И. Ғиззәтуллин.)

**минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе.** Әүеш-тәүеш итеп кенә, насар эшләнгән нәмә, эш-хәл тураһында әйтелә. *Бүлмәләр арлыбирле ағартыла, ишек-тәҙрәләр насар буяла. Ҡыҫҡаһы, ниндәй генә эш булмаһын, ашыҡ-бошоҡ,* ***минән киткәнсе, эйәһенә еткәнсе*** *тип кенә эшләнә.* («Сов. Башҡ.»)

**минән дә (унан да...) үтте гүмер, эттән дә үтте.** Бер ҙә рәхәт күрмәй, заяға үткән ғүмергә үкенеп әйтелгән һүҙ.

**миңә ҡалһа.** Үҙ фекереңде ныҡлы белдергәндә әйтелә.

**миңә тиһә... (тимәгәйе...)** Ниндәйҙер эш-хәлдең нисек барып сығыуына ғәмһеҙлек күрһәткәндә әйтелә. *Бибеш ризаһыҙлыҡ менән: — **Миңә тиһә**, мәктәптән ары уҙып китһәңсе, — тип үпкәләп ҡуйҙы.* (Ӡ. Биишева.)

*син.*: суҡынып китһен.

**мисәт баҫыу** *нимәгә.* Һүҙҙе, тәкдимде хуплап тороу. [*Шахниyaз Ҡәләмдиргә*:] *Нимә һин минең һүҙҙәремә **мисәт баҫып** тораһың? Бар!* (Ә. Мирзаһитов.)

**михнәт сигеү.** Ныҡ этләнеү, күп яфа күреү. *Байҙарҙа оҙаҡ **михнәт сигеп**, батраклыҡта йөрөгәндән һуң, Белорет районының Сермән балалар йортона килеп кергәс кенә, Һиҙиәт иркен һулыш алғандай булды.* («Сов. Башҡ.»)

**моратҡа ирешеү (етеү).** Маҡсатты тормошҡа ашырыу. *Юҡ, юҡ, ҡәйнеш, боларма, Назаны һис уйлама, һүҙемде һүҙ итермен, **моратыма етермен**.* (Б. Бикбай.) — *Әйҙә, ҡатын, апайҙарға ҡунаҡҡа барып киләйек, таныш ырбыҙ, күрешербеҙ, ҡунаҡ булырбыҙ, эште яйларбыҙ, һин — теләгеңә, мин **моратыма ирешермен**, — тигән, ти, был егет.* (Әкиәттән.)

**морҙар китеү.** Үлеү. *Ниндәй алтын бәхет килтермәне, ниндәй шахтар **морҙар ...китмәне**.* (М. Ғафури.)

**морҙах* сығыу (ҡылыу)** *диал.* Оҙон юлға, сәйәхәткә сығыу.

[*Морҙах — *монг.* ат менеп юлға сығыу.]

**морон ҡыҫтырыу (тығыу)** *һөйл.* Кәрәкмәгән, тейеш булмаған эшкә ҡыҫылыу.

**мороно кипмәгән** *кемдең һөйл.* Кеше араһына иперлек булып үҫеп етмәгән, үтә йәш әле (*кәмһетеберәк әйтелә*).

**моронона (танауына) сиртеү (һуғыу)** *кемдең мыҫҡ.* Берәй эш-ҡылыҡ менән икенсе бер кешенең намыҫына тейеү, артта ҡалдырып оятлы итеү. *Колхозсылар яңғыҙаҡ, урта хәлле крәҫтиәндәрҙең игенен урып-һуғып, һаман байыу яғын ҡараған байҙарҙың **морондарына сиртергә** булалар.* («Сов. Башҡ.») *Шул Красиндарҙың **моронона һуҡмаһаммы**?!* (Ғ. Лоҡманов.)

**моронон һындырыу** *кемдең.* Ҡуҡырлығын, маҡтансыҡлығын кәметеү, урынына ҡуйыу.

*син.*: танауын төшөрөү, кикреген шиңдереү.

**мороно һуҙылған** *кемдең.* Ҡуҡырлығы, маҡтансыҡлығы юҡҡа сыҡҡан.

*син.*: танауы төшкән, кикреге шиңгән.

**морон төбө.** Бик яҡын ер, эргә. *Малайҙар, немецтың **морон төбөнә** барып, бесән сабып ҡайталар.* (Ә. Кирәй.)

**морон төртөү** *кемгә.* Ышаныу, таянып эш итеү. *Был меҫкендең талчук бүрекселәренән башҡа **морон төртор**, тел-теше үтер таныш-белештәре юҡ икән, — тип кеше көлөр.* (Ш. Янбаев.) *Минең үҙемдең дә бит **морон төртөр** ерем юҡ, тамаҡ ас, өҫ*

*ялангас.* (К. Ибәтуллин.) *Беҙҙең ошо ышанысты аҡламаһаң, бүтән ергә барып* ***морон төртөрмөн*** *тип уйлама.* (Н. Мусин.)

**морон тығыу (төртөү, ҡыҫтырыу).** Урынһыҙ, тейеш булмаған ергә барып ҡыҫылыу. *Был ниндәй һөмһөҙ бәндә булды. Ауылга йүнәлеүе яңы, ә* ***морон тыҡмаган*** *ере юҡ.* (Ә. Мирзаһитов.) *Япон милитаристары былтыр Хасан районында* ***морон төртөп*** *ҡарагайнылар ҙа, кәрәктәрен алдылар.* («Сов. Башҡ.»)

**мөгөҙлө түгел.** Кемдеңдер һүҙе, фекере менән артыҡ иҫәпләшеп тормау теләген белдергәндә әйтелә.

**мөгөҙөн һындырыу** *кемдең.* Ныҡ шашҡан кешегә тейешле ҡаршылыҡ күрһәтеп, кәрәген биреү. *Волгага атлыгып килә ине ... Шайтан кеүек.* ***Могөҙөн һындырҙыҡ*** *[фашистың].* («Ағиҙел».)

**мөгөҙ сығарыу.** Булмаҫтай эш өсөн артыҡ тырышыу, ниҙелер артыҡ шаштырыу. *Ахун хәҙрәткә барыгыҙ! Яҙыуҙар һеҙҙең ҡулда бит. Бәлки, берәй* ***могөҙ сыгарырһыгыҙ.*** (Ғ. Ғүмәр.) [*Нурислам Журавлевҡа:*] — *Ошонан да* ***мөгөҙ сыгарырга*** *уйлайһыгыҙмы ни? — Йәштәр бит улар. Гәҙеллеккә баралар...* (Ә. Хәким.)

**мөкиббән китеү.** Бик ныҡ бирелеү, онотолоп бирелеү. *Эшкә мөкиббән китеү.*

**мөрйәһе ҡыйыш** *кемдең.* Тиҙ ғенә үпкәләп бара торған; үпкәсел.

**мөрйәһе ҡыйыш булһа ла, төтөнө тура сыға** *кемдең.* Башы ныҡ эшләй, һис яңылышмай. *Булгаков уянып, уларҙың күҙҡараш, бармаҡ янап уйнауҙарын күреп торган икән. Ҡалын тауыш менән: — Билал, һинең* ***мөрйәң ҡыйыш булһа ла, төтөнөң тура сыга,*** *— тине.* (А. Таһиров.)

**мөһөр баҫыу (һуғыу).** Кемдеңдер һүҙен, берәй эш-хәлде раҫлап, дөрөҫкә сығарып ҡуйыу. — *Былай булгас, туйҙан һуң дөмбөрөнә генә килгәнбеҙ, байрам бөткән. Вәссәләм! — тип* ***мөһөр һуҡты*** *башлыҡ.* (М. Кәрим.)

**муйынға аҫылыныу.** Ир-атҡа оҡшарға тырышып ятыу (*еңелсәрәк холоҡло ҡатын-ҡыҙ хаҡында*). [*Фатима*] *ир-ат* ***муйынына аҫылынып*** *бара торган шаталаҡ бисә түгел ине.* (Б. Бикбай.)

**муйынды киҫеү (һындырыу).** *Бер хужалыҡ планын үтәй, ә икенсеһе үтәй алмай. Бына ошо урында күптәр* ***муйын һындыра*** *инде.* (Т. Бүләков.)

**муйынға ҡамыт кейеү.** 1. Үҙеңә ауыр эш йөкмәү, ҡарамаҡҡа алыу.

2. Өйләнеп, ғаилә мәшәҡәттәренә сумыу.

**муйынға тағылған таш булыу.** Кемгәлер кәрәкмәгән бурыс, кеше булып йөкмәтелеү, көсләп тағылыу.

**муйындан батыу (сумыу)** *нимәгә.* Эш-йомошҡа һ. б. ныҡ күмелеү. *Муйындан бурысҡа батыу. Муйындан эшкә сумыу.*

**муйынды киҫеү**. Ауыр хәлгә ҡуйып сараһыҙ итеү. *Уйнар ҙа инем, көләр ҙә инем, фәҡирлеккәй* ***киҫә муйынды***. (Халыҡ йырынан.)

**муйынына ҡамыт теймәгән**. Ауыр эш күреп, донъя хәстәрен татып өлгөрмәгән.

**муҡсайынды киң тот** *һөйл., мыҫҡ.* Мөмкинселекте иҫәпкә алмай, ҙурға ымһынған кешегә ҡарата әйтелә.

**мулла бесәйе**. Тыштан бик тәртипле, ыҫпай күренеп, асылда мут, яуыз булган кешегә ҡарата әйтелә.

**мунса индереү** *кемде*. Бик ныҡ ҡыҙҙырыу, әрләү. *Бюрола партия директиваларының үтәлеүен тәьмин итергә мөмкин. Һис тә булмаһа, берәй начты, помды, замды ҡыҙҙырып,* ***мунса индереп сығарырға мөмкин***. (Х. Ғиләжев.)

**мыйығы сейәлеү (сыуалыу)** *кемдең*. Йән көйөү, асыу килеү. *Бисәһенең Буранбаиға ныҡ ышҡанлауын күреп, Тимерғазиндың* ***мыйығы сейәлә башланы***. (...)

**мыйығы ла һелкенмәй** *кемдең*. Әйткәнгә, тиргәгәнгә һ. б. ыжлап та бирмәй, бошонмай.

**мыйыҡ аҫтынан көләү (йылмайыу)**. Йөҙгә хәйлә, мутлыҡ билдәһе сығарыу. *Байҙар* ***мыйыҡ аҫтынан көлә***. («Сов. Башҡ.») *Булат бушҡа һүҙ өндәшмәне,* ***мыйыҡ аҫтынан йылмайып***, *ниндәйҙер уйға сумды*. (Б. Бикбай.) — *Һин комсомолмы?* [*Әмирханов*] ***Мыйыҡ аҫтынан*** *бик хәйләкәр итеп, хатта, нисектер, үлтерерлек итеп* ***йылмайҙы***. (С. Агиш.)

**мәж килеү**. Күмәкләшеп бер урында буталыу, ҡайнау. *Ҡатын-ҡыҙҙар партияһы губернатор ҡыҙының урланыуы тирәһендә* ***мәж килде***. (Н. Гоголь. Ф. Иҫәнғолов тәржемәһе.)

**мәктәбен үтеү** *ниҙең*. Тормош тәжрибәһе алыу, күреп, татып, нимәгәлер өйрәнеү. [*1905 йылғы восстаниеның*] *Әһәмиәте ҙур: хеҙмәтсәндәр иҙеүселәргә ҡаршы ҡоралл бәрелеш* ***мәктәбен үтте***, *һабаҡ алды*. («Сов. Башҡ.»)

*син.*: һабаҡ алыу.

**мәмәй ауыҙ** *һөйл.* Артыҡ йомшаҡ, үтә лә булдыҡһыҙ кешегә ҡарата асыу менән әйтелә. *Беҙ генә ул,* ***мәмәй ауыҙҙар***, *үҙ хаҡыбыҙҙы үҙебеҙ яулай алмайбыҙ*. (И. Ғиззәтуллин.) *Һин дә, Рамазан, ти* [*Шәриф*], *бер* ***мәмәй ауыҙ*** *булдың. Нисәмә йыл буйы йөрөп, бер ҡыҙың да юҡ*. (Н. Мусин.) [*Зәкирә*:] *Һеҙгә һәйбәттер ҙә ул. Терпе лә үҙенең балаһын, йомшағым, тип ярата ти бит. Ә минең өсөн ул бер* ***мәмәй ауыҙ***. (З. Хисмәтуллин.)

**мәс булыу**. Нимәгәлер барып сумыу, ныҡ туйыу. *Бер ашауың — бер ғүмер, — тип* ***мәс булғансы*** *һыйлана табындағы халыҡ*. (Б. Бикбай.) *Ауылдың ҡаҙ, өйрәктәре, ҡойолған игенгә* ***мәс булып***, *ҡуҡырайышып йөрөйҙәр*. (М. Тажи.)

# Н

**назар ҡайтыу**. Теләк бөтөү, тоңолоү.

**намыҫҡа көс килеү**. Оят, уңайһыҙ булыу. — *Баланан ҡурҡҡан ҡатынға иргә барыу харам, — тине әсәйем, асыуланып. — Иә инде, йыл һайын тиерлек иргә барып ҡайтаһың. Хәҙер бына бала ҡалдырып киткәнһең.* ***Намыҫыңа көс килмәйме*** *аҙыраҡ?* (Я. Вәлиев.)

**намыҫҡа талашыу**. Минлек тойғоһон тапатмаҫҡа тырышыу. *Аҡназарға икеләнергә юл ҡалманы, ир үлһен дә дан ҡалһын, тине лә* ***намыҫҡа талашып,*** *ҡунаҡтарын саҡырырға булды.* (Ғ. Дәүләтшин.)

**намыҫҡа тейеү**. Ныҡ ғәрләнеү. [*Бибинур иренә*] *ҡаршы һүҙ әйтә белмәне.* ***Намыҫына бик тейгән*** *саҡтарҙа йәшеренеп кенә балауыҙ һыҡты.* (Я. Вәлиев.) *Үткән йылдарҙың* ***намыҫҡа тейә торған*** *иҫтәлектәре уның* [*Ныязғолдоң*] *асыуын бөгөн тағын да ҡуҙғатты.* (Һ. Дәүләтшина.)

**наҫ баҫыу** *диал.* Ялҡауланыу.

**ни аллаға, ни муллаға**. Бер кемгә лә файҙа килтермәгән, эшкә яраҡһыҙ. *Ҡурсаҡтан халыҡҡа ни файҙа булыр тиһең. Сания кеүектәр* ***ни аллаға, ни муллаға.*** (М. Тажи.)

**ни алтара, ни пылтара <ҡалған ике уртала>** *һөйл.* Булыр-булмаҫ, булдыҡһыҙ. — *Йүнле кешеме һуң? — Бер әҙәм инде,* ***ни алтара, ни пылтара — ҡалған ике уртала.*** (Ғ. Ибраһимов.)

**ни алып, ни бирергә белмәү**. Ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеп, өҙәләнеп тороу. *Һәтизә әхирәт булһа, улы ҡайтҡас,* ***ни алып, ни бирергә белмәҫ*** *ине, бахыр...* (Ғ. Дәүләтшин.) *Уның* [*Сөнәғәттең*] *ҡайтыуына Сәлиха бик шат булды,* ***ни алып, ни бирергә белмәне,*** *хәл ҡәҙәренсә һыйланы, ҡунаҡ итте.* (Ж. Кейекбаев.) *Уға* ***ни алып, ни бирергә белмәйҙәр.*** *Ә Фәриҙәнең ҡапҡыһы ла килмәй.* (Р. Солтангәрәев.)

**ни арба, ни сана**. Яҙғы-көҙгө ҡар ҡатыш ямғыр яуып торған юл төшмәгән бысраҡ ваҡыт. *Егор ҡарт үлгәс, Александрға телеграмма һуҡтылар. Берҙән,* ***ни арба, ни сана*** *ваҡыты булыу, икенсенән, Ағиҙел бик ташыу сәбәпле, Александр ҡайта алманы.* (Ж. Кейекбаев.) *Ябыҡ алаша иренеп кенә атлай. Уға, билдәле, ауыр, сөнки ваҡыт шулай —* ***ни арба, ни сана*** *түгел — ноябрь башы.* («Сов. Башк.»)

**ни ары, ни бире**. Бер йүнәлеш тә ала алмай, тегеләй ҙә, былай ҙа (*китә алмау*).

**ни башы(ң) (йәнең) менән**. Нисек ҡурҡмай (*нимәгәлер ҡыйыу, уйлап тормай тотонған кешегә ҡарата әйтелә*). «*Унса бала өҫтөнә* ***ни башың менән*** *бараһың*» *тип айнытырға теләүселәр ҙә булды, ләкин Хәмдиә ныҡлы ҡарарға килде.* («Сов.

Башҡ.») *Шуға ҡарамаҫтан, иркәгеңде шулай хәүефле юлға ебәреп, **ни йәнең менән** тыныс ятмаҡ кәрәк.* (Ғ. Ибраһимов.)

**ни булһа <ла> шул булыр.** Бер эшкә, ҡылыҡҡа тәүәккәлләгәнде белдергәндә әйтелә. «***Ни булһа ла булыр**, бешерәм дә ҡуям борцты...*» *тип уйланы Хәтирә.* (М. Хисмәтуллина.)

**ни бысағыма <кәрәк>.** Нимәгә, ни өсөн (*ниҙеңдер кәрәклегенә шик белдергәндә ризаһыҙлыҡ менән әйтелә*). [*Шофер — Хөснуллаға*:] — *Иә, **ни бысағыма** барып йәбештең шул бағанаға*?! (Р. Низамов.) ***Ни бысағыма кәрәк** ул* [*бесәй*] *миңә*? (Х. Мохтар.) — *Иә, һиңә нимә кәрәк? — тине малай тупаҫ ҡына. — **Ни бысағыма** эҙәрләп йөрөйһөң әле*? (Ә. Бикчәнтәев.)

**нигеҙ ташы.** Ниҙеңдер төп терәге, башланғысы.

**нигеҙ һалыу** *нимәгә*. Башлап ебәреү, киләсәккә ниҙер башлап ҡуйыу. *Тракторҙар иһә, ер һелкетеп, туңға һөрәләр, киләһе йылдың уңышына **нигеҙ һалалар**.* («Сов. Башҡ.»)

**ни генә әйтмә (нимә тиһәң дә).** Ҡайһылай уйлап, үлсәп ҡараһаң да (*берәй шарт хаҡында әйтелә*). ***Ни генә әйтмә**, колхоздың төп аҡса сығанағы — игенселек.* («Сов. Башҡ.»)

**ни гүмер.** Ваҡыттың үлсәүһеҙ тиҙ үтеүенә аптырағанда әйтелә. *Йә, **ни гүмер** үтеп тә киткән.*

**ни етте.** Теләһә ниндәй; сифаты, баһаһы юғары булмаған. [*Гөләндәм*:] — *Ғүмереңдә бер булмағанды ҡыланмасы, атаһы. **Ни етте** һүҙҙәр һөйләү һиңә төптө килешмәй.* (Ғ. Ғүмәр.) *Фәйзрахман бабайҙың, етмеш өҫтөндә булһа ла, былай бирешеп киткәне юҡ ине. **Ни етте** егеттәреңдең билен бөгәрлек гәйрәте менән колхоз эштәренә тотона.* (Д. Бүләков.) *Шундай ғаиләнең тыуған көн байрамына нисек итеп **ни етте** нәмә тотоп бараһың*? (М. Садиҡова.)

**ни етте <шул (шуны)>.** Теләһә ни, төрлө нәмә. *Атайымдың ... һис көтмәгәндә генә **ни етте шуны** ватып-емерә торған ғәҙәте бар.* (Ә. Бикчәнтәев.)

**ни заман.** Бик күп ваҡыт. *Киткәненә ни заман инде.*

**ни ике арала.** Бик тиҙ (*эш-хәлде йәһәт кенә башҡарыуға ҡарата әйтелә*). *Ҡайһы арала һандыҡты асҡан, **ни ике арала** кейемен төйнәгән.* (Һ. Дәүләтшина.)

**ни икәнен белмәү** *нимәнең*. Эш-хәлдең аҡыл, ихтыярҙан тыш эшләнеүе хаҡында әйтелә. *Ҡәҙерле Урал атабыҙ, һин шул һыуҙы эсеп ебәр ҙә, үлемдең **ни икәнен белмәйенсә**, халыҡ бәхете өсөн мәңге йәшә*! (Эпостан.) *Былай ҙа арыуҙың **ни икәнен белмәгән** йәштәр, Тимербулат менән Диләкәй, бөгөн бөтөнләй ҙур яуаплылыҡ, ғорурлыҡ, шатлыҡ менән ҡанатланғандар.* (Һ. Дәүләтшина.) *Күҙен ҡан баҫҡан Фәхри бөтә кешелек сифатын юғалтты, аяуҙың **ни икәнен дә белмәй** хәҙер.* (Б. Бикбай.)

**ни ите, ни һөтө** *һөйл*. Бик булдыҡһыҙ, файҙаһыҙ, эшкә инмәгән.

**ни йөҙө(ң) менән.** Нисек оялмай, тартынмай (*берәй килешмәгән уңайһыҙ эш-хәлде башҡарған кешегә ҡарата*). *Халыҡ ат*

*бирмәҫ бит, Бохайыр ... Халыҡҡа **ни йөҙөң менән** бараһың?* (С. Злобин. Р. Ниғмәти тәржемәһе.)

**ник тыуҙы** *һөйл.* Бешмәгән, эшкә, тормошҡа бөтөнләй яраҡһыҙ. *Былай ҙа **ник тыуҙы** булырһың икән.*

**ни күҙе (күҙҙәре) менән күрһен (күрәйем).** Аптырарлыҡ, иҫ китерлек хәлде көтмәгәндә күргәндә, шаһит булғанда әйтелә. *Килеп сыҡһам, **ни күҙем менән күрәйем,** Фәхрислам Ғайнулланы абаулатып һүтеп ята, саҡ әрсәләнем.* (Т. Морат.) *Таңатар түҙмәгән, иң ситтәге тирмәгә ингән. Инһә, **ни күҙҙәре менән күрһен,** унда яралы бер иркәй ахылдап ята икән.* (Ә. Вахитов.) *Айбулат «ҡыҙыҡаиға» яҡыныраҡ килеп ҡараһа, **ни күҙе менән күрһен,** ул ысынлап та Көнбикә ине.* (Ф. Рәхимғолова.)

**ни күҙ (йөҙ) менән** [күренеү]. Оятҡа, хурлыҡҡа ҡалыуға ҡарата әйтелә. *Әгәр балыҡҡа бармай ҡалһам, һуңынан иптәштәргә **ни күҙем менән күренермен.*** (Ә. Чаныш.)

**нимә (ни) ҡалған.** Кемдеңдер һүҙенә, эшенә ҡыҫылған, тейеш булмаган ергә барған кешегә ҡарата асыу белдереп әйтелә. *Һиңә ни ҡалған инде, өйҙә генә ултырмай.*

**ниндәй ел(дәр) ташланы**? *кемде.* Көтмәгәндә йәки бик һирәк килеп сыҡҡан кешегә ҡарата аптырау белдереп әйтелә. — *Сунагатка, **ниндәй ел килтереп ташланы** һине был яҡҡа?* — *тип һораны Ольга Васильевна, йылмайып.* (Ж. Кейекбаев.) — *Һаумы, Гриша! Ҡайҙан былай **ел ташланы**?* (Һ. Дәүләтшина.) — ***Ниндәй елдәр ташланы**?* — *Арыҫланбәк санаһынан төшмәне.* [*Сергей:*] — *Бына киләм әле.* (Р. Низамов.)

**нисек етте шулай.** 1. Төрлө хәйләһен, әмәлен табып (*еңеп сығыу, берәй эш башҡарыу*). *Егет урман, тауҙар үтеп бара, бүреләр көтөүенә осрай, **нисек етте шулай** бүреләрҙән ҡасып ҡотола, ти.* (Әкиәттән.)

2. Теләһә ҡайһылай, тәртипһеҙ рәүештә. *Кирбес машиналарға **нисек етте шулай** тейәлә, бушатҡанда ватыла ҡырыла, ағас материалдары күпләп ҡалдыҡҡа сығарыла.* («Сов. Башҡ.»)

**нисек ер күтәрә** *кемде.* Насар эште күп ҡылған, үтә гонаһлы кешегә ҡарата асыу менән әйтелә.

**нисек итәһең.** Сараһыҙлыҡты, ҡулдан килмәгәнде белдерә. *Нисек итәһең, риза булдыҡ.*

**нисек кәрәк.** Көс-хәл менән, саҡ-саҡ әмәлен табып (*ниҙер башҡарыу*). *Ғилаж үҙ уландарына ҡыҙ таба алмай йонсой ине. Шул тиклем байлығы була тороп, оло улына, егерме алтыға еткәс, **нисек кәрәк** кәләш әйттерҙе.* (Ж. Кейекбаев.) *Беҙ бүрәнәне таяҡ менән ҡайыра-ҡайыра, **нисек кәрәк** һөйрәп сығарҙыҡ та ҡорораҡ ергә һалдыҡ.* (Ә. Вахитов.)

**нисә әйтһәң дә (әйтмә).** Кәмһенеү тойоп, тынысланырга тырышҡанды белдергәндә әйтелә. *Эскә батҡан яңаҡтарыма ит ҡуна башлаған, битемә алһыулыҡ ҡайта төшкән, таптары беленмәй тиерлек инде. Быныһы мине айырыуса ҡыуандырҙы. **Нисә әйтһәң дә,** егет кеше бит әле мин.* (Д. Юлтый.) *Александр*

*уға* [*Люсиға*] *иғтибар итмәне. Ул* ***нисә әйтмә****, ауырыу ине, һуғышта яраланып госпиталгә ингәйне.* (Ж. Кейекбаев.)

*син.*: ни әйтһәң дә.

**ни тора** *нимә*. Берәй эш-ҡылыҡҡа үтә ыңғай йәки үтә кире мөнәсәбәт белдергәндә әйтелә. *Даны* ***ни тора.*** — *Ысынлап та, бесәй тирмәне лә ҡорорға ярамаған йылғаға машина батып ятһын әле, гәрлеге* ***ни тора****?* (С. Агиш.) *Бакуй үрелә толомдай, сыжлап үткән ыңғайҙа, Ә* ***ни тора*** *салҡан ятып ял итеүе туғайҙа!* (Х. Назаров.)

**ни үле, ни тере**. Сыҡмаған йәне генә бар (*ҡурҡып, ҡалтырап торған хәлгә ҡарата*). *Кәзәбеҙ, меҫкен,* ***ни үле, ни тере*** *түгел, ҡурҡышынан тауыштан яҙған.* (С. Кулибай.)

**ни шайтаныма ярай (кәрәк)**. Бер нигә лә кәрәк түгел (*кәрәкһеҙ, яраҡһыҙ кеше йәки нәмә хаҡында*).

**ни әйтһәң дә (тиһәң дә)**. Элекке ҡәтғи ҡарарҙан, уйҙан кире ҡайтыуҙы, сигенеүҙе белдергәндә әйтелә. *Ни әйтһәң дә, үҙ туғаның бит.*

**нөктәһенә килтереү** *нимәне*. Тейешле рәүешкә еткереү, урынеренә, дәрәжәһенә тәңгәл итеү. *Нөктәһенә килтереп һөйләй ул ағай.*

**нужа бабай**. Тормош ауырлығы, этлек.

**нужа ҡаласын аҙ ашаған**. Донъяны күреп белмәй әле, этлекте аҙ күргән, татыған.

**Нух (Мамай) заманында**. Бик борон, әллә ҡасан. ... *Буйвол,* ***Нух заманынан*** *ҡалған һабанды һөйрәп, саҡ-саҡ күренерлек бураҙна йырып бара.* («Сов. Бапгк.»)

**нәүем* ҫаҙарына китеү**. Йоҡлау (*шаяртып әйткәндә ҡулланыла*). ... *Һүҙ барған табында ололар янында ултырыуҙан тартынып, мин тиҙерәк «****нәүем баҙарына****» китә һалдым.* (Б. Бикбай.) *Хәлдән тайған ваҡытта ғына: «****Нәүем баҙарына****, ятырға!» — тип ҡысҡырып фарман сыға.* (М. Ғафури.)

[*нәүем — *гәр.* йоҡо.]

# О

**оҙон-оҙаҡ, яп-яңы** *һөйл.* Берәй эш, хәлде оҙаҡҡа һуҙғанда оҡшатмай әйтелә.

**оҙон ғүмерле булһын**. Бала-сағаның изгелеген, эшен хуплап әйтелгән яҡшы теләк.

**оҙон (кәкре, шуҡ) ҡуллы, ҡулы оҙон (кәкре, шуҡ)** *кемдең*. Кеше нәмәһенә тейеп бара торған; ҡулсыр. *Бур намыҫлы кешеләрҙән ҡурҡа,* ***оҙон ҡуллылар*** *менән дуҫлаша, үҙ тирәһенә*

*фекерҙәштәрен йыя.* («Сов. Башҡ.») — *Ҡарттар, яңылыштығыҙ, ул* ***кәкре ҡуллы*** *түгел ине.* (Ш. Шәһәр.)

*син.*: бармағы үҙ ягына кәкре.

**оҙон ҡолаҡлы, ҡолағы оҙон** *кемдең.* Тейеш булмаған хәбәрҙе, һүҙҙе ишетеп барган, артыҡ хәбәрҙар булған.

**оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы.** Хәбәрҙе оҙаҡҡа һуҙмай, төп фекерҙе йыйып ҡына әйтергә теләүҙе белдерә. ***Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы,*** *йәш авторға шиғриәт өлкәһендә артабан да ошолай күндәм эшләүен теләргә генә ҡала.* («Сов. Башҡ.»)

**ожмах ҡошо.** Йәне ожмахта булыры шикһеҙ һаналған кешегә ҡарата әйтелә (*шәһит үлгән йәки сабый хаҡында).*

**оло ауыҙ.** Кәрәк-кәрәкмәгәнде белгән булып, күп һөйләгән кешегә ҡарата әйтелә.

**оло башты кесе итеп.** 1. Кеселеклелек күрһәтеп (*ниҙер эшләү*). — *Инде, ҡорҙаш,* ***оло башыңды кесе итеп*** *килеүеңә рәхмәт.* (Һ. Дәүләтшина.) [*Зәлифә әбей*] ***Оло башын кесе итеп*** *ахырҙа үҙе, киленен аулаҡта тап килтереп, һөйләшергә булды.* (Ш. Янбаев.) [*Бәкәтин*:] — *Оһо-һо, сәсән* ***оло башын кесе итеп*** *үҙе инде беҙгә*! (Б. Аҫылғужа.)

2. Кәмһенеү кисереп (*үҙең өсөн түбәнселек һаналған эште башҡарыу*). ***Оло башымды кесе итеп,*** *Республиканың сауҙа министрлығына йүгерәм.* (Н. Мусин.)

**оло бәйел(ле).** Бик күпте талап итеүсән кеше.

**олоға китеү.** Киҫкен төҫ алыу, киҫкенләнеү. *Эш* ***олоға китеп*** *барғанға оҡшай, бөгөн үк һөйләшергә кәрәк был малай менән.* (Н. Мусин.)

**оло йөрәк(ле).** Ил хәстәрен, кеше ҡайғыһын үҙенекенән өҫтөн ҡуйған; кешелекле, изгелекле. [*Әхмәҙулла бабай*:] ... *Изгелек елгә елгәрелеп осмай,* ***оло йөрәк,*** *халыҡ өсөн типкән йөрәк һүнмәй...* (Ә. Вахитов.) *Ҡайҙа ғына баҡма — урман, урман ... Ә тауҙары уйсан, ғәйрәтле. Ауылдары уның бәләкәс тә, Кешеләре* ***оло йөрәкле.*** (Х. Назаров.)

**олоно оло тип белмәй.** Өлкәндәргә кеселеклелек күрһәтмәй, тәрбиәһеҙ.

**олтанға (олтораҡҡа) ла ярамай.** Бер нигә лә яраҡһыҙ, булдыҡһыҙ.

**олтан (олтораҡ) булыу** *кемгә.* 1. Ярамһаҡланып йөрөү, ялағайланып хеҙмәт итеү.

2. Хеҙмәтсе, ҡол булыу.

**онотҡанда (әллә ниҙә) бер.** Бик һирәк, унда-һанда ғына. *Дошман* ***онотҡанда бер*** *генә ракета ебәрә.* (С. Әлибаев.) ***Онотҡанда бер*** *генә осраған сибек бойҙай үҫентеләре, таяныстары бөткәс, ергә бөгөлөп төшә.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Ата-әсәләр йыйылышы* ***онотҡанда бер*** *генә уҙғарыла.* («Сов. Башҡ.»)

**он-талҡан итеү (яһау)** *кемде.* Бик ҡаты туҡмау, йәнсеп ташлау.

**орсоҡ кеүек.** Өйөрөлөп йөрөп, етеҙ эшләү. *Мин тырышам, **орсоҡ кеүек** әйләнеп кенә торам.* (З. Биишева.)

**осло ауыҙ** *һөйл.* Ғәйбәт һөйләүсе. *Вәсилдең дә үҙенә хас ҡылығы бар ине. Ул, үҙенсә әйткәндә, «өйрәк осороу»ҙан ләззәт таба торғайны. Ерле булмаған хәбәрҙе уйлап сығара ла оҙон ҡолаҡ, **осло ауыҙҙарға** һөйләп ебәрә.* (И. Ниғмәтуллин.)

**осло күҙ(ле), күҙе осло** *кемдең.* Уны-быны күреп, белеп барған, тейеш булмағанды ла күрә торған. — *Таныны,* — *тине Зәйтүнә бышылдап ҡына.* — *Иртәгә бөтә ауылға хәбәр тарата инде.* — *Беләм, был **осло күҙле** кеше, ләкин ҡурҡма,* — *тип тынысландырырға тырышты уны Шәриф.* (Ғ. Ибраһимов.) *Ләлә: Танма, танма* [*Илгәҙәк*]. *Күрҙек инде, Беҙҙең **күҙ осло.*** (Ш. Бикҡол.) *Күреп бара бит ул халыҡ. **Осло күҙҙәр** аҙмы ни? Һүҙ китә.* («Сов. Башҡ.»)

**осо-ҡырыйы (сиге, аҙағы) күренмәү (булмау, юҡ).** 1. Бик оҙаҡҡа һуҙылыу, бөтмәү (*эш-хәл тураһында*). ... *Ике йыл инде һарыҡтар өсөн һарай һалабыҙ, **осо-ҡырыйы күренмәй...*** («Сов. Башк.») *Алдымда киң һәм тигеҙ ялан. Уның **осо-ҡырыйы күренмәй.*** (Ә. Чаныш.)

2. Бик оҙон, сиге булмаҫтай күренгән. *Ауылдың осо-ҡырыйы юҡ.*

**осона сығыу** *ниҙең.* 1. Аҙағына еткереү, тамамлау. *Ваҡ мәшәҡәт, ығы-зығы тамам, Бар эшемдең **сыҡтым осона.*** (М. Кәрим.) *Урыҫса-башҡортса мәктәп асыуҙы юллап та йөрөгәйне* [*Нурлы кейәү*], *нисектер, **осона сыға** алманы.* (Ә. Вахитов.)

2. Серен сисеү, асылын аңлау. *Еребеҙҙең иңе-буйы күптән үлсәнгән. Ә бына шул ерҙәге байлыҡтың **осона** барәү ҙә **сыға** алғаны юҡ әле.* («Сов. Башҡ.»)

**осон һыуға йәшереү** *ниҙең.* Берәй мутлыҡты күрһәтмәҫкә тырышыу. [*Бухгалтер*] *юрый, бурлыҡтың **осон һыуға йәшереү** ниәте менән, иҫәп-хисап документтарын бутай.* («Сов. Башҡ.»)

**осто күҙе юҡ булды.** Ҡапыл ғына юғалған, юҡҡа сыҡҡан кеше йәки нәмә тураһында әйтелә. *Бына бөгөн ҡылыс юғалғанға егерме көн үтте. Отряд йыйылышы булған көнө уны ҡыҙыл мөйөштә ҡалдырғайныҡ* — *бына шунан инде **осто күҙе юҡ булды.*** (Ғ. Хисамов.)

**оҫта ҡуллы, ҡулы оҫта** *кемдең.* Һөнәрле, ҡулынан һәр эш килә торған. *Тимерсе ул, **оҫта ҡуллы** кеше.* (Б. Бикбай.)

**осон осҡа ялғау** *нимәнең.* Эште, бурысты саҡ-саҡ башҡарып сығыу. *Икенсе яҡтан уға етер-етмәҫ кенә продукция етештереп, **осон осҡа ялғап** барыу ҙа етә.* (Т. Бүләков.)

**оялы көсөк** *һөйл.* Бер-береһен яҡлап, берҙәм булған күмәк туған-тыумасаға ҡарата әйтелә.

**оят өлөшө.** Аш-һыуҙы ашап-эскәндә һауыт төбөндә әҙәп өсөн әҙ генә ҡалдырылғаны. *Әрһеҙ ҡунаҡ **оят өлөшөн** ашаған.* (Әйтем.) *Уныһы **оят өлөшө,** ҡабат эсмәйем инде.*

**оя төбө.** Кинйә бала.

**ояттан һуң тыуған.** Ояла белмәй торған, ояттың ни икәнен белмәгән; оятһыҙ, хаяһыҙ.

**оятын юғалтҡан, ояты юҡ.** Әҙәп-тәртипкә һыймаған ҡылыҡҡа ҡарата асыу менән әйтелә.

# Ө

**оҙғәне лә ҡуйғаны.** Бик тап килеп, килешеп тора. *Гөлгөнәнең ҡабарынҡы ирендәре түңәрәк, тулы йөҙөнә **өҙгәне лә ҡуйғаны.*** (Д. Исламов.)

**өҙмәү ҙә ҡуймау.** Бер үк хәбәрзе, үтенесте, һораузы өҙлөкһөҙ ҡабатлау, ныҡыу. *...Талха ...Фатиманы алам, тип йөрөй башланы; шул хаҡта һәр ваҡыт **өҙмәй ҙә ҡуймай** һөйләп йөрөр булды.* (Ж. Кейекбаев.) — *Бына дегәнәк! **Өҙмәй ҙә ҡуймай.** — Секретарь ҡыҙыҡайҙың асыуы ҡабарҙы.* (Я. Вәлиев.) *Шул ауыл тигәнеңде **өҙмәнең дә ҡуйманың** инде.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**оҙөлөн тороу.** Кемдер өсөн өҙәләнеп, ниҙер эшләргә тырышыу.

**өҙә баҫып** 1. [йөрөү, атлау...]. Аҙымдарҙы ныҡ, ҡеүәтле итеп (*йөрөү*). *Мәүлиха инәйҙе күреп, уның ологайған булыуына ҡарамай, **өҙә баҫып** йөрөүенә, зирәклегенә, салт күңелле булыуына һоҡланмаған кеше юҡтыр.* (Ш. Янбаев.) *Иллене тултырып килеүенә ҡарамаҫтан, [Татьяна] үҙе ғәжәп теремек, етеҙ һәм **өҙә баҫып** йөрөгән кеше.* («Сов. Башҡ.»)

2. [бейеү...]. Бик матур итеп, шыҡылдата баҫып (*бейеү*). [*Егеттәр менән ҡыҙҙар*] *түңәрәк уртаһына бер-береһен саҡырып сығаралар ҙа таҡмаҡҡа **өҙә баҫып** әйләнәләр.* (Н. Мусин.) *Ғәжәпләнмә, иҫем китеп ҡарап торһам тулған айға. Осоп төшөп бейеп китһәм, **өҙә баҫып** «Ҡарабайға».* (Ф. Рәхимғолова.)

**оҙә һуғыу.** Ҡырҡа хәл итеү. *Ә Фәйрүзә һуңғы ваҡыттарҙа моңайып йөрөнө лә, дирекция ҡаршы төшһә лә, ҡайтам тип, **өҙә һуҡты** ла ҡуйҙы.* (Н. Мусин.) *Илфат ағаһына ҡарап бер тына һүҙһеҙ ултырҙы ла, ҡапыл **өҙә һуҡты.** — Китәм мин өйҙән, ағай.* (З. Ҡаҙаҡбаева.)

**ойҙәге сүпте тышҡа сығарыу.** Ғаиләлә булған хәбәр, ығы-зығыны ситтә һөйләү.

**өй ҡотлау.** Яңы һалынған өйҙөң хужаһына мәжлестә бүләк биреп, өйҙөң нигеҙе ныҡлы булыуын теләү. *Яңыраҡ минең әхирәтем ... һауынсы Миңнеямал Фәйзуллина **өй ҡотлау** кисәһе үткәрҙе.* («Сов. Башҡ.»)

**өйрәнмәгән тай кеүек.** Бер ҙә ипкә, яйға килмәгән кешегә ҡарата әйтелә. *Еңгә, **өйрәнмәгән тай һымаҡ,** терт-мерт иткән булды.* (Б. Бикбай.)

**өй тауығы (көбәге)*** *һөйл.* Өйҙән сыҡмай ултырған кешегә ҡарата мыҫҡыл менән әйтелә. — *Вәт шатландырҙы, аҡыллы баш! Мине отставкаға сығарырға,* ***өй тауығы*** *яһарғамы?!* (Б. Бикбай.)

[***Көбәк** — боронғо төрки телендә эт.]

**өй һаҡлау.** Өйҙән сыҡмай ултырыу. [*Ҡатын:*] *Был ҡанды эсһәгеҙ, һеҙгә арыҫландай егеттәргә әүерелеп, рәхәтләнеп һунарға йөрөргә, ә атайығыҙға* ***өй һаҡлап*** *ултырырға тура килер.* (Әкиәттән.)

**өй эсе.** Бер ғаилә тотош. *Егерме беренсе йылғы аслыҡтан бөтә* ***өй эсе*** *ҡырылғас, ике йәшлек Леняны күрше ауылдағы хәллерәк бер ағаһы алып китте.* (М. Кәрим.)

**өкөһө олоу** *кемдең, диал.* Көтмәгәндә уңынҡа өлгәшеү (*ниҙер табыу һ. б.*).

*син.*: бүреһе олоу.

**өлөш алыу.** Ниндәйҙер ҡылыҡ өсөн әрләнеү, йә туҡмалыу, кәрәкте алыу. *Хәтереңдәме әле теге көн, беҙ ватҡайныҡ тәҙрә өлгөһөн. Мәктәптә лә* ***алдыҡ өлөштө****, өйҙә өлөш бигерәк мул төштө.* (С. Ғәбиҙуллин.)

**өлөшкә инеү.** Дөйөм мөлкәттән үҙеңә ниҙер алып ҡалыу.

**өлөшөңә тейгән (төшкән) көмөшөң.** Яҙмышыңа, үҙеңә тура килгәнгә риза булырга өндәп әйтелә. ***Өлөшөңә тейгән көмөштәрең*** *Ят устарға таммай таланып. Инде йылы ямғыр һыуын әсә Ҡан, күҙ йәше эскән яланып.* (Р. Бикбаев.) *Иллә-мәгәр фани донъяларҙа һәр кемдең дә була торғандыр ул* ***өлөшөнә төшкән көмөшө****.* (А. Игебаев.)

**өмөт бағлау (бәйләү, итеү, тотоу)** *кемгә, нимәгә.* Ышаныс булыу, ышанып ҡарау. *Саматтан допрос алып барғанда, малай судьяға* ***өмөт бәйләп*** *ултырҙы.* (Ә. Бикчәнтәев.) *Илселәр һәр ырыуҙан тиерлек һайланған. Халыҡ уларға ҙур* ***өмөт бағлап*** *оҙатҡан.* (Ә. Вахитов.)

**өнө лә юҡ, тыны ла юҡ** *кемдең.* Тауыш-тынһыҙ ғына, бер кемгә ҡагылмай, бер нәмәгә ҡыҫылмай йәшәп ятҡан кешегә ҡарата әйтелә.

**өнөммө был, төшөммө?** Ҡапыл тыуган хәлдән аптырап, югалып ҡалганда әйтелә. *Ике һалдат кесе лейтенантты «үрә ҡатып» ҡаршы алды. Башта мин ҡаушап ҡалдым,* ***өнмө был, төшмө****? Тап үҙҙәре!* (М. Кәрим.)

**өнөн тығыу** *кемдең.* 1. Һүҙ әйтмәҫлек итеү. *Аҡназар мулла Боғараның* ***өнөн тыҡтырырлыҡ*** *һүҙҙәр табыр ине лә ул, ер аяғы ер башы яҡтан тәмһеҙләшер саҡмы ни.* (Ә. Хәкимов.)

2. Дөмөктөрөү, үлтереү.

**өнө(ң) тығылһын** *тупаҫ.* Үлһен, дөмөкһөн тигән ҡаргау һүҙе.

**өпәк* төкөтөү.** Аттың ҡамыт һуҡҡан ере төҙәлһен тип, таҙ кешенең башын ярага төкәтеп имләү.

[***Өпәк** — муйында ҡамыт һуҡҡан ер].

**өрмәгән ергә ултыртмау** *кемде.* Артыҡ ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеү, ярарға тырышыу. *Марина Григорьевна уны бик иркәләне, **өрмәгән ергә ултыртманы**.* (Х. Мохтар.) *Көтөлмәгән бәхеттән иҫергән техник секретарь **өрмәгән ергә ултыртманы** Тимергәлене.* (Я. Вәлиев.) *Илгәҙәк килене ... орсоҡтай өйөрөлөп йөрөр, Сәғүрәне **өрмәгән ергә ултыртмаҫҡа** тырышыр.* (Ф. Иҫәнғолов.)

*син.*: уста йөрөтөү, бер алдына, бер артына сығыу.

**өрлөккә сабыу.** Ант итеп һүҙ биреү. — *Нурислам ҡайнаға бит, икенсе эсмәйем тип, **өрлөккә сапҡан**, тиҙәр.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**өрөп ҡабыу.** Һаҡлыҡ менән эш итеү, эш-тормошта, ҡылыҡта һаҡлыҡ күрһәтеү. *Бер кәрәк Әптелғәлимовтарҙың тағы ла кәрәк булыуы бар, тип уйлай ауыҙы бешеүҙән бик ҡурҡҡан, **өрөп ҡабырға** өйрәнгән һаҡ крәҫтиән.* (Ф. Иҫәнғолов.) [*Фәхри*:] *Крәҫтиәндең хәҙер ауыҙы бешкән шул инде ... **өрөп ҡаба**.* (Б. Бикбай.)

**өрөп тултырған кеүек**. Тулы тәнле, һимеҙ. *Кеше бик ала. **Өрөп тултырған кеүек**, шундай һимеҙҙәре бар* [*тауыҡтарҙың*]. (В. Исхаҡов.)

**өс быҙауға кәбәк айыра белмәү**. Ябай ғына нәмәне лә аңлай, төшөнә алмау, үтә туң булыу.

**өҫ бөтөн, тамаҡ туҡ**. Етеш тормошҡа ҡарата әйтелә. *Хәҙер ҡыҙҙың **өҫтө бөтөн, тамағы туҡ**, күңеле генә китек, ти.* (Әкиәттән.)

**өҫкә алыу** *нимәне.* Башҡарып сығыу бурысын йөкмәү. *Аръергардҡа етәкселек итеүҙе үҙ теләге менән **өҫтөнә алды** ул.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**өҫкә ауып тороу (ағас)**. Күп булыу, емерелеп үҫеү. *Ҡышлау урыны арыу, өй һалып ҡуйыу артыҡмы ни инде. Ағас **өҫкә ауып тора**.* (Н. Мусин.)

**өҫкә бысраҡ өйөү**. Яла яғыу, хатта ғәйепләү.

**өҫкә сығыу.** 1. Эштә, мөнәсәбәттә өҫтөнлөк алыу, еңеүгә ирешеү. *Дөрөҫлөк ҡасан да булһа **өҫкә сығырға** тейеш, — тип уйланы* [*Муллайән*]. («Сов. Башҡ.»)

2. Растрата яһау (*һатыу эшендә, иҫәп-хисапта*). *Һатыусының **өҫтөнә сыҡҡан**.*

**өҫтөнә баҫыу** *нимәнең.* 1. Ниҙендер асылын ғына әйтеп биреү, асылына тап килтереү. — ***Өҫтөнә баҫтың**. Мин дә шуны әйтмәксе инем, — тип Байғужа урынынан торҙо.* (Д. Юлтый.)

2. Ниндәйҙер ваҡиғаға, эш-хәлгә тәңгәл килеү. — *Иҫәнме, Пахомыч! Әйҙә, ултыр*! *Тап **өҫтөнә баҫтың**. Һине генә көтә инек, — тине йорт хужаһы Михеев.* (Ж. Кейекбаев.)

**өҫтөнә менеп барыу** *кемдең.* Әрләп, тирғәп, ауыҙын ҡаплап ҡуйыу, әтәсләнеп еңергә тырышыу. — *... Күҙемә күренмә, алйот, хәйерсе балаһы*! — *тип, Ҡәмәр ҡортҡа Ғәләүҙең **өҫтөнә менеп бара** бит.* (Т. Йәнәби.)

**өҫтөнән йөрөү** *кемдең.* Юғарыға ғәйепләп хәбәр ебәреү. *Ялыу килгән,* ***өҫтөнән йөрөп*** *алдына сығырлыҡ түгел. Эш барғас, районда ла ышаналар.* (Р. Солтанғәрәев.)

**өҫтөнә өйҙәй булыу** *кемдең, һөйл.* Бәлә һалып ныҡ бәйләнеү.

**өҫтәүенә өс сүмес.** Бер көйөк, хәсрәт өҫтөнә икенсеһе килеп сыҡҡанда әйтелә. [*Харрас:*] *Шул ғына юҡ ине.* ***Өҫтәүенә өс сүмес*** *тигәндәй, бәлә өҫтөнә бәлә.* (Ғ. Аллаяров.)

**өҫтән йөк (тау) төшкәндәй (төшкән кеүек) булыу.** Ниндәйҙер ауырлыҡтан ҡотолоп, еңеллек кисереү. ***Өҫтөмдән бик ауыр йөк төшкән*** *кеүек булды.* (М. Ғафури.) *Эшемдән ҡәнәғәтмен.* ***Өҫтән тау төшкәндәй*** *булды.* (Р. Ғарипов.)

**өтөп алып барыу** *кемде.* Ныҡ ҡыҫырыҡлау йәки ашыҡтырыу. *Бер туҡтауһыҙ буржуйҙарҙы* ***өтөп алып*** *барабыҙ. (Һ. Дәүләтшина.)*

**өтөп ҡырыу.** Ныҡ ашыҡтырыу, өтәҫләү. [*Ләлә:*] *Кәңәш итеү түгел, үҙем дә белмәнем.* ***Өтөп ҡырҙылар.*** (Ғ. Хисамов.)

# Р

**рамканан сығыу** *һөйл.* Билдәле бер тәртип, ҡанундарҙан ситкә китеү, уларҙы тотмау.

**ризығы ситкә сәселеү** *кемдең.* Дини ҡараш буйынса, алла тарафынан яҙылған ризыҡ төрлө ергә таралыу (*сит-ят ерҙәрҙә йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә; уны ризығы тартып йөрөтә*).

**ризыҡ бөтөү.** Мосолман дине буйынса, алла яҙған аҙыҡ бөтөп, үлер көн килеү. *Туҡта, Ҡуҙыйкүрпәс! Атайыңды ҡаланан эҙләмә, — ти Әүлиә. — Уның* ***ризығы бөтөп,*** *әжәле килеп етте инде.* (Эпостан.)

**ризыҡҡа яҙыу.** Ниҙелер ашарға насип булыу. *Тауыҡ эҙләп ары һуғылдым, бире һуғылдым — тик юҡ бит эҙләгәнем.* ***Ризыҡҡа яҙмағанмы*** *икән ни, мин әйтәм.* (В. Исхаков.)

**ризыҡ яҙыу (тартыу).** Кешене ашар ризығы, ашы үҙ артынан төрлө ергә йөрөтә тип ышаныу. *Шулай итеп,* ***«ризыҡ яҙған»*** *тигән кеүек, Темәстән Стәрлегә, унан Мәскәүгә, Мәскәүҙән Петроград һәм Кронштадҡа китергә булдым.* (Ш. Хоҙайбирҙин.)

**рисуай* итеү (ҡылыу)** *кемде.* Кеше алдында оятҡа ҡалдырырлыҡ итеп фашлау, мыҫҡыллау. *Хан был эшкә асыуланып, һарайҙы уратып алып инә лә ҡыҙын* ***рисуай итә.*** (Әкиәттән.) *Ҡарт көнөмдә битемә ҡара яҡты, мир алдында* ***рисуай итте*** *бәдбәхет ҡыҙыҡай.* (Н. Иҙелбай.)

[***рисуай** — *фарс.* фашлау.]

**рәтен табыу (сығарыу)** *нимәнең*. Эш-хәлдең йүнен, башҡарып сығыу юлын табыу. *Көҙөн яҡынан Ырымбурға килһәм дә, уҡыуҙы дауам итерлек **рәт табып** булманы.* (Т. Йәнәби.)

**рәт китеү**. 1. Көс-хәл бөтөү. *Бабайҙың **рәте китте**.*

2. Эштең көйө бөтөү, булған тәртибе боҙолоу. *Хужалыҡтың **рәте китте**. — Һуғыштың өсөнсө йылында фронтта бөтөнләй **рәт китте**.* (Ж. Кейекбаев.)

**рәткә инеү**. 1. Эшкә тотонорға ярарлыҡ хәлгә килеү. — *Буяһаң, иҫке сабата ла **рәткә инә** ул...* (И. Насыри.)

2. Һауығып, ғәҙәти хәлгә килеү. *Саҡ **рәткә инеп** алдым.*

*син.*: аяҡҡа баҫыу 3.

**рәхмәт йөҙөнән**. Ҡәнәғәтлек белдереп (*ниҙер әйтеү йәки ҡылыу*). ***Рәхмәт йөҙөнән** Бируте уға* [*Альжсҡа*] *йылмайып ҡуиҙы...* (Ҡ. Ибәтуллин.)

**рәхмәт яуғыры (төшкөрө)**. Яҡыны теләк һүҙе. *Бынау балағыҙ Рөстәмде әйтегеҙ әле һеҙ, **рәхмәт яуғырыны**, ҡукрәген кирә бирел, беҙ Өфөнөкө, тисе.* (Ғ. Ғүмәр.)

**рәхәтен күреү** *кемдең, ниҙең*. Файҙаланып кинәнес табыу, яҡшылығын татыу. *Бала **рәхәтен күреү**. Ир **рәхәтен күреү**.*

# С

**сабатаны түргә элеү**. Түрә булғас, артыҡ маһайып, әллә кем булып китеү. [*Моратша*:] *Түрә булып, **сабатаһын түргә элеүе** шул булғандыр инде.* (Т. Хәйбуллин.)

**сабата туҙҙырыу**. 1. Эш-йомош артынан күп йөрөү. *Шаһнияз: Мин дә һинән ҡәнәғәт!.. Тимәк, Дәүләтовтар, атаһы ла, улы ла тигәндәй, һыр бирмәгән. Был донъяла юҡҡа ғына **сабата туҙҙырмағанбыҙ**.* (Ә. Мирзаһитов.)

2. Бушҡа йөрөп ваҡыт уҙҙырыу.

**сама самаға килеү**. Бер тәртипкә, рәткә килеп алыу. *Алмасыбыҙ арғымаҡтар еккән оло санаға. Аҡ толоп та кейеп алғас, **сама килгән самаға**.* (С. Ғәбиҙуллин.)

**саманан сама ашыу**. Арттырып ебәреү. ***Самаларҙан аша самабыҙ**. Кирелеп тә бесән сабабыҙ.* (Т. Йосопов.)

**сара күреү**. Эш-хәлде башҡарыу, үтәү, йүнен табыу. [*Мөршиҙә*]. *Артабан да белемен арттырыу өсөн мөмкин булған бөтә **сараларҙы күрә**.* (С. Агиш.)

**сараһыҙҙың көнөнән**. Эш-хәлде башҡарыу, еңеп сығыу өсөн башҡа юл, ысул булмағанлыҡтан. ***Сараһыҙҙың көнөнән** риза булыу.*

**сарлап ҡуйған кеүек.** Яуапҡа үтә оҫта, шып-шыма (*тел хаҡында*). *Эйе, Кузнецовтың теле* ***сарлап ҡуйған*** *тиерһең. Теләһә ниндәй фактты ла үҙ файҙаһына борорға әҙер тора.* («Сов. Башҡ.»)

**сар талаҡ** *һөйл.* Үтә лә үҙ һүҙле, еңмеш.

**сарыф итеү (ҡылыу).** Йәлләмәй тотоноп бөтөү, тәләфләү. *Ауырлыҡтан зарланманы Нәғимә, ҡыҙы өсөн бар йәшлеген* ***сарыф итте.*** (Б. Бикбай.)

**сат йәбешеү** *кемгә, нимәгә.* Ебәрмәҫтән тотоноу, үҙеңдеке итергә тырышыу. *Нурлат был картина үҙенеке икәнен әйткәс, бабай: — Күсермәһен беҙгә лә яһап бир! — тип* ***сат йәбеште.*** (Ф. Иҫәнғолов.)

**сатната баҫыу.** Үҙеңә үҙең ышанып, дәрт, көс сығарып атлау.

**саф йөрәктән.** Ысын күңелдән, ҙур ихласлыҡ менән (*ниҙер эшләү*).

**сафҡа баҫтырыу.** 1. *нимәне.* Төҙөп йәки йүнәтеп, эшләтеп ебәреү. [*Быйыл*] *малсылар бинаһын төҙөп бөтөрөп,* ***сафҡа баҫтырырға*** *кәрәк.* («Сов. Башҡ.»)

2. *кемде.* Ауырыуҙан ҡотолдороп, тәрбиәләп эшкә индереү.

**сафҡа баҫыу.** 1. Төҙәлеп, йүнәтелеп эшләй башлау.

2. Үҫеп етеп йәки ауырыуҙан арынып эшкә тотоноу.

**сафтан сығыу.** 1. Боҙолоу, эшләрлек хәлдә булмау.

2. Ауырып йәки хәлдән тайып, эшкә ярарлыҡ булмау.

**сафсата* һатыу.** Буш хәбәр һөйләү. *Бикбулат ул бер улаҡтан һыу ағыҙып тик ята, ҡылдый-былдый борғоланмай,* ***һатмай*** *артыҡ* ***сафсата.*** (Ш. Бабич.) *...Һинең ғәйбәт,* ***сафсата һатып,*** *донъяңды мөкиббән онота торған ғәҙәтең бар. Донъя һинең ҡулыңда ҡалған, күҙ-ҡолаҡ бул!* (С. Кулибай.) *Ә беҙ шул арала уның үҙенең кем икәнлеге тураһында аҙыраҡ* ***сафсата һатып*** *алайыҡ.* (Р. Ғабдрахманов.)

[***Сафсата** — *ғәр.* буш, мәғәнәһеҙ һүҙ.]

**себенде болан итеү.** Бәләкәй генә нәмәне оло итеп һөйләү, арттырып күрһәтеү. [*Пахомыч*] *һөйләп алып китте: — Ул ялған хәбәр. Мастер Кацелде туҡмау булманы. Управляющий был эште бунт тип ҙурайтырға әйтә,* ***себенде болан итеп*** *күрһәтә.* (Ж. Кейекбаев.)

*син.*: төймәләйҙе дөйәләй итеү.

**себендәй йән.** Кешене бәләкәйләтеп күрһәтергә теләгәндә әйтелә. ***Себендәй йәнем*** *сығып киткәндә лә мин һеҙгә сер сисмәм.* (Т. Хәйбуллин.)

**себен кеүек.** 1. Күпләп (*ҡырылыу, үлеү*). *Ә беҙ, аңралар, көнтөн йоҡламай, ас-яланғас ут эсендә йөрөйбөҙ, һис бер маҡсатһыҙ* ***себен кеүек ҡырылабыҙ.*** (Д. Юлтый.) *Күп кеше егерме беренсе йылда ярты ҡышҡа етмәй малын һуйып ашап бөттө. Халыҡ* ***себен кеүек*** *ҡырылды.* (Т. Бүләков.)

2. Һармаҡланыу, йәнгә тейеп йәки күмәкләп (*йәбешеү, һарылыу*). *Был гәжәп машинаны күрергә барған кешеләр уны* ***себен кеүек һырып*** *алғайнылар.* (Һ. Дәүләтшина.)

**себен осһа ла ишетелер(лек), себен осҡан тауыш та ишетелер.** *Һөйләп бөткәнсе, халыҡ тын да алмай ултырҙы.* ***Себен осһа ла ишетелерлек*** *ине.* (Р. Бикбаев.) *Басир ҡарт уҡығанда, өй эсендә* ***себен осҡан тауыш та ишетелерлек*** *ине.* («Сов. Башҡ.»)

**себен осороу** *кемдән.* Бәлә-ҡазаны, яуаплылыҡты һиҙҙермәй генә икенселәргә ауҙарыу. *«Ҡарарҙы» Хәлимуллина Рәйсәнән ҡотолоу, үҙенән* ***себен осороу*** *өсөн генә яҙған икән Ғәлимов.* («Сов. Башҡ.»)

***себен теймәҫ сер итер*** *һөйл.* Тиҙ генә илап бара торған йомшаҡай кешегә ҡарата әйтелә.

**сей ауыҙ.** Үҫеп, олгөрөн етмәгән, бешмәгән. [*Нәғим Әптрәхмәнгә*:] *Шуны әйтәм әле, нишләп шул* ***сей ауыҙ*** *малайҙарға һүҙеңде биреп тораһың?* (Һ. Дәүләтшина.) *Мин һеҙҙе өгөтләргә теләмәйем дә, һеҙ бит инде* ***сей ауыҙ*** *малай түгел, ә еткән егет кеше.* (Н. Иҙелбай.)

**селпәрәмә килеү.** Ҡапыл ғына юҡҡа сығыу, емерелеү, ҡыйралыу. *Иң тәүҙә беҙгә нисек итеп үҙебеҙҙең ҡулда власты, Советты ныҡытырға кәрәк. Шунһыҙ беҙҙең бөтә көсөбөҙ* ***селпәрәмә киләсәк.*** (Я. Хамматов.) *Иң аяныысы — тимер юл буйлап йырып сығыу өмөтө* ***селпәрәмә килде.*** (Ф. Иҫәнголов.) **Селпәрәмә килтереү** *кемде, нимәне: Рәсәй тупрағына ябырылған фашист яуы Фәһимәнең бөтә өмөттәрен* ***селпәрәмә килтерҙе.*** (Д. Исламов.) *Һуғыш беҙҙең хыялдарҙы* ***селпәрәмә килтерҙе.*** (Ш. Янбаев.)

**семтеп алыр ите юҡ** *һөйл.* Бик ябыҡ (*кеше*).

*син.*: ҡаҡ һөйәк, тире лә һөйәк.

**семәй тейәтеү** *кемгә диал.* Кешене ниндәйҙер өмөттән буш ҡалдырыу, һемәйтеү.

**сентябрҙә һин дә бер, мин дә бер.** Көҙ көнө бөтә кеше лә мул була (*көҙгө байлыҡ менән маҡтанған кешегә ҡарата яуап итеберәк әйтелә*).

**сепрәк баш** *һөйл. тупаҫ.* Аҡылһыҙ, башһыҙ (*күберәк ҡатынҡыҙға ҡарата әрләү, кәмһетеү һүҙе*). [*Закир*:] *Иҫәр,* ***сепрәк баш****, кемгә күҙең төшкән бит, хәсис.* (З. Биишева.) *...Һинең Сөйөмбикәң, ҡойроҡ аҫтына шлея һуҡмайынса, тәртә вата. Шунан нисек аңлайһың инде ул* ***сепрәк баштарҙы!*** (Ш. Янбаев.)

**сер бирмәү.** Хәл ауыр булһа ла бирешеп бармау, яҙмышҡа зарланмау. *Кеше шикелле кешеләр менән ағай-эне булып ҡан ҡатышҡас,* ***сер биреп****, тартынып тороп булмаҫ инде.* (Һ. Дәүләтшина.) *Беҙҙең һалдаттар* ***сер бирмәй****, икмәге булмаһа ла.* (Халыҡ йырынан.)

**серегән бай.** Бик ныҡ байыҡҡан. *Борон-борон заманда, кәҙә командир, өйрәк урядник, һайыҫҡан һалдат булған ваҡытта, йәшәгән, ти, бер* ***серегән бай.*** (Әкиәттән.)

**серек баш (мейе)** *һөйл.* 1. Башы эшләмәгән, тәрән уйлай белмәгән. — *Һин* [*Ҡолморҙа*] ***серек баш.*** *Түшеңдәге баҡыр миҙалға һатылдың... — тине Сурағол.* (Т. Хәйбуллин.)

2. Хәтерһеҙ, тиҙ онотоусан кешегә ҡарата әйтелә. *Эй,* ***серек мейеһең*** *дә инде, әле генә әйттем, онотҡанһың.* (Һөйл.)

**серек сабата** *һөйл. яманл.* Юҡҡа ғына илап барған; илаҡ. *Ҡала малайҙарының ниндәй икәнен генә күрһәттем мин һиңә. Уның* ***серек сабата*** *икәненә мин ғәйепле түгел!* (С. Агиш.)

*син.*: себен теймәҫ сер итер.

**серемгә талыу.** Йоҡлап китеү. *Ваҡыт уҙа тора. Сержант, ята торғас,* ***серемгә тала.*** («Ағиҙел».)

**серем итеү.** Бер аҙ ғына йоҡлап алыу. [*Амантаев*:] ***Серем итеп*** *алырға ниәтең булһа, бына ошо йәшел диван һинеке.* (Ә. Бикчәнтәев.) *...Зыя ауырый, төн буйына йоҡламаны, таң алдынан ғына* ***серем итә*** *башланы...* (М. Тажи.)

**сер сисеү** *кемгә.* Уй-фекерҙе ышанып асып биреү. *Фәхри* ***серҙе*** *бөтөнләй үк* ***сисеүҙе*** *кәрәкле тапманы...* (Б. Бикбай.)

**сигенә сығыу** *нимәнең.* Һуңғы нөктәһенә килеп етеү, барып терәлеү. *Еткән ике ҡыҙ ҙа кейәүгә киткәс, фәҡирлектең* ***сигенә сыҡҡан*** *ғаиләгә таяныс кәрәк ине.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**сик ҡуйыу** *кемгә, нимәгә.* Кемдеңдер эшен, ҡылығын тыйыу, туҡтатыу. *Ҡарабаштың яңғыҙлығына* ***сик ҡуйыу*** *теләге көсәйҙе.* (И. Насыри.) *Бер ваҡыт брикет алып ҡайтып барғанда, ферманың хисапсыһы күреп ҡала ла уның был эшенә* ***сик ҡуя.*** («Сов. Башҡ.»)

**сиктән ашыу.** Тейеш һаналған саманан артып китеү. *Вәхшиҙәрҙең береһе* ***сиктән ашып,*** *шакалдан да яман ҡоторған...* (Ғ. Ғүмәр.) *Диңгеҙҙең ҡотороуы хәҙер* ***сиктән ашты.*** (З. Биишева.)

**сикәгә тейеү.** Асыуҙы килтереү. *Артыҡ дулама әле, мотор кешеһе. Дыуамаллығың бик күптән бирле* ***сикәгә тейә*** *ине.* (М. Кәрим.)

**сикә ҡыҙарыу** *нимәгә.* Ризаһыҙлыҡ белдереү. — *Нимәгәлер* ***сикәң ҡыҙарып*** *тора, бугай, бабай, — тине, бындай осрашыуҙы көтмәгән Әмир.* (Х. Ғиләжев.)

**сикә ҡыҫылыу.** Ныҡ асыу килеү.

**сикәһе ҡыҫыҡ** *кемдең* **(ҡыҫығк сикә).** Тиҙ генә ҡыҙып бара торған; ҡыҙыу, асыусан. *Кейәүҙең* ***сикәһе ҡыҫыҡ*** *күренә, үтә ҡыҙыу, ахырыһы.* (Һөйл.)

**сиҡан сығарыу** *һөйл.* Ҡунаҡ күрһәтеп, үҙенә саҡырырға бурыслы итеп ҡуйыу.

**сират күпере.** Үтеп сығыуы бик ауыр һаналған эш-хәл, кәртә. *Айгөл ханым иһә аспирантура тигән* ***сират күперен*** *үтергә хыялланып йөрөгән фәрештә, имеш...* (Ф. Исхаҡова.)

**сиртһәң һытылырға (ҡаны сығырға, ярылырға) тора.** Тулы, тығыҙ тәнле, ныҡ һимеҙ. [*Управляющий*] *һимеҙ елкәле,* ***сиртһәң ҡаны сығырға торған,*** *тыржыҡ танаулы һөмһөҙ бер бәндә ине.*

(Ж. Кейекбаев.) ***Сиртһәң ҡаны сығырлыҡ*** *Муллайәненең, сырхауға һабышып, һуғышҡа бармай ҡалыуы ла бик ныҡ асыуына теиҙе уның [Садрисламдың].* (Ф. Иҫәнголов.) *Миңһылыу еңгәнең элекке* ***сиртһәң ҡаны сығырҙай булып торған*** *биттәре һурылған, сәстәре йоҡарған...* (Р. Солтангәрәев.)

**ситкә тартыу.** Эштә, ҡылыҡта булған йүнәлештән тайпылыу.

**ситкә тибеү (ҡағыу)** *кемде.* Үҙ итмәү, яҡын күрмәй йәберһетеү; ситләтеү. *Майың бөтөп, ҡоро һөйәк ҡалғас, һине* ***ситкә тибәләр*** *икән.* (М. Ғафури.) [*Сәлихова*] *уҡыусыларҙы үҙе ярата, ихтирам итә. Бер кемде лә* ***ситкә типмәй.*** («Бангк. уҡ.») *Ҡәйнәһен ул сағып тора, гелән* ***ситкә ҡағып*** *тора.* (Т. Арслан.)

**ситтә тороу (ҡалыу)** *ниҙән.* Ҡатнашмау, ҡыҫылмау. *Бөрйәндәр ҙә, ҡырҡъяндар һымаҡ, аҙ һанлы ара,* ***ситтә торорға,*** *ыҙғышты олоға ебәрмәй, шаҡмандар менән ҡыпсаҡтарҙы үҙ-ара килештерергә ятраҡандар.* (Б. Бикбай.)

**ситтә торһон.** Бер нәмәне икенсеһенән өҫтөн күреп маҡтағанда әйтелә. *Минең Хафизаның йырлағанын ишетһәң, артистарың* ***ситтә торһон.*** (С. Агиш.)

**соҡор елкә, елкәһе соҡор** *кемдең.* Бик ялҡау, эш һөймәҫ. *Эх һин, Хәбрәй,* ***соҡор елкә****! Эш юҡ ерҙә, ҡустым, аш та юҡ.* (Ш. Бикҡол.) *Ай-һай, ҡарттар тешле булалар икән шул.* ***Елкәнең соҡор*** *булыуын улар яратмайҙар, ҡағын-һуғын да эшкә тотон.* (А. Игебаев.) [*Батырйән Килдебайға:*] *Эш һөймәйһең,* ***елкәң соҡор.*** (Ә. Мирзаһитов.)

**соҡор (баҙ) ҡаҙыу** *кемгә.* Мәкер уйлап, этлек эшләү. *Кешегә* ***соҡор ҡаҙма****, үҙең төшөрһөң.* (Мәҡәл.)

**сөй (сөйөлдөрөк) бушау.** Ихтыяр көсө юғалыу, йомшау. *Башыңды һыуға һалырға һинең* ***сөйөң бушаҡ****! — тип Сәлих зәһәр төртөп алды.* (Х. Мохтар.) — *Эһе-һе, ҡусты кеше, һеҙҙең бында* ***сөйөлдөрөк*** *бөтөнләй* ***бушап*** *киткән, — тине Яубаҫаров, эсе бошоп. — Ниндәй сөйөлдөрөк? Тракторҙа сөйөлдөрөк булмай, ағай. Ул шау тимерҙән.* (Х. Ғиләжев.)

**сөй ҡағыу.** Ярамһаҡланып юрый маҡтау, ҡапайтыу. *Ҡаиһы берәүҙәр шундай ләззәтләнеп* ***сөй ҡағалар:*** *һин бик ҡәҙимге. Шиғыр яҙһаң, ни һуң? Һинең бөгөн беҙгә оҡшашлығың ҡәҙерле.* (Т. Ғәниева.)

**сөй өҫтөнә туҡмаҡ.** Ғәйепкә ғәйеп өҫтәлеп, арттырып ебәргән хәлгә ҡарата әйтелә. *Яҙ көнө бер тананың быҙауы үле тыуҙы. Был тағы* ***сөй өҫтөнә туҡмаҡ*** *булды: килен ғәйепле, ҡарамаған, мал тапап үлтергән.* (Ж. Кейекбаев.)

**сөй эҙләү (сығарыу)** *кемдән, нимәнән.* Бәйләнергә сәбәп табырға тырышыу. *Был карьерист, теге — яла яға, анонимка яҙа* ***сөй эҙләп.*** *Ата-бабаларҙың заманында булмаған бит телдә был һүҙҙәр!* (Р. Ғамзатов.) *Әллә берәй нәмә һиҙә инде, ҡәһәр төшкөрө, үҙе бәйләнмәй, ә мин һис бер* ***сөй сығара*** *алмайым.* (С. Агиш.)

**сөрөк киҫкәһе.** Йыуан, лупыш кешегә ҡарата мыҫҡыл менән әйтелә. — *Түрәләргә ни әйтергә уйлайһың,* ***сөрөк киҫкәһе****, — ти-*

*не[ҙә] лә* [*Сурагол*] *ҡулындағы киртартмаһы менән старшинаның башына бер тартты.* (Т. Хәйбуллин.)

◦ *син.*: ит мискәһе.

• **сусҡанан бер ҡыл.** Теймәҫ ерҙән бер нәмә ҡулға эләккәндә, алып ҡалырға кәрәклекте белдереп әйтелә. [*Сәләхетдин*:] *Беҙ башҡа сыҡҡанда, ағайым,* ***сусҡанан бер ҡыл*** *тигәндәй, өтөк кенә булһа ла, бер атын бирҙе.* (Д. Исламов.)

• **сүбәк сәйнәү.** Юҡ-бар хәбәр һөйләү, буш хәбәрҙе күп һөйләү. [*Шәрги*:] *Әйҙәгеҙ, бисәләр,* ***сүбәк сәйнәп*** *май сыҡмаҫ, эшебеҙҙә булайыҡ.* (Я. Вәлиев.) *Беҙҙә ҡайһы бер егеттәр хәмер эсеп,* ***сүбәк сәйнәп****, көн буйы эт һуғара.* (А. Игебаев.)

• **сүбәк баш** *һөйл.* Тиҙ генә уйлай алмай торған, туңыраҡ кешегә ҡарата кәмһетеп әйтелә.

• **сүбәк һатыусы** *диал.* Туйға саҡырылмай килгән кеше.

• **сүгәтә йыуыу** *һөйл.* Шым ғына илау. *Бисәләрҙең ҡайһы берҙәре, йәш саҡтары иҫенә төшөп,* ***сүгәтәләрен йыуып алалар.*** (Ғ. Дәүләтшин.)

• **сүп ҡалҡытмау.** Бер ни ҙә эшләмәү, тик ултырыу. *Ҡайҙа булып бөткән был халыҡ? Бынауындай уттай эш ваҡытында көн-көндөҙ* ***сүп ҡалҡытмай*** *өйҙә ултыралармы икән ни?* (Й. Солтанов.)

• *син. ҡар.*: ҡыл да ҡыбырлатмау.

• *ант. ҡар.*: ең һыҙғанып эшләү.

• **сүп өҫтөнә сүмәлә.** Бәләгә бәлә өҫтәлеү хаҡында әйтелә. *Мин дә юрый уның артынан тәгәрәгән булдым,* ***сүп өҫтөнә сүмәлә*** *булһын тип, асылған битенә ҡар бөртөктәре борҡоттом.* (С. Агиш.) *Ҡыҙғанып әйтеүем инде.* ***Сүп өҫтөнә сүмәлә*** *тип, Ғәйникамал киленгә лә ҡыйын булып китте шул.* (И. Солтанов.)

• **сүпте ауҙарыу** *кемгә.* Үҙ ғәйебеңде башҡаларға япһарыу. *Шуныһы ла бар: Бельков иптәш* ***сүпте*** *үҙенә түгел, кешегә* ***ауҙарырға*** *бик оҫта. Теге техниканың юҡ булыуын да ул хәҙер Әбдиевҡа һылтай.* (Р. Солтангәрәев.)

• **сүп тибеү.** Бер ни эшләмәү; ваҡытты бушҡа уҙғарыу. *Урамда* ***сүп тибеп*** *йөрөү етер беҙгә!..* (З. Биишева.)

*син. ҡар.*: ел ҡыуыу.

*ант. ҡар.*: ең һыҙғанып (*эшләү*).

**сүптән сүмәлә өйөү (яһау).** Юҡ ғәйепте табып бәйләнеү. *Ҡайһы бер кешеләр* ***сүптән сүмәлә өйөргә*** *бик яраталар. Берәй кешенән үс алырға кәрәк булһа, тоталар ҙа редакцияға хат яҙып ебәрәләр.* («Сов. Башҡ.») *Ә шулай ҙа* ***сүпте сүмәлә яһап****, кеше башын ашап өйрәнгән бәндәләргә аҙыҡ бар ине бында.* (З. Биишева.) *Ҡатынының гәйебе булыуына ул ышанманы, ауыл ерендә хәбәр тиҙ йөрөй, әгәр хилаф эш ҡылһа, әллә ҡасан ишетерҙәр,* ***сүпте сүмәлә итергә*** *әҙер торалар.* (З. Ҡаҙаҡбаева.)

**сүп урынына <ла> күрмәү** *кемде.* Иҫәпкә алмау, танымау.

*син.*: һанға һуҡмау.

**сыбыҡ осо**. Бик алыҫ туған. *Ҡайҙа барып һуғылырға белмәй йөрөгәндә,* ***сыбыҡ осо*** *ағай тейеш кешемде осраттым.* (Ғ. Ғүмәр.) [*Гәүһәр*:] *Сабур ағай һеҙҙең ағай-энеме? — Эйе,* ***сыбыҡ осо****.* (И. Абдуллин.) *Минең* ***сыбыҡ осо*** *ла ҡәрҙәшлегем юҡ — мин уларға ете ят кешемен. Осраҡлы ғына фатир төшкәнмен.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Айға яҡын һуҙыла ҡунаҡ-төшөм, Нурмый тап ошо мәлдә ҡайта.* ***Сыбыҡ осо*** *ҡәрҙәш булғанлыҡтан, Ғиндуллаға төшә.* (Я. Вәлиев.)

**сығып барыу**. Аҡсаны, малды иҫәпһеҙ тотонған, тәләф иткән кешегә ҡарата орошоп әйтелә. *Аҡсаң сығып барамы әллә! — Һин ҡурҡма, расходын үҙем ҡапլармын... —* ***Сығып барған*** *аҡсаң бар икән? —* [*тине Ибраһим ағай*]. (Д. Исламов.)

**сыбыҡ осо төшоү** *кемгә*. Күп сығымдар тура килеү.

**сығырҙан сығыу**. Үҙен үҙе тыя алмай башлау, ҡыҙып, туҙынып китеү, саманан үтеү. *«Коммунист» һүҙен ишетеү менән офицер* ***сығырынан сыҡты****.* (Ф. Рәхимғолова.) *Мин* ***сығырымдаң сыҡмаҫҡа****, хужабикәмдең ҡабарып барған һырт-арҡаһын ыңғайына һыпырырға тырыштым.* (Й. Солтанов.) **Сығырынан сығарыу** *кемде*: *Мулла ... самауырсыны* ***сығырынан сығара*** *яҙыуын шәйләй һалып алды.* (Ә. Вахитов.) *Ҡатынының был баш-баштаҡлығы Хәмитте* ***сығырынан сығара****.* (Р. Солтанғәрәев.)

**сыҙап (түҙеп) ҡына тор**. Ниндәйҙер киҫкен хәл килеп тыуғанда әйтелә. *Инде ул туҙа башлаһа —* ***сыҙап ҡына тор****.* (Б. Бикбай.)

**сыҡмаған йәне <генә> бар (ҡалған)** *кемдең*. Ауырып, косө бөтөп, үлем хәлендә булған кешегә ҡарата әйтелә.

**сыҡмаған ҡояшҡа йылыныу (ҡыҙыныу)**. Булмаҫтай нәмәгә ышаныу, буш хыял менән йәшәү. *— Ярай, табылһа, бәхетегеҙ, — тине начальник. — Тик* ***сыҡмаған ҡояшҡа*** *алдан* ***ҡыҙынып*** *ултырмайыҡ әле. Әйҙәгеҙ, нефть биргән һәм бирәсәк скважиналарҙы ҡарап ҡайтайыҡ.* («Сов. Башҡ.»)

**сырай асылыу**. Йөҙ яҡтырыу (*кәйеф күтәрелеп*). *Уның* ***сырайы асылды****, йылмайып, ҡара мыйығын бороп ҡуйҙы.* (А. Таһиров.)

*ант.*: сырай һытылыу.

**сырай(ҙы) һытыу**. Йөҙ боҙолоу (*ризаһыҙлыҡтан, кәйеф боҙолоуҙан*). *Һылыу ҡортҡа тағы ла* ***сырайын һытыбыраҡ****: — Бушты һөйләйһең дә баһа, гонаһлы булып... — тине.* (Т. Йәнәби.) *Ҡотлояр* ***сырайын һытып*** *торҙо ла көлөп ебәрҙе.* (Һ. Дәүләтшина.) *— Әй, — Сафуан* ***сырайын һытты****, — нимә ул һалдаттар? Бөгөн — мында, иртәгә — тегендә.* (Я. Хамматов.) **Сырай һытылыу**: *Унда ултырғандарҙан Вәлиттең* ***сырайы һытылды****, тамаҡ ҡырып, ситкә ҡараны.* (Һ. Дәүләтшина.)

**сыра кеүек**. Бикябыҡ, үтә ҡаҡса (*кеше*). *— Эй бала... — тине Айбулат, — үҙең атлап йөрөйһөң, үҙең* ***сыра кеүек****.* (Ғ. Ибраһимов.) *Был* ***сыра кеүек*** *ябыҡ ҡатындың ҡасан ятып, ҡасан торғанын күрмәҫһең.* («Ағиҙел».)

**сыскан күҙе кеүек**. Бик бәләкәй булып, сак-сак күренгән (*ут, яктылык*). *Совет йортоноң урамға караған тәҙрәһендә* ***сыскан күҙе кеүек*** *кенә ут йылтырай.* (Ғ. Локманов.) *Кайһы өйҙәрҙә* ***сыскан күҙендәй*** *уттар емелдәй, кайһыһы бөтөнләй караңғы.* (Б. Хажиева.)

**сысканға үлем, бесәйгә көлкө**. Кемгәлер бәлә-каза килгәндә, икенсеһенең урынһыҙ шаяртыуына карата әйтелә. [*Айытбай*:] ***Сысканға үлем, бесәйгә көлкө*** *тигән кеүек, юк урында шаяраһың, Хәлкәс ағай.* (С. Агиш.)

**сыт та итмәү**. Һис тә уңайһыҙланмай, оятһыҙ рәүештә теклән карап тороу йәки ниҙер әйтеү. *Үҙе иламай ҙа бит әле,* ***сыт та итмәй***, *һинең короғороң.* (Һ. Дәүләтшина.)

**сәйнәп каптырыу (ауыҙына һалыу)** *кемдең*. 1. Берәй эште әҙерләп, үтә нык еңеләйтеп биреү. ***Сәйнәп каптырғанды*** *ла йота алмайһың.* (Һөйл.)

2. Үтә ентекләп аңлатыу, төшөндөрөп биреү. *Донъя күргән иргә* ***сәйнәп каптырыу*** *кәрәкмәй.* (Һ. Дәүләтшина.) [*Судья*]... *үҙ фекерен ярып һалырға ашығып бармай, бөтә хәкикәтте* ***сәйнәп каптырғыһы*** *килмәй.* (Ә. Бикчәнтәев.) [*Нурислам*:] *Быны нисек аңларға? Асыклабырак әйтә алаһыңмы?* [*Жураев*:] ***Сәйнәп каптырырғамы***? (Ә. Хәкимов.)

**сәйнәп ташларҙай булыу** *кемде*. Нык асыу килеп, кыҙышып китеү. *Иренең шул үҫаллыктарын уйлап, Айбикәне* ***сәйнәп ташларҙай булам*** *да, тағы ла хоҙайлығыңды уйлайым.* (Һ. Дәүләтшина.)

**сәй тәмле булһын**. Сәй эсеп ултырған кешеләргә әйтелгән якшы теләк. Яуап итеп: «Бергә булһын!» — тиҙәр.

**сәмгә тейеү**. Намыҫты куҙғатыу, йәнде көйҙөрөү. *Был иғтибарһыҙлык тегеләрҙең* ***сәменә тейҙе***. (З. Биишева.)

**сәпкә һуғыу**. Максатка тура килтереү, тап кәрәкле һүҙҙе генә әйтеү. *Тимерказык башына килгән тәүге һүҙҙе уйламай-нитмәй генә әйткәйне,* ***сәпкә һукты ла куйҙы***. (Ғ. Ибраһимов.)

**сәрмә* кағыу**. Туйҙа кейәү яғынан килгән кұстәнәскә һыйланыу.

[***Сәрмә** — тиренән, күндән тегелгән юл токсайы.]

**сәс <сәскә> бәйләнеү** *кемдең, кемгә*. Өйләнешергә яҙған булыу. *Кашкынайы кара, буйы зифа, Шул егеткә* ***сәсем бәйләнгән***. (Халык йырынан.) — *Зөләйха! Касан алам һуң инде мин һине? — тим. — Әллә,* ***сәс бәйләнгән*** *булһа, кайҙа китер тип беләһең, — тигән була.* (Т. Йәнәби.) *Тәкдир булып,* ***сәскә сәс бәйләнһә***, *Ак корбандар салыр инем арнап.* (К. Даян.) ***Сәстәре сәскә бәйләнеп***, *бәхетле генә балалар булырға яҙһын инде.* (Ф. Иҫәнғолов.) **Сәсте бәйләү**: *Әгәр күңеленә окшағандай булһа, кыҙың еткән, Алла* ***сәстәрен бәйләгән*** *булһа, бай, һүҙеңде ишетәйек.* (Һ. Дәүләтшина.)

**сәс менән ер (иҙән) һепереү**. Кемгәлер ярарға тырышыу, ҙур тырышлык күрһәтеү. ***Сәсем менән ер һеперермен***, *ялангас кул-*

*дарым менән таш ватырмын, иллә балаларымды кеше күҙенә ҡаратып тилмертмәм.* (Я. Вәлиев.) *...Ни эшләһә эшләне Илгизә, ҡайны-ҡәйнәһе алдында* ***сәсе менән ер һеперҙе****, ярарға тырышты.* (Л. Яҡшыбаева.)

**сәсрәп китмәйме (китмәгәйе).** Нимәгәлер ризаһыҙлыҡ, асыу белдергәндә әйтелә. *Тик монтерҙарға һатып әсергә әйбер генә булһын, ә ҡалғаны* ***сәсрәп китмәйме****.* («Сов. Башҡ.»)

**сәсте йолҡоу.** Нимәгәлер ныҡ үкенеү. *Миллионер Фазлый* ***сәсен йолҡа ла*** *— хәҙер һуң инде.* (Б. Бикбай.)

**сәс үрә тороу.** 1. Ныҡ ҡурҡыу. *Артта — упҡын, алда — беҙҙең өмөттө һүндергән ҡара урман. Ул саҡты иҫемә төшөрһәм, әле лә* ***сәстәрем үрә тора*** *минең.* (Ш. Янбаев.) *Үлек өҫтөнә аңламаҫтан килеп сыҡҡан Эльвираның* ***сәстәре үрә тора****. Ҡурҡышынан ул хатта ҡысҡырып ебәрә.* (Ҡ. Ибәтуллин.)

2. Аптырап китеү, ғәжәпкә ҡалыу. *Көнсыуаҡ ҡарттың өс бисәле Ишбай тигән иң оло улы тотто ла һораны бит. Дүртенсе бисәлеккә һорай, йә инде, минең* ***сәстәрем үрә торҙо****.* (Һ. Дәүләтшина.)

**сәскә атыу.** Үҫештең, камиллыҡтың юғары дәрәжәһенә етеү. *Йәшлегем* ***сәскә атҡан*** *саҡ ине.*

# Т

**табаҡ-һауыт шалтырау.** Ғаиләлә талаш-тартыш, тауыш сығыу. *Өйгә саҡ ҡайтып индем. Ни ҡәҙәр үҙемде сабыр тоторға теләһәм дә, барыбер* ***табаҡ-һауыт шалтыраны****.* («Сов. Башҡ.»)

**табандан ут сығыу (сығарыу).** Көслө дәрт күрһәтеү, янып төрөү. *Бөтөрөлөп йөрө, Гөлсирә,* ***табаныңдан ут сыҡһын****.* (М. Кәрим.)

**табан итен ашау.** Бушҡа күп йөрөү. ***Табан итен ашап*** *йөрөй-йөрөй фатир алдым.* (Һөйл.)

**табан яҙҙырмау.** Бер аҙым да ҡалмау, артынан эйәреп йөрөү. *Иәрмәттең иптәше ҡасып китмәһен өсөн, Әптерәй уның артынан* ***табан яҙҙырмай*** *барырға кәңәш итте.* (Хикәйәттән.)

**табанын ялау** *кемдең.* Ярарға тырышып, үтә ярамһаҡланыу. *Бер башлағанда Йәмилә барын да әйтеп бөтөрөргә ашыҡты: — Һине мир эшенә ышанып ҡуштылар. Һин бит киреһен эшләп йөрөйһөң. Үҙеңдән көслөләрҙең* ***табанын ялар҆айһың****.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Бында бөтә тирә-яҡтан байҙар, сауҙагәрҙәр, бай* ***табанын ялап*** *көн күреүселәр йыйылған.* (З. Биишева.)

*син.*: тәрилкә төтөү.

**табан ялтыратыу** *һөйл.* Тиҙ генә ҡасып китеү, һыҙыу. *Уның бик йыш ҡабатлай торған бер һүҙе бар: «Юлда эшләүсегә юл таҡыр, тип, **табан ялтыратырға** уйлайһыңмы?»* (Н. Мусин.) [*Нигмәтулла Наҡышевҡа*:] *Һин — килмешәк. Ҡайҙан килгәнһең, шунда ҡарап **табаныңды ялтырат**!* (Я. Хамматов.) *Беҙҙең баштар һалып яулап алған, алтындан ҡиммәтерәк Тыуған илебеҙ һеҙҙең ҡулға бер ваҡытта ла ҡалмаясаҡ, Тиҙерәк **табаныгыҙҙы ялтыратығыҙ** бынан.* (К. Кинйәбулатова.) *Тоҡ-тоҡ алтын өмөт иткән Ҡошанға, мәкерле Субудәйҙе әрләй-әрләй, мал-монаятын юғалта-юғалта **табан ялтыратырға** тура килә.* (Б. Рафиҡов.)

*син.*: үксә күтәреү.

**тайғаҡ юлға баҫыу.** Йәмәғәтселек өсөн зыянлы, үҙе өсөн хәүефле эш-ҡылыҡ менән мауығып китеү. *Тимербай үҙенең **тайғаҡ юлға баҫыуын** яҡшы аңлай. Хәҙер инде эсмәҫкә лә, ҡатынын ҡыйырһытмаҫҡа ла һүҙ бирә.* («Сов. Башҡ.»)

**тайыш аяҡ (табан).** Айыуҙың күсмә мәғәнәләге атамаһы. *Ашарға ултырыуыбыҙ булды, ут яҡтыһының арғы башына әлеге **тайыш аяҡ**, ике балаһын эйәртеп, килеп тә ултырҙы.* (С. Кулибай.)

**таҡта сәйем, асыҡ (яҡты) сырайым (йөҙөм).** Әллә ни һый булмаһа ла ҡунаҡты ихлас ҡабул иткәндә ҡыуаныс белдереп әйтелә.

**таҡырға таяндырыу** *кемде.* Бер нәмәһеҙ ҡалдырыу, йәшәү сараларынан мәхрүм итеү.

**талағын күпсетеү** *кемдең.* Бик ҡаты туҡмау, дөмбәҫләү. *Осраған бер дошмандың **күпсетермен талағын**.* (Ҡобайырҙан.)

**талаҡ ташыу.** Ныҡ асыу килеү, эстән асыу ҡабарыу. *Һөмһөрҙөң бисәһе **талағы ташып**, ҡунаҡтарға һыртын биреп ултырған да ауыҙ эсенән ниҙер мығырлана башлаған.* (Әкиәттән.) *Дамирҙың асыуланыуына: — Ярар, юҡҡа **талағың ташып** ултырма... — тине Мәргиә.* (Б. Бикбай.) *— Үҙеңә булһын, — тине Әхмәҙи һәм үҙенең **талағы ташып** ултырыуын белдертте.* (Ж. Кейекбаев.)

*син.*: асыу ташыу (ҡабарыу).

**талаҡ ҡылыу (яһау, итеү)** *иҫк.* Ҡатын айырыу йолаһы (*ир өс мәртәбә «талаҡ» һүҙен ҡабатлаһа, ҡатынын айырған һаналған*). *Һарысәс ... муллаға килгәс тә үҙен ирекле тотҡан... Мулла көнләшкән. Тыңламай башлагас, бер-ике тапҡыр **талаҡ ҡылып та** кире алған.* (М. Буранғолов.) *Сәрүи муллаға барып айырылыу һораны. Шул ваҡыт Әхмәтғәли ҙә уның артынан барып етте һәм, «**талаҡ**» һүҙен **әйтеп**, айырылышып сығып киттеләр.* (М. Ғафури.) *Дәүләт мулла йәш бисәһен **талаҡ яһап** урамға сығарып ташлаған икән.* (Н. Ҡәрип.)

**талҡан бешереп булмай** *кем менән.* Уртаҡ тел табып, бергәләп эшләп булмай. «*Их, һүҙе һүҙгә оҡшамай, ауыҙы һүҙҙән бушамай», тип уйланы Тимерҡаҙыҡ һәм, бының менән **талҡан бешереп буламы**, тигәндәй, ҡул һелтәне.* (Ғ. Ибраһимов.)

**талҡан итеү** *нимәне*. Һуғып, ҡыҫып, онтап ташлау.

**тамағына арҡыры тормаһын** *әрл*. Ашармын тип уйламаһын (*асыу белдереп әйтелә*). — *Ашарһығыҙ туйҙы.* ***Тамағығыҙға арҡыры тормаһын****, туй итен ипләп кенә, ҡылҡынып ҡына йот.* (Һ. Дәүләтшина.)

**тамағына таш торғор (тығылғыр)** *һөйл*. Ҡарғау һүҙе.

**тамағы һиҙә икән** *һөйл*. Тәм-томдо яратҡан, гел генә ашарға ынтылып торған кешегә ҡарата көлөп әйтелә.

**тамаҡ айырыу.** Ашты бергә торған башҡа кешеләрҙән айырып ашау. — «*Белмәйем, ни булды икән, беҙҙең өйҙә* ***тамаҡ айырыу*** *булмай торғайны. Әллә, улым, әсәйең һине ашатмаймы?*» — *тип һораны* [*атайым*]. (Б. Бикбай.)

**тамаҡ (йән) аҫрау**. Аслы-туҡлы йәшәү. *Йылҡынан да мәшәҡәтһеҙ мал юҡ... Йәйен һимереп нығынһа, ҡышын тибендә йөрөп булһа ла* ***тамаҡ аҫрай***. (Д. Исламов.)

**тамаҡ итеү**. Ашаштырып алыу, ҡапҡылау. [*Атайың*] *иртә менән дә бер нәмә* ***тамаҡ итмәй*** *китте бит, асығып бөткәндер.* (Б. Бикбай.)

**тамаҡ йомшартыу (ебетеү)**. Әҙ генә араҡы йәки башҡа иҫерткес эсемлек эсеп алыу.

**тамаҡҡа <арҡыры> тороу.** 1. Нимәлер өмөт иткән кешегә мыҫҡыллап әйтелә. *Тамағыңа тороп ҡуймаһын.* (Һөйл.)

2. Әрләгәндә, ҡарғағанда әйтелә. **Тамағына арҡыры торһон.** [*Иргәле*:] *Беҙгә тейеш арыштың икешәр ботон алып ҡалды,* ***тамағына торғоро***. (Ғ. Дәүләтшин.)

**тамаҡҡа аш бармау**. Ниндәйҙер борсолоу, хәүефләнеү арҡаһында ашағы килмәү. *Бер тамсы йән тыныслығы булмағас, нисек* ***тамағына аш барһын*** *инде* [*Гәрәйҙең*] ... (Б. Бикбай.)

**тамаҡҡа тойон (таш) булыу**. Ниндәйҙер сәбәптән ашаған ерҙән туҡталып ҡалыу, аш бармау.

**тамаҡ тамуҡҡа тошорә**. Ашау осон, ас ҡалмаҫҡа нык тырышыуға ҡарата әйтелә. «***Тамаҡ тамуҡҡа төшөрә***» *тигәндәй, ауыл һайын һоранып ашап йөрөй торғас, Стәрле баҙарына барып индем мин бер заман.* (Ҡ. Ибәтуллин.) *Аҡһаҡалдар нимә тигән, шуға ҡолаҡ һалһаҡсы*: «***Тамаҡ тамуҡҡа төшөрөр***», — *төшмә имен*!.. (С. Ғәбиҙуллин.)

**тамаҡ туйҙырыу**. Ашау, туҡланыу. *Әгәр ҙә кеше ваҡытында* ***тамаҡ туйҙырмаһа****, йәиһә тәүлегенә бер генә мәртәбә ризыҡланып йөрөһә, билдәле, хәлһеҙләнә, сирләй башлай.* («Сов. Башҡ.»)

**тамаҡ ялғау**. Әҙ-мәҙ ашаштырып алыу; ҡапҡылап алыу. *Шулай бер сак был ике дуҫ бик алыҫ далаға һунарға киткәндәр. Йөрөгәндәр, йөрөгәндәр ҙә былар* ***тамаҡ ялғарға*** *ултырғандар.* (Әкиәттән.) *Мөхәмәҙгәле менән Йәмилә барлы-юҡлы нәмәләрен буласаҡ мәктәптең кесе яғына ташып бөттөләр ҙә, шәмгә ут алмай ғына* ***тамаҡ ялғап****, йоҡларға яттылар.* (Ф. Иҫәнголов.)

*син*.: тамаҡ итеү.

**тамаҡ ярыу**. Ныҡ итеп ҡысҡырыу, һорәнләү (*күберәк кәрәкмәгәнгә.*) *Ул* ***тамаҡ ярып*** *һөрәнләү менән түгел бит. Һөйләгән һүҙең законға ҡулай булһын.* («Сов. Башҡ.») [*Ҡарауыҙ*] *Юҡҡа барға һауылдап тауыш ҡуптарырға,* ***тамаҡ ярырға*** *яратмай торғайны.* (С. Кулибай.) *Тыныс аҡыл кәрәк: майҙандарҙа* ***тамаҡ ярыу*** *баралыр толҡаһыҙ.* (Р. Түләк.) **Тамаҡ ярылғансы** [ҡысҡырыу].

**тамаҡ яуы** *һөйл.* Эшләмәй, бушҡа ашаған кеше тураһында әйтелә. [*Артыҡбикә*] *Өйҙә артыҡ бер кеше,* ***тамаҡ яуы*** *икәнен белеп, үҙ көнон үҙе күрә башлаған.* (Әкиәттән.)

**тамаша ҡылыу (итеү)**. Иғтибар менән ҡарап тороу, күҙәтеү. *Ҡарсығы Хәжиҙә әбей ҙә серле тоҡсайҙан нимәләр сығасағын* ***тамаша ҡылыр*** *өсөн өҫтәлдең бер ситенә килеп баҫты.* (С. Агиш.) *Бына әле таң һарыһы менән Иҫке Сибай ауылы халҡының тормошон* ***тамаша итеп*** *торам.* («Сов. Башҡ.»)

**тамсы ҡан ҡалғансы**. Бар көскә, көс-хәл тамам бөткәнсе (*көрәшеү, алышыу*). *Алтын приискыһына атлы казактар килһә, эштең нимә менән бөтәсәген аңлап, берәүҙәр төшөнкөлөккә бирелде, икенселәр ҡасырға булды, өсөнсөләр аҡтыҡ* ***тамсы ҡаны ҡалғансы*** *көрәшкә әҙерләнде.* (Я. Хамматов.)

*син.*: һуңғы һулышҡа тиклем.

**тамуҡ ғазабы**. Үтә ауыр хәл; яфа, этлек. *Ҡояш сыҡҡас та, миңә әлеге* ***тамуҡ ғазабы*** *башлана...* (Д. Юлтый.)

**тамуҡ киҫәүе** *һөйл.* Ҡәһәрләнгән бәндә. [*Мулла*:] *Етте! Тыңла. Әгәр* ***тамуҡ киҫәүе*** *булғың килмәһә, колхоздарына аяҡ баҫаһы булма, мал-тыуарыңды сал, һат!* (Б. Бикбай.) ...*Убырлы ҡарсыҡ, Зобағел, мәскәй, — тип тиргәнеп алып китте* [*Ҡарабихан*] ... — *Үәт һин уны, эшен эшләмәҫ борон хаҡын һорай,* ***тамуҡ киҫәүе.*** (И. Ғиззәтуллин.)

**тамыр йәйеү (ебәреү)**. Ныҡыныу, ҡайҙалыр берегеп китеү. *Тәү ҡат Рәсәй еренә* ***тамыр йәйҙе*** *азат тормош.* (А. Игебаев.) *Гөлдәр булып халҡым йөрәгендә* ***тамыр йәйһә*** *ине йырҙарым.* (Р. Сафин.) ***Тамыр йәйеп*** *совет тупрағында, үрмәле гол булып боролдом!* (Ғ. Амантай.)

**тамыр тартыу**. Берәй урынға берегеү, ныҡыныр йәшәй башлау. *Ҡая торған! Уҡтарын да, туптарын да ҡаҡҡан кире. Торған уға ғәйрәт бирәп, ут эсендә ятҡан ере, үҙе* ***тамыр тартҡан*** *ере...* (В. Әхмәҙиев.) *Нишләйһең,* ***тамыр тартҡан*** *ер. Айырылышыу ауыр булһа ла, тыуған яҡтарыңа ҡайтыу — ҙур бәхет, — тине өләсәйем.* (Р. Низамов.)

*син.*: тамыр ебәреү.

**тамырына балта сабыу** *кемдең, нимәнең.* Кешенең ерлеген, көс сығанағын ҡоротоу, бөтөрөү. *Октябрь революцияһы Ғариф кеүектәрҙең йәшәү* ***тамырына балта сапһа*** *ла, улар әле синыф булараҡ бөтөрөлмәгәйне.* («Сов. Башҡ.») «*Балтас, минең кеүек ҡуштан түрәләр,* ***тамырҙарыбыҙға балта сапҡанда,*** *батыр йөрәген май бөрөрмө?*» (Ғ. Ибраһимов.)

**тамырын аҡтарыу (куптарыу, ҡырҡыу, ҡоротоу)** *кемдең, нимәнең.* Бөтөрөү, юҡҡа сығарыу. [*Кулактарҙың*] ***тамырын аҡтарырға*** *кәрәк.* (Б. Бикбай.) *Әй, татар, һис белмәйһең, Ишми ишан ысын дошманың, Ул диндең* ***тамырын ҡырҡырға*** *торған сысҡаның.* (Ш. Бабич.)

**тамыры ҡороу** *кемдең.* Бөтөнләй юҡҡа сығыу. *Ярлы, эшселәрҙең хас дошманы Буржуйҙарҙың* ***тамыры ҡороһон.*** (Ш. Бабич.)

**тамырынан йолҡоу (ҡоротоу)** *нимәне.* Бар булмышы менән юҡ итеү. *Эскелекте* ***тамырынан йолҡоп*** *ташларға кәрәк.* («Сов. Башҡ.») [*Дутовтың*] *контрреволюцион эшмәкәрлеге* ***тамырынан йолҡоп*** *алынырға тейеш.* («Әҙәби Башҡ.»)

**тамырынан үҙгәртеү** *нимәне.* Тотошлайы менән икенсе төрлөгә әйләндереү. *Цехта химиктар реакторҙарҙа кимәл һәм баҫымды үлсәү схемаһын* ***тамырынан үҙгәрттеләр.*** («Сов. Башҡ.»)

**танауы <аҫты> кипмәгән** *кемдең, мыҫҡ.* Иҫәпкә алырлыҡ, һанға һуғырлыҡ булып үҫеп етмәгән (*ғәҙәттә, малайҙарға, үҫмерҙәргә ҡарата әйтелә*). *Арыҫланбәк хәҙергә машинаһы янына малайҙарҙың береһен дә ебәрмәй. — Пацан, йоғонма,* ***танау аҫтың әле кибеп етмәгән,*** *— тине.* (Р. Низамов.) [*Кантон*] *менән һөйләшергә әле һеҙҙең* ***танауығыҙ кипмәгән.*** («Сов. Башҡ.»)

*син.*: еүеш танау.

**танау аҫтында (төбөндә).** Бик яҡында, эргәлә генә. [*Шафиҡ*] *Юҡ, юҡ, Аҡназар бай, яр аҫтында түгел, Улар беҙҙең* ***танау аҫтында*** *үҙҙәренең эшен эшләйҙәр.* (М. Тажи.) *Алыҫ булһа — бер хәл, ике аҙым,* ***танау төбөндә*** *бит кәнсәләр.* (С. Кулибай.)

**танау буйына ҡарап** [йөроү]. Һауалылыҡ күрһәтеү; шапырыныу. *Онотмаһалар ҙа, беҙ ҡыпсаҡтар тип, ата яғын ҡыуалар,* ***танау буйҙарына ҡарап,*** *юрға аттарға менеп алалар ҙа сәләм бирмәй үтәләр.* (Һ. Дәүләтшина.)

**танауҙы сөйгә (айга) элеү.** Артыҡ маһайып китеү. — *Нуретдин, бик үк шашма әле. Барыһын да ҡурҡытып,* ***танауыңды сөйгә элмә.*** *Башың йәш, күрәһеләрең күп.* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: танау күтәреү.

**танауға еҫ инеү.** 1. Донъяның серҙәрен һиҙә, аңлай башлау. [*Ғайса*] ***танауына еҫ инә*** *башлағас иһә, тик үҙ көсөн, үҙ һәләтен Саниәға күрһәтер өсөн генә көрәшә ине...* (Н. Мусин.)

2. Үҙеңде етешкән, бәлиғ булған итеп тойоу. ***Танауҙарына еҫ инә*** *башлағас, бергәләп аулаҡҡа йөрөнөләр.* (Т. Килмөхәмәтов.)

**танау күтәреү (сөйоү).** Маҡтаныу, һауаланыу. ***Танауын нисек күтәргән!*** *Әйтерһең, генерал.* (Д. Исламов.) *Кеше, күрмәгәнен күрһә,* ***танауын күтәреп*** *ебәргән була бит. Ҡуйынына бынауындай ҡурсаҡ кеүек йәш кәләш ингәс, һауаланып киткәндер.* (Т. Хәйбуллин.) *Йөрөйөм әллә кем булып,* ***танауҙы үргә сөйөп.*** (И. Ғиззәтуллин.)

*син.*: танауҙы сөйгә элеү, әллә кем булыу.

**танау тартыу**. Өмөтләнеп буш ҡалыу; һемәйеү. *Туйға бейә түгел, бәрәс тә һуймайбыҙ, **танауҙарын тартһындар**.* (Һ. Дәүләтшина.)

**танау төшөү (һалыныу)**. Күңелһеҙ, бошонҡо хәлдә булыу. [*Хәйернас*:] *Арыу. Тик әҙерәк **танауы төшөп** йөрөй.* (Ф. Исәнғолов.) ***Танауым төшөбөрәк** йөрөгәнде һиҙептер инде, берҙән-бер көндө әсәйем: — Улым, ниңә улай бошонҡо йөрөйһөң? — тип һораны.* (Н. Мусин.) *Юҡ, күрмәҫһең Юлайҙың үпкәләп ултырғанын, бер ҙә юҡҡа кәзәләнеп, **танау һалындырғанын**.* (А. Игебаев.)

**танау (морон) тығыу** *нимәгә һөйл.* Ниндәйҙер эш-хәлгә урынһыҙ ҡыҫылыу. *Аҫылғужаның, һәр нәмәгә **танау тығырға** яратҡанлығын белгән мулла ҡабат сурытмаҫҡа ниәтләне.* (Б. Аҫылғужа.)

**танау һуҙыу**. Нимәгәлер ымһыныу. *Саҡыралар тип, **танауыңды һуҙма**, бирәләр тип, ҡулыңды һуҙма.* (Мәҡәл.)

**танауынан тартһаң тәгәрәр** *һөйл., мыҫҡ.* Үтә ябыҡ, хәлһеҙ кешегә ҡарата әйтелә.

**танауы еҫ һиҙә** *кемдең.* Үҙенә файҙалы нәмәне алдан белеп тора. *Заводта управляющийҙың башына бер эш төшһә, ул да эшселәргә араҡы эсерә. Ләкин эшсе халҡының танауы **еҫ һиҙгән** хәҙер...* (Ж. Кейекбаев.)

**танауына сиртеү (һуғыу)** *кемдең.* Берәй котөлмәгән эш, ҡылыҡ менән икенсе берәүҙе аптыраашта, уңайһыҙ хәлдә ҡалдырыу. *Бына йәйләүгә барам, ал бирмәй эшләйем дә шундайҙарҙың **танауына сиртәм**.* (Н. Мусин.) *Зөһрәнең эшләй башлауына бер йыл да тулмай, ә өлкән һауынсыларҙың **танауына сирткән**.* («Сов. Башҡ.») *Был эш уңайлы сыҡһа, исмаһам, эшләп тамаҡ туйҙырылыр ине. Берҙән, бүләк, сәй алыныр, икенсенән, анау йолҡоштарҙың **танауына һуғыр** инек.* (Т. Хәйбуллин.)

*син.*: танауын һөртөү.

**танауын һөртөү** *кемдең һөйл.* Эш-ҡылыҡ менән уңайһыҙ хәлдә ҡалдырыу. *Ә Бикмөхәмәтов бына һаман тыныслана алмай. «Яҡшылап русса өйрәнеп, шул Сираевтың **танауын һөртөп** булырмы, юҡмы?» тигән уй уның башынан сыҡмай, бимазалап тик тора ине.* (Н. Мусин.)

*син.*: танауына сиртеү.

**танһыҡ ҡаныу**. Ниҙәндер тулыһынса ҡәнәғәт булыу. *Ҡарайһың — күреп **танһығың ҡанмай**.* (Я. Хамматов.)

**таң(ға) ҡалыу**. Бик ныҡ аптырау, гәжәпләнеү. *Тимерҡотло менән Тамъян килде ханға, Ҡараҡоломбәт эшенә **ҡалып таңға**.* («Бабсаҡ менән Күсәк».) *Мин тәҙрә төбөнә баҫҡан килеш юғарылыҡта, ә башҡалар, **таң ҡалып**, аҫта торалар.* (С. Агиш.) *«Әй-й, ҡала тигәндәре шул буламы икән ни?» — тип, **таң ҡалып** барҙы Емеш.* (З. Биишева.)

**таң ҡалдырыу** *кемде.* 1. Бик ныҡ һоҡландырыу. [*Оксана әбей*] *Быуа аръяғына тағы ла күҙ ташланы ла, мине **таң ҡал-***

***дырған*** *хикәйәһен башланы.* (Ш. Янбаев.) *Донъяның бик күп халыҡтарын үҙенең бейеүҙәре менән* ***таң ҡалдырған*** *Мәхмүт Эсамбаев — Өфөлә.* («Сов. Башҡ.»)

2. Аптырашҡа төшөроу, ғәжәпләндереү. *Ҡайһы берәүҙәр, әлегә тиклем ишетелмәгән, бары тик үҙ ауылы тирәһендә генә йәшәгән һүҙҙе шиғырына индереп, уҡыусыны* ***таң ҡалдырмаҡсы.*** (Р. Бикбаев.)

**таң ҡараңғыһы (тишеге, һарыһы).** Бик иртә мәл, таң атыратмаҫ ваҡыт. ***Таң тишегенән тормаһаң...*** *— тине мейес яғында булашып, бите утлы күмерҙәй ҡыҙарған ҡарсыҡ.* (Х. Ғиләжев.)

**таң һыуы.** Имләү өсон таңдан алып ҡуйған һыу.

**тапҡанын эттән, арҡаһын беттән ашата** *һөйл.* Тапҡан малын үҙе файҙалана алмай, ярлынан-ярлы, йонсоу йәшәгән кешегә ҡарата әйтелә. — *Ҡәйнешкәйем, инде элекке йылдарҙағы кеүек,* ***тапҡаныңды эттән ашатып, арҡаңды беттән ашатып*** *подпискала йөрөмә. Көтөүҙе үҙеңә ал да ни тапҡаныңды туплай бар.* (Һ. Дәүләтшина.)

**тап өҫтөнә баҫыу** *нимәнең.* Һүҙҙе, хәбәрҙе ысынбарлыҡтағы хәлгә тура килтереп кенә әйтеү. — *Әллә һеҙ Мәғариф министрлығында эшләйһегеҙме?* — ***Тап өҫтөнә баҫтығыҙ,*** *яҡташ. Шунда белгес булып эшләйем.* («Сов. Башҡ.»)

**тап төшөрөү** *кемгә, нимәгә.* Насар эш, ҡылыҡ, һүҙ менән кәмһетеү, оятсылыҡ килтереү. *Әшәке һүҙҙе ҡыҙ ишетер, тип тартыныуҙан былай, ул һүҙҙәрҙең иҫ итмәҫтән ҡыҙға ҡағылып, уға* ***тап төшөрөүенән*** *ҡурҡтылар.* (М. Кәрим.) *Исемеңә һис* ***төшөргөң*** *килмәһә* ***тап,*** *Бәхетеңде һин намыҫлы хеҙмәттә тап.* (Н. Иҙелбай.) **Тап төшөү**: *Райсоветта эшләгәндә Тимерғәле артыҡ шашынмай ине әле. Абруйына* ***тап төшөүҙән,*** *яманаты таралыуҙан ҡурҡты.* (Я. Вәлиев.)

**таптың (әйттең) һүҙ.** Берәйһенең хилаф һүҙенә ҡаршы, уға ризаһыҙлыҡ белдереп әйтелә.

**тараҡан бото кеүек.** Сатай-ботай һыҙмаҡланған яҙыуға ҡарата мыҫҡыллап әйтелә.

**тар маңлай.** Киң ҡарашлы булмаған, төптән уйлай белмәгән. — *Ашлыҡты бөтөнләй һуҡмай ҡышлатабыҙ! — тип,* ***«тар маңлай»*** *улдарын ғәжәпкә ҡалдырҙы* [*Аллаяр*]. (Ф. Иҫәнғолов.)

**тархан төшөп** [йоҡлау, ятыу]. Бик иркенләп, йәйрәп (*аунау*). [*Әхмәҙиҙең*] *ике улы ҡаршылағы өйҙөң ишек төбөндәге бәләкәй һикеһендә сат та бот* ***тархан төшөп*** *йоҡлайҙар ине әле.* (Ж. Кейекбаев.)

**тар эсле.** Кешенән тарығып, көнләшеп барған. *Мөхәррәм хәлле булыуы өҫтөнә бик зәһәр телле әҙәм ине. Бөтә түрәләр кеүек үк, ул да* ***тар эсле*** *һәм бүтәндәрҙең кескәй генә уңышы ла уның көнсөллөгөн килтерә.* (М. Ямалетдинов.)

**таҫма тел(ле).** Теле менән бик оҫта йыуып, алдай торған. [*Туҡтабикә*:] *Бына ниндәй булып сыҡты ул,* ***таҫма тел!*** *Йыуаш булып ҡылана, эсендә юха йылан ята икән.* (М. Кәрим.)

*Сынтимер был һалҡынлыҡҡа үҙе сәбәпсе булғанын яҡшы аңлаһа ла,* ***таҫма тел*** *үргән ялған битлекте оҙаҡҡа ҡалдырмай, бик ваҡытлы йыртҡанына үкенмәне.* (Ш. Янбаев.) *Мәхмүттең* ***таҫма теленә*** *ышанып, башымды харап иттем.* (Ш. Чураев.) *Ә* ***таҫма телле*** *Ғәмилә, Хәмитте күргәс, осоп төшкәндәй булды.* (Б. Бикбай.)

**татлы (тәмле) тамаҡ.** Тәмле-татлыны ашарға бик яратҡан кешегә ҡарата һөйһөнмәйерәк әйтелә.

**татлы (тәмле) тел.** Матур һүҙҙәр һөйләп, икенсене эшләгән кешегә ҡарата әйтелә. *Етәкселәр йәнә Вәлиевтең* ***татлы теленә*** *ышаналар һәм ремонтты колхоз иҫәбенә үткәрәләр.* («Сов. Башҡ.») **Татлы (тәмле) телләнеү:** *Аллаяр Ҡасим артынан* ***тәмле телләнеп*** *тә барып ҡараған, вәғәҙәләр биргән. Тегеһе өндәшеү түгел, башын да күтәреп ҡарамаған.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**тау аҡтарырҙай (емерерҙәй) булыу.** Үҙеңдә бик ҙур көс булыуын тойоу.

**тауыҡ баш (мейе)** *әрл.* Уй-фекергә әкрен, хәтерһеҙ кешегә ҡарата әйтелә.

*син.*: тауыҡ мейеһе эскән.

**тауыҡ кетәгендәй <генә>.** Бик бәләкәй генә (*гәҙәттә, өй, ҡаралтыға ҡарата әйтелә*).

*ант.*: ялан кеүек.

**тауыҡ көлөр** *кемдән, нимәнән.* Хилаф эш-ҡылыҡтан һаҡлау, тыйыу осон әйтелә. *Туҡтағыҙ әле, талашмағыҙ, — тинеләр, — үҙегеҙҙән* ***тауыҡ көлөр****, ишетһә әгәр.* (Р. Ханнанов.)

**тауыҡ күҙ.** 1. Ҡараңғы төшкәс күрмәй торған күҙ сире.

2. Бик насар күргән кешегә ҡарата мыҫҡыллап әйтелә.

3. Ҙур иғтибарһыҙлыҡ, гәмһеҙлек.

**тауыҡ мейеһе эскән.** Фекер һәләте бик түбән, хәтере насар кешегә ҡарата әйтелә.

*син.*: тауыҡ баш.

**тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел.** Бик күп (*гәҙәттә, ваҡ-төйәк йорт эшенә ҡарата әйтелә*). *Йорт мәшәҡәттәре, өй эше аҙмы ни, һанап китһәң,* ***тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел*** *бит.* («Башҡ. ҡыҙы».) *Уның әкәмәтен һөйләү түгел,* ***Тауыҡ сүпләһә лә бөтмәҫлек.*** (Д. Юлтый.) *Байҙың хужалығында эш* ***тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел.*** (Я. Хамматов.) *Миша ла өйҙә юҡ, исмаһам. Ул кухнянан тиҙ генә бушай алмай шул. Унда эш* ***тауыҡ сүпләһә лә бөтөрлөк түгел.*** (Ә. Бикчәнтәев.)

*син.*: йырып сыҡҡыһыҙ.

**тауыш биреү** *кем, ни өсөн.* Һайлауҙа ҡатнашып, кемдеңдер файҙаһына ыңғай һайлау. *Демократтар өсөн тауыш биреү. Тауыш биреүҙә ҡатнашыу.*

**тауыш күтәреү.** 1. Ғауғалау, бола сығарыу. *Иҫерек килеш ул* [*Тимерхан*] *өйөндә* ***тауыш күтәргән.*** («Сов. Башҡ.»)

2. Артыҡ ҡысҡырып һөйләү.

**тауышҡа ҡуйыу** *нимәне*. Дөйом фекер, мөнәсәбәтте һайлау юлы менән билдәләү. ***Тауышҡа ҡуйыуығыҙҙы** һорайым.* (Д. Исламов.)

**таш бул**. Сер һаҡларға саҡырғанда әйтелә.

*син.*: өнөң сыҡмаһын.

**таш бауырлы (бәгерле, йөрәкле), бауыры (бәғере, йөрәге) таш** *кемдең*. 1. Күңеле бик ҡаты булған, һалҡын күңелле. *Мин — **таш бәгер**. Ул саҡ аңламаным улын һөйгән әсә йөрәген.* (М. Кәрим.) [*Фәтхи*:] — *Иламайым икән, **таш бәгер** тип уйламағыҙ.* (С. Агиш.) *Ихтыярым минең таш булһа ла, **Бәгере** уның **таш** тип уйлама.* (Ә. Ғайсин.) *Атаҡайым минең **таш бауыр**, Мин илаған саҡта иламай.* (Сеңләүҙән.) ***Таш йөрәктәрҙе** лә иретерлек таң симфонияһы тирбәлгән ошо гүзәллек эсендә ниндәйҙер һуғыш, тартыш, үлтереш хаҡында уйлау һис тә күңелгә ятмай...* (З. Биишева.)

2. Дәрте һүнгән, үлгән. *Кем ялҡындан мәхрүм, ул тормошта серек уҫаҡ, һалҡын, **таш йөрәк**.* (А. Игебаев.)

**таш борсаҡ**. Үтә һаран кешегә ҡарата әйтелә.

*син.*: ҡырҡһаң ҡаны сыҡмаҫ, ҡыш ҡар биреп тормаҫ.

**ташҡа баҫыу**. Типография ысулы менән яҙып сығарыу (*яҙма, китап хаҡында*). *Тәүге шиғырҙарымды **ташҡа баҫып** сығарғас, газета миңә тағы ла ҡәҙерлерәк, тағы ла яҡыныраҡ булып китте.* (Ш. Бикҡол.) ***Ташҡа баҫҡан** яҙыу ҙа баһа, һеҙгә ҡайҙан килеп эләкте.* (М. Тажи.) **Ташҡа баҫылыу**: *Мин, хәбәрем баҫылмаһа ла, исемемдең **ташҡа баҫылып** сығыуына ҡыуандым.* (Т. Йәнәби.) [*Әбей*] *Беҙгә ҡутарып күрһәтте. Бөтә яҙыуҙары ла **ташҡа баҫылған**.* (Һ. Дәүләтшина.)

**ташҡа үлсәйем**. 1. Ниҙеңдер насар йоғонтоһонан һаҡланырға, ҡурсаларға теләгәндә әйтелә. *Тфү-тфү, ташҡа үлсәйем.*

2. Асыу, ерәнес белдергәндә әйтелә. ...*Хәҙер егет булғас, ҡайтҡан Аҙнағол. Тик ҡайтыуы нимә өсөн бит?! Эй-й, **ташҡа үлсәйем**.* (З. Биишева.) *Аһа ... **Ташҡа үлсәйем** ... Өфө тигәндәре ошо икән. «Аҙашырлыҡ яман, таш ҡая» ... тип, һөйләүҙәре ерле буш икән.* (Ғ. Амантай.)

**таш (ҡап) ҡорһаҡ** *һөйл*. Эсе кәпәйеп торған, ҙур ҡорһаҡлы кешегә ҡарата мыҫҡыллап әйтелә.

**таш маңлай** *һөйл*. Үтә лә үҙ һүҙле, үҙенекен генә иткән. ***Таш маңлайҙар**! Шуны белегеҙ: Ҡан теләмәй беҙҙең илебеҙ!* (Ғ. Мәсғүт.)

**таштан йүкә һуйыу**. 1. Юҡты бар итеү, йүнләү. ...*Ҡуй инде был алабута тартыу тигәндәре — **таштан йүкә һуйыу** менән бер.* (Б. Бикбай.)

2. Һаран кешенән бер нәмә лә алып булмау тураһында. ***Таштан йүкә һуйылмағандай**, һаран Зәһирҙән бер «ярты»ны былай ғына алып булмай шул.* (Л. Яҡшыбаева.) [*Вәли*:] ***Таштан йүкә һуйылыр**, һинең атайыңдан бер һаплам епте лә бушҡа алып булмаҫ.* (Ғ. Ғүмәр.)

**таш ташлау** *кемгә*. Этлек эшләү. *Дөрөç, бер заман Фетнәгә лә **таш ташлап** маташтылар.* (Р. Солтангәрәев.)

**ташын ашағыр**. Ҡаргау һүҙе.

**ташын ашаһын**. Аҙыҡты бирергә, бүлешергә теләмәгәндә асыу менән әйтелә. — ***Ташын ашаһын** немец, бөртөгөн дә ашатманым, ҡыярымды ла, бәрәңгемде лә.* (Ж. Кейекбаев.)

**таяҡҡа атландырыу** *кемде*. Бик оста алдау, һемәйтеү. *Нисек тә күршеһен отоп, **таяҡҡа атландырып**, үҙенә мул, яҡшы табыш сығарыу уйы [Илмырҙа менән Хөсәйендең] икеһен дә ташламай.* (К. Мәргән.)

**таяҡ ташламы** [ер]. Сама менән үлсәнгән яҡын ара. *Йорттан **таяҡ ташламы** ғына ерҙә таҡта түшәлгән оҙон күпер.* (Ж. Кейекбаев.)

**таяҡтың йыуан (ауыр) башы төшөү (тейеү, эләгеү)** *кемгә*. Эшхәлдең ауырлығын күтәргән, хөкөм, язаның ҡатырағын алған кеше хаҡында әйтелә. *Ниңә Мәрйәм тыңлауһыҙ булды, ниңә бөтөнләй юлдан яҙҙы? Бында һинең үҙеңдең дә ғәйебең бар түгелме, Хәбибулла ағай? Эйе, **таяҡтың йыуан башы** һиңә **төшә**...* («Сов. Башҡ.») *Бында **таяҡтың ауыр башы** минең елкәгә **төшә**. Артыҡ ышандым шул. Нимә эшләйһең, йәшлек, хаталанғанмын...* (Б. Бикбай.) *Ул ҡайтҡас та әсәйемә:* — *Бөгөн **таяҡтың ауыр башы** минең үҙемә **эләкте**,* — *тине.* — *Әрләнеләрме?* — *тип һораны әсәйем.* (Ә. Бикчәнтәев.)

**таяҡты тотҡан еренән һындырыу**. Эштең ни менән бөтөрөн уйлап тормай, ҡырҡа ғына хәл итеү. *Маһираға Хәбибуллиндың үҙен теҙгенһеҙ тотоуы электән үк оҡшамай ине. Был юлы ла **таяҡты тотҡан еренән һындырмаҡсы** була.* (Х. Ғиләжев.)

**теге донъяға ебәреү (оҙатыу)** *кемде*. Үлтереү, һәләк итеү. *Рәхим Солтанов бер үҙе генә дошмандың йөҙҙән ашыу һалдатын **теге донъяға оҙатты**.* («Сов. Башҡ.»)

*син. ҡар.*: йәнен йәһәннәмгә ебәреү.

**теге донъяға китеү**. Вафат булыу, үлеү. ***Теге донъяға китмәç** өсөн нисек кенә тешең-тырнағың менән йәбешеп ҡарышма, бер нәмә лә сыҡмаясаҡ.* (Д. Исламов.) — *Әһә, һин дә иптәштәрең артынан **теге донъяға киткәнһең**, ярай, бик яҡшы,* — *тип, ишеген дә япмай, шартлата баçып сығып китте.* (Һ. Дәүләтшина.)

*син. ҡар.*: йән биреү.

**теҙ аçтына һуғыу** *кемдең*. Көтмәгәндә ауыр хәлгә ҡуйыу. [*Тимер*:] — ***Теҙ аçтына һуҡтың** бит, Фатима, былай булғас! Ә мин үҙем беренселекте алырға тора инем.* (Б. Бикбай.) *Хужа бер ваҡытта ла бер хеҙмәтсеһен дә әрләмәй, тик расчет ваҡытында ғына **теҙ аçтына һуға** ине.* (К. Мәргән.)

*син.*: бәкәлгә һуғыу.

**теҙгенде бушатыу** *кемдең*. Тәртипте ҡулдан ысҡындырыу. — *...Минеңсә, һин Фәхриҙең **теҙгенен бушатыбыраҡ** ебәрәһең булһа кәрәк. Был эш ярап бөтмәç.* (Б. Бикбай.) [*Сидоренко*]

*күптән бирле Таймаҫ совхозының Марьевка бүлексәһенә етәкселек итә. Ләкин быйыл* ***теҙгенде бушатып*** *ебәрҙе, белгестәрҙең кәңәшенә ҡолаҡ һалмай башланы.* («Сов. Башҡ.»)

**теҙгенен ҡулға алыу** *нимәнең.* Етәкселек итә башлау, етәкселекте ҡулда тотоу. *Шулай итеп, Әхмәтзыя Көрмәнкәй фермаһының* ***теҙгенен үҙ ҡулына ала.*** («Сов. Башҡ.»)

**теҙгенен ҡыҫҡа тотоу** *кемдең.* Буйлатып, иркенләтеп ебәрмәү, ҡаты булыу.

**теҙ сүгеү.** Үҙ иркен сикләү, буйһоноу. *Таиба әбей үҙ ғүмеренән риза: йән аямай эшләне, кешегә тура ҡарап йәшәне, көслө алдында* ***теҙ сүкмәне,*** *көсһөҙҙө рәнйетмәне.* (З. Биишева.) [*Мозой Әпкәләй тураһында*:] *Ошаҡ ташып, баяр түпһаһына* ***теҙ сүгеп*** *тамаҡ туйҙыра, имеш, уға баярҙар «кенәз» тип әйтәләр.* (Д. Юлтый.) **Теҙ сүктереү** *кемде.*

*син.:* баш эйеү.

**тейһә — тейенгә, теймәһә — ботаҡҡа.** Уйламай-нитмәй, күҙҙе йомоп эш итеү. [*Баснянан мәҡәл яһау*] ... «***тейһә — тейенгә, теймәһә — ботаҡҡа***» *тоҫҡау ғына.* (Р. Ғарипов.)

**тел аҫҡысы.** Һүз оҫталығы. *Уҡытыусы уны үҙе саҡырып алырға мәжбүр булды. Башын эйеп, меҫкенләнеп килеп ултырған егеткә хатта* ***тел аҫҡысы*** *бирергә тырышып ҡараны.* (К. Мәргән.) *Беҙ йөрөйбөҙ ваҡытлыса* ***тел аҫҡысы*** *табалмайса.* (Н. Иҙелбай.)

**тел асылыу.** 1. Һөйләй башлау (*балалар хаҡында*). *Ҡыҙымдың* ***теле асылып*** *килә, шундай матур итеп ләпелдәй.* (Һөйл.)

2. Ихлас һөйләшә башлау. *Ахыр сиктә, Сәмиғулла сынаяҡ өҫтөнән төбөнә генә һалып йотҡоланы. Бер аҙ ултырғас, уларҙың күңелдәре күтәрелеп китте,* ***телдәре асылды.*** (Ж. Кейекбаев.) *Икенсе көрәгә, тәүгеһенә ҡарағанда, әскелтемерәк, ҡеүәтлерәк булып сыҡты. Кешеләрҙең* ***телдәре асыла*** *төштө.* (Ф. Иҫәнголов.) *Хөсәйен ағай бер* ***теле асылғанда*** *миңә үҙенең нужаһын һөйләп алды.* («Сов. Башҡ.»)

**тел асыу.** Һүҙ һөйләү, уй-фекерҙе белдереү. *Беҙ һөрөлдөк төрмәләргә ерҙәге хаҡлыҡ өсөн,* ***Тел асырға,*** *һүҙ ҡатырға булманы хөрлөк тамам.* (Д. Юлтый.)

**тел ауыҙға һыймау** *һөйл.* Ғәйбәт һөйләп йөрөү. ***Ауыҙына теле һыймағандыр*** *үлсәп әйтһен ине һүҙҙәрен. Әҙер ҡаҙыял йотмаҡ тамаҡтарға ҡалһын яман сирҙең биҙҙәре.* (Р. Бикбаев.)

**тел барыу (әйләнеү).** Насар һүҙҙе әйтергә баҙнат итеү (*күберәк юҡлыҡ формаһында ҡулланыла*). *Теле барып әйтә бит әле. — Кисерегеҙ, минең* ***телем бармай.*** *Быны әйтер өсөн юҡ көсөм.* (Р. Шәкүр.)

**тел биҫтәһе.** Юҡ-бар хәбәрҙе күп һөйләгән, үҙендә һүҙ тотмаған кешегә ҡарата асыу менән әйтелә. *Рәхилә ханым, моғайын, йүнһеҙ бер* ***тел биҫтәһелер.*** (Ғ. Байбурин.) *Юҡты һөйләмә, йәме, бөтәһе лә күрһен, көнләшһен, күкрәгеңде киреп йөрө. Ә бы-*

*ның кеүек* ***тел биҫтәләренең*** *һүҙен ҡолағына ла элмә.* (Н. Мусин.)

**тел болгау** *һөйл.* Алама хәбәрҙе күп һөйләү.

**тел бәйләнеү.** Тулҡынланыу йә берәй башҡа сәбәптән әйтер һүҙҙе әйтә алмау. *Һөйөүемде әйтәм тиһәм,* ***тел бәйләнә,*** *Ул күҙҙәрең сихырлы бер тоҙаҡ мәллә?* (Ш. Бабич.) *Күп уйлауҙан иҫем, аҡылым бөттө, һүҙ әйтергә* ***телем бәйләнде.*** (Б. Бикбай.)

**телгә алыу** *кемде, нимәне.* 1. Әйтеп, билдәләп үтеү. *Йә, аҡһаҡ Хәким ағайҙың ниндәй шәп балта оҫтаһы булыуын бер ҙә* ***телгә алмайҙар.*** (З. Биишева.) «*Ни фәләнде* ***телгә алдың****? Ә мин унан кәмме ни?*» (Ш. Бабич.)

2. Иҫкә төшөрөп һөйләп алыу. [*Надеждин:*] — *Атайым мәрхүм һәр ваҡыт башҡорттарҙы яратып* ***телгә ала*** *торғайны.* (Д. Юлтый.) *Сергей Есенинды* ***телгә алһаң,*** *Рязань ерендәге Константиновка ауылы хәтергә төшә.* («Сов. Башҡ.»)

**телгә бөткән.** Һүҙгә бик шәп булып та эшкә юҡ кеше хаҡында ғәйепләп әйтелә. [*Шамил:*] *Их,* ***телгә бөткән*** *маҡтансыҡ. Хөрәсән! Күҙ көйөгө.* (Ғ. Ғүмәр.) ***Телгә бөткән*** *Мәғүзә, билдәле, ирен хурлау өсөн буяуҙарын ҡыҙғанманы.* (Б. Бикбай.) *Мәхмүтте әйтәм, иллә* ***телгә бөткән*** *инде. Минең кеүек һис тә юғалып ҡалманы.* (Ғ. Байбурин.) *Хәйрулланың да типһә тимер өҙөрлөк саҡтары бар ине бит. Бынау* ***телгә бөткән*** *быҙау ҡараусы түгел инде.* (М. Хәйҙәров.)

**телгә килеү.** Һөйләй башлау, һүҙ әйтеү. *Беренсе булып Байғужа* ***телгә килде:*** — *Иҫ китерлек шәп уйнай! Иөрәктәрҙе телеп-телеп ала.* (Д. Юлтый.) Шиғри телдә — *Үләндәр ҙә, ысыҡтар ҙа, аҡҡоштар ҙа* ***телгә килгән.*** (А. Игебаев.) *Бытбылдыҡтар, ҡапыл* ***телгә килеп,*** *йәш бойҙайға уңыш теләне.* (Ә. Әхмәткужин.)

**телгә һалышыу (һалыныу).** Теләһә ниндәй хәбәрҙе күп һөйләү, тылҡыу. *Азамат, бөрсөк-бөрсөк тирен һөртөп:* — ***Телеңә һалынма,*** *күргәнеңде һөйлә!* — *тине* [*Камалға*]. (Ә. Бикчәнтәев.) — *Ярар, ҡартлас,* ***күп телеңә һалынма.*** (Х. Ғиләжев.) [*Кәтүк:*] *Нимә* ***телеңә һалындың,*** *үҙеңдең эшең булмаһа, эшле кешенең ваҡытын әрәм итмә, юҡ-бар һөйләп.* («Сов. Башҡ.»)

**телде арҡыры тешләү.** 1. Арып хәлдән тайыу; әлһерәү. *Беҙ бит ошо мартен мейестәренә ҡулыбыҙ менән суйын тейәнек.* ***Тешләнә ине телдәр арҡырыға,*** *арып-талып, янып төшә инек.* (Ғ. Мәсғүт.)

2. Өнһөҙ ҡалыу, өндәшмәү. *Ләйсән путевканы алыуҙан баш тартҡас, Шаһнияз* ***телен арҡыры тешләне.*** (Ә. Мирзаһитов.)

*син.*: телде йотоу, ләм-мим тип әйтмәү.

**телде йотоу.** Өндәшмәҫ булыу, өнһөҙ ҡалыу. *Ҡайһы берҙә Новиковтың ҡаштары емерелә, ул,* ***телен йотҡандай,*** *өнһөҙ ҡала торғайны.* (Д. Юлтый.) [*Таһир*] *тып-тын ғына баҫып торған малайҙарҙы күреп, аптырап ҡалды шикелле.* — *Әллә* ***телегеҙҙе***

***йоттоғоҙмо***? (Ә. Бикчәнтәев.) [*Карам*:] *Ҡайттым бит бына, ***ниңә телеңде йоттоң***?* (Н. Мусин.)

**телдең һөйәге юҡ.** Юҡ-барҙы күп һөйләүгә ҡарата шул һүҙҙең әһәмиәтен түбәнәйтергә тырышҡанда әйтелә.

**телде тешләү.** Һүҙҙән тыйылыу, хәбәр һөйләмәҫ булыу (*сер йәки һүҙ таралмаһын тип*). [*Мотиғулла ҡарт*] ... *үкенгән тауыш менән һүҙен башланы: — Тартай теленән табыр тигәндәре дөрөҫ икән. Ниңә* ***телемде тешләп*** *йөрөмәҫкә инде мин ҡартласҡа*?! (Р. Ғабдрахманов.) [*Сәлимә*:] *Кем белә, бәлки ҡайта алмаҫ тип, өндәшмәксе булғайны,* ***телен тешләне***. (Ғ. Хисамов.)

**телде тыйыу (тотоу).** Әйтер ерҙән тыйылып ҡалыу, өндәшмәү. — «*Батша бит ул,* ***телде тый****, һаҡлан, йүләр*!» — *тип өтөккә бер-ике рәт мандылар.* (Ш. Бабич.) — *Әллә мин һеҙгә ҡарауылсымы? — тип ҡоторондо Ҡыҙылтеш һәм Борис-Кипаристы этеп ебәрҙе. — Әгәр ҙә* ***телеңде тыя*** *белмәһәң...* (Ә. Бикчәнтәев.)

**телдән ҡалыу.** 1. Һөйләшеү һәләтен юғалтыу. *Аллаяр шунда* ***телдән ҡалған*** *төҫлө булды. Килենен ошолай, үҙ алдына йөҙө тотош асылған хәлдә, беренсе тапҡыр күрә ине.* (Ф. Иҫәнгөлов.) *Лут,* ***телдән ҡалмаҫ борон*** *тип, эргәһенә йәмәғәте Орҡояны саҡырып алды.* (М. Ямалетдинов.)

2. Ҡаты ауырып һөйләшә алмай башлау. *Атаһы* ***телдән ҡалған****, күпкә бармаҫ.* (Һөйл.)

**телдән табыу.** Тейешһеҙ хәбәрҙе һөйләүҙән зыян күреү.

**телдән төшмәү.** 1. Онотмай, һәр ваҡыт иҫләп, кемдер хаҡында һөйләп тороу. *Быуындан быуынға Зәйтүнә менән Йәнйегеттең исеме* ***телдән төшмәй***. (М. Йәрмөхәмәтова.) *Үлгәненә утыҙ йылдан ашыу бит инде. Шулай ҙа Иосопов халыҡ* ***теленән төшмәй***. («Сов. Башҡ.»)

2. Гел генә тикшерелеп, һүҙ, хәбәр объекты булыу. *Быға тиклем класта әле һуңлап; әле дәрес ваҡытында әҙәби китап уҡып ултырып, уҡытыусыларҙың асыуына тейеп зарландырған,* ***телдән төшмәгән*** *Әүхәҙиғә ғәжәп итәм.* (К. Кинйәбулатова.) **Телдән төшөрмәү** *кемде, нимәне*: *Эх, һеңлеләре Райхан, Райхан!.. Был исемде Морат* ***теленән төшөрмәй*** *бит.* (Б. Бикбай.)

**телдән яҙыу.** Ҡапыл ғына һөйләшмәҫ булыу (*аптырауҙан йәки башҡа сәбәптән*). *Асыу тотоп, кисен Ғәлләм ҡәһәрле йортҡа барҙы, Тупһаны атлап ингәс тә, бәй, үҙе* ***телдән яҙҙы***. (Т. Арслан.) *Айбулат, бер һүҙ әйтергә көсө ҡалмаған һымаҡ,* ***телдән яҙып****, Волгаға ҡарап ҡатты.* (Һ. Дәүләтшина.)

**теле ауыҙына һыймай** *кемдең, һөйл.* Ауыҙында һүҙ төтмаған кешегә ҡарата асыу белдереп әйтелә.

**теле менән тирмән тартыу (таш ярыу).** Һүҙе, хәбәре менән күп эшләгән булып күренергә тырышҡан кешегә ҡарата мыҫҡыл белдереп әйтелә. ***Теле менән таш ярыу*** *— Әжмәғолдоң ғәҙәте.*

(М. Кәрим.) *Пугачев китеп барҙы,* ***тел менән тирмән тартһын****, тигәндер. Шулай ҙа шикләнеп тә ҡуйҙы.* (Ғ. Ибраһимов.)

**телен асыу (сисеү)** *кемдең.* Һөйләштереү сараһын табыу. *Гөләндәмдең уңышлы юл теләүе, үҙ хәле тураһында нисегерәк һүҙ башларға белмәй торған Тарасовтарҙың* ***телен асты.*** (Ғ. Ғүмәр.)

**теленә шайтан төкөргән** *кемдең, һөйл.* Телгә бик оҫта. *Эйе, был ысынлап та ҡорал-яраҡ төҙәтеүсе тылсымлы оҫта,* ***теленә****, һалдаттар әйткәнсә,* ***шайтан төкөргән*** *йор һүҙле Ваня Рябчиков ине.* (Ә. Хәкимов.)

*син.*: теле сарлаган кеүек.

**телен ҡыҫҡартыу** *кемдең.* Теләһә ниндәй хәбәр, гәйбәт һөйләүҙән туҡтатыу.

**телеңде йоторлоҡ (йоторһоң).** Бик тәмле (*аш-һыуға ҡарата*). *Бешергән аштары* ***телеңде йоторлоҡ*** *була.* (Б. Бикбай.)

**телеңде сөсө ашағыр(ы)!** Үтә әсе телле кешене әрләп әйтелә.

**телең ҡалыр инеме ни (ҡалмаҫ ине).** Үтенесте кемгәлер еткермәгән, әйтергә теләмәгән кешегә ҡарата ризаһыҙлыҡ белдереп әйтелә.

**телеңә тилсә (төйөр, сөйәл, йылан ҡарағы) төшкөрө (тошһөн, сыҡҡыры, сыҡһын).** Насар хәбәр килтергән кешегә ҡарата әйтелгән (*гәҙәттә, алама һүҙҙең косөн кире ҡағыу өсөн әйтелә*).

**теле оҙон** *кемдең* **(оҙон тел).** Ғәйбәт һөйләргә яратҡан. ***Теле оҙон*** *булмағандың ғүмере оҙон.* (Мәҡәл.)

**теле сарлап ҡуйған кеүек** *кемдең.* Хәбәр менән алдына сығармай тәтелдәп торған (*кире баһа биргәндә ҡулланыла*).

*син.*: теле телгә йоҡмай.

**теле табанына еткән** *кемдең, һөйл.* Күп хәбәр һөйләгән, лаҡылдаҡ.

**теле телгә йоҡмай (теймәй)** *кемдең.* Туҡтауһыҙ һөйләп, тәтелдәп кенә торған. [*Сәхибә туташтың атаһы*] *дингә ҡаршы диспуттарҙа ҡатнаша һөйләй башлаһа,* ***теле телгә йоҡмай.*** (З. Биишева.) *Алһыу һәр кемдән үҙен яраттыра белә,* ***теле телгә йоҡмай****, һайрап ҡына тора.* (Ғ. Ибраһимов.) [*Рәхмәт*] *Һүҙгә тигәндә,* ***теле телгә теймәй****, үҙе алсаҡ һәм саф күңелле.* (Ж. Кейекбаев.)

*син.*: теле сарлап ҡуйган кеүек.

**тел етмәү** *нимәгә, ни эшләргә.* Әйтергә һүҙ тапмау.

**теле тимер тишә** *кемдең.* Үткер һүҙле. — *Атай риза булманымы? — Риза булманы ғына түгел әле ... көлөп ҡалды. — Уның* ***теле*** *тейһә,* ***тимер тишә*** *инде...* (И. Насыри.)

**теле тышау тотмай** *кемдең.* Һөйләгән һүҙен үлсәп һөйләй белмәгән, ауыҙына килгәнде әйтеп барган кешегә ҡарата әйтелә. *Ауылға тағы мөғәллимә килгән. Үҙе былай итәғәтле генә күренһә лә, анау Шәриптең* ***теле тышау тотмаған*** *нәмәҫтәкәйе менән эшләй. Ул аҙғын менән эшләгәс, яҡшыға бармаҫ.* (И. Ғиззәтуллин.)

**тел күтәреү**. Баҙнат итеп һүҙ әйтеү. — *Ул нишләп тағы Имаметдин ағайыңа ҡаршы **тел күтәрәһең**?!* (Һ. Дәүләтшина.)

**тел көрмәлеү (бәйләнеү)**. Бәйләнешле генә һүҙ һөйләй алмау, тотлоғоу. *Ике туҫтаҡ ҡымыҙ эсте ниһә, **теле бәйләнә** икән.* (Халыҡ йырынан.)

**тел ҡайрау**. Әсе теллелек күрһәтеү, тел менән сәнсеү. *Серәкәйле шыр тиле Ғимат, тилесә **телде ҡайраусы** беләү.* (Ш. Бабич.)

**тел ҡалҡытыу**. Баҙып һүҙ әйтеү. *«Төтәтмә, малай, атаңдан өлкәндәр барҙа оял бәләкәй», — тип кем дә булһа әйтер төҫлө ине. Әммә **тел ҡалҡытыусы** булманы.* (Й. Солтанов.)

**тел ҡысыу**. Кәрәкмәгәндә лә әйтергә ынтылып ҡына тороу. *Әллә нисәмә ҡат **теле ҡысытһа ла**, Аҫылгужа табында бөтөнләй шым ултырҙы.* (Б. Аҫылғужа.)

**тел менән (тел дә) яңаҡ**. Ҡоро һүҙ һөйләп, эшен эшләй алмаған кешегә мыҫҡыллап әйтелә.

**тел оҙайыу (оҙонайыу)**. Батырланып китеп тейеш булмағанды күп һөйләү. [*Әмирханов*:] — *Һинең, малай, расчет алғың киләме әллә? Бик **телең оҙая** башланы.* (С. Агиш.) [*Хәйруш — Йәнбикәгә*:] — *Лығырлама, бар, эшеңдә бул, **телең** бик **оҙоная** башлаған.* (К. Даян.) **Тел оҙайтыу**: *Ҡул аҫтымда хеҙмәт иткән ярлыларға орошоп, һүгеп, теләгәнсә **тел оҙайтам**.* (М. Ғафури.) *Әхтәмдең мулла менән ирешеп китеүен һалдаттарҙан ҡайһыһылыр ятратманы: — Дин кешеһе менән **тел оҙайтыу** кәрәкмәҫ ине, — тине...* (В. Исхаҡов.)

**тел осонда <ғына> тороу (осона килеү)**. Әйтергә әҙер генә булыу. *Ололар, егет саҡтағы саялыҡтарын иҫкә төшөрөп, көлөшәләр; шуға ялғаныргә йыры ла **тел осонда ғына тора**.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Заһит ҡыҙғандан-ҡыҙа барҙы. Ауылдаштары алдында онотолған кәрәкле һүҙҙәр хәҙер ... үҙҙәренән-үҙҙәре **тел осона килә**.* (Я. Хамматов.)

**тел оҫтонә һалырлыҡ** [аҙыҡ юҡ]. Бөтөнләй, бер ҡабым да ризыҡ ҡалмаған хәл. *Беҙҙең ҡарсыҡ менән ҡыҙҙың йорттарында Аҙығы юҡ **тел өҫтөнә һалырлыҡ та**.* (Ғ. Мәсғүт.)

**тел сарлау**. Буш хәбәр һөйләү. *Сәсәндәрҙең быныһы ла, һис һуҙмай, эре генә ҡыланып, майҙан уртаһына, сабый янына сыҡҡан да таҫма **телен сарларға** керешкән.* (Ф. Иҫәнғолов.) — *Ярар, ярар, — тине* [*геологтарҙың*] *өсөнсөһө, — ҡарарбыҙ, тикшерербеҙ. Ниңә алъюҫыҡҡа **тел сарларға**.* (Ә. Вахитов.) [*Рахман*:] — *Һеҙ, ҡыҙҙар, бында эшләргә килдегеҙме, әллә **тел сарларғамы**? — тине.* (Ә. Вәли.)

*син.*: лэстит һатыу.

**тел сиселеү**. Асылып китеп ихлас һөйләшеү. *Бер мәл, Фәтхулла ағай менән лазаретта һөйләшеп ултырғанымда, **телем сиселеп** китеп, уға бәйеттәремде уҡып күрһәткәйнем инде.* (Д. Юлтый.) *Ошолай йомшаҡ тауыш менән иркәләп, башынан*

*һыйпай-һыйпай һорағас ҡына, етем баланың күңеле был ят апайҙы үҙһенде, **теле сиселде**.* (Ш. Янбаев.)

*син.*: тел асылыу 2.

**тел сығыу.** 1. Һәйбәт итеп һөйләшә башлау (*бала-саға хаҡында*). ***Теле сыҡҡан** һәр бер бала «Әлифба» һорай.* (К. Кинйәбулатова.)

*син.*: тел асылыу 1.

2. Әйтешә, тирғәшә башлау. *Ҡара, ҡара, килендең дә **теле сыға башлаған** бит.* (Һөйл.)

**тел тейҙереү** *ҡемгә, нимәгә.* Яман һүҙ әйтеү, хурлау. [*Яппар*:] *Тимәк, Дүсмәткә **тел тейҙереү** — партияға тел тейҙереү менән бер булып сыға.* (М. Кәрим.) [*Сәми*:] *Һин мине әҙәм иткән Әлми ағайыма **тел тейҙерәһең**!* (Ә. Вахитов.) [*Рыҫҡол*:] *Етер малымды талағаның, минең ҡатыныма **тел тейҙерәһе** булма!* (Б. Бикбай.)

**тел-теш күрһәтеү.** Ҡыйып ҡаршы һүҙ әйтеү. *Хатта арабыҙҙа иң йыуаш, иң тыйнаҡлы иҫәпләнгән арҡыры баш Хәмитйән дә **тел-теш күрһәтә** башланы.* (М. Кәрим.)

**тел-тешкә эләгеү (инеү).** Кеше һүҙенә, ләститкә ҡабыу (*йөрөтөлгән хәбәр, насар һүҙ тураһында*). *Әҙәм **тел-тешенә ингәс**, тешһеҙ итте бирәүһе. Берәһе мине эшкә екте, эшһеҙ итте бирәүһе.* (Т. Йосопов.)

**тел тигәндә телеп һала.** Үткер һүҙле, бәхәстә алдына сығармай (*башлыса кире баһа биргәндә әйтелә; Үҙең алыҫ булһаң да, телең оҙон шул. **Тел тигәндә телеп һалаһың**.* (Һ. Дәүләтшина.) [*Фәһимә Рәхимгә*:] *Һин дә, **тел тиһәң**, **телеп һалаһың**. Шул телең булмаһа, күптән күҙеңде ҡарға суҡып киткән булыр ине.* (Ш. Янбаев.)

*син.*: теле телгә йоҡмай.

**тел төбө.** Һүҙҙең ысын асылы, кинәйәле мәғәнәһе. *Әмир ҡыҙҙың **тел төбөнән** үк аңланы.* (Х. Ғиләжев.) ***Тел төптәренә** иғтибар итеп хөком йөрөткәндә, кейәү кеше приказчик булырға тейеш ине.* (Д. Юлтый.) *Зөфәр, әлбиттә, егеттең **тел төбөн** шунда уҡ һиҙеп алды.* (Ғ. Байбурин.)

**тел һатыу.** Юҡты-барҙы күп һөйләү. *Ҡайһы берәһе уны дошманлыҡ менән һөйләй, ҡайһы берәһе күп белгән булып **тел һата**.* (И. Насыри.) *Марданов: Кемдең хаҡы бар минең өсөн закон сығарырға? Милиционер: Йә, **тел һатма**. Киттек, киттек, егет.* (Х. Ғиләжев.)

**теләгәнгә белгән** *һөйл.* Бик тырышып тотонғанда, килтереп сығарып, табып була мәғәнәһендә ҡулланыла.

**тел әйләнмәү.** Иҫереп йә ауырып һүҙ әйтә алмаҫлыҡ хәлгә килеү.

**тел әрәм итеү.** Һүҙеңде тыңламаған кешегә кәңәш, аҡыл биреүең өсөн үкенгәндә әйтелә.

**теләһә кем.** Билдәһеҙ кеше (*ышанырға ярамағанды белдерә*). *Эйе, йәш малдарҙы* ***теләһә кемгә*** *ышанып тапшырмайҙар.* («Сов. Башк.»)

**теләһә ҡайһылай (нисек).** Насар итеп, арлы-бирле башҡарылған эш-хәлгә ҡарата әйтелә.

**тел ягыу** *кемгә.* Ғәйепләп йәки кәмһетеп һүҙ әйтеү, һүҙ тейҙереү. [*Фәсхи хәҙрәткә*:] — *Ә һин Ғайсаға* ***тел яҡма.*** *Ул ыласын ине, хаҡлыҡ өсөн ҡорбан булды.* (С. Мифтахов.) ...*Киленгә әҙерәк* ***тел яҡҡайным****, ул... ире ягына ауҙы ла китте.* (С. Ҡудаш.)

**теңкәгә* тейеү.** Оҡшамаған нәмә менән йонсотоу, яфалау. *Ел малаиҙарҙың өҫ-баш кейемдәрен йолҡҡоланы, киске аш ваҡытында табын уртаһында йөрөп* ***теңкәгә тейҙе.*** (К. Мәргән.) *Был мәшәҡәттәренә күнер ине Ғафар, йыш сырхауы* ***теңкәһенә тейә.*** (Н. Мусин.) *Сиғандар, ашанты һоранып, старостаның* ***теңкәһенә тейеп*** *бөттөләр.* (Ж. Кейекбаев.)

*син.*: теңкәне ҡоротоу, маҙага тейеү, йәнгә тейеү.

[***Теңкә** боронғо төрки телендәге *тең* «кос» һүҙенә барып тоташа.]

**теңкәне ҡоротоу.** Ни менәндер ныҡ йонсотоу, маҙаһыҙлау. *Иртәгеһенә: «Эсереп, балымды кәмһеттергәнһең», — тип* ***теңкәмде ҡоротто.*** (Н. Мусин.) *Ә ямғыр ни эшләтә?! Себеште һағалаған төйлөгән шикелле, баш осонда урангылап,* ***теңкәне ҡорота*** *бит.* (Ш. Янбаев.) **Теңкә ҡороу:** ***Теңкә ҡороно****, белмәнем кемдән* ***тотоп башларға ла****...* (Ш. Бабич.)

*син. ҡар.*: теңкәгә тейеү.

**тере көйөк (хәсрәт).** Эшкә инмәгән тип, кешене кәмһетеп әрләгәндә әйтелә. — *Эй,* ***тере көйок****, һиңә әйтәм! — тип йыуан кеше кинәт Азаматҡа табан атланы.* (Ә. Бикчәнтәев.) *Бөтә халыҡ Хәсән аҡһаҡалға тартыла. Уны тыңәрәк эсенә алалар. Ә теге* ***тере көйок*** *бай старосталар менән бер яҡ ситтә баҫып ҡала.* (Ә. Вахитов.)

**тере ҡулһыҙ ҡалыу (булыу).** Бөтөнләй ярҙамһыҙ тороп ҡалыу. *Бер хисапсы бөтөн колхоз байлығын иҫәпләп, планлаштырып, хисаплап өлгөрә торғайны. Эптерәй киткәс ни, колхоз* ***тере ҡулһыҙ ҡалды.*** (Ә. Вахитов.) *Ҡараҡтар бөтә өс йөҙ баш атты упҡынга осора, отряд* ***тере ҡулһыҙ ҡала.*** («Сов. Башҡ.»)

**тере ҡул(һыҙ) итеү** *кемде.* Ярҙамсыһыҙ торғоҙоп ҡалдырыу. — ***Тере ҡулһыҙ*** *иттең бит, — тип көйәләнде ҡарсыҡ һынған йәмкәне күреп.* («Сов. Башҡ.») *Иә инде, ҡайһылайтып мине* ***тере ҡул итеп*** *китте Сафурам...* (Һ. Дәүләтшина.)

**тереләй гүргә инеү.** Бик ауыр хәлгә дусар булыу.

**тереләй гүргә тыгыу** *кемде.* Бик ҙур ҡайгыга һалыу, газапҡа дусар итеү.

**тереләй (тотоп) ашау** *кемде.* Бик ныҡ ҡыйырһытыу, йәберләү. [*Муйылбикә*:] *Был ни тигән эш инде, балам. Атайың булһа, атайың* ***тереләй ашап*** *бара.* (Һ. Дәүләтшина.)

**терелəй утҡа һалыу** *кемде*. Бик ауыр, ғазаплы хəлгə төшөрөү.

**терелəй тунау** *кемде*. Бик ҡаты ғазапҡа, ҡыйынлыҡҡа дусар итеү.

**терһəк(те) тешлəү**. Ҡылған ҡылыҡҡа, эшкə ҙур үкенес белдереү. *Ғүмерҙең бер тəңгəлендə шулай əсенеп үк «**терһəк тешлəйбеҙ...**»* (М. Кəрим.) *Хаталарым боҙҙай тайҙырһа ла, мөмкин түгел, **терһəк тешлəргə**.* (Ф. Туғыҙбаева.) *Командировка кешене боҙа, тиҙəр ине, ысын икəн. Ҡара, аҙаҡ **терһəкте тешлəргə** тура килмəһен.* (И. Абдуллин.) **Терһəкте тешлəп булмай:** *Йəнə лə, тəүҙə эшлəп, мал табып байый егет. Шунан ғына кəлəш ала. Юҡ, **терһəкте тешлəп булмай** икəн... (Ж. Ҡейекбаев.)*

**тет итеп** [эҙлəү]. Бөтə ерҙе аҡтарып сығыу (*берəй нəмəне таба алмайынса*). *Ҡəлəмем күҙ менəн ҡаш араһында юҡ булды, **тет итеп** эҙлəнем, табылманы.* (Ж. Кейекбаев.)

**тетмəһен (тетмəкəйен) тетеү** *кемдең*. 1. Бик ҡаты əрлəү, ҡыҙҙырыу. *Алмабикə еңгə һөйлəне лə һөйлəне. Сəйфулланың **тетмəкəйен тетеп** һалды. Уны үлтерҙе. Бөтөрҙө. Ғөмүмəн, эштəн сығарып тирҙəне.* (И. Ғиззəтуллин.) *Зөһрə апай əсе күҙ йəше һығып ярһыны, өндəшмəй башын баҫҡан иренең **тетмəһен тетте**.* (Ш. Янбаев.)

2. Бик ҡаты туҡмау. — *Үҙең əйтмешлəй, ҡул ҡаушырып ултырмайбыҙ ҙа баһа! Дошмандың **тетмəһен тетəбеҙ**. Нисəмə ауылды аҡтарҙан ҡотҡарҙыҡ.* (Я. Хамматов.)

*син. ҡар.*: кəрəген биреү.

**теш араһына ҡыҫтырыу**. Ашап алыу. ***Теш араһына ҡыҫтырырға** булмағас, эшлəге лə килмəй икəн.* (Ə. Бикчəнтəев.)

*син.*: тамаҡ ялғау.

**теш араһын (тобон) һурыу** *һөйл*. Ашарға таба алмай асығыи йөроү.

**теш батмау (үтмəү)** *нимəгə*. Булдыра алмау, ҡулдан килмəү. [*Фəйрүш*] *Тышта күренеп торған ауырыу булмаһа, эске ауырыуға фельдшерҙың **теше батмай**.* (Ҡ. Даян.) *Фатиманың да **теше батмаған** мəсьəлəлəр килеп сыҡҡылай, лəкин, оялыпмы, əллə сер бирмəҫкə телəпме, башҡаларҙан һорашмай ул...* (Б. Бикбай.) [*Емеш*:] *Рус телендə уҡырға **теш батмай** əле.* (З. Биишева.)

**теш батырыу** *кемгə*. Һөжүм итеп ҡарау. [*Шəфиевҡа*] ***Теш батырырға** күп кешенең ҡулынан килмəне, уның эшен соҡой башланыңмы, үҙеңдең батырыңды көт тə тор*! («Сов. Башҡ.»)

**тешеңде ҡойормон**. Янаузы белдергəндə асыуланып əйтелə. *Һиҙҙем эшеңде, **ҡойормон тешеңде**.*

**теше төшкəн (сыҡҡан)** *кемдең нимəлə*. Берəй эштə ҙур тəжрибə туплаған. — *Лоҡмановты əйтəһегеҙме? Бик шəп егет, сауҙа эшендə **теше сыҡҡан** кеше...* («Һəнəк».) *Балыҡтың сиртеүен ҡышҡы мəлдə телəһə кем һиҙə лə алмай. Балыҡта йөрөп, **теше төшкəндəр** генə һыу өҫтө йыйырылыуҙан уҡ нимə булғанын аңлап ала.* («Сов. Башҡ.»)

**теше төшөү (сығыу).** Ниҙер эшләргә, ҡылырға тип тырышыу. «*Көтөү тип **теше сыҡты**. Әллә кем көтөүен көтә. Әллә колхоздыҡы, әллә сурттыҡы*», — *тип ауыҙ эсенән һуҡранып алды карсыҡ.* (Х. Ғиләжев.)

**теш(е)-тырнағы менән** [ҡаршы булыу, тырышыу]. Бик ҡаты, бар көстө, тырышлыҡты биреп (*ниҙер эшләргә маташыу*). *Байталдың юғалыуы яңы ғына күтәрелеп, донъяһын тәртипкә һалып, тамырлы байҙар рәтенә инеп барыусы, төрлө юлдар аша **теше-тырнағы менән** байырға тырышыусы Әхмәҙигә ҙур зыян булды.* (Ж. Кейекбаев.) [*Мәҙинә Харисҡа*:] ...*Һиңә тормошҡа сығыуыма ни өсөндөр **теше-тырнағы менән** ҡаршы бит ул* [*әсәйем*]. (Ш. Янбаев.) *Секретарь уға өгөт-нәсихәт биреп ҡараһа ла, Хикмәт **теш-тырнағы менән** ҡаршы булды.* (Х. Ғиләжев.)

**...тигән көнгә төшөү**. Ниндәйҙер ҡылыҡ, эш өсөн үкенес белдергәндә әйтелә. *Булмаһа, ай ятһаң да, ебәрәсәк түгелдер, үҙем дә ниңә барҙым, **тигән көнгә төштөм**.* (Һ. Дәүләтшина.)

**теш үтеү (батыу)** *кемгә, нимәгә*. Булдыра алыу, еңеп сығыу. *Тиҙ генә **тешең үтер** тимә уға* [*Аллаярға*]. *Бөгөн донъяла ниндәй ҡиәфәттә йәшәү уңайлыраҡ — көн элгәре шул төҫкә инә ул.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**теш (яңаҡ) бейетеү** *һөйл*. Шәп-шәп итеп ашау, тамаҡ туйҙырыу.

**теш ҡайрау** *кемгә*. Асыу һаҡлап, уҫал ниәт тотоу. *Собхан старшина ла, Ғаббас мулла ла һиңә бик яман **теш ҡайрайҙар** икән, тип һөйләйҙәр.* (З. Биишева.) *Эшселәр бигерәк тә Кацелгә **теш ҡайранылар**.* (Ж. Кейекбаев.) *Ҡыҙылтеш һаман әле һиңә **теш ҡайрай**. Капитан ағайҙың да һарыуы ҡайнай.* (Ә. Бикчәнтәев.) **Теш ҡайраусы**: [*Ғикрәшә*:] ***Теш ҡайраусылар** бик күбәйҙе. Ни анау аҡтарында ла бөтмәҫ армия булды.* (В. Исхаҡов.)

**теш ҡыҫыу**. Үҙеңде түҙергә мәжбүр итеү. *Полктағы һуғышсылар, командирҙар **теш ҡыҫып** түҙҙеләр-түҙҙеләр ҙә, ахыр килеп, Зәки Вәлиди штабына күмәк протест яҙырға мәжбүр булдылар.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Минең **тешемде ҡыҫырға** иткән һүҙҙәрҙе еңергә тип өмөтләнеп, тағы бер йылға тәғәйен, ҡарттар әйтмешләй, ологайһынланып ҡайттым.* (Ә. Вахитов.) ***Теште ҡыҫып**, әсе уттар йоттом, күҙҙе йомоп, шатлыҡ кисерҙем.* (Й. Солтанов.)

**теш төшөү**. Берәй нәмәгә көслө теләк белдереп, өҙлокһөҙ шул турала һөйләү. [*Мәхмүзә*:] *Байырға кәрәк, йәш бисә алам, тип **теше төштө** инде уның.* (Б. Бикбай.)

**тештәре аралы** *кемдең, һөйл*. Ауызыида сер тотмаған; шаранъяра.

**теш һыныу**. Берәй эште башҡара алмау, еңелеү. *Быңдай ҙур һүҙҙе төйнәүе генә анһат, ә аҙаҡ сисә алмай **тештәр һына**.* (Ә. Хәким.)

**тештe һындырыу**: *Шунда **тешен һындырасаҡ** фаворит.* (Б. Аҫылғужа.)

**теш һыуын һурыу**. Ас йәшәү, аслыҡ кисереү.

**тиғеҙ ерҙә абыныу**. Юҡтан яңылышыу, көтмәгәндә хата яһау. [*Нуриев*:] — *Бәлки һуң түгелдер, һөйләш етәксең менән, **тигеҙ ерҙә абыныл** тора ла баһа.* (Ә. Хәким.)

**тилебәрән орлоғо ашаған** *һөйл*. Аҡылһыҙланган, тилегә әйләнгән, тилергән.

**тимер ат**. Машина (*күберәк матбуғат телендә ҡулланыла*). *Әгәр шоферҙар «**тимер аттарына**» саҡ ҡына иғтибарлыраҡ булһа, күңелһеҙ осраҡтарҙың күбеһенә юл ҡуйылмаҫ ине.* («Башҡортостан».)

**тимерен тутыҡтырыу** *кемдең һөйл*. Туҡмау, дөмбәсләү. — *Ярай, Тимербайығыҙҙың **тимерен тутыҡтырырмын** мин, ҡамырға әйләнеп ҡалыр, — тип маҡтана хулиган.* (И. Ғиззәтуллин.)

**...тимәһән хәтере ҡалыр**. Кемде йәки ниҙе лә булһа кәмһетеп ҡарағанда әйтелә. *Мәләүезе лә ҡала **тимәһәң хәтере ҡалыр**: өйҙәре тәпәш, урамдарын көрт баҫҡан.* (Ш. Янбаев.)

**типһә тимер оҙөрлок (оҙөрҙәй)**. Физик яҡтан бик көсло, таҙа кәүҙәле. *Яңы ғына **типһә тимер өҙөрлөк** егет әрәм булды...* (М. Ғафури.) *Һуҡһа, баҡыр өҙөрлөк ул, **типһә өҙөр тимерен дә**.* (А. Игебаев.) *Ауылдағы Ғәйниямал өләсәһе, 60 йәш өҫтөндә булыуына ҡарамаҫтан, **типһә тимер өҙөрҙәй**, тап-таҙа...* (Ф. Рәхимғолова.) ***Типһә, тимер өҙөр** ине, Бер бәһлеүән ине торғаны.* (Р. Түләк.)

**гиреғә һыйыша алмау (һыймаҫтай булыу)**. Асыуҙан, ниҙелер яратмау, оҡшатмауҙан түҙә алмай ҡыҙышыу. *Яубаҫар бисәһенең һүҙҙәрен **тиреһенә һыя алмай** үртәнеп ҡабатлай.* (С. Агиш.) *Бойороғо һаман үтәлмәгәнгә **тиреһенә һыймаҫлыҡ булып** ҡыҙған офицер үҙе лә шунда табан юл тотто.* (Ф. Рәхимголова.) *Бер аҙна үтеүгә яңылыҡ: Иван өйләнә. Кемгә тиһең? Наташаға. Бына шунда инде мин **тиремә һыйыша алмайым**.* («Сов. Башҡ.»)

**тире ҡалынайыу**. Әрһеҙгә әйләнеү, һүҙҙе, үтенесте һ. б. ишетмәй, тыңламай башлау. *Элекке дүрт уҡытыусы бында күп йылдар уҡытып, **тиреләре ҡалынайып** бөткән. Ете йыллыҡ мәктәп асыуға ла улар бик һалҡын ҡарай.* (Ә. Вахитов.)

**тирене алыштырыу**. Эш-ҡылыҡты, ғәҙәтте икенсе төрлөгә әйләндереү. *Шуның һымаҡ бер нисә төҫкә инеп, бер нисә тапҡыр **тиреһен алыштырып** ҡараһа ла, береһе лә уға кәрәк тиклем доход бирмәне.* (И. Насыри.)

**тиренән сығыу (сығырҙай булыу)**. Үтә ныҡ тырышыу. *Беҙҙең Новиков **тиреһенән сығып**, донъялағы бөтә һүҙҙәр менән һүгенә башланы.* (Д. Юлтый.) [*Шәукәтов:*] *Ни шайтаныма, **тиреңдән сығырҙай** булып, бынау мәшәҡәт менән йөрөүеңде аңламайым, улай китер ниәтең булғас.* (М. Кәрим.)

**тиреһе йоҡа** *кемдең* (**йоҡа тиреле**). Эшкә әллә ни рәте юҡ, ялҡауыраҡ.

**тиреһе ҡалын** *кемдең* (**ҡалын тиреле**). Һүҙҙе, үтенесте тыңлай һалып бармай торған, беше. [*Ғәфүр*:] *Ер йөҙөнән күпме ел-дауыл үтте, күпме һыуҙар аҡты, һин үҙгәрмәйһең.* [*Хәжәр*:] ***Тирем ҡалын** минең.* (Ш. Янбаев.)

**тиреһен тунау** *кемдең*. Эшләп тапҡан мал-мөлкәтен үҙләштереү. *Улар* [*байҙар*] *бит ярлыларҙың **тиреләрен тунайҙар**. Фәҡирҙәрҙең елкәләренә ултырып йөрөргә яраталар.* (Ш. Шәһәр.) [*Ғәләү*:] — *Һинме? Һин үҙебеҙҙең кеше. Һеҙ булмаһағыҙ, бына был Шәйхи ҡарундар беҙҙең **тиребеҙҙе тунарҙар** ине.* (Т. Йәнәби.)

**тир кипмәү**. Эштән бушамау. ***Тирең кипмәһә**, байлығың китмәҫ.* (Мәҡәл.)

**тирмәненә һыу ҡойоу** *кемдең*. Ярҙам итеү, яҡлап сығыу. *Уның **кем тирмәненә** һыу ҡойоуы күптән асыҡ инде.* (З. Биишева.) *Офицерҙар, ваҡытлы хөкүмәт вәкилдәре лә йоҡлап ятманылар. Улар һәр хәлдә **һыуҙы** кем **тирмәненә ҡойорға** икәнлекте лә яҡшы беләләр ине.* (В. Исхаҡов.)

**тирмәне шәп (арыу) тарта** *кемдең*. Ашауға бик шәп (*шаяртыу төҫмөрө менән әйтелә*). *Азаттың **тирмәне арыу** ғына **тарта**. Бер тәрилкә борсаҡ ашы менән бер һыныҡ икмәк ялт итеп кенә ҡалды.* (Ә. Бикчәнтәев.)

**тире йыйып күн эшләй** *һөйл*. «Нишләй» тигән һорауға шаярып яуап биргәндә әйтелә.

**тир түгеү**. Ныҡ тырышып, күп эшләү. — *Ул ерҙәрҙә күпме **тир түгелгәнде** ана Гәрәйҙән һора.* (М. Кәрим.) *Ҡала төҙөү өсөн Миннешәриф тә аҙ **тир түкмәне**.* («Сов. Башҡ.»)

**тишек ауыҙ**. Эсендә сер тотмаған кешене әрләгәндә әйтелә [*Гөлсара Әхмәткә*:] — *Кит, бынауы **тишек ауыҙ**! Аҙ ғына ла сер тота белмәгәс, егетме һин!* (Ф. Әсәнов.)

**тишек баш (башы тишек)** *кемдең*. Аңлай, тошонә (*йәшерен һөйләгәндә ҡулланыла*). *Атайым, хатты инде, беләм, уҡып сыҡҡас, әсәйем менән кинәйәләп кенә һөйләштеләр, мин, **тишек баш**, һиҙмәһен тиҙәр.* (З. Йәнбирҙина.)

**тишек йыртыҡтан көлгән**. Үҙендә булған етешһеҙлекте, насарлыҡты башҡаларҙа күреп, мыҫҡыл иткән кешегә ҡарата әйтелә. — *Үҙесе, үҙесе!* — *Усман салбар кеҫәһенән бәләкәй генә көҙгө сығарып Әхтәмгә тотторҙо.* — ***Тишек йыртыҡтан көлөр**.* (Т. Бүләков.)

**тишек кәмәгә (шыуманга, шүмәнгә) ултыртыу** *кемде*. Бик оҫта итеп алдау; һемәйтеү. *Һин беҙҙе **тишек кәмәгә ултыртма**, Сауҙайән ағай, беҙ бөтәһен дә беләбеҙ.* (И. Ғиззәтуллин.) *Әлбиттә, улар, Урманцевтар, алдайҙар, халыҡты йыш ҡына **тишек шүмәнгә ултырталар**.* (С. Ағиш.) **Тишек кәмәгә ултырыу**: — *Нимә һин, Ләбиб, ҡоторҙоңмо әллә? **Тишек кәмәгә ултырҙыңмы** әллә?* (Ғ. Ғүмәр.)

*син.*: төпһөҙ санаға ултыртыу, кәкре ҡайынға терәтеү.

**тишеккә тығын, йыртыкка ямау.** Һәр ергә ҡыҫылып йөрөгән кешегә ҡарата асыу белдереп әйтелә.

**тишекле (һуҡыр) бер тингә лә кәрәге юҡ.** Бөтөнләй әһәмиәте булмаған эш-хәлгә, кешегә ҡарата мыҫҡыл белдереп әйтелә. *Әгәр ҙә ул «булдыҡлылыҡ» Әмирхановтағы формала булһа, миңә уның* ***тишекле бер тингә лә кәрәге юҡ.*** (С. Агиш.)

**тоҙаҡҡа эләгеү.** Алдан-мәкер менән әҙерләнгән хәлгә төшөү. — *Тик уның хәйләһенә ышанып,* ***тоҙағына эләкмәгеҙ,*** — *тип өгөтләне.* (Һ. Дәүләтшина.) *Дошман ҡамауында тороп ҡалдыҡ.* ***Тоҙаҡҡа эләкһәк тә,*** *алыш ҡаты барҙы.* («Сов. Башҡ.»)

**тоҙаҡ ҡороу** *кемгә, нимәгә.* Мәкерле уй менән ниндәйҙер этлек әҙерләү. [*Арыҫлан*:] *Ағай, һаҡлан! Яңғыҙ-ярым юлға сыҡмаһаң да яҡшы булыр ине... Кем белә уларҙың ниндәй* ***тоҙаҡ ҡороуҙарын...*** (З. Биишева.)

**тоҙ күҙ** *һөйл.* Мәғәнәһеҙ ҡарап торған кешене әрләгәндә әйтелә.

**тоҙло һыу һипкәндәрме ни.** Бер урынга нык эйәләшеп, шунда йыш йөрөгәнгә ҡарата асыуланып әйтелә. *Шул фермаңа барһаң, батаһың да ҡуяһың, әллә шунда* ***тоҙло һыу һипкәндәр инде...*** (Б. Бикбай.)

*син.*: тоҙ һалып ҡуйғанмы ни (кеүек).

**тоҙ һалып ҡуйғанмы ни (ҡуйған, һипкән кеүек).** Берәй урынға нык эйәләшкән кешегә ҡарата асыуланып әйтелә.

*син.*: тоҙло һыу һипкәндәрме ни.

**тоҙһоҙҙо күҙһеҙ ҙә тоя.** Ябай, асыҡ нәмәне аңлатып тороуҙың кәрәге юҡ тигән мәғәнәне белдерә. *Үҙ балаңды маҡтау шәп кәсеп түгел түгелен, шулай ҙа* ***тоҙһоҙҙо күҙһеҙ ҙә тоя*** *тигәндәй, матурлыҡты саҡ ҡына булһа ла, мин дә аңлайым.* (Д. Исламов.)

**толҡа тапмау.** Күңелгә тыныслыҡ, йәм, ҡыҙыҡ тапмау. *Йәнгә* ***толҡа тапмай*** *йөрөгәндә, шул йыр менән күңелем асырмын.* (Д. Юлтый.)

**торған һайын.** Гел генә, һаман. *Көн* ***торған һайын*** *йылына бара.*

**торғаны менән.** Тотош, бар булғаны. *Бер уйлаһаң,* ***торғаны менән*** *ҡоп-ҡоро һандар. Ә уның өсөн күпме көс, күпме тир түгелгән һәм түгелә.* («Сов. Башҡ.»)

**тормош йөгө.** Иңгә, яҙмышҡа төшкән мәшәҡәт, эш. *Әйтерһең дә, елкәңдә ауыр йөк ята. Илле биш йыл буйына өйөлгән* ***тормош йөгө*** *ине шикелле.* (Н. Мусин.)

**тормош — ҡуласа әйләнеп килеп бер баҫа.** Үҙеңә ҡайтҡан яманлығың тураһында үсәү тойғоһо менән әйтелә. *Эй, был* ***тормош!*** *Талмаҫ* ***ҡуласа әйләнә лә килеп бер баҫа.*** (А. Басирова.)

**тормошҡа (ғәмәлгә) ашырыу** *нимәне.* Бар итеү, гәмәлләштереү. [*Емеш*] *ғәҙәтенсә, күп уйлап тормай, был уйын* ***тормошҡа ашырҙы.*** (З. Биишева.)

**тормошҡа (ғәмәлгә) ҡуйыу** *нимәне.* Ниҙелер үтәүҙе, башҡарыуҙы маҡсат итеп алыу.

**тормоштан (аранан, беҙҙән, донъянан) китеү**. Вафат булыу, үлеү.

*син. ҡар.*: теге донъяга китеү.

**тормоштоң әсеһен-сөсөһөн татыу**. Донъяның ауырлыгын баштан үткәреү, төрлөһөн күреү. *Үҙе йәш булыуына ҡарамаҫтан, атаһы үлгәне бирле, **тормоштоң әсеһен-сөсөһөн** дә ул байтаҡ **татыны**.* (Я. Хамматов.)

**тормош тотҡаһы**. Һәр эштә терәк, таяныс. *Ҡатын-ҡыҙҙар, шагирҙар әйтмешләй, тәбиғәттең үҙе кеүектәр: һалҡын да, йонсоу ҙа, йылы ла, сыуаҡ та. Ҡыҫҡаһы, ҡатын-ҡыҙ ул — **тормош тотҡаһы**.* («Сов. Башҡ.»)

**тормошҡа сығыу (барыу)**. Кейәүгә барыу. *Бер һауынсы күрше ауылға **тормошҡа сыҡты**.* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: башлы-күҙле булыу.

**торнанан тояҡ, ҡырмыҫҡанан кос**. Бала-сағаға, үҫмерҙәргә ҡарата әйтелә торган яҡшы теләк. *Барып еткәнсе, **торнанан тояҡ**, барғас, **ҡырмыҫҡанан кос** теләйбеҙ һиңә.* (Ж. Кейекбаев.)

**торна (шайтан, эт) тубығынан** *һөйл.* Бик күп.

**тот ҡансығыңды** *һөйл.* Ниҙелер булыр тип көткәндә, өмөттөң буш икәненән көлөп әйтелә. *Азамат **тот ҡапсығыңды**, тип саҡ-саҡ ҡына ысҡындырманы. Ғөмүмән, ул һаран кешене ярат-май.* (Ә. Бикчәнтәев.) [*Әхмәҙуллин*:] *Әллә һине генә маҡтарҙар, тип көткәйнеңме?.. Әҙерләп ҡуйғандар ти, **тот ҡапсығыңды**.* (Д. Исламов.)

**тотҡан ерҙән (урындан) һындырыу (өҙөү)**. Үҙе әйткәнсә генә эшләргә, хәл итергә тырышыу. ***Тотҡан ерҙән сурт һындырырға** ярамай, мин дә кеше лә баһа.* (Б. Бикбай.) *Район ер бүлеге мөдире Халиков — ҡыҙыу холоҡло кеше. **Тотҡан ерҙән һындырырға** **ярата**.* («Сов. Башҡ.») *Үҙен ерҙең кендеге һанап йөрөй ине заманында Шардыуан, — тип һүҙ башланы председатель. — **Тотҡан ерҙән өҙә һуға** торғайны.* (Я. Вәлиев.)

**тот (тоторһоң) ҡойроғон** *кемдең*. Ҡапыл ғына күҙ алдынан юғалған, яуаплылыҡтан ҡасҡан кешегә ҡарата әйтелә. [*Ҡарт Ҡашул*] *...тик ятмаған икән. Урынынан да төштө — күсеп тә китте, бар, **тотоп ҡара ҡойроғон**!* (Р. Солтангәрәев.)

*син.*: елдәр иҫкән.

**тобөнән тот** *һөйл., тупаҫ*. Ниҙелер бирмәҫ булғанды ҡәтғи белдергәндә әйтелә.

**тобонә төшөү** *нимәнең*. Асылын аңлау. *Тик бына ике ай үткәс кенә, көтмәгәндә шул азаматтарҙың бер-икәүһенә бәрлегеп, серҙең **төбөнә төштөм**.* («Сов. Башҡ.»)

**төбө-тамыры менән** [юҡ итеү] *кемде, нимәне*. Бөтөнләй, тотошо менән бөтөрөү, һәләк итеү.

**төбө төшкөрө** *һөйл.* Ямғыр бик оҙаҡ күп итеп яуғанда ризаһыҙлыҡ белдереп әйтелә. — *Былай булһа, ашлыҡ харап ителәсе...* — *тине Сәхипъямал, алъяпҡысын ҡаҡҡылап.* — ***Төбө***

***төшкөрө***... — *тип өҫтәп ҡуйҙы бәләкәй буйлы ябыҡ Гөлйөҙөм.* (Х. Ғиләжев.)

**төҙгә ҡатҡан.** Эйелеп эш эшләмәгән, үтә ялҡау. *Сәйҙә лә ямандарлыҡ түгел. Унан эш сығыр... Әммә Нисанға бик түҙем етмәй минең: ай-һай, артыҡ* ***төҙгә ҡатҡан*** *малай.* (Б. Бикбай.)

**төймәләйҙе (төймәне) дөйәләй итеү.** Арттырып, шаштырып, үҙеңдән өҫтәп һөйләү, яҙыу. [*Мәрхәбә*:] *Әфләтун ағайығыҙ тетмәмде тетте... «Яҙыусылар шуны күтәп кенә тора. Берҙе биш итеп,* ***төймәләйҙе дөйәләй итеп*** *күрһәтә улар», ти.* (М. Тажи.)

*син. ҡар.*: берҙе биш итеү.

**төйәк тибеү.** Берәй урынга ултыраҡланыу, шунда йәшәп алып китеү.

**төклө (ишле) аяғы менән** [килһен]. Килен төшөргәндә, мал һатып алганда әйтелгән яҡшы теләк. — *И... и... үҙебеҙҙең Зәйтүнә ҡыҙыбыҙ икән, әйҙәгеҙ, әйҙә.* ***Төклө аяғы менән,*** *бәхетеһаулығы менән килһен.* (Ғ. Ибраһимов.)

**төкөрөк йотҡоһоҙ булыу.** Бик ныҡ арыу, сарсау. *Арып* ***төкөрөк йотҡоһоҙ*** *булғанда,* [*Буранбай*] *ошо шишмәгә төшөп һыуһынын ҡандыра ине.* (Т. Килмөхәмәтов.)

**төкөрөп ҡарау** *нимәгә, һөйл.* Кире мөнәсәбәт белдереү, насар, яуапһыҙ ҡараштa тороу (*гәҙәттә, бурысҡа, ҡушылған эшкә*). *Тәмәкесе элеккесә үҙ хоҡуҡтарын ғына өҫтөн ҡуя, ә тартмаусыларҙыҡына* ***төкөрөп ҡарай.*** («Башҡортостан».)

**төкөрөп тә бирмәү** *һөйл.* Һис тә ыжламау, тыңламау (*гәҙәттә, тыйыуға, әҙәпкә өндәүгә һ. б.*).

**төп башына ултыртыу** 1. *кемде.* Бик оҫта итеп алдау; һемәйтеү. *Ҡыҫҡаһы, ер һатыла, наҙан, ләкин ҡырағай, хәйләкәр, ас күҙ түрәләрҙе помещик алдай, ә улар үҙ ыңғайында ҡара халыҡты* ***төп башына ултырталар.*** (Б. Бикбай.) *Мулла халыҡты* ***төп башына ултыртырға*** *йөрөй ул, беләм мин уны...* (А. Карнай.)

*син.*: тишек кәмәгә ултыртыу, төпһөҙ санаға ултыртыу.

2. *кемде, нимәне.* Бөлгөнлөккә төшөрөү, бөлдөрөү. — *Ун йыл эсендә унлап председатель алмашынған. Береһе үреп, икенсеһе һүтеп, колхозды тамам* ***төп башына ултыртҡандар.*** (Я. Вәлиев.)

**төп башына ултырыу.** Ныҡ алданыу, һемәйеү. [*Ҡасим*:] *Ул геологтарҙың ете ҡат ер аҫтындағына ышанып йөрөһәң,* ***төп башына ултырыуың*** *бар.* (Н. Мусин.) *Ауырыуҙар,* ***төп башына ултырғандарын*** *тойоп, бер-береһенә ҡараштылар.* (Д. Юлтый.)

**төпкә егелеү.** Эштең иң ауырын тартыу, яуаплыһын алып барыу. [*Сәйҙәнең*] *...тормошта* ***төпкә егелеп*** *еткәне юҡ әле.* (Б. Бикбай.) *Хәҙерге көндә Баһау ағай, ҡара сәстәре ағарһа ла, үҙе* ***төпкә егелеп,*** *дүрт улын дүрт яҡтан ҡуйып, колхоз эшендә намыҫ менән эшләй.* («Сов. Башҡ.») *Шәриф Сәғәҙәтулла улы*

*Бикҡолов баш мөхәррирлек вазифаһын башҡарҙы, редакция арбаһын* ***төпкә егелеп*** *тартты.* (А. Иғебаев.)

**төптән йыуан (сыҡҡан).** Тыңҡыш кәүҙәле, ныҡлы. *Буиға уртасанан байтаҡҡа ҡайтыш булһа ла, яурындары киң, елкәһе ҡалын уның. Ғәйфулла кеүектәр хаҡында «****төптән йыуан сыҡҡан****» тиҙәр.* (Р. Сабит.)

**топһөҙ санаға (кәмәгә) ултыртыу** *кемде.* Оҫта итеп алдау, һемәйтеү.

*син. ҡар.*: төп башына ултыртыу.

**төртмә тел(ле).** Теле, һүҙе менән кешегә тейә, кәмһетергә тырыша торған. *Фәхри уларҙың* ***төртмә телдәренә*** *яуап ҡайтарып торманы, кәбән төбөнә килеп еткән Фатимаға ҡаҙалды.* (Б. Бикбай.) [*Янғураз*:] *Һеҙҙең* ***төртмә телле*** *кеше икәнлегегеҙҙе беләм, Мәрйәм әбей, шулай ҙа шаяртмағыҙ әле.* (Ә. Мирзаһитов.)

**төртөп күрһәтеү** *нимәгә.* 'Кул тоҫҡау. *Зыяратҡа* ***төртөп күрһәтергә*** *ярамай, бармаҡ серей.*

**төртһәң ҡоларға тора** *һөйл.* Үтә ябыҡ, хәлһеҙ.

*син.*: танауынан тартһаң тәғәрәр.

**төҫ биреү** *кемгә, нимәгә.* 1. Ылығыу, яҡынлау. *Ҡайтам, китәм ... Ауылдаштар уйлай:* ***Төҫ бирмәне*** *тыуған яғына.* (М. Басыров.)

2. Уңыш, файҙа килтереү. *Совхозға малсылыҡтың да* ***төҫ бирә*** *башлауын бая телгә алғайныҡ инде.* («Сов. Башҡ.»)

**төҫ боҙолоу.** Ризаһыҙлыҡ билдәһен йөҙгә сығарыу. [*Тимерғәле*:] «*Юҡ юклап йөрөнөм, ул һеҙҙә юҡмы икән?*» — *тип үҙебеҙҙең йола менән генә һүҙ башлағас та* ***төҫө боҙолоп*** *китте.* (Һ. Дәүләтшина.)

**төҫ ҡасыу.** Ҡурҡыуҙан, тулҡынланыуҙан, асыуҙан һ. б. ағарыныу. [*Зарифа*:] *Ни булды һиңә, Ҡарлуғас,* ***төҫөң ҡасҡан****? Әллә берәр ҡурҡыныс хәбәр килтергәнме?* (Б. Бикбай.) *Тимерхан атаһының бошоноп ҡайтып килгәнен күреп: — Атай, ниңә* ***төҫөң ҡасып*** *ҡайттың? — тип һораған.* (Әкиәттән.)

**төҫөнә ҡарағыһыҙ булыу** *кемдең.* Тәртибе, ҡылығы өсөн күрә алмаҫ хәлгә төшөү.

**төҫ түгел.** Килешмәй, насар (*эш, ҡылыҡҡа ҡарата әйтелә*). ... *Һиңә өндәшәләр икән, телеңде йотоп тороу* ***төҫ түгел.*** (Т. Килмөхәмәтов.) *Һине өйрәтеү, әлбиттә, беҙгә, уҡымаған кешеләргә, бер аҙ* ***төҫ түгел.*** (Һ. Дәүләтшина.)

**төҫ һалыу.** Ныҡ ябығып, йәмһеҙләнеү.

**төтөнө башҡа** *кемдең, нимәнең.* Ике нәмәне сағыштырғанда, яҡшырағына ҡарата әйтелә.

**төтөнө тура йөрөй (сыға)** *кемдең.* Ни эшләргә икәнен үҙ файҙаһына яҡшы белә. *Хужа ҡунаҡтың* ***төтөнө тура йөрөгәнен*** *һиҙенә лә ыңғыраша-ыңғыраша уны һыйларға була.* («Ағиҙел».)

**төтөн сығарыу.** Үҙ аллы йәшәп ятыу.

**төшкән ереӊ таш булһын.** Яңы төшкән киленгә ҡарата: «Өй ташлап, ир ташлап китмә, ошо йортта ныҒын» тигән теләкте белдереп әйтелә.

**төшөп ҡалған.** Эшен эш итә алмаған; бик мәшәү, йомшаҡай.

**төшөп ҡалғандан (ҡалғандарҙан) түгел.** Һүҙен һүҙ, эшен эш итә ала. *Йомшаҡ түгел, үткер Хәлиҙә лә* ***төшөп ҡалғандарҙан түгел,*** *әйтер һүҙен әйтә белә.* («Сов. Башҡ.»)

**туғыҙға түкмәстереү** *нимәне.* Төрлөгә үҙгәртеү, боҙоп бөтөү.

**туғыҙ көн туй итте, ун ҡөн уй итте.** Оҙаҡ уйлап, кемделер күп һыйлап та бик үк уңмаған эш тураһында көлөбөрәк әйтелә.

**туғыҙ таҡталы** *һөйл.* Аҡылға теүәл түгел, ахмағыраҡ.

*син. ҡар.*: йөҙгә бераү тулмаған.

**туҙаҡайын (туҙанын) туҙҙырыу** *кемдең.* Бик ҡаты әрләү.

**туҙандайҙы тубалдай итеү.** Арттырып һөйләү, шаштырып ебәреү.

*син.*: төймәләйҙе дөйәләй итеү.

**туҙ бит.** Оятын юғалтҡан; оятһыҙ, битһеҙ. — *Йә, батша, хәҙрәттәренә ҡул күтәрһен әле* ***туҙ биттәр.*** *Нисек үҙҙәрен ер упманы икән?* (Ф. Рәхимғолова.) [*Нәҡиә*:] *Аб-бау, оятһыҙ, аб-бау* ***туҙ бит,*** *нисек теле барып һөйләй.* (И. Ғиззәтуллин.)

*син.*: күн бит.

**туҙға яҙмаған*.** Ысынға тура килмәгән, ғәмәлдә булмаған; буш. *Һаман да һин китап ҡушмағанды,* ***Туҙға яҙмағанды*** *һөйләйһең.* (М. Ғафури.) *Мулла, үҙенең яуызлығына барып,* ***туҙға яҙмағанды*** *һөйләй ул, үс итә.* (Һ. Дәүләтшина.) Ошо *Ҡарасәс инәйем ҡайһы саҡта* ***туҙға яҙмағанды*** *һөйләй ҙә ҡуя.* (З. Биишева.) — *Ҡуйсы, — Алтынбикә ҡул һелтәне, —* ***туҙға яҙмаған*** *һүҙ һөйләмә әле.* (М. Тажи.)

[**Туҙға яҙмаған** — боронғо туҙға яҙыу заманынан килә. Туҙға яҙған хәбәр, һүҙ яҡшы, изге булған.]

**туйҙан һуң дөмбөрҙә.** Эш бөткәс, ваҡиға үткәс килеп етеп, ниҙер ҡылырға маташҡан кешегә ҡарата көлөп әйтелә.

**туй ҡыҙылы уңыу.** Тәүге шатлыҡ, һөйөнөстәр кәмеп, гәҙәти тормош башланыу (*йәш ғаиләгә ҡарата*). *Туй ҡыҙыуы бөтөп,* ***туй ҡыҙылы уңып,*** *былар башҡа кешеләр кеүек үк донъя көтөргә өйрәнәләр икән.* (Әкиәттән.)

**туймаҫ күҙ (тамаҡ)** *һөйл.* Ҡомһоҙлоҡ күрһәткән кешегә ҡарата асыу белдереп әйтелә. *Был ҡәһәр һуҡҡан бигерәк* ***туймаҫ күҙ*** *кеше икән, бөтә майҙан яҙҙыра бит инде...* (Т. Йәнәби.)

**туйып һикереү.** Муллыҡ, иркенлектән шашып китеү.

**туҡал (мөғөҙһөҙ) һыйыр.** Үтә әрһеҙ, һөмһөҙ кешегә ҡарата асыу менән әйтелә.

**туҡмаҡ тел** *һөйл.* Теле тупаҫ, йүнле һөйләшә белмәгән кешегә ҡарата әйтелә.

**тултырған тауыҡ кеүек.** Үтә һимеҙ, төпөш кәүҙәле кешегә ҡарата мыҫҡыл менән әйтелә. *Суфыя бикәне күрҙем. Бер ҙә генә танымаҫлыҡ булып ябыҡҡан, әүәлге* ***тултырған тауыҡ кеүек,***

*аҡ, һимеҙ беләктәре урынына ҡоро һөйәк кенә ҡалған.* (Б. Ишемғол.)

**тулып ятыу**. Бик күп булыу. *Аҡыл ни ул үҙемдә лә* ***тулып ята*** *торғайны.* (Һ. Дәүләтшина.)

**туң агас** *һөйл*. Рәте, йүне булмаған, аҡылы етешмәгәнерәк кешегә ҡарата әйтелә.

**туң аяҡ**. Эше рәтле булмаған, уңышһыҙлыҡҡа осрап тик торған кеше. *Үҙ алдына эшләй башларға ғына торғанда, бер* ***туң аяҡ*** *менән дуҫлашып, әскелеккә һалышты ла китте* [*Ирғәле*]. (Р. Ғабдрахманов.)

**туң баш** *һөйл*. Аңрараҡ кешене әрләгәндә әйтелә. [*Ҡунаҡбаев*:] *Минең баш һинең башҡа ҡарағанда аңлыраҡ та, белемлерәк тә. Һин бына,* ***туң баш****, бер нәмә белмәй ҡысҡыраһың.* (Б. Ишемғол.) *Ә кисен ... үҙемде ниндәйҙер бер йүләр баш, кескәй малай,* ***туң баш*** *итеп һиҙҙем, хатта ни уйларға ла белмәнем.* (Д. Бикташев.) *Ҡәйнәң дә* ***туң баш*** *түгел, аңлар...* (Ф. Рәхимғолова.)

**туң йөрәк**. Хис-тойғоһо һүнгән, хисһеҙ. [*Гөлбикә*:] *Их,* ***туң йөрәк****! Ни эшләп ошондай ҡыҙҙы күрмәй йөрөйһөң?* (Ә. Хәкимов.)

**тупһага аяҡ баҫтырмау** *кемде*. Яҡын килтермәү, ебәрмәү; килергә, йөрөргә рөхсәт итмәү.

**тупһаһына аяҡ баҫмау** *кемдең*. Бармау, йөрөмәү (*асыуҙан йәки яманлашып*). ***Тупһаларына аяҡ баҫырлыҡ*** *түгел. Тик бына нужаһы йөрөтә.* (Һ. Дәүләтшина.)

**тупһа тапау**. Килеп-китеп, инеп-сығып күп йөроү.

**тура ҡарап ҡырын һөйләү**. Алдау, ялған хәбәр ебәреү. ***Тура ҡарап ҡырын һөйләшеп*** *булмай, срогына өлгөрә алмайбыҙ, — тип Йосоп ҡырҡа һуҡты.* (Т. Бүләков.)

**турғай (тауыҡ) тубығынан**. Бик һай (*гәҙәттә, йылға турапында*). *Элек унарлаған тирмәнде әйләндергән йылғалар* ***турғай тубығынан*** *ғына булып ҡалған.* («Әҙәби Башҡ.»)

**турғай башындай**. Баҡ нәмәне ҙур итеп күрһәтергә тырышҡанда әйтелә. *Турғай башындай еләк.*

**тутый ҡош**. Еңел аҡыллы ҡатын-ҡыҙға ҡарата мыҫҡыллап әйтелә. [*Нәҡиә апай*:] *Нимә тип күҙ йәшеңде түгәһең,* ***тутый ҡош****, әллә һине лә ҡаратып өлгөрҙөмө үҙенә?* (И. Ғиззәтуллин.)

**түбәгә менеү (сығыу)**. Абруйҙы танымау, тыңламау. *Ул* [*Миңлекәй*] *өйҙә тик Рәхимә еңгәмдән генә шөрләй. Ул булмаһа, хәҙер бөтәһенең* ***түбәһенә менергә*** *әҙер тора.* (Һ. Дәүләтшина.)

**түбәгә (түшәмгә) төкөрөп ятыу**. Бер ни эшләмәү, ялҡауланып тик ятыу. *Әгәр ул да, ауыр нужа күрелде тип, хәҙер* ***түшәмгә*** *генә* ***төкөрөп ятыу*** *яғын ҡараһа, йәшәүҙең ни йәме, ни тәме ҡалыр ине.* («Сов. Башҡ.»)

**түбә (баш) күккә (түшәмгә) тейеү**. Бик ҙур шатлыҡ кисереү, ныҡ ҡыуаныу. *— Баянда уйнарға йәһәт өйрәндең, әй, — тип маҡтап ебәргәс, уның* ***түбәһе күккә тейҙе.*** (Н. Мусин.) *Ләкин булды бер саҡ бәхетемдән* ***Түбәләрем күккә тейгәне.*** *Ул көн*

*миңә: «Иң бәхетле кеше Ерҙә мин ул!» — тине һөйгәнем.* (М. Кәрим.) *Зөлфирәнең **түбәһе түшәмгә тейгәндәй** булды. Тап ошондай яуап көткәйне ул Роберттан.* (К. Мәргән.)

*син.*: шатлыҡ эскә һыймау.

**түбәһе ҡалай, ямғыр үтмәй** *кемдең шаяр.* Телде аңламай.

**түбәһе тишек (һалам менән ябылған)** *кемдең.* Телде аңлай (*яңылыш һөйләргә ярамағанлыҡты һиҙҙерергә тырышып әйтелгән кинәйә*).

**түрҙән төшөрмәү** *кемде.* Оло ихтирам менән хөрмәт итеү. *Шуға ла Илгизҙ ологайып барған тәрбиәсеһен үҙенә алды: Хәҙер **түренән төшөрмәй**, эсәһе урынына ҡәҙер-хөрмәт итә.* (Л. Яҡшыбаева.)

**тын алырға <ла> ирек бирмәү (юҡ)** *кемгә.* 1. Ныҡ ҡыҫыу, ҡыҫырыҡлау. *Өсөнсө көнөнә шкуросылар станцияға туранан-тура һөжүм итеүҙән тыйылдылар. Уның урынына, **тын алырға ла ирек бирмәй**, флангыларҙан көслө ҡыҫым яһау башланылар.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Уларға **тын алырға бирмәгеҙ**, эштәрен бөтөргөҙ.* (Һ. Дәүләтшина.)

2. Һис ваҡыт ҡалдырмау, эш, мәшәҡәт өйөү. *Бына бөгөн дә байтаҡ кеше йыйылған. Мәрғүбә апайға **тын алырға ла ирек юҡ**.* («Сов. Башҡ.»)

**тын да алмай.** Бик ҙур диҡҡәт менән, ныҡ бирелеп (*тыңлау*). *Емеш, **тын да алмай** тыңлап, уның янында ултыра.* (З. Биишева.) [*Вәлид*] *Сәхнәгә килеп сыҡһа, залды алҡыш күмә, шиғыр һөйләгәнен халыҡ **тын да алмай** тыңлай.* (*А. Игебаев.*)

**тын ҡыҫылыу.** Йәшәү, эшләү мөмкинлеге тарайыу, ауырлашыу. *Колхоз егеттәре бөтә яңғыҙаҡтарҙың игенен урып та, һуғып та бирәләр. Ә байҙарҙың **тындары ҡыҫыла**.* («Сов. Башҡ.»)

**тын менән тартып алырҙай булыу** *кемде, нимәне.* Үҙеңә яҡын килтерергә, яҡын итергә ныҡ теләү. *Мөжәүир, **тыны менән тартып алырҙай булып**, баш осонда ғына өйөрөлгән болотҡа текләне ...* (Л. Яҡшыбаева.) *Эҙләмәнем һине, көттөм генә, **тыным менән тартып алыр кеүек...*** (А. Басирова.)

**тырнағына ла тормау** *кемдең.* Кәмһетеп күрһәткәндә әйтелә. [*Ғәйфулла — Ғәзимәгә*:]... — *Ул бит һинең **тырнағыңа ла тормай**.* (Р. Сабит.)

**тырнағынан (тырнаҡ аҫтынан) ҡотолоу (ысҡыныу)** *кемдең.* Йоғонтоһонан сығыу, кулында булыуҙан туҡтау. [*Бүре*:] *Иә әле, дуҫҡай, һөйләп ҡара, нисек итеп һеҙ көслөләр **тырнағынан ҡотолмаҡсы** булаһығыҙ икән?!* (Б. Мирзанов.) [*Нәфисә*:] *...байҙар **тырнағы аҫтынан ҡотолоуы** ҡыйын.* (Я. Хамматов.)

**тырнағына эләгеү** *кемдең.* Бойондороҡло хәлгә төшөү, тотолоу.

**тырнаҡ осондай (ағындай, ҡараһындай).** Бик аҙ, бик бәләкәй [*Зөһрә әбей*:] *Арыҫландай дүрт ул үҫтерҙем. **Тырнаҡ ағы** тиклем дә ҡайғы күрһәтмәнеләр.* (Ә. Хәмәтдинова.) ***Тырнаҡ ҡараһындай** ҙа гонаһым юҡлығы үҙеңә хаҡ.* (Я. Хамматов.)

**тырнаҡ осо тиклем.** Бик аҙ, бәләкәй. — *Шулай инде, — тине ҡарсыҡ, — һеҙгә **тырнаҡ осо тиклем** дә үпкәм юҡ.* (С. Агиш.)

**тышауы оҙон** *кемдең.* Тотанаҡһыҙ, тыйнаҡһыҙ. *Сипаратҡа барғанда уныһының* [*ҡыҙҙың*] ***тышауы оҙон,*** *йөрөмтәлерәк нәмәкәй икәнен дә ишетеп ҡайтҡайным.* (И. Ғиззәтуллин.)

**тыштан ялтырау, эстән ҡалтырау.** Бер төрлө һөйләп, икенсе төрлө эшләгән кешегә ҡарата әйтелә. *Тимәк, **тыштан ялтырағандар, эстән ҡалтырағандар** ... эстән ниндәй, тыштан да шундай ине.* (М. Кәрим.)

**тәгәрәп йөрөп** [эшләү]. Бөтә көстө, тырышлыҡты һалып (*ниҙер башҡарыу*).

**тәҡдим яһау** 1. Ниҙер эшләргә саҡырып мөрәжәғәт итеү. *Бергә эшләргә **тәҡдим яһау** теләге менән йүгерә-атлай Ҡолсобайҙы эҙләп китте* [*Хисмәтулла*]. (Я. Хамматов.)

2. Өйләнешергә саҡырыу. [*Фәйрүзә:*] *Яҡшы ниәт, асыҡ йөрәк менән **тәҡдим яһауыңа** рәхмәт, Морат. Ләкин күңелеңә ауыр алма* ... (Ҡ. Даян.)

**тәкәһе төкөү** *кемдең. ҡар.* Кәзәһе төкөү.

**тәҡәт бирмәү.** Түҙҙермәү, тынысһыҙлап тороу. ... *Индрилдең оҙон, аҡыллы, баҫалҡы фәлсәфәһен тыңлағы килеү теләге **тәҡәт бирмәй.*** (Д. Юлтый.)

**тәҡәт бөтөү (ҡороу, ҡалмау).** Түҙә алмаҫлыҡ хәлгә килеү. *Көтә-көтә **тәҡәтем бөттө.** Бөтә тәнем менән ҡалтырап өшөй башланым.* («Сов. Башҡ.»)

**тәҡәт етмәү.** Түҙемлек бөтөү. *Үҙе үкегән бысаҡты тиҙерәк әсәһенә күрһәтеп маҡтанырға уның **тәҡәте етмәй.*** (Х. Мохтар.)

**тәҡәтте ҡоротоу.** Йонсотоп бөтөрөү. *Ҡыраубикә: Ниңә былай нахаҡҡа **тәҡәтте ҡоротаһығыҙ**?* (Д. Юлтый.)

**тәме китеү** *нимәнең.* Ҡыҙығы, йәме бөтөү. *Хәбәрҙең **тәме китте.***

**тәм итеү.** Өмөтләнеү, өмөт тотоу. *Киләһе йылғы һайлауҙарҙа тағы ла түрә булабыҙ тип **тәм итмәгеҙ.*** (Ғ. Дәүләтшин.)

**тәмле (татлы) тамаҡ (ауыҙ).** Тәм-томдо бик яратҡан кешегә ҡарата әйтелә. *Әсәйем минән көлә: «Шуны бик белге килә: — Әйтсе, **тәмле ауыҙ,** — ти, — Тырыҙыңмы, ҡарыныңмы һинең хәҙер ауыр?» — ти.* (Ә. Әхмәткужин.) *Былдай шоколадлы торттар инде гурмандар — үтә **тәмле тамаҡтар** өсөндөр.* («Сов. Башҡ.»)

**тәмле тел(ле).** Сөсөләнеп күп һөйләргә яратҡан кешегә ҡарата һөйһөнмәү тойғоһо белдергәндә әйтелә. *Фәһимәне был хат хистәр менән яҙылған, **тәмле телле** оҙон хаттарға ҡарағанда нығыраҡ тулҡынландырҙы.* (С. Агиш.)

**тән тартмау** *кемде, нимәне.* Күңел ятмау, сирҡандырыу. *Кеше көлдәгән кейергә **тән тартмай.***

**тән эҫеле-һыуыҡлы булыу.** Ҡапыл тулҡынланып китеү (*күберәк ҡурҡыуҙан*). *Юлдыбаевтың былай һөйләшеүенән Этҡолдоң **тәне эҫеле-һыуыҡлы булып китте.*** (Ғ. Дәүләтшин.)

**тәрилкә тотоу.** Үтә ярамһаҡланыу, ярарға тырышып ялағайланыу. *Рыялы түгел, алдашмай һәм* ***тәрилкә тотмай*** *торған кешеләр ят, нормаль түгел булып күренәләр, уларға дошман итеп ҡарай башлайҙар.* (А. Карнай.) *Етмәһә, уларҙың, мастерҙарҙың, управляющий алдында шипанлап* ***тәрилкә тотоуы,*** *ошаҡ йөрөтөүе эшселәрҙең асыуын ғына көсәйтте.* (Ж. Кейекбаев.)

*син.*: табанын ялау.

**тәрилкә ялау.** Ярамһаҡланыу. *Ундай байҙар* ***тәрилкәһен ялап*** *йөрөй торған аумаҡай тоҡомдар Яйыҡта ла тулып ята.* (Һ. Дәүләтшина.)

**тәртә араһына инеү.** Эшкә ярап, ярҙам итә башлау. [*Эльвира*:] — *Их, әсәй, әсәй,* ***тәртә араһына*** *бер* ***инеп алғас,*** *тартмайым тип әйтергә нисек тел барһын?* (Ҡ. Ибәтуллин.)

**тәртә буйы.** Бик алыҫ, оҙаҡ бараһы бар икәндә шаяртып төшөндөргәндә әйтелә. *Һәй, һеҙҙең ауылға тиклем әле дәлүкең* ***тәртә буйы.*** (Һөйл.)

**тәртәгә тибеү.** Киреләнеү, тиҫкәреләнеү. [*Вәлим*:] — *Хәйер, әллә ни ҙур уҡыуҙар эләкмәне үҙемә эләгеүен. Мәгәр* ***тәртәгә типмәнем.*** *... Кеше хурына ҡалып та йәшәмәнем.* (Ғ. Лоҡманов.)

**тәртәне кирегә бороу (шаҡарыу).** Һүҙҙән ҡайтыу, һөйләшелгәнгә ҡаршы эшләү. *Иллә үҙ һүҙле кеше инде был Ҡаһымбай ағай, саҡ ҡына уныңса булманымы,* ***тәртәһен кирегә шаҡарырға*** *әҙер генә тора.* (И. Ғиззәтуллин.)

**тәртәнән сығыу.** Тәртип, ҡағиҙәне тотмай, артыҡ үҙеңсә эш итә башлау. [*Өммиә Зөбәйҙәгә*:] *Бөтөнләй* ***тәртәнән сыҡтың.*** *Китап та театр. Донъя мәшәҡәттәрен бар тип тә белмәйһең.* (Ғ. Әхмәтшин.) *Бысаҡ сарламаһын инде бәндә, намыҫ ҡалҡып* ***сыҡмай тәртәнән.*** (З. Йәнбирҙина.)

**тәртәне ҡыҫҡа тотоу.** Ҡырҡыу мөнәсәбәт, ҡатылыҡ күрһәтеү. *Бәҙри ағай менән ҡаршылашып тороп булмай, ул* ***тәртәне*** *бик* ***ҡыҫҡа тота.*** (Д. Юлтый.)

**тәртәне үҙеңә шаҡарыу.** Эште, һүҙҙе үҙ файҙаңа бороу.

**тәртәһе ерек (мурт)** *кемдең* **(ерек тәртә).** Тиҙ генә үсегеп, киреләнеп барған кешегә ҡарата әйтелә. ***Тәртәһе мурт,*** *тәкәббер халыҡ бит ул шоферҙар.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**тәртәһе ҡыҫҡа** *кемдең.* Ҡаты холоҡло, ныҡ тора торған. *Батшаның* ***тәртәһе*** *бик* ***ҡыҫҡа,*** *ҡулы ҡаты.* (Әкиәттән.)

**тәртәһе шыйыҡ** *кемдең.* Үпкәсел, тотороҡло ғына түгел. — *Миңә үпкәләп өлгөрҙө инде,* — *тип һүҙ ҡыҫтырҙы Гөлнара ҡанһынып.* — ***Тәртәһе шыйыҡ*** *шул уның* [*Сәғүрәнең*]. (Д. Бүләков.)

**тәүбәгә ултыртыу** *кемде.* Ҡылған насарлыҡтарынан ваз кистереү. *Йәмәғәтселек Зәйнәғәбдин Яҡупов менән Миңнегөл Ямалетдинованы* ***тәүбәгә ултыртып,*** *тайғаҡ юлдан ҡоро юлға сығарырға тейеш.* («Сов. Башҡ.»)

# У

**уҙа барһа**. Бик күп тигәндә (*һаны аҙ икәнлеккә баҫым яһап әйтелә*). *Аллаярҙың ҡураһында **уҙа барһа** ун биш баштан да артмаған йылҡы малы тороп ҡалды.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**уйға батыу (сумыу, күмелеү)**. Тәрән уйҙарға бирелеү. *Айбулат йылмайған төҫ менән, баяғы Вася һымаҡ, лампа утына ҡарап **уйға батҡан**...* (Һ. Дәүләтшина.) *Тормош диңгеҙенең серен эҙләп, тәрән **уйға сумып** ҡалдым мин.* (Ғ. Сәләм.) *Үҙ **уйына сумып**, ишекле-түрле йөрөп ятҡан Закир еңгәһенең был ауыр хәлен абайламаны.* (З. Биишева.)

**уйға ҡалыу (төшөү)**. Ниҙер хаҡында ҡапыл ғына уйлана башлау. [*Ҡотлояр*:] *Әйҙә, Әхмәҙи, сәй эсергә ултыр. Ни нәмәһе, балтаһы һыуға төшкән кеше һымаҡ, **уйға ҡалып** ултыраһың.* (Һ. Дәүләтшина.)

**уйға талыу**. Осһоҙ-ҡырыйһыҙ уйҙарға төшөп китеү. [*Шәүәли*:] *Әле иҙелеп **уйға талып** ултырғанда, хәтерҙән сығып киткән.* (М. Кәрим.) *Тын кистә еңел ҡырандас талғын келтерәп бара. Көнө буйы аяҡ өҫтөндә булған Гөлйөҙөм әллә йоҡомһорай, әллә **уйға талған**.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**уйға һалыу (төшөрөү, ҡалдырыу)**. Уйланырға мәжбүр итеү. ... *Көҙҙөң ағас баштарын, үләндәрҙе көйҙөрә ялап үткән тәүге ҡырауы Ғәмбәровты **уйға һалды**.* (Ш. Янбаев.) *Бик ҡыҫҡа ваҡыт эсендә булған был аҙ ғына һөйләшеү Заһитты шаҡтай **уйға һалды**.* (С. Агиш.)

**уй (фекер) йөрөтөү**. Уйлау, ниҙер өҫтөндә уйланыу. *Шундай **уйҙар йөрөткән** Хәйретдин ... яңынан өйөндәге ҡунаҡтарын һыйларға кереште.* (Я. Хамматов.) *Әсәһе, ошо урын-яйы тура килһә, баланы урынлаштырып ҡуйғанда ла ярамаҫмы, тим. Һин был турала берәй **уй йөрөткәнең** бармы?* (Һ. Дәүләтшина.)

**уй ҡуйырыу**. Бер йүнәлештә күп уйланыу. *Хужалыҡтың был хәлдә булыуы Абдрахмановтың **уйҙарын** тағы ла **ҡуйыртты**.* («Сов. Башҡ.»)

**уйлап ҡараһаң, уйылып китерлек**. Аптырарлыҡ, ғәжәп хәлгә ҡарата әйтелә. ***Уйлап ҡараһаң, уйылып китерлек** бит. ... Бынау йәмле йәй айҙарында һөйгән егетеңде автомашина менән ҡуян ҡыуҙырып стена газетаһына баҫып сығарһындар әле.* (М. Кәрим.) ***Уйылып та китерлек** шул уйҙарҙы Ағай-энеләр ҙә тыңлаһын.* (Р. Йәнбәк.)

**уйынға алыу (бороу)**. Шаярыу итеп ҡабул итеү, асыуланмау (*әйткән һүҙгә, ҡылыҡҡа һ. б.*).

**уйындан уймаҡ (уҫмаҡ) сығарыу**. Шаярып башланған эштең етди һөҙөмтәгә килтереүенә ҡарата әйтелә (*күберәк насар һөҙөмтәне белдерә*).

**уйын түгел.** Эш-хәлдең етди булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алғанда әйтелә.

**уҡаһы ҡойолмаҫ (осмаҫ, уңмаҫ)** *кемдең.* Берәй йомошто үтәргә ауырһынған кешегә карата әйтелә. [*Иргәле — Ҡыҙрасҡа:*] ... *Йә, мыҙылма, бер күреп һөйләшкәндән* ***уҡаң уңмаҫ.*** (Ә. Хәким.) *Түҙә алмайынса, әй, ярһыуға,* ***уҡам ҡойолмаҫ*** *тип.* (Т. Йосопов.)

**уҡ кеүек** [атылыу]. Бик тиҙ, ҡапыл (*хәрәкәт итеү*). *Салих ишектән* ***уҡ кеүек*** *атылып сығып китте.* (Х. Мохтар.)

**уҡлау йотоу.** Төп-төҙ булып ҡатыу. [*Йәмғи — Фәрхиәгә:*] *Әй, һин, ҡара әле! Ниңә ҡаттың,* ***уҡлау йоттоңмо*** *әллә?* (Х. Ғиләжев.)

**уҡып мулла булмаҫһың, суҡып ҡарға булмаҫһың.** Уҡырға теләгән кешене кире дүндереү өсөн мыҫҡыл менән әйтелә.

**улай итеп, былай итеп** *һөйл.* Осон осҡа ялғап, саҡ-саҡ (*ниҙер эшләү, көнкүреш сараһын табыу*).

**ул арала булмай.** Бик тиҙ генә. *Әхмәдулла бабай* ***ул арала булмай*** *ҡайҙандыр таҡталар күтәреп килеп сыҡты.* (Ә. Вахитов.) ***Ул арала булмай*** *теге әҙәм һүрәтендәге «бәрей» ...ҡапҡаны үҙе этәреп инде.* (Ф. Исәнғолов.)

*син.*: һә тигәнсе.

**ул-был булыу.** Көтөлмәгән хәүефле хәл килеп сығыу (*гәҙәттә, иҫкәртеп әйткәндә ҡулланыла*). ***Ул-был була ҡалһа*** *тип, Салауат уҡ алды, ләкин ҡапыл һыбайлының ҡатын-ҡыҙ икәнен күрҙе.* (С. Злобин.) **Ул-был булғансы:** *«****Ул-был булғансы,*** *игенде йыйыштыра һалып алырға кәрәк, тип әйтте ҡайнаға...»* (Һ. Дәүләтшина.)

**ул-был итеү.** Ҡулдан килгәнде эшләргә тырышыу. *Мулла,* ***ул-был итеп*** *өгөтләп ҡараһа ла, уның һүҙен тыңлаған кеше булманы...* (Һ. Дәүләтшина.)

**ул да булған икән эш.** Башҡарыла торған, ҡушылған йомоштоң, эштең еңеллеген билдәләгәндә әйтелә.

**ултырып иларлыҡ.** Эш-хәлдең бик мөшкөл икәнен белдергәндә әйтелә.

**ултырыр урын тапмау.** Бик борсоулы, тынғыһыҙ хәлдә булыу.

**уны-быны ҡарамай (ҡарап тормай).** Артыҡ уйлап, икеләнеп тормай (*берәй эш ҡылыу*). *Мәрғүп, ҡарышып тормай өйгә инеп, Ғәләүгә Шәхмиҙең кейемдәрен алып бирҙе. Ғәләү, көйөш булғас,* ***уны-быны ҡарап тормай*** *кейенде лә алды.* (Т. Йәнәби.)

**уның ҡарыуы.** Бер нәмәне икенсеһе менән сағыштырып, ҡаршы ҡуйғанда ҡулланыла; уның урынына. *Сөнәгәт, бөгөн ауырыған кеше кеүек, күңелһеҙ ине.* ***Уның ҡарыуы*** *башҡаларҙа шатлыҡ балҡый ине.* (Ғ. Дәүләтшин.) *Бесәй үҙе бер ваҡытта ла мыяулап ашарға һорамаҫ.* ***Уның ҡарыуы*** *таң менән өй хужаларын мыяулап уята.* («Сов. Башҡ.»)

**уңды-һулды айырыу**. Ниҙең ни икәнен белеү, тормошто аңлау. — *Расих әфәнде, — тинем мин, — беҙҙең кеүек артта ҡалған милләттәрҙән дә* ***уңды-һулды айыра*** *белгән кешеләр етешә башларға ваҡыттыр бит инде.* (Ғ. Ғүмәр.) ***Уңды-һулды айырған***, *һуғышты йыртҡыслыҡтың иң һуңғы сиге тип ҡараған Сафа, иҫерек ватансылыҡ шауҡымына бирелеп, фронтҡа китергә теләмәне...* (Б. Бикбай.)

**ураған һайын**. Тиҙ-тиҙ ҡабатланып торған эш-хәлгә ҡарата әйтелә. ***Ураған һайын*** *ашап тороу буламы, юҡ гәҙәтте.*

**урамға сығарып ташлау** *кемде*. Эштән ҡыуып, йәшәү сараларынан мәхрүм итеү, аслыҡ, ҡытлыҡҡа дусар итеү.

**урамға һыймаҫтай булыу**. Нимәгәлер артыҡ маҡтанып, ирәйгән төҫ күрһәтеү. *Ҡаҡшаны быуын, ҡаҡшаны тамам. Ә элек бит* [*Гәрәй*] ***урамға һыймаҫтай*** *бара торғайны, хәҙер бына, уғры һымаҡ, арт ҡапҡанан ҡасып-боҫоп ҡына йөрөй.* (Б. Бикбай.)

**урам тапау (ҡыуыу)**. Эш эшләмәй ваҡытты бушҡа йөрөп уҙғарыу. *Беҙҙең Мәхмүзә эшкә тотонорға бер ҙә уйламай. Биҙәнеп-төҙәнеп ала ла* ***урам тапай***. (Д. Исламов.) [*Малайҙар*] *түтәл ҡаҙалар. Әйҙә,* ***урам ҡыуғансы***, *эшләшкән булһындар.* (Я. Вәлиев.)

*син.*: эт һуғарыу.

**урам тулы** *һөйл*. Бик күп (*йыйылған, тупланған халыҡҡа ҡарата*). ***Урам тулы*** *аҡ билеттар, онотолған эштәре, ҡайғырышып кәңәшәләр, Ап-аҡ булған төҫтәре.* (Бәйеттән.)

**урманға утын тейәп барыу**. Барған ерҙә күп булған нәмәне үҙең менән алып барыу.

**урта бармаҡ кеүек**. Тышҡы ҡиәфәте бик матур, һылыу, һомғол (*күберәк егеттәргә ҡарата әйтелә*). ***Урта бармаҡ кеүек***, *типһә тимер өҙөрҙәй егеттәр әлдән-әле эркелешеп һуғышҡа китә торҙо.* (Ж. Кейекбаев.) — *Һауынсыларҙың ҡайһыһын маҡтаһаң да бер инде, барыһы ла* ***урта бармаҡ кеүектәр***, *һәйбәт эшләйҙәр, — тине бухгалтер.* (А. Иғебаев.) *Зәйнулланың,* ***урта бармаҡ һымаҡ*** *ирҙең, ғүмеренең иң матур бер мәлендә донъя ҡуйырмын, тип башына ла килмәгәндер.* («Сов. Башҡ.»)

**уртаға алыу** *кемде*. Һүҙгә йәки эшкә ҡатнаштырыу.

**уртаға һалып** [һөйләшеү]. Бер хәлде, мәсьәләне күмәкләп тикшереү, асыҡлау. [*Самауыр төҙәтеүсе*] *атайым менән донъя хәлдәрен* ***уртаға һалып*** *һөйләшеп ултырҙы ла, әлеге ағас һандыҡтарҙың береһен асып, бер китап алды.* (Ә. Вахитов.)

**уртаға (биленә) һуҡҡан йылан кеүек** [булыу]. Ниндәйҙер ауыр хәлдән сығыу юлын таба алмай әтләнеү.

**уртаға ярылыу**. Ниҙелер еңеп сығыу, үтәү өсөн бар тырышлыҡты һалыу, көстө биреү. *Хәрби эш — йомош түгел ул. Приказ — үтенес түгел.* ***Ярыл уртаға*** *— тик үтә! — Кемгә һуң хеҙмәт еңел?* (Х. Назаров.)

**уртаҡ тел табыу** *кем менән.* Һөйләшеп килешеү, бер фекергә килеү. *Тик Шәүкәтов менән **уртаҡ тел табып** булмай.* (М. Кәрим.) [*Ниғмәтулла*] *старателдәр менән дә **уртаҡ телде** еңел **таба**. Эш рәтен дә белә.* (Я. Хамматов.)

**урт сәйнәү** *һөйл.* Берәй эш йәки үҙаллылыҡ ҡылырға бик ныҡ тырышыу, асыу белдереү. *Һине күрһәм, **урттарымды сәйнәп,** боролормон ситкә тиҙерәк.* (Р. Бикбаев.)

**урын бар** *нимәгә, ни эшләргә.* Ниҙер ҡылырға сәбәп булғанды белдергәндә әйтелә. *...Теге ҡарт һуң ниңә ҡасып китте? — Уйланырға **урын бар** һымаҡ.* (Р. Тойгон.)

**урын ҡорт** *һөйл.* Бик аҫтыртын, мәкерле.

**урын тотоу.** Билдәле әһәмиәткә эйә булыу.

**урыны ожмахта (йәннәттә) булһын.** Үлгән кешегә ҡарата ихтирам менән әйтелгән теләк. *Уның* [*Зөлхизәнең*] *әсәһе, Зөлҡәғиҙә мәрхүмә, **урыны йәннәттә булһын,** утты-һыуҙы үтеп сыҡҡан сая бер бисә ине.* (С. Агиш.)

**урынына ултыртыу** *кемде.* Тейеш һаналған дәрәжәһенә, хәленә ҡуйыу, артыҡ ҡыланышынан тыйыу. *Мәһирә тик үҙ ҡатыны Хәбирәнән ныҕыраҡ ҡурҡҡан Сәғитте күптән үк үҙ **урынына ултыртырға** йыйына ине...* (Т. Бүләков.)

**усағының төтөнө тура сыға** *кемдең.* Хәйләләй, алдаша белмәй, асыҡ.

**ус аяһындай.** Бик бәләкәй генә (*урын-ер йәки берәй нәмәнең бәләкәйлеген күрһәтер өсөн әйтелә*). *Ус аяһындай ҡағыҙ. Ус аяһындай ер.* — *Бына ошо кеше беҙгә Ораниенбаумдағы **ус аяһындай** плацдарм өсөн барған һуғыштар тураһында һөйләне.* (И. Ғиззәтуллин.) *Дивизия һуғышҡан ерҙә, **ус аяһындай** ғына ҡарлы яланда, 749 кеше ятып ҡала.* (Й. Солтанов.)

**ус тобондағы кеүек** [күренеү]. Күҙ алдында ғына ятҡан, күрер күҙгә ташланып торған. *Был урындан беҙҙең бөтә бағаналар ҙа **ус төбөндәге кеүек** күренеп тора.* (И. Абдуллин.) *Кафе тәҙрәләре аша бөтә Берлин **ус төбөндәге төҫлө** күренеп ята.* (Н. Мусин.)

**ус төбөндә (уста) йөрөтөү** *кемде.* Бик нык ҡәҙер-хөрмәт күрһәтеү, артыҡ ҡәҙерләү. *Шәйхием һыңар күҙле көйө буй-һынымды күрә белде, **усында ғына йөрөттө.*** (Х. Ғиләжев.) [*Аллаяр*:] *Ошондай кәләше булғанға, Латипҡа тын алған һайын салауат әйтеп, шөкөрана ҡылып йәшәргә кәрәк. Бына мин үҙем ... өф итеп, **ус төбөндә** генә **йөрөтөр** инем...* (Ф. Иҫәнголов.)

**ус һырты менән доға ҡылыу.** Насар теләк менән доға уҡып, ҡулды әйләндереп хуш итеү... *Ике улын тыя алмаған әсә: «Мәңгегә күрешә алмағыҙ!» — тип **ус һырты менән доға ҡылған,** ти бит.* (Т. Бүләков.)

**ут асыу.** 1. Көслө итеп ата башлау. *Пулеметтан **ут асыу**. Дошманға **ут асыу**.*

2. Юҡҡа сығарырға тырышып, ныҡлы көрәш башлау. *Ҡыҙыл түй бит ул — бығаса йәшәп килгән ҡыҙ һатыу кеүек хурлыҡлы йолаға ҡаршы* ***ут асыу*** *тигән һүҙ.* (З. Биишева.)

**ут* бөрсәһе <кеүек>** Бик йылғыр, теремек. *Солтан ун алты йәштәрҙәге егет. ... Уны күргән һәр бер кеше, был —* ***ут бөрсәһе*** *икән, тиәсәк.* (Ғ. Хәйри.) *Йәмилә ул муйыл күҙле, бөҙрә сәсле, тартай ғына,* ***ут бөрсәһе кеүек*** *бер ҡыҙыҡай.* (Ф. Рәхимғолова.) *Яманһаровтың балдыҙы Хәйернисаның* ***ут бөрсәһе кеүек*** *сағы ине. Уға бик күп егеттәр ҡыҙығып, күҙ атып йөрөнө.* (Ғ. Ибраһимов.)

[***Ут** — *иҫк.* үлән.]

**ут йотоу**. Бик ныҡ ҡайғырыу, эстән ауыр кисереү. *Былай ҙа* ***ут йотоп*** *йөрөгән Бибигөл, хаттар килеүҙән туҡтағас, үҙен үҙе сәйнәп ташларҙай булып өҙгөләнде, көндән-көн һыҙҙы, һарғайҙы.* (Б. Бикбай.) *Садрислам ... ошо һил ауылда боҫоп ятыуына әрнеп бөтә алмай ине. Ә ауылда уның ғәйеп булыуына ата-әсәһе* ***ут йоталыр.*** (Ф. Иҫәнғолов.) *Алыҫтағы Африка ла, Вьетнам да* ***ут йотмаһын.*** (Р. Бикбаев.)

**утҡа баҫҡан бесәй һымаҡ (кеүек, шикелле)** [ҡабаланыу, булыу...]. Әбәләнеп тегеләй-былай йүгерекләү, сабыу. *Рота командиры Акимов, бер ниндәй күрһәтмәләр ҙә ала алмай,* ***утҡа баҫҡан бесәй шикелле,*** *ары саба, бире һуғыла.* (Д. Юлтый.) *Ауылға ҡайтҡас, Ғариф староста* ***утҡа баҫҡан бесәй шикелле*** *йүгереп йөрөнө.* (Ж. Кейекбаев.) ***Утҡа баҫҡан бесәй һымаҡ*** *ҡабаланған равняльник, Касьянов менән Наҡышевтың теплякка киләсәген ишетеп, үҙ ҡулы аҫтында эшләгән ҡатын-ҡыҙҙарға көн күрһәтмәне.* (Я. Хамматов.)

**утҡа бешкәндәй**. Бер урында тороп сыҙамай (*үрһәләнеү, ары-бире ташланыу*).

**утҡа һалыу** *кемде.* Ҙур ҡайғыға төшөрөү, ауыр кисерештәргә дусар итеү. *Башҡынамды күрәләтә янған* ***утҡа һалмайым.*** (Б. Бикбай.) *Ағиҙелдең туғайҙарын сәскәләр урап алған, Сәскәнән дә матур бер ҡыҙ егетте* ***утҡа һалған.*** (Халыҡ йырынан.)

**утҡа ла, һыуға ла инергә әҙер булыу**. Ҡыйыулыҡ ҡылырға ашҡынып тороу. — *Айбулат артынан ... Халыҡ* ***утҡа ла, һыуға ла инергә әҙер*** *торған сағында, күрһәтә ине ул беҙгә күрмәгәнде.* (Һ. Дәүләтшина.)

**утлы (ҡыҙған) табаға баҫтырыу** *кемде.* Бик ҡаты тиргәү, ҡыҙҙырыу. [*Халиҡ:*] *Гөбөрнатыр уларға мәмәй ҡаптырғанмы, әллә үҙҙәрен* ***утлы табаға баҫтырғанмы****?* (Б. Бикбай.) *Рәҡиә мине* ***утлы табаға баҫтырҙы,*** *тетте генә.* (И. Ғиззәтуллин.)

**ут сәсеү**. Уҫал булыу, ажғырып тороу. [*Ғәйфулла:*] *Һинең һымаҡ* ***ут сәсеп*** *торған гүзәл зат минең кеүек тәпәшәк шофер йораты менән ваҡланамы ни*?! (Р. Сабит.)

**ут өҫтөнә (утҡа) май һибеү**. Ҡыҙған кешене ни менәндер нығыраҡ ҡыҙҙырып ебәреү.

**уттай эш ваҡыты.** Бик ҡыҙыу, эш тығыҙ мәлгә ҡарата әйтелә. *Түбән урамда **уттай эш оҫтөндә** урманға еләк-емеш йыйырға йөрөй торған Әмин бар.* (М. Кәрим.)

**уттан алып һыуға һалыу** *кемде.* Бик ауыр кисерештәргә дусар итеү. *Барын да яҙ. Әйҙә хәбәрҙәрең **уттан алып, һыуға һалһындар.** Үлем-етемде тик яҙа күрмә, мин ҡайтҡансы тере ҡалһындар.* (М. Кәрим.)

**ут-һыу кискән.** Бик күп күргән, күпте кисергән.

*син.*: донъяның әсеһен-сөсөһөн татыған.

**утыҙ тугыҙлы** *һөйл.* Аҡыл йәһәтенән камил түгел, етешмәй. [*Исхаҡ*:] *Кем булһын, билдәле инде, Моратша байҙың **утыҙ тугыҙлыһы**.* (Һ. Дәүләтшина.)

*син. ҡар.*: йоҙгә берәү тулмаған.

**уты һүнгән усаҡ һымаҡ** [йөрөү]. Бик күңелһеҙ булыу.

*син.*: танау төшөү, шөмтөр ҡойолоу.

## Ү

**үгеҙ мөгөҙөнә элерлек тә** [нәмәһе юҡ]. Өй эсендә йыһаз-ҡаралтыһы, кейем-һалымы бөтөнләй булмаған, үтә ярлы кешегә ҡарата әйтелә. *Егет менән ҡыҙ инһәләр, өй эсе шундай ҡойто, **үгеҙ мөгөҙөнә элеп** сығырлыҡ сепрәк-сапраҡ заты юҡ, ти.* (Әкиәттән.)

**үгеҙ үлһә — ит, арба ватылһа — утын** *кемгә.* Эш, тормоштоң етешһеҙлегенә боша белмәгән, үтә ғәмһеҙ кешегә ҡарата әйтелә.

**үҙ агышына*** **ҡуйыу** *нимәне, кальк.* Эш, тормош менән етәкселек итмәү, нисек барһа, шуға риза булыу.

[*Рус телендәге «пустить на самотек» берәмегенән.]

**үҙ аршынына үлсәү*** *нимәне.* Берәй кешенең эш-ҡылығын үҙ мәнфәғәтеңдән генә сығып баһалау, уныҡын иҫәпкә алмау.

[*Рус телендәге «мерить на свой аршин» берәмегенән.]

**үҙ ауырыуы.** Быума ауырыуына ҡарата әйтелгән йәшерен һүҙ (*ауырыуҙы йәшереү, ҡотортмау өсөн әйтелә*).

**үҙ башына булгыры (булһын).** Артыҡ шашып киткән кешегә ҡарата әйтелгән яман һүҙ.

**үҙ башына ҡарышыу (ҡотороу).** Үҙен менән ни булырын уйламай шашыу. [*Зиннәт*:] ***Үҙ баштарына** ғына **ҡоторһалар** ярар ине.* (Х. Ибраһимов.)

**үҙе баш, үҙе түш.** Гел үҙенсә генә эш иткән, үҙ һүҙен генә һүҙ итеп хакимлыҡ ҡылған кешегә ҡарата ризаһыҙлыҡ белдереп әйтелә. *Ғилаждың оло ҡатыны Гөлйемеш әбей бынан ике йыл элек үлгәйне. Сафура Ғилаж өйөндә **үҙе баш та үҙе түш** булып*

*ҡалды.* (Ж. Кейекбаев.) *Теләһәм — сдаю, теләһәм — раздаю.* ***Үҙем баш, үҙем түш.*** *... Шулаймы, Ҡотлобаев?* (Х. Ғиләжев.) [*Вәлиев*] *Өсөн оят та, закон да юҡ. Ул* ***үҙе баш, үҙе түш.*** *Нимә теләй — шуны эшләй.* («Сов. Башҡ.»)

**үҙе бер ғүмер** *нимә, ни эшләү.* Ниҙәндер хозурланып кинәнгәнде белдергәндә әйтелә. *Сәй эсеүе* ***үҙе бер ғүмер*** *ине.* (Я. Хамматов.) ... *Иҙәйге кистәрҙә, эшләп арығандан һуң, Ҡыҙыл буйында ҡурай моңдарын тыңлап, ҡымыҙ эсеп ял итеп ятыуы* ***үҙе бер ғүмер.*** («Сов. Башҡ.»)

**үҙ елкәңдә татыу** *нимәне.* Ниҙең ни икәнен үҙең күреп, үҙең белеү. *Уҡыған вузының кәрәклеген Иҙелбай хәҙер* ***үҙ елкәһендә татып*** *белде.* («Сов. Башҡ.»)

**үҙе лә йөҙө.** Кешенең үҙе барҙа үҙенә тураһын әйткәндә ҡулланыла. — *Бынау завферманы әйтәм, хужа булһа була белһен, булмаһа ... — тип Зифа һүҙ башланы. —* ***Үҙе лә йөҙө*** *бына.* («Сов. Башҡ.»)

**үҙенә ҡалһа.** Кешенең эше, ҡылығы тураһында кәмһетеп әйтергә теләгәндә ҡулланыла. [*Көтөүсе:*] *«Аҡсаны мин нишләтермен икән һуң?» — тигән була. Йәнәһе,* ***үҙенә ҡалһа,*** *аҡсаға бер ҙә иҫе китмәй инде.* (Әкиәттән.) ***Үҙеңә ҡалһа,*** *һин генә урынға керә алаһың да, башҡа кеше керә алмай була инде, әйеме?* (С. Агиш.)

**үҙенекен итеү.** Үҙ һүҙен өҫкә сығарыу, теләгәненә ирешеү. *Һүнмәҫ дәрт, тырышлыҡ,* ***үҙенекен итә*** *— Хәнифә Сиражевна бөтәһенә лә өлгөрә.* («Сов. Башҡ.»)

**үҙе ни тора.** Нимәгәлер хозурланып, кинәнгәндә әйтелә. *Ҡыш буйы ыҙмала быҫҡып ятҡандан һуң, яҙ башы киң яланға сығып, бер иркенләп тын алыуы* ***үҙе ни тора!*** (Һ. Дәүләтшина.)

**үҙенә ҡалһа.** Әллә кем булып ҡыланған кешегә әйтелә.

**үҙең белеп, үҙең ҡуйыу.** Үҙ аллы булыу, үҙ аллы эш итеү. *Революцияға тиклем беҙҙең ауылда* ***үҙе белеп, үҙе ҡуйып,*** *кеше менән бик ҡатышмай ғына йәшәгән бер ағай бар ине.* (Ә. Вахитов.)

**үҙеңде ҡулға алыу*.** Юғалып ҡалырлыҡ хәлдән сығыу. [*Тәнзилә*] ***Үҙен ҡулға алып,*** *йылмайырға тырышты, ишеккә йүнәлде, сығып китергә ашыҡты.* (Ф. Иҫәнғолов.)

[*Рус телендәге «взять себя в руки» берәмегенән.]

**үҙеңде әллә кемгә ҡуйыу (һанау).** Эре ҡыланыу, башҡаларҙан өҫтөн һанау. *Билдәрендә һары ҡайыш,* ***үҙен - үҙе әллә кемгә ҡуя*** *бит, понимаешь.* (Таҡмаҡтан.)

**үҙең ултырған ботаҡты сабыу.** Үҙеңә зыян килтерә торған эште эшләү; терәк, таянысыңды юҡҡа сығарыу.

**үҙеңә урын тапмау.** Ныҡ тулҡынланыуҙан, тәрән кисерештән ни эшләргә белмәү.

**үҙеңә үҙең баҙ ҡаҙыу.** Үҙеңә ныҡ зыян килерҙәй эш эшләү.

**үҙеңә үпкәлә.** Берәй эш-ҡылыҡтан тыйғанда әйтелә. *Урманға рөхсәтһеҙ кереп ағас киҫһәң инде,* ***үҙеңә үпкәлә.*** (М. Мөхәмәтов.)

*... Әйҙә, йорт, донъя ҡорогоҙ, хужалыҡ итегеҙ: власҡа ҡаршы эш ҡылмағыҙ. Ҡылһағыҙ, үҙегеҙгә үпкәләгеҙ.* (Р. Солтангәрәев.)

**үҙе тапҡан, үҙе ҡапҡан.** Тапҡандың файҙаһын күреү.

**үҙе туйған, күҙе туймаған.** Булғанга риза булып, «етте» тип әйтә белмәгән кешегә ҡарата әйтелә. *Мул ризыҡ һирәк тейгән саҡта кемеһе әйткән булманы: Килер ерең мәүлә киң ҡылһын,* ***Үҙем туйҙым, күҙем туйманы.*** (С. Ғәбиҙуллин.)

**үҙ итеү (күреү).** Күңелгә яҡын һанау. *Йылдар* ***үҙ итмәгәс,*** *был ерҙәрҙән эҙ юллар кулак-бүреләр.* (Б. Бикбай.) *Ғүмер буйы зәңгәр күкте* ***үҙ итер*** *күңелдәрем.* (В. Әхмәҙиев.) [*Һәүбән Нәркәскә*:] *Был сереңде әйтеүең, Дуҫ күрепме, һылыуҡай?* ***Үҙ күрепме,*** *һылыуҡай?* (Эпостан.)

**үҙ кеше.** Яҡын мөнәсәбәттә, дуҫ булган әҙәм. — *Ярай, еңгә, уның ни ғәйебе бар, — тине Тимер, —* ***үҙ кешеләр*** *бит, бер юлға кисерербеҙ.* (Б. Бикбай.)

**үҙ көнөңдө үҙең күреү.** 1. Үҙ аллы йәшәү. *Бер аҙ ваҡыттар торғас, ҡайтһалар, ҡыҙ* ***үҙ көнөн үҙе күрергә*** *ауылдан сығып киткән.* (Әкиәттән.)

2. Үҙеңде ризыҡ, аш-һыу менән тәьмин итеү. *Кеше малына мохтажлыҡ юҡ,* ***үҙ көнөбөҙҙө үҙебеҙ күреп*** *ятабыҙ.* (М. Кәрим.)

**үҙ көнө үҙендә.** Үҙ аллы йәшәй, үҙен үҙе ҡарай ала. *Күптән инде Хәтимә әбейҙең* ***үҙ көнө үҙендә.*** *Улы үлгәндән бирле айырым ашай. Пенсияһына сәй-шәкәрен дә, кейемен дә, утынын да һатып ала.* («Сов. Башҡ.»)

**үҙ ҡалыбыңа үлсәү (һалыу).** Ниҙе лә булһа үҙ күҙлегеңдән генә сығып баһалау.

**үҙ өҫтөңдә эшләү*.** Үҙеңдең белемеңде, һөнәреңде камиллаштырыу, етешһеҙлектәреңдән арыныу.

[*Рус телендәге «работать над собой» берәмегенән.]

**үҙ өҫтөңә алыу** *нимәне.* Үҙ бурысың һанап, башҡарып сығыуҙы яуаплылығыңа алыу. *Ҡанат бәйләү бурысын Мостафин* ***үҙ өҫтөнә алырға*** *теләне һәм пальтоһын сисә башланы...* (Б. Бикбай.) *Кәнбәк ауылы зыяратын кәртәләргә кәрәк ине. Был эште депутат Ихсан Мөхәммәтов* ***үҙ өҫтөнә алды.*** («Сов. Башҡ.»)

**үҙ сәсен үҙе йолҡоу** *һөйл.* Нимәгәлер ныҡ үкенес белдереп өҙгөләнеү.

**үҙ туҡһаны туҡһан (туғыҙы ғына туғыҙ), үҙ тине бер тин.** Үҙ һүҙен генә дөрөҫ һанаған кешегә ҡарата әйтелә. ... *Ғәзимә ишетергә лә теләмәне —* ***үҙ туҡһаны туҡһан*** *ине.* (Р. Сабит.) *Ә Фатиханың был тәңгәлдә* ***үҙ бер тине бер тин*** *ине.* (Ғ. Байбурин.) *...Урыҫ хеҙмәтендәге француз ханды төрлөсә мыҫҡыллай, үҙен һауалы тота, быға екеренә,* ***үҙ туғыҙын ғына туғыҙ*** *тип һанай.* (Б. Аҫылгужа.)

**үҙ һөйәгем үҙемдән ауыр түгел.** Үҙ балам үҙемә ҡәҙерле, бер ҙә артыҡ түгел, ауырһынмайым. *Минең* ***үҙ һөйәгем үҙемдән ауыр***

*түгел, өйөмдә ултыра бирер. Борон ҡыҙҙар өсәр йылһыҙ оҙатылмай торғайнылар әле.* (Һ. Дәүләтшина.)

**үҙ һүҙле <үгеҙ күҙле>.** Үтә лә еңмеш, үҙенекен генә өҫкә сығарырға тырышҡан. [*Fәләү*:] *Теге **үҙ һүҙле үгеҙ күҙле** Харис бар ине бит, шуның еңмеш ҡыҙы ... еңмешләнә торғас, бөтәһен дә еңеп бөткән.* (И. Ғиззәтуллин.) *Атай асыуланыр ... тип тә тормаған ... Нәмә әйтәһең инде уға, **үҙ һүҙле үгеҙ күҙле** малаиға.* (Ф. Әсәнов.)

**үҙ һүҙен һүҙ итеү.** Алдына алғанын, уй-ниәтен алға сығарыу. *Ай үҙ һүҙле, һай үҙ һүҙле, **үҙ һүҙеңде һүҙ иттең**, йөрәгемде тулҡындырып, Күнәгеңә болғансыҡ һыу Тултырып алып киттең.* (Ш. Ғалин.)

**үҙ эшенең солтаны.** Эшен, һөнәрен бик яҡшы белгән кешегә ҡарата маҡтау һүҙе.

**үҙәккә тейеү.** Йонсотоу, яфалау. *Старателдәрҙең **үҙәктәренә тейгән** быйылғы яҙ бигерәк тә оҙаҡҡа һуҙылғандай тойолдо.* (Я. Хамматов.)

*син.*: үҙәккә үтеү 1.

**үҙәккә үтеү.** 1. Йонсотоу, яфа сиктереү. *Көнө-төнө **үҙәктәргә үткәреп**, тиреҫтән зәһәр ел иҫте.* (Ф. Иҫәнғолов.) [*Хәжәр*:] *Өйҙө ватһалар ватһындар, сәсрәп китһен, тип тә ҡуям хатта, **үҙәгемә үттеләр**.* (Ш. Янбаев.)

2. Ялҡытыу, туйҙырыу. *Ҡасан һыу булыр инде, — тиҙәр сөгөлдөр эшкәртеүселәр. — Эштән арып ҡайтып, һыуға барыуы **үҙәккә үтә** шул.* («Сов. Башҡ.»)

3. Әрнетеү, әсендереү. *Тәүге мәлдәрҙә Һәҙиәнең арып талыуҙары, аяҡ-ҡулдарының һыҙлауҙары **үҙәгенә үтте**.* («Сов. Башҡ.»)

**үҙәкте өҙөү.** Нескә, һағышлы хискә төшороу. *Кис ултырып ҡыҙҙар сигеү сигә, Биҙәктәргә ялғап биҙәкте, Биҙәктәре ебәк йырҙай ағыла, Тик йырҙары **өҙә үҙәкте**.* (М. Кәрим.) *Һуғыш ваҡытында ... ер өҫтөнән тәгәрәгән иңрәү, тамырҙар аша үтеп, әлдә лә минең **үҙәгемде өҙә**.* (И. Ғиззәтуллин.) **Үҙәк өҙгөс**: ... *Аҫта кырсын өҫтөндә, **үҙәк өҙгөс** йыр һыҙыла...* (З. Биишева.)

**үҙәк (тамаҡ) ялғау.** Әҙерәк ашап алыу. *Һибәтулла атты туғарып юл буйындағы ҡурпыға ебәрҙе. Ат ашағансы үҙҙәре лә **үҙәк ялғап** алдылар.* (Ж. Кейекбаев.)

**үкенескә ҡаршы.** Нимәгәлер үкенес белдергәндә әйтелә. ***Үкенескә ҡаршы**, ҡайһы бер предприятиеларҙа, колхоздарҙа һәм ойошмаларҙа хоҡуҡ тәртибен боҙоусыларға ҡаршы көрәш йомшаҡ ойошторолған.* («Сов. Башҡ.»)

**үксә күтәреү (ялтыратыу).** 1. Йүгереп китеү; һыпыртыу. — *Кейенеп ал да **үксәңде күтәр!** — тине жандарм.* (Х. Мохтар.) [*Илмырҙа*:] *Бар, кит бынан, **үксәңде ялтырат**!* (М. Тажи.)

2. Ҡасып китеү; һызыу, тайыу. *Алпауыт, ерҙе беҙгә ҡалдырып, **үксәһен күтәрергә** тейешле.* (Ф. Ғәйнетдин.)

*син.*: табан ялтыратыу.

**үксәһе ергә теймәү**. Бик шәп йүгереү, сабыу.

**үксәһенә баҫыу** *кемдең*. 1. Эштә, ярышта ҡыуып етеү, эйәрә килеү. *Кисә көтмәгәндә Сергей Арыҫланбәктең **үксәһенә баҫты**. Тимәк, вымпелдың ҡулдан ысҡыныу ҡурҡынысы бар.* (Р. Низамов.) *Ғөмүмән, беҙҙә һыйырҙар һәйбәт ... Шуға күрә лә һауынсылар бер сама, бер-береһенең **үксәһенә баҫа-баҫа** киләләр.* (Ш. Ғәлин.)

2. Арттан баҫтырып, ҡыуып етеү. *Дошман ҡыҫырыҡлап, **үксәгә баҫып** килә. Партизандар өсмөйөштә тороп ҡала.* («Сов. Башҡ.»)

**үлемесле булыу**. Ныҡ арыу, хәлдән тайыу.

**үлем менән бер**. Бик ҡыйын хәлгә ҡалганда әйтелә. *Гөлйөҙөм ошо һөйләшкәнде шаршау артынан тыңлап торған булһа — **үлем менән бер** булыр ине.* (Һ. Дәүләтшина.)

**үлем түшәгендә ятыу**. Үлер хәлгә етеү, үлем алдында булыу. *син.*: хәл эсендә ятыу.

**үлем һалып** [эшләтеү] *һөйл*. Ныҡ тырыштырып, йән тәслим. *Хөкүмәт **үлем һалып** эшләтә бит ул сайырҙы.* (Һөйл. )

**үлеп барганда (үлергә ятканда) ауыҙыңа бер ҡалаҡ һыу һалмаҫ**. Үтә лә изгелекһеҙ. — *Бирер тауар Әхмәҙи. **Үлергә ятҡанда ауыҙыңа бер ҡалаҡ һыу ҙа һалмаҫ** әле.* (Ж. Кейекбаев.)

**үлеп терелеү**. Ҙур ҡурҡыныстан ҡотолоу, ныҡ ҡурҡып алыу.

**үлмәктән ҡалмаҡ ҡына**. Бик ябыҡ; хәлһеҙ.

**үлсәп ҡырҡҡан кеүек (ҡырҡҡанмы ни, үлсәһәң дә улай булмаҫ)**. Бик таман, килешеп торган кейемгә ҡарата әйтелә.

**үлһәм дә үкенмәҫ инем**. Берәй эш башҡарыуҙы маҡсат, йәшәү осөн оло шарт итеп ҡуйганда әйтелә. ***Үлһә лә үкенмәҫ ине** лә [Сәмерхан], бынау малай йәлке. Атаһы барҙа башлы-күҙле була алмай ҡала.* (З. Ҡаҙаҡбаева.)

**үлән аҫтынан ут ебәреү (йүгертеү)**. Йәшерен дошманлыҡ итеү, этлек эшләү. *Был ауылда элек **үлән аҫтынан ут йүгертеү**, үҙ-ара йәшерен дошманлыҡ, бер-береһенән үс алырға маташыу булған.* («Сов. Башҡ.»)

**үләт йыҡҡыры (йыҡһын, тейгер)**. Ҡаргау һүҙе. *Бынау Иркәбикә ҡарсыҡтың сыбар тауығы ҡуймаһы бит шул ҡыяр түтәлен! Кө-өш! **Үләт йыҡҡыры**!* (М. Кәрим.)

**үпкәгә ут ҡабыныу**. Асыу килеү. [*Үтәгол*:] *Хәҙер беҙҙең һүҙҙе һанға алмайҙар. **Үпкәгә ут ҡабынып** йөрөп ятабыҙ.* (М. Буранголов.)

**үпкә йөҙгәнсе** [эсеү]. Бик күп итеп, ныҡ туйгансы (*сәй эсеү*). *Әйтәгүр, бер кинәнеп, **үпкәм йөҙгәнсе** сәй эсеп ҡайттым әле.* (Һ. Дәүләтшина.)

**үпкә ҡабарыу**. Асыуланып ярһып китеү.

**үпкә тотоу** *кемгә*. Үпкәләгән хис һаҡлау.

**үрмәксенән күрмәксе**. Кемгәлер һуҡыр рәүештә эйәргән кешегә ҡарата әйтелә.

**үрмәләгәнгә йүрмәләгән**. Эшләгән, әҙ булһа ла тырышҡан кешегә ниҙер төшә.

**үс иткәндәй.** Юрамал эшләгән кеүек, әмәлгә ҡалғандай. ***Үс иткәндәй,*** *тап шул Мораҙым үренә етер саҡта ғына, әллә ҡайҙан болото сурайып килеп сыға ла, дөбөр-шатыр йәшенен уйнатып, яуа ла башлай.* (Ш. Янбаев.)

**үс ҡаныу.** Йыйылған асыу, зәһәрҙе сығарыу; ҡәнәғәтлек кисереү. *Хәлимә үҙенең ярһыуы баҫылғансы,* ***үсе ҡанғансы*** *әйтте лә ... баҫҡыстан менеп китте.* (Һ. Дәүләтшина.)

**үтен һытып алыу.** Хаҡты, йәки башҡа нәмәне бик ҡимməткә төшөрөү йәки ниҙелер йәлләмәй һығып алыу. — *Ҡайҙа, юҡмы шунда берәй ҡырҡынтың? Алмай сыҡмаҫтар инде былар барыбер.* ***Үтеңде һытып*** *булһа ла* ***алырҙар.*** (Ж. Кейекбаев.) [*Ғәфүр Хәжәргә*:] — *Эшлә, эшлә... Баҙарҙа кешенең* ***үтен һытып алаһың*** *һин аҡсаны.* (Ш. Янбаев.) [*Биксән ағай бесәнде*] *хатта яҙғы өҙөктә лә ике-өс сана һатып ебәрә. Хаҡын инде, кеше әйтмешләй,* ***үтен һытып ала.*** (Р. Солтангәрәев.)

**үтен һытып эскән** *нимәнең, һөйл.* Теге йәки был эште энәһенән ебенә тиклем белгән, хәйлә, мутлыҡтарын да өйрәнеп бөткән. *Магазинға барып инеү менән,* [*Ҡорбан*] *үҙенең күптәнге танышы, сауҙа эшенең* ***үтен һытып эскән*** *дуҫына мөрәжәғәт итте ...* (С. Кулибай.)

**үтеп сыҡҡан.** Бөтәһен күреп, татып белгән, шымарған.

*син.*: донъяның әсеһен-сөсөһон татыған, күпте күргән, йылан аяғын киҫкән.

**үткер телле (теле үткер)** *кемдең.* Дөрөҫөн туранан-тура әйтә торған. *Ай зирәк ҡыҙ — ай зирәк ҡыҙ,* ***үткер теле,*** *изгеләрҙән изгерәктер, юҡтыр кере...* (Ш. Бабич.)

**үтмәҫ (тешһеҙ) игәү** *һөйл.* Бик мыжыҡ кеше. [*Нәсимә*] *иренә ҡарамай бышылданы: — Йоҡланым шул. — Ай,* ***үтмәҫ игәү***! — *Шакир асыу менән өҫтәп ҡуйҙы.* (Һ. Дәүләтшина.)

**үтмәҫ тауар.** Бер кемгә лә ярамаған, бер ҡайҙа ла һыймаған кеше.

**үт һыуын эсереү** *кемгә.* Ҡаты нужа күрһәтеү.

**үтәнән-үтә күреү.** Кемдең кемлеген, уй-фекерен белеп тороу. *Һинең хәлең, кем әйтмешләй, шалтай-балтайыраҡ һиҙелә: Мин* ***үтәнән-үтә күреп торам.*** (М. Кәрим.)

# Ф

**фаш итеү** *кемде, нимәне.* Йәмәғәт алдында ғәйебен, мутлығын асып биреү.

*син.*: йөҙөн асыу.

**фекер йөрөтөү.** Уйлау. *Һәр кем ошо алыҫтан килгән ҙур хаттың мәғәнәһен тикшерә,* ***фекер йөрөтә*** *ине.* (Һ. Дәүләтшина.)

**фекер туплау (йыйыу).** Уйҙарҙы бер тәртипкә килтереү, ниндәйҙер бер нәмәгә йүнәлтеү. *Әбей, үҙенең **фекерҙәрен туплаған** һымаҡ, байтаҡ ултырҙы...* (Д. Юлтый.)

**фәлсәфә һатыу.** Мәғәнәһе аҙ булған нәмә тураһында оҙаҡ итеп, сурытып һөйләү. *Дәрүиш булып йәшәне, дәрүиш булып үлде бит байғош, ... үҙенсә **фәлсәфә һатты**.* (З. Биишева.) ... *Бағана ултыртыуға ҡарағанда, был турала **фәлсәфә һатыу** еңелерәктер, күрәһең.* (Х. Ғиләжев.)

**фәрештәнең амин тигән сағына тура килеү.** Берәй эш-хәл булһын, йәки булмаһын тигән теләкте белдергәндә, киҫәтеү өсөн әйтелә. — *Иә **фәрештәнең амин тигән сағына тура килер**, ҡолаҡҡа яҡмаған юҡ-барҙы һөйләп тормағыҙ, — тип тыйҙы Хәҙисә әбей ...* (Т. Бүләков.)

**фәһем алыу.** Ниндәйҙер эш-хәлдән сығып өйрәнеү. *Минең **фәһем алырлыҡ** әйберҙәр, кешеләрҙең иң яҡшы сифаттары хаҡында яҙғым килә.* («Сов. Башҡ.»)

## Х

**хайран(ға) ҡалыу.** Бик ныҡ аптырау, ғәжәп булыу. *Ҡыҙҙың матурлығына мулла **хайран ҡала**.* (Әкиәттән.) — *Беҙҙең телдә лә театр уйнап була икән! — тип **хайранға ҡалдылар** ауылда.* (Д. Юлтый.) *Майҙан халҡы **хайран ҡалған**. Киткән шау-шыу, «Кем йүгереге лә, кем аты?»* (Ж. Кейекбаев.)

**хаҡ күтәреү.** Кемгәлер, нимәгәлер баһаны юғары бирҙерергә тырышыу.

**хаҡын сығарыу** *нимәнең*. Эшләгән эштең, күрһәткән хеҙмәттең әһәмиәтен күтәрергә тырышыу. *Йомошҡа барыуҙың **хаҡын сығарыу**.*

**хаҡ яҙмыш.** Күрәсәк күрә торған. *Маңлайыңа яҙылған **хаҡ яҙмышты** һыпырып ташлап булмай ҡул менән.* (Халыҡ йырынан.)

**хан заман(ында).** Әллә ҡасан, бик борон. *Ағайым мәрхүм Йәзәкәү баҙарынан алып ҡайтҡайны. Аны алыуға **хан заман** бит инде. Егерме биш йәштәрҙә булғандыр ул хайуан...* (Ж. Кейекбаев.) *Минең алда бер-береһенә оҡшаш өс әйбер: ҡарт ат, ҡарт кеше, шымарып бөткән **хан заманындағы** тимер ҡыңғыр.* (Т. Килмөхәмәтов.)

*син.*: Мамай заманы, Нух заманы.

**хан йәйләүе.** Рәхәт, кинәнесле тормош. *Хан йәйләүендә йәшәү.*

**хан һыйы (туйы).** Ашау-эсеү, һый бик мул булған тормош. *Ун биш көн **хан һыйында** йәшәнем. Ғүмер бәхетһеҙ булырға торған туғандар кеүек булдыҡ та киттек.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**харап булыу.** Һәләкәткә осрау, юҡҡа сығыу. [*Ҡыҙ*:] — *Ай, егет, **харап булырһың**! Ҡайҙан килдең — шунда кит*! (Әкиәттән.) *Рәтле ҡарау юҡ, **харап була** ат, харап була.* (Б. Бикбай.)

**харап итеү** *кемде, нимәне*. Һәләк итеү, юҡҡа сығарыу.

**хас ҡылыу.** Дошманлыҡ итеп, яуызлыҡ эшләү. — *Булыр-булыр. Булмаҫ тимә был саҡта. Берәйһе юрамал **хас ҡылып** эшләр, уйлама ла,* — *тине икенсе берәүҙәре, ҡеүәтләп.* (Ж. Кейекбаев.)

**хат етмәҫ, ат етмәҫ** [ер] *фольк*. Бик алыҫ урын (*алыҫлыҡты көсәйтеү өсөн күберәк әкиәттәрҙә ҡулланыла*). ***Хат етмәҫ, ат етмәҫ** ерҙән ҡайҙан килдең, егет. Хәҙер ағайым ҡайта, һинең һәләк булыуыңды мин теләмәйем, тиҙерәк ҡас, ти икән һылыу ҡыҙ.* (Әкиәттән.)

*син.*: ер аяғы ер башы, ете диңгеҙ аръяғы, ҡаф тау арты.

**хаттин ашыу.** Артып китеү, сиктән артыу. *Әҙәмдәрҙең һуҡырлығы, ғәмһеҙлеге **хаттин ашҡан**.* (М. Кәрим.) *Бигерәк тә теге һонтор **хаттин ашҡайны**: Мусаның рус телен боҙоңҡорап ебәреүен әләкләп көлә* ... (М. Ямалетдинов.) *Саманан аша инде самалар, Аҡса, аҡса, тип, Ирҙәр сабалар. **Хаттин ашты** бит әҙәп-самалар.* (Т. Йосопов.)

**хозурын ебәреү** *нимәнең*. Йәмен, матурлығын эш-ҡылыҡ, тәртибең менән боҙоу. *Минең бер танышым бар. Үҙе арыу ғына кеше, ә инде бер ауыҙ һүҙе менән мәжлестең **хозурын ебәрергә** әҙер генә тора.* («Сов. Башҡ.»)

**хоҙай белһен.** Ниҙе лә булһа бөтөнләй белмәгәнлекте күрһәткәндә әйтелә.

**хоҙайҙың ҡаты ҡәһәре төшһөн.** Ҡарғау һүҙе.

**хөкөм һөрөү.** Өҫтөнлөк итеү. *Бөтә ерҙә үтә ҡайғылы, шомло тынлыҡ **хөкөм һөрә**.* (З. Биишева.) *Йөҙәр йыллап **хөкөм һөргән** ауыр тормошҡа Октябрь революцияһы ғына сик ҡуя.* («Сов. Башҡ.»)

**хөрәсән ялҡауы.** Үтә ялҡау, эшлекһеҙ.

**хәбәр һатыу.** Буш һүҙ һөйләп ваҡыт үткәреү.

**хәжәте бер тин (бар ине).** Кәрәге юҡ, кәрәкһеҙ. [*Хафиз Мөтәғәллигә*:] *Төкөрәм мин һинең мәсетеңә, бик **хәжәте бар ине**!* — *тип әйткән ти ул.* (В. Исхаҡов.)

**хәйерле сәғәттә.** Эш башлағанда әйтелә торған яҡшы теләк («*уңышлы тамамланһын*» *тигәнде белдерә*). — *Хуш, йә, килен, **хәйерле сәғәттә** башлап ҡарайыҡ,* — *тине ҡарт.* (З. Биишева.)

**хәйерле юл!** Юлға сыҡҡан кешегә әйтелгән изге теләк.

**хәйерсегә ел ҡаршы.** Юл уңмағанда, эш бармағанда, ғел ҡаршылыҡҡа осрап торғанда әйтелә. ... ***Хәйерсегә ел ҡаршы** тигәндәй, бөтә баҙарҙы айҡап әҙләһәм дә, тауыҡтың әҫәре лә күренмәй.* (В. Исхаҡов.)

**хәл алыу**. Бер аҙ көс туплау, ултырып хәл йыйыу.

**хәлдән килгәнсе**. Булдыра алғансы (*тырышыу, ниҙер эшләү*). *Аяҡ һуҙып ятып үлеү ир-егеттең һөнәре түгел ул.* ***Хәлдән килгәнсе*** *яулашырға кәрәк.* (Һ. Дәүләтшина.)

**хәлдән тайыу**. Көс бөтөү, хәлһеҙләнеү. *Иртәнән кискә саҡлы забойҙа эшләп,* ***хәлдән тайып*** [*ҡайта кешеләр*]. (М. Ғафури.) ***Хәлдән тайһам***, *кем ҡарар, ауыҙыма һыуҙы кем һалыр.* (Я. Хамматов.)

**хәленә инеү** *кемдең*. 1. Ниндәй хәлдә икәнен аңлау, торошон белеү.

2. Ауыр хәлдә булған кешегә ярҙам итеү.

**хәл ҡылыу (итеү)** *нимәне*. Ниндәйҙер эш-хәлде ғәмәлгә индереү. *Бәләгә тарыусыны яҡларға теләүселәр ситкә китә, үҙҙәре* ***хәл ҡылһындар***, *йәнәһе.* («Ленинсы».)

**хәл өҫтөндә (эсендә)** [ятыу, булыу]. Бик ауыр хәлдә булыу, үлем хәлендә булыу. *Балам* ***хәл өҫтөндә.*** *Инде барыр еребеҙ юҡ. Һеҙгә күсеп килдек.* (Ф. Иҫәнғолов.) [*Ҡуҙыйкүрпәс — Сарыбайға*:] *Атайым, баҫҡынсыларҙы ҡыуып ебәреп, малыңды кире ҡайтарып, киҫкеләнеп,* ***хәл эсендә ятҡан*** *үҙеңде дауалап аяҡҡа баҫтырған.* (Эпостан.) *Ҡайҙан белһен Мансур тап шул мәлдә ҡустыһының* ***хәл эсендә ятҡанын***. (З. Ҡаҙаҡбаева.)

*син.*: үлем түшәгендә ятыу.

**хәл юҡ**. Сараһыҙлыҡты белдергәндә әйтелә. *Урамдан егет-улаҡ уҙыр* ***хәл юҡ***, *күҙең-ҡашың аҡшаңлап һүҙ ҡуша башлайһың.* (Һ. Дәүләтшина.)

**хәреф айырыу (таныу)**. Бер аҙ уҡый белеү. *Мостафа әле үҙе* ***хәреф айырып*** *етмәгән сағында Мортаза ағаһы уға китаптан тағы ниндәйҙер йырҙар уҡый.* (М. Кәрим.)

**хәсрәт тоҡсайы** *һөйл.* Кешене кәмһеткәндә әйтелә торған һүҙ.

**хәтергә килеү (төшөү)**. Иҫкә төшөү. *Үткәндәр хәтергә килә.* **Хәтергә килтереү (төшөрөү)**: *Емешһеҙ ағас, балаһыҙ ҡош кеүек ғүмеремдең үтеп барғанын ҡапыл* ***хәтеремә төшөрҙө*** *ул* [*Шәфәҡ*]. (М. Кәрим.)

**хәтерҙән сығыу**. Иҫтән сығыу, онотоу. *Исеме хәтерҙән сыҡҡан.* ▬ *Үҙебеҙҙең эшсе синыфы икәнебеҙ* ***хәтерҙән сыҡмаһын***. (Ә. Вәли.)

<...**тимәһәң**> **хәтере ҡалыр** *һөйл.* Кемдеңдер йәки ниҙеңдер мөсһөҙлөгөн, насарлығын арттырыу, кәмһетеү өсөн әйтелә. *Һыйырҙары һуң ... һыйыр* ***тимәһәң хәтерҙәре ҡалырҙай*** *ғына инде, бахырҙар. Көнөнә ике литр һөт бирәләр ине.* («Сов. Башҡ.»)

**хәтер ҡалыу** *кемгә, нимәгә*. Үпкәләү. *Ҡыҙҙарҙың һүҙҙәрен ишетеп күрәҙәсенең* ***хәтере ҡалыуынан*** *ҡурҡҡан Хәйретдин уларға боролоп ҡараны.* (Я. Хамматов.) **Хәтерен ҡалдырыу** *кемдең*: *Теге йыуан ҡатындың ҡайһылыр һүҙе бик тә* ***хәтерен ҡалдырҙы***, *ахыры* [*Миңһылыу еңгәнең*]. (Р. Солтанғәрәев.) *Ләкин Ғәйшә өсөн, хушлашҡанда, был һүҙ артыҡ* ***хәтер ҡалдыра***. (Ғ. Амантай.)

**хәтер һаҡлау.** Үпкәләтмәҫкә тырышыу. *Ул арала булманы, Шәмсетдин, ишекте шар асып, бөтә ҡышты эйәртеп килеп тә инде. **Хәтер һаҡлап** торманы, тураһын һуҡты.* (Р. Низамов.)

**хәтер һандығы.** Иҫтә, хәтерҙә булыу; иҫ. *Уралды аша үткәндә … күңелдә ниндәйҙер әйтеп кенә аңлатып булмай торған ҙур тойғо уяна. Үҙең дә һиҙмәҫтән **хәтер һандығы** асыла башлай.* (М. Кәрим.)

## һ

**һабаҡ алыу.** Ниҙәндер тәжрибә алып, үҙеңә һығымта яһау, өйрәнеү. … *Был мөхит буржуйҙары башҡортса уҡый ғына белмәй. Югиһә, ошо мәҡәләне уҡығандары байтаҡ **һабаҡ алыр** ине.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Һин тормошта әллә аҙаштыңмы, **һабаҡ алманыңмы** ғүмерлек?* (Ғ. Дәүләтов.)

**һабаҡ биреү** *кемгә.* Үҙ тәжрибәңде кемгәләр өйрәтеү. *Сығынсы аттар кеүек туламайыҡ, исправдом беҙгә **һабаҡ бирҙе** инде.* (Б. Бикбай.)

**һабаҡ булыу** *кемгә, нимәгә.* Хаталар, яңылышлыҡтар аша яҡшыға өйрәнеү. *…Тормош тәжрибәһе лә, үҙе кисергән ауырлыҡтар һәм кисерештәр ҙә Мөғәллимгә **һабаҡ булмаған**.* («Сов. Башҡ.»)

**һабаҡ уҡытыу** *кемгә.* Тормошта нимәгәләр өйрәтеү (*тәжрибә аша*). *Үҙем — ҡарт һалдат, Үткән яуҙарҙа һеҙҙең кеүектәргә «**һабаҡ» уҡытҡан** һалдат.* (К. Кинйәбулатова.)

**һабан һөрөргә <ғенә> ҡалды.** Башҡаһы бөттө, эш бер нәмәгә генә килеп терәлде.

*син.*: көлтә бәйләргә <генә> ҡалды.

**һағыҙаҡ кеүек (шикелле, һымаҡ).** Артыҡ бәйләнеүгә, бәйләнсек кешенең үҙенә ҡарата ризаһыҙлыҡ тойғоһо белдергәндә әйтелә. [*Ҡолсобай:*] *Нимә бәйләндең әле һары **һағыҙаҡ шикелле**.* (Я. Хамматов.)

**һағыҙ кеүек (һымаҡ, шикелле) йәбешеү** *һөйл.* Айырылмаҫтай булып бер-берәүгә эйәреү, артынан ҡалмай йөрөү.

**һай йөҙөү** *нимәлә.* Үҙ шөғөлөңдө йәки башҡа берәй өлкәне аҙ белеү. *Ғөмүмән, Туркина агентствоға бухгалтер итеп иҫәп-хисап эшендә бик **һай йөҙгән** кешене ҡабул итә.* («Сов. Башҡ.») *Мәле менән үҙенең наҙанлығына, бигерәк тә инглиз телендә **һай йөҙөүенә** йәне үртәлә егеттең…* (Ф. Исхаҡова.)

**һайланған — һаҙға, осраған таҙға.** Кәләш йәки кейәүҙе һайланып йөрөп, йүнһеҙ кешегә тап булғанда әйтелә. *Үҙе кеүек бер тәүфиҡлы ғына шәфәғәтле булырҙай бала осраһа, ҡана ла һуң.*

*Һайлаған — һаҙға, осраған таҙға булып ҡуймаһа ярар ине...* (З. Ҡаҙаҡбаева.)

**һайлап алған кеүек (алғанмы ни).** Бик һәйбәт, бик шәп (*бер төр нәмәләр тураһында*).

**«һайт» тигәндә «тайт» тип тороу.** Һәр нәмәгә лә әҙер тороу (*бер аҙ кире баһа биргәндә әйтелә*). [*Ҡарт*:] *Һин үҙең дә, Ғаббас ҡусты, **һайт тигәндә тайт тип**, телефон шылтыраған һайын ат эйәрләп районға сапма.* (М. Тажи.)

**һаҡалды һыйпап ҡалыу.** Һемәйеп тороп ҡалыу.

**һаҡаллы сабый** *һөйл.* Үҙе оло йәштә булып та, аҡылы әҙ булған кешегә ҡарата мыҫҡыллап әйтелә. *Сәлимде ҡурҡытам тип, бүре булып олоп йөрөп, эттән тешләткәнһең бит сандырыңды. Их, **һаҡаллы сабый**.* (И. Ғиззәтуллин.) [*Аҙнабай*:] *Сабый ул, **һаҡаллы сабый**! Бер ни белмәй, күрмәй тороп, гәйбәтсе ҡатындар һүҙенә ҡарап, һөйгәнен ташлап китәме ни аҡыллы кеше*! (Ф. Әсәнов.) *Ә бит теге «Ҡорҙа...» унар йыл буйы йөрөгән **һаҡаллы сабыйҙар** күпме.* (М. Кәрим.)

**һаҡалы биленә еткән** *кемдең.* Йәше оло кешене кәмһетеберәк әйткәндә ҡулланыла. [*Хәмиҙә*] ***Һаҡалы биленә еткән** иренең һалдаттар араһында йөрөүен, үҙенең балалары менән бында яңғыҙ ҡалыуын уйлап, күңеле нескәрҙе.* (М. Ғафури.) — *Ул ни эшләп өйрәнсек булһын? **Һаҡалы биленә еткән** кешене ниңә мыҫҡыл итәһегеҙ, — тине* [*Сафура*]. (Р. Ғабдрахманов.)

**һалам аҫтынан ут йөротоү (төртөү).** Йәшерен рәүештә ғәйбәт, насар һүҙ ебәреп, кеше араһын боҙорға тырышыу.

**һаламға тотоноу*** *кальк.* Ниндәйҙер ауыр хәлдән сығырға тырышып, ышанысһыҙ ғына булған нәмәгә таяныу. *Береһе уның батырға әҙерләнгәндә **һаламға тотона**.* (И. Насыри.)

[*Рус телендәге «держаться за соломинку» берәмегенән.]

**һалҡын ҡан менән.** Тыныс рәүештә, ҡыҙмай ғына (*ниҙер башҡарыу, эшләү*). *Шундай тыныс, **һалҡын ҡан менән** әҙерлек бара. Окоптарҙан ҡырҡ-илле аҙым ситтән ҡараусы булһа, уларҙа йән әҫәре юҡ, тип уйлар ине.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**һалҡын ҡанлы.** Холҡо менән бик тыныс, ҡыҙмаҫ. *Секретарь кеше **һалҡын ҡанлы** булырға тейеш.* (Н. Мусин.)

**һалҡын ҡарау.** 1. Эшкә, бурысҡа яуапһыҙ мөнәсәбәттә булыу. 2. Нимәгәлер бик тыныс мөнәсәбәттә булыу.

**һалҡын һыу һипкән(дәй) шикелле (кеүек, һымаҡ).** Ҡапыл һиҫкәнеп китеүҙе белдергәндә ҡулланыла. *Гөлйөҙөм, өҫтөнә **һалҡын һыу һипкән шикелле**, ҡапыл өшөп ҡалтырай башланы.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**һалпы яҡҡа һалам ҡыҫтырыу.** Юрамал маҡтап, йөпләп алдау, яҡылыштырыу. *Был эш түгелме ни? **Һалпы яҡҡа һалам ҡыҫтырма**, яуап бир.* (Х. Ғиләжев.) [*Әҙһәм ҡарт үҫмерҙәрҙе*] *... ҡыҙыҡлы һүҙҙәре менән әүрәтеп, ҡайһы береһен маҡтап, **һалпы яғына һалам ҡыҫтырып**, үҙе тирәһендә эшләтә.* (Ж. Ке-

йекбаев.) *Ҡеүәтләнеләр, миңә ҡысҡырып, **һалпы яғына һалам ҡыҫтырып.*** (Т. Йосопов.)

**һалыу тамаҡ** *һөйл.* Артыҡ ауыҙ; ашҡа, ризыҡҡа дәғүә итеүсе.

**һанап бөткөһөҙ (бөтөрлөк түгел).** Бик күп, һаны юҡ. *Башҡортостан тәбиғәте әйтеп бөткөһөҙ матур, байлыҡтары уның **һанап бөтөргөһөҙ.*** («Сов. Башк.»)

*син.*: иҫәбе-хисабы юҡ.

*ант.*: бармаҡ менән һанарлыҡ.

**һан артынан ҡыуыу*** *кальк.* Сифатҡа иғтибар итмәй, ниҙелер күбәйтергә тырышыу. *Әгәр, әйтәйек, берәй механизатор, ашығып һәм **һан артынан ҡыуып,** насар эшләһә, уның эш хаҡының 30 проценты тотоп ҡалына.* («Сов. Башҡ.»)

[*Рус телендәге «гоняться за цифрами» берәмегенән.]

**һанға һуғыу (алыу)** *кемде, нимәне.* Үҙеңә тиң һанау, яҡшы баһалау; иҫәпкә алыу. — *Кит, шул өйөрлө бала-сағаны **һанға һуғып,** һөйләмәгеҙсе! — тип, Зәкиә ҡырт өҙгән кеше итте.* (Ф. Иҫәнголов.) *Шундай кеше беҙҙе **һанға алғанда,** беҙ ни нәмә менән эреләнә алайыҡ.* (Һ. Дәүләтшина.) **Һанға һуҡмау (алмау):** *Был ғәмһеҙ төйләгән, күрәһең, ата-әсәһен дә **һанға һуҡмай.*** (Ә. Вахитов.) *Әлеге бүрекле тағы һүҙгә керешә: — Һуң һин, малай, мосолман динен дә тотмағас, урыҫ динен дә **һанға алмағас,** кем булаһың инде?* (С. Агиш.)

**һап итеп төрөү.** Һәр эшкә, тәҡдимгә әҙер булыу.

**һары елек.** Бик ныҡлы, кослө. *Нисә әйтһәң дә, ит ашап, мул торған **һары елек** инде.* (Т. Хәйбуллин.)

**һарыу ҡайнау.** Ныҡ асыу килеү, ҡыҙышыу. [*Ҡәйүм*:] — *Әйткәндәй, Красиндар ғына бер ҙә риза түгел икән, һинең был ниәткә, **һарыуҙары** бик **ҡайнай,** ти.* (Ғ. Лоҡманов.) *Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, меҫкендәр бар әле донъяла, шуның өсөн **һарыу ҡайнай,** шуның өсөн йөрәк яна ла.* (Б. Бикбай.)

**һауанан алып һөйләү.** Юҡты бар итеп, яһап хәбәр сығарыу.

**һауыт-һаба шалтырау.** Ғаиләлә ығы-зығы, талаш-тартыш ҡалҡыу. *Тормош булғас, **һауыт-һаба шалтыраған** саҡтары ла була. Былдай ваҡытта инде берең әйткәндә, икенсең тынып ҡалырға кәрәк. Һис тә бер-береңде еңергә ынтылырға ярамай.* («Сов. Башҡ.») *Ауыл ирҙәренең тыу бейәләй һөйрәлеп донъя көткән ... бисәләре менән дә **һауыт-һаба шалтыратыуы** ишетелә.* (М. Әпсәләмов.)

**һеҙ тигәндә беҙ иҙәндә** *һөйл.* Кешегә мәрәкәләп түбәнселек белдергәндә әйтелә.

**һеләгәйе кипмәгән** *кемдең һөйл.* Һүҙ һөйләргә, фекер әйтергә йәш әле тигән мәғәнәлә кәмһетеберәк әйтелә, — *Тик тор, һинең эшең юҡ, **һеләгәйең кипмәгән** әле.* (Ғ. Ибраһимов.)

**һелә ҡөрөтөү** *диал.* Ялҡытыу, йонсотоу.

**һеләүһен уйнау.** Асыу килеп, сикә яныр-яныр китеү. *Хатта уның сикәһе буйлап **һеләүһен уйнап** ҡуйҙы.* (Х. Ғиләжев.)

**һепертке менән ҡыуыу.** Ҡабат әйләнеп килмәҫлек итеп, хурлыҡ менән ебәреү. — *Ул Иҫәнгилдинде сауҙа системаһынан* ***һепертке менән ҡыуырға*** *кәрәк! — тип ҡысҡырҙы* [*бераү*]. («Сов. Башҡ.»)

**һеркәһе һыу күтәрмәй** *кемдең.* Үпкәсел, үсексән. *Әсәйем дауам итте: — ... Ә һин артыҡ үҙ һүҙлеһең. Саҡ ҡына булһа,* ***һеркәң һыу күтәрмәй.*** (Я. Вәлиев.) *Иәш һалдаттың үпкәләүенә Рябчиков хатта кәйефләнеп тә китте: —* ***Һеркәң һыу күтәрмәй*** *икән. Зарар юҡ, гәрсел кеше яуҙа ла һынатмай ул...* (Ә. Хәкимов.) *Ерле юҡҡа ҡабарған,* ***һыу күтәрмәй һеркәһе.*** (Т. Йосопов.)

*син.*: тәртәһе ерек.

**һигеҙ күҙҙән бөлдөрөү.** Бөлгөнлөккә төшөрөү, ярлыға сығарыу.

**һин белгәнде киптереп элгән (сәйнәп төкөргән)** *һөйл.* Кемдеңдер яңылыҡ тип һанағанының баһаһын төшөрөү өсөн мыҫҡыл менән әйтелә. *Закир ҡарт оҙон бармағын юғары күтәреп янап ҡуйҙы. — Хәҙер беҙ* ***һин белгәнде киптереп элгән.*** (Ә. Вахитов.) *Шәрәфи* ***һин беләһен*** *әллә ҡасан белгән дә* ***киптереп,*** *талға* ***элгән.*** (Ғ. Әхмәтшин.)

**һин бел дә мин бел.** Сер итеп һаҡларға, таратмаҫҡа саҡырғанда әйтелә. [*Әһли:*] *Тик* ***һин бел дә мин бел.*** *Ҡарт кешегә сауабы булыр, бер кулдәклек тауар бүләк итермен.* (С. Кулибай.)

**һин дә мин.** Арыу уҡ, яҡшы ғына; ярарлыҡ. [*Йәнтүрә*] ***Һин дә мин*** *генә ине, Беҙгә тиң генә ине.* (Х. Ғиләжев.) *Сәлимә менән Ҡасим ...* ***һин дә мин*** *эшләп алдылар ҙа киттеләр.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Ҡара һин уны, комбайнерҙар, Әхәттең исемен белеп,* ***һин дә мин*** *һөйләшеп торалар.* (Р. Солтанғәрәев.)

**һин күр ҙә мин күр.** Бик тиҙ арала, йәһәт кенә (*күҙ алдынан юғалған, ҡасҡан кеше тураһында*). ... *Зәйнәп ҡарсыҡ тиҙ генә ишекте асып һыҙҙы.* ***Һин күр ҙә мин күр.*** *Урамға сыҡҡас та, күлдәк итәгенә баҫып, абына-абына йүгерә.* (Ш. Шәһәр.) *Татар абзый ошо һүҙҙән һуң аттарын борҙо ла,* ***һин күр ҙә мин күр,*** *тоҡойоп сығып китте.* (Б. Бикбай.)

*син.*: ай күрҙе, ҡояш алды; аяғы ерғә теймәй.

*ант.*: бер аяғын атлағансы, икенсеһен эт ашай.

**һин дә, мин дә, ибн Әмин (Мөхәмәтәмин).** Күмәк түгеллекте, бергәлекте белдергәндә әйтелә.

*син.*: бармаҡ менән һанарлыҡ.

**һин тигәндә мин иҙәндә (төпһеҙ ҡоҙоҡҡа тошөргә әҙер)** *һөйл.* Ярҙамға килергә әҙер тороуҙы белдереп, шаяртҡанда әйтелә (*асылда, әҙер булмауы ла мөмкин*).

**һис һүҙһеҙ (шикһеҙ).** Мотлаҡ, икеләнеүһеҙ (*була, башҡарыла торған эш-хәл тураһында*). *Яңылыҡ булғас, уны,* ***һис шикһеҙ,*** *ҡабул итергә кәрәк.* (С. Агиш.)

**һис юғында (булмаһа).** Иң кәмендә, бер ҙә мөмкин булмағанда, юҡ тигәндә (*күпте өмөтләнеп тә аҙға риза булғанды бел-*

*дергәндә әйтелә).* ***Һис булмаһа,*** *бер тоҡом ҡалдырам тип, [Ҡарағөләмбәт] бер ҡыҙҙы алды үҙе менән бергә.* («Бабсаҡ менән Күсәк».)

**һонолоп һыу эсмәү.** Бер нәмә лә эшләмәй тик ятыу. *Ныязғол хәҙер ҡайһылай булып китте:* ***һонолоп һыу ҙа эсмәй.*** (Һ. Дәүләтшина.)

*син.*: ҡыл да ҡыбырлатмау.

**һөйөнсөһөнә ҡолағы** *һөйл.* Һөйөнсө һораған кешеғә бүләк урынына шаярып әйтелә *(гәҙәттә, һораған һөйөнсөһө әһәмиәтһеҙ булғанда).*

**һөйәк йомшартыу.** Әҙ ғенә араҡы эсеп алыу. *Минлеғәли менән Фәтих аш тәме өсөн аҙыраҡ* ***һөйәк йомшартып*** *алдылар.* (Х. Ғиләжев.)

**һөйәккә үтеү.** Бик ныҡ өшөү.

**һөйәк сәйнәү.** Кемдеңдер ғәйбәтен һатыу.

**һөйәк таралып барыу.** Бик ныҡ арыу, хәлдән тайыу, йонсоу. *Шул тиклем арыным бөгөн,* ***һөйәктәрем таралып бара.*** (Һөйл.)

**һөлөк кеүек (һыу һөлогө кеүек).** Буй-һынға бик матур; һомғол, төҙөк *(кешеғә, атҡа ҡарата әйтелә). Тыуған ерҙәрен ташлап, тәү киткән сағында ул* ***һөлөк кеүек*** *егет ине.* (Н. Нәжми.) *Унан килеп, Аллаяр бер ҡыш эсендә* ***һөлөк кеүек*** *ике-өс атты яндыра.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**һөмһөр (һөмор, һорөм) ҡойолоу.** Асыуҙан, тәрән кисерештән йөҙ төҫө ҡалмау, ҡарайыу. *Ҡаръяуҙы ҡаштарын емереп,* ***һөмһөрө ҡойолоп,*** *ротаға ҡайтып ингәндә, сәғәт 12-не һуҡҡайны инде.* (Н. Мусин.) *Ауыл кешеләренең йөҙө яҡтыра. Ә байҙарҙың* ***һөмһөрө ҡойолоп,*** *ҡарайып ҡала йөҙө.* (Ә. Вахитов.) ***Һөмөрөн ҡойоп,*** *тауыш-тынһыҙ ғына Касьяновҡа эйәреп килде Наҡышев ...* (Я. Хамматов.) *Өйгә ҡайтып инмәйһең, етмәһә, үҙеңдең йөҙөң асылмай,* ***һөрөмөң ҡойолоп*** *тик йөрөй.* (З. Биишева.)

**һөрән һалыу.** Бик ҡаты ҡысҡырыу, һөрәнләү. *Күрәм: эшкә тора республикам,* ***һөрән һалды*** *бына гудоктар.* (Ғ. Сәләм.)

**һөттән аҡ, һыуҙан пак.** Бик таҙа, намыҫлы *(күберәк, киреһенсә, ғәйепле булған кешеғә ҡарата мыҫҡыллап әйтелә). — Ниңә һеҙ мине бюрола аҡларға теләнегеҙ? Күрәһегеҙ, ашлыҡ һуғыу, иген тапшырыу һуҙыла, ә һеҙ, минән бөтә яуаплылыҡты үҙ өҫтөгөҙгә алып,* ***һөттән аҡ, һыуҙан пак*** *итеп күрһәтергә теләйһегеҙ.* (Х. Ғиләжев.)

**һот өҫтондәге ҡаймаҡ кеүек.** Бик рәхәт кенә, байлыҡ-муллыҡта йәшәгән кешеғә ҡарата әйтелә. *Минең уйымды белһә, әсәйем йәберһенер ине; «****Һөт өҫтондәге ҡаймаҡ кеүек*** *үҫтең бит!» тиер ине.* (З. Биишева.)

**һуған баҙары хәбәре.** Буш һүҙ, сафсата. *Ҡәҙерле һәм рәсми бер газетала яҙыу өсөн* ***һуған баҙары хәбәрҙәре*** *ярамағанды ҡарт журналист Сәләхкә белергә кәрәк ине.* (Ш. Хөҙайбирҙин.)

**һуған һөймәҫ.** Бер нәмәне лә оҡшатмаған, үҙ һүҙле *(кеше). Атай булған кеше — **һуған һөймәҫ** бер суфый, минең комсомоллыҡты ене кеүек күрә.* (С. Ағиш.)

**һуған һурпаһы эсеү.** Этлек күреү, яфаланыу. *Ҡартайғанда, саҡ донъя төҙө күрә башлағанда, мин шул тыңлауһыҙҙан малды тәләф иттерәйемме ни? Бер аҙ **һуған һурпаһы эсһен.** Әллә ҡайҙа китмәҫ, ҡайтып килер әле...* (Һ. Дәүләтшина.)

**һуғыш суҡмары.** 1. Һуғышырға бик әүәҫ кеше, һуғышырға ҡулы ҡысып торған. *Тимер ине **һуғыш суҡмары,** кемде күрһә — шуны урамда, көсө етһә, тотоп туҡманы.* (Н. Нәжми.)

2. Илдәр араһында һуғыш сығара торған дәүләт. *... Американың **һуғыш суҡмарҙары** иң тупаҫ һәм асыҡтан-асыҡ колониализм сәйәсәте үткәрә.* («Сов. Башҡ.»)

**һуйған да (һуйып) ҡаплаған.** Бик оҡшаш, ныҡ оҡшаған. *Зыязетдинов мулла! ... Шул үҙе бит Хоҙайбирҙин!.. **Һуйған да ҡаплаған** ...* (Ф. Иҫәнғолов.) *Ҡыҙҙы әйтәм, хас мин. **Һуйған да ҡаплаған.*** (Р. Низамов.) *Мырҙагилде **һуйып ҡаплаған** шикелле атаһына, Ҡотлогилдегә оҡшаған.* (Ж. Кейекбаев.)

*син.*: ике тамсы һыу кеүек.

**һуҡты ла күпте.** Бер эштең, теләктең артынан уҡ үтәлешен талап иткәндә ризаһыҙлыҡ белдереп әйтелә. — *Әйе, һиңә, **һуҡты ла күпте,** ти. Һинең йомошоң артынан йүгерәһем ҡалған.* (Һөйл.)

**һуҡыр барнау*.** Түбән ҡиммәтле аҡса. *Әй, ҡоҙаның бүләге, ошо микән күргәне? Етмешлек тип көткән булһаҡ, һуҡыр **барнау биргәне.*** (Таҡмаҡтан.)

[***Барнау** — боронғо егерме тинлек аҡса.]

**<һуҡыр*> бер тин тормай.** Хаҡы, баһаһы бик түбән. *Ул күпелағы өсәү кеүектәр осраштыра шул әле. Улар өсөн һинең китабың **һуҡыр бер тин.*** (Н. Мусин.) *...Тормошон ваҡ зауыҡтар менән бушҡа үткәргән кеше үҙенең **һуҡыр тингә лә тормаҫ** ғүмере өсөн дер ҡалтырар.* («Сов. Башҡ.») **Һуҡыр бер тин юҡ:** *Юлға аҡса кәрәк бит, ә минең кеҫәмдә **һуҡыр бер тин дә юҡ.*** (Ғ. Ғүмәр.)

[***Һуҡыр тин** — тотонорға ярамаған, тишелгән аҡса.]

**һуҡыр күрәҙә кәрәкме ни (кәрәкмәй).** Былай ҙа ап-асыҡ булған хәлде аңламай йәки бутап маташҡанда әйтелә. — *Ни эшләп уртаҡ булһын, тәтене Ваһап ҡарт ҡорған, ә Әхмәҙи һелтәгән, уға **һуҡыр күрәҙә кәрәкме ни.*** (Ж. Кейекбаев.) *Ҡайҙарҙан ғына килмәне тикшеренеүселәр — районда да, Өфөнән дә. Бында инде **һуҡыр күрәҙә лә кәрәкмәй,** ус алғандар.* (Р. Солтанғәрәев.)

**һуҡыр тауыҡ** *һөйл.* Бер ни аңламаған, белмәгән, аңраҡ кешегә мыҫҡыл менән әйтелә. *[Бәрхеямал әбей:] Юҡ, юҡ! Һандыҡты танымаҫҡа әллә! **Һуҡыр тауыҡ** түгел бит мин.* (Ш. Янбаев.) ***Һуҡыр тауыҡҡа** барыһы ла бойҙай.* (Мәҡәл.)

**һул аяҡтан (аяҡ менән) тороу (инеү).** Кәйеф булмауға, эш уңмауға ҡарата әйтелә. *Күңелгә ауыр, һалҡын, ҡараңғы ... Шуларҙы уйлап, кисә мин өйгә нисектер* ***һул аяҡ менән*** *ҡайтып керҙем.* (Р. Ғарипов.)

**һуңғы тамсы ҡанға тиклем (ҡан ҡалғанса).** Ҙур фиҙаҡәрлек менән, йәнде-тәнде аямай *(һуғышыу, көрәшеү). Бына ошо ике шиғыр башҡорт егеттәренең ... ил азатлығы өсөн* ***һуңғы тамсы ҡандарына тиклем*** *көрәшергә әҙер тороуҙарын һөйләмәйме ни!* («Сов. Башҡ.») *[Алпарский:] ... Һеҙҙең алда ант бирәм.* ***Һуңғы ҡаныма тиклем*** *көрәшәсәкмен, ғүмеремде уның эше өсөн дауам итеүгә арнаясаҡмын.* (Ф. Аҡбулатова.)

**һуңғы сиктә.** Башҡа бер сара ла ҡалмағанда *(ниҙер эшләргә тәүәккәлләүҙе белдерә.)*

**һуш китеү.** 1. Иҫтән яҙыу, иҫ китеү. *Шунда күптәр тетрәне ҡурҡып, шашып, Ауҙы ҡайһы* ***һуш китеп,*** *төҫтәр ҡасып.* (Ш. Бабич.)

2. Аптырау, ғәжәпкә ҡалыу.

**һушын алыу** *кемдең.* 1. Аптыратыу. *Хөсәйен, малай-шалайҙың ғына түгел, өлкәндәрҙең дә* ***һушын алып,*** *ауыл буйлап остан осҡа йөрөнө лә бер көндө шул уҡ арбаһы менән ауылдан сығып гәйеп булды.* (Ф. Иҫәнғолов.)

2. Ҡурҡытыу, ҡотон алыу.

**һүҙ алмашыу (алышыу).** Һөйләшеү, фекер алышыу. *[Сәлмән] Мәндемгә килә лә текә ярҙан аяҡтарын һалындырып ултыра. Минең менән өҙөк-йыртыҡ ҡына* ***һүҙ алмаша.*** (Ә. Вахитов.) *Опарин менән йәнә ике ҡарт эшсе бар ине. Уларҙың, һирәкһаяҡ* ***һүҙ алышын,*** *һөйләшеүҙәрен Сөнәгәт тыңлап барҙы...* (Ж. Кейекбаев.)

**һүҙ асыу.** Хәбәр башлау, һөйләшеп алып китеү. ... *Йәноҙаҡ менән теге хәбәрҙәр тураһында* ***һүҙ асырға*** *... кәрәк.* (Ғ. Дәүләтшин.)

**һүҙ беркетеү.** Һөйләшеп килешеү, ниҙер эшләргә һөйләшеп ҡуйыу. *Бында йыйылған кешеләрҙең был йыйылышы һуңғы ине. Бында улар һуңғы тапҡыр* ***һүҙ беркетеү*** *өсөн йыйылғайнылар.* (Ғ. Дәүләтшин.)

**һүҙ биреү** *кемгә.* Ниҙер эшләргә, башҡарып сығырға вәғәҙә итеү, өҫтөңә алыуыңды әйтеү. *Күпме эшсе, күпме колхозсы заводтарҙа һәм колхоз баҫыуҙарында, фронттағы яҡташтары һымаҡ, тылда ла иң һыҙғанып эшләргә* ***һүҙ бирмәне.*** («Сов. Башҡ.») **Һүҙ бирешеү:** *Ҡасандыр беҙ ошо тәрәнлектә ... әллә ниндәй* ***һүҙҙәр ҙә бирешкәйнек.*** (Ә. Вахитов.)

**һүҙ буткаһы.** Мәғәнәһе аҙ булған хәбәр, яҙма; күп һүҙлелек. *Һәр бер* ***һүҙ буҡкаһы*** *әҫәр булып бөтмәй бит әле ул.* (К. Әхмәтйәнов.) *[Старателдәр] «Беҙ* ***һүҙ буҡкаһына*** *туйҙыҡ, һин уҡыған кеше, беҙгә һәйбәт жила табырға ярҙам ит», — тиҙәр.* (Ә. Вахитов.) *Ярай,* ***һүҙ буҡкаһы*** *тамаҡ туйҙырмай.* (Я. Вәлиев.)

**һүҙгә аптырамау**. Хәбәргә, һүҙ һөйләүгә бик оҫта булыу. *Былай ҡарап тороуға бәләкәйерәк булған Сәлим тигән шәкерттең ҡыйыулығына һәм **һүҙгә аптырамауына** һоҡлана инек.* (М. Ғафури.)

*син.*: теле телгә теймәү (йоҡмау).

*ант.*: ауыҙына таш ҡапҡан, ауыҙына һыу уртлаған.

**һүҙгә (хәбәргә) батыу**. Донъяны онотоп, оҙон хәбәргә төшөп китеү. *Ике ҡатын көн дә, күнәктәренә алмалар тултырып сығып, иң матур, иң ҡыҙылдарын сеүәтәләренә өйөп ултыралар ҙа **хәбәргә баталар**.* (Р. Солтангәрәев.)

**һүҙгә бирелеү**. Онотолоп һөйләшеү.

... **һүҙгә етеү**. Күп итеп насар һүҙҙәр әйтеп ташлау, орошоу. *Райкомға барып булмай, Шәмиғолов: «Беҙ иҫкәрттек бит», — тиәсәк, йөҙ **һүҙгә етәсәк**.* (Ә. Вәли.)

**һүҙгә килешеү**. Әрләшеү, тиргәшеү. *Бөгөн иртәнсәк ул, ҡайныма кире ҡағыу тураһында әйтеп ҡарайым тигәнсә, арыу уҡ **һүҙгә килешеп алған**.* (Һ. Дәүләтшина.) *Мозафар, Сабира апай менән бик ҡаты **һүҙгә килешкәс**, былтыр йәй ғаиләһен дә, ауылды ла бөтөнләй ташлап сығып киткән.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**һүҙҙе елгә ташлау (осороу)**. Үтмәҫтәй һүҙҙе, тормошҡа ашмаҫтай вәғәҙәне биреү. *Гәүһәр Фәйзуллина ... биргән **һүҙен елгә ташлай** торғандарҙан түгел.* («Сов. Башҡ.»)

**һүҙҙе икенсегә бороу**. Хәбәрҙең барышын үҙгәртеп ебәреү, фекер ебен алмаштырыу. *Ҡолсобай **һүҙҙе икенсегә борҙо**.* (Я. Хамматов.)

**һүҙҙе йығыу**. Кешенең әйткәнен, үтенесен иҫәпкә алмау.

**һүҙҙе кире алыу**. Әйткән хәбәрҙән баш тартыу.

**һүҙҙе һатып алмай**. Һүҙгә, хәбәргә бик оҫта.

*син.*: теле телгә йоҡмай.

**һүҙҙән ҡайтыу**. Әйткән һүҙеңдән кире дүнеү, һүҙеңде тотмау.

**һүҙҙә тороу**. Биргән вәғәҙәңде үтәү, әйткәнеңде башҡарып сығыу. *Хәтмулла ағай **һүҙендә торҙо**.* (Д. Исламов.) *— Улай булһа, әйҙәгеҙ, бисәләр, — тип күнәген алды Зарифа, — яңы начальникты һынап ҡарайыҡ әле, **һүҙендә торормо** икән.* (Н. Мусин.)

**һүҙен аяҡ аҫтына һалыу** *кемдең*. Һөйләгән хәбәрен иҫәпкә алмау, кәңәшен тотмау. *[Хәжәр:] Минең Дауытым боҙоҡ түгел, **һүҙемде аяҡ аҫтына һалып**, үҙ белдеге менән өйләнмәҫ.* (Ш. Янбаев.)

**һүҙен ерҙә ҡалдырыу** *кемдең*. Әйткән һүҙҙе үтәргә юл ҡуймау. *[Ныязғол:] Иә, хәҙрәт, эш һиндә инде ... Һин әйткәндәй, китапсалай алып, берәй яйын табайыҡ инде. Ир **һүҙен ерҙә ҡалдырма**.* (Һ. Дәүләтшина.)

**һүҙен <ергә> йығыу** *кемдең*. Кеше әйткәндең киреһен эшләү, тыңламау, һорауын үтәмәү. *Бюро ағзалары иһә быны яҡшы беләләр һәм Иҫәнбирҙиндең **һүҙен йыҡмаҫҡа** тырышалар.* (Ә. Вәли.) *Тәүҙә остазының **һүҙен йыға алмай** тыйылып йөрөгән*

*Аҡмулла сәсәндәрҙе тыңлап ултыра-ултыра ла, ярһыуын баҫа алмай, уртаға атлай.* (Ә. Вахитов.) *Ҡарт та йәш бисәһенең **һүҙен йыҡмаған**, ҡыҙҙы урманға алып киткән.* (Әкиәттән.)

**Һүҙенән сығыу** *кемдең.* Биргән кәңәшен, йүнәлешен тотмау, икенсе төрлө эшләү.

**Һүҙен элеп алыу** *кемдең.* Кемдеңдер һөйләгән хәбәрен ялғап алып китеү.

**Һүҙен ятҡа һуғыу** *кемдең.* Һүҙен тыңламау, ҡабул итмәү.

**Һүҙ ишетеү**. Тәнҡитләнеү, әрләнеү. *Хангильдин, район кәңәшмәләрендә **һүҙ ишетеп**, әрләнеп ҡайттымы, енен сәсеп Ғафарға йәбешә, бөтә гәйепте уның өҫтөнә ауҙара.* (Н. Мусин.)

**Һүҙ йөрөтөү**. 1. Ғәйбәт һөйләү, хәбәр ебәреү. ***Һүҙ йөрөтөү** минең эшем түгел, әле тик һүҙ ыңғай ғына әйтеп китәм.* (Һ. Дәүләтшина.)

2. Һүҙ алып барыу, хәбәр һөйләү. *Илдәр яҙмышы, донъя яҙмышы тураһында **һүҙ йөрөтөү** ... хәҙерге поэзияның дөйөм рухына һеңеште...* (Р. Бикбаев.)

**Һүҙ көрәштереү** *кем менән.* Бәхәсләшеү, әйткәненә ҡаршы төшөү. *[Байғужаға] ... берәү ҙә ауыр һүҙ әйтмәй, уның менән бер кем дә **һүҙ көрәштермәй** ...* (Д. Юлтый.) *Ҡулын ҡаушырып һаман да бер ҡиәфәттә торған Ниғмәтулла уның менән **һүҙ көрәштермәне**.* (Я. Хамматов.)

**Һүҙ күтәреү**. Әйткәнде үпкәләмәй ҡабул итеү, тәнҡиткә үсекмәү *(күберәк юҡлыҡ формаһында ҡулланыла). ... Иә, ниңә әле шулай туҙып киттең, ҡайһылай **һүҙ күтәрмәҫ** нәмәкәй.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**Һүҙ ҡеүәһе**. Һөйләү оҫталығы. *[Һаубикә:] Хоҙай тәғәлә **һүҙ ҡеүәһе** бирмәгәс, ни эшләйһең инде. Матур итеп һөйләп биреп булмай инде.* (Ә. Атнабаев.)

**Һүҙ ҡуйыртыу**. Ни хаҡындалыр күп һөйләү, иғтибарҙы йүнәлтеү. *Ҡарсыҡ менән **һүҙҙе** артыҡ **ҡуйыртмай**, ары китәбеҙ.* (Д. Юлтый.) *Йәштәрҙең үткән мираҫҡа, әҙәби процесҡа, теорияға ҡырын ҡарағанын йыш осратырға мөмкин. Ана шуның өсөн дә бөгөн әҙәби-художестволы культура хаҡында **һүҙ ҡуйыртҡы** килә.* (Ә. Вахитов.)

**Һүҙ ҡуйышыу (беркетеү)**. Һөйләшеп, бер һүҙгә килеү, бер үк нәмә эшләргә булыу. ... *Егеттәрҙең **һүҙ ҡуйышҡан**, эшкә бер урынға китергә тип йөрөгән ҡыҙҙары бар, ә минең һаман булһа берәй ҡыҙ менән таныша алғаным юҡ.* (Н. Мусин.)

**Һүҙ ҡушыу (ҡатыу)** *кемгә.* Өндәшеп һүҙ әйтеү, хәбәр биреү. *Гөлйөҙөм башта ятһыныбыраҡ ҡараны, башлап **һүҙ ҡушырға** ҡыйманы.* (Ф. Иҫәнғолов.) — *Онотмаң, килеп йөрөң, — тип, өләсәйҙәр **һүҙ ҡата** ...* (С. Ғәбиҙуллин.)

**Һүҙ ҡыҫтырыу**. Һөйләшеүгә, хәбәргә ҡушылып маташыу. — ... *Фәрхиә ул, — тип **һүҙ ҡыҫтырҙы** Йәмғи.* (Х. Ғиләжев.) ... *Байбикә ҡала театрҙары, актерҙар тураһында **һүҙ ҡыҫтырғылап** ҡуя.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**һүҙ өсөн күршегә инмәй.** Һүҙгә оҫта. *Математика менән физиканы уҡытһа ла, Саимәгә **һүҙ өсөн күршегә инәһе** юҡ. Ғүмер буйы халыҡ араһында эшләү ... уның телен шымартҡан.* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: һүҙҙе һатып алмай.

**һүҙ өҫкә сығыу.** 1. Әйткәне дөрөҫкә килеү, дөрөҫләнеү. — *Ә-ә-ә, кемдең **һүҙе өҫкә сыҡты**.* (Я. Хамматов.)

2. Бәхәстә өҫтөнлөк алыу, кемделер еңеү. *Әҙһәм ҡарт һаман үҙенең **һүҙен өҫкә сығарырға** тырышты...* (Ж. Кейекбаев.)

**һүҙ ташлау.** Ҡапыл ғына ниҙер әйтеп ебәреү. *Боролоп һүҙ ташлау.*

**һүҙ тейеү.** Шелтә ишетеү.

**һүҙ тейҙереү** *кемгә, нимәгә.* Орошоп, кәмһетеп ниҙер әйтеү. *«Ҡыҙың бала-сағаны шайтан уйынына ҡоторта», — тип Йәмиләнең атаһына **һүҙ тейҙерәләр**.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**һүҙ төйнәү.** Һөйләшеп килешеү, бер фекергә килеү. *Беҙҙең ауыл Мәүлет ағай менән мәслихәтләшеп, бер төрлө **һүҙ төйнәгәйнек** инде.* (Ғ. Дәүләтшин.)

**һүҙ уйнатыу.** Әйтелеше оҡшаш булған төрлө мәғәнәле һүҙҙәрҙе бергә килтереп һөйләү.

**һүҙ үтеү** *кемгә, нимәгә.* Үтенесеңде, һорауыңды башҡарта алыу. *Һүҙ бирҙеңме, уны һәр саҡ теүәл үтә. Үтәгәндең һәр кемгә лә **һүҙе үтә**.* (Н. Иҙелбай.)

**һүҙ эйәрә һүҙ сығыу (китеү).** Һөйләшеү ебе өҙөлмәү, әңгәмә туҡтамау. ***Һүҙ эйәрә һүҙ сығып**, ете төн уртаһына хәтлем ултырғанмын ҡарт уҡытыусы квартираһында.* («Сов. Башҡ.»)

**һүҙ юҡта һүҙ булһын: ата ҡаҙың күкәй һаламы** *һөйл.* Һөйләшмәй тик тормаҫ өсөн, еңелсә һүҙ һөйләгән кешегә мәрәкәләп әйтелә. *Быны менән ни әйтергә теләгәндер — билгеһеҙ. **Һүҙ юҡта һүҙ булһын, ата ҡаҙың күккәй һаламы**, тигән кеүек булып сыҡты был.* (Р. Ғарипов.)

**һыйлағанда һыу булһа ла эс.** Әҙ булһа ла күп күреп, ашап-эс тигәндә әйтелә. — *Миңә лә бер стакан сәй яһа әле, — тине ул [Ғиндулла]. — Әйҙә, **һыйлағанда һыу булһа ла эс**.* (Р. Сабит.)

**һыҙыҡ өҫтөнә алыу.** Айырым иғтибар менән, айырып яҙыу, әйтеү. *[Гармун образы] Фәтхи һалдаттың фажиғәһен **һыҙыҡ өҫтөнә ала**.* (Ә. Вахитов.) *[Тикшеренеүсе] Ҡобағош сәсәндең ижадын халыҡ үҙ күңелендә һаҡлағанлығын **һыҙыҡ өҫтөнә ала**.* («Сов. Башҡ.»)

**һыйыр ҡойроғо тейеү (инеү).** Аҙыҡ-түлеккә һөт, май-ҡаймаҡ өҫтәлеү.

**һыйыр мөгөҙөнә элерлек** [нәмә юҡ]. Өйөндә бер нәмәһе лә булмағанды, үтә ярлылыҡты билдәләгәндә әйтелә. *Өйөндә **һыйыр мөгөҙөнә элер** нәмәһе, йорт малынан бесәйе лә юҡ. Ҡатыны тиф менән ята.* (Һ. Дәүләтшина.)

**һылыулыҡ менән һыу буйлап булмау.** Тормошта икенсе нәмә кәрәк. *Заһирҙың сабырлығы оҙаҡҡа барманы.* ***Һылыулығың менән һыу буйлап булмай*** *...* (Л. Яҡшыбаева.)

**һын биреү.** Буйһоноу, бирелеү. *[Һәүбән:] Гөбөрләкәй олпатлы атаңа* ***һын бирмәмен.*** (Эпостан.)

**һын китеү.** Иҫте юғалтыу. *Бынан дүрт көн элек Варшава вокзалында вагондан рельсҡа йығылып төшкәйнем. Уң аяҡтың енсеге тура килде. Ул ныҡ ауырта икән:* ***һындарым китеп*** *ятты.* (Д. Юлтый.)

**һын ҡатыу (ҡороу).** Аптырауҙан ҡатып ҡалыу. *Юҡҡа* ***һының ҡоромаһын.*** ▬ *Ул баҫҡан урынында ҡуҙғалмай,* ***һыны ҡатып*** *ҡалды.* (Һ. Дәүләтшина.)

**һын теймәү.** Оҡшатмау.

**һыныҡҡа һылтау <тишеккә ямау> булыу.** Сәбәп юҡтан сәбәп табылыу, юҡты сәбәп итеү. *Ә Мөхиттең әсәһен дирекцияға саҡыртһалар, уға* ***һыныҡҡа һылтау, тишеккә ямау булыр*** *ҙа ҡуйыр ине. Ул былай ҙа Мөхитте күрә алмай.* (К. Кинйәбулатова.) ***Һыныҡҡа һылтау*** *табылып тора бит инде. Тора-бара ҡоҙағыйҙар бер-береһенең ҡылығынан ғына түгел, әйткән һүҙенән дә ғәйеп эҙләй башлай.* («Сов. Башҡ.»)

**һыпырып алғандай (ташлағандай) булыу (бөтөү).** Ҡапыл ғына эҙһеҙ юҡҡа сығыу, бөтөү. *Докторҙың яғымлылығы,* ***ҡул менән һыпырып алғандай,*** *шунда уҡ юҡ булды...* (Б. Бикбай.)

**һыр бирмәү.** 1. Бирешмәү, хәл-торошоң ауыр булһа ла үҙеңдә ғорур тотоу. *Хәйрулла түҙҙе,* ***һыр бирмәне.*** *Иң аҙаҡтан ғына һүҙ алды.* (М. Хәйҙәров.)

2. Ҡалышмау *(ярышта һ. б.). «Урал» колхозының механизаторҙары ла* ***һыр бирмәй.*** («Сов. Башҡ.»)

**һырға һабағы.** Өйләнәсәк, килен итеп аласаҡ ҡыҙға алдан бирелгән бүләк йәки аҡса. *Беҙ Арыҫландың атаһы менән балалар бәләкәй саҡта уҡ ҡоҙа булыштыҡ. Зөлхизә менән Арыҫлан* ***һырға һабағы*** *алмаштылар.* (Ә. Харисов.) *[Еңгәм:] Ул ҡарттың бына тигән еткән, матур улы бар. Ул һиңә, улай булғас,* ***һырға һабағы*** *биргән бит, — тине. Мин бала кеше [тәңкәне] алдым да түшемә таҡтым.* (Һ. Дәүләтшина.)

**һырт биреү.** 1. Арт менән боролоу. ... *Һине күҙемә күренмәһен, тупһама аяҡ баҫмаһын, тип* ***һырт биреп*** *тора ине әле ул [Ныязғол].* (Һ. Дәүләтшина.)

2. Ҡасыу. *[Сабырғол:] французлар* ***һырт бирә*** *башлағандар икән.* (Б. Бикбай.)

*син.*: үксә күтәреү, табан ялтыратыу, ҡойроҡто һыртҡа һалыу, ҡойроҡто төрөү.

**һырт ҡабарыу.** Асыу килеү, ҡыҙышыу. *«Һин ниңә һуң шундай?» — тиһәң,* ***ҡабара һырты.*** *Шалтырауыҡ шул ... Нишләйһең, ярты ҡап шырпы.* («Һәнәк».)

**һырт ҡайышын алыу** *кемдең.* Туҡмау. — *Әйҙә, киттек, малай. Үмәр олатайым ҡайтып килһә,* ***һырт ҡайышыбыҙҙы алыр,*** *— тине Айбулат.* (Һ. Дәүләтшина.)

*син.*: ҡабырғаһын һанау.

**һырттан һыйпау.** Ыңғайына тороу, йәлләү. ***Һырттан һыйпау*** *тигәндә, иренә ҡуштанлыҡҡа тигәндә, аллаһыу! Ә саҡ ҡына бер нәмә булдымы, төймәне лә дөйәләй яһап, иренә ошаҡлап бара.* (Һ. Дәүләтшина.)

**һыу буйы** *һөйл.* Бик оҙон. *Һыу буйы хат яҙыу.* ▬ *Зөбәржәттең күңелен күтәреү ниәте менән яҙҙы бит ул шулай* ***һыу буйы*** *оҙонлоғо итеп.* (М. Әпсәләмов.)

**һыуға батҡандай (кеүек, һымаҡ, шикелле) булыу (юғалыу, юҡ булыу).** Күҙ алдынан китеү, бөтөнләй күренмәҫ булыу. — *Ҡола байталың һаман табылманымы шул? — тине Усман ҡарт. — Юҡ,* ***һыуға батҡан һымаҡ юғалды*** *ла ҡуйҙы, — тине Әхмәҙи, көрһөнөп.* (Ж. Кейекбаев.) *Тауыш ҡупты, ығы-зығы. Сәғүрә* ***һыуға батҡандай*** *юҡ та юҡ. Аптырашып бөттөләр.* (Д. Бүләков.)

**һыуға батҡандай.** Эҙһеҙ-хәбәрһеҙ ҡапыл юғалыу.

**һыуға ташлаған (ырғытҡан) таш һымаҡ (шикелле, кеүек) юғалыу (батыу).** Кире ҡайтмаҫ булыу, ерегеү. *Ҡыҙҙы биргәс-биргәс, ер аяғы ер башы ергә бир ҙә шунда, барған ерендә,* ***һыуға ташлаған таш шикелле батһын*** *да ҡуйһын ул.* (Ж. Кейекбаев.)

**һыуға төшкән тауыҡ (сысҡан) кеүек [булыу].** Меҫкен хәлгә ҡалыу, бик йәл булып күренеү. *Кисә генә күкрәк киреп, маһайып йөрөгән арыҫландай егет бөгөн* ***һыуға төшкән тауыҡ кеүек*** *булып ҡалған.* («Сов. Башҡ.»)

**һыуға (һыу төбөнә) һалыу** *нимәне.* Бушҡа ебәреү, әрәмғә сығарыу *(аҡса, мал тураһында). ... Аҡшар битле кеше һүҙгә ҡыҫылды: — Мин һиңә аҡса биреп торғас та, уны шунда уҡ* ***һыуға һалдың.*** (Ф. Иҫәнғолов.) *Баш инженерҙың выжданын 9 мең һум аҡсаның* ***һыуға һалыныуы*** борсоно борсоуын, әммә *яҙмыштан уҙмыш юҡ ине.* («Сов. Башҡ.») *... Сейсмик разведка яһарға маташыу — дәүләт аҡсаһын* ***һыу төбөнә һалыу*** *менән бер...* (Ш. Янбаев.)

*син.*: елгә осороу.

**һыуҙан ҡоро сығыу.** Ҡылған ғәйептән, яҙыҡ эштән яза алмай ҡотолоу *(хәйлә, мәкер, әшнәлек арҡаһында). Булған-булған инде, эләктем, хәҙер* ***һыуҙан ҡоро сығыу*** *яғын ҡарарға кәрәк.* (Б. Бикбай.) *Дөрөҫлөктө асмай тороп,* ***һыуҙан ҡоро сыға*** *алмаҫһың.* (Н. Хафизов.) *Һуғышҡа тиклем шахта [Наҡышевтың] ғәйебе менән емерелдеме? Емерелде. Ә ул* ***һыуҙан ҡоро сыҡты.*** (Я. Хамматов.)

**һыу кеүек** [эсеү, белеү]. Үҙеңдеке булмаған телде бик яҡшы белеү. *... Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев тигән уҡыған кеше Иомран ауылынан сыҡҡан икән, ике телде лә* ***һыу кеүек эсә*** *икән ...* (С. Ағиш.) *Биш йыл аҙ ғүмер түгел, ул инде руссаны* ***һыу кеүек***

*эсә башлай.* (Б. Бикбай.) ... *Сыуаш Тимофей башҡортсаны **һыу кеүек** эсә икән, бында быға бер кем дә ғәжәпләнмәй.* («Сов. Башҡ.»)

2. Ниҙеңдер йөкмәткеһен бик яҡыны белеү, яттан һөйләү. *Ауыл мәктәбендә ике ҡыш уҡығандан һуң, мин «Әфтиәк»те, «Мөхәмәдиә»не **һыу кеүек** эсә торғайным.* (Р. Ниғмәти.)

**һыу кеүек** [түгеү, тотоноу]. Аҡсаны, малды әрәм-шәрәм итеү, туҙҙырыу. *[Хәкимов] уңманы малайҙарҙан: эскегә һабыштылар, бисә-сәсә менән сыуалдылар, аҡсаны **һыу кеүек** түктеләр.* (Б. Бикбай.) *Хәйер, бында аҡсаны **һыу кеүек** тотоналар.* («Сов. Башҡ.»)

**һыу ҡапҡандай (уртлағандай)** [булыу]. Өндәшмәҫ булыу, бер һүҙ ҙә әйтмәү. *Өндәшмәгән сағы ҡасан? Һеҙгә уның серен асам. Уҡытыусы һорағанда **һыу ҡапҡандай** тора Туйыш.* (М. Кәримов.) ***Һыу уртлаған** кеше һымаҡ һөмһөрөн ҡойоп торған Ғәйзулла түҙмәне, илар хәлгә етте...* (Я. Хамматов.)

*син.*: ләм-мим тип әйтмәү, һыу уртлау, ауыҙға йөҙөк ҡабыу.

**һыу мейе** *яманл.* Бөтөнләй хәтерһеҙ, башһыҙ *(хурлау һүҙе). Берәүҙең этләнеп әҙерләгән бесәнен үртә лә ҡуйсәле! **Һыу мейе**, алкаш!* («Башҡортостан».)

**һыу мылтығы** *һөйл.* Елғыуар, елтәкәй.

**һыу төбөнә китеү**. Юҡҡа сығыу *(мал-мөлкәткә ҡарата әйтелә).*

**һыу уртлау**. Өндәшмәҫ булыу, бер һүҙ ҙә әйтмәү. *Сәлимйәндең ҡатыны Ихзада бер нәмә лә аңламай, баҫҡан урынында ҡатты ла ҡалды. Сәлимйән дә **һыу уртланы**.* («Һәнәк».)

*син.*: ауыҙға йөҙөк ҡабыу, ләм-мим тип әйтмәү, һыу ҡапҡандай булыу.

**һыу һөлөгөндәй (һөлөгө кеүек, һымаҡ, шикелле)**. Бик матур, һылыу, бар ере лә килгән. *Баштараҡ атын ҡарарға, ҡайышын ҡыҫып быуырға яратмай ине, хәҙер күрәһең, **һыу һөлөгө кеүек** егет булып китте.* (М. Кәрим.) *Аллаяр Тәкәйгә ҡунаҡҡа барғанда, ҡорҙашы Ғилметдиндең **һыу һөлөгөндәй** сибәр, уңған ҡыҙы барлығын белгән.* (Ф. Иҫәнғолов.) *Институтығыҙҙа **һолоҡ кеүек** ҡыҙҙар бар. Тот та шуларҙың береһен алып ҡайт.* (З. Хисмәтуллин.)

**<һыуһыҙ> ҡашыҡҡа һалып йоторлоҡ**. Бик матур *(ҡатын-ҡыҙға ҡарата). ... Шәмбелә беҙгә бер ҡыҙ ҡунаҡҡа килер, университетта минең группала уҡый. Күптән күҙәтәм, **һыуһыҙ ҡашыҡҡа һалып йоторлоҡ**: һылыу, инсафлы, тәрбиәле.* (Х. Тапаҡов.)

**һыуһын ҡаныу**. Эске килгән бөтөү. *Ағиҙелгә эйелеп тал һыу эсә, тик һаман да **ҡанмай һыуһыны**.* (Р. Бикбаев.)

**һыуыҡ аяҡ**. Малһыҙ, затһыҙ кеше; берәҙәк. *[Басир:] — Аты юҡ шул [ҡыҙҙың] ... [Яппар:] Улай булғас, заты ла юҡ! Беҙгә ундай **һыуыҡ аяҡ** кәрәкмәй!* (Б. Бикбай.)

**һыу эскеһеҙ булыу**. Ныҡ арыу, бөтөнләй хәлдән тайыу.

**һыу эскеһеҙ итеү** *кемде.* Бик ҡаты туҡмау, һыҙырыу. *[Атаһы] ... саҡ асыуы килһә, улын **һыу эскеһеҙ итеп** туҡманы.* (Б. Бикбай.) *Өйөрөгөҙҙө бер епкә теҙеп, **һыу эскеһеҙ итеп** киҫергә эйәһе юҡ.* (Ж. Кейекбаев.)

**һәләк (харап, юҡ) итеү** *кемде.* Юҡҡа сығарыу, үлтереү.

**һәнәк һорағанға көрәк (балта)** биреү *кемгә.* Яңылыш хәбәр һөйләү, бер нәмә тураһында һүҙ барғанда икенсене һөйләү. *Малаиға Ҡалҡамановтың был һүҙе бик урынһыҙ, мәсьәләне мәғәнәһеҙ рәүештә ситкә борорға теләү йә булмаһа **һәнәк һорағанға балта биреү** кеүегерәк булып китте.* (С. Агиш.)

**һәр кем үҙ күмәсеиә көл тарта** *һөйл.* Һәр кеше үҙ мәнфәғәтен күҙәтә.

*син.*: үҙенеке үҙәктә.

**һә тиғәнсә.** Бик тиҙ, тиҙ арала *(ниҙер эшләү). Таҙ **һә тигәнсә** ағаларын ҡыуып етеп, майҙан уртаһына барып төшкән, ти.* (Әкиәттән.) *«Нухтың килене Фатима һыуға батҡан икән». Был хәбәр Туйралы ауылында **һә тигәнсә** таралып китте.* (Ж. Кейекбаев.) *Прошение яҙырға шымарып китте был [Нурлы]. Әллә ниндәй ҡаты мәсьәләгә лә **һә тигәнсә** яҙып бирә.* (Ә. Вахитов.)

*син.*: шул ике арала.

## Ш

**шайтан алғыры!** *һөйл.* Асыуланыуҙы, үкенесте йәки шаяртыуҙы белдергәндә әйтелә. *[Сахай:] Эс боша, Алмаҡай, эс. Бер ҙә сама самаға тура килмәй, **шайтан алғыры** ...* (Б. Бикбай.)

**шайтан белһен (беләме)!** «Белмәйем, аңламайым» тигән мәғәнәлә әйтелә. — *Нәмә, йортмо? **Шайтан беләме** уны! Мин бит материалды һатып алманым.* (К. Мәргән.)

**шайтан бөтон (аяғын) һындырыр** *һөйл.* Тәртипһеҙ, болалы урын, йорт һ. б. тураһында әйтелә. *Ауыл халҡы араһында ул һарай тураһында «**шайтан ботон һындырыр**» тигән һүҙҙәр йөрөй.* («Һәнәк».)

**шайтан йөрөтөү.** Кеше араһын боҙоу, хөсөт ебәреү.

**шайтан ҡотортоу.** Буталып яңылышлыҡ эшләү. *Ворошилов иһә, ике арала һуғылып йөрөгәндән һуң, «**шайтан ҡоторттo**» тип, тәүбә иткән дә Хрущев яғына сыға һалған.* (М. Кәрим.)

**шайтан төкөрһөн (төкөргөрө)!** *һөйл.* Насар, оҡшамаған һүҙ һөйләгән кешегә ҡарата асыу менән әйтелә. *«Һи, ауыҙыңа **шайтан төкөргөрө!**» — тип ҡыптыр ҡата менән ебәрҙе ул. Йән ергә килеп тейҙе. Бөгөлдөм дә төштөм.* (М. Кәрим.)

**шаҡ ҡатыу** *кемгә, нимәгә.* Ныҡ аптырау, гәжәпкә ҡалыу. *Ҡурҡалар бәләкәй мәләктәр шул ваҡыт, ситтәрәк хурҙар йөрөйҙәр* ***шаҡ ҡатып.*** (Ш. Бабич.) *Егет менән ҡыҙҙың етеш донъя көтөүенә* ***шаҡ ҡата*** *халыҡ.* (Әкиәттән.) **Шаҡ ҡатырыу** *кемде: Иәштәшем Хәиҙең мин хыял да итә алмаçлыҡ дәрәжәгә күтәрелеүе мине* ***шаҡ ҡатырҙы.*** (Ғ. Әмири.)

*син. ҡар.*: иç китеү.

**шар ҙа мар.** Артыҡ асыҡ, сер тота белмәгән кешегә ҡарата әйтелә. ***Шар ҙа мар*** *кеше һүҙ күтәрә, аçтыртын ҡул күтәрә.* (Мәҡәл.)

**шартына килтереү.** Тейешле тәртипкә ярашлы итеү, еренә еткереү. *[Саяф] Мөмкин тиклем* ***шартына килтереп*** *атларға теләне.* (С. Ағиш.)

**шатлыҡ эскә һыймау.** Бик ныҡ ҡыуаныу, көслө һөйөнөс тойғоһо кисереү. *Алыçтан Ташбатҡан ауылының үрге урамында ултырған өйҙәр күренә башлағас, Сөнәғәттең* ***шатлығы эсенә һыймайны.*** (Ж. Кейекбаев.) *Бойҙайҙы күргәс, Хәсби апайҙың* ***шатлығы эсенә һыймайны ...*** (Т. Йәнәби.) *Диплом алғас, өçтән тау төшкәндәй, иркен һулап ҡуйҙым.* ***Шатлығым эсемә һыймайны.*** («Сов. Башҡ.»)

**шеше тулыу** *кемдең, һөйл.* Ниндәйҙер һөҙөмтәгә, сиккә барып сығыр хәлгә етеү. *[Исхаҡты] ҡулға алдылар. Әсәйем әйтә, «****шеше тулған****» уның, ти. Мәңге кеше хаҡын ашағас, күҙ йәше ебәрмәй, ти.* (К. Кинйәбулатова.)

**шишмәне Иҙелгә түккән.** Урынһыҙға йомартлыҡ күрһәтеүгә ҡарата әйтелә.

**шөкөрана ҡылыу.** Шөкөр итеү, ризалыҡ белдереү. — *Их, мин әйтәм, донъяла йәшәйһем бар икән әле, — тип* ***шөкөрана ҡылам.*** (Н. Ҡәрип.)

**шөкөр тигән көн.** Ҡәнәғәт булырлыҡ хәл. *[Әсәһе:] Мал-йән һау, тыныс йәшәйһегеҙ,* ***шөкөр тигән көнөгөҙ*** *бар.* (Ғ. Дәүләтшин.)

**шөр (шыр) ебәреү** *һөйл.* Ныҡ ҡурҡыу, шөрләү. *Урыçтар килгәнен белгәс, һинең атайың аçтына* ***шыр ебәргән,*** *— тип үпкәләне [Салауат] дуçына.* (С. Злобин. Р. Ниғмәти тәрж.)

*син.*: ҡот осоу.

**шөрөбө етешмәй** *кемдең, һөйл.* Аҡыл яғынан камил түгел.

*син. ҡар.*: аҡылға теүәл түгел.

**шөрөп бушау.** Ғәйрәт ҡайтып, бушаҡҡа әйләнеү.

**шуҡ ҡуллы (ҡулы шуҡ)** *кемдең.* Урлашырға әүәç, кеше әйберенә ҡул һуҙырға яратҡан; ҡулсыр.

**шулай тип ҡөтөл.** Ҡаршылыҡҡа, бәхәскә килгән кешенең ыңғайлап әйткән һүзенә ҡарата әйтелә.

**шул ғына етмәгәйне (ҡалғайны)**! Берәй кешенең эше, ҡылығы менән риза булмағанда, оҡшамағанда үкенес белдереп әйтелә. — *Рәхмәт, — тине Зөләйха, ә эсенән «****шул ғына ҡалғайны****», тип ҡуйҙы.* (С. Агиш.)

**шул да булған икән һүҙ.** Килешһеҙ хәбәр ысҡындырған кешенең һүҙенә ҡаршы ризаһыҙлыҡ белдергәндә әйтелә.

**шул <ике> арала.** Бик тиҙ, йәһәт *(булған хәл, башҡарылған эшкә ҡарата әйтелә). **Шул ике арала** толпаның бер өлөшө баҙар майҙанына ябырылды.* (Д. Юлтый.) ... *Ырымбур ҡарағы [тирәк башына] менеп киткән һәм **шул ике арала** ҡоҙғондоң күкәйҙәрен алып та төшкән, ти, был.* (Ж. Кейекбаев.)

**шылдырып арҡанлау** *һөйл.* Бик оҫта итеп алдау; һемәйтеү. *Иләнмәгән-һуғылмаған өмөтөн әсәһенә белгерткеһе килмәне Зөбәржәттең, **шылдырып арҡанлауҙы** урынлы тапты...* (М. Әпсәләмов.) *[Сабира — Юлғотло тураһында:] Тик бынау бесән сабыуы менән генә ялҡытманы. Тағы **шылдырып арҡанлап** китмәһен. Булыр, шылғаяҡ нәмәнән.* (М. Буранғолов.)

*син.*: *ҡар.*: төп башына ултыртыу.

**шымарған таш.** Ныҡ хәйләкәргә әйләнгән кешегә ҡарата һөйһонмәйерәк әйтелә.

**шәм кеүек.** Бик төҙ һәм һомғол *(оҙон, һылыу буйлы ир-атҡа, шулай уҡ бейек шыма олонло ағасҡа ҡарата әйтелә). **Шәм кеүек** егет.* ▬ *Ун дүрт йәшенән алып **шәм кеүек** ҡарағайҙарҙың моң һуҙып ултырыуын тыңларға күнеккән кеше урмандан башҡа йәшәй аламы ни?* («Сов. Башҡ.») *Юлдың ике яғында ла ҡарт ҡарағайҙар, **шәм кеүек** төҙ шыршылар.* (М. Тажи.)

**шәм менән (шәм яндырып) эҙләһәң дә таба алмаҫһың** *кемде, нимәне.* Булмағанды, юҡлыҡты көсәйтеү өсөн әйтелә. *Секция, түңәрәктәрҙә беҙ башҡорт работниктарын **шәм менән эҙләһәк тә таба алмайбыҙ**.* (Ш. Хоҙайбирҙин.)

**шәп булыу (итеү).** Эш-ҡылыҡты хуплағанда әйтелә. *Беҙгә килеүегеҙ **шәп булды**. Иртә тороп **шәп иттең**.*

# Ы

**ығы-зығы килеү.** Мәшәҡәтләнеү, буталыу. *Кешеләр йәй тип, ял тип **ығы-зығы килә**, ә тәбиғәт үҙ календары буйынса йәшәй.* (Ә. Чаныш.) *Яҙ еткәс, **ығы-зығы килеп**, ыҙманан йәйләүгә күсәләр.* (Әкиәттән.)

**ыҙа күреү (сигеү).** Михнәт кисереү, этләнеү, яфаланыу. *Был йырҙар күбеһенсә батырҙар, халыҡ өсөн **ыҙа күргән**, Себер киткән кешеләр тураһында ине.* (З. Биишева.) *Ҡайһы берҙә йәшерәктәр ҙә машинаға йәһәт кенә менеп ултыра алмай **ыҙа сигә**.* (Ш. Янбаев.)

**ыжлап та бирмәү.** Һис кенә лә аптырамау, иҫ китмәү. *[Полковник Бибиков] ... **ыжлап та бирмәй**, ваҡытын йә һунарҙа*

*йөрөп, йә һунар хаҡында кем менәндер әңгәмәләшеп үткәрә бирә.* (Д. Юлтый.) *[Этәс] — Пожар! Пожар! — тип оран һалыуға **ыжлап та бирмәне.*** («Һәнәк».)

**ыҡҡа индереү (килтереү)** *кемде, нимәне.* Билдәле бер яйға һалыу, тәртипкә күндереү. *Күсемде яйлап **ыҡҡа килтерҙе,** үҙенә ауҙарҙы Айҙар.* (Ғ. Хөсәйенов.)

**ыңғайына һыйпау (һыпырыу)** *кемде.* Һүҙенә, теләгенә ҡаршы килмәй, йөпләп, хуплап тороу. *Әмиров кешеләрҙе **ыңғайына ғына һыйпаманы,** урынһыҙ йыуатманы. Тура әйтте.* («Сов. Башҡ.») *Рәхимә ҡартының был тынын да яҡшы һиҙә. Шуға күрә лә ул уның **ыңғайына һыпыра.*** (Һ. Дәүләтшина.)

**ысынын әйткәндә.** Дөрөҫөн әйткәндә *(инеш һүҙ булып килә). **Ысынын әйткәндә,** ул бер ҙә аҡыллы түгел.* (Әкиәттән.)

# Э

**эҙе лә булмаһын (ҡалмаһын)** *кемдең.* Эрғәлә булмаһын, китеп юғалһын *(күрге килмәгән кешегә ҡарата асыу менән әйтелә).* — *Бында уларҙың **эҙҙәре булмаһын,** барыһы асыулана, эшкә орон-соҡлайҙар, бысраҡ ташыйҙар...* (Һ. Дәүләтшина.)

**эҙе лә ҡалмау** *кемдең, нимәнең.* 1. Бөтөү, бөтөнләй юғалыу. *Миндә асыуҙың **эҙе лә ҡалмағайны.*** (Я. Хамматов.)

2. Күҙҙән юғалыу, китеү. *Ҡасҡан теге кеше, **эҙе лә ҡалмаған.*** (Һөйл.)

***эҙенә төшөү*** *кемдең.* Юғалған, ҡасҡан кешене эҙләй-эҙләй табып алыу. *[Хамматтың] ... бында Әбделғасим Әбделмөслимовтың **эҙенә төшөргә** лә өмөтө бар ине.* (З. Биишева.)

**эҙе һыуынған** *кемдең.* Китеп юғалған, табырлыҡ түгел.

**эҙ йәшереү.** Таптырмаҫ, тоттормаҫ, белдермәҫ өсөн юлды бутау; юл яҙлыҡтырыу. ***Эҙ йәшереү** өсөн, оҙатыла торған батальондарға яҙылып, шулар менән китергә ҡарар итте.* (Д. Юлтый.) *Кәшиф уның ҡайҙағы икәнен һораша башлағас, һүҙҙе икенсегә бороп, **эҙен йәшергәйне.*** (А. Таһиров.)

**эйәге танауынан бейек** *кемдең, һөйл.* Үтә һауалы, маҡтансыҡ.

**эйәк атыу.** Һуңғы һулыш, хәрәкәт яһау; үлем.

**эйәле-башлы булыу.** Кейәүгә сығыу йәки кәләш алыу, өйләнешеү. *Ике йәшлек ҡыҙ ине ул Зөлхизә. Хәҙер ун һигеҙ, һай, уҙған ғүмер. Үҫте ул ҡыҙ, үҫте... **Эйәле-башлы булырға** ваҡыт етте.* (З. Биишева.) — *Йосоп, **эйәле-башлы булғансы,** беҙҙә йәшәп торорһоғоҙ инде,* — *тине Сәлих ҡарт...* (Т. Бүләков.)

*син.*: башлы-күҙле булыу.

**эйәһе менән йөрөмәй.** Хәбәр тиҙ тарала мәғәнәһен аңлата.

**элеп алып, һелкеп һалыу** *кемде.* Бик ҡаты тәнҡитләү. *Улар һине собраниеға барырға ла, атайыңды* ***элеп алып, һелкеп һалырға*** *өйрәттеләрме?* (М. Кәрим.)

*син.*: тетмәһен тетеү.

**энә ашаған (йотҡан) эт һымаҡ (шикелле, кеүек)** *һөйл.* Бик ябыҡ, хәлһеҙ. *[Солтангәле:]* ***Энә йотҡан эт шикелле****, бетеңде ҡойоп, ас йөрөйһөң.* (Я. Хамматов.)

*син.*: төртһәң ҡоларға тора.

**энә буйы** [ер] *фольк.* Бик аҙ ара икәнде көсәйтеү өсөн әйтелә. *Эй китә был, эй китә, әйләнеп ҡараһа,* ***энә буйы*** *ер китә.* (Әкиәттән.)

**энә күҙенән (күҙәүенән) үткәреү** *кемде, нимәне.* Ентекләп, бик нық тикшереү. *Ҡара, малай, маңлайыңдағы тәртешкә эҙе уңала башланымы әллә? Был юлы мин һине улай ғына итмәм.* ***Энә күҙенән*** *үткәрермен. Боросло бизмәнгә һалып үлсәрмен.* (С. Кулибай.) *Әгәр ҡыҙартмайым тиһәң йөҙөңдө,* ***энә күҙенән*** *үткәр һәр һүҙеңде.* (Р. Шәғәлиев.)

**энә күҙәүендәй тишек булһа, инер инем.** Оялыу, ғәрләнеүҙе белдергәндә әйтелә. *Ҡысҡырып-ҡысҡырып көләләр,* ***энә күҙәүендәй тишек булһа****, шунда* ***инеп китер*** *инем.* (Ғ. Дәүләтшин.)

*син.*: ер тишегенә инерҙәй булыу.

**энә күҙәүендәй (күҙе саҡлы).** Бик бәләкәй. *[Гөлзифа:] — Эгоист һин, бына кем.* ***Энә күҙәүендәй*** *генә капризыңды ла ғаиләнән өҫтөн ҡуяһың!* (Й. Солтанов.) ***Энә күҙе саҡлы*** *бәхет өсөн күпме йән ҡыйнала был ғүмерҙә.* (М. Кәрим.)

**энәләй нәмәне дөйәләй күреү (итеү).** Арттырып күрһәтеү, аңлы рәүештә ысынбарлыҡты боҙоу. *Шәмиғолов менән Мансуров хөкүмәте ... артыҡ һумлыҡ һатҡан булып,* ***энәләй нәмәне дөйәләй*** *кеүек* ***күреп****, Фоҡараның башын тағы ла ҡайнатты.* (Ш. Хоҙайбирҙин.)

**энә менән ҡойо ҡаҙыу.** Бик ауыр, түҙемлек талап иткән эш башҡарыу. *Иншаҡарау — ул* ***энә менән ҡойо ҡаҙыу****.* (С. Ағиш.)

**энә менән тиреһен тунау** *кемдең.* Бик ауыр язаға дусар итеү. *[Харрас:] «Ҡылысбайға нахаҡ бәлә яғыуҙа Аллаяр мулла ғәйепле. Унан үс алырға кәрәк.* ***Тиреһен энә менән тунарға*** *кәрәк», — ти икән.* (Ш. Шәһәр.)

**энәнән-ептән сыҡҡан.** Өп-өр яңы *(кейем). Әле генә* ***энәнән-ептән сығып****, келәм өҫтөндә наҙланып ултырған көршәктең сәскәләре мең төрлө нур бөркөп ... бейей башлаған.* (З. Биишева.) *[Сәхип:] — Яңы ғына* ***энәнән-ептән сыҡҡан*** *кейемдәр менән ысын яһау итеп, бөтәйтеп ҡайтарғандар улымды.* (С. Ағиш.)

**энә осонда (өҫтөндә) кеүек (шикелле, һымаҡ)** [ултырыу]. Нимәгәлер борсолоп, тынғыһыҙланыу, эске борсолоу кисереү. *Был ҡәҙәре оялтыуҙан беҙҙең* ***энә осондағы шикелле*** *ултырыуыбыҙҙы, маңлайыбыҙҙан тир бәреп сыҡҡанын күрептер, ахыры, Ибраһимов ағай һүҙен йомшарта төштө.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**энә осондай**. Бик бәләкәй, остоҡ ҡына. *Сурағол ул* ***энә осондай*** *нәмәне тау ҡәҙәре итеп һөйләп йөрөй торған бер кеше.* (Т. Хәйбуллин.) *Егеттәрҙең* ***энә осондай*** *ҙа ғәйебе күренмәй. Уларҙы юҡҡа рәнйеттегеҙ.* («Сов. Башҡ.»)

**энә төртөр(лөк)** [урын юҡ]. Бик тығыҙ, кеше менән тулы *(бинаға ҡарата). Ауыл советының бәләкәй генә йорто шығырым тулған.* ***Энә торторлөк*** *урын ҡалмаған.* (Ғ. Дәүләтшин.) *Заводтың ҡыҙыл мөйөшөндә* ***энә торторлөк*** *тә урын юҡ.* («Сов. Башҡ.») *Тағы күҙ бәйләнә, Күк көҙгөләй, Үрелеп тә саңын һөртөрлөк, Шыңғырлап та торған был йондоҙҙар, Урын да юҡ* ***энә төртөрлөк.*** (Т. Йософов.)

*син.*: аяҡ баҫыр [урын юҡ].

**энәһенән ебенә тиклем**. 1. Бик ентекләп, бөтә ваҡлыҡтарына хәтле *(һөйләү һ. б.). Юлай килгән халыҡҡа күргәненең барыһын да* ***энәһенән ебенә тиклем*** *теҙеп һөйләп биргән.* (М. Буранғолов.) *Сәлмән эштең ҡалай-ҡалай булғанын* ***энәнән-епкә*** *һөйләп бирҙе, ти.* (Әкиәттән.)

2. Бик төпсөп, тотош *(һорашыу, белеү һ. б.). Ғаиса табын йортонда писарь булып эшләй һәм уның аша Ғариф Ирғәле старшинаның ҡараңғы эштәрен* ***энәһенән ебенә тиклем*** *белеп тора.* (Ж. Кейекбаев.) *Аҙаҡтан мөәзингә барып индем. Ул ыҫмалалы еп менән ҡораштырып ҡуйған күҙлеген бер кейеп, бер һалып ҡараны.* ***Энәһенән ебенә тиклем*** *тикшергәндәй һораштьı.* (С. Агиш.)

**энә төшһә (ятһа) күренерлек**. Бик яҡты урынға ҡарата әйтелә. *Ҡаланың урамдары* ***энә ятһа күренерлек*** *булып яҡтыртылған.* (А. Таһиров.)

**эре һөйәкле**. Киң ҙур кәүҙәле. *Рәүфә* ***эрерәк һөйәкле*** *булғанға күрә, үҙ тиҫтерҙәре араһында еткәнерәк күренә.* (Ә. Вәли.)

**эс ауырыуы** *һөйл.* Берәйһен нык кәмһетеп әйткәндә ҡулланыла. *[Тайба әбей Емешкә:] — Уй,* ***эс ауырыуы!*** *Һин ошо китаптарҙы уҡый алыр инем тип уйлайһыңмы?!* (З. Биишева.)

**эс-бауырға инеү (инеп барыу)**. Оҡшарға, ярарға тырышып, берәй маҡсат менән сер алыу. *Нигмәтулланың алсаҡ һөйләшеүенә һәм малайын маҡтауға Ҡолсобай һағайҙы. «Был әҙәм элекке кеүек түгел. Бик йышылған төлкөләй* ***эс-бауырға инеп бара».*** (Я. Хамматов.) *Садрисламға ла ул [Аллаяр]* ***эсенә-бауырына инерҙәй булып,*** *өтәләнеп килеп күреште.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**эс-бауыр өҙөлөү**. Бик тәрән һағыш кисереү.

*син.*: үҙәк өҙөлөү.

**эс бошоу**. Күңелһеҙләнеү, нык бошоноу. *Бер бүлмәлә ике шәкерт дуҫ ҡына торған була.* ***Эстәре бошҡанда*** *йырлап, уйнаған, көлгән була.* (Ш. Бабич.) *Йәшлек бит,* ***эс бошҡан*** *саҡта күңел асырға бер ирмәк булһын тигәнмендер инде.* (Т. Йәнәби.)

**эс бушау**. Ҡайғы-хәсрәттән, ауыр тойғонан ҡотолоу. *Йырлағас, эсем бушап ҡалды.*

**эс бушатыу**: *[Ғаян] Вокзал бинаһы артындағы аулаҡ урында улар* ***эс бушатып*** *алырға күнеккән.* (А. Магазов.) *Ә ҡатыны көнө буйы бер үҙе өйҙә, һөйләшер, ҡайғыһын уртаҡлашыр,* ***эс бушатыр*** *кешеһе лә юҡ.* (З. Ҡаҙаҡбаева.)

**эсе көптәй, аяғы ептәй** *һөйл.* Ҙур эсле кеше *(күберәк ауырыу бала-саға хаҡында).*

**эсендәге тышында** *кемдең.* Эс серен йәшермәй, асыҡ итеп әйтеп, һөйләп бара. *Әсғәт бер ҡатлы малай булып сыҡты. Уның* ***эсендәге тышында*** *икән. Сер артынан серен сисә генә бирҙе.* (М. Кәрим.) *Ҡайғымды ла, шатлығымды ла мин кешеләр менән уртаҡлашам, ҡыҫҡаһы,* ***эсемдәге — тышымда.*** (Р. Низамов.)

**эсен күптереү** *кемдең һөйл.* Үҙе юҡта бик ҡаты әрләү, тиргәү. *[Тимеркәй:] — Ҡолансәс, әле генә һине әрләп,* ***эсеңде күптерҙеләр,*** *ҡайҙа йөрөнөң?* (Д. Юлтый.)

**эсенә дуңғыҙ тояғы тейгән.** Бик насар, боҙолған кешегә ҡарата хурлап әйтелә.

**эс йылыныу (эскә йылы инеү).** Нимәгәлер ышаныс тыуып, күңелләнеү. *Был хәбәрҙе ишеткәс, Нухтың* ***эсе йылынып китте.*** (Ж. Кейекбаев.) *Быларҙы күреп, Зильскийҙың* ***эсе йылынды...*** (Ғ. Дәүләтшин.) *Фәхри ағайҙың хуплауы минең* ***эскә йылы индерҙе.*** (Я. Вәлиев.)

**эс көйөү.** Бошоноу, ҡайғырыу. *Эйәрһәң бер яманға, Илеңә ҡайтып етмәй,* ***эсең көйөр.*** (М. Аҡмулла.) *Күршең уҙып китһә,* ***эсең көйә,*** *ә үҙең алға сыҡһаң, күршеңә ярҙам итергә тырышҡан булаһың.* (Р. Солтангәрәев.)

**эс көтөрләү.** Көнсөллөк килеү. — *Килде шул, әллә* ***эсең көтөрләйме?*** *— Миңһылыу тегеңә боролоп та ҡарамайса отпор бирҙе лә, талпынып бейеүен дауам итте.* (Р. Солтангәрәев.)

**эс күмһеү.** Көнләшеп көйоноү. *Эйе, төрлө кешеләр бар шул әле был донъяла. Берәүҙең уңышына, бәхетенә берәү ҡыуана, икенсеһенең* ***эсе күмһей.*** (Н. Мусин.)

**эс ҡайнау (ташыу).** Ныҡ асыу килеү, ҡыҙышыу. *Был яғымлы йылмайыулы көрәш күршеләр араһында оҙаҡ ҡына бара. Һәр икеһенең* ***эсе ҡайнай,*** *таша, ә йөҙөндә йылмайыу.* (К. Мәргән.)

**эс ҡайышыу.** Бик ныҡ бошоноу, ауыр кисереү. *Ҡола йүгеректең юғалыуына уның* ***эсе бик ҡайышты.*** (Ж. Кейекбаев.)

**эс ҡаҫтаһы* эсендә** *һөйл.* Яуыз, эскерле.

[***Ҡаҫта** — *гәр.* уҫал ниәт, яуыз уй.]

**эс ҡатып (ҡатҡансы)** [көлөү]. Бик ныҡ, ихлас шатланып (көлөү). *Һоро айыуҙарға ҡарап* ***эсең ҡата.*** («Сов. Башҡ.»)

**эс өҙөлөү.** Һағыш хисе кисереү, өҙгөләнеү. *Һинең өсөн* ***өҙөлә эсем*** *көнөн-кисен, Ас үҙәктә ғишыҡ уты яна, туташ.* (Ш. Бабич.)

**эс(те) бошороу.** Кәйефте боҙоу, күңелһеҙләндереү. *Индрил бөгөн мине ялҡытып бөттө. Кәрәгенән тыш күп һөйләй,* ***эсте бошора.*** (Д. Юлтый.) *Ҡарттар һәм ара-тирә күршеләре һаман*

*һүҙенән сыҡмауына ихлас ҡыуанһа ла, һәр яңылыҡ Хажисолтан байҙың* **эсен бошорҙо.** (Я. Хамматов.)

**эс(те) бушатыу.** 1. Ҡайғы-хәсрәтте һөйләп, уртаҡлашып, йыуаныс табыу. *Мәғфүрә менән Гөлйөҙөм ... икәүләшеп ситән ҡыуыш янына барып, һөйләшеп* ***эстәрен бушатырға,*** *хәсрәттәрен таратырға ултырҙылар.* (Һ. Дәүләтшина.) *Мин был көндәлекте үҙ-үҙем менән серләшер өсөн,* ***эсте бушатыр*** *өсөн яҙам.* (И. Абдуллин.)

2. Ниҙер эшләп, күңел еңеллеге табыу. *Әбушахман ҡорҙаш менән әрләшеп, бер аҙ* ***эсте бушатып*** *алдым.* (С. Кулибай.)

**эсте ҡырыу (тырнау).** Тынғыһыҙлап, борсоп тороу. *Люсә менән Сәлмән араһында һөйләшеү насар килеп сыҡты. Бына шул* ***эсте ҡыра.*** (К. Мәрғән.) *Ауыл китапханаһының байтаҡ кеше эшләгән урында китапхана ойоштормауы ғына* ***эсте ҡырып ҡуя.*** («Сов. Башҡ.») *Тик эт саҡырған кеүек: «Мальчик! Мальчик!» — тип ҡысҡырыуҙары ғына* ***эсте тырнай*** *ине.* (С. Агиш.)

**эсте тишмәҫ.** Ярап ятыр (*ниҙер алғанда, ҡулға ингәндә ҡәнәғәтлек белдергәндә әйтелә*). *Олатайымдың балыҡсы ҡартҡа әйткән фидейәһе — бер башмаҡ. Ул да ярап тора, ярлының* ***эсен тишмәҫ.*** (Б. Бикбай.) ... *Яңы мылтыҡ алып ебәрһәң,* ***эсеңде тишер инеме,*** *бынауы хан заманындағы мылтыҡты өҫтөрәп йөрөткәнсе...* (Ә. Чаныш.)

**эс тырнап** [көлөү] *һөйл.* Рәхәтләнеп, ихлас (*көлөү*).

**эстә ас бүре(ләр) олоу.** Бик ныҡ асығыу. *Тик бына асыҡтырған,* ***эстә ас бүреләр олой.*** (А. Карнай.) [*Ҡасимов*:] ***Эстә ас бүре олой.*** *Ҡайҙандыр сәлдергән ошо һүрәтте. Бер алйотҡа олаҡтыра һалып,* ***олотмаҫҡа эстә бүреңде.*** (Х. Ғиләжев.)

*син. ҡар.*: ҡарын асыу.

**эстән һыҙыу.** Башҡаларға һиҙҙермәйенсә ҡайғырыу, бошоноу. *Губернаторҙың был мыҫҡыллы һүҙҙәре Ырымбур казактарының ... йәненә тейһә лә, ул өндәшмәне,* ***эстән генә һыҙҙы.*** (Ғ. Ибраһимов.)

**эс үткәшеү (йәбешеү).** Асығыуҙан ныҡ ябығыу.

**эс яныу (көйөү, һыҙлау).** 1. Ҡайғырыу, ныҡ бошоноу. *Сөнәғәт менән Фатиманың яратышып йөрөүен Талха белә ине, әлбиттә. Иәй уның бик* ***эсе янып*** *йөрөнө.* (Ж. Кейекбаев.)

2. Көнсөллөк тойғоһо кисереү, ныҡ конләшеү. *Гөлбикә һәйбәт тә уҡыны. Шәрифйән ағайҙың быға ла* ***эсе янды.*** (Р. Низамов.)

**эҫе күреү** *кемде.* Яҡын тойоп яратыу, үҙ итеү. *Отрядҡа яҙылған егеттәр янында партизандарҙы үҙенең яҡындары кеүек* ***эҫе күреп,*** *Тимербулат та урағылап йөрөй.* (Һ. Дәүләтшина.) [*Шаман малайы*] *Әллә ниҙә бер булһа ла ауылға ҡайтып китә. Тыуған төйәген* ***эҫе күрә*** *инде.* (М. Тажи.)

**эҫе мәле** *нимәнең.* Онотолмаҫ, баҫылмаҫ борон. *Харрас бакшыға ғына барайым да — сихыр булһа, **эҫе мәлендә** кайтарта һалайым.* (Һ. Дәүләтшина.)

**эт (бүре) аҙығы.** Асыуланып әрләгәндә әйтелә торған һүҙ. *Хәйретдиндең асыуы кабарып, ул атты ... тиргәй башланы: — Ах, һин **бүре аҙығы**, үләт токсайы ...* (Н. Иҙелбай.)

**эт алғыһыҙ.** Алама, нык туҙған (*кейем-һалымға карата*). *Мин үҙем бер кат күлдәк, кәзәкей менән касып китеп, ... өҫтөм **эт алғыһыҙ** булып туҙып йөрөнөм.* (Һ. Дәүләтшина.)

**эт ауыҙына ағас тығып йөрөү.** Буш менән булыу, файҙалы эш эшләмәй көн үткәреү. *Әхмәҙи улы Әбделхакты бик нык әрләне: — Ялкау! Ауыл араһында **эт ауыҙына ағас тығып йөрөргә** белә, донъяһы яныуҙа кайғыһы ла юк.* (Ж. Кейекбаев.)

*син.*: эт һуғарыу, урам тапау, бот күтәреп ятыу.

**эт ашамаҫ (еймәҫ)** [һүҙ]. Бик әшәке, хаяһыҙ, оятһыҙ (*һүҙ*). *Бригадирҙың ауыҙынан сыкканды **эт ашамаҫ**...* (Ә. Бикчәнтәев.) *Бар акылы йоҙрокта, Ак-кара күрмәҫ күҙе, Теле һыймаҫ ауыҙына, **Эт тә ашамаҫ** һүҙен.* (Р. Ғарипов.)

**эт ашаһын.** 1. Берәй эш-хәлгә карата кире мөнәсәбәт белдергәндә асыу менән әйтелә. [*Сәхип*:[ *Өтөк, шалапай, ир булып башыңа бүрек кейеп йөрөүеңде **эт ашаһын**.* (М. Тажи.)

2. Кешенән мал-мөлкәтте йәлләмәүҙе, йомартлыкты белдергәндә әйтелә. *Һеҙҙән аяғанымды **эт ашаһын** ине лә ул, бер ҙә көй килмәй бит әле.* (Һ. Дәүләтшина.)

**эт аяғы кортлаған** [ер]. 1. Халык кайнап торған урынға карата әйтелә.

2. [сак, мәл]. Бик эҫе вакытка карата әйтелә.

**эт башына эркет түгелгән** [заман]. Муллык, байлык бик күп булған вакыт.

**эт белһен** *һөйл.* Ниҙелер белмәгәнлекте һәм белергә лә теләмәгәнлекте күрһәтеү осөн әйтелә. — *Баяр үҙе кайҙа тора һуң? — **Эт белһенме** ни уны. Петербурҙа тора, имеш, тип тә һөйләйҙәр.* (Ж. Кейекбаев.)

**эт бөткөһөҙ** *һөйл.* Бик күп. ***Эт бөткөһөҙ** эш.* ▬ *Сәскә беҙҙә **эт бөткөһөҙ** ул.* (Һөйл.)

*син.*: эт тубығынан.

**эт булғансы.** Нык арығансы, хәлдән тайғансы. *Калала тороу бик күңелле ул. Ауылдағы кеүек **эт булғансы** эшләмәйһең.* (А. Таһиров.)

**эт бәйләһәң, торғоһоҙ (торорлок түгел, тормаҫлык, түҙмәҫлек).** Бик һыуык (*гәҙәттә, бүлмәлә, бинала*). *Сентябрь йә октябрь айылыр инде был. Мәктәп, халыкса әйткәндә, **эт бәйләһәң, торғоһоҙ**. Балалар өшөп, коршайышып ширлектәр артында ултыра.* (З. Биишева.) *Өй һалкын, **эт бәйләһәң дә торорлок түгел**.* (Ә. Ғәрәев.) *Кыш көндәре был магазинда **эт бәйләп куйһаң да торорлок түгел**.* («Сов. Башк.»)

**эт булыу.** Этләнеү, маҙаланыу. [*Надир Зөбәржәткә*:] *...Кис барып инһә, ҡыҙҙар көлөшә-шаулаша посылка аса алмай* ***эт булалар.*** (М. Әпсәләмов.)

**эт бәләһе менән.** Бик ҙур ҡыйынлыҡ менән, саҡ-саҡ (*ниҙер эшләү, еңеп сығыу*). [*Фәйрүш — Хәйрүшкә*:] *Инәлеп, ялбарып,* ***эт бәләһе менән*** *саҡ көндәрҙем шунда һине.* (Ҡ. Даян.)

**этеп биреү** *кемде.* Ҡыҙҙы кейәүгә ҡыҫтаңҡырап ҡауыштырыу. *Әхмәди менән Факиһа* ***этеп бирергә*** *торалар ҙаһа.* (Ж. Кейекбаев.)

**эт итеү** *кемде.* Бик ҡаты әрләү, һүгеү. *Арғы остан Байғужа ҡайнаға, шуны ишеткәс, мине* ***эт итеп*** *әрләне бит.* (Һ. Дәүләтшина.) *Бер шулай беҙҙең бүлмәләге лампочканы алғандар ҙа коридорға ҡуйғандар. Беҙҙең Сөләймән тигән берәүебеҙ* ***эт итеп*** *һалды үҙҙәрен.* (С. Агиш.)

**эт көнөн күреү (көнөндә йәшәү).** Бик нык яфа сигеү, ыҙаланыу.

*син.*: эт күрмәгәнде күреү.

**эт көтөүе** *мыҫҡ.* Өйкөлөшөп йөрөгән күмәк кешегә асыу менән әйтелә.

**эт күҙе төтөн белмәҫ.** Оялыу, тартыныуҙы белмәгән, һөмһөҙ кешегә ҡарата әйтелә.

*син.*: эт тиреһен битенә ҡаплаған.

**эт күрмәгәнде күреү.** Нык яфа сигеү, этләнеү. *Ни бары Ғилаж арҡаһында ул* [*Сөнәғәт*] *Кулагинда бәләкәйҙән* ***эт күрмәгәнде күреп*** *эшләп йөрөнө.* (Ж. Кейекбаев.) *Аслы-туҡлы торҙоҡ ғүмер буйы, Бауыр ҡара ҡанға төйөлдө, Кеше исеме тағып үҫһәк тә беҙ,* ***эт күрмәгән көндө күрелде...*** (Ғ. Амантай.) [*Һөргөндә*] *беҙгә* ***эт күрмәгәнде күреп*** *йәшәргә, каторга шарттарында эшләргә тура килде.* («Сов. Башҡ.»)

*син.*: эт көнөн күреү.

**эт ҡайышы.** Үтә әрһеҙ, шыма кешегә ҡарата әйтелә. *Мин ҡыйыулана төштөм. Атайым әйтмешләй,* ***эт ҡайышына*** *әүерелеп киттем.* (Ғ. Ғүмәр.) [*Зимфира*] *Тамара һымаҡ сөсө телле түгел. Борис-Кипарис кеүек* ***эт ҡайышы ла*** *түгел.* (Ә. Бикчәнтәев.)

**эт ҡойҡаһы.** Кемделер кәмһетеп, мыҫҡыллау белдергәндә әйтелә. [*Ишмырҙа*:] *— Ай,* ***эт ҡойҡаһы,*** *шул ҡыҙҙың һиңә бараһы бармы?* (Д. Юлтый.)

**эт ҡойроғонан төҙ булыу.** Үтә ғәҙел, артыҡ дөрөҫ булып ҡыланыу. [*Тәттә әбей*:] *— Һин дә бында* ***эт ҡойроғонан төҙ булып*** *торма.* [*Ғәндәлип*:] *Кемлегеңде беләбеҙ...* (Ә. Мирзаһитов.)

**этлек итеү** *кемгә.* Ҙур зыян эшләү, ҡаза килтереү.

**эт менән бесәй кеүек** [йәшәү]. Татыу түгел, ыҙғышып, талашып [*тороу*]. *Бер ҙә генә, балаҡайҙарым, бер туғандарға оҡшамағанһығыҙ шул. Һәр ваҡыт,* ***эт менән бесәй кеүек,*** *ырылдашып-мырылдашып ҡына тораһығыҙ.* (С. Агиш.)

**эт менән эҙләһәң дә таба алмаҫһың.** Китеп юғалған, әллә ҡайҙа булған кешегә ҡарата әйтелә. *Ҡалала һеҙҙе* ***эт менән эҙләһәләр ҙә таба алмаҫтар***. (Ж. Кейекбаев.)

**эт өрә каруан (бүре) йөрөй.** Кемдеңдер ҡаршылығына, һүҙенә ҡарамай үҙенекен эшләгән кешегә ҡарата әйтелә. ***Эттәр өрә — каруан бара бирә...*** *Теләктәрең һинең, Володя, ҙур*! (Ә. Әхмәт-Хужа.)

**эт саба тин бет саба** *һөйл.* Кешегә ҡарап ҡоторған кешегә ҡарата мыҫҡыллап әйтелә.

**эт талағыры** *һөйл., тупаҫ.* Нимәгәлер асыу белдергәндә, йән көйгәндә әйтелә. *Онотоп ебәрелгән бит,* ***эт талағыры***. (М. Тажи.) [*Яппар*:] *Эй, әйткәндәй, шулай бит әле. Тфү, хәтереңде* ***эт талағыры****, йәш саҡтар иҫтән дә сығып китеп бара.* (Б. Бикбай.)

**эт типкеһендә** [йөрөү, йәшәү]. Ҡағылып-һуғылып, яфа сигеп (*ғүмер үткәреү.*) *Мәғрифә, хәйер һораша-һораша тиерлек,* ***эт типкеһендә*** *йөрөп, тамам хәлдән тайып, Илсегә саҡ ҡайтып йығылған.* (Ф. Иҫәнголов.) *Ҡалған икән аҡһаҡалдар миңә* ***эт типкеһендә***. (Т. Йосопов.)

**эт тиреһен битенә (башына) ҡаплау** *кемдең.* Хур итеү, битәрләү.

*син.*: эттән алып эткә һалыу.

**эттән алып эткә һалыу** *кемде.* Хур итеү, мыҫҡыллап әрләү, хурлау. [*Кешеләр*] ... *зыҡ ҡубып, автохужалыҡ етәкселәрен* ***эттән алып эткә һалып*** *һүгәләр.* (Ф. Иҫәнголов.) *Баш ҡалҡыттыңмы — һаҡсы килеп етә.* ***Эттән алып эткә һалып*** *һүгә...* (Т. Килмөхәмәтов.)

*син.*: эт тиреһен битенә ҡаплау.

**эт тубығынан** *һөйл.* Бик күп (*баһаһы юғары булмаған кешегә, нәмәгә ҡарата әйтелә*). [*Иәүҙәт*:] — *Ундай ҡурҡаҡ йәнле дуҫтар ҡайҙа ла* ***эт тубығынан***. (Й. Солтанов.) [*Наҡышев*:] ... *Һинең ярҙамың кәрәк миңә. Касьяновҡа аҡса түләгәнлекте дөрөҫләүсе кеше лә кәрәк. Әммә быныһы бигүк хәжәт түгел. Ундайҙар етерлек.* ***Эт тубығынан***. (Я. Хамматов.)

*син.*: эт боткоһөҙ.

**эт үткеһеҙ.** Бик ҡуйы, тығыҙ. *Һыу ҡайтҡас, һөрөнтө өйөлгән ер әрәмә араһында йәйҙең йәй буйы* ***эт үткеһеҙ*** *лапы булып ята.* (Ж. Кейекбаев.)

**эт һуғарыу.** Бушҡа ваҡыт уҙғарыу, файҙаһыҙ шөғөл менән булыу. *Көнө буйына* [*Юлай*] *тик* ***эт һуғарған***. — *Эш эшлә!* — *тиһәң телен сығарған.* (М. Кәримов.) — *Етәр һиңә* ***эт һуғарып*** *йөрөргә,* — *ти атайым бер көндө.* — *Әйҙә, минең янда эшләп ҡара.* (З. Хисмәтуллин.) *Балаларға эш ҡушырға кәрәк. Ул ваҡыт* ***эт һуғарырға*** *ваҡыт та ҡалмаҫ, теләк тә булмаясаҡ.* (Һөйл.)

*син. ҡар.*: ел ҡыуыу.

**эт һыйын килтереү.** Бик ныҡ итеп, эштән сығарып әрләү йәки туҡмау.

**эт эсенә һары май килешмәй.** Муллыҡ, аш-һыу файҙаға ашмаған кешегә ҡарата хурлап әйтелә. — ... *Һин ҡәҙерҙе белмәнең. Бынан һуң үҙеңә үпкәлә,* ***эт эсенә һары май килешмәй,*** *тиҙәр шул. Ярай, — тине* [*Баттал*]. (А. Таһиров.)

**эт эткә, эт ҡойроҡҡа <ҡойроҡ һыртҡа>.** Үҙенә ҡушылған эште икенсе кешегә ауҙарғанда әйтелә.

**эте лә, бете лә.** *һөйл.* Теләһә кем. *Пугачевтың исеме тиҙҙән ике ҡитғаға —* ***этенә лә, бетенә лә*** *таныҡлы буласаҡ.* (Б. Аҫылгужа.)

**эш бешеү.** Уңышлы барып сығыу, уңыу (*күберәк юҡлыҡ формаһында ҡулланыла*). *Сәйет кеҫә телефонына Солтандан ҡыҫҡа хәбәр алды. «****Эш беште!****» Был Солтандың юлы уңыуын аңлата ине.* (Б. Моталлап.) **Эш бешмәү:** *Малайҙар ҡарауыл начальнигының ыңғайына ла тороп ҡаранылар. Барыбер* ***эш бешмәне.*** (Ә. Бикчәнтәев.) ... *Ҡайһы берәүҙәр: «Нурамбәк менән* ***эш бешмәй****», — тип хәбәр таратҡандар.* («Сов. Башҡ.»)

**эшем төшһөн.** Берәй эшкә тәүәккәлләгәндә әйтелә. ***Эшем төшһөн!*** *Ҡайҙа китмәгән бер-ике көн, шул ялыусыны фашлайым әле.* (Һөйл.)

**эшем эйәһе (кешеһе)** *мыҫҡ.* Үҙ мөмкинлеген юғары баһалап та эшен эшләй алмаған, булдыҡһыҙ кешегә ҡарата әйтелә. *Был быжырҙың ... ҡыҫылмаған ере юҡ, йөрөй* ***эшем эйәһендәй*** *булып, һөмһөҙ.* (Ж. Кейекбаев.) *Теге өс* ***эшем эйәһе*** *лә телятник ремонтлауҙы срогынан алда тамамлаған икән, тип һөйләйҙәр.* («Һәнәк».) *Абау,* ***эшем кешеһе*** *Йәнтимер, йыуан менән ҡыҫҡа араһында әллә кем булып ултыра.* (С. Агиш.)

**эшем юҡ буранда, атым юҡ урамда.** Йән тыныслығын, бошмағанлыҡты раҫларға тырышҡанда әйтелә. [*Нурый*:] — *Мин әйтәм, үҙең әйтмешләй,* ***эшем юҡ буранда, атым юҡ урамда,*** *тигән булам.* (А. Таһиров.)

**эшен бөтөрөү** *кемдең.* Үлтереү йәки бик ҡаты туҡмау. *Ҡулға төшкән Дутов ялсыларын «әһ» тиҙермәй* ***эшен бөтөрҙөң****!* (Ш. Бабич.) *Буранбай ҡамсыны әләктереп ала, байҙың үҙен аттан һөйрәп төшөрә лә* ***эшен бөтөрә.*** («Сов. Башҡ.»)

**эшен килтереү** *кемдең, нимәнең.* 1. Эште эш итеү, еренә еткереү. [*Ҡарт*] *Һыланы тәҙрәләрҙе,* ***килтереп эшен,*** *ярыҡтарҙан ҡышҡы елдәр өрмәһен өсөн.* (М. Сөндөклө.)

2. Эшлектән сығарыу, сифатын юғалтыу. *Салбарҙың эшен килтереү.*

3. Ныҡ әрләү, йәки туҡмау. *Эшен килтереп һүгеү.*

**эшең уң булһын.** Эш башлаған кешегә әйтелгән теләк.

**эше таш түгел** *кемдең.* Ниҙелер күтәргә теләмәгән, ашыҡҡан кешегә ҡарата, эше аҙлығына баҫым яһап әйтелә. [*Муллыгул Муллабаевич*:] — *Инспекторҙарҙың* ***эше таш түгел,*** *өлгөрөрҙәр! Бында дәүләт милке юғала, шуның әҙенә төшөргә кәрәк...* (Й. Солтанов.)

**эш итеү** *нимәне.* Рәткә килтереү ... *Исмәғил бесәнен, көндәр яуынға әйләнеп китеү сәбәпле, ваҡытында* ***эш итә*** *алманы.* (Ж. Кейекбаев.)

**эш йөрөтөү**. Ниҙелер юллау.

**эшкә ашыу**. Үтәлеү, ғәмәлләшеү. *1914 йылда инде уның хыялы* ***эшкә ашҡан***. *...Бер ағаһының ярҙамы менән, Өфөгә килеп, «Ғәлиә» мәҙрәсәһенә уҡырға урынлаша.* («Сов. Башҡ.»)

**эшкә егеү** *кемде, нимәне.* Эшләтеп ебәреү. *Двигателде мөмкин тиклем тиҙерәк* ***эшкә егергә*** *кәрәк ине.* («Сов. Башҡ.»)

**эшкә инмәгән**. Булмаған, бик булдыҡһыҙ, йүнһеҙ. *Зөмәйрә үҙе бер* ***эшкә инмәгән*** *кеше бит инде.* (Р. Солтангәрәев.)

**эшкә индереү** *нимәне.* Рәткә килтереү, эшкә ашырыу. *Игенде йыйыу менән түгел, уны* ***эшкә индерергә*** *лә кәрәк.* (Ғ. Лоҡманов.)

**эш ҡыйратыу (ҡырыу)** *мыҫҡ.* Әҙ-мәҙ генә эшләү (*күберәк юҡлыҡ формаһында ҡулланыла*). — *Хатта иртәгә үк барып сыҡ, — тине Бәҙрихәйәт. — Пенсионер булғас, йортта әллә ни* ***эш ҡыйратмайһыңдыр*** *әле?..* (Д. Исламов.)

**эш сығыу**. Файҙа, йүн булыу.

**эш тормаҫ (ҡалмаҫ)** *кемдән.* Үтәлерҙе, башҡарылырҙы нығытып әйткәндә ҡулланыла. *Минән эш ҡалмаҫ, яҙырмын.*

**эшлектән сыҡҡан**. Рәте киткән, көсө ҡайтҡан (*кешегә ҡарата*), боҙолған (*машина һ. б.*). *Батша заманында кешенең ҡәҙере булманы шул.* ***Эшлектән сыҡҡан*** *ҡарт ҡоро тураһында хәстәрлектең нисегерәк булыуын һөйләп тораһы ла юҡ инде.* («Сов. Башҡ.»)

**эш олоға (ҙурға) китеү**. Эш-хәл ауырлашып, сиселмәҫ хәлгә килеү. *«****Эш олоға китеп*** *барғанға оҡшай, бөгөн үк һөйләшергә кәрәк был малай менән», — тип уйланы* [*Шакир*]. (Н. Мусин.)

**эш сығарыу**. Эште эш итеү, еңеп сығыу.

**эште олоға (ҙурға) ебәреү**. Бәләкәй, еңел нәмәне сурытып ҡатмарлаштырыу. — *Һеҙ, иптәш замполит,* ***эште*** *ул тиклем* ***ҙурға ебәрмәгеҙ*** *әле, — тине майор, бер аҙ һүҙһеҙ ултырғас.* (Н. Мусин.)

**эштән сығыу**. Боҙолоу, ҡыйрау (*машина һ. б.*). *Радиаторында һыу булмаған автомобиль бик тиҙ* ***эштән сыҡҡан***. («Сов. Башҡ.»)

**эштән сыҡҡан**. Бик ныҡ, үтә (*берәй сифатҡа ҡарата көсәйтеү өсөн әйтелә*). *Мөәзиндең бөтә ғаиләһе бер төрлө, һәммәһе лә* ***эштән сыҡҡан*** *һарандар.* (С. Агиш.) [*Фәйрүзә:*] *Унан һуң, мин —* ***эштән сыҡҡан*** *ялҡау, сәй ҡайнатып эсерә лә белмәм.* (Ҡ. Даян.)

# Ә

**әбей(ҙәр) сыуағы.** Көҙгө йылы, аяҙ көндәр. *Ҡапыл йылытып ебәрҙе, **әбейҙәр сыуағы** башланды.* («Сов. Башҡ.»)

**әҙергә бәҙер (хәҙер) булыу.** Үҙе эшләмәй, кеше эшләгәндән файҙаланыу. [*Бикмәтов*] *үҙе хәстәрен күрмәй. «Алма беш, ауыҙыма төш» тип, **әҙергә бәҙер булып** тик йөрөй.* (Ә. Вәли.) *Ҡалғандар кем уҙарҙан уға* [*Әхмәҙиғә*] *ҡушылды: — Һеҙ ярмандарҙың ҡотон ала тороғоҙ, **әҙергә хәҙер булып** беҙ барып төшәрбеҙ.* (М. Ямалетдинов.)

**әҙәм аҡтығы.** Бик насар, һомһоҙ кеше. — *Мин үҙем ташланам диңгеҙ ҡосағына. Бынауындай **әҙәм аҡтығы** менән мин, хатта һеҙ теләһәгеҙ ҙә, һораһағыҙ ҙа, бер карапта ҡала алмайым.* (З. Биишева.) *Һуғыш ваҡытында методик кабинеттың директоры булып торған бер бәндә газета подшивкаларын урлап, һатып эскән... Шулай итеп, был **әҙәм аҡтығы** тарихты яндырған.* (Р. Ғарипов.)

**әҙәм аяҡ баҫмаған** [урын, ер]. Кеше йөрөмәгән, үтә ҡырағай (*урындар*). *Артабан **әҙәм аяғы баҫмаған** урмандар башлана.* (Ж. Кейекбаев.)

**әҙәм булыу.** Эш-хеҙмәттә үрләү йәки уҡып сығып, һөнәрле булыу. *Һөйөн, әсәй, теләгең ҡабул булды, үҙең әйтмешләй, улың, күҙ нурың, **әҙәм була!*** (Ф. Иҫәнғолов.)

**әҙәмгә һанау** *кемде.* Ихтирам итеү, хөрмәт күрһәтеү. *Миңһылыу еңгә **әҙәмгә һанап** килеүемә, һөйләшеп ултырыуыма тағы бер рәхмәт әйтте.* (Р. Солтанғәрәев.)

**әҙәм көлкөһөнә ҡалыу.** Оят, мәсхәрә хәленә төшөү. — *Һеҙ бит мине лә, үҙегеҙҙе лә **әҙәм көлкөһөнә ҡалдырҙығыҙ.*** (И. Насыри.)

**әҙәм ҡалдығы.** Кешелектән сыҡҡан, бик насар кеше (*әрләү һүҙе*). [*Начальник:*] ... *Мерзавецтар! Бының өсөн һеҙгә каторга, Себер, төрмә, расстрел! Бына нимә кәрәк һеҙгә, **әҙәм ҡалдыҡтары.*** (Х. Ибраһимов.)

**әҙәм мәсхәрәһе итеү (мәсхәрәһенә ҡалдырыу)** *кемде.* Хурлау, оятҡа ҡалдырыу. *Былтыр һайлау мәлдәрендә, мине кулак тип, кеше көсөнән файҙалана тип, **әҙәм мәсхәрәһе иттеләр** бит, үҙең дә беләһең...* (Ғ. Дәүләтшин.)

**әҙәм рәтле.** Эшкә инғән, йүне булған. *Барып ял итәйем тиһәң, **әҙәм рәтле** клубы юҡ.* («Сов. Башҡ.»)

**әҙәп һаҡлау.** Әхлаҡ ҡағиҙәләрен тотоу, тупаҫлыҡ эшләмәү. *Рабиға апайҙың аҡланыуы әсәйемде сәмләндереп кенә ебәрҙе, **әҙәп һаҡлайым** тип торманы, аяуһыҙ битәрләп ташланы.* (Я. Вәлиев.)

**әжәл дарыуы**. 1. Үлемдән ҡотҡара торған сара. *Әжәлгә дарыу булыу.*

2. Бик кәрәк булып та, үҙе бик әҙ нәмәгә ҡарата әйтелә. *Ашлыҡ күп хәҙер, ә бесән **әжәл дарыуына** әйләнде.* («Сов. Башҡ.»)

**әйләнгән һайын**. Бик йыш, әлдән-әле. *Әсәйем **әйләнгән һайын** һине һорашып ҡына тора.* (Б. Бикбай.)

**әйләнеп тә ҡарамау** *кемгә, нимәгә*. Игтибарға алмау, диҡҡәт итмәү. *Ағалары Шаһиәхмәт менән Әхмәҙи йәш саҡтарында **ҡартҡа әйләнеп тә ҡараманылар**.* (Ж. Кейекбаев.)

**әйтерең бармы <ауыҙының-моронон ҡыйшайып>** 1. Аптырау, гәжәпләнеү белдергәндә әйтелә. *Хәйер, әйтеүе генә анһат: һикһән йәш — һикһән йыл күрәш, йәшәү өсөн күрәш. **Әйтерең генә бармы**?!* (З. Биишева.)

2. Колоу, маҡтаныуҙы белдергәндә әйтелә. *Йәш кәләш янына мыйыҡты бороп ҡына барып керәм. **Әйтерең бармы!..*** («Сов. Башҡ.»)

**әйткәнде аңлау**. Кешенең кәңәшен, шелтәһен ҡабул итеү. *Һис **әйткәнде аңламай** бит был бала тигәнең, үҙенсә эшләй.* (Һөйл.)

**әйтмә лә инде**. Берәйһенең һүҙен шаяртып ҡеүәтләгәндә әйтелә.

**әйттең ни ҙә әйтмәнең ни** *кемгә*. Әйткән һүҙҙе, биргән кәңәште тыңламаған кешегә ҡарата гәйепләү менән әйтелә.

**әйтһәң һүҙ, тортһаң күҙ**. Ниҙер эшләгәндә, һөйләгәндә зыян килеүенән шикләнгәндә әйтелә. *Ҡалтырай егет ҡайғынан, үҙе ағарып ҡатҡан. **Әйтһәң һүҙ, төртһәң күҙ** бит ул, — биш йөҙҙән ҡолаҡ ҡаҡҡан.* (Т. Арслан.)

**әкиәт һатыу**. Юҡ-бар, буш хәбәр һөйләү. — *Тапҡандар **әкиәт һата** торған урын, әйтерһең, мин бүрәнәне улар өсөн өйөп ҡуйған,* — *тип уйлай Яубаҫар.* (С. Агиш.) *Ҡапҡа төбөн йыйып алған йыйын эшлекһеҙ алғы эш хаҡында **әкиәт һата**.* (Т. Йәнәби.)

әлеге лә баяғы <Әҙелбикә таяғы>. Ҡабатлап әйтеп, иғтибарҙы йәлеп итеү өсөн әйтелә. *Ул саҡта әле минең йәшлек матурлығы ла бөтөп етмәгән саҡ. **Әлеге лә баяғы**, аҫау бейә кеүек тулап торған саҡ.* (З. Биишева.)

**әлепте* таяҡтан айырыу**. Әҙ-мәҙ уҡый-яҙа белеү, хәреф таныу.

[*Әлеп (әлиф) — ғәрәп алфавитындағы беренсе хәрефтең исеме, ул таяҡ рәүешендә яҙыла.]

**әлепте* таяҡ тип белмәү**. Тома наҙан булыу, уҡый-яҙа белмәү. *Беҙҙең өсөн китап — сыбар ҡағыҙ, **әлепте таяҡ тип белмәгәс**.* (С. Ҡудаш.) [*Аҡназар*] *Бынағайыш! **Әлепте таяҡ тип белмәгән** тома наҙан башы менән шундай эшәке юлға төшкәнме*? (М. Тажи.) *Бына шулай инде, хәҙер бына, үҙем һаман **әлепте таяҡ тип белмәһәм дә**, уның китаптарын һаҡлап ултырған булам.* (З. Биишева.)

**әлеп-биҙән* башлау**. Иң баштан төшөү (*уҡыу, ғилем алыуға ҡарата*).

[***Би** — ғәрәп алфавитындағы икенсе хәрефтең исеме].

**әллә балта һына, әллә түмәр ярыла.** Кемдең еңелеүен, бөгөлөп төшөүен йәки үлеүен алдан әйтеп булмағанды белдерә.

**әллә кем булыу.** Үтә маһайып китеү, шапырыныу. [*Нигмәтулла*:] — *Ҡолсобайҙың Ҡолсобайы ла **әллә кем булып** ҡылана. Һуғыш байҙар өсөн генә файҙалы, тип ҡысҡыра.* (Я. Хамматов.) *Ошондай «оло кешене» үҙҙәренә фатирға ҡуйыуға хужа апай **әллә кем булып** китте шикелле.* (Р. Солтангәрәев.)

*син.*: морон күтәреү, танау сөйөү.

**әллә кем түгел.** Үтә маҡтансыҡ кешегә ҡарата кәмһетеберәк әйтелә. *Һин дә **әллә кем түгел**, мин дә әллә кем түгел, һинең әллә кем булыуың әжәлгә дарыу түгел.* (Таҡмаҡтан.)

**әллә ҡайҙа китмәгән.** Бик шәптән түгел, маҡтарлыҡ йүне юҡ. *Ана тегендә, өҫкө һәндерәнән аяҡтарын һәлендереп, ...егерме биштәр тирәһендәге сибәр ир ултыра. Буй-кәүҙә яғынан да **әллә ҡайҙа китмәгән**.* (М. Кәрим.) *Һөйләгәндәремдән үк күреп тораһығыҙ, Әмирханов үҙе лә **әллә ҡайҙа уҡ китмәгәнерәк** шикелле, ашығыс амин тота.* (С. Агиш.)

**әллә күпме.** Бик күп. *Ай китә был, йыл китә, **әллә күпме** ер китә.* (Әкиәттән.)

**әллә ниҙә бер.** Бик һирәк. *Олатайым беҙгә **әллә ниҙә бер** генә килә.* (Һөйл.)

**әмәлгә ҡалғандай (баҡҡандай, таянғандай).** Көтмәгән, теләмәгән хәл килеп сыҡҡанда, үкенес белдереп әйтелә. ***Әмәлгә ҡалғандай**, айғырға алмашып алған бейә бик ҡарт булып сыҡты.* (Ж. Кейекбаев.) ***Әмәлгә баҡҡандай**, шунан ете көн үтеүгә, ҡартатайың бахыр сәсрәп ауырып китте.* (Һ. Дәүләтшина.) *Бабай улын етәкләп ауылға барып инһә, **әмәлгә таянғандай**, бер өй алдында өс-дүрт ҡыҙ һөйләшеп тора, ти.* (Әкиәттән.)

**әмәлгә ҡаршы.** Көтмәгәндә килеп сыҡҡан уңай хәлгә ҡарата ҡәнәғәтлек белдергәндә әйтелә. ***Әмәлгә ҡаршы**, бригадир уға [Арыҫланбәккә] һалам ташырға әйтте.* (Р. Низамов.)

**әмәлен табыу** *ниҙең*. Башҡарыу, үтәү юлын белеп алыу. *Эштең әмәлен табыу.*

**Әндрәй ҡаҙнаһы***. Бөтмәҫ-төкәнмәҫ хазина, аҡса, байлыҡ сығанағы (*күберәк юҡ икәнде белдереп әйтелә*). [*Таиба әбей*:] — *Етемде аҫра ла, уҡыт та... Һин, Хаммат, әсәйеңдең өйөн **Әндрәй ҡаҙнаһы** тип беләһең, ахыры!* (З. Биишева.) [*Дәүләт ағай ҡатынына*:] *Аҙна һайын сабата үреп торормонмо ни мин һиңә, әллә **Әндрәй ҡаҙнаһы** бар тип беләһеңме бында.* («Сов. Башҡ.»)

[***Әндрәй** — XVIII быуаттың икенсе яртыһында Өфө губернаһы хакимы, башҡорттарға сикһеҙ һалымдар һалып, ҙур байлыҡ йыйған, һуңынан хөкөмгә тарттырылған Андрей Жихаревтың исеменән булырға тейеш.]

**әпен-төпөн (әүеш-тәүеш) итеү** *һөйл.* Өҫтән-мөҫтән генә эшләү. ***Әпен-төпөн итеп** кенә өй һалмайҙар.*

**әрем (әсе) тел(ле), теле әрем (әсе)** *кемдең.* Үҙәккә үтерлек, уҫал итеп әйтә торған, зәһәр телле. *Ҡашай тоҡанып китте: — **Әрем тел һин**, ахыры, эсең боша, сүп өймәһәң кеше өҫтөнә.* (М. Тажи.) *Шул **әрем телдәр** эргәһенән тиҙ генә сығып китеп буламы ни?* (Н. Мусин.) *Бигерәк тә Хәмзәнең апаһы **әсе телле**.* (С. Агиш.)

**әрәм итеү.** 1. *нимәне.* Юҡҡа сығарыу, файҙаһыҙ тотоноп бөтөү. *Аҡсаны әрәм итеү.* ▬ [*Йәнтимер*] *Кеҫәһенән папиросын алды, ҡабыҙа алмай, әллә нисә шырпы **әрәм итте**.* (С. Агиш.)

*син.*: һыуға һалыу, елгә осороу, әрәм-шәрәм итеү.

2. *кемде.* Мәсхәрә итеү, намыҫынан колөү (*гәҙәттә, ҡыҙҙарҙан*).

**әрәм тамаҡ.** Эшләмәй, кеше елкәһендә йәшәгән кешегә ҡарата нәфрәт менән әйтелә. *Өйҙә **әрәм тамаҡ** булып теләмәйем йәшәргә.* (Ҡ. Даян.) *Ҡайҙалыр **әрәм тамаҡ** байҙар ер ҡорто һымаҡ ошо юл буйлап аҡҡан байлыҡты ашап һимергәндәр.* (Ә. Вахитов.)

**әрәм-шәрәм итеү** *нимәне.* Тәләфләү (*мал-мөлкәткә ҡарата*). [*Сәмиға улына*:] *Аҡсаңды **әрәм-шәрәм итеп***, аҡ күмәс ашап йөрөмә. (Х. Ибраһимов.)

**әрәсәһенә төшөноү** *нимәнең.* Асылын аңлау. *Сөнәгәт ... был эштең **әрәсәһенә** күптән **төшөнөп** алғайны инде.* (Ж. Кейекбаев.)

**әтәс булып ҡысҡырыу.** Йәшереп ҡуйған, йыйған затлы нәмәнең, аҡсаның билдәле булыуына ҡарата әйтелә. *Унан да былайыраҡ, кеҫәләге һары йомарсаҡ* [*алтын*] ***әтәс булып ҡысҡырырға** әҙер, әгәр артабан да бында ҡалһа, түҙҙермәҫ, телде ҡысыттырып тик торор.* (М. Ямалетдинов.)

**әтәсе лә йомортҡа һала** *кемдең.* Эше, мал табыуы ғел уңышлы барған кешегә ҡарата әйтелә.

**әүен баҙарына китеү** *шаяр.* Йоҡоға талыу, йоҡлап китеү. *Айбулат, әсәһенең йырын тыңлағандай итеп, бер аҙ ятҡас, **әүен баҙарына китеп** тә барҙы.* (Т. Килмөхәмәтов.) *Ҡартырағтар, ... йыбана башлағас, берәм-һәрәм ҡыуыштарына инеп **әүен баҙарына китәләр**.* («Сов. Башҡ.»)

**әшептән тыш.** Бик ныҡ, артыҡ. *Был ҡыланышың **әшептән тыш** булып китте.* (Һөйл.)

# Ю

**юғалып ҡалыу.** Ни эшләргә белмәй аптырау. [*Көршәкте күргәс, мин*] *... ябай ғына итеп аңлатып бирергә лә һүҙ таба алмаҫымды тойоп, бөтөнләй **юғалып ҡалам**.* (З. Биишева.)

**юҡ итеү** *кемде*. Үлтереү, һәләк итеү. *Дошманды юҡ итеү.*

**юҡҡа мин дә туҡ.** Ниҙер һорағанға «юҡ» тип яуап биргән кешенән көләп әйтелә.

**юҡҡа сығыу.** 1. Бөтөү, бер ҙә ҡалмау. *Ҡалала аҡсам **юҡҡа сыҡты**.*

2. Бушҡа әрәм булыу, төшөп ҡалыу (*кешегә, уның эшенә ҡарата*). ***Юҡҡа сыҡҡан**, юҡҡа икмәкте сереткән бәндә мин.* (Ш. Бабич.) *Уҡытыусы үҙ фәнен ныҡлы белмәһә, ... уның бөтә тырышлығы **юҡҡа сығасаҡ**.* («Сов. Башҡ.»)

**юҡтан бар ғына.** Рәт-йүне булмаған нәмәгә, көсһөҙ кешегә ҡарата кәмһетеп әйтелә. *Минең машина шул **юҡтан бар ғына** инде ул.*

**юҡтан ҡоҙағый.** 1. Яһалма туған.

2. Бик булмаганда, һис юғында. *Атайым мәрхүм әйтмешләй, [һыу башняһы] **юҡтан ҡоҙағый**. Мөмкинлек булмағандан эшләнгән ваҡытлы нәмә.* (И. Ғиззәтуллин.) *Профессиональ әҙиптәр юҡ. Бәғзе бер жанрҙар, әҙәби тәнҡит **юҡтан ғына ҡоҙағый** тиерлек.* (Ғ. Хөсәйенов.)

**юҡтан йүкә һуйҙырыу.** Булмаҫтайҙы талап итеү. — *Ярай улай булғас, **юҡтан йүкә һуйып** булмай инде, — тине Әҙһәм ҡарт күңелһеҙ генә һәм китте.* (Ж. Кейекбаев.)

**юҡ тиғәндә лә...** Бөтөнләй кәрәкмәй тип һанағанда ла (*ниҙер эшләү*). *Кешегә хас бер ғәҙәт бар — ул үҙ эшенең һөҙөмтәһенә **юҡ тиғәндә лә** бер ҡарап, һөйөнөп, ғорурланып ҡуя.* («Сов. Башҡ.»)

**юҡты бар итеү.** Зур булдыҡлылыҡ күрһәтеү. *Беҙҙең кеүек ир-уҙамандар **юҡты бар итә** белә.* («Сов. Башҡ.»)

**юҡты бушҡа ауҙарыу (бушатыу).** Файҙаһыҙ нәмә менән булыу, бушҡа ваҡыт уҙғарыу.

**юҡтың башын ауырттырыу.** Булмаҫтай хәбәр һөйләгән, урынһыҙ талап ҡуйған кешегә ҡарата ризаһыҙлыҡ белдереп әйтелә. — *Их, был тиклем тәмле аштар алдынан бер бәләкәй ҙә булһа икән! — тип, уйынлы-ысынлы хыял итеп ҡуйҙы Новиков. — Ярар, ярар, **юҡтың башын ауырттырма** инде.* (Д. Юлтый.) *Янтурин: — **Юҡтың башын ауырттырып**, донъя бутамағыҙ!* (Н. Ғәлимов.)

**юҡ юғалтып (юҡлап) йөрөү.** Ҡыҙ һоратырға килгән кешенең һүҙ уйнатып, шаярып әйтеүе. *«**Юҡ юғалтып йөрөүсе**» Әхмәтша сәй эскәндә шырмыйланып, йор һүҙҙәр һөйләп ултырҙы.* (Ж. Кейекбаев.) *Мин барып инеп, сәләм бирҙем: «**Юҡ юҡлап йөрөйөм**, ул һеҙҙә юҡмы икән?» — тип үҙебеҙҙең йола менән генә һүҙ башлағас та, [Үмәрҙең] төҫө боҙолоп китте.* (Һ. Дәүләтшина.)

**юл алыу (тотоу).** Бер йүнәлештә хәрәкәт итеү; йүнәлеү. *Егет, Һыуһылыуҙы, толпары менән шоңҡарын алып, күлдән сыға ла Балҡан тауға табан **юл тота**.* (Әкиәттән.)

**юл асыу (ярыу)** *кемгә, нимәгә*. Хәрәкәт итергә, эшләргә, тормошҡа ашырға мөмкинлек тыуҙырыу. *Ауырыраҡ бына хеҙмәтеңдә еңеүҙәргә яңы **юл ярыу**.* (Ә. Ғайсин.)

**юл башлау**. Етәкселек итеү.

**юл биреү** *кемгә, нимәгә*. Эш-хәрәкәткә ирек ҡуйыу. *Көсөң, аҡылың бөтһә, миһләт ал, Башҡаларға бир һин тиҙерәк* ***юл***. (Д. Юлтый.)

**юлға арҡыры төшөү (тороу)**. Эшкә, хәрәкәткә ҡамасаулау.

**юлға кәртә булыу**. Эшкә, хәрәкәткә ныҡ ҡаршы тороу. — *Минең* ***юлға***, *тимәк, һин* ***кәртә булдың****?* (Н. Мусин.)

**юлға туҙан ҡундырмау**. Ҡайҙалыр йыш-йыш барып йөрөй. Ысынлап та һүҙендә торҙо. *Үлмәҫбикә йыш килде, бигерәк тә атаһы-әсәһе вафат булғас,* ***юлға туҙан ҡундырманы***. (З. Ҡаҙаҡбаева.)

**юлға һалыу** *нимәне*. Рәткә килтереү, эшләтеп ебәреү. *Малсылыҡты ҡасан* ***юлға һалырға*** *уйлайһығыҙ?* (Д. Исламов.)

**юлдан алыу** *кемде, нимәне*. Ҡаршылыҡ күрһәткән, ҡамасаулаған нәмәне йәки кешене ситкә ҡуйыу, алып ташлау. *Теге Йыһангир хәрчәүниктәрҙе* ***юлдан алып*** *ырғытырға кәрәк*. (С. Агиш.)

**юлдан сығыу (яҙыу)**. Эштә, тормошта билдәле ҡағиҙәләрҙән ситкә китеү, яңылышыу.

**юлдан яҙҙырыу (тайҙырыу)** *кемде*. Эш-тормошта дөрөҫ йүнәлештән тайпылдырыу, яңылыштырыу. *Каргина ире менән самогон һатыу кәсебенә бирелгән, күп кешеләрҙе ағыулағандар, күптәрҙе* ***юлдан яҙҙырғандар***. («Сов. Башҡ.»)

**юл ҡуйыу** *кемгә*. Ирек биреү, теләгәнен эшләргә мөмкинлек биреү. [*Әсәйем дауам итте*:] — *...****Юл ҡуйырға*** *ла тура килә иргә, уны тыңлап, үҙеңсә эшләгән саҡтарың да була*. (Я. Вәлиев.) *«Өйрәнсектең тамағы туҡ булһын өсөн генә, теге тупаҫ балсыҡ көршәктәр менән ауылды сүпләргә* ***юл ҡуйып*** *та булмай ҙа баһа?» — тип аптыраған хәҙер Һөнәрсе*. (З. Биишева.)

**юл тотоу** 1. Йүнәлеү, йүнәлеш алыу, нимәгәлер табан барыу. *Ташкентҡа* ***юл тотоу***.

2. Ниндәйҙер ҡараш тороу, шул яҡлы булыу. *Бәхетлемен ошо хәлдән, бутән бер хәл дә көтмәйем, ошо юлдан ризамын, башҡа төрлө* ***юл да тотмайым***. (Ғ. Туҡай.)

**юл төшөү**. 1. Бурандан һуң йәки башҡа берәй сәбәптән ябылып торған юл яңынан асылыу, тапалыу. ***Юл төшкәс****, өләсәйеңдәргә барырбыҙ инде*. (Һөйл.)

2. Барырға, килергә мөмкинселек асылыу. *Өҙөлөп-өҙөлөп һағынһам да,* ***юл төшмәй*** *бит барырға*. (М. Илбаев.) ***Юл төшөп****, Ҡарағайға командировкаға килдем*. («Сов. Башҡ.»)

**юлыңда бул**. Кәрәкһеҙгә килеп ҡыҫылған кешене эргәнән ҡыуғанда асыу менән әйтелә. — *Бар, бар* ***юлыңда бул****! — тип мине типкеләп сығарҙы ла зәңгәр ҡапҡаны бикләп ҡуйҙы*. (Ғ. Ғүмәр.)

**юлың уң булһын**! Юлға сыҡҡан кешегә әйтелгән яҡшы теләк. — *Ярай, ярай,* ***Юлығыҙ уң булһын****, эшегеҙ эш булһын*. (Һ. Дәүләтшина.)

**юрғанға ҡарап аяҡты һуҙыу.** Мөмкинлеккә ярашлы итеп эшләү (*гәҙәттә, ниҙер алғанда булған аҡсаға ҡарата*).

**юха йылан** *һөйл., яманл.* Теле менән йыуып, яуызлыҡ эшләгән кеше тураһында әйтелә. ***Юха йылан,*** *алдап-йолдап булһа ла үҙенекен итә бит.* (Һөйл.)

# Я

**яғанан алыу.** Ниҙер талап итеп ҡыҫмаға алыу. *Ямандан бурыс алһаң, йорт алдында* ***яғаңдан алыр.*** (Мәҡәл.) *Килер заман —* ***алырбыҙ*** *Залимдарҙың* ***яғаһынан.*** (М. Ғафури.) — *Бәй, ил аулаҡ булһа, дуңғыҙ түбәгә сыға. Бында унның* ***яғаһынан алырҙай*** *кеше булмағас, иркенләй.* (Һ. Дәүләтшина.)

**яҙмыш ҡосағына ташлау** *кемде.* Ҡайғыртмай, ҡарамай үҙ йүнен үҙе күрергә мәжбүр итеү.

**яҙыҡ маңлай.** Асыҡ йөҙлө, алсаҡ кеше.

**яйға һалыу.** Рәткә килтереү, рәтләп ебәреү. *Көҙ етеп бөттө, ауылдарҙа уҡыу эшен күптән* ***яйға һалырға*** *ваҡыт.* (Ф. Иҫәнғолов.)

**яҡты күҙҙә.** Көн яҡтыһы бар саҡта, ҡараңғы төшмәҫ борон. *Бүтәндәре лә: — Эйе шул, көн кисәүләп китте лә,* ***яҡты күҙҙә*** *ерләргә кәрәк ине, — тиештеләр.* (Һ. Дәүләтшина.) [*Шәрәфи*:] *Туҡта әле,* ***яҡты күҙҙә*** *тауҙағы көтөүгә барып ҡайтырға кәрәк.* (Х. Ибраһимов.)

**яҡшы булыу.** Берәй эш-ҡылығы насар барып сыҡҡан кешене үсәгәндә әйтелә. *Уларҙың бисәләре, бына ошонда килеп, беҙҙең рәткә тоҡ ямап ултырһалар, беҙҙең эшләгәнгә ауыҙ ҡыйшайтып көлөп тормаҫҡа* ***яҡшы булыр*** *ине.* (М. Тажи.)

**яҡшы итеү** *кемде.* Үсәп әйтелә. *Иллә* ***яҡшы иттем*** *үҙен, индермәнем дә ҡуйҙым.* (Һөйл.) *Тимер уны, елкәһенән тотоп, елтерәтеп тышҡа сығарып ебәрҙе.* ***Яҡшы иткәндәр.*** (Б. Бикбай.)

**яҡын да килмәү.** Риза булмау, ризалыҡ бирмәү. *Хәмдиә быға* ***яҡын да килмәне:*** *— Ҡуй, ҡуй, кәрәкмәй, мин тоҙ күҙ Мырҙағәлигә бараммы һуң.* (Һ. Дәүләтшина.) [*Әҫкәпъямалды*] *алып ҡайтырға тигәс, ҡыҙы Ынйыбикә* ***яҡын да килмәне.*** (Р. Солтангәрәев.)

**яҡын (йылы) күреү (итеү).** Үҙ кеше һанап, йылы мөнәсәбәт күрһәтеү. ***Яҡын күргән*** *дуҫыңдың атын алма, тайын ал.* (Мәҡәл.) *Кем генә булырға теләһәң дә, аҡыл өйрәтә алырмын. Мин һине тере генә башҡорт балаһы итеп* ***яҡын күрәм.*** (С. Агиш.) [*Гриша*] *... тағы ла Айбулатҡа ҡарап торҙо. Был юлы аптырап түгел,* ***яҡын күреп*** *ҡараны.* (Һ. Дәүләтшина.) *Өйҙәш һине* ***яҡын***

*итә, ахыры, Маһира. Ятһа ла, торһа ла телендә һин, — тине* [*Ҡунаҡколдоң ҡатыны*]. (Х. Ғиләжев.)

**яла (бәлә) яғыу (ябыу)** *кемгә.* Булмаған ғәйепте ташлау. *Председателгә **яла яғыу** ревизор функцияһына инмәй.* (И. Ғәлимов.) [*Абдуллиндың*] *бөтә эше кешегә **бәлә яғыу**, нахаҡтан кеше рәнйетеү...* (Я. Хамматов.) *...Ҡулға алыныусыларға күрәләтә **яла яптылар:** йәнәһе, улар бола ҡуптарырға әҙерләнгәндәр, бунтовщиктар...* (Ж. Кейекбаев.)

**ялҡын йотоу.** Оло михнәт, ғазап кисереү. — *Күрмәгәнгә көл дә аш, тигәндәй, яндырылған илемдә күмер яҫтап, **ялҡын йотоп,** ел уртлап йөрөгәнсе тип, ошонда килеп эт күрмәгәнде күреп булһа ла эш эшләп йөрөгән булам.* (Т. Хәйбуллин.) ***Ялҡын йотоп** йөрөп аҡса табылды.* (Т. Баишев.) *Мәйсәрә ут, **ялҡын йотоп,** өйөнә ҡайтып бара...* (С. Кулибай.)

**яманатын һатыу** *кемдең.* Ғәйбәт таратып, исеменә тап төшөрөү, хурлау. [*Сынбулатов:*] — *Туҡта әле, Хафиз ағай, һин нишләп әле минең колхозсыларҙың **яманатын һатаһың**?* (М. Тажи.) *Иә мине лә «Ноғомановҡа эйәргән икән» тип, **яманатымды һатырҙар,** һинең кеүектәрҙән ҡасырға кәрәк.* (Ә. Харисов.)

**яман ауыҙ.** Оятһыҙ һүҙ, насар хәбәр йәки тупаҫ һөйләгән кеше. [*Айса ҡарт старшинаға*] *Ошо көнгәсә, халыҡ һинең турала **яман ауыҙ** асһа, мин бар хәлемсә һине яҡлай инем.* (Б. Бикбай.) *Ҡарт, бахыр, гәрлегенән уларға **яман ауыҙлап** һүгенде.* (Һ. Дәүләтшина.)

**яман <күҙ> күреү** *кемде.* Асыулы мөнәсәбәт белдереү, яратмай башлау. [*Туғандары*] *Нәфисәне орештолар — **яман күҙ күрҙеләр,** ҡарғанылар... Ата-әсәңдең биргән еренә ... риза булып, ҡарышмай бар, тинеләр.* (И. Көҫәпҡол.)

**яман өйрәнеү.** Ҡылыҡ-ғәҙәт боҙолоу, насарға әйләнеү. *Үпмәй ҙә генә тиеп үпкәләмә, үпһәм, ауыҙым **яман өйрәнә.*** (Халыҡ йырынан.) *Маһиҙә лә апа шундай сел ите ашап **яман өйрәнгән.*** (Н. Мусин.) **Яман өйрәтеү** *кемде, нимәне: Ашым күп тип, ауыҙыңды **яман өйрәтмә.*** (Мәҡәл.)

**янбашына күнәк элерлек** *кемдең.* Үтә ябыҡ (*мал-тыуарға ҡарата*). *Атлыҡса тишек-тошоҡ, һыуыҡ ел уйнай. Аттарҙың **янбаштары күнәк элерлек.*** (Б. Ишемғолов.)

**янға ҡалыу.** Үҙ файҙаңа булыу, ҡулға эләгеү. ...*Мәктәп формаларын бескәндә лә һәр бер өлгөгә бер нисәшәр миллиметр туҡыма **янға ҡала.*** («Сов. Башҡ.»)

**яңы һепертке ныҡ (яңыса) һеперә.** Яңы килгән түрәнең үҙ эшенә ҡаты тотоноуына, үҙ тәртибен урынлаштырыуына ҡарата әйтелә.

**яраға тоҙ һалыу (һибеү).** Онотолған ауыр кисерештәрҙе иҫкә төшөрөп, күңелгә ауыр итеү. *Етмәһә, һин, ти, миңә бисә итеп кенә ҡарайһың, тиргәй бит был, **яраға тоҙ һала.*** (Ф. Иҫәнғолов.) *Бер тапҡыр әрнеп, күптән уңалған **яраға** яңы **тоҙ һибеп,** әрнеүгә һалды* [*Алһыуҙы Яманһаров*]. (Ғ. Ибраһимов.) *Хәмит ни*

*ул бар тип тә белмәй. — Үҙең ғәйепле, — тип* ***яраға тоҙ һибә.*** («Сов. Башҡ.»)

**ярайһы ғына.** Байтаҡ, күп кенә. ***Ярайһы ғына*** *йоҡлап алдым.*

**ярап ятыу.** Килешеп тороу, уңай булыу (*уртасараҡ нәмәне маҡтағанда әйтелә*). *Беҙгә* ***ярап ята*** *ул.*

**«ярар»ҙың башы ауыртмай.** Эш-йомош ҡушҡанда гел ыңғай яуап биреп үтәмәгән, һүҙендә тормаған кешегә ҡарата көлөп әйтелә. *Йомош ҡушһаң, ҡарышмаҫ ул, гел генә әйтер «ярар»,* ***«ярар»ҙың башы ауыртмай,*** *әшкә итһә лә зарар.* (А. Игебаев.)

**яр аҫтынан яу сығарыу.** Көтмәгәндә шау-шыу, дәғүә ҡалҡытыу. [*Ныязғол Айбулатҡа*:] — *Туҡта, һөйләмә, ташла тим! Бына,* ***яр аҫтынан яу сыҡҡан!*** *Һиңә ни ҡалмаған.* (Һ. Дәүләтшина.) *Аҡназар*: ***яр аҫтынан яу сығармаҡ*** *була.* [*Илмырҙа*:] *Шабаш, баш ҡатты, инде нишләргә.* (М. Тажи.)

**...ярауын күреү** *ниҙең, ни эшләүҙең.* Берәй эш-хәлдән сығыу, ҡотолоу йүнен табыу. *Ҡуҙыйкүрпәс инәһенән ишетеү менән күңеленә ҙур ҡайғы төшә. Китәр* ***ярауын күрә*** *башлай.* (Эпостан.)

**ярҙам итеү урынына ярҙан этеү.** Файҙа эшләү урынына зыян итеү, өмөттө аҡламау.

**ярҙам ҡулы һуҙыу** *кемгә.* Кәрәк саҡта ярҙам итеү, бәлә-ҡазанан, ҡыйынлыҡтан ҡотҡарып алыу. [*Байтүрә*] ...*бәхетһеҙлеккә осраған кеше булһа, уға* ***ярҙам ҡулы һуҙырға*** *ла кәрәк ине бит.* («Сов. Башҡ.»)

**яр итеү.** Нимәгәлер саҡырып, хәбәр таратып оран һалыу. *Ауылда Талханың да кешеләре бар ине. Улар ялған хәбәрҙе бөтә ауылға* ***яр итеп*** *һөйләй башланылар.* (Ж. Кейекбаев.) *Герман Рәсәйгә һуғыш башлаған... Хөкүмәт тарафынан дөйөм мобилизация* ***яр ителгән.*** (Ж. Кейекбаев.)

**яр кеүек** [уңыу, үҫеү]. Бик ныҡ үҫеп, уңыш биреү (*иген тураһында*). *Евстафий сәскән тары, ҡарышҡан һымаҡ,* ***яр кеүек*** *булып уңды.* (Ж. Кейекбаев.)

**ярма (борсаҡ) ярыу.** Бик ныҡ маҡтаныу; шапырыныу. [*Тәфтизан*] *Юҡҡа ирәймәне, ҡупырайманы, Танау сөйөп,* ***борсаҡ ярманы...*** (А. Игебаев.)

**ярты аҡыл.** Аҡылы камил түгел, инәле-сығалы. *Исхаҡ иптәшенең был ҡыҙыулығына ла бирешмәне: — Харап икән! Ул аҡсалы булһа ла* ***ярты аҡыл.*** (Һ. Дәүләтшина.) ...*Операция ваҡытында ниндәйҙер тамырҙарым киҫелеп, ...****ярты аҡыл*** *булып ҡалдым.* (И. Ғиззәтуллин.)

**...ярты тин көмөш** *нимә.* Бер ни тормай, хаҡы-баһаһы бик түбән (*үтәлеше еңел булған эш-хәлгә, арзан нәмәгә ҡарата әйтелә*).

**яр* һалыу.** Бик ҡаты ҡысҡырыу; аҡырыу, һөрәнләү. *Фәхри* ***яр һалып*** *ҡысҡыра...* (Б. Бикбай.) [*Ялал менән Әкбәр*] *аунап ятҡан писерҙе күргәс, сарбайлап ҡысҡыра башланылар. Ауылға* ***яр һалдылар.*** (Т. Хәйбуллин.)

[*Яр — *фарс.* иглан, хәбәр, элек ул урамда ҡысҡырып әйтелгән, махсус ярсылар — ҡысҡырыусылар булған.]

**ярыҡ барабан** *һөйл., яманл.* Сер тотмаган, шаран-яра һөйләнеп йөрөгән кешегә ҡарата әйтелә. [*Сәйҙел*:] *Бештеме, Хазина әбей?*! [*Хазина*:] *Ҡысҡырма шул тиклем,* ***ярыҡ барабан***! (Ә. Атнабаев.) [*Барый*:] *Йөрәгемде ҡуҙғаттылар. Ә теге* ***ярыҡ барабанды*** *өҙгөләп ташларҙай булдым.* («Сов. Башҡ».) *Иплән кенә, гелән йөпләп кенә. Һәр заманға бар шул ярағайҙар —* ***ярыҡ барабандар.*** (Т. Йосопов.)

**ярылып ятыу.** Бик асыҡ, күренеп тороу. [*Дәүләтовтың*] *маҡтансыҡлығы бында инде, повестағы кеүек, асыҡ* ***ярылып ятмай.*** (З. Нурғәлин.)

**ярылырҙай булыу (ярылыр сиккә етеү).** Артыҡ көсәнеп тырышыу, ныҡ тырышыу.

**ярып һалыу.** Эш-хәлдең асылын, дөрөҫөн ап-асыҡ ҡына әйтеп биреү; асыу. [*Булат*:] — ***...ярам да һалам,*** *минеке ҡыҫҡа булыр! Гәрәй — зәһәр дошманмы? Дошман.* (Б. Бикбай.) — *Һөйләгеҙ һуң,* ***ярып һалығыҙ*** *бөтәһен дә. Директор тыңларға әҙерләнеп, Ярғаҡ янағына таянды.* (Н. Мусин.) [*Хәйбулла ағай председателгә*:] *Барырмын, туған, барырмын!* ***Ярып һалырмын*** *мин уларға!* (К. Мәргән.) *Әгәр ҙә кеше хаҡлы түгел икән, был хаҡта уға ап-асыҡ итеп* ***ярып һалырға*** *кәрәк...* («Сов. Башҡ.»)

**ят бауыр.** Бөтөнләй сит кеше, үҙ түгел. *Айтуған батырҙы Кинимәбай тархан күрһәтеп, төрттөрөп аҫтырҙы. Арабыҙҙағы* ***ят бауырҙар*** *беҙҙе харап иттеләр.* (С. Мираҫ.) — ***Ят бауырға*** *яу ҡаныр, — тине капитан, — ҡуҙғалдыҡ.* (Ә. Ихсан.) *Үҙемде ваҡытлы кеше,* ***ят бауыр*** *итеп тоям.* (Ә. Хәкимов.) *Аҡ ҡайындар ҙа, минең кеүек яманһыулап, үҙҙәрен* ***ят бауыр*** *тип һиҙәләрҙер.* (Ә. Бикчәнтәев.)

**ят бауырлы.** Ҡырыҫ тәбигәтле. — *Бына бит ул ҡайһылай* ***ят бауырлы.*** [*Айбулат*] *Бер ҙә беҙҙең кешенең ҡылығына тартмаған. Торғаны менән Сәлимә еңгә, бахыр, ҡырыҫ.* (Һ. Дәүләтшина.)

**ят итеү** *кемде.* Сит күреү, үҙ һанамау. *Ир башҡайҙарына нужа төшһә, яҡшы дуҫтар йөрөмәҫ* ***ят итеп.*** (Халыҡ йырынан.)

**ятҡа бикләү** *нимәне.* Ятлап алыу, һүҙмә-һүҙ хәтерҙә тотоу. *Отҡор Салих Туҡайҙың шиғырын, өс-дүрт тапҡыр ҡабатлағандан һуң,* ***ятҡа бикләп*** *тә алды,* (Х. Мохтар.) *Гөлсирә, Мөхәррәм хәлфәгә барып, Ғибатҡа хат яҙҙырҙы. Хаттың нисек башланып китеүе әллә ҡасан уҡ, әллә кем тарафынан яҙылып, хәҙер инде* ***ятҡа бикләнгән*** *бер һөйләм ине.* (Ж. Кейекбаев.)

**ятҡан ере йомшаҡ булһын** *кемдең.* Вафат булған кешегә ҡарата әйтелгән теләк.

**ят та үл (ятып үлерлек).** Иҫ китерлек, ғәжәп эш-хәлгә ҡарата әйтелә. *Көтмәгәндә шундай ҡыҙҙар осрай, Шундай ҡыҙҙар —* ***ят та үл инде***!.. *Ниҙәр уйлап, ниҙәр кисергәнде Үҙең күр ҙә үҙең бел инде...* (Р. Ғарипов.)

**ятып аунаһаң да бөтөрлөк түгел.** Ерҙәге бик күп еләк-емешкә ҡарата әйтелә.

*син.*: ҡыҙыл сәкмән япҡан кеүек.

**ятып ҡалгансы атып ҡалыу.** Файҙаһы, әҙемтәһе булыр-булмаҫын белмәйенсә ниҙер эшләп ҡалырға тырышыу. *Бөгөн иҫәп һорауым да уның булыуына ышанғандан түгел,* ***ятып ҡалғансы атып ҡалыу*** *ғына ине.* (С. Агиш.)

**ятып ҡалыу.** Һуғышта һәләк булыу, үлеп ҡалыу. *Наташаның атаһы һуғыш майҙанында* ***ятып ҡалды****...* (Ә. Бикчәнтәев.) *Бик күп батырҙар, тыуған төйәктәренә әйләнеп ҡайта алмайынса, яу ҡырында* ***ятып ҡалды.*** («Сов. Башҡ.»)

**яуап биреү.** 1. Яуап итеп ниҙер башҡарыу. *Саҡырыуға эш менән яуап биреү.*

2. Сифаты буйынса юғары кимәлдә булыу. *Тауар бөтә талаптарға ла яуап бирә.*

**яу кисеү.** Яуҙа ҡатнашыу. *Ҡаныҡаиҙы Дим буйында тирмәләрҙә ҡәрҙәш-ырыуҙары шатланып ҡаршы алған. Унан ниндәй* ***яуҙар кискәнлеге,*** *ҡайҙарҙа булыуы хаҡында һорашҡандар.* (Риүәйәттән.)

**яу һалыу.** Нык итеп ҡысҡырыу, һөрәнләү. *Тауышҡа өй күтәрмәһенә Гөлсәғүрә аһылдай-ғыжылдай килеп сыҡты. — Сәлимә, аһ-аһ, нишләп улай* ***яу һалаһың****? Эшең юҡмы әллә?* (Ф. Иҫәнғолов.)

**яфа сигеү (күреү).** Этләнеү, ыҙа кисереү. *Һин бит кинйә улыңды ас-яланғас итмәү өсөн, уның ғүмере өсөн ауыр йылдарҙа ниндәй* ***яфалар сикмәнең.*** («Сов. Башҡ.»)

# ЙӨКМӘТКЕҺЕ

*Инеш һүҙ* .......... 3

1. Башҡорт фразеологияһы: уның торошо, проблемалары .......... —
2. Фразеологик берәмектәрҙең төп билдәләре .......... 5

Һүҙлектең төҙөлөшө .......... 11

1) Һүҙлеккә алынған берәмектәр .......... —
2) Фразеологик берәмектәрҙе урынлаштырыу тәртибе .......... 12
3) Берәмектәрҙең мәғәнәһен аңлатыу .......... —
4) Фразеологик берәмектәрҙең формалары, варианттары .......... 14
5) Стилистик билдәләр .......... 15
6) Миҫалдар .......... —

Этимологик белешмәләр, ҡыҫҡартыуҙар, шартлы билдәләр .......... 16

Файҙаланылған һүҙлектәр .......... 17

## ҺҮҘЛЕК

А .......... 18
Б .......... 58
В .......... 96
Г .......... 97
Ғ .......... 98
Д .......... 101
Е .......... 108
З .......... 120
И .......... 121
Й .......... 139
К .......... 162
Ҡ .......... 197
Л .......... 235
М .......... 236
Н .......... 243
О .......... 246
Ө .......... 249
Р .......... 252
С .......... 253
Т .......... 261
У .......... 291
Ү .......... 296
Ф .......... 301
Х .......... 302
Һ .......... 305
Ш .......... 318
Ы .......... 320
Э .......... 321
Ә .......... 331
Ю .......... 334
Я .......... 337

Учебное издание

**УРАКСИН Зиннур Газизович**

**ФРАЗЕОЛОГИЧЕСКИЙ СЛОВАРЬ БАШКИРСКОГО ЯЗЫКА**

*(на башкирском языке)*

Редакция мөдире *С. М. Рәхимова*
Мөхәррирҙәре *З. И. Йәғәфәрова, Х. Ә. Бикҡужина*
Биҙәлеш мөхәррире *А. Р. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *В. Р. Абдрахманова*
Корректорҙары *Р. М. Йәғәфәрова, Г. Б. Кинйәбаева*

Нәшр. лиц. № 04380, 26.03.01. Йыйырға бирелде 10.02.06. Баҫырға ҡул ҡуйылды 29.06.06. Ҡағыҙ форматы 60×90[1]/16. Мәктәп гарнитураһы. Офсет ысулы менән баҫылды. Шартлы баҫма таб. 21,5. Шартлы буяу отт. 22,0. Иҫәп-баҫма таб. 21,38. Тиражы 10640 дана. Заказ № 1.0021.06.

Башҡортостан Республикаһының «Башҡортостан «Китап» нәшриәте» дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Левченко урамы, 4а.

Башҡортостан Республикаһының «Өфө полиграфкомбинаты» дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

З.Ғ. Ураксин

# Башҡорт теленең фразеологик һүҙлеге